# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ГРАММАТИКАҺЫ

*Фонетика·Графика·Алфавит*
*Орфография·Орфоэпия·Морфемика*
*Морфонология·Һүҙьяһалыш*

I

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ГРАММАТИКАҺЫ

*Фонетика. Графика. Алфавит.*
*Орфография. Орфоэпия. Морфемика. Морфонология.*
*Һүҙьяһалыш*

**Өс томда**

**I том**

# ГРАММАТИКА БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

*Фонетика. Графика. Алфавит.*
*Орфография. Орфоэпия. Морфемика. Морфонология.*
*Словообразование*

I

*Рекомендовано Министерством образования*
*Республики Башкортостан*

КИТАП
УФА•2018

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ГРАММАТИКАҺЫ

*Фонетика. Графика. Алфавит.*
*Орфография. Орфоэпия. Морфемика. Морфонология.*
*Һүҙьяһалыш*

I

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителде*

КИТАП
ӨФӨ • 2018

**Редакционная коллегия**

**Г. С. Кунафин**, доктор филологических наук, профессор, член-корреспондент АН РБ (научный руководитель издания)

**Ф. С. Тикеев**, кандидат исторических наук, старший научный сотрудник ИГИ АН РБ (ответственный за выпуск)

**Г. Р. Абдуллина**, доктор филологических наук, профессор

**А. М. Азнабаев**, кандидат педагогических наук, профессор

**М. Х. Ахтямов**, доктор филологических наук, профессор

**И. Г. Галяутдинов**, доктор филологических наук, профессор, член-корреспондент АН РБ

**М. В. Зайнуллин**, доктор филологических наук, профессор, академик АН РБ

**К. Г. Ишбаев**, доктор филологических наук, профессор

**Х. В. Султанбаева**, доктор филологических наук, профессор БашГУ

**Авторы I тома**

**Г. Р. Абдуллина**, доктор филологических наук, профессор («Основные понятия грамматики», «Морфонология»)

**М. Х. Ахтямов**, доктор филологических наук, профессор («Графика», «Алфавит», «Орфография»)

**М. Х. Ахтямов**, доктор филологических наук, профессор, **Г. Р. Абдуллина**, доктор филологических наук, профессор («Морфемика»)

**М. Х. Ахтямов**, доктор филологических наук, профессор, **З. А. Хабибуллина**, кандидат филологических наук, доцент («Фонетика», «Орфоэпия»)

**И. Г. Галяутдинов**, доктор филологических наук, профессор, член-корреспондент АН РБ («Введение»)

**К. Г. Ишбаев**, доктор филологических наук, профессор («Словообразование»)

**Ответственный редактор I тома**

**Г. Р. Абдуллина**, доктор филологических наук, профессор

## Редакцион коллегия

**Ғ. С. Ҡунафин,** филология фәндәре докторы, профессор, БР ФА мөхбир ағзаһы (баҫманың ғилми етәксеһе)

**Ф. С. Тикеев,** тарих фәндәре кандидаты, БР ФА Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре (баҫма өсөн яуаплы)

**Г. Р. Абдуллина,** филология фәндәре докторы, профессор

**Ә. М. Аҙнабаев,** педагогия фәндәре кандидаты, профессор

**М. Х. Әхтәмов,** филология фәндәре докторы, профессор

**И. Ғ. Ғәләүетдинов,** филология фәндәре докторы, профессор, БР ФА-ның мөхбир-ағзаһы

**М. В. Зәйнуллин,** филология фәндәре докторы, профессор, БР ФА-ның академигы

**К. Ғ. Ишбаев,** филология фәндәре докторы, профессор

**Х. В. Солтанбаева,** филология фәндәре докторы, БДУ профессоры

## I томдың авторҙары

**Г. Р. Абдуллина,** филология фәндәре докторы, профессор («Грамматиканың төп төшөнсәләре», «Морфонология»)

**М. Х. Әхтәмов,** филология фәндәре докторы, профессор («Графика», «Алфавит», «Орфография»)

**М. Х. Әхтәмов,** филология фәндәре докторы, профессор, **Г. Р. Абдуллина,** филология фәндәре докторы, профессор («Морфемика»)

**М. Х. Әхтәмов,** филология фәндәре докторы, профессор, **З. Ә. Хәбибуллина,** филология фәндәре кандидаты, доцент («Фонетика», «Орфоэпия»)

**И. Ғ. Ғәләүетдинов,** филология фәндәре докторы, профессор, БР ФА-ның мөхбир ағзаһы («Инеш»)

**К. Ғ. Ишбаев,** филология фәндәре докторы, профессор («Һүҙьяһалыш»)

## I томдың яуаплы мөхәррире

**Г. Р. Абдуллина,** филология фәндәре докторы, профессор

УДК 811.512.141'36
ББК 81.2 Баш-2
Б 28

**I томға баһалама биреүселәр**

**Ә. М. Аҙнабаев,** педагогия фәндәре кандидаты, профессор
**Ф. Х. Ғарипова,** филология фәндәре кандидаты,
БР ГТИ-ның лингвистика бүлеге мөдире

**Рецензенты I тома**

**А. М. Азнабаев,** кандидат педагогических наук, профессор
**Ф. Х. Гарипова,** кандидат филологических наук,
заведующий отделом лингвистики ИГИ АН РБ

**Башҡорт теле грамматикаһы** : 3 томда. Т. I : Фонетика. Графика.
Б28 Алфавит. Орфография. Орфоэпия. Морфемика. Морфонология. Һүҙьяһалыш / [Яуаплы мөхәррире Г. Р. Абдуллина]. – Өфө : Китап, 2018. – 340 б.

ISBN 978-5-295-06974-1 (т. 1)
ISBN 978-5-295-06973-4

«Башҡорт теле грамматикаһы»ның беренсе томында башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәре һүрәтләнә һәм классификациялана, башҡорт хәрефтәренең яҙыуҙа ҡулланылыш үҙенсәлектәре асыла, орфографияның дөйөм тел принциптары тасуирлана, башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләре бирелә. «Морфемика» бүлегендә һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөн, һүҙ, һүҙформа, морфема һәм морф төрҙәрен өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүленә. Башҡорт теленең морфонологик үҙенсәлектәре, нигеҙ ҡыҫҡарыуы, фонемаларҙың өҫтәлеүе, тәңгәлләшеүе һәм сиратлашыуы «Морфонология» бүлегендә ҡарала. «Һүҙьяһалыш» бүлеге һүҙҙәрҙең яһалыштары буйынса төрҙәренә, тамыр һәм яһалма һүҙҙәргә, һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдарына, лексик, фонологик, морфематик һәм лексик-семантик, лексик-грамматик, лексик-синтаксик һүҙьяһалыш юлдарына арналған. Китап бүлектәрендә сағылған тел үҙенсәлектәре миҫалдар менән аңлатыла.

Китап телселәргә, юғары уҡыу йорто уҡытыусыларына, аспиранттарға, магистранттарға һәм студент-филологтарға тәғәйенләнә.

В первом томе «Грамматики башкирского языка» характеризуются и классифицируются гласные и согласные звуки башкирского языка, раскрываются особенности использования башкирских букв на письме, описываются общеязыковые принципы орфографии и даются основные правила башкирского литературного произношения. В разделе «Морфемика» большое внимание уделяется изучению словоформ, морфов, морфем и их видов, морфемной структуры слова. Особенности морфонологии башкирского языка, явления усечения основ, вставки, наращения и чередования фонем анализируются в разделе «Морфонология». Раздел «Словообразование» посвящен словообразовательным типам слов, производным и непроизводным словам, словообразовательным способам, в частности, лексическому, фонологическому, морфемному, лексико-семантическому, лексико-грамматическому, лексико-синтаксическому способам словообразования. Языковые явления сопровождаются примерами.

Книга предназначена для языковедов, преподавателей вузов, аспирантов, магистрантов и студентов-филологов.

**УДК 811.512.141'36**
**ББК 81.2 Баш-2**

**ТП – 152/18**

**ISBN 978-5-295-06974-1 (т. 1)**
**ISBN 978-5-295-06973-4**

© Абдуллина Г. Р., Әхтәмов М. Х., Хәбибуллина З. Ә., 2018
© Ғәләүетдинова С. И., Ишбаева Й. Ә., 2018
© БР-зың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2018

## ИНЕШ

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҮТКӘНЕ ҺӘМ БӨГӨНГӨҺӨ

Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле һәм Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәренең береһе. Ул шулай уҡ Рәсәйҙең Ҡурған, Свердловск, Силәбе, Төмән, Һамар, Һарытау, Чита һәм Ырымбур өлкәләрендә, Пермь крайында, Татарстан, Коми, Яҡут (Саха) Республикаларында йәшәгән башҡорттарҙың үҙ-ара һөйләшеү, аралашыу һәм фекер алышыу теле.

Рәсәй Федерацияһындағы 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса башҡорт телендә һөйләшеүселәрҙең дөйөм һаны 1584554 кеше тәшкил итә. Башҡорт теле, Рәсәйҙән тыш, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Төркиә кеүек төрки илдәрендә, Беларусь, Латвия, Тажикстан Республикаларында, Украина, Эстония, Италия, Венгрия, Германия, Польша, АҠШ, Израиль һымаҡ яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың көндәлек аралашыу даирәһендә ҡулланыла.

Башҡорт теленең үҫеш тарихы көньяҡ Уралда, Ағиҙел менән Яйыҡ йылғаларының ҡушылдығында, Ғайса пәйғәмбәр тыуғандан һуң, яңы эраның тәүге меңйыллығынан алып йәшәгән башҡорт ҡәбиләләренең, ырыуҙарының һөйләү телдәренә, диалекттарына барып тоташа. Ул X быуатҡа тиклем үк үҙ аллы тел булып үҫешкән. Быны X быуаттың беренсе яртыһында ислам динен таратыу өсөн ебәрелгән миссионер Ибн Фаҙландың юлъяҙмалары һәм XI йөҙйыллыҡта Мәхмүт Ҡашғари тарафынан төҙөлгән мәшһүр «Диуану лөғәт әт-төрк» һүҙлеге иҫбатлай[1].

---

[1] *Ibn Fazlân* Seyahatnâmesi. Prof. Dr. Ramazan Şeşen. BEDIR YAYINEVI. ISTANBUL, 1995.

[3] Divanü Lügat-it-Türk tercümesi. Ankara, 1992. t. 1, 28.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ БАШҠА ТЕЛДӘР МЕНӘН ҠӘРҘӘШЛЕГЕ

Башҡорт теле төрки телдәре ғаиләһенә ҡарай һәм алтай, балҡар, ғағауз, долған, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡарайым, ҡарасәй, ҡумыҡ, ҡырғыҙ, ҡырым татарҙары, нуғай, сыуаш, татар, тофалар, төрөк, төркмән, тыва, уйғыр, үзбәк, хакас, шор, әзербайжан, яҡут (саха) телдәренең ҡәрҙәш теле һанала.

Ер йөҙөндә төрки телле халыҡтарҙың дөйөм һаны – 110 миллиондан ашыу кеше. Хәҙерге төркиәт фәне төрки телдәренең бер нисә классификацияһын бирә (Н. А. Аристов, Н. А. Баскаков, И. Бенцинг, И. Н. Березин, В. А. Богородицкий, Н. Ф. Катанов, Ф. Е. Корш, С. Е. Малов, К. Менгес, В. В. Радлов, А. Н. Самойлович һ. б.), шулар араһында А. Н. Самойловичтың фонетик билдә һәм Н. А. Баскаковтың төрки халыҡтарының тарихы һәм телдәре үҫеше буйынса классификациялауҙары нигеҙлерәк булып тора.

Фонетик билдә буйынса А. Н. Самойлович төрки телдәрен алты төркөмгә бүлә: 1) р-төркөм, йәки болғар төркөмө; 2) д-төркөм, йәки уйғыр (төньяҡ-көнсығыш) төркөмө; 3) тау-төркөм, йәки ҡыпсаҡ (төньяҡ-көнбайыш) төркөмө; 4) тағлыҡ-төркөм, йәки сығатай (көньяҡ-көнсығыш) төркөмө; 5) тағлы-төркөм, йәки ҡыпсаҡ-төркмән төркөмө һәм 6) ол-төркөм, йәки көньяҡ-көнбайыш төркөмө[1].

Н. А. Баскаков иһә төрки телдәрен халыҡтар үҫешенең төп осорҙарына бәйле ике ҙур тармаҡҡа бүлә – көнбайыш һун һәм көнсығыш һун. Көнбайыш һун тармағы дүрт төркөмдө тәшкил итә: 1) болғар төркөмө (болғар, хазар, хәҙерге сыуаш телдәре); 2) уғыҙ төркөмө үҙе өс төркөмсәнән тора: а) уғыҙ-төркмән (X–XI быуаттарҙағы уғыҙҙар теле һәм төркмән теле); б) уғыҙ-болғар (уздар, бәжәнәктәр теле, ғағауз теле, Балҡан ярымутрауында йәшәгән сөргөш, йөрөк, гәрлә төрки этник төркөмдәрҙең теле); в) уғыҙ-сәлжүк (сәлжүк, иҫке ғосман, иҫке әзербайжан, хәҙерге әзербайжан, төрөк телдәре, ҡырым татарҙары теленең көньяҡ яр буйы диалекты һәм урум теле); 3) ҡыпсаҡ төркөмө шулай уҡ өс төркөмсәнән тора: а) ҡыпсаҡ-ҡоман (ҡыпсаҡ, ҡоман, ҡарайым, ҡумыҡ, ҡарасәй-балҡар, ҡырым татарҙары телдәре); б) ҡыпсаҡ-болғар (көнбайыш алтын урҙа, татар, башҡорт телдәре), в) ҡыпсаҡ-нуғай (нуғай, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ телдәре, үзбәк теленең ҡыпсаҡ диалекттары); 4) ҡарлуҡ төркөмө ике төркөмсәнән ғибәрәт: а) ҡарлуҡ-уйғыр (ҡараханлылар дәүләте дәүерендә һәм унан һуңғы осорҙа ҡулланылған әҙәби

---

[1] *Самойлович А. Н.* Некоторые дополнения к классификации турецких языков. Петроград, 1922. 14 стр. с таблицами.

тел); б) ҡарлуҡ-хорезм (ҡарлуҡ-хорезм, көнсығыш алтын урҙа, сығатай, иҫке үзбәк, хәҙерге үзбәк, хәҙерге уйғыр телдәре).

Төрки телдәренең көнсығыш һун тармағы ике төркөмдә үҙ эсенә ала: 1) уйғыр; 2) ҡырғыҙ-ҡыпсаҡ. Уйғыр төркөмө үҙе өс төркөмсәнән тора: 1) уйғыр-төкәй; 2) яҡут; 3) хакас.

Төрки телдәре, үҙ нәүбәтендә, монгол (бүрәт, ҡалмыҡ, монгол төп телдәр һәм баоан, дагур, дүнсән, могол, монгор, шира-югур маргинал телдәр) һәм тунгус-манжур (манжур, нанай, негидал, орок, ороч, солон, удэгей, ульчэ, чурчжен, эвен, эвенк) телдәре менән бергә ҡәрҙәш алтай телдәре ғаиләһен тәшкил итә.

Алтай телдәре иһә Урал телдәрен хасил иткән фин-уғыр (вепс, вод, ижор, карел, лив, фин, эстон; мари, мокшан, эрзән; коми-зирән, коми-пермяк, удмурт; венгр, манси, ханты; саам телдәре) һәм самодий (нганасан, ненец, энец; селкуп) телдәре менән алыҫ ҡәрҙәш булған Урал-Алтай телдәре ғаиләһен барлыҡҡа килтерә. Был ҙур ғаиләгә ҡайһы бер ғалимдар беҙҙең эраға тиклем өсөнсө меңйыллыкта айырылған япон һәм корея телдәрен дә индерә.

Әйтергә кәрәк, ер йөҙөндәге телсе ғалимдар араһында Урал-Алтай телдәре ҡәрҙәшлеген инҡар итеүселәр ҙә бар.

Урал-Алтай дәүерендә, беҙҙең эраға тиклемге беренсе меңйыллыҡтан алып беҙҙең эраның III–IV быуаттары һуҙымында, боронғо башҡорт телендә иң ҡәҙимге лексик ҡатлам, һуҙынҡылар гармонияһы, агглютинативлыҡ (һүҙ тамырына, нигеҙенә ялғауҙарҙы бер-бер артлы теҙеп биреп, яңы һүҙ һәм грамматик формалар яһау), изафет, исем һәм ҡылымдың билдәлелек һәм билдәһеҙлек, эйәлек категориялары, бәйләүестәр формалашҡан.

Башҡорт теленең үҫешендә дөйөм төрки дәүере беҙҙең эраға тиклем IV–III быуаттарҙа алтай телдәре ғаиләһе тарҡалғандан һуң башлана. Уның уҡыу-яҙыу теле хәҙерге төрки телле халыҡтарҙың барыһына ла тиерлек уртаҡ һаналған боронғо уғыҙ, уйғыр, ҡыпсаҡ, ҡарлуҡ, сәлжүк һәм башҡа төрки ҡәбиләләр берләшмәһенең яҙма әҙәби теле булып иҫәпләнгән V–X быуаттарҙан тороп ҡалған орхон-йәнәсәй рун яҙма ҡомартҡылары телендә сағылған.

## «БАШҠОРТ» ЭТНОНИМЫ ҺӘМ ЫРЫУ-ҠӘБИЛӘЛӘРЕ

Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың «Башҡорттар тарихы» китабында тупланған мәғлүмәттәр һәм башҡа тарихи белешмәләр буйынса башҡорт халҡының һәм ул йәшәгән төйәктең үҙ атамаһы яҙма сығанаҡтарҙа борон-борондан төрлөсә теркәлгән: *Пасиртай, Пасакартия* (Птолемей, II быуат), *Ба-шу-ки-ли*

(ҡытай сығанаҡтарында Көнбайыш Төркөстанда Хәзәр диңгеҙенә ҡәҙәр йәйелеп йәшәүсе «Тие-ле» исемле 15 төрки ҡәбиләләренең бер тармағы, VII быуат), *Башгирд, Башҡурт* (иран, уғыҙ дастандарында һәм көнбайыш сығанаҡтарында), *Басхарт, Башджар, Башджард* (*Сәлләм Тәржемән, Ибн-Хордадбек, Хуаризми, Фәрғәни, IX быуат*), *Баджгард, Башджурт* (Балхи, Масуди, Ибн Хаукал, Ибн Фаҙлан, Ибн Русте, Джейхани, Истаһри, X быуат), «Жидал-и башха[ы]рт» – «Башҡорт тауҙары» (Бируни, X быуат), *Башғырт* (Гардизи, Мәхмүт Ҡашғари, XI быуат), *Басджирт*, «*әл-Башжирт әл-даһила*» – «Эске башҡорттар», «*әл-Башжирт әл-харижа*» – «Тышҡы башҡорттар» (Гарнати, Иҙриси, XII быуат), «*Баш джирд*», *Баш кирд, Баскарт, Баскатур, Паскатир, Басжарт* (Казвини, Яҡут әл-Хамауи, Әбелхәйер, Рәшид әд-Дин, Ибн Сәит, Юлиан, Плано Карпини, Виллем Рубрук, Ибн Халдун, Димәшки, XIII–XIV быуаттар), *Башҡыр* (Тоҡтағу хан заманында Тоҡбегә бейҙе шулай ҙурлағандар), *Баджир Туҡбуға* (Хажи Абулғафар, XV быуат), *Бадчҡыр Туҡбуға* (Ғәли Йылайыр), *Баджҡыр* («Шейбани-намә»), *Башкурдия* (Иван IV фарманында, 1572 й.)[1], *Башкирец, Башкир, Башкирия* (рус телендә), *Башҡорт, Башҡортостан* (башҡорт телендә).

Яңы эраның II быуатында йәшәгән Птолемей, Марин де Турҙың I быуатта яҙылған әҫәренә таянып, Дон буйы тирәһендә көн итеүсе бер ҡәүемде «Пасиртай» тип атаған һәм Хорасанда Парттар өлкәһендә «Пасакартия» булыуын күрһәткән. Ошо мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, Әхмәтзәки Вәлиди миләди (христиан) йыл иҫәбе буйынса I быуатта уҡ башҡорттарҙың хәҙерге көнгә тиклем йәшәгән ерҙәрҙе, йәнә унан бер аҙ көнбайыш һәм көньяҡ тарафтарҙағы өлкәләрҙе биләүе хаҡында һығымта яһай[2].

Бер автор (беҙҙең эраның 643 йылында вафат) тарафынан яҙылған Суи династияһының генеалогик тарихында күрһәтелгән «*Тие-ле*» төрки ҡәбиләләренең «*Ба-шу-ки-ли*» (< *ba-šu-ki-li* < *pa-šu-ki-li*) тип аталған бер тармағы, ҡытай ғалимы Чанг-Ланг фекеренсә, «*башҡорт*» тигәнде аңлата. Уға тиклем Shiratori Kurakichi исемле ғалим да был һүҙҙе шулай уҡ башҡорттар менән бәйләгән.

«Суи-шу», йәғни Суи династияһы тарихында «*Тие-ле*»ләр боронғо Һиуйнг-ну, йәғни Һун ҡәүеменең туранан-тура нәҫеле

---

[1] *Әхмәтзәки Вәлиди Туған.* Башҡорттар тарихы (автор ҡулъяҙмаһынан тәржемә). Төрөксәнән Эмир Юлдашбаев тәржемәһе. Тулыландырылған 2-се баҫмаһы. Өфө: Китап, 2005. 19–34, 277–280-се бб.

[2] Шунда уҡ. 18-се б.

тип раҫлана[1]. Әйткәндәй, хәҙерге табын тиләүҙәре һәм себер теләүәттәре боронғо тиеләләргә барып тоташыуы ихтимал.

Нисек кенә булмаһын, алда килтерелгән этнонимдарҙа *«Баш»* һүҙе төрлө телдәрҙә яҙмала һәм әйтелештә төрлөсә килә: *«Пас»*, *«Ба-шу»*, *«Баж»*, *«Бадж»*, *«Бадч»*, *«Бас»*, *«Баш»*, ә икенсе өлөшө *«ир»* *-ир + тай, -кар + тия, -гард, -гирд, -гурд, -гырд, -гырт, -ха[ы]рт, -джар, -джард, -жарт, -жир, -жирт, -джирт, -джурт; -карт, -ка + тир, -ка + тур, -ки + ли, -кир, -кир + ец, -кир + ия, -кур + дия, -ҡыр, -ҡурд, -ҡорт, -ҡорт + стан* һүҙ яһаусы ялғауҙарҙан ғибәрәт.

Башҡорт этнонимының 160-ҡа яҡын төрлө яҙылышы һәм 40-тан ашыу аңлатмаһы бар. Шуларҙың өсәүһе киңерәк таралыу тапты: 1) *«баш»* («башлыҡ») + *«ҡорт»* («бүре») – «баш бүре», «бүре» – «өйөр башлығы», «өйөр етәксеһе», «нәҫел башы»; 2) *«баш»* («башлыҡ») + *«ҡорт»* («бал ҡорто») – «баш ҡорт», «ҡортсо»; 3) *«баш»* («башлыҡ», «башлап барыусы») + *«ҡор»* («кешеләр төркөмө», «ҡәбилә») + *«т»* (иран йәки монгол телдәренән алынған күплекте, йыйылмалыҡты аңлатыусы ялғау) – «баш ҡәбилә», «халыҡ».

Беренсе фараз бүре тотемына бәйле булһа, икенсеһе башҡорттарҙың традицион солоҡсолоҡ шөғөлө менән аңлатыла, ә өсөнсөһө иһә абруйлы етәксе шәхескә ҡайтып ҡала (ғәскәр башлығы Башгирд IX быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән).

Күренекле татар теле белгесе академик М. З. Зәкиев башҡорт этнонимының этимологияһын *башҡа-ар-ты*, йәғни сит ҡәбилә кешеләре генә түгел, бәлки, «сит ҡәбилә кешеләре менән ҡатнашҡан ҡәбилә», тип аңлата. Икенсе фаразында *башҡыр* этнонимы «урман кешеләре» мәғәнәһендә, ә *башҡорт* һүҙе «урман кешеләре менән ҡатнашҡан ҡәбиләләр» мәғәнәһендә ҡулланыла[2].

Борон башҡорттар ҡәрҙәш төрки халыҡтарына ла хас булған бик күп ырыу-ҡәбиләләр составынан торған. Башҡорттар тураһындағы фәндә ырыу термины ҡәбиләне лә, ырыуҙы ла аңлатҡан, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары ҡәбиләне – *өлкән ырыу*, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары *ил* тип йөрөткән. Ырыу-ҡәбилә атрибуттарына *тамға, оран, онгон* (тотем йән эйәһе – хайуан йәки ҡош) һәм *тотем ағасы* ингән.

Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең «Башҡорттар тарихы» хеҙмәтендә, С. И. Руденконың «Башкиры»[3] исемле мәшһүр хеҙмәттәрен

---

[1] *Әхмәтзәки Вәлиди Туған.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 19, 257-се бб.

[2] *Зәкиев М. З.* Татар халкы теленең барлыкка килүе. Казан: Татарстан китап нәшрияты, 1977. 180нче б.

[3] *Руденко С. И.* Башкиры. Физический тип башкир. Петроград, 1916; Башкиры. Быт башкир. Ленинград, 1925; Башкиры. Историко-этнографические очерки. М.– Л., 1955.

күҙ уңында тотоп, Өфө янындағы хан Үҙәк урҙанан сыҡкан төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ, көнбайыш һәм төньяҡ йүнәлешкә киткән Себер, Нуғай, Ҡазан һәм Уса исемдәре менән дүрт юлға бүленгән төп башҡорт ырыу-ҡәбиләләрҙе килтерә. **Себер юлы:** күҙәй, табын, ҡошсо, суун, ундар, танып, йәнәй, мырҙалар, һарт, ҡыуаҡан, барын-табын, ҡара-табын, ҡыпсаҡ-табын. **Нуғай юлы:** мең, меркет, табын, юрматы, ҡыпсаҡ, бөрйән, үҫәргән (ҡаңлы), сураш, тамъян, тиләү, ҡатай. **Ҡазан юлы:** ҡарши, ҡаңлы, ҡайлы, элдит, кирәй, йәнәй, байлар, йылан, ҡырғыҙ, бүләр. **Уса юлы:** таҙлар, уран, ирәкте, ғәйнә, саһауыш, ҡараөйлө. Бөгөнгө көндә иң ҙур һәм күп һанлы ырыуҙар – ҡыпсаҡ, сығышы ҡаңлыларҙан булған үҫәргән, бөрйән һәм табын[1].

Башҡорт тарихсы-шәрҡиәтсеһе Р. Ғ. Кузеев башҡорт ырыу-ҡәбиләләрен дүрт тарафҡа бүлеп ҡарай.

**Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары:** юрматы, бөрйән, үҫәргән, түңгәүер, тамъян һәм ҡыпсаҡ.

**Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары:** әй, мырҙалар, дыуан, ҡошсо, көҙәй, һыҙғы, өпәй; ҡатай, һалйот, һеңрән, терһәк, бәкатин, ҡалмаҡ, казачий башҡорттар; табын, ҡыуаҡан, сырҙы, бишул, бәҙрәк, ҡумрыҡ.

**Көньяҡ-көнбайыш башҡорттары:** ил-күл-мең, ҡырҡ өйлө-мең, күл-ил-мең, сыбы-мең, өршәк-мең, мөркөт-мең, ҡыбау-мең, меңләр, ҡарылы-мең.

**Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары:** бүләр, байлар, юрмый, ирәкте; йәнәй, гәрә, ҡырғыҙ, йылан, елдәк, ҡаңлы, дыуан, ҡаршын, таҙ, ыуаныш; уран, ғәйнә, балыҡсы, ун (суун), танып[2].

Башҡорт этнографы Р. З. Янғужин төрлө төбәктә йәшәгән башҡорттарҙың этник сығышын түбәндәгесә күрһәтә: 1) **минзәлә башҡорттары:** байлар, юрмыйҙар, бүләрҙәр, ирәктеләр; 2) **ғәйнәләр;** 3) **төньяҡ башҡорттары:** урандар, таныптар, балыҡсылар, уннар; 4) **түбәнге Ағиҙел башҡорттары:** йәнәйҙәр, гәрәләр, ҡырғыҙҙар, йыландар, йәлдәктәр, ҡаңлылар, дыуанайҙар, ҡаршындар, таҙҙар, ыуаныштар; 5) **юрматылар;** 6) **үҫәргәндәр;** 7) **бөрйәндәр;** 8) **түңгәүерҙәр;** 9) **тамъяндар;** 10) **ҡыпсаҡтар;** 11) **меңдәр;** 12) **әйлеләр;** 13) **ҡатайҙар;** 14) **табындар;** 15) **һалйоттар.**

Алда һанап киткән башҡорт ырыу-ҡәбиләләре борон-борондан үҙ-ара аралашып һәм болғар, фин-уғыр-мадъяр ҡәби-

---

[1] *Әхмәтзәки Вәлиди Туған.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 49-сы б.

[2] *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа. Этнический состав, история расселения. Второе изд., доп. Уфа: Дизайн Полиграф-Сервис, 2010. С. 106–352.

ләләре менән күрше йәшәп, башҡорт теленең диалекттарын, һөйләштәрен һәм һөйләшсәләрен барлыҡҡа килтергән[1].

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫ ҺӘМ ҺӨЙЛӘШТӘРЕ

Хәҙерге башҡорт теле көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарына бүленә[2].

**Көнсығыш (йәки ҡыуаҡан) диалектында** биш үҙ аллы һөйләш бар: Әй һәм Йүрүҙән йылғалары бассейнын эсенә алған **әй һөйләше;** Силәбе өлкәһенең төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайышы, Ҡурған өлкәһенең көнбайышын һәм Башҡортостандың бөтә төньяҡ-көнсығышын эсенә алған **арғаяш һөйләше**; Силәбе өлкәһенең Башҡортостанға сиктәш ятҡан төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә йәшәгән башҡорттарҙың **һалйот һөйләше**; Миәс йылғаһы бассейнын эсенә алған **миәс һөйләше**; Көнсығыш һәм Көньяҡ диалекттары сиктәре араһында ятҡан **ҡыҙыл һөйләше**[3]. Уларға күплек ялғауҙарындағы (**-тар/-тәр:** *йорттар, эттәр*; **-дар/-дәр:** *ҡолондар, күлдәр*; **-ҙар/-ҙәр:** *ҡыҙҙар, күҙҙәр*; **-лар/-ләр:** *далалар, төлкөләр*) һәм һүҙ яһаусы ялғауҙарҙағы (*татыуҙыҡ, һүҙҙек, дәртте, һаҡалды, көйҙө, таштау, тештәү*) тартынҡылар ассимиляцияһы хас. Көнсығыш диалекттың һигеҙ вариантлы күплек ялғауы хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нормаһы итеп ҡабул ителгән.

Көнсығыш диалектҡа тағы ла түбәндәге үҙенсәлектәр хас: һүҙ һәм ижек башында [й] урынына башлыса [ж] ҡулланыу (*жите, күгелжем*); һүҙҙең бөтә позицияларында ла [ç] һәм [h] өндәренең йыш ҡулланылыуы (*йөç* (йөҙ), *çыйыр* (һыйыр), *беçтең* (беҙҙең), *аҡçыу* (аҡһыл), *ҡыһ* (ҡыҙ), *ҡоһҡон* (ҡоҙғон), *ҡыһҡа* (ҡыçҡа), *алаһыһ* (алаһығыҙ), *аһау* (ашау); [о], [ө] ирен гармонияһының боҙолоуы (*соҡыр, төйеç* (сөгөлдөр): [л] өнөнөң төшөп ҡалыуы (*аманы* (алманы), *киһен* (килһен); бойороҡ һөйкәлешенең боронғо *-ың/-ең* күрһәткесе булыуы (*ҡайтың* (ҡайтығыҙ)

---

[1] *Янғужин Р. З.* Башҡорт ырыуҙары. Ҡыçҡаса тарихи-этнографик очерктар. Өфө: Китап, 1998. 96 б. Китапта туғыҙ ырыу тарихы сағылдырылмаған. Улар: **бәкәтин, күҙәй, ҡошсо, ҡыуаҡан, өпәй, сырҙы, терһәк, һеңрән** һәм **һыҙғы.** Был ырыуҙар авторҙың киләһе сығасаҡ хеҙмәтендә планлаштырылған булһа кәрәк.

[2] *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Под. ред. чл.-корр АН СССР проф. Н. К. Дмитриева. М.: Наука, 1955; Уфа, 2006, 2-се баçма.

[3] *Максютова Н. Х.* Восточный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1976. С. 13–14.

*көтең* (көтөгөҙ); шулай уҡ модаль мәғәнәгә эйә инфинитивтың *-ҡалы/-кәле, -ғалы/-гәле, -маҡ/-мәк, -маҡа/-мәкә* формаһы (*Күргән бер нәмәҫтәһен амаҡа була*) һәм башҡа һүҙ яһаусы ялғауҙар: *-ҡаҡ/-кәк, -шыҡ/-шек, -маҡ/-мәк, -тылыҡ/-дылыҡ/-ҙылыҡ* (*ҡатҡаҡ, әрҙәшкәк, лыпшыҡ, шылмаҡ, уңғандылыҡ*)[1].

Башҡортостанда һәм Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендә таралған **көньяҡ (йәки юрматы) диалекты** эйек-һаҡмар, урта, дим һөйләштәрен үҙ эсенә ала. Уларға күплек ялғауҙарының ике фонетик вариантын: *-лар, -нар* (*болотлар, урманнар*) ҡулланыу, дөйөм төрки [с] урынына үҙенсәлекле [һ], [ҫ] фонемаларын, [з], [д], [т] урынына [ҙ] фонемаһын (*һаһыҡ, һабыр, ҡыпһыуыр, тупһа/тупҫа, ҫарымҫаҡ, ҫабырҫыҙ, умырҙайа, ҙыйан*); һүҙ һәм ижек башында күпселектә [й] фонемаһын (*йәй, ынйы, йыйыу*) ҡулланыу; боронғо төрки теле өсөн хас булған [мт], [л], [нт], [м], [ңк], [рт] диссимилятив өн бәйләнештәренең булыуы (*урманта, таңҡа, һалты*); *-мага/-мәгә* формалы инфинитив ҡулланыу (*бармаға, килмәгә*); көнсығыш диалекттың ҡайһы бер һөйләштәрендәге кеүек, һүҙ башында [к], [ҡ], [т] һаңғырау тартынҡыларының яңғыраулаңыуы (*дамға, гөпшә, ғыйаматлыҡ*); ирен гармонияһының һаҡланыуы (*өтөү, ойотҡолоҡ*) кеүек тел күренештәре хас. Көньяҡ диалекттың бөтә һөйләштәрендә лә *менән* бәйләүесе урынына *белән/белә* бәйләүесе ҡулланыла[2].

Көнсығыш һәм көньяҡ диалекттар хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙен тәшкил итә.

Башҡорт теленең **төньяҡ-көнбайыш диалекты** биш һөйләште үҙ эсенә ала: Башҡортостандың Асҡын, Ҡариҙел райондарында таралған ҡариҙел һөйләше; Балтас, Борай, Бөрө, Тәтешле райондарын һәм Асҡын районының уларға сиктәш ауылдарын эсенә алған танып һөйләше; Дүртөйлө, Илеш, Краснокама, Туймазы, Яңауыл райондарының башҡорт ауылдары һәм Татарстандың Ағрыҙ, Аҙнай, Аҡтаныш, Минзәлә, Мөслим райондарының башҡорт-типтәр ауылдары халҡының түбәнге Иҙел һөйләше; Пермь өлкәһендә йәшәгән башҡорттарҙың ғәйнә һөйләше һәм урта Урал һөйләше.

Төньяҡ-көнбайыш төркөмөн тәшкил иткән башҡорттар хәҙерге көндә татар, фин-уғыр (мари, мордва, удмурт) халыҡтары менән тығыҙ аралашып йәшәй. Был төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының теленә лә йоғонто яһай һәм үҙ аллы бер диалект

---

[1] *Максютова Н. Х.* Восточный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1976. С. 16–20.

[2] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979.

формалаша. Унда хәҙерге башҡорт һәм татар телдәренең башҡа диалекттарына һәм һөйләштәренә хас булмаған боронғо үҙенсәлекле һәм уникаль диалект күренештәре осрай. Ундайҙарға, мәҫәлән, һүҙ башында *п* ҡулланыуҙы (*пөгөн, пурәңге*), [з], [ҙ], [ж] фонетик оҡшашлығын (*абзый, абҙый, абжый*), һүҙ аҙағында тартынҡыларҙың яңғыраулаңыуын (борож-борос), һүҙ аҙағында [ҡ] өнө килеүен (*ҡаҙнаҡ, сыраҡ*), *-сыҙ* (*сарыусыҙ*), *-ән* (*шәрәтән*), *-ылтыҡ* (*шырылтыҡ, мырылтыҡ*) формаһындағы сифаттарҙы, *-ат* (*ыҡтымат*) формаһындағы рәүештәрҙе индерергә мөмкин. Миҫалдар бында һәм артабан С. Ф. Миржанова китабынан килтерелә[1].

Төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәренә тағы ла түбәндәге үҙенсәлектәр хас: а) дөйөм төрки [з], [д] өндәре урынына [ҙ] өнөн ҡулланыу (*ҡаҙан, биҙрә, сеҙ*); б) башҡорт әҙәби телендәге [һ], [ҫ] урынына [с] өнөн (*син, үскәс, ас*) һәм параллель рәүештә [ч] өнөн (*сын/чын*) ҡулланыу; в) *ай, әй* дифтонгыларының әйтелеүе (*бармай, килмәй, уйламай*); г) киң һәм тар әйтелешле өндәрҙең сиратлашыуы (*умырзая/умырзыя, тура/туры, жәйәү/жейәү*); ғ) боронғо башҡорт теленә хас булған *у* һуҙынҡыһының киң ҡулланылыуы (*ҡумған, сурау, туҡмаҡ*); д) [ө] өнөнөң ҡулланылыш киңлеге (*бөгөн, жөгөрөү/йөгөрөү, көзәтеү, гөмөр*); ҙ) [д], [т] тартынҡыларының сиратлашыуы (*дага/тага, дары/тары, дамга/тамга, дегәнәк/тегәнәк, дән/тән*); е) көнсығыш диалекттың әй-миәс һәм көньяҡ диалекттың дим-ҡариҙел һөйләштәрендәге кеүек [ж] өнөнөң киң ҡулланылышы (*жите, жир, жәй, жыйын*); ж) [с], [т], [ч] тартынҡыларының сиратлашыуы (*сөсө/төче/чөче, сирәм/чирәм, сөскөрөү/төчкөрөү*); з) [о], [ө], [ә] өндәренең киң ҡулланылышы һәм иренләшеү ҡанундарының һаҡланыуы (*шөрләү, кәбән, кәштә, тормош, оторга*); и) көньяҡ диалекттың урта һәм егән һөйләштәренә хас [лт], [мт], [нт], [ңт], [мҡ], [мк], [нҡ], [ңк] диссимилятив өн ҡушылмалары төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡариҙел һөйләшендә [лт], [мт], [нт], [мҡ], [ңҡ], [рт] өн ҡушылмалары рәүешендә осрай (*анта, мынта, барты, килте* һ. б.). Быңдай үҙенсәлектәр боронғо төрки теленә хас күренеш иҫәпләнә; к) бойороҡ һөйкәлешенең *-ң, -ың/-ең* формаһын *-гыҙ/-геҙ, -ыгыҙ/-егеҙ* формалары менән параллель ҡулланыу (*барың/барыгыҙ, китең/китегеҙ*); л) үткән замандың *-ганыйы/ -гәнейе* формаһын *-гайны/-гәйне, -гайҙы/-гәйҙе* формалары менән параллель ҡулланыу (*барганыйы/баргайны/баргайҙы*) һ. б.

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа, 1990.

Күренекле башҡорт диалектологы Н. Х. Мәҡсүтова етәкселегендә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел белгестәре коллективы (Ғ. Г. Гәрәева, М. И. Дилмөхәмәтов, С. Ф. Миржанова, У. Ф. Нәҙерғолов, С. Ғ. Сабирьянова) тарафынан Башҡортостанда, Ҡурған, Свердловск, Силәбе, Һамар, Һарытау, Ырымбур өлкәләрендә һәм Пермь крайында йәшәүсе башҡорттарҙың һөйләү теленең фонетикаһы, морфологияһы, лексикаһы һәм синтаксисының территориаль үҙенсәлектәрен сағылдырған «Башҡорт теленең диалектологик атласы» әҙерләнгән. Уның нигеҙен 1973–1983 йылдарҙа «Башҡорт теленең диалектологик атласы өсөн материалдар туплау программаһы»на ярашлы йыйылған материалдар тәшкил итә. Атластың беренсе өлөшөндә – инеш мәҡәлә, белешмә материалдар һәм карталарға аңлатмалар, икенсеһендә 162 төп һәм 7 ярҙамсы карта бирелгән. Ярҙамсы карталар тарих, география, этнография, ономастика һ. б. буйынса мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә алған[1].

Телсе Р. З. Шәкүров классификацияһы буйынса хәҙерге башҡорт телендә өс территориаль диалект (көньяҡ, көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар), ун алты һөйләш һәм ун туғыҙ һөйләшсә иҫәпләнә[2].

## БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ҺӨЙЛӘҮ ТЕЛЕ

Башҡорт халыҡ һөйләү теле быуаттар һуҙымында боронғо төрки теленән айырылып, тарихи фонетика, морфология һәм лексика өлкәләрендә үҙ йөҙөн таба.

Боронғо төрки теленең беренсе ижектәге киң әйтелешле [о], [ө], [ә] һуҙынҡылары башҡорт телендә тар әйтелешле [у], [ү], [и] һуҙынҡыларына күсә. Мәҫәлән: боронғо төркисә *отуз* > башҡортса *утыҙ*, *көл* > *күл*, *әдгү* > *изге* һ. б.

Һуҙынҡыларҙың бындай тарайыуын профессор Ж. Ғ. Кейекбаев тел үҫешендәге күсештең беренсе фонетик этабы тип ҡарай, ә тар әйтелешле боронғо төрки [*у*], [*ү*], [*и*] һуҙынҡылары башҡорт телендә ярым киң [о], [ө], [ә], [е] һуҙынҡыларына күсеүен икенсе фонетик этап тип һанай: *узун* > *оҙон*, *күн* > *көн*,

---

[1] *Диалектологический* атлас башкирского языка / Составители: Н. Х. Максютова, С. Ф. Миржанова, У. Ф. Надергулов, М. И. Дильмухаметов, С. Г. Сабирьянова, Г. Г. Гареева. Уфа: Гилем, 2005. С. 234.

[2] *Шәкүр Рәшит.* Башҡорт диалектологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2012. 240-сы б.

*тириг* > *тере*[1]. Беренсе ижектәге һуҙынҡыларҙың быңдай күсеше икенсе һәм артабанғы ижек һуҙынҡыларына йоғонто яһай. Улар схемала шулай сағылыр ине: боронғо төрки *а-у-у* > башҡ. *а-ы-ы; о-у-у* > *у-ы-ы; у-у-у* > *о-о-о*; *ө-ү-ү* > *ү-е-е; ө-и-и* > *ү-е-е*; *ү-ү-ү* > *ө-ө-ө*; *ә-и-и* > *и-е-е*, *и-и-и* > *е-е-е*. Миҫалдар: *арҡуру* > *арҡыры*, *тоҡузу* > *туғыҙы*, *ҡудуғу* > *ҡоҙоғо*, *көңүллүк* > *күңелле*, *күндүзгү* > *көндөҙгө*, *кәлтиңиз* > *килдегеҙ*, *тириглик* > *тереклек* һ. б.

Боронғо төрки теле һуҙынҡыларының күсешендә бер-береһенә яҡын башҡорт һәм татар телдәре араһында ҡырҡа айырмалыҡ юҡ, улар бер-береһенән тартынҡыларҙың тарихи үҙгәреше менән айырыла. Был иң беренсе [с], [ҫ], [һ] һәм [ҙ], [й] башҡорт тартынҡы өндәренең сығышына ҡағыла – улар боронғо төрки теленән түбәндәге схема буйынса үҙгәрәләр:

ч [тш] > ц [тс] > с

с > ҫ > һ

т > д > з > ҙ > й.

Һүҙ башындағы [ч] өнөнөң [с] өнөнә күсеүендә татар теленең мишәр диалекты һәм төрки телдәрҙең башҡа диалекттарына хас булған ч > ц күсеше урта баҫҡыс булып торған. Быңдай үҙгәреш башҡорт теле тарихында ла булған. [ч] өнөнөң артабан [с] өнөнә күсеше башҡорт телендә генә түгел, ә хакас, яҡут телдәрендә лә урын алған: боронғо төрки, тат. *чаҡ* > тат. теленең мишәр диалекты, ҡараим теленең гал. -луц. диал. *цаҡ* > башҡ. *саҡ*, яҡут. *сах*, хакас. *сағам* (хәҙер).

[ч]-ның [с]-ға үҙгәреше башҡорт телендә һуҙынҡыларҙа ла сағыла: *учкун* > *осҡон*. [с] өнөнөң [ҫ] өнөнә әйләнеүе башҡорт теленең дим һөйләшендә күҙәтелә: *сарығ* > *ҫары*. Быңдай күсеш төрөкмән теле өсөн хас күренеш: *суғ* > *ҫув*. Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев фекеренсә, [ҫ] өнө ике йәнәш килгән һүҙҙең һуҙынҡылары араһында боронғо башҡорт теле үҫешендә даими рәүештә тамаҡ төбө спиранты [һ] менән сиратлашып йөрөгән, һөҙөмтәлә [һ] өнө һүҙ һәм ялғауҙар башында тамам ныҒынған: *баҫ*, ләкин *баһып* (диал.)[2]. Һуҙынҡылар араһында [с] – [һ] сиратлашыуы яҡут теле өсөн хас: *ис* (эс), ләкин *иһиң* (эсегеҙ).

Һүҙ башында [с] менән [һ] алмашыныуы тик башҡорт телендә генә осрай: боронғо төркисә, татарса *сакал* > башҡортса *һаҡал*.

Башҡорт телендәге һуҙынҡылар араһындағы [ҙ], [й] өндәре боронғо төрки телендәге [т] өнөнән күсә килеп барлыҡҡа килгән

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы. Өфө, 1958. 62–73-сө бб.

[2] *Киекбаев Дж. Г.* Программа курса «Историческая грамматика башкирского и татарского языков». Уфа, 1967. С. 76.

булһа кәрәк. Был күсеш Ж. Ғ. Кейекбаевтың классик миҫалдарында яҡшы күренә: боронғо төркисә: *атаҡ*, яҡутса: *атах* > хәҙерге уйғырса, тываса: *адаҡ* > хакасса: *азах* > татарса: *азак* > башҡортса: *аҙаҡ;* башҡортса, татарса: *айаҡ* (орф. *аяҡ, аяк*); боронғо төркисә: *ҡутуҡ* > хәҙерге уйғырса: *ҡудуҡ* > башҡортса: *ҡоҙоҡ* > татарса: *ҡойы* (орф. *кое*), ләкин башҡорт диалекттарында: *ҡотоҡ, ҡойоҡ* һәм *ҡойо*[1].

Башҡорт теленән һәм Урал-Иҙел буйы төрки әҙәби теленән айырмалы рәүештә, татар телендә һүҙ башындағы [й] өнө [ж] өнөнә әйләнә: *йегирми > егерме > жегерме; йел > ел > жил.*

Башҡорт телендә тартынҡылар өлкәһендә башҡа үҙгәрештәр ҙә күҙәтелә.

Һүҙ башында [б] > [м]: *бен > мин*; *бин > мен, беңгү > мәңге, бойун > муйын.*

Интервокаль позицияла һәм һүҙ аҙағында [ғ] > [у]: *бағыр > бауыр, ағыз > ауыҙ, ағыр > ауыр, баг* (төйөн) > *бау* (бәй), *таг > тау, азыг > айыу, сатыг > һатыу* һ. б.

Башҡорт телселәре Ә. М. Аҙнабаев менән В. Ш. Псәнчиндың «Башҡорт теленең тарихи морфологияһы» китабында профессор Ж. Ғ. Кейекбаев тарафынан эшләнгән сағыштырма-тарихи методтың билдәлелек һәм билдәһеҙлек грамматик категорияһына таянып, башҡорт теле морфологияһының төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған грамматик категориялар аффикстарының тарихи үҫеше ентекләп тикшерелгән[2].

Башҡорт теленең һүҙлек байлығы нигеҙендә, һис шикһеҙ, ҡыпсаҡ һәм ҡайһы бер уғыҙ элементтары өҫтөнлөк иткән дөйөм төрки лексикаһы ята (һүҙ башында [й] ҡулланыуы, [д] менән башланған һүҙҙәрҙең булыуы, дим һәм башҡа һөйләштәрҙең [ҙ], [ҫ] өндәрен ҡулланыу яғынан төрөкмән теле менән оҡшашлығы һ. б.). Ҡыпсаҡ телдәре араһынан башҡорт һәм татар телдәрендә бик күп һүҙҙәр уртаҡ, улар икеһе бергә ҡыпсаҡ-болғар тел төркөмсәһен хасил итә.

Дөйөм төрки теле лексикаһында саф башҡорт һүҙҙәре айырылып тора. Уларға башҡорттарҙың матди мәҙәниәте менән бәйле һүҙҙәр, йәғни этнографияға ҡағылышлы лексика, ауыҙ-тел ижадына һәм топонимикаға ҡараған атамалар, терминдар инә. Башҡорт лексикаһындағы дөйөм төрки һүҙҙәр башҡорт теленең

---

[1] *Киекбаев Дж. Г.* Программа курса «Введение в урало-алтайское языкознание» / Отв. ред. И. П. Распосов. Уфа: БГУ, 1967, С. 6.

[2] *Аҙнабаев Ә. М., Псәнчин В. Ш.* Башҡорт теленең тарихи морфологияһы (Сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. 176-сы б.; *Азнабаев А. М., Псянчин В. Ш.* Историческая грамматика башкирского языка. Уфа, 1983. С. 244.

фономорфологик төҙөлөшөнә ярашлы формалашҡан һәм башҡа төрки телдәре менән сағыштырғанда бер төрлө йәки әҙерәк үҙгәргән мәғәнәләргә эйә.

Башҡорт этносы формалашыуында, унының нигеҙен тәшкил иткән төрки ҡәбиләләренән тыш, иран, фин-уғыр, һуңғараҡ монгол ҡәбиләләре лә ҡатнашҡан. Шул сәбәпле башҡорт телендә субстрат характерындағы иран сығышлы иң боронғо һүҙҙәр (*таҡта, ҡамыр, быяла, шишмә, һике*), шулай уҡ фарсы теленән туранан-тура йәки башҡа телдәр аша һуңыраҡ ингән һүҙҙәр (*дәфтәр, дәрес, идара, гонаһ, дүшәмбе, йәкшәмбе, һәм, бәлки, әгәр*); һүҙлек байлығының айырылғыһыҙ өлөшөн тәшкил иткән фин-уғыр субстраты (*матур, мендәр, йөк, кәртә, кәрәҙ*); монгол телдәре менән уртаҡ һүҙҙәр (*мал, бал, марал, күк* (төҫ), *көс, бағана, муйыл*) һәм һуңыраҡ үҙләштерелгән һүҙҙәр (*ҡонан, әжекәй* (эремсек), *дунала* (үлән), *һуйыр, дүнәжен* (бейә), *аймаҡ, ейән*) осрай.

Башҡорт теленең һүҙлек составында башҡорт халҡының борондан славян халыҡтары менән тығыҙ аралашыуы һөҙөмтәһендә тулыһынса үҙләштерелгән рус һүҙҙәре (*бүрәнә, ыҫмала, мейес, мискә, биҙрә, көршәк, арыш, торба, эҫкерт, сәйнүк*) һәм башҡорттар ислам динен ҡабул иткәндән һуң әҙәбиәт аша килеп ингән ғәрәп һүҙҙәре (*китап, әҙәбиәт, тәғлимәт, ғалим, ғилем, дәлил, тәбиғәт, мәҡәлә, миҫал, ҡәләм, рух, сәнғәт* һ. б.) бар[1].

Шулай итеп, башҡорт теленең һүҙлек байлығы төп башҡорт һүҙҙәренән һәм башҡа сығанаҡтарҙан, атап әйткәндә, иран, тунгус-манжур, фин-уғыр (X быуатҡа тиклем), болғар (X–XIII быуаттар), ҡоман-ҡыпсаҡ (XI–XIII быуаттар), ғәрәп, фарсы (XI–XIX быуаттар), монгол, ҡалмыҡ (XIV–XVI быуаттар), рус (XVI быуаттан бөгөнгәсә) телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән формалашҡан.

## ХАЛЫҠ ӘҘӘБИӘТЕ (ФОЛЬКЛОР) ТЕЛЕ

Башҡорт халҡы борон-борондан һүҙ сәнғәтенә ҙур иғтибар бүлгән. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса башҡорттар ырыуының тарихын һәм шәжәрәһен (кәмендә ете быуынға тиклем) белергә; йондоҙҙарҙың торошон иҫтә тоторға һәм эштәрҙе уларға яраҡлаштырып башҡарырға; риүәйәттәрҙе, ҡобайырҙарҙы, йырҙарҙы, батырҙар тураһындағы хикәйәттәрҙе яттан һөйләй һәм көйләй белергә тейеш булған.

---

[1] *Ишбердин Э. Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. М.: Наука. 1986.

Быуаттар һуҙымында телдән телгә, быуындан быуынға күсә килеп, күп таланттар ярҙамында шымарған, рухи яҡтан аҫыл гәүһәрҙәргә әүерелгән башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәре тупланмаһы халыҡ әҙәбиәтен тәшкил итә. Әҙәби телдең барлыҡҡа килеүендә уның тотҡан урыны ифрат ҙур. Фольклор теле, үҙенең бай лексикаһы, меңәр йылдар буйына «тама-тама ташты тишкән» фразеологияһы, һүҙ күркенә әйләнгән фәһемле мәҡәлдәре һәм әйтемдәре, тапҡыр һүҙҙәре, тотороҡло синтаксик берәмектәре стилистик үҙенсәлектәре һәм башҡа поэтик алымдары менән бөтөн дөйөм халыҡ телен барлыҡҡа килтереүгә, юғары нәфис һүҙ сараларын булдырыуға булышлыҡ иткән, уларҙың күбеһе һуңынан әҙәби телгә инеп киткән. Ләкин был халыҡ ижады телен әҙәби телдең һөйләү төрө тип иҫәпләргә нигеҙ бирмәй. Фольклор менән әҙәбиәттең дөйөм яҡтары күп булһа ла, улар төҙөлөшө, ҡулланылышы, тәбиғәте яғынан бер-береһенән ҡырҡа айырыла һәм һәр икеһе үҙ аллы итеп ҡарала.

Дөйөм халыҡ теле ҙур системаға инеп, үҙ аллы кесе системаны тәшкил иткән башҡорт халыҡ ижады теле эпик әҫәрҙәр (эпостар, ҡобайырҙар, әйтештәр), халыҡ әкиәттәре, йола йырҙары, тарихи һәм лирик йырҙар, таҡмаҡтар, мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар, риүәйәттәр һәм легендалар, көләмәстәр һәм мәҙәктәр, балалар фольклоры, мөнәжәт һәм бәйеттәр телендә кәүҙәләнә. Унда башҡорт халыҡ ижады теленә генә хас үҙаллылыҡ бейеклегенә күтәргән лексик-грамматик һәм стилистик үҙенсәлектәр ярылып ята.

Диалект менән әҙәби телдең бер-береһенән айырылып тороуы бәхәсһеҙ: биләгән ере, төбәге һәм ҡулланылышы менән сикләнгән диалект һәм тотош халыҡҡа хас, күп яҡлы ҡулланылышлы әҙәби тел. Ә инде башҡорт халыҡ ижады, йәғни фольклор йәки халыҡ әҙәбиәте теленә килгәндә, ул диалекттан нормаһының шаҡтай күп ҡырлы булыуы менән айырыла. Был үҙенсәлеге менән фольклор теле әҙәби телдән дә ситләшә, бынан тыш халыҡ әҙәбиәте теленә нормаһының ныҡлы бер тәртипкә һалыныуы, бер яҡлы ҡулланылышлы булыуы һәм телдән һөйләнелеүе кеүек билдәләр хас. Ул әҙәби телдәге кеүек стилдәр системаһынан тормай, стиль саралары бары тик жанр төрҙәренән сығып билдәләнә.

Башҡорт фольклор теле бер төрлө генә түгел. Жанр яғынан фольклор әҫәрҙәренең төрлө булыуы уның тел үҙенсәлектәрендә лә сағыла. Әкиәттең теле, мәҫәлән, диалекттан өҫтөн ҡайһы бер элементтарҙы үҙ эсенә ала, башланышы һәм тамамланышы, ғәҙәттә, стандарт фразаларҙан ғибәрәт, әкиәт тексының үҙендә лә дөйөм урындар (ҡатын-ҡыҙҙың сибәрлеген, егеттең батырлығын тасуирлаған формулалар, ат образын һүрәтләгән ҡалыптар һ. б.) байтаҡ, ләкин уның теле, нигеҙҙә, диалект менән тап килә.

Даими эпитеттар һәм сағыштырыуҙар, лексик һәм грамматик ҡабатлауҙар, ритмик-синтаксик конструкциялар һәм башҡа жанр-стилистик тел саралары булыуға ҡарамаҫтан, йола, туй йырҙары, сеңләүҙәр һәм таҡмаҡтар телдәре яғынан ғәҙәттәге һөйләү теленән бик аҙ айырыла. Ҡобайырҙарҙың һәм тарихи йырҙарҙың теле шаҡтай иҫке – ул башҡарыусының һөйләше менән һәр саҡ тап килеп тормай. Уларҙа төрлө тарихи осорҙарға ҡараған тел алымдары, архаизмдар һәм диалекттан өҫтөн элементтар осрай, ләкин нигеҙҙәре диалект теле менән барыбер тығыҙ бәйләнгән. Был осраҡта, беҙҙеңсә, XVII–XX быуаттар яҙмалары буйынса рус халыҡ поэзияһының телен тикшергән А. П. Евгеньева хаҡлы кеүек. Ул былай тип яҙған: «Йырсы үҙенең диалектында ижад итә, уның нормалары менән файҙалана, ләкин ул тыуҙырған әҫәрҙә диалектизмдар уның ғәҙәттәге телмәренән аҙыраҡ була, сөнки былинаны, йырҙы ул типик һәм сағыу формаларҙы һайларға ярҙам иткән традицияға нигеҙләнеп ижад итә». А. П. Евгеньева фольклор теленең ниндәйҙер кимәлдә диалекттан өҫтөн булыуын, ләкин, ул дөйөм халыҡ теленең бер төрө булып ҡалғанлыҡтан, нигеҙе диалекттан ситләшмәгәнлеген ышандырырлыҡ итеп күрһәтә[1].

Сәсәндәр сәнғәте үҙенең тамырҙары менән, һис һүҙһеҙ, боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Ҡыҙғаныска ҡаршы, күп сәсәндәрҙең исеме онотолған. Халыҡ ижадының үҙенсәлеге шундай: башта һүҙ оҫтаһы – сәсән сығарған фольклор әҫәре күмәкләп «шымартыу» процесын үтә. Быуындан быуынға, телдән телгә күсә килгән эпик сюжеттар һүҙ оҫталары тарафынан байытыла, камиллаштырыла һәм, аҙаҡ килеп, халыҡ ижадының хазинаһына әүерелә.

Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәре телендә башҡорт теленең бай һәм киң ҡатлам һүҙлек составы сағылған. Күп лексик берәмектәр диалекттан өҫтөн тора, ләкин уларҙың барыһы ла хәҙерге әҙәби телдә актив ҡулланылмай, ҡайһы берәүҙәре, төшөнсәләре иҫкереү сәбәпле, хәҙерге телдә бөтөнләй осрамай. Ҡулланыуҙан сыҡҡан төп башҡорт һүҙҙәренә түбәндәге миҫалдарҙы килтерергә мөмкин: *алып* «батыр»; *һыҙма* «боронғо һунар уҡтарының бер төрө», «саҡмалы мылтыҡ»; *бағауыл* «һаҡсы, ҡарауылсы, күҙәтсе»; *сабар* «сапҡын, хәбәр йөрөтөүсе»; *ҡуҙыҡ* «юлдаш, яран»; *аң* «кейек, йыртҡыс»; *армыт-армыт* «тармаҡ-тармаҡ»; *байман* «рәхәтлек, бәхет»; *буҫыу* «ҡурҡыу, боҫоу»; *емет* «аш, ашамлыҡ»; *еҫер* «тотҡон, ирекһеҙ кеше»; *ҡамҡа* «тун»; *ҡашҡа* «батыр»; *ҡусҡар* «һарыҡ»; *сура* «ир-ат»; *ут* «үлән»; *ыу* «ағыу»; *ҡоһор* «ҡон, үс»; *ыҡтымаҡ* «ҡупшы, нәҙек билле»; *эргә* «нигеҙ»;

---

[1] *Евгеньева А. П.* Очерки по языку русской устной поэзии в записях XVII–XX вв. М.; Л., 1963. С. 17.

*ҡуржын* «артмаҡ»; *суңҡа* «осло, үткер»; *ҡарҡар* «һуғышсы»; көң «ҡол»; *ылғы* «гел»; *ҡалта* «кеҫә»; *ҡуға* «ҡамышлыҡ»; *арҡалаш* «таяныс, терәк»; *ҡарыу* «ҡаршылыҡ»; *барымта* «сит ырыу малын ҡыуып алып китеү»; *баҫымта* «барымта өсөн үс алыу»; *ҡарымта* «сит халыҡ малын ҡыуып алып китеү» һ. б.

Иҫкергән һүҙҙәр төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәре генә түгел, башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә булырға мөмкин: *ҡатил* (ғәрәпсә) «үлтереүсе, һәләк итеүсе», *ҡәһҡәһә* (г.) «шарҡылдап көләүсе»; *таҡ* (ғ.) «көмбәҙ»; *ҙур* (фарсыса) «көслө, ғәйрәтле»; *руз* (ф.) «көн, көндөҙ»; *диуар* (ф.) «стена»; *кәнизәк* (ф.) «ҡол ҡатын»; *нөгәр* (монголса) «һуғышсы, хәрби хеҙмәтсе»; *тархан* (м.) «ҡотҡарылған кеше» һ. б.

Иҫкергән һүҙҙәр рәтендә айырым эпитеттар ҙа тора:

*Болғар күндән матурлап,*
*Башына йүгән кейелгән...*

[БНЭ, 166-сы бит][1];

*Болғар тартҡы, айыллы,*
*Туҡымдары ынйылы.*

[БНЭ, 193-сө бит].

Килтерелгән миҫалдарҙа *болғар* эпитеты «бик яҡшы», «ҡиммәтле» мәғәнәһендә ҡулланылған, ул башҡорттарҙың X–XIII быуаттарҙа Иҙел буйы Болғар иле менән сауҙа бәйләнеше һөҙөмтәһендә тыуған булһа кәрәк.

*Егетем, батыр икәнһең,*
*Күҙ ҡарамдай һаналған*
*Илгә ҡашҡа икәнһең.*

[БНЭ, 149-сы бит].

Әҙәби телдә *ҡашҡа* урынына *батыр* һүҙе ҡулланыла.

*Ҡырҙан ҡырға йөрөнөм,*
*Ҡыр емешен мин ейҙем.*
*Илдән илгә йөрөнөм,*
*Ил емешен мин ейҙем.*

[БХИ, 1973, 85-се бит][2].

---

[1] БНЭ – Башкирский народный эпос / Сост. тома А. С. Мирбадалева, М. М. Сагитов, А. И. Харисов. М.: Наука, 1977.

[2] БХИ – Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө, 1972. Беренсе китап; 1973. Икенсе китап (Төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе М. М. Сәғитов) 1982. Өсөнсө китап (Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Н. Т. Зарипов).

*Ейеү* (ашау) һүҙе бары тик фольклор телендә генә осрай.

*Атаһының булатын*
*Ҡулына тотоп алған, ти.*
*Бейек тауға менгән дә*
***Ирәмәлләп** торған, ти.*

[БНЭ, 159-сы бит].

*Ирәмәлләү* (үҙеңде ирекле, ғорур итеп тойоу) һүҙе тик ҡобайыр теленә генә хас.

Башҡорт ҡобайырҙары теленә хас булған башҡа һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе миҫал рәүешендә килтерәйек: *айҙа* «балта»; *аяулы* «кәҙерле, почетлы»; *барас* «йүгерек, бурҙай»; *берек* «ҡаты, ныҡ»; *бәпләп үҫтереү* «баланы иркәләү»; *ейегеү* «тарҡалыу, ярылыу»; *йөрөк* «тиҙ»; *ҡара* «ваҡ мал»; *меңбаш* «хәрби ополчение башлығы»; *сай* «йылғаның кипкән урыны»; *торон* «ейән»; *туп* «группа, төркөм»; *түш булыу* «иш булыу, иптәш»; *уған* «уға»; *үнгән* «героизм, геройлыҡ»; *үңәр* «шафер»; *ярҡырау* «ялтырау, яҡтырыу»; *яу күсе* «дошман ғәскәре»; *алымсығым* «кәләш»; *торҡа* «шлем»; *ҡалъян* «уҡ өсөн тәғәйенләнгән сумка»; *ҡалта* «һунарсының күн билбауы» һ. б. [БХИ, 1972; 1973; 1982].

Хәҙерге әҙәби телдең нормаһынан сығып ҡарағанда, ҡобайыр телендә, әлбиттә, диалектизмдар ҙа бар. Ҡобайыр шиғырының рифмаһын боҙмаҫ өсөн, улар уңайлы ҡулланыла.

*Был донъянан юйырға*
*Ете дейеү **ебәрҙем.***
*Күктә торған буҙ аттың*
*Урынын үҙем **күргәҙҙем.***

[БНЭ, 99-сы бит].

Был өҙөктә *ебәрҙем* һүҙе *күргәҙҙем* диалект һүҙе менән рифмалаша (әҙәбисә: *күрһәттем*).

Диалектизмдар ҡобайыр тексының төрлө урынында осрай:

*Билең бөгөп, үҙеңде,*
*Ботоң-ботса ботарлап,*
***Бырағытһа** бер саҡта,*
*Үлем тигән яуызды*
*Ҡаршыларға торлаҡта,*
*Атай, тура килмәҫме?*

[БНЭ, 63-сө бит].

Был миҫалдағы *бырағытыу* (ташлау, ырғытыу) диалект һүҙе хәҙерге әҙәби телдә йыш ҡына *быраҡтырыу* тигән һүҙ менән бирелә.

Диалектизмдарҙан түбәндәге лексик берәмектәрҙе миҫал итеп килтерергә була (тәүге һүҙ диалект, һыҙыҡ аша хәҙерге әҙәби телдә): *ҡураҡ* – өйөр айғыры; *маҡһынмау* – һанға һуҡмау; *наһыр* – биҙәү, матурлау; *тоҫоу* – ҡамау; *һеүлек* – һөлөк; *һоңғау* – ҡул һелтәп күрһәтеү; *һармаҡлау* – һамаҡлау; *япа-яңғыҙ*; *ужарып* – ажарланып; *бураланыу* – туҙыныу, асыуланыу; *бермеклəп* – берәмләп; *тилеткән* – баш эйҙергән, күндергән; *әбегеп* – зарығып; *һыуатлап* – һыу эсеп; *ырай* – төбәп, табан; *айыштым* – аңланым; *төшлөк яҡ* – көньяҡ; *көнтыуыш* – көнсығыш һ. б. [БХИ, 1972; 1973; 1982].

Башҡорт фольклоры телендә шулай уҡ ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре киң таралған. Улар башҡорт ҡобайырҙары телендә йыш ҡулланыла: *ҡатил* (ғ.) «палач»; *таҡ* (ғ.) «көмбәҙ»; *ҙур* (ф.) «көслө»; *руз* (ф.) «көн»; *хәстә* (ғ.) «ауырыу, сир»; *ғосса* (ғ.) «ҡайғы»; *диуар* (ф.) «стена»; *кәнизәк* (ф.) «ҡол ҡатын-ҡыҙ»; *дарман* (ф.) «дарыу, дауа»; *сауаб* (ғ.) «дөрөҫ, ғәҙел»; *ғиффәтле* (ғ.) «тоғро, дөрөҫ»; *данышман* (ф.) «ғалим, грамоталы»; *бихисап* (ф.) «һанап бөткөһөҙ»; *фирҡә* (ғ.) «дружина, ғәскәр»; *афәт* (ғ.) «ҡайғы, бәхетһеҙлек»; *арман* (ф.) «теләк, ашҡыныу»; *бостан* (ғ.) «баҡса»; *вафа* (ғ.) «дөрөҫ, тоғро»; *дад* (ф.) «дөрөҫлөк, ғәҙеллек»; *дәрд* (ф.) «сир, ғазап»; *дәүран* (ф.) «быуат, дәүер»; *жаду* «сихырсы»; *зәргәр* (ф.) «ювелир, алтын эшләү мастеры»; *йөмлә* (ғ.) «бөтәһе»; *күшә* (ф.) «урам»; *ҡадир* (ғ.) «көслө, ҡеүәтле»; *ҡәҙәм* (ғ.) «аяҡ»; *ҡәүм* (ғ.) «ырыу, ҡәбилә»; *миҙә* (ф.) «тәмлекәс»; *миһман* (ф.) «ҡунаҡ»; *мәғбут* (ғ.) «бәхетле»; *мәғдан* (ғ.) «ер аҫты байлыҡтары»; *мәзмүн* «йөкмәтке»; *мәсләк* (ғ.) «принцип»; *намә* (ф.) «хат, китап»; *ниғмәт* (ғ.) «байлыҡ»; *табиб* (ғ.) «врач, доктор»; *тикә* (ф.) «киҫәк»; *тәҡбир* (ғ.) «хөрмәтләү»; *фәхри* (ғ.) «хөрмәтле»; *хәлил* (ғ.) «дуҫ, иптәш»; *шәһир* (ғ.) «билдәле, таныҡлы»; *яд* (ф.) «хәтер»; *гонаһ* (ф.); *гурия* (ф.) «хур ҡыҙы»; *ҡамыр* (ф.); *һорнай* (ф.); *бәҫлеүән* (ф.) «бәһлеүән»; *батша* (ф.); *сәмреғош* (ф.); *һумай* «бәхет ҡошо»; *аждаһа* (ф.) «йылан»; *януар* (ф.); *сәфәр* (ф.); *сабыр* (ғ.); *хәйлә* (ғ.); *хыянат* (ғ.); *ғорур* (ғ.); *яуап* (ғ.); *вәғәҙә* (ғ.); *нәфсе* (ғ.) һ. б.

Шулай итеп, башҡорт халыҡ ижады теле дөйөм халыҡ теленең айырым бер төрө булып тора. Адыгей телдәрен тикшереүсе З. Ю. Кумахова менән М. А. Кумахов «Функциональная стилистика адыгских языков» тигән китаптарында хаҡлы рәүештә былай тип яҙҙылар: «Территориаль диалекттар менән билдәле бәйләнештә тороп һәм әҙәби телдең яҙма һәм һөйләү төрҙәренең үҫешенә, формалашыуына тәьҫир итеп, *йәнле поэтик*

*һөйләү теле* (курсив беҙҙеке – И. Ғ.) телмәрҙең айырым бер тибы булараҡ айырылып тора, уның үҙенсәлектәре урындағы диалекттар һәм әҙәби тел ҡыҫаларына һыймай»[1].

Башҡорт фольклоры (халыҡ әҙәбиәте) теленә түбәндәге үҙенсәлектәр хас: 1) телдән һәм яттан (экспромт менән) әйтелеүе, йәнле һөйләү телендә йәшәүе; 2) сағыштырмаса диалекттан өҫтөн тороп, диалект-ара ҡулланылышта булыуы, ләкин сығанағы менән уға барып тоташыуы; 3) стандартлашҡан ҡалыптарҙың, традицион формулаларҙың һәм алымдарҙың булыуы; 4) архаизмдарҙың йыш осрауы; 5) нормаһының, төбәккә ҡарап, күп вариантлы булыуы; 6) башҡарыусыларҙың цикләнгән булыуы; 7) бер төрлө ҡулланылышта йөрөүе; 8) әҙәби телдәге кеүек стилдәргә бүленмәүе, ә тик жанр үҙенсәлектәренән сығып ҡына стиль сараларының ҡаралыуы һ. б.

Йомғаҡлап шуны әйтеү кәрәк: башҡорт халыҡ әҙәбиәте теле дөйөм халыҡ теле мөхитендә үҙенә билдәле үҙаллылыҡты һаҡлай, ул башҡа тел төрҙәренән (диалекттарҙан, йәнле һөйләү теленән һәм әҙәби телдән) үҙенең төҙөлөшө, ҡулланылышы һәм мәғәнәүи (семантик) үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Тарихи үҫеш осоронда ул башҡа тел төрҙәре менән үҙ-ара йоғонто яһашыу процесын кисерә һәм әҙәби телдең үҫешендә даими сығанаҡ булып сығыш яһай.

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ ТАРИХЫНЫҢ ИКЕ ДӘҮЕРЕ

Башҡорт әҙәби теленең тарихын, ғәҙәттә, ике – милләткә тиклемге һәм милли – дәүергә бүлеп ҡарайҙар. Был ике дәүер араһында, тәбиғи, уртаҡлыҡтар ҙа һәм айырмалыҡтар ҙа бар.

Башҡорттарҙың милләткә тиклемге дәүерҙәге әҙәби теле, бөгөнгө көндән сығып ҡарағанда Урал-Иҙел буйы төрки әҙәби теленән алып, тамырҙары менән Урта Азия төрки (сығатай-үзбәк), Кесе Азия төрки (ғосманлы төрөк), Алтын Урҙа төрки (хорезм-төрки), ҡараханлы уйғыр, боронғо уйғыр һәм боронғо төрки яҙма традицияларына барып тоташа. Был дәүер үҙе алты осорға бүленә.

1. V–X быуаттар – боронғо төрки рун яҙма теле осоро. Был тел боронғо уғыҙ, уйғыр, ҡыпсаҡ һәм башҡа төрки ҡәбиләләр берләшмәһенең яҙма әҙәби теле булған.

---

[1] *Кумахова З. Ю., Кумахов М. А.* Функциональная стилистика адыгских языков. М.: Наука, 1979. С. 28.

Боронғо төрки әҙәби телендә орхон (Көлтәгин, Билге ҡаған, Тонйоҡуҡ, Әл-итмеш, Кули-сура, Мойун-сура) иҫтәлектәренә ҡуйылған ташъяҙмалар һәм йәнәсәй (тотороҡло һүҙбәйләнештәр һәм формалар менән башҡарылған күп һандағы эпитафиялар) яҙма ҡомартҡылары ташҡа соҡоп яҙылған. Ә ҡағыҙға яҙылған рун яҙма ҡомартҡыларҙан VIII быуат аҙағына – IX быуат башына ҡараған «Ырҡ битиг» («Күрәҙәлек китабы») тексы һанала. Күренекле төркиәтсе ғалимдар (С. Е. Малов, А. Н. Кононов, Э. Р. Тенишев, И. В. Стеблева, И. В. Кормушин, Д. Д. Васильев) боронғо төрки әҙәби теленең билдәле бер нормаға һалынғанлығын билдәләй. Улар фекеренсә, уғыҙ-уйғыр телдәренә хас һүҙ аҙағында [ғ] графо-фонемаһының, *-ыг* төшөм килеш, *-мыш* үткән заман ялғауҙары, *-дуҡ* формаһы, *бул-* ҡылымы, исем, ҡылым нигеҙҙәрендә [д] графо-фонемаһының булыуы, *-га* төбәү килеш ялғауы, *-дачы* формаһы, *бар-*, *бир-* ҡылымдары, һүҙ байлығының киң ҡатламы һәм фразеологик берәмектәрҙең ҡулланылыуы диалекттан өҫтөн булған[1].

Боронғо төрки һәм хәҙерге башҡорт телдәре араһындағы уртаҡлыҡтар һүҙ башында [й] өнөнөң (*йете, йегерме, йетмеш*) килеүендә, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һәм көньяҡ диалекттың урта һөйләшендә ҡулланылған [нк], [нҡ], [нт], [ңт], [мт], [мк], [мҡ] өн ҡушылмаларының (*анта, мынта, ҡалты, урамҡа, урманҡа*), күпселек лексик һәм ҡылым формаларының тап килеүендә бик асыҡ күренә.

Боронғо төрки халыҡтары рун яҙыуынан башҡа тағы икенсе бер төр яҙыу ҡулланғандар. Ул – боронғо уйғыр яҙыуы. Ул яҙыуҙа «Алтун йаруҡ», «Куан-ши-им Пусар» кеүек ҡомартҡылар яҙылған. Боронғо уйғыр әҙәби теле VIII–XVIII быуаттарҙа ҡулланылышта була. Ул хәҙерге Ҡытай Халыҡ Республикаһының Синьцзян-Уйғыр автономияһы районында IX быуат уртаһынан XIII быуат уртаһына тиклем булған Кочо (Гаочан) кенәзлегендә рәсми тел булып хеҙмәт иткән.

Ул телдә нәфис (проза, поэзия), дини (фәлсәфәүи дидактик), фәнни әҙәбиәттәр сәскә ата, рәсми һәм шәхси эш ҡағыҙҙары алып барыла. Культ теле булараҡ ул Көнсығыш Төркөстанда XVIII быуатҡа тиклем һаҡланған. Был телдән Урал-Иҙел буйы төрки теленә *-дын/-дин* сығанаҡ килеш, *-мыш/-меш* сифат ҡылым, *-ғыл/-гел* бойороҡ һөйкәлеше ялғауҙары һәм башҡа грамматик формалар үҙләштерелгән.

2. X–XIII быуаттар – урта төрки теле осоро. IX быуат уртаһынан алып XIII быуат башына тиклем Ҡараханлылар дәүләте шарттарында йәшәгән төрки халыҡтарының боронғо

---

[1] *Тенишев Э. Р.* Избранные труды. Книга первая. Уфа: Гилем, 2006. С. 204–205.

поэзияһы фольклор байлығы нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм саф төрки ҡараханлы-уйғыр әҙәби телендә яҙылған Йософ Баласағунлының «Ҡотаҙғу белек» («Ҡотайыу белеме», 1069–1070 йылдарҙа ижад ителгән) поэмаһы һәм Мәхмүт Ҡашғариҙың хәҙерге төрки халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, телдәренә туранан-тура ҡағылышлы мәшһүр «Диуану лөғәт әт-төрк» (1072–1074 йылдарҙа яҙылған) һүҙлеге, Әхмәт Йүгнәкиҙең «Һибатул хаҡаиҡ» (XII быуат) әҫәре башҡорт әҙәби теле тарихын өйрәнеүҙә бай сығанаҡтарҙан һанала. Был осор теленә боронғо тел ҡатламы күрһәткестәре (мәҫәлән, *-ыг* төшөм килеш, *-да* сығанаҡ килеш, *-мыш, -дуҡ, -гли, -гулуҡ, -дачы* ҡылым ялғауҙары) менән бер рәттән яңы тел ҡатламы аффикстары (мәҫәлән, *-ның* эйәлек килеш, *-ны* төшөм килеш, *-га* төбәү килеш, *-дан* сығанаҡ килеш, *-да* урын-ваҡыт килеш, *-са* шарт һөйкәлеше ялғауҙары, *-су, -сун, -суны* бойороҡ һөйкәлешенең 3-сө заттағы өс төрлө формаһы) хас күренеш булып тора[1].

Төрки телендә артабан ҡаҙаҡ, башҡорт һәм татарҙар араһында киң таралған Әхмәт Йәсәүиҙең «Диуану хикмәт» (XII быуат), уның шәкерте Сөләймән Баҡырғаниҙың «Баҡырған китабы», «Ахырызаман китабы», «Хәҙрәте Мәрйәм китабы» (XIII быуат), авторы билдәһеҙ «Киҫекбаш китабы» (XIV быуат) кеүек суфыйсылыҡҡа арналған яҙма ҡомартҡылар донъяға килә.

Иҫке төрки әҙәби теле, Ҡараханлылар дәүләтендә барлыҡҡа килеп, Иҙел буйы болғарҙарының, Дешти Ҡыпсаҡ ерендә йәшәгән төрки халыҡтарҙың уртаҡ әҙәби теле булып тора. Башҡорт әҙәби теленең тарихы боронғо төрки һәм боронғо уйғыр осорҙарының айырылғыһыҙ дауамы булған Иҙел буйы Булғар дәүләте осоро (XI–XIII быуаттар) менән тығыҙ бәйләнгән, әҙәби тел үҙенең һүҙлек байлығы, грамматик төҙөлөшө буйынса бик сыбар була.

Башҡорт һәм татар халыҡтарының боронғо әҙәби башланғысы булып иҫәпләнгән мәшһүр «Ҡиссаи Йософ» Ҡол Ғәли тарафынан XIII быуат башында, көнсығыш әҙәбиәте тәжрибәһенә таянып, Урал-Иҙел буйы ерлегендә, урындағы башҡорт, Иҙел буйы болғарҙарының фольклоры, уларҙың бай поэтик мираҫы йоғонтоһо нигеҙендә ижад ителгән хорезм-төрки, уғыҙ-ҡыпсаҡ тел үҙенсәлектәрен берләштергән төрки яҙма әҙәби телендә яҙылған. Хорезм-төрки әҙәби теленә хас үҙенсәлектәр түбәндәгеләр: һүҙ башында [*м-*] графо-фонемаһы (*мән, муны, мунлар*), *-мыз* 1-се зат күплектәге эйәлек формаһы (*атамыз*), *-га* төбәү килеш ялғауы (*халыҡга*), *-ны* төшөм килештең 3-сө заттағы аффиксы (*кәмәләрене*), *-дын* сығанаҡ килеш (*сәндин*), *-ласы* йыйыу

---

[1] *Тенишев Э. Р.* Избранные труды. Книга первая. Уфа: Гилем, 2006. С. 218–225.

һандары форманты (*икеләсе, уныласы*), *-з, -ур, -ар, -йур* хәҙерге-киләсәк заман ялғауҙары (*алурмын, сорар, әйдер, аңайурман*) һ. б.

Уғыҙ телдәренә хас күрһәткестәр: һүҙ башындағы [б] графофонемаһы (*бән, беӊ*), [д] тартынҡыһы (*датлы, дыңла*), фрикатив [в] өнө (*вар, вир*), *-ың* эйәлек килеш (*Йософың*), *-а* (*-йа*) төбәү килеш (*баша – башҡа, ҡойойа – ҡойоға*), *-ы* төшөм килеш (*китабы, доғаңы*), *-дан, -дән* сығанаҡ килеш (*бездән*), *-(й)ан* сифат ҡылымының хәҙерге заманы (*вирмәйәнсезләр*), *-убан* хәл ҡылымы (*ҡылубан*), *-дыҡ* (*ҡылдығын*) ялғауҙары һ. б.

Ҡыпсаҡ телдәренә, шул иҫәптән башҡорт теленә хас элементтар: һүҙ башындағы *т-* һаңғырау тартынҡыһы (*телә, түш*), *-ның* эйәлек килеш (*тағның*), *-ға, -гә* төбәү килеш (*шәһәргә*), *-на* төбәү килештең 3-сө зат эйәлек формаһынан һуң (*морадына*), *-ны* төшөм килеш (*ҡолны*), *-н* төшөм килештең 3-сө зат эйәлек формаһынан һуң (*сувын*), *-дан* сығанаҡ килеш (*атдан*) ялғауҙары, *бул-* ҡылымы, *-уб* хәл ҡылымы һ. б[1].

Хәҙерге башҡорт теле диалекттарында һәм һөйләштәрендә уғыҙ телдәренә хас үҙенсәлектәрҙе күпләп осратырға мөмкин. Уның шулай булыуы тәбиғи. Сөнки, этник тарихтан билдәле булыуынса, VIII–XI быуаттарҙа айырым башҡорт ырыуҙары Һырдаръя, Арал диңгеҙе һәм Яйыҡ йылғаһы буйҙарында уғыҙ ҡәбиләләре менән тығыҙ аралашып йәшәй һәм был хәл дөйөм төрки әҙәби ҡомартҡылар булып танылған «Уғыҙнамә», «Ҡорҡот ата китабы» кеүек XIII–XIV быуаттарҙа ҡағыҙға теркәлгән уғыҙ яҙма әҫәрҙәре теленең башҡорт әҙәби теле тарихына ла яҡын мөнәсәбәттә тороуын раҫлай.

Урал-Иҙел буйы төрки халыҡтары теленә бик яҡын ҡыпсаҡ һүҙлектәре лә ошо осорҙа төҙөлә. Улар араһынан иң әһәмиәтлеләре «Китабы мәжмүғ тәржеман төрки вә ғәжеми вә моғоли вә фарси» (1245), «Кодекс куманикус» (1303), «Аттухфатуз зәкиәтү филлөғәтит төркийә» (XIII быуат), «Толкование языка половецкого» (XIV быуат) һ. б. Уғыҙ-ҡыпсаҡ тел үҙенсәлектәре артабанғы осор яҙма ҡомартҡылар теле өсөн дә хас күренеш булып тора.

3. XIV быуаттан алып XVI быуаттың уртаһынаса, йәғни башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклемге осоро. Был осорҙа Алтын Урҙа дәүләтендә Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбиә», Ҡотбтың «Хөсрәү вә Ширин», Харәзмиҙың «Мөхәббәтнамә», Мәхмүт ибне Ғәлиҙең «Нәһж әл-фәрадис», Хосам Кәтибтең «Жөмжөмә солтан», Сәйф Сараиҙың «Гөлстан бит-төрки» кеүек

---

[1] *Тенишев Э. Р.* Избранные труды. Книга вторая. Уфа: Гилем, 2006. С. 265–274.

дастандар ижад ителә. Был ҡомартҡыларҙың теле ҡатнаш һәм сыбар. Уғыҙ-уйғыр элементтары «Хөсрәү вә Ширин» поэмаһы телендә күберәк һаҡланған: *-дын* формантлы сығанаҡ килеш, *-ғлы, -ғучы, -мыш, -дуҡ* ялғаулы сифат ҡылым йыш осрай. Ҡыпсаҡ теле үҙенсәлектәре күберәк «Мөхәббәтнамә», «Гөлстан бит-төрки» әҫәрҙәре телендә күҙәтелә: *-лы* ялғаулы сифат, *-лыҡ* ялғаулы исем, *-и, -иң, -им, -иңиз, -имиз* эйәлек ялғаулы, *-ға* ялғаулы төбәү килеш, *-раҡ* ялғаулы сағыштырыу дәрәжәһе, *-ған* ялғаулы сифат ҡылым, *-уб* ялғаулы хәл ҡылым һ. б.

Алтын Урҙа дәүләтендә ҡулланылған хорезм-төрки теле артабан сығатай-үзбәк һәм ғосманлы төрөк телдәренең формалашыуында ҙур урын тота. Ә һуңғылары, төбәк элементтарын туплап, Урта Азия, Кесе Азия, Урал-Иҙел, Арал-Каспий, Төньяҡ Кавказ варианттарын барлыҡҡа килтерә.

Дүрт ханлыҡ (Нуғай, Әстрхан, Ҡазан, Себер) хакимлыҡ иткән осорҙағы (XIV–XVI быуаттар) Урал-Иҙел буйы төркие «Төхфәи мәрдан», «Нури Содур», «Ғәли батыр», «Ҡиссаи Сәҡәм», «Ҡиссаи Фәттәхетдин» кеүек поэмалар һәм дастандар телендә сағыла һәм унда уғыҙ, ҡыпсаҡ, ғәрәп, фарсы, сығатай, ғосманлы төрөк телдәренә хас үҙенсәлектәр өҫтөнлөк ала. Был осорҙа яҙма әҙәби тел үҙенең төҙөлөшө, һүҙлек составы буйынса шаҡтай сыбарлана төшә.

4. XVI быуаттың уртаһында – XVIII быуаттарҙа, Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуңғы осорҙа, Урал-Иҙел буйы төркиендә ҡыпсаҡ элементтарының, шулай уҡ рус теленән үҙләштерелгән лексик берәмектәрҙең (бигерәк тә рәсми эш ҡағыҙҙарында, шәжәрәләрҙә) артыуы билдәле. Был осор яҙма ҡомартҡылар телендә иҫке һәм яңы элементтарҙы йәнәшә ҡулланыу күҙәтелә: *-а/-ә* (*-йа/-йә*) һәм *-ға/-гә* формантлы төбәүйүнәлеш килеше, *-ы, -и* һәм *-ны/-ни* ялғаулы төшөм килеш, *-дын/-дин* һәм *-дан/-дән* аффикслы сығанаҡ килеш, *-мыш/-меш, -дуҡ/-дүк* һәм *-ған/-гән* менән сифат ҡылым, *-йу/-йү* һәм *-уб/-үб* ялғауҙары менән хәл ҡылым һ. б. Әҙәби телде барлыҡҡа килтергән лексик һәм грамматик бөтөндөң төп өлөшө урындағы тел сараларынан тора, тик шиғри әҫәрҙәрҙә традицион элементтар күберәк осрай. Башҡорттарҙың тарихи яҙма ҡомартҡылары телендә *с~ҫ, һ, п~б, ч~с* тартынҡыларының сиратлашыуы күҙәтелә.

Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр күпләп ҡулланыла башлай: *кенәгә* «китап, дәфтәр», *дугавур* «договор», *купис* «купец» һ. б. Ғәрәп-фарсы һүҙҙәре әле һаман да лексиканың күпселек өлөшөн тәшкил итә. Урал-Иҙел буйы төрки телендә сығатай,

йәғни Урта Азия һәм ғосманлы, йәғни Кесе Азия, төбәк төрки телдәренең дә йоғонтоһо нык һиҙелә.

5. XIX быуаттың тәүге яртыһында Урал-Иҙел буйы төрки телендә суфыйсылыҡ әҙәбиәте тыуа. Тажетдин Ялсығол, Әбелмәних Ҡарғалы, Шәмсетдин Зәки, Һибәтулла Салихов, Мәнди Ҡотош Ҡыпсаҡи, Ғәли Соҡорой әҫәрҙәренең теле төрки халыҡтың йәнле һөйләү һәм фольклор теле менән үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә тора. Ҡайһы бер әҫәрҙәр традицион тел сараларына артыҡ бай, икенселәре күберәк халыҡсан тел үҙенсәлектәрен ҡуллана. Суфыйсылыҡ поэзияһы телендәге төрлөлөк, әҫәрҙең жанрына йәки стиленә ҡарап ҡына түгел, бәлки шағирҙың поэзияһына һәм уҡымышлылығына ҡарап та сағыла. Был осор яҙма әҙәби тел башҡорт һәм татар һөйләү телдәренең, фольклорҙың йоғонтоһон кисереп кенә ҡалманы, бәлки уларҙың үҙҙәренә лә даими тәьҫир яһаны. Шағирҙар һәм тексты күсереүсе хаттаттар һәр ваҡыт төрки теленең традицияларын эҙмә-эҙ һаҡламай, сөнки улар әҙәби тел нормаларын һаҡларға тырышһа ла, яҙыуҙа туған теленең ҡайһы бер фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәрен сағылдырмай ҡала алмаған.

6. XIX быуаттың икенсе яртыһы мәғрифәтселек әҙәбиәтенең үҫеше, Урал-Иҙел буйы төрки телендә башҡорт теле элементтарының артыуы, әҙәби телдең яңы стилдәре (публицистик һәм ғилми) формалашыуы менән билдәле. Был беренсе нәүбәттә М. Аҡмулла, М. Өмөтбаев һәм Р. Фәхретдинов әҫәрҙәре телендә сағыла.

Башҡорт әҙәби теленең милли дәүерен биш осорға бүлергә мөмкин:

1. XIX быуат аҙағынан Октябрь революцияһына тиклемге осор. Башҡорт милләте формалашыуының башланған осоронда әҙәби тел сифатында башҡортлаштырылған Урал-Иҙел буйы төрки теле йөрөй. Матбуғат теле булып, бер яҡтан, иҫке төрки теленең, икенсе яҡтан, башҡорт халыҡ һөйләү телмәренең, фольклор теленең йоғонтоларынан азат булмаған татар теле алғы сафҡа сыға.

Татар матбуғат теле, иҫке төрки теле кеүек, башҡорт теленең бөтә фонетик үҙенсәлектәрен сағылдырып бөтмәһә лә, XIX быуат аҙағы – XX быуат башында башҡорт зыялылары араһына бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ үтеп инә. Башҡортостан шарттарында ул башҡорт халыҡ һөйләү теле һәм фольклор теленең йоғонтоһон кисерә.

Был осорҙа рус графикаһы нигеҙендә телдең фонематик төҙөлөшөнә яраҡлаштырып, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең яҙыуын һәм яҙмаһын булдырыуға ынтылыштар була. Һүҙлектәр, дәреслектәр, тәржемәләге дини әҙәбиәт һәм ауыҙ-тел ижады-

ның ҡайһы бер өлгөләре рус алфавиты нигеҙендә баҫыла (В. В. Катаринский, А. Г. Бессонов, Н. Ф. Катанов, М. А. Ҡулаев әлифбалары, «Инжил» һ. б.). Башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының бер өлөшө (С. Яҡшығолов, Х. Ғәбитов, З. Өммәти, М. Сәғҙи, Бәхтийәр Бәхтигәрәй улы, Ғ. Кейеков, Ш. Эминев, Ш. Бабич һ. б.) үҙҙәренең әҫәрҙәрен, ғәрәп алфавитын файҙаланып, башҡорт телендә сығарырға ынтылған.

2. 1920 йылдар иҫке төрки, халыҡтың йәнле һөйләү һәм фольклор телдәре нигеҙендә хәҙерге башҡорт әҙәби теленең ғәрәп алфавиты һәм графикаһында формалашыуы менән билдәле. Башҡорт һәм татар халыҡтарын хеҙмәтләндергән ғәрәп яҙыуының өс төрө барлыҡҡа килә: иҫке яҙыу (иҫке имлә), урта яҙыу (урта имлә), яңы яҙыу (яңы имлә).

Был осорҙа яҙыусы Сәғит Рәмиев тарафынан башҡорт әҙәби теле өсөн яңы алфавит төҙөлә; унда 33 хәреф булып, шуларҙың 27-һе тартынҡы, 6-һы һуҙынҡы өндәрҙе белдерә. Был алфавит үҙенең йәшәү осоронда бер нисә тапҡыр төҙәтелә һәм латин алфавиты менән алмаштырылғанға тиклем башҡорт яҙма әҙәби теленең ихтыяждарын тулыһынса үтәп килә.

Шулай итеп, Урал-Иҙел буйы төрки теле аша хәҙерге башҡорт әҙәби теленә норма булараҡ ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренең күпселеге, фарсы грамматик саралары менән яһалған кире мәғәнә биреүсе *би-* (*бисара, бимаза*) һәм *на-* префикслы (*насар, нахаҡ*), эйә булыу мәғәнәһен яһаусы *-кәр/-гәр* аффикслы (*эшмәкәр, сауҙагәр*), *хана* элементлы (*ашхана, сәйхана*), *йән, йан* (*Фазылйан, Йәнбирҙе*), *хужа, ғужа* (*Хужахмәт, Алтынғужа*) *яр, йәр* (*Данияр, Бәхтийәр, Ярмөхәмәт*), *гөл* (*Гөлдәр, Миңлегөл*) ҡушылмалы уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр, ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренән аналитик юл менән ҡылым яһау (*ижад итеү, ғишыҡ тотоу, енәйәт ҡылыу*), ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән теҙеүсе һәм эйәртеүсе теркәүестәрҙең күп өлөшө (*һәм, ләкин, фәҡәт, әллә, әммә, әгәр, йәки, бәлки, сөнки, йәғни, хатта, гүйә*), стиль айырымлыҡтары, үҙенсәлектәре һәм башҡа күп кенә синтаксик конструкциялар килеп инә[1].

Ғәббәс Дәүләтшиндың 1927 йылда Башҡортостандың беренсе Яңалиф конференцияһында яһаған доклады буйынса тәүҙә башҡорт халҡының әҙәби теле итеп Тамъян-Ҡатай, Мәсәғүт, Арғаяш кантоны башҡорттарының теле, йәғни ҡыуаҡан (хәҙерге көнсығыш) диалекты алына. 1924 йылда Н. Таһировтың ҡыуаҡан диалекты нигеҙендә әҙәби телдең «Башҡорт лөғәте»

---

[1] *Ишбирҙин Э. Ф., Ғәләүетдинов И. Ғ., Халиҡова Р. Х.* Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө: Китап, 1993. 175–184-се бб.

(«Башҡорт һүҙлеге») сығарыла. Ләкин ул бөтә башҡорттарҙы ла ҡәнәғәтләндермәй. Һуңынан хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нигеҙенә дөйөм башҡорт теленең төп һыҙаттарын сағылдырған ҡыуаҡан һәм юрматы (хәҙерге көньяҡ) диалекттары һалына. Әҙәби телгә норма итеп [h], [ç], [ҙ] өндәре, көнсығыш диалекттағы һигеҙ вариантлы күплек ялғауҙары; *-ығыҙ/-егеҙ, -ҡыр/-кер, -ырға/-ергә* кеүек ялғауҙар алына.

Ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән яҙыуҙың һуңғы орфографияһы Башҡортостан хөкүмәте тарафынан 1928 йылдың 12 апрелендә раçлана. Был орфографияла бөтә һүҙҙәрҙең дә фонетик принцип нигеҙендә яҙылыуы, сингармонизм законын иçәпкә алыу, [h], [ç] өндәренең ҡайҙа, нисек яҙылыу осраҡтары күҙ уңында тотола[1].

3. 1930–1940 йылдарҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теле латин алфавиты һәм графикаһында тиҙләтелгән темпта үçә, уның төп функциональ стилдәре ойоша һәм үçеш ала.

1930 йылда башҡорт әҙәби теленең латин алфавиты һәм графикаһы нигеҙендә яңы орфографияһы ҡабул ителә. Унда фонетик принципҡа ҡоролған башҡорт дөрөç яҙыу ҡағиҙәләре бирелә. 1935–1937 йылдарҙа ваҡытлы матбуғатта башҡорт әҙәби теленең орфографияһы тураһында дискуссия булып үтә. Унда үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең, ҡушма һүҙҙәрҙең, ялғауҙарҙың, баш хәрефтәрҙең дөрөç яҙылышы кеүек бәхәсле мәсьәләләр күтәрелә. Әйтелгән фекерҙәр иçәпкә алынып, 1939 йылда Башҡортостан Юғары Советы Президиумы тарафынан орфографияның яңы проекты раçлана һәм матбуғатта сығарыла[2].

1930 йылда, хәҙерге башҡорт әҙәбиәте яңы аяҡҡа баçып килгән осорҙа, Ғәббәс Дәүләтшиндың «Башҡорт теленең имлә һүҙлеге» ул замандағы башҡорт әҙәбиәтендә һәм халыҡ араһында киң таралған ун меңләп һүҙ, термин латин хәрефтәре яҙылышында донъя күрә[3].

4. 1940 йылдарҙан алып 1999 йылға тиклемге осорҙа хәҙерге башҡорт әҙәби теленең рус алфавиты һәм графикаһында тотороҡланыуы, уның артабанғы камиллашыуы, рус әҙәби теле һәм башҡа төрки телдәр менән бәйләнеше нығыныуы күҙәтелә.

---

[1] Яңы юл, 1924, № 1 (9). 28–30-сы бб., ғәрәп графикаһында.

[2] *Башҡорт* теле орфографияһы. – Өфө, 1939.

[3] *Gabbas Dəvlətşin*/Başqort teleneŋ imlə hyđege. X. Abdraşit ridaksejəhьhda. Өfө: Başgiz, 1930; Башҡорт теленең имлә һүҙлеге / Хәҙерге башҡорт теленә ауҙарыусы һәм бер тәртипкә килтереүсе М. А. Дәүләтшина-Сынбулатова. Фәнни мөхәррире И. Ғ. Ғәләүетдинов. Үҙгәрешле 2-се баçма. Өфө, 2012. 312 б.

Рус алфавитына күсеү уңайы менән, башҡорт әҙәби теленең яңы орфографияһы төҙөлә һәм 1939 йылда, Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы тарафынан раҫланып, матбуғатта сығарыла[1].

1957–1958 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» газетаһының биттәрендә башҡорт әҙәби теленең орфографияһы тураһында дискуссия ойошторола. Тәҡдимдәр ентекләп өйрәнелеп, орфографияны бер ни тиклем үҙгәртеү проекты эшләнә һәм Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы тарафынан раҫланып, 1982 йылда матбуғатта баҫтырып сығарыла[2].

Был осорҙа башҡорт теле фонетикаһындағы позицион һәм комбинаторлы үҙгәрештәрҙе, ритмик төркөмдәрҙе, һүҙ, фраза, логик һәм эмфатик баҫымдарҙы, башҡорт һөйләү телмәренең мелодикаһын ентекләп өйрәнеп, Ж. Ғ. Кейекбаев хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфоэпияһының төҙөк системаға ҡоролған ҡағиҙәләрен эшкәртеп, китап итеп сығарҙы[3].

5. 1999 йылдан алып хәҙерге көнгә тиклемге осорҙа «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында»ғы Закондың ҡабул ителеүе һәм тормошҡа ашырылыуы, дәүләт теленең хоҡуҡи статусы башҡорт теленең ҡулланылыш даирәһен киңәйтергә, дәрәжәһен, абруйын күтәрергә мөмкинлек бирҙе.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теле артабанғы үҫеш, камиллашыу юлында (бигерәк тә морфология, синтаксис һәм лексика өлкәһендә) үҙенең бай һүрәтләү һәм биҙәкләү саралары, үҫешкән функциональ стилдәре, эшкәртелгән яҙыу һәм һөйләү төрҙәре, нормалары менән дөйөм халыҡ теленең иң юғары асылына әүерелде һәм ул бөгөнгө көндә дәүләт теле талаптарына тулыһынса яуап бирә.

---

[1] *Башҡорт* әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1940.
[2] *Башҡорт* әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1982.
[3] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө, 1964.

## ФОНЕТИКА

### *Башҡорт теле фонетикаһының өйрәнелеүе*

Башҡорт теленең фонетикаһын ғилми яҡтан яҡтыртыу, тәү сиратта, күренекле тел белгестәре Николай Константин улы Дмитриев, Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев кеүек ғалимдарҙың исемдәре менән бәйле. 1927 йылда Н. К. Дмитриевтың «Башҡорт теленең фонетикаһы буйынса этюдтар», 1928 йылда «Башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһенә ҡарата» тигән мәҡәләләре баҫылып сыға, ә инде 1948 йылда «Башҡорт теле грамматикаһы» исемле монографияһы донъя күрә. Был хеҙмәт фән донъяһында башҡорт теле ғилми нигеҙҙә системаға һалынған тәүге теоретик хеҙмәт була. Унда галим башҡорт теленең өндәренә физиологик, акустик һәм фонологик яҡтан характеристика бирә, тюркологияла тәүгеләрҙән булып башҡорт теленең *ҙ, ҫ, һ, ғ* фонемаларын өйрәнә, уларҙың тарихи үҫешен сағыштырма планда тикшерә; башҡорт телендәге сингармонизм күренешен һүрәтләй.

Башҡорт теле фонетикаһының төп мәсьәләләре артабан профессор Ж. Ғ. Кейекбаев тарафынан ентекле өйрәнелә. Уның бер-бер артлы «Башҡорт телендә интонация һәм баҫым системаһы» (1949), «Башҡорт телендә һүҙ башындағы ҡ–ғ һәм к–г өндәре тураһында», «Башҡорт теленең тартынҡы өндәр системаһы һәм уларҙың тарихи үҫеше» (1957), «Башҡорт теленең фонетикаһы: һуҙынҡы өндәр системаһы һәм сингармонизм» (1957), «Башҡорт телендә сингармонизм» (1958) исемле хеҙмәттәре донъя күрә. 1958 йылда «Башҡорт теленең фонетикаһы (тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе)» тигән монографияһы баҫылып сыға. Ғалим үҙенең тикшеренеүҙәрендә телмәр өндәрен физик һәм физиологик яҡтан ентекле өйрәнә, телмәр ағышында тартынҡы һәм һуҙынҡыларҙың позицион, комбинатор үҙгәрештәренә характеристика бирә, башҡорт һәм башҡа төрки телдәрҙең характерлы үҙенсәлеге булған сингармонизм күрене-

шен һүрәтләй, башҡорт теленең баҫым системаһын ентекле яҡтырта, телмәр аппаратын һәм уның ағзаларының функцияларын асыҡлай һ. б. Билдәле булыуынса, хәҙерге тел ғилемендә фонема теорияһы иң ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе һанала. Ж. Ғ. Кейекбаев тәүгеләрҙән булып фонема төшөнсәһенә асыҡлыҡ индерә, уны һүҙҙәрҙең тышҡы формаһын барлыҡҡа килтереүсе һәм уларҙың мәғәнәһен айырыусы минималь берәмек итеп ҡарай һәм, башҡорт теленең фонемалар составын бөтөн бер система булараҡ анализлай.

Башҡорт теленең ҡайһы бер мөһим мәсьәләләре Т. М. Ғарипов хеҙмәттәрендә хәл ителә. Ғалим, Урал-Волга буйы ҡыпсаҡ телдәрен сағыштырып, башҡорт теленең өндәр системаһы үҫешенә асыҡлыҡ индерә һәм, В. В. Радловтың башҡорт теле, нигеҙҙә, татар теленең бер диалекты ғына тигән хаталы ҡарашын юҡҡа сығара[1]. Т. М. Ғарипов шулай уҡ, башҡорт һәм татар фонемаларының тәбиғәтен өйрәнеп, уларҙың аллофондарын айыра, составында күп һанлы һөйләштәре булған был ике ҡәрҙәш телдең өндәр системаһы бер-береһенән ныҡ айырылыуын иҫбатлай.

Башҡорт фонетикаһы 1981 йылда Мәскәүҙә донъя күргән «Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең грамматикаһы» исемле коллектив монографияла ентекле өйрәнелә. А. А. Юлдашев тарафынан яҙылған «Башҡорт әҙәби теленең өндәр системаһы», «Башҡорт алфавиты һәм орфографияһы», Н. Х. Ишбулатов әҙерләгән «Телмәр ағышында һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәреше» тигән бүлектәрҙә алып барылған тикшеренеүҙәр хәҙерге башҡорт теленең фонетикаһы өлкәһендә булған бик күп мөһим мәсьәләргә асыҡлыҡ индереүгә булышлыҡ итте. Хеҙмәттә башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы фонемалар системаһы ентекле өйрәнелгән, фонемаларҙың төрлө варианттары йәки аллофондарына тулы характеристика бирелгән.

Башҡорт фонетикаһы педагогия институты студенттары өсөн яҙылған «Хәҙерге башҡорт теле» (1986) дәреслегендә тулы һәм системалы итеп өйрәнелә. К. Ғ. Ишбаев тарафынан яҙылған «Фонетика һәм фонология», «Орфоэпия», «Графика», «Орфография» бүлектәрендә хәҙерге башҡорт теленең өндәр (фонемалар) системаһы, телмәрҙең фонетик киҫәктәре, телмәр ағышында фонемаларҙың үҙгәреше бирелә, хәҙерге башҡорт теленең орфоэпияһы, графикаһы, орфографияһы яҡтыртыла һәм системалаштырыла.

---

[1] *Грамматика* современного башкирского литературного языка. М.: Наука, 1981. С. 14.

Башҡорт фонетикаһының ҡайһы бер мәсьәләләре М. Билалов, М. А. Ҡулаев һәм М. Моратовтың хеҙмәттәрендә яҡтыртылған. Т. Г. Байышев, Н. Х. Ишбулатов, Х. Г. Йосопов, Н. Х. Мәксүтова, С. Ф. Миржанова, У. М. Яруллина, Р. Ғ. Аҙнағолов һ. б. диалектологтарҙың хеҙмәттәрендә теге йәки был һөйләш үҙенсәлектәрен яҡтыртҡанда башҡорт теленең өндәр системаһын өйрәнеүгә лә иғтибар бүленә. Хәҙерге башҡорт теле ғилемендә башҡорт теленең тартынҡы өндәренең тарихи үҫеше Ф. Ғ. Хисамитдинованың, Л. К. Ишкилдинаның ғилми тикшеренеүҙәрендә ентекле өйрәнелә.

Беҙ был бүлекте яҙғанда Ж. Ғ. Кейекбаевтың юғарыла күрһәтелгән «Башҡорт теленең фонетикаһы (тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе)» (1958) һәм «Хәҙерге башҡорт теле» (Өфө, 1986) исемле хеҙмәттәргә нигеҙләндек.

### *Фонетика тураһында төшөнсә*

**Фонетика** (грекса: *phone* – «өн, тауыш», *phonetike* – «өндәр тураһындағы фән») – тел ғилеменең телмәр өндәрен өйрәнә торған бүлеге.

Фонетика телмәр өндәренең яһалышын, акустик һәм артикуляцион үҙенсәлектәрен, уларҙың телмәр ағышында үҙгәрешен, ижек, баҫым, интонация мәсьәләләрен тикшерә. Башҡорт теленең өндәр системаһын өйрәнеүҙең түбәндәге практик мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә лә әһәмиәте ҙур: төп башҡорт өндәренең, шулай уҡ сит телдәрҙән үҙләштерелгән өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен билдәләү; башҡорт теленең һөйләштәрен һәм диалекттарын өйрәнеү; диалект шарттарында әсә теленең әҙәби орфоэпик нормаларын булдырыу; башҡорт теленең алфавиты һәм орфография ҡағиҙәләрен камиллаштырыу һ. б.[1]

Өн – телмәрҙең тарҡалмай торған иң ябай фонетик берәмеге. Шул уҡ ваҡытта телмәр өндәре – бик ҡатмарлы күренеш, сөнки һәр бер телмәр өнө бер үк ваҡытта өс аспектта, йәғни акустик (физик), артикуляцион (физиологик) һәм функциональ (лингвистик) аспекттарҙа тасуирлана.

Телмәр өндәренең ошо үҙенсәлектәренән сығып, фонетика өс өлөшкә бүленә: 1) акустик фонетика – телмәр өндәренең физик үҙенсәлектәрен, йәғни акустикаһын өйрәнеүсе бүлек; 2) артикуляцион фонетика – телмәр өндәренең яһалыу рәүешен, йәғни ар-

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 78-се б.

тикуляцияһын өйрәнә торған бүлек; 3) функциональ фонетика (фонология) – телмәр өндәренең аралашыу процесындағы лингвистик функцияһын өйрәнә.

## Фонетик транскрипция

Өндәр яҙыуҙа хәрефтәр менән билдерелә. Тел ғилемендә хәреф һәм өн мөнәсәбәтен, айырым хәрефтәрҙең әйтелеш һәм уҡылыш ҡағиҙәләрен махсус фән – **графика** өйрәнә.

Ғәҙәттәге орфографик яҙыу аша һөйләү телмәрен бөтә нескәлектәре менән тулыһынса биреп еткереп булмай, сөнки телдәге бөтә өндәр өсөн дә графикала тейешле хәрефтәр һәм тамғалар етешмәй. Шуға күрә лә, фәнни маҡсаттарҙа телдең өн составын теүәл биреү өсөн, **транскрипция** (латинса: *transcriptio* – «күсереп яҙам») тип аталған махсус яҙыу төрө ҡулланыла.

**Фонетик транскрипция** – һөйләү телмәренең үҙенсәлектәрен күрһәтеү өсөн тәғәйенләнгән махсус яҙыу төрө. Ул, алфавиттағы булған хәрефтәрҙән тыш, өҫтәлмә диакритик (грекса: *diakritikos* – «айырмалы») тамғалар һәм яңы хәрефтәр алыу, ҡайһы бер хәрефтәрҙе, кирәкһенсә, төшөрөп ҡалдырыу юлы менән тормошҡа ашырыла. Транскрипция тел ғилемендә төрлө фонетик күренештәрҙе (өндәр системаһы, уларҙың үҙгәреше, әйтелеш үҙенсәлектәре һ. б.), һөйләш һәм диалекттарҙы, шулай уҡ сит телдәрҙе өйрәнгәндә ҡулланыла.

Тел ғилемендә транскрипцияның фонетик һәм фонематик төрҙәре киң таралған. Фонетик транскрипция өндәрҙе, уларҙың төп варианттарын тейешле бер хәреф һәм тамға аша сағылдыра. Фонематик транскрипция фонемаларҙы ғына сағылдыра.

Практикала күберәк фонетик транскрипция ҡулланыла. Транскрипцияның төп ҡағиҙәләре түбәндәгеләр:

1) транскрипцияланған телмәр өлөшө – өн, өндәр ҡушылмаһы, ижек, һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, фраза, текст – квадрат йәйәләр эсенә алына: *ба*[в]*ай*, [йа]*рҙам*, [бейек], [изге ўатаным] һ. б.;

2) баш хәрефтәр ҡулланылмай;

3) тыныш билдәләре ҡуйылмай. Улар урынына пауза тамғалары ҡулланыла: | (бер вертикаль һыҙыҡ) бәләкәй паузалар өсөн; ‖ (ике вертикаль һыҙыҡ) ҙур паузалар өсөн; ⌒ (дуға) ике һүҙ паузаһыҙ, бер интонация менән әйтелгәндә; һорау һәм өндәү билдәләрен ҡалдырырға мөмкин;

4) бер хәреф тик бер генә өндөң билдәһе булып йөрөй, йәғни һәр өн тик бер генә хәреф менән күрһәтелә;

5) өндө белдермәгән хәрефтәр һәм, киреһенсә, билдәле бер тамға ҡабул итмәгән өндәр булмай;

6) транскрипция билдәләре һәр конкрет осраҡта ишетелә торған өндәрҙе бирергә тейеш, шуға күрә транскрипциялa барлыҡ позицион һәм комбинатор үҙенсәлектәр сағылыш таба;

7) баҫым билдәһе һәр саҡта ла ҡуйыла: төп баҫым бер ҡыя һыҙыҡ менән, өҫтәлмә баҫым ике ҡыя һыҙыҡ менән күрһәтелә: [аҡы́л], [ҡӳштирә́к].

8) һүҙҙәге ҡуш тартынҡылар өҫтөнә горизонталь һыҙыҡ ҡуйылған бер хәреф аша йәки ике шул уҡ хәреф менән белдерелә: аҙаҡҡы [аҙаҡ̄ы] йәки [аҙаҡҡы].

9) төп башҡорт һүҙҙәрендәге һуҙынҡылар өсөн ғәҙәттәге *а, ә, ы, и, о, ө, у, э(е),* хәрефтәре ҡулланыла, тик рус теленән ингән өндән айырыу өсөн, башҡорт телендәге [о] өнөн белдергәндә, хәреф өҫтөнә уң яҡтан бәләкәй *о* хәрефе яҙыла [о$^{о}$]: *ҡорос* [ҡо$^{о}$ ро$^{о}$с]; [э] һуҙынҡыһын белдергәндә башҡорт теленең графикаһына ярашлы, һүҙ башында [э]: [эш], [эл], һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында [е] билдәһе яҙыла: [телем], [кеше], [йелек], [белеме];

10) рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге [о] өнө өсөн ғәҙәттәге *о* хәрефе; [ы] өнө өсөн өҫтән уң яғында *и* хәрефе булған *ы* хәрефе [ы$^{и}$], [э] өнө өсөн өҫтән уң яғында *и* хәрефе булған *э* хәрефе алына: *полк,* [полк], *тыл* [ты$^{и}$л], *эпос* [э$^{и}$пъс], *тема* [т'э$^{и}$мъ].

11) рус теленән ингән һүҙҙәрҙә редукцияға бирелгән баҫымһыҙ һуҙынҡылар беренсе баҫым алды ижегендә һәм һүҙ башында торғанда түбәндәгесә белдерелә:

баҫымһыҙ [а] фонемаһы – өҫтөнә ҡыйыҡса (^) ҡуйылған *а* хәрефе менән: *вагон* [ва̂го́н], *актёр* [а̂кт'о́р];

баҫымһыҙ [о] фонемаһы – ғәҙәттәге *а* хәрефе менән: *мопед* [мап'э́т], *орбита* [арби́тъ];

баҫымһыҙ [э] фонемаһы – өҫтән уң яғында бәләкәй *и* хәрефе булған *э* хәрефе менән [э$^{и}$ ]: рекорд [р'э$^{и}$ко́рт], экран [э$^{и}$кра́н].

12) фонетик транскрипциялa *я, ю, е, ё* хәрефтәре ҡулланылмай, улар түбәндәгесә күрһәтелә:

| я | ю |
|---|---|
| [йа]: *ялҡын* [йа́лҡын] | [йу]: юрған [йурға́н] |
| ['а]: *башня* [ба́шн'ъ] | ['у]: *костюм* [каст'у́м] |
| **ё** | **е** |
| [йо]: ёл*ка* [йо́лка] | [йе]: *еләк* [йелә́к] |
| ['о]: *актёр* [акт'о́р] | [э$^{и}$]: *текст* [тэ$^{и}$кс] |

13) ышҡыулы тел уртаһы тартынҡыһы йот өнө ғәҙәттәге *й* хәрефе менән белдерелә: [ҡайт], [йалҡын], [уй];

14) ышҡыулы ике ирен тартынҡыһы уау өнө өсөн [ў], билдәләре алына: *ваҡыт* [ўаҡыт], *вәкил* [ўәкил], *ауыл* [аўыл], кейәү [кейәў].

15) шартлаулы тамаҡ төбө тартынҡыһы замма өнө юл өҫтөндәге өтөр (апостроф) менән билдәләнә: *тәьҫир* [тә'ҫир], *мәсьәлә* [мәс'әлә], *маъмай* [ма'май];

16) **ъ** һәм **ь** хәрефтәре рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге редукцияға бирелгән ҡыҫҡа әйтелешле баҫымһыҙ һуҙынҡыларҙы белдереү өсөн ҡулланыла, бындай өндәр беренсе баҫым алды ижегенән башҡа баҫымһыҙ ижектәрҙә әйтеләләр: *парта* [па́рта], *карта* [ка́рта], *педагогика* [п'иᵊдаго́г'ика];

17) рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге [ц], [ч], [щ] өндәре өлөштәргә тарҡатылмайынса, *ц, ч, щ* хәрефтәре аша бирелә: [цыркул'], [чапа́йэф], [що́тка].

Фонетик транскрипция өлгөһө:

*Һүҙ көсөнөң, һәр ваҡыт ҡабатлап, иҫкәртеп-әйтеп тороуҙың тәьҫире көслө икән, тәрбиә эшендә был ысулды файҙалана һәм әсәләр тәрбиәһе аша халҡыбыҙ генофондын яҡшыртыуға өлгәшә аласаҡбыҙ. Ә бала йөрәгенә рухи аң, халҡыңдың киләсәге хаҡында хәстәрлек тойғоһо һалыу әсәйҙәрҙән башлана* (М. Бураҡаева).

[һүҙ көсөнөң | һәр‿уаҡыт ҡаватла́п | иҫкәрте́п әйте́п тороу́ҙың тә'ҫире́ көслө́ икән | тәрвийә́ эшендә́ | был ысулды файҙалана́ | һәм | әсәләр тәрвийәһе́ аша́ | халҡывыҙ г'ьна фондын йаҡшыртыуға өлгәшә‿аласаҡбыҙ ‖ ә бала́ йөрәгенә́ рухи́ аң | халҡыңдың киләсәге́ хаҡында́ хәстәрле́к тоᵒйғоᵒһоᵒ һалыу́ | әсәйҙәрҙән башлана́ ‖]

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ӨНДӘР (ФОНЕМАЛАР) СИСТЕМАҺЫ

### Телмәр өндәренең акустик билдәләре

Өндәрҙең физик билдәләре, йәғни ишетелеше физиканың акустика (грекса: *akusticos* – «ишетелә торған») бүлегендә өйрәнелә. Тәбиғәттәге төрлө тауыш, шау, ауаздар һауа тулҡындарының тирбәлеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Телмәр өндәре – телмәр органдарының, атап әйткәндә, тауыш ярыларының үпкәнән килгән һауа ағымы тәьҫирендә тирбәлеүҙәре һөҙөмтәһе ул. Үпкәнән килгән һауа ағымының ҡыҫылыуы һәм тулҡын кеүек таралып китеүе билдәле бер юғарылыҡҡа, көскә, тембрға, оҙонлоҡҡа эйә булған өн булып ишетелә.

Физик (акустик) тәбиғәте буйынса телмәр өндәре тауыш тулҡындарын тәшкил итә. Тәбиғәттәге башҡа тауыш, шау һәм ауаздар кеүек үк, телмәр өндәренә лә, йәғни кеше тауышына, юғарылыҡ, көс, тембр һәм оҙонлоҡ тип йөрөтөлгән акустик билдәләр хас. Тирбәлеш тулҡындары, кимографтар, осциллографтар, электр спектрографы ярҙамында яҙылып, өндөң акустик составын, физик төҙөлөшөн билдәләргә мөмкинлек бирә. Кимограф (грекса: *komy* – «тулҡын», *grapho* – «яҙам») – айырым өндәрҙе әйткәндә үпкәнән килгән һауа ағымының тирбәлеү тулҡындарын махсус лентаға яҙа торған аппарат; осциллограф өн тирбәлешен, электр тогының тирбәлештәренә әйләндереп теркәй һәм билдәле бер ҡыя һыҙыҡ ярҙамында күрһәтә; электр спектографы өндөң физик төҙөлөшөн күрһәтә.

Теге йәки был өндө әйткәндә үпкәнән килгән һауа ағымының тирбәлеше тигеҙ, ритмик тәртиптә һәм, киреһенсә, тарҡау, тәртипһеҙ булырға мөмкин. Тигеҙ оҙонлоҡтағы ритмик тирбәлештәр һөҙөмтәһендә тон (йәки тауыш) барлыҡҡа килә. Тон (йәки тауыш) сығанағы булып тауыш ярылары хеҙмәт итә. Телмәр органдарының ритмик булмаған, тарҡау, тәртипһеҙ тирбәлештәре һөҙөмтәһендә **шау** барлыҡҡа килә. Шау һауа ағымының телмәр аппаратына ышҡылыуы, шартлауы арҡаһында ла тыуырға мөмкин.

Өндәрҙә тон (йәки тауыш) һәм шауҙың ҡатнашлығы төрлө була. Акустик яҡтан һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр тон һәм шауҙың ҡатнашыу-ҡатнашмауы менән айырыла. Һуҙынҡы өндәр, нигеҙҙә, тик тондан (йәки тауыштан) ғына тора, ә тартынҡыларҙы әйткәндә шау өҫтөнлөк ала[1].

Телмәр өндәренең **юғарылығы** тауыш ярыларының билдәле бер ваҡыт эсендә тирбәлеү йышлығына бәйләнгән: ваҡыт берәмегенә ни тиклем күберәк тирбәлеү тура килһә, тауыш (өн) шул тиклем юғарыраҡ була; киреһенсә, ваҡыт берәмегенә ни тиклем аҙыраҡ тирбәлеү тура килһә, тауыш (өн) шул тиклем түбәнерәк була. Тирбәлеүҙең йышлығы герц (Гц) менән үлсәнә: бер герц бер секунд эсендә бер тирбәлеүгә тап килә.

Өндәрҙең **көсө** (йәки интенсивлығы) тауыш ярыларының тирбәлеү аралығына (амплитуда), йәғни һауа тулҡындарының оҙонлоғона бәйләнгән: тирбәлеү аралығы ни тиклем киң булһа, өн (тауыш) шул тиклем көслө була. Өндәрҙең көсө (йәки интенсивлығы) децибел (дц) тигән берәмек менән үлсәнә.

Өндәрҙең **оҙонлоғо** тауыш ярыларының билдәле бер ваҡыт эсендә тирбәлеү дауамлылығы менән бәйле. Өндөң оҙонлоғо миллисекунд менән үлсәнә.

---

[1] *Татар* грамматикасы. Т. 1. М.: Инсан, Казан: Фикер, 1998. 41нче б.

Өндөң **тембры** (французса: *timbre* – «тауыш сифаты») тип уны сифаты буйынса дөйөм билдәләүгә әйтәләр. Ул өндөң юғарылығына, көсөнә һәм оҙонлоғона, йәки тауыш ярыларының айырым өлөштәре тирбәлеүҙән барлыҡҡа килгән өҫтәмә тондарға (обертондарға) бәйле була. Һәр бер кешенең тауыш тембры унын өндәрҙе әйтеү үҙенсәлектәренә ҡарап билдәләнә. Мәҫәлән, тембр үҙенсәлектәренә ҡарап, кеше тауышын (шулай уҡ музыка ҡоралдарының яңғырашын) сопрано, контральто, тенор, баритон, бас тигән төп төрҙәргә бүлеп йөрөтәләр. Телмәр өндәренең акустик үҙенсәлектәрен лингвистар ғына түгел, физиктар, математиктар һәм башҡалар ҙа өйрәнә.

**Һуҙынҡы өндәрҙең акустик билдәләре.** Һуҙынҡы өндәрҙең характерын (спектрын) билдәләү өсөн, артикуляция шарттарынан сығып, уларҙың тирбәлеү йышлығын телдең горизонталь һәм вертикаль торошонан ҡарап ике кимәлдә үлсәйҙәр.

Өндәрҙең юғарылығы телдең горизонталь торошо менән бәйле, шунлыҡтан артҡы рәт һуҙынҡылары [о°], [о], [у] юғарылығы буйынса иң түбән өндәр (800 – 600 Гц); алғы рәт һуҙынҡылары [и], [э(е)], [э$^{и}$], [ә] – иң юғары өндәр (2400 – 1800 Гц); ә урта рәт һуҙынҡылары [а], [ө], [ү], [ы], [ы$^{и}$] уларҙың араһында торалар (1800 – 1000 Гц)[1].

Телдең вертикаль торошонан сығып ҡарағанда, һуҙынҡы өндәрҙең тирбәлеү йышлығы түбәндәгесә килеп сыға: 1) [а], [ә] – 700 – 500 Гц (түбән күтәрелеш йәки киң һуҙынҡылар); 2) [э(е)], [э$^{и}$], [ы], [о°], [о], [ө] – 500 – 400 Гц. (урта күтәрелеш йәки ярым тар / ярым киң һуҙынҡылар); 3) [и], [ы$^{и}$], [у], [ү] – 300 Гц (өҫкө күтәрелеш йәки тар һуҙынҡылар)[2].

Башҡорт теленең вокализм системаһында оҙонлоҡ билдәһе буйынса, мәҫәлән, оҙон һәм ҡыҫҡа әйтелешле һуҙынҡыларҙы айырырға мөмкин: рус теленән үҙләштерелгән һуҙынҡылар [ы$^{и}$], [о], [э$^{и}$] төп башҡорт һуҙынҡыларына [ы], [о°], [э(е)] ҡарағанда оҙонораҡ әйтелә[3]. Сағыштырығыҙ:

| рус теленән ингән һүҙҙәр: | төп башҡорт һүҙҙәре: |
|---|---|
| *тон* [то:н] | *тон* [то°н] |
| *тыл* [ты$^{и}$:л] | *тын* [тын] |
| *эра* [э$^{и}$:ра] | *эре* [эре] |

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 79-сы б.

[2] Шунда уҡ.

[3] Шунда уҡ.

Баҫымлы һәм баҫымһыҙ һуҙынҡылар ҙа көсө, оҙонлоғо буйынса ныҡ айырылалар: баҫымлы өн көслө һәм оҙон әйтелә, баҫымһыҙ өн, киреһенсә, көсһөҙ һәм ҡыҫҡа әйтелә. Сағыштырығыҙ: ҡала́ [ҡала́:], әсә́й [әсә́:й], боло́н [бо°ло́°:н] һ. б.

**Тартынҡы өндәрҙең акустик билдәләре.** Акустик яҡтан тартынҡы өндәр тон һәм шауҙың ҡатнашыу дәрәжәһе буйынса айырыла. Әйтелгәндә тон һәм шауҙың ҡатнашлығына ҡарап, башҡорт теленең системаһында **талғын** (йәки **сонор**) һәм **шаулы** тартынҡыларҙы айырып йөрөтәләр. Талғын (йәки сонор) тартынҡылар һуҙынҡыларға яҡын, уларҙы әйткәндә тон шауға ҡарағанда күберәк ҡатнаша. Башҡорт телендә ете талғын (йәки сонор) өн бар: [м], [н], [л], [р], [й], [ў], [ң]. Ҡайһы саҡта [й], [ў] тартынҡыларын ярым һуҙынҡылар тип тә йөрөтәләр.

Шаулы тартынҡыларҙы әйткәндә шау тонға ҡарағанда күберәк ҡатнаша, йә булмаһа улар тик шауҙан ғына ла торорға мөмкин. Башҡорт телендә шаулы тартынҡылар түбәндәгеләр: [б], [п], [д], [т], [г], [к], [ғ], [ҡ], [ ʾ ], [ц], [ч], [в], [ф], [ҙ], [ҫ], [з], [с], [ж], [ш], [щ], [х], [һ]. Шаулы тартынҡылар *яңғыраү* һәм *һаңғыраү* төрҙәргә бүленә. Яңғыраү тартынҡыларҙы әйткәндә тон ҡатнаша, ә һаңғыраү тартынҡылар бары тик шау ҡатнашлығында яһала. Яңғыраү тартынҡыларға сонор өндәр ҙә инә.

Лингвистик әҙәбиәттә телмәр өндәренең яһалышында тауыштың ҡатнашыу-ҡатнашмауына ҡарап, уларға акустик яҡтан характеристика бирелә.

## ТЕЛМӘР ӨНДӘРЕНЕҢ АРТИКУЛЯЦИОН БИЛДӘЛӘРЕ

Артикуляция тип, ғәҙәттә, һөйләү органдарының хәрәкәте йәки эшмәкәрлеге арҡаһында телмәр өндәренең яһалыуына әйтәләр. Ябайлаштырып әйткәндә, **артикуляция** (латинса: articulatio – асыҡ итеп әйтеү) – телмәр өндәренең яһалышы йәки әйтелеше тигән һүҙ[1]. Телмәр өндәрен, ғәҙәттә, уларҙың артикуляция рәүешенә һәм артикуляция урынына ҡарап классификациялайҙар. Был – өндәрҙең физиологик характеристикаһы тип йөрөтөлә.

**Артикуляция рәүеше.** Телмәр өндәренең яһалышында, үпкәнән килгән һауа телмәр органдарының ниндәй урынында, ни рәүешле ҡаршылыҡҡа осрауына ҡарап, өндәрҙе артикуляция рәүеше яғынан классификациялайҙар. Үпкәнән килгән һауаның

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 10-сы б.

телмәр органдарында теге йәки был өндө ни рәүешле яһауына артикуляция рәүеше тиҙәр.

Үпкәнән килгән һауа, ауыҙ ҡыуышлығы аша үткәндә, төрлөсә ҡаршылыҡҡа осрарға мөмкин. Мәҫәлән, [ф] өнөн әйткәндә, үпкәнән килгән һауа аҫҡы ирен менән өҫкө тештәр араһындағы тар ғына ектән ҡыҫылып, ышҡылып сыға. Икенсе төрлө әйткәндә, аҫҡы ирен менән өҫкө тештәр араһында ышҡылыу барлыҡҡа килә. Шуға күрә [ф] өнөн артикуляция рәүеше буйынса ышҡыулы (фрикатив) тартынҡы тип атайҙар. Әгәр [б] өнөн алып ҡараһаҡ, ул өндө әйткәндә, үпкәнән килгән һауаны ирендәр ауыҙ ҡыуышлығында ҡаплап тора һәм, ирендәр ҡапыл асылып киткәндә, шартлауға оҡшаған бер күренеш барлыҡҡа килә[1]. Шуға күрә [б] өнө артикуляция рәүеше яғынан шартлаулы тартынҡы өн тип атала.

**Артикуляция урыны.** Телмәр өндәренең яһалышында үпкәнән килгән һауаның телмәр органдарының ҡайһы урынында ҡаршылыҡҡа осрауына ҡарап, өндәрҙе **артикуляция урыны** яғынан классификациялайҙар[2]. Мәҫәлән, юғарыла артикуляция рәүеше ҡаралып үткән [ф], [б] тартынҡылары телмәр органдарының төрлө урындарында яһала: шул уҡ [ф] тартынҡы өнөн әйткәндә, һауа аҫҡы ирен менән өҫкө тештәр араһындағы тар ектән ышҡылып сыға. Шуға күрә [ф] өнө ирен-теш тартынҡыһы тип атала. Әгәр [б] өнөн алһаҡ, был өн ирендәр ярҙамында яһала: [б] өнөн әйткәндә, үпкәнән килгән һауа, ирендәр ҡаршылығына осрап, бер аҙ ҡапланып тора, һәм ирендәр ҡапыл асылып киткәндә барлыҡҡа килә. Шуға күрә [б] өнө ирен тартынҡыһы тип атала.

Телмәр өндәрен артикуляция рәүешенә һәм артикуляция урынына ҡарап классификациялау күберәк тартынҡы өндәргә ҡағыла, сөнки тартынҡы өндәрҙең яһалышында үпкәнән килгән һауа телмәр органдарының төрлө урындарында төрлөсә ҡаршылыҡҡа осрай.

**Телмәр аппараты.** Телмәр өндәренең артикуляцияһы хаҡында һүҙ барғанда, беренсе сиратта телмәр ағзаларының эшмәкәрлеге иҫәпкә алына, сөнки телмәр өндәре кешенең һөйләү органдары ярҙамында яһала. Телмәр өндәре яһалыуҙа ҡатнашыусы органдар йыйылмаһы телмәр аппараты тип атала. Телмәр аппаратына (киң мәғәнәлә) нервы системаһы, ишетеү һәм күреү органдары, телмәр органдары инә. **Телмәр органдарына** (йәки

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 11-се б.

[2] Шунда уҡ.

тар мәғәнәлә телмәр аппараты) тын алыу органдары, тамаҡ, ауыҙ һәм танау ҡыуышлыҡтары инә.

Тын алыу органдарының (диафрагма, үпкәләр, бронхылар, трахея) төп функцияһы – һауа ағымы өрөү. Үпкәнән килгән һауа ағымы тауыш аппараты аша үтә. Тауыш аппараты тип тамаҡ төбөндәге кимерсәк һәм мускулдарҙан торған тауыш ярыларына әйтәләр. Тамаҡ ҡыуышлығынан үтеп, һауа артабан ауыҙ һәм танау ҡыуышлыҡтарына йүнәлә. Ауыҙ ҡыуышлығында өндәр яһалыу һәм уларға тембр үҙенсәлектәре биреү өсөн иң мөһим булған органдар урынлашҡан. Улар: өҫкө һәм аҫҡы ирендәр, өҫкө һәм аҫҡы тештәр, альвеолалар тип йөрөтөлгән өҫкө тештәр нигеҙе эргәһендәге ҡалҡыу урындар (латинса: *alveolus* – «уйым»), ҡаты аңҡау (алғы һәм урта өлөштән тора), йомшаҡ аңҡау, тел һәм бәләкәй тел. Телдең осон, өҫтөн һәм төбөн айырып йөрөтәләр; тел өҫтө үҙе алғы, урта һәм артҡы өлөштәргә бүленә. Һауа ағымы ауыҙ ҡыуышлығы аша үткәндә, тел һәм ирендәрҙең торошона ҡарап, төрлө һуҙынҡы өндәр барлыҡҡа килә. Ә инде телдең тештәргә, аңҡауға ҡарата төрлөсә торошо һәм ирендәрҙең ҡатнашлығы тартынҡы өндәрҙең яһалышында төп ролде башҡара. Әгәр йомшаҡ аңҡау менән бәләкәй тел түбән төшөп, ауыҙ ҡыуышлығын ҡаплаһа, үпкәнән килгән һауа ағымы танау ҡыуышлығы аша үтә, был саҡта танау өндәре яһала[1].

Өндәр яһалышындағы ҡатнашлығына ҡарап, телмәр органдары актив һәм пассив өлөштәргә бүлеп йөрөтөлә. **Актив телмәр** органдары хәрәкәтсән булалар һәм өндәр яһалышында төп эште башҡаралар. Актив органдарға тауыш ярылары, тел, ирендәр, йомшаҡ аңҡау, бәләкәй тел, йотҡолоҡ (фаринкс), боғаҙ япҡысы, шулай уҡ тотош аҫҡы яңаҡ инә. **Пассив телмәр органдары** хәрәкәтсән түгел, өндәр яһалғанда улар актив органдарҙың артикуляция урыны булып тора. Пассив органдар түбәндәгеләр: тештәр, альвеолалар, ҡаты аңҡау, тамаҡ, шулай уҡ тотош өҫкө яңаҡ.

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 80-се б.

***Телмәр аппаратының өҫкө өлөшө***



## ТЕЛМӘР ӨНДӘРЕНЕҢ ФУНКЦИОНАЛЬ БИЛДӘЛӘРЕ

### Фонология. Фонема тураһында төшөнсә

Телмәр өндәренең телдә билдәле бер функциялар башҡарыуы уларҙың функциональ (лингвистик) аспектын тәшкил итә. Телмәр өндәре функциональ йәки лингвистик аспектта ҡаралғанда **фонема** (грекса: *phoneme* – «өн») тип йөрөтөлә. Улар телдең өндәр системаһының төп берәмеген тәшкил итә. Тел ғилеменең фонемаларҙы өйрәнеүсе бүлеге **фонология** (грекса: *phone* – «өн, тауыш», *logos* – «фән, тәғлимәт») тип атала.

Фонема – телдең өндәр системаһының морфемалар һәм һүҙҙәр төҙөй алырлыҡ һәм уларҙың мәғәнәләрен билдәләрлек иң бәләкәй берәмеге. Фонемалар һөйләү процесында һүҙҙәрҙе, уларҙың өлөштәрен (морфемаларҙы), һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе төҙөү өсөн генә ҡулланылмай, ә уларҙың мәғәнәләрен айырыу функцияһын да башҡара. Мәҫәлән, *бар – баҫ* һүҙҙәренең мәғәнәләре бер-береһенән [р] һәм [ҫ] тартынҡылары, ә *тор – төр* һүҙҙәре [о] һәм [ө] һуҙынҡылары менән айырыла. Теләһә ниндәй телмәр өнөн фонемаға һанап булмай, фонема – ул айырым телгә хас булған һәм морфемаларҙың, һүҙҙәрҙең мәғәнә айырмалыҡтарын билдәләй алырлыҡ телмәр өнө, дөрөҫөрәге, телмәр өндәренең типик варианты[1]. Мәҫәлән, төрлө артикуляцион шарттарға ҡарап, башҡорт телендә [а] фонемаһының төрлөсә әйтелеше билдәле: *арыш* [а°рыш], *ҡорал* [ҡо°ра°л], *бригадирҙар* [бригадирҙаᵊр]. Был осраҡтарҙа төрлөсә әйтелгән өс өн барлығын күҙәтәбеҙ: 1) [а°] – һүҙҙең беренсе ижегендә иренләшкән [а] өнө; 2) [а°] – һүҙҙең тәүге ижегендәге [о°] өнө йоғонтоһонда иренләшкән икенсе ижектәге [а] өнө; 3) [аᵊ] – [ә] өнөнә тартым әйтелешле [а] өнө. Ләкин улар үҙ аллы фонемалар түгел, тик [а] фонемаһының варианттары ғына.

Ошо билдәләрҙән сығып, хәҙерге башҡорт теленең өндәр (фонемалар) системаһында 41 фонема барлығын күрһәтергә була[2]. Артабан «өн» һәм «фонема» терминдарын ҡулланғанда, һәр осраҡта ла фонема төшөнсәһе күҙ уңында тотола.

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 81-се б.

[2] Күрһәтелгән хеҙмәт. 82-се б.

## Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр (фонемалар)

Телмәр өндәре (фонемалар) ике ҙур төркөмгә: һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленә. Тел ғилемендә йыш ҡына һуҙынҡылар системаһы – **вокализм** (латинса: *vocalis* – «һуҙынҡы өн»), ә тартынҡылар системаһы **консонантизм** (латинса: *consonantis* – «тартынҡы өн») тип йөрөтөлә.

Һуҙынҡылар һәм тартынҡылар бер-береһенән акустик, артикуляцион һәм функциональ яҡтан айырыла. Уларҙың төп айырмалығы түбәндәгеләр:

1) һуҙынҡылар тик тауыш ҡатнашлығында, ә тартынҡылар, нигеҙҙә, шау ҡатнашлығында яһала, тауыш ҡатнашлығы бик аҙ була;

2) талғын (сонор) тартынҡылар яһалғанда, тауыш өҫтөнлөк итә, шауҙың ҡатнашлығы аҙыраҡ була;

3) һуҙынҡыларҙы әйткәндә үпкәнән килгән һауа ағышы телмәр органдары аша, бер ниндәй ҡаршылыҡҡа осрамайынса, иркен үтә; ә инде тартынҡыларҙы әйткәндә, һауа ағымы үҙ юлында телмәр органдарының эше һөҙөмтәһендә төрлө ҡаршылыҡтарға осрай һәм шау барлыҡҡа килтерә;

4) һуҙынҡыларҙы әйткәндә тик саф тауыш ҡына ҡатнашһа, һаңғырау тартынҡыларҙы әйткәндә, киреһенсә, тауыш бөтөнләй ишетелмәй, улар тик шау ярҙамында яһалалар;

5) һуҙынҡылар яһалғанда үпкәнән килгән һауа ағымы көсһөҙ була, ә тартынҡыларҙы әйткәндә көсәйә, сөнки был саҡта уға үҙ юлында осраған ҡаршылыҡтарҙы үтергә кәрәк була;

6) һуҙынҡыларҙың яһалышында телдең горизонталь һәм вертикаль торошо төп ролде уйнаһа, тартынҡыларҙың сифатына артикуляция рәүеше һәм урыны ҙур йоғонто яһай;

7) бөтә һуҙынҡылар ҙа ижек яһай алыу һәләтенә эйә булһалар, тартынҡылар (талғын тартынҡыларҙан башҡалары) үҙ алдына ижек яһай алмайҙар[1].

## Һуҙынҡы фонемалар системаһы (вокализм)

Хәҙерге башҡорт телендә ун ике һуҙынҡы фонема бар. Шуларҙың туғыҙы – [а], [ә], [о°], [ө], [ы], [э(е)], [и], [у], [ү] – төп башҡорт һүҙҙәрендәге һуҙынҡылар булып тора: *атай* [атай], *әсәй* [әсәй], *болот* [бо°ло°т], *өкө* [өкө], *тыныс* [тыныс], *кейем* [кейем], *иләк* [иләк], *урам* [урам], *үлән* [үлән]; ҡалған өсөһө – [о], [ы$^{ц}$], [э$^{и}$] рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән ингән

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 82-се б.

һүҙҙәрҙә ҡулланыла: *полк* [полк], *музыка* [музыᶸка], *посылка* [посыᶸлка], *э́ра* [э́ᶤра], *э́пос* [э́ᶤпос].

Һуҙынҡы фонемаларҙы артикуляцияһы буйынса өс принцип нигеҙендә классификациялайҙар: 1) телдең горизонталь хәрәкәте, 2) телдең вертикаль хәрәкәте, 3) ирендәрҙең ҡатнашлығы.

**Телдең горизонталь хәрәкәте.** Был принципҡа ҡарап, һуҙынҡы фонемаларҙың яһалышында телдең ауыҙ ҡыуышлығында горизонталь хәрәкәте иҫәпкә алына. Телдең горизонталь хәрәкәте буйынса башҡорт телендә алғы рәт, урта рәт һәм артҡы рәт һуҙынҡыларын айырып йөрөтәләр.

***Алғы рәт*** һуҙынҡыларына [э(е)], [эᶤ], [и], [ә] фонемалары ҡарай. Алғы рәт һуҙынҡылары яһалғанда, тел алға килә, тел осо аҫҡы тештәргә тейә йәки яҡын килә, телдең урта өлөшө ҡаты аңҡауға күтәрелә.

***Урта рәт*** һуҙынҡыларына [а], [ө], [ү], [ы], [ыᶸ] фонемалары инә. Урта рәт һуҙынҡылары яһалғанда, тел артҡа табан аҙыраҡ ҡуҙғала, уның урта өлөшө юғары күтәрелә. Үҙҙәренең яһалышы буйынса [ө], [ү] фонемалары алғы рәт һуҙынҡыларына тартым әйтелә, [а], [ы], [ыᶸ] фонемалары әйтелештәре буйынса артҡы рәт һуҙынҡыларына яҡын. Шуның өсөн был һуҙынҡыларҙың тәүгеләрен ярым алғы рәт һуҙынҡылары, ә икенселәрен ярым артҡы рәт һуҙынҡылары тип тә атарға мөмкин булыр ине[1].

***Артҡы рәт*** һуҙынҡыларына [о°], [о], [у] фонемалары ҡарай. Артҡы рәт һуҙынҡылары яһалғанда, телдең артҡы өлөшө йомшаҡ аңҡауға күтәрелә, был саҡта телдең осо түбән төшә һәм аҫҡы тештәрҙең ҡаҙнаһына яҡыная.

Ҡайһы саҡта, телдең горизонталь торошо буйынса яһалыуҙарына ҡарап, һуҙынҡы фонемаларҙы **нәҙек** һуҙынҡыларға (алғы рәт һәм ярым алғы рәт фонемалары [и], [э(е)], [эᶤ], [ә], [ү], [ө] инә) һәм **ҡалын** һуҙынҡыларға (артҡы рәт һәм ярым артҡы рәт фонемалары [а], [о°], [о], [у], [ы], [ыᶸ] ҡарай) бүлеп йөрөтәләр[2].

**Телдең вертикаль хәрәкәте.** Был йәһәттән фонемалар яһалғанда телдең аңҡауға күтәрелеү кимәле һәм шул саҡта ауыҙ ҡыуышлығының үҙгәреүе иҫәпкә алына. Һуҙынҡы өндәр әйтелгәндә, тел аңҡауға табан өҫкә күтәрелеп, тел менән ҡаты аңҡау араһында аралыҡ бик тар ҡалһа, ***өҫкө күтәрелеш*** (йәки ***тар***) һуҙынҡылар барлыҡҡа килә. Өҫкө күтәрелеш (тар) һуҙынҡылар түбәндәгеләр: [и], [ыᶸ], [у], [ү].

Һуҙынҡы өндәр әйтелгәндә тел ауыҙ ҡыуышлығының урта тәңгәлендә торһа, ***урта күтәрелеш*** (***ярым тар*** йәки ***ярым киң***)

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 83-сө б.

[2] Шунда уҡ.

һуҙынҡылар яһала. Урта күтәрелеш (ярым тар йәки ярым киң) һуҙынҡыларға түбәндәге фонемалар ҡарай: [о], [о°], [ө], [ы], [э], [э$^{и}$].

Һуҙынҡы өндәр әйтелгәндә, тел ауыҙ ҡыуышлығының түбәндәге өлөшөндә тороп, аңҡау менән тел араһында киң аралыҡ ҡалһа, ***түбән күтәрелеш*** (йәки ***киң***) һуҙынҡылар барлыҡҡа килә. Түбән күтәрелеш (киң) һуҙынҡыларға [а], [ә] фонемалары инә.

**Ирендәрҙең ҡатнашлығы.** Был принцип буйынса һуҙынҡы фонемаларҙың яһалышында ирендәрҙең ҡатнашлығы йәки лабиализацияның (латинса: labia – ирендәр) булыуы йәки булмауы иҫәпкә алына.

Ирендәрҙең актив ҡатнашлығы һөҙөмтәһендә яһалған һуҙынҡы фонемалар ***иренләшкән*** (йәки ***лабиализацияланған***) һуҙынҡылар тип атала. Иренләшкән һуҙынҡыларға [о°], [о], [ө], [у], [ү] фонемалары ҡарай. Был өндәрҙе әйткәндә ирендәр түңәрәкләнәләр һәм бер аҙ алға һуҙылалар.

Иренләшкән һуҙынҡыларҙың артикуляцияһында ирендәрҙең ҡатнашлығы төрлөсә. Мәҫәлән, рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге [о] өнөн әйткәндә, ирендәрҙең бөрөлөүе әҙерәк, төп башҡорт һүҙҙәрендәге [о°] өнөнөң артикуляцияһында ирендәрҙең ҡатнашлығы һәм бөрөлөүе күберәк.

Ирендәрҙең ҡатнашлығынан тыш яһалған һуҙынҡы фонемалар ***иренләшмәгән*** (йәки ***лабиализацияланмаған***) һуҙынҡылар тип атала. Уларға [а], [ә], [ы], [ы$^{u}$], [э(е)], [э$^{и}$], [и] фонемалары инә.

Башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәрҙең классификацияһын түбәндәге таблица аша күрергә мөмкин.

### Һуҙынҡы фонемаларҙың классификацияһы

| Телдең горизонталь торошо | Алғы рәт һуҙынҡылары | Урта рәт һуҙынҡылары | | Артҡы рәт һуҙынҡылары |
|---|---|---|---|---|
| | Нәҙек һуҙынҡылар | | Ҡалын һуҙынҡылар | |
| Ирендәрҙең ҡатнашлығы / Телдең вертикаль торошо | Иренләшмәгән | Иренләшкән | Иренләшмәгән | Иренләшкән |
| Өҫкө күтәрелеш (тар) һуҙынҡылар | [и] | [ү] | [ы$^{u}$] | [у] |
| Урта күтәрелеш (ярым тар йәки ярым киң) һуҙынҡылар | [э(е)], [э$^{и}$] | [ө] | [ы] | [о°], [о] |
| Түбән күтәрелеш (киң) һуҙынҡылар | [ә] | | [а] | |

Шулай итеп, башҡорт телендәге һуҙынҡы өндәргә (фонемаларға) түбәндәгесә характеристика бирергә мөмкин:

[ә] – алғы рәт, түбән күтәрелеш, иренләшмәгән. Мәҫәлән: [әсә́й], [әҫә́р], [бәләкә́й], [бәрә́с], [тәҙрә́], [кәрә́к], [әҙе́р].

[а] – урта рәт, түбән күтәрелеш, иренләшмәгән. Мәҫәлән: [ата́й], [аға́с], [алса́ҡ], [бара́], [аҡ], [ҡара́];

[э(е)] – алғы рәт, урта күтәрелеш, иренләшмәгән; төп башҡорт һүҙҙәрендә һүҙ башында, һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында [эш], [эл], [эле́к], [теле́м], [телеме́], [кеше́], [йеле́к] кеүек һүҙҙәрҙә күҙәтелә;

[э$^{и}$] – алғы рәт, урта күтәрелеш, иренләшмәгән; рус теле һәм рус теле аша сит ил телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә осрай. Мәҫәлән: [мэ$^{и}$тр], [тэ$^{и}$мъ], [э$^{и}$кра́н];

[и] – алғы рәт, өҫкө күтәрелеш, иренләшмәгән. Мәҫәлән: [тире́], [илә́к], [бир], [и́шет], [ипле́];

[о°] – артҡы рәт, урта күтәрелеш, иренләшкән; төп башҡорт һүҙҙәрендә күҙәтелә. Мәҫәлән: [ҡо°ро́°с], [о°йо́°ҡ], [бо°ро°ло́°ш], [то°рмо́°ш], [о°ло́°], [о°сло́°];

[о] – артҡы рәт, урта күтәрелеш, иренләшкән; рус теле һәм рус теле аша сит ил телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә осрай. Мәҫәлән: [полк], [ток], [тон], [фронт];

[ө] – урта, рәт, урта, күтәрелеш, иренләшкән. Мәҫәлән: [өкө́], [өрө́к], [көтө́ү̆], [өй].

[ы] – урта рәт, урта күтәрелеш, иренләшмәгән; төп башҡорт һүҙҙәрендә күҙәтелә. Мәҫәлән: [тыны́с], [ысы́ҡ], [тын], [ыры́ў], [ыласы́н];

[ы$^{u}$] – урта рәт, өҫкө күтәрелеш, иренләшмәгән; рус теле һәм рус теле аша сит ил телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә осрай. Мәҫәлән: [му́зы$^{u}$ка], [пасы́$^{u}$лка], [ты$^{и}$л]. Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев фекеренсә, [и] яңғыраҡлы [ы] өнө [ы$^{u}$] шулай уҡ төп башҡорт һүҙҙәрендә һәм ғәрәп теленән ингән һүҙҙәрҙә лә күҙәтелә. Мәҫәлән, башҡорт һүҙҙәрендә: [бы$^{и}$ма́], [сы$^{и}$ҡы́т], [сы$^{и}$ға́н], [сы$^{и}$ҡа́н], [сы$^{и}$ратыў́], [сы$^{и}$рылыў́], [сы$^{и}$рсы́ҡ], [сы$^{и}$лға́ў]; ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә: [сы$^{и}$ны́ф], [сы$^{и}$фа́т], [сы$^{и}$нфи́], [сы$^{и}$хы́р], [латы́$^{и}$фа], [латы́$^{и}$п] һ. б[1];

[у] – артҡы рәт, өҫкө күтәрелеш, иренләшкән. Мәҫәлән: [умарта́], [тумыртҡа́], [туй], [буй];

[ү] – урта рәт, өҫкө күтәрелеш, иренләшкән. Мәҫәлән: [үксә́], [үте́к], [күләгә́], [үлән].

---

[1] Кейекбаев Ж. Ғ. Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 18–21-се бб.

## Һуҙынҡы фонемаларҙың варианттары

Юғарыла килтерелгән ун ике һуҙынҡы фонеманан башҡа башҡорт телендә шул фонемаларҙың бер нисә варианты (аллофоны) бар. Телмәр өндәренең, төрлө позицияла тороп, бер-беренә мөнәсәбәте һәм йоғонтоһо арҡаһында барлыҡҡа килгән вариант фонемалар йәки вариант өндәр, фонемалар кеүек, телдең мәғәнә һәм форма айырыусы бер элементы булып тормай. Вариант өндәрҙең был үҙенсәлеге тел ғилемендә дөйөм танылған бер күренеш һанала[1].

Башҡорт телендәге [а] фонемаһының иренләшкән варианты тураһында тәүгеләрҙән булып профессор Н. К. Дмитриев һәм венгр телсеһе В. Преле телгә алған. Артабан башҡорт фонемаларының варианттары профессор Ж. Ғ. Кейекбаев тарафынан ғалимдың «Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе)» монографияһында өйрәнелгән.

### [а] *фонемаһының иренләшкән варианттары*

Башҡорт әҙәби телендә [а] өнөнөң иренләшеү дәрәжәһе бик аҙ. Беренсе ижектә иренләшкән [а] өнө, йәғни артикуляцияһы ирендәрҙең эшмәкәрлеге талап иткән [а] өнө башҡорт теленең дим, ҡариҙел һөйләштәрендә күҙәтелә. Башҡа күпселек һөйләштәрҙә иренләшкән [а] өнө бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә.

Башҡорт телендә [а] өнө тел арты тартынҡылары булған [ҡ], [ғ] өндәренең уратылышында торғанда һәм тел эргәһе [л] өнө алдында, шулай уҡ [т], [ҙ] тартынҡыһы менән бергә (алдан йәки аҙаҡтан) килгәндә иренләшә[2]. Мәҫәлән: [а°кты́], [ҡа°ра́й], [а°ғы́м], [а°лды́], [та°ба́ҡ], [а°ҙы́ҡ] һ. б.

Башҡорт телендәге [а] өнөнөң иренләшеү дәрәжәһен түбәндәге схема буйынса күрһәтергә булыр ине:

<table>
<tr><td>о</td><td rowspan="2">а</td><td rowspan="2">а</td><td rowspan="2">а</td></tr>
<tr><td>а</td></tr>
<tr><td>1-се ижек</td><td>2-се ижек</td><td>3-сө ижек</td><td>4-се ижек</td></tr>
<tr><td>ҡа</td><td>ра</td><td>ма</td><td>ла</td></tr>
</table>

---

[1] Кейекбаев Ж. Ғ. Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 21-се б.

[2] Шунда уҡ. 24-се б.

Беренсе ижектә иренләшкән [а] өнө яҙмала ғәҙәттәге *а* өҫтөнә бәләкәй *о* ҡуйылған *а* билдәһе аша күрһәтелә һәм «иренләшкән а-беренсе» [а°$_1$] тип атала.

Башҡорт әҙәби телендә һәм бөтөн башҡорт диалекттарында, үрҙә ҡарап үткән беренсе ижектәге «иренләшә биргән а-беренсе»нән [а°$_1$] башҡа, йәнә «иренләшкән а-икенсе» [а°$_2$] өнө бар. Был «иренләшкән а-икенсе» [а°$_2$] өнөнөң иренләшеү шарты бөтөнләй башҡаса: беренсенән, «иренләшкән а-икенсе» [а°$_2$] өнө бер ваҡытта ла беренсе ижектә булмай; икенсенән, [а°] өнөнөң иренләшеү дәрәжәһе бик көслө, сөнки был хәл башҡорт теле өсөн хас булған ирен гармонияһы менән бәйле. Әгәр төп башҡорт һүҙҙәрендә беренсе баҫымһыҙ ижектә [о] өнө булып, икенсе баҫымлы ижектә [а] өнө булһа, икенсе ижектә саф [а] өнө ишетелмәй. Миҫалдар: [ҡора́°л], [ҡола́°с], [ҡоса́°ҡ], [ҡона́°н], [оша́°ҡ], [ора́°н], [бота́°ҡ], [бола́°], [моға°йы́н], [ола°та́й], [оса́°] һ. б.

Был һүҙҙәрҙә икенсе ижектәге [а] өнө рус телендәге *казарма* тигән һүҙҙең [а] өндәре һымаҡ саф [а] түгел. Русса *казарма* һүҙендәге [а] өнөнөң артикуляцияһында ирендәрҙең бер ниндәй ҙә ҡатнашлығы юҡ. Ә башҡортса *ҡорал* тигән һүҙҙә икенсе ижектәге [а] өнөнөң артикуляцияһында ирендәрҙең ҡатнашлығы бик көслө. Быны сәбәбен шунан эҙләргә кәрәк: *ҡорал* һүҙендә беренсе ижектәге [о] өнөн әйткәндә, ирендәр бөрөлгән хәлдә алға ослайып сығып тора, тел урт эсендә урта бер позицияны ала. Икенсе ижектәге баҫымлы [а] өнөн әйткәндә, ирендәрҙең бөрөлгән һәм алға сығып торған хәле һаҡлана, ләкин тел бер аҙ түбән төшә һәм тел менән өҫкө аңҡау араһындағы аралыҡ бер ни тиклем киңәйә. Шул сәбәпле ирендәр ҙә, бөрөлгән һәм алға сусайып сығып торған хәлен юғалтмайынса, бер аҙ асыла бирә. Шуға күрә икенсе ижектәге [а] өнөн әйткәндә, делабиализация булып өлгөрмәй, йәғни ирендәр кире әүәлге, бөрөлгән, хәлгә килмәй. Шул арҡала [о] өнө менән [а] өнө араһында торған урта бер өн барлыҡҡа килә. Был асылда ярым [о], ярым [а] өнө йәки иренләшеү дәрәжәһе көслө булған «иренләшкән а-икенсе» [а°$_2$][1].

Башҡорт телендәге беренсе ижектәге [а] өнөнөң йоғонтоһонда, йәғни [о] өнө уратылышында, икенсе ижектәге [а] өнөнөң иренләшеү дәрәжәһен түбәндәге схема буйынса күрһәтергә булыр ине:

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 26-сы б.

| | |
|---|---|
| о | о |
| | $а_2$ |
| 1-се ижек | 2-се ижек |
| ҡо | рал |

Башҡорт телендә [а] өнөнөң иренләшеүе икенсе ижек менән генә сикләнеп ҡалмай. Хатта өсөнсө ижектәге [а] өнөнөң артикуляцияһында ла ирендәрҙең бер ни тиклем ҡатнашлығы булыуын күҙәтә алабыҙ, мәҫәлән: *болалар, торалар, олатай, ҡоҙаса, ҡонандар* һ. б. Ләкин өсөнсө ижектә [а] өнөнөң иренләшеүе бик аҙ, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә. Икенсе һәм өсөнсө ижектәге [а] өндәренең [о] өнө йоғонтоһонда иренләшеү хәлен түбәндәге схема менән күрһәтергә булыр ине:

| | | |
|---|---|---|
| о | о | о |
| | а | а |
| 1-се ижек | 2-се ижек | 3-сө ижек |
| о | ла | тай |

Дүртенсе ижектә инде ирендәр бөрөлөп алға сығып торған хәлен бөтөнләй юғалта. Шуға күрә дүртенсе (һуңғы) ижектә саф [а] өнө барлыҡҡа килә. Был хәлде түбәндәге схема менән күрһәтергә булыр ине:

| | | | |
|---|---|---|---|
| о | о | о | а |
| | а | а | |
| 1-се ижек | 2-се ижек | 3-сө ижек | 4-се ижек |
| о | ла | тай | ҙар |

## [ә] *фонемаһының иренләшкән варианттары*

Төп башҡорт һөйләшендә беренсе ижектә [ө] өнө булһа, шул [ө] өнөнөң көслө йоғонтоһонда икенсе ижектәге [ә] өнө ирендәрҙең актив ҡатнашлығы менән әйтелә; хатта ирендәр [ө] өнөнөң артикуляцияһындағы позицияны һаҡлайҙар, тел [ә] өнө артикуляцияһының позицияһын ала. Шулай итеп, көслө иренләшкән киң әйтелешле ярым [ө], ярым [ә], йәғни [ө] менән [ә] уртаһында торған бер өн барлыҡҡа килә. Икенсе төрлө әйткәндә, ирендәрҙең ҡатнашлығы яғынан ул өн – [ө] өнө, телдең күтәрелеше яғынан – [ә] өнө, сөнки тел менән ҡаты аңҡау араһындағы аралыҡ, [ә] өнөнөң артикуляцияһындағы һымаҡ, киң. Миҫалдар:

[һөнә́$^{ө}$р], [һөрә́$^{ө}$н], [көрә́$^{ө}$ш], [көлә́$^{ө}$с], [төтә́$^{ө}$й], [өмә́$^{ө}$], [төрә́$^{ө}$н]. Был һүҙҙәрҙә икенсе ижектәге [ә] өнө *әрәмә* тигән һүҙҙәге [ә] өнө һымаҡ саф [ә] булмауы асыҡ ишетелә, сөнки беренсе ижектәге [ө] өнөнөң артикуляцияһында бөрөлгән ирендәр икенсе ижектәге [ә] өнөн әйткәндә, бер нисә ижек баҫымһыҙ булғанлыҡтан, тәүге хәленә кире ҡайтып өлгөрмәй. Шул арҡала икенсе ижектә киң әйтелешле иренләшкән [ә] өнө барлыҡҡа килә[1].

Беренсе ижектә [ө] өнө йоғонтоһонда иренләшкән [ә] өнөн түбәндәге схема менән күрһәтергә мөмкин:

| | |
|---|---|
| ө | ө |
| | ә |
| 1-се ижек | 2-се ижек |
| кө | рән |

Шуныһы характерлы: әгәр составында [ө] өнө булған беренсе ижек ябыҡ ижек булып, [ә] өнө булған икенсе ижек тартынҡы өн менән башланһа, икенсе ижектәге [ә] өнөнөң иренләшеү дәрәжәһе байтаҡ кәмей, һәм [ә] өнөндә [ө] элементы бик аҙ һиҙелә. Бында беренсе ижектең баҫымһыҙ, икенсе ижектең баҫымлы булыуы бер ниндәй ҙә роль уйнамай, сөнки [ө] һәм [ә] өндәренең араһы алыҫлаша һәм [ә] өнө [ө] өнөнән ике тартынҡы өн аша тора. Мәҫәлән, *көндәр, көстәр, мөстән, төпкә, төштә* һүҙҙәренең икенсе ижегендәге [ә] өнөндә [ө] элементы аҙ һиҙелә. Был типтағы һүҙҙәрҙә икенсе ижектәге [ә] өнөнөң иренләшеү дәрәжәһе менән бер тигеҙ төҫлө[2].

Был күренеште схема менән түбәндәгесә сағыштырырға мөмкин:

| | |
|---|---|
| ө | ө |
| | ә |
| 1-се ижек | 2-се ижек |
| көс | тәр |

| | | |
|---|---|---|
| ө | ә | ө |
| | ө | ә |
| 1-се ижек | 2-се ижек | 3-сө ижек |
| кө | рә | гә |

Беренсе һәм икенсе асыҡ ижектә [ө] өнө булып, өсөнсө ижектә [ә] өнө килһә, өсөнсө ижектәге [ә] өнө лә барыбер иренләшә.

---

[1] *Кейекбаев Ж. F.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 30-сы б.

[2] Шунда уҡ. 31-се б.

Мәçәлән, [һөрөнә$^{ө}$], [төрөнә$^{ө}$], [бөрөлә$^{ө}$] һүҙҙәрендә өсөнсө ижектәге [ә] өнө иренләшеү дәрәжәһе менән шулай уҡ бер тигеҙ. Был хәлде түбәндәге схема менән күрһәтергә мөмкин:

| | | |
|---|---|---|
| ө | ө | ө |
| | | ә |
| 1-се ижек | 2-се ижек | 3-сө ижек |
| һө | рө | нә |

Юғарыла ҡарап үтелгән иренләшкән [ә] өндәрен яҙмала түбәндәге транскрипция билдәләре менән күрһәтергә була:

1) икенсе ижектәге иренләшеү дәрәжәһе көслө булған иренләшкән [ә] өнөн – «иренләшкән ә-беренсе» [ә$^{ө}_{1}$];

2) иренләшеү дәрәжәһе көсһөҙөрәк булған беренсе ябыҡ ижектән һуң килгән икенсе ижектәге һәм өсөнсө ижектәге иренләшкән [ә] өнөн – «иренләшкән ә-икенсе» [ә$^{ө}_{2}$].

«Иренләшкән ә-беренсе» [ә$^{ө}_{1}$] артикуляцияһы яғынан инглиз телендәге алғы рәт киң әйтелешле иренләшкән өнгә яҡын тора (инглизсә транскрипцияһы – [ә:] fist – *беренсе*, girl [gә:l] – *ҡыҙыҡай*, bird [bә:d] – *ҡош* һүҙҙәрендәге иренләшкән өндәр).

## [ө] *фонемаһының варианты*

Башҡорт телендә [и] яңғыраҡлы [ө] өнө йәки [ө] өнө менән [и] араһында торған иренләшкән алғы рәт тар әйтелешле [ө$^{и}$] өнө бар[1]. Был өндөң артикуляцияһы түбәндәгесә: ирендәр [ө] өнө позицияһын ала, ләкин тел менән өçкө аңҡау араһында аралыҡ бик тар, сөнки тел [и] өнөн әйткән саҡтағы позицияла тора. Шул сәбәпле [ө] менән [и] араһында торған урта бер һуҙынҡы өн – [и] элементлы [ө] өнө – [ө$^{и}$] барлыҡҡа килә. Асылда был [өй] дифтонгыһынан (ике һуҙынҡы ҡушылмаһынан) барлыҡҡа килгән бер бөтөн өн (монофтонг). Был өндөң барлыҡҡа килеүе өсөн [ө$^{и}$] (яҙыуҙа – [өй]) дифтонгыһының баçымһыҙ булыуы шарт. Мәçәлән: *өйрә, һөйрәй, һөйләм, өйрәк, өйрәнеү, өйрәтеү, һөйләү, һөйҙәшеү, һөйҙәп* (диалекттарҙа), *төйҙә* һүҙҙәрендә [өй] дифтонгыһы беренсе, баçымһыҙ ижектә тора һәм көслө баçым ике ижекле һүҙҙәрҙә өсөнсө ижеккә төшә. Беренсе ижек

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баçма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 33-сө б.

баҫымһыҙ булғанлыҡтан, ундағы [өй] дифтонгыһы тартыла, һәм бер бөтөн өн монофтонг [өᶦ] барлыҡҡа килә. Мәҫәлән: [өᶦрә], [һөᶦләм], [өᶦрәк] һ. б.[1].

Н. К. Дмитриев һәм Ж. Ғ. Кейекбаев был өндөң транскрипцияһы өсөн [ө´´] билдәһен ҡулланғандар[2]. Был өндө яҙмала күрһәтеү өсөн [өᶦ] билдәһен ҡулланыу маҡсатҡа ярашлы тип табылды.

## [ы] *фонемаһының варианты*

Саф [ы] фонемаһының нәҙек варианты үҙенең артикуляцияһы яғынан асылда шул уҡ [ы] өнө менән төп башҡорт һүҙҙәрендәге [э(е)] өнө араһында торған урта бер өн. Шуға күрә был өндө [ы] фонемаһының варианты тип тә, [э(е)] фонемаһының варианты тип тә атап булыр ине. Ж. Ғ. Кейекбаев был өндөң транскрипцияһы өсөн [ыᵉ] билдәһен ҡулланған[3]. Билдәле булыуынса, саф [ы] өнө тар әйтелешле артҡы рәт һуҙынҡыһы, йәғни саф [ы] өнөнөң артикуляцияһында тел урттың артҡы өлөшөндә тора; [э(е)] өнөн әйткәндә, тел урттың алғы өлөшөнә килә; [ыᵉ] өнөн әйткәндә инде, тел горизонталь планда урттың урта өлөшөндә тора. Был өн күберәк рус теленән һәм уның аша сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең аффикстарында осрай: *компьютерҙ*[ыᵉ]*ң*, *тьюторҙ*[ыᵉ]*ң*, *тостерҙ*[ыᵉ]*ң* һ. б.

## [а] *фонемаһының тарайған (нәҙек) варианты*

Сингармонизм законы буйынса, төп башҡорт һүҙҙәренең тамырында йә артҡы рәт һуҙынҡылары (ҡалын һуҙынҡылар), йә алғы рәт һуҙынҡылары (нәҙек һуҙынҡылар) ғына була. Тамырында йәки нигеҙендә төрлө рәт һуҙынҡылары булған рус, фарсы һәм ғәрәп телдәренән боронғораҡ осорҙа башҡорт теленә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең һуҙынҡылары тигеҙләнгән: күпселек һүҙҙәрҙең тамырында беҙ йә алғы рәт, йә артҡы рәт һуҙынҡылары булыуын күрәбеҙ. Мәҫәлән: *ведро – биҙрә, ядро – йәҙрә, бревно – бүрәнә, овин – әүен*; ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә:

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 33-сө б.

[2] *Дмитриев Н. К.* Грамматика башкирского языка. М., 1948. С. 16; Кейекбаев Ж. Ғ. Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 33-сө б.

[3] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 34-се б.

*мәкал, мәкалә, taләп, тәмам*; башҡортсала: *мәҡәл, мәҡәлә, талап, тамам* һ. б.

Шул уҡ ваҡытта хәҙерге башҡорт телендә ғәрәп, фарсы телдәренән боронғо осорҙа үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙең тамырында төрлө рәт һуҙынҡылары яҙыла. Мәҫәлән: *мәғариф, әхлаҡ, ғаилә, ғаләм, мөһабәт, фажиғә* һ. б. Был һүҙҙәрҙең тамырындағы [ә] өнө лә башҡортса әйтелештә саф [ә] өнө түгел, ул [ә] менән [а] араһындағы бер өн[1]. Шул уҡ өндө рус теленән һәм рус теле аша килеп ингән һүҙҙәрҙә лә күҙәтергә. Мәҫәлән, *бригадирҙ*[$а^{ә}$]*р, командирҙ*[$а^{ә}$]*р*. Был өндөң килеп сығышын һүҙҙең тамырындағы [а] өнө булыуынан эҙләргә кәрәк, шуға күрә йыш ҡына ул һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәренең яҙылышында хата ебәрелә.

Шулай итеп, башҡорт телендәге һуҙынҡы фонемаларҙың (өндәрҙең) түбәндәге варианттары бар:

[$а^{о}_{1}$] – артикуляцияһында ирендәрҙең ҡатнашлығы аҙ булған, иренләшкән, дәрәҫәрәге, «иренләшә биргән а-беренсе»;

[$а^{о}_{2}$] – артикуляцияһында ирендәрҙең ҡатнашлығы көслө булған йәки тәүге ижектәге [о] өнө йоғонтоһонда көслө «иренләшкән а-икенсе»;

[$ә^{ө}_{1}$] – беренсе ижектәге [ө] өнө йоғонтоһонда икенсе ижектәге көслө «иренләшкән ә-беренсе»;

[$ә^{о}_{2}$] – беренсе ижектәге [ө] өнө йоғонтоһонда өсөнсө баҫымлы ижектә һәм икенсе баҫымһыҙ ижектә көсһөҙөрәк «иренләшкән ә-икенсе»;

[$ө^{и}$] – беренсе, баҫымһыҙ (һирәк хәлдәрҙә баҫымлы) ижектәге өй дифтонгыһынан тартылған "и" яңғыраҡлы [ө] өнө;

[$ы^{е}$] – [ы] фонемаһының тарайған (нәҙек) варианты, йәғни [ы] менән [е] өндәре араһында урта позицияла торған өн;

[$а^{ә}$] – [а] фонемаһының тарайған (нәҙек) варианты, йәғни [а] менән [ә] өндәре араһында урта позиция алып торған бер өн[2].

## Дифтонгылар

Һуҙынҡы өндәрҙе төркөмләгәндә, уларҙың монофтонгылар тамырында төрлө рәт һуҙынҡылары [ға] (грекса: *monos* – «бер», *phtongos* – «тауыш, өн») һәм дифтонгыларға (*di* – «ике», *phtongos* – «тауыш, өн») бүленеше лә иҫәпкә алынырға мөмкин. Телдәге күпселек һуҙынҡылар – монофтонгылар, йәғни улар

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 35-се б.

[2] Шунда уҡ.

составы яғынан бер өндән генә тора: [а], [и], [о], [у] һ. б. Ләкин телдә бер ижектә бергә әйтелә торған ике һуҙынҡы өн ҡушылмалары, йәғни **дифтонгылар** ҙа булырға мөмкин.

Башҡорт телендә һуҙынҡыларҙан һәм ярым һуҙынҡылар тип йөрөтөлгән [й], [ў] талғын (сонор) тартынҡыларҙан торған өндәр ҡушылмалары – дифтонгылар бар. Дифтонгылар үҙҙәренең артикуляцияһы буйынса үҙенсәлекле булған өндәр ҡушылмаһын тәшкил итә: улар бер ижек булып әйтеләләр, дөйөм әйтелеше улар составындағы компоненттарҙың үҙ аллы әйтелешенән нык айырылып тора.

Тел ғилемендә дифтонгыларҙы, составындағы һуҙынҡыларҙың сифатына ҡарап, икегә – ысын һәм ялған дифтонгыларға бүлеп йөрөтәләр. Ысын дифтонгылар ике тулы һуҙынҡынан тора; ялған дифтонгыларҙың бер һуҙынҡыһы – тулы, икенсеһе ярым һуҙынҡы була. Мәҫәлән, латыш телендә tauta – *халыҡ*, meita – *ҡыҙым* һүҙҙәрендәге һуҙынҡы өндәр ҡушылмалары ысын дифтонгыларға ҡарай. Инглиз телендәге [ai], [oi] һ. б. дифтонгылары, төрки телдәрендәге [әй] – [ай], [әү̆] – [аў] һ. б. өн ҡушылмалары ялған дифтонгыларға инә[1].

Составындағы өндәрҙең урынына ҡарап, дифтонгылар түбән төшөүсе (русса: нисходящий) һәм юғары күтәрелеүсе (русса: восходящий) төрҙәргә бүлеп йөрөтөләләр.

Беренсе компоненты һуҙынҡы булып, икенсе компоненты талғын тартынҡыларҙан торған өндәр ҡушылмаһы түбән төшөүсе дифтонг тип атала.

Яһалышы буйынса түбән төшөүсе дифтонгыларҙың төрҙәре:

1) «һуҙынҡы + [й]» ҡушылмаһы:
[ай]: *ай, атай, айран, айыр, һай, шулай;*
[әй]: *бесәй, әсәй, әйлән, бейәләй, әйҙә, сәйер;*
[ый]: *йый, йыйын, ҡый, тый, һый;*
[ей]: *бей, бейе, кей, сей;*
[ой]: *бойоҡ, бойор, тойғо, ҡоймаҡ;*
[өй]: *бөйөр, өй, өйөр, төймә, төйөн;*
[уй]: *буй, уй, суйын, муйыл, туй;*
[ий]: *калий, Горький, кальций, магний* һ. б.

2) «һуҙынҡы + [ў]», «һуҙынҡы + [ү̆]» ҡушылмалары:
[аў]: *аулаҡ* [аўлаҡ], *сауҡа* [саўҡа], *һаулыҡ* [һаўлыҡ];
[оў]: *бороу* [бороў], *ҡороу* [ҡороў], *тороу* [тороў];

---

[1] *Сафиуллина Ф. С.* Тел ғыйлеменә кереш. Югары уку йортларының филология факультеты студентлары өчен дәреслек. Казан, 2001. 52нче б.

[ыў]: *быу* [быў], *һыу* [һыў], *тыуыу* [тыўыў];
[еў]: *кисеү* [кисеў], *киҙеү* [киҙеў], *бейеү* [бейеў];
[өў]: *көтөү* [көтөў], *йөҙөү* [йөҙөў], *өйөү* [өйөў];
[әў]: *тәүлек* [тәўлек], *тәүбә* [тәўбә], *сәүкә* [сәўкә] һ. б.

Түбән төшөүсе дифтонгыларға бөткән һүҙҙәргә һуҙынҡы өн менән башланған аффикстар ҡушылһа, дифтонг фонетик яҡтан ике өлөшкә тарҡала һәм икенсе өлөшө яңы һүҙҙең ижеге составына күсә: *йөй – йө-йө, тау – та-у-ы, утау – у-та-уы, кейәү – ке-йә-үе.*

Түбән төшөүсе дифтонгылар тартынҡылар алдында торһа, йәки уларҙан һуң тартынҡыларға башланған аффикстар килһә, ул саҡта дифтонг үҙенең тәүге сифатын һаҡлай һәм айырым өлөштәргә тарҡалмай: *ай-лыҡ, ау-ҙы, ау-лаҡ, йәй-ләү, тәү-лек* һ. б.

Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев, ошо үҙенсәлектәренән сығып, түбән төшөүсе дифтонгыларҙы ике төркөмгә бүлә[1]:

1) тартынҡы өндәр алдында тороп, тарҡалыуға бирелмәүсе йәки даими дифтонгылар. Мәҫәлән: *байрам, майҙан, ҡайраҡ, байраҡ, ҡауҙан, аулаҡ, буйҙаҡ* һ. б.;

2) һуҙынҡы өн менән башланған аффикстар алдында тороп, фонетик яҡтан ике ижеккә тарҡалыусы (айырылыусы) даими булмаған дифтонгылар: *йай (яй) – йа-йы, бау – ба-уы, күреү – кү-ре-үе, тыу – ты-уа, туй – ту-йы* һ. б.

Беренсе компоненты талғын тартынҡы булып, икенсеһе һуҙынҡыларҙан торған өндәр ҡушылмаһы ю ғ а р ы  к ү т ә р е л е ү с е  д и ф т о н г тип атала. Яһалышы буйынса юғары күтәрелеүсе дифтонгылар түбәндәге төрҙәргә бүленә:

1) «[й] + һуҙынҡы» ҡушылмаһы:
[йа]: *бая* [байа], *ял* [йал], *ялҡын* [йалҡын], *йыя* [йыйа];
[йә]: *бейә, йәйә, йәш, йәшлек;*
[йы]: *йылан, йырыҡ, тыйыу, муйыл;*
[йе]: *кейек, ел* [йел], *емеш* [йемеш];
[йо]: *йомарт, йондоҙ, йонсоу, йолҡоу;*
[йө]: *бөйөр, йөкләмә, йөрәк;*
[йу]: *юл* [йул], *юныу* [йуныў], *юйма* [йуйма];
[йү]: *йүкә, йүгер, йүнсел, йүтәл* һ. б.

2) «[ў] + һуҙынҡы», «[ү̆] + һуҙынҡы» ҡушылмалары:
[ўа]: *ватан* [ўатан], *ваҡ* [ўаҡ], *вариҫ* [ўариҫ],

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 69-сы б.

[ў̈ə]: *вәкил* [ў̈әкил], *Вәли* [ў̈әли];
[ў̈ə]: *теүәл* [теў̈әл], *һәүәҫкәр* [һәў̈әҫкәр];
[ўы]: *быуын* [быўын], *тауыҡ* [таўыҡ], *һыуыҡ* [һыўыҡ];
[ў̈е]: *кеүек* [кеў̈ек], *йеүеш* [йеў̈еш], *киҙеүе* [киҙеў̈е] һ. б.

Башҡорт теленең дифтонгылары сағыштырмаса һуңғараҡ осорҙа барлыҡҡа килгән. Ғалимдар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә башҡорт теленең дифтонгыларын һәм уларҙың тарихи үҫешен өйрәнеп, уларҙың күбеһенең дифтонг булмаған өн ҡушылмаларына барып тоташыуын иҫбатлай[1]. Мәҫәлән, башҡорт телендәге *тау* һүҙе боронғо төрки телендәге *таг* һүҙенән, *бөйөк – бөдүк* һүҙенән, *бей – бәк* һүҙенән, *аяҡ* [айаҡ] – *адаҡ* һүҙенән һ. б.

## Тартынҡы фонемалар системаһы

Билдәле бер телдең тартынҡылар системаһын **консонантизм** (латинса: *consonant* – «тартынҡы өн») тиҙәр. Хәҙерге башҡорт телендә егерме туғыҙ тартынҡы фонема бар. Улар түбәндәгеләр: [б], [в], [г], [ғ], [д], [ж], [з], [ҙ], [й], [к], [ҡ], [л], [м], [н], [ң], [п], [р], [с], [ҫ], [ў], [т], [ф], [х], [һ], [’], [ц], [ш], [ч], [щ].

Хәҙерге башҡорт телендәге егерме туғыҙ тартынҡының егермеһе – [б], [г], [ғ], [д], [ҙ], [й], [к], [ҡ], [л], [м], [н], [ң], [п], [р], [с], [ҫ], [ў], [т], [һ], [ш] – төп башҡорт һүҙҙәрендә ҡулланылған тартынҡылар, ә ҡалған туғыҙы – [в], [ж], [з], [ф], [х], [ ̓], [ч], [ц], [щ] башҡорт теленә, нигеҙҙә, сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр аша килеп ингән тартынҡылар булып иҫәпләнә:

1) [ф], [х], [ж], [з], [ ’ ] (замма) тартынҡылары тәүләп ғәрәп-фарсы һүҙҙәрендә осрай: *фатиха, фәлсәфи, фән, фәҡир, фәҡәт; хафа, хата, хеҙмәт, хыянат, хәбәр, хасил; ижек, ижад, ғәжәп, мөғжизә; зауыҡ, зиһен, зат, зәғиф, зирәк, Зифа; тәьҫир* [тә’ҫир], *тәьмин* [тә’мин], *Мөьминә* [мө’минә]. Һуңынан рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә лә ҡулланыла: *фронт, фото, форма, флаг, фургон, фурман; архитектура, техника, пароход, химия; вожатый, гараж, жираф, журнал; зефир, землянка, заявка, зачёт, зачётка*; ә төп башҡорт һүҙҙәрендә ҡулланылыштары сикләнгән, улар тик ҡайһы бер ымлыҡтарҙа, оҡшатыу һүҙҙәрендә һәм шулар нигеҙендә яһалған һүҙҙәрҙә генә осрай: *ах, их, ахылда, хихылда; ғыж-ғыж, ғыжылда, шажла, быжыр; уф, уфтан, тфү, фыр-р-р,*

---

[1] *Дмитриев Н. К.* Грамматика башкирского языка. М., 1948. С. 16; *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 71–83-сө бб.

*фырла; без-з-з, безлә, өзлә; маъмай* [ма'май], *әьем* [ә'ем], *мәьмәь* [мә'мә'] *ит* һ. б.

2) [в], [ц], [ч], [щ] тартынҡылары рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ҡулланыла: *аванс, авария, вымпел, вулкан, вульгар, вольер, вокзал; чиновник, часть, чек, чех, чемпион, врач, Чапаев; центнер, циклон, цирк, циркуль, цинк; щи, щетка, плащ, Щорс* һ. б.

Төп башҡорт һүҙҙәрендә ҡулланылған 20 тартынҡы араһында алты үҙенсәлекле өн бар. Улар түбәндәгеләр: [ғ], [ҙ], [ҡ], [ң], [ҫ], [һ].

Тартынҡы фонемаларҙы төп өс принцип нигеҙендә: 1) артикуляция рәүеше буйынса, 2) артикуляция урынына ҡарап, 3) тауыш һәм шау ҡатнашлығын иҫәпкә алып классификациялайҙар.

**Артикуляция рәүеше** – ул тартынҡылар яһалғанда, үпкәнән сыҡҡан һауа ағымының телмәр аппаратында барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡтарҙы үтеү рәүеше. Артикуляция (йәки яһалыш) рәүеше буйынса тартынҡылар шартлаулы, ҡуш (аффрикаттар), ышҡыулы (фрикатив), танау, тел эргәһе һәм ҡалтыраулы тип йөрөтөлә.

**Шартлаулы** тартынҡылар яһалғанда, актив телмәр органдары менән пассив органдар бер-береһенә терәлә һәм үпкәнән килгән һауа юлын ҡаплай, һауа ағымы үҙ юлындағы ошо ҡаршылыҡты көс менән үтә, был саҡта шартлауға оҡшаш шау барлыҡҡа килә. Шартлаулы тартынҡыларға [б], [п], [д], [т], [к], [ҡ], [г], [ғ], [ ' ] (замма) фонемалары ҡарай.

**Ышҡыулы,** йәки **фрикатив** (латинса: *friko* – «ышҡыйым») тартынҡылар яһалғанда, актив телмәр органы менән пассив орган бер-береһенә яҡын килә, ләкин терәлмәйҙәр, бында бер аҙ ек ҡала: үпкәнән килгән һауа ағымы ошо ек аша ышҡылып үтә һәм үҙенсәлекле шау сығара. Ошо үҙенсәлегенә ҡарап, ҡайһы бер телселәр уларҙы **ек тартынҡылары** тип тә йөрөтәләр.

Ышҡыулы тартынҡылар түбәндәгеләр: [в], [ф], [ҙ], [ҫ], [з], [с], [ж], [ш], [щ], [х], [һ], [й], [ў].

**Ҡуш** тартынҡылар, йәки **аффрикаттар** (латинса: *africatus* – «ышҡылған») үҙҙәренең яһалышы буйынса шартлаулы һәм ышҡыулы тартынҡылар араһында торалар. Ҡуш тартынҡылар яһалғанда, актив орган, пассив органға яҡынлап, тәүҙә һауа ағымының юлын бөтөнләй ҡаплай, тик был ҡаршылыҡ шартлап асылмай, ә аҡрынлап ек барлыҡҡа килә һәм, һауа ек аша ышҡылып үтә. Ҡуш тартынҡыларға [ц], [ч] фонемалары инә, улар

икеһе лә бик ҡыҫҡа [т] яңғырағы менән әйтелә: [ц] = [т'с'], [ч] = [т'ш'].

**Танау** һәм **тел эргәһе** тартынҡылары яһалғанда ла, шартлаулы тартынҡылар яһалышындағы кеүек, актив һәм пассив органдар бер-берећенә терәләләр һәм һауа ағымы юлын ҡаплайҙар, шунлыҡтан һауа ағымы был ҡаршылыҡты урап үтә. Әгәр һауа ағымы был саҡта үҙ юлындағы ҡаршылыҡты танау ҡыуышлығы аша урап үтһә, **танау** тартынҡылары [м], [н], [ң] яһала; әгәр ҙә һауа ағымы ҡаршылыҡты үткәндә ауыҙ ҡыуышлығы аша телдең ике яҡ эргәһенән сыҡһа, **тел эргәһе** [л] тартынҡыһы барлыҡҡа килә.

**Ҡалтыраулы** тартынҡы, йәки **вибрант** (латинса: *vibrantis* – «ҡалтыраулы, тирбәлеүле») яһалғанда, телдең осо бер аҙ бөгөлә һәм альвеолаларға күтәрелә, һөҙөмтәлә, һауа ағымы үткәндә, ул альвеолаларға бер тейеп, бер теймәй ҡалтырай, йәғни вибрация барлыҡҡа килә; [р] фонемаһы ошондай юл менән яһала һәм ҡалтыраулы тартынҡы тип йөрөтөлә.

**Артикуляция урыны.** Тартынҡылар, ҡайһы урында, йәғни ниндәй актив һәм пассив телмәр органдары ҡатнашлығында яһалыуҙарына ҡарап, өс төргә: ирен, тел һәм тамаҡ фонемаларына бүленәләр.

**Ирен** тартынҡыларының яһалышында аҫҡы ирен актив ҡатнаша: ул өҫкә табан хәрәкәт итеп, өҫкө иренгә йәки өҫкө тештәргә терәлә йә бик яҡын киләләр. Ирен тартынҡылары түбәндәгеләр: [б], [п], [в], [ф], [м], [ў]. Улар үҙ сиратында, пассив органдарға мөнәсәбәтенә ҡарап, ике ирен – [б], [п], [м], [ў] һәм ирен-теш фонемаларына – [в], [ф] бүлеп ҡаралалар.

Яһалғанда пассив телмәр органдарына телдең ҡайһы урыны (өлөшө) тейеүгә йәки яҡынлауға ҡарап, тел тартынҡылары өс төркөмгә: тел алды, тел уртаһы һәм тел арты фонемаларына бүленәләр.

**Тел алды** фонемаларының яһалышында телдең алғы өлөшө ҡатнаша. Уларға [д], [т], [з], [с], [ҙ], [ҫ], [ж], [ш], [ц], [ч], [щ], [л], [н], [р] тартынҡылары ҡарай.

**Тел уртаһы** фонемаларының яһалышында телдең урта өлөшө ҡатнаша. Уларға [й], [к], [г] тартынҡылары инә.

**Тел арты** фонемалары телдең артҡы өлөшөнөң ҡатнашлығында яһала. Улар түбәндәгеләр: [ҡ], [ғ], [х], [ң].

Тел тартынҡылары, үҙҙәренең яһалышында пассив телмәр органдарының ҡатнашлығынан сығып, ике ҙур төркөмгә: **теш** һәм **аңҡау** фонемаларына айырылалар.

**Теш** тартынҡылары тел осоноң өҫкө тештәргә һәм альвеолаларға тейеү йәки яҡынлауы һөҙөмтәһендә яһалалар, ошонан сығып, улар теш һәм теш араһы фонемалары тип йөрөтөлгән ваҡ төркөмсәләргә бүленәләр.

**Теш** тартынҡылары яһалғанда, телдең осо өҫкө тештәргә һәм альвеолаларға тейә ([д], [т], [з], [с], [ц], [н], [л]), ә **теш араһы** тартынҡылары яһалғанда, тел осо өҫкө тештәргә яҡынлаша һәм һауа ағымы улар араһындағы ектән ышҡылып сыға ([ҙ], [ҫ]).

**Аңҡау тартынҡылары** телдең алғы, урта йәки артҡы өлөшө йомшаҡ аңҡауға йәки ҡаты аңҡауҙың алғы һәм артҡы тәңгәлдәренә күтәрелеү һөҙөмтәһендә яһала. Ошо билдәләренә ҡарап, уларҙы алғы аңҡау (аңҡау-теш), урта аңҡау һәм артҡы аңҡау тартынҡылары тип йөрөтөлгән төркөмсәләргә бүләләр.

**Алғы аңҡау** (аңҡау-теш) тартынҡылары [ж], [ш], [ч], [щ], [р] яһалғанда, телдең осо ҡаты аңҡауҙың тештәргә яҡын алғы өлөшөнә күтәрелә.

**Урта аңҡау** тартынҡылары [й], [к], [г] яһалғанда, телдең артҡы өлөшө ҡаты аңҡауҙың урта тәңгәленә күтәрелә.

**Артҡы аңҡау** тартынҡылары [ҡ], [ғ], [х], [ң] телдең артҡы өлөшөнөң йомшаҡ аңҡауға күтәрелеүе һөҙөмтәһендә яһала.

Башҡорт телендә тамаҡ төбөндә яһалған тартынҡылар икәү: [һ] һәм [’], шуларҙың тәүгеһе тамаҡ, йәки фарингаль (грекса: *fharingos* – «тамаҡ»), ә икенсеһе тамаҡ төбө фонемаһы тип атала.

**Тамаҡ** (фарингаль) тартынҡыһы [һ] яһалғанда телдең төбө артҡа табан ҡуҙғала һәм тамаҡ төбөнә яҡынлаша, был саҡта үпкәнән килгән һауа ағымы тел төбө менән тамаҡ төбө араһында ҡалған ектән ышҡылып сыға.

**Тамаҡ төбө тартынҡыһы** [’] яһалғанда тамаҡ төбө мускулдары ҡыҫылып, үпкәнән килгән һауа ағымының юлын ҡаплай, шунлыҡтан, һауа тамаҡ ҡыуышлығы аша үткәндә үҙенсәлекле шартлау барлыҡҡа килә. Һөҙөмтәлә, шартлаулы һаңғырау өн яһала.

**Тауыш һәм шау ҡатнашлығы.** Яһалышында тауыш ярыларының ҡатнашлығына, йәғни уларҙың эше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тауыш һәм шауҙың ҡатнашыу дәрәжәһенә ҡарап, тартынҡылар шаулы һәм талғын, йәки сонор (латинса: *sonorous* – «тауышлы», «яңғырау») фонемаларға айырылалар.

Шаулы тартынҡылар яһалғанда, үпкәнән килгән көслө һауа ағымы ауыҙ ҡыуышлығында билдәле бер ҡаршылыҡҡа осрай, ошо арҡала үҙенсәлекле шау барлыҡҡа килә, ә тауыштың ҡатнашлығы был саҡта аҙыраҡ була.

Шаулы тартынҡылар түбәндәгеләр: [б], [п], [д], [т], [к], [ҡ], [’], [в], [ф], [з], [с], [ҙ], [ҫ], [ц], [ч], [ж], [ш], [щ], [г], [ғ], [х], [һ].

Талғын (сонор) тартынҡыларҙы әйткәндә лә ауыҙ ҡыуышлығында ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килә, тик, үпкәнән килгән һауа ағымы көсһөҙ булыу сәбәпле, шау ишетелмәй тиерлек, ә һауа ағымы ҡаршылыҡтарҙы урап үтә, танау ҡыуышлығы һәм ауыҙ аша сыға. Шулай итеп, талғын тартынҡылар яһалғанда, тауыш өҫтөнлөк итә, ә шауҙың ҡатнашлығы аҙ була.

Талғын тартынҡыларға [л], [м], [н], [ң], [р], [й], [ў] фонемалары ҡарай.

Яһалыу үҙенсәлектәренә ҡарап, шаулы тартынҡылар, үҙ сиратында, яңғырау һәм һаңғырау фонемаларға бүленә. **Яңғырау тартынҡылар** бер аҙ тауыш ҡатнашлығы булған шау ярҙамында яһала, был саҡта тауыш ярылары бер-береһенә яҡын киләләр, ныҡ тартылалар һәм көслө тирбәләләр. Яңғырау тартынҡыларға түбәндәге фонемалар инә: [б], [в], [г], [ғ], [д], [ж], [з], [ҙ].

**Һаңғырау** тартынҡылар шау ярҙамында яһала, ә тауыш ҡатнашмай, сөнки был саҡта тауыш ярылары һүлпән булалар һәм тирбәлмәйҙәр. Һаңғырау тартынҡыларға түбәндәгеләр инә: [п], [ф], [т], [с], [ҫ], [ц], [ч], [ш], [щ], [к], [ҡ], [’], [х], [һ].

Яңғыраулыҡ-һаңғыраулыҡ билдәһе буйынса парлы һәм парһыҙ тартынҡылар бар.

**Парлы тартынҡылар** түбәндәгеләр: [б] – [п], [в] – [ф], [г] – [к], [ғ] – [ҡ], [д] – [т], [ж] – [ш], [з] – [с], [ҙ] – [ҫ].

**Парһыҙ** тартынҡыларға һәр саҡ һаңғырау әйтелгән шаулы тартынҡылар [ц], [ч], [щ], [х], [һ], [’] һәм һәр саҡ яңғырау булған талғын тартынҡылар [й], [м], [н], [ң], [л], [р], [ў] ҡарай.

Үрҙә ҡаралған төп өс принциптан тыш, башҡорт теленең тартынҡыларын тағы өҫтәлмә бер принцип – **телдең урта** һәм **артҡы өлөшөнөң** торошо буйынса төркөмләргә мөмкин. Был принцип буйынса тартынҡыларҙың **палаталь** (латинса: *pala-*

*tum* – «ҡаты аңҡау») һәм веляр (латинса: *velaris* – «йомшаҡ аңҡау») варианттары айырып йөрөтөлә[1].

Веляр тартынҡылар тип өҫтәлмә артикуляция, йәғни телдең артҡы өлөшөнөң йомшаҡ аңҡауға күтәрелеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән ҡалын тартынҡыларға әйтәләр.

Палаталь тартынҡылар тип өҫтәлмә артикуляция, йәғни телдең урта өлөшөнөң ҡаты аңҡауға күтәрелеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән нәҙек тартынҡыларға әйтәләр. Бындай өҫтәлмә артикуляция бигерәк тә телмәр өндәренең нәҙек варианттарына хас. Мәҫәлән: [ҡ] – [к'] (нәҙеклек диакритик билдә менән күрһәтелә), [ғ] – [г'], [л] – [л'], [р] – [р'] һ. б.[2] Ләкин фонологик яҡтан палатализация һәм веляризация күренештәренең башҡорт телендә ҙур әһәмиәте булмағанлыҡтан, транскрипцияла палаталь (нәҙек) һәм веляр (ҡалын) тартынҡылар күрһәтелмәне.

Башҡорт теленең тартынҡы фонемаларының классификацияһын түбәндәге таблицала күрергә мөмкин.

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө, 1986. 89-сы б.

[2] Шунда уҡ.

## Тартынҡы өндәрҙең (фонемаларҙың) классификацияһы

| Артикуляция рәүеше | Тауыш һәм шау ҡатнашлығы | | Артикуляция урыны | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | Ирен | | Тел | | | | | Тамаҡ | |
| | | | | | Тел алды | | | | Тел уртаһы | Тел арты | Тамаҡ (фарин-галь) | Тамаҡ төбө |
| | | | Ике ирен | Теш | | | Аңҡау | | | | |
| | | | | Ирен теш | Теш араһы | Теш | Алғы аңҡау | Урта аңҡау | Артҡы аңҡау | | |
| Шартлаулы | шаулы | яңғырау | [б] | | | [д] | | [г] | [ғ] | | [ʼ] |
| | | һаңғырау | [п] | | | [т] | | [к] | [ҡ] | | |
| Ҡуш (аффрикат) | шаулы | һаңғырау | | | | [ц] | [ч] | | | | |
| Ышҡыулы (фрикатив) | шаулы | яңғырау | | [в] | [ҙ] | [з] | [ж] | | [х] | [h] | |
| | | һаңғырау | | [ф] | [ҫ] | [с] | [ш], [щ] | | | | |
| | талғын (сонор) | | [ў] | | | | | [й] | | | |
| Танау | талғын (сонор) | | [м] | | | [н] | | | [ң] | | |
| Тел эргәһе | талғын (сонор) | | | | | [л] | | | | | |
| Ҡалтыраулы (вибрант) | талғын (сонор) | | | | | | [р] | | | | |

### *Тартынҡы өндәргә (фонемаларга) характеристика*

1. **Ирен тартынҡылары:** [б], [п], [ў], [м]; [в], [ф].

**Ике ирен тартынҡылары:** [б], [п], [ў], [м].

[б] – шартлаулы; шаулы, яңғырау, [п] өнөнөң яңғырау пары; ирен, ике ирен тартынҡыһы.

[п] – шартлаулы; шаулы, һаңғырау, [б] өнөнөң һаңғырау пары; ирен, ике ирен тартынҡыһы.

[ў] / [ү̆] (уау) – ышҡыулы, талғын; ирен, ике ирен тартынҡыһы. Был өн өсөн хәҙерге алфавитта махсус билдә алынмаған. Әгәр [ў] һүҙ башында килһә, в хәрефе (билдәһе) аша, һүҙ уртаһында килһә, **у**, **ү** хәрефтәре (билдәләре) менән бирелә.

[м] – танау; талғын; ирен, ике ирен тартынҡыһы.

**Ирен-теш тартынҡылары:** [в], [ф].

[в] – ышҡыулы (фрикатив); шаулы, яңғырау, [ф] өнөнөң яңғырау пары; ирен, ирен-теш тартынҡыһы.

[ф] – ышҡыулы (фрикатив); шаулы, һаңғырау, [в] өнөнөң һаңғырау пары; ирен, ирен-теш тартынҡыһы.

2. **Тел тартынҡылары:** [ҙ], [ҫ], [д], [т], [ц], [з], [с], [н], [л], [ч], [ж], [ш], [щ], [р], [г], [к], [й], [ғ], [ҡ], [х], [ң].

**Тел-тел алды, теш-теш араһы тартынҡылары:** [ҙ], [ҫ].

[ҙ] – ышҡыулы; шаулы, яңғырау, [ҫ] өнөнөң яңғырау пары; тел-тел алды, теш-теш араһы тартынҡыһы.

[ҫ] – ышҡыулы; шаулы, һаңғырау, [ҙ] өнөнөң һаңғырау пары; тел-тел алды, теш-теш араһы тартынҡыһы.

**Тел-тел алды, теш-теш тартынҡылары:** [д], [т], [ц], [з], [с], [н], [л].

[д] – шартлаулы; шаулы, яңғырау, [т] өнөнөң яңғырау пары; тел-тел алды, теш-теш тартынҡыһы.

[т] – шартлаулы; шаулы, һаңғырау, [д] өнөнөң һаңғырау пары; тел-тел алды, теш-теш тартынҡыһы.

[ц] – ҡуш (аффрикат); шаулы, һаңғырау; тел-тел алды, теш-теш тартынҡыһы.

[з] – ышҡыулы; шаулы, яңғырау, [с] өнөнөң яңғырау пары; тел-тел алды, теш-теш тартынҡыһы.

[с] – ышҡыулы; шаулы, һаңғырау, [з] өнөнөң һаңғырау пары; тел-тел алды, теш-теш араһы тартынҡыһы.

[н] – танау; талғын; тел-тел алды, теш-теш тартынҡыһы.

[л] – тел эргәһе; талғын; тел-тел алды, теш-теш тартынҡыһы.

**Тел-тел алды, аңҡау-алғы аңҡау тартынҡылары:** [ч], [ж], [ш], [щ], [р].

[ч] – ҡуш (аффрикат); шаулы, һаңғырау; тел-тел алды, аңҡау-алғы аңҡау тартынҡыһы.

[ж] – ышҡыулы; шаулы, яңғырау, [ш] өнөнөң яңғырау пары; тел-тел алды, аңҡау-алғы аңҡау тартынҡыһы.

[ш] – ышҡыулы; шаулы, һаңғырау, [ж] өнөнөң һаңғырау пары; тел-тел алды, аңҡау-алғы аңҡау тартынҡыһы.

[щ] – ышҡыулы; шаулы, һаңғырау; тел-тел алды, аңҡау-алғы аңҡау тартынҡыһы.

[р] – ҡалтыраулы (вибрант); талғын; тел-тел алды, аңҡау-алғы аңҡау тартынҡыһы.

**Тел-тел уртаһы, аңҡау-урта аңҡау тартынҡылары:** [г], [к], [й].

[г] – шартлаулы; шаулы, яңғырау, [к] өнөнөң яңғырау пары; тел-тел уртаһы, аңҡау-урта аңҡау тартынҡыһы.

[к] – шартлаулы; шаулы, һаңғырау, [г] өнөнөң һаңғырау пары; тел-тел уртаһы, аңҡау-урта аңҡау тартынҡыһы.

[й] – ышҡыулы; талғын; тел-тел уртаһы, аңҡау-урта аңҡау тартынҡыһы.

**Тел-тел арты, аңҡау-артҡы аңҡау тартынҡылары:** [ғ], [ҡ], [х], [ң].

[ғ] – шартлаулы; шаулы, яңғырау, [ҡ] өнөнөң яңғырау пары; тел-тел арты, аңҡау-артҡы аңҡау тартынҡыһы.

[ҡ] – шартлаулы; шаулы, һаңғырау, [ғ] өнөнөң һаңғырау пары; тел-тел арты, аңҡау-артҡы аңҡау тартынҡыһы.

[х] – ышҡыулы; шаулы; тел-тел арты, аңҡау-артҡы аңҡау тартынҡыһы.

[ң] – танау; талғын; тел-тел арты, аңҡау-артҡы аңҡау тартынҡыһы.

**3. Тамаҡ тартынҡылары:** [һ], [’].

**Тамаҡ (фарингаль) тартынҡы:** [һ].

[һ] – ышҡыулы; шаулы; тамаҡ-тамаҡ (фарингаль) тартынҡыһы.

**Тамаҡ-тамаҡ төбө тартынҡыһы:** [ ’].

[’ ] – шартлаулы; шаулы, һаңғырау; тамаҡ-тамаҡ төбө тартынҡыһы.

## ТЕЛМӘРҘЕҢ ФОНЕТИК КИҪӘКТӘРГӘ БҮЛЕНЕШЕ

### Ижек. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү үҙенсәлектәре

Телмәр өндәре, бер-бер артлы килеп, телмәр ағышын барлыҡҡа килтерә. Шуға бәйле телмәр ағышы айырым өндәргә түгел, ә ижектәргә тарҡала. Ижек тип һүҙҙең бүленмәй, бер тын менән әйтелә торған быуынына әйтәләр. Ижек бер өндән дә, ике, өс, дүрт, хатта биш-алты өндән дә торорға мөмкин: *ә-сәй, ба-ла, ҡарт-лыҡ, Маркс* һ. б. Һүҙҙәрҙә ижектәр һаны, ғәҙәттә,

берҙән алып унға тиклем етергә мөмкин. Мәҫәлән: *ат, баш, юл* – бер ижекле һүҙҙәр; *а-тай, ҡа-ла, ба-ла* – ике ижекле һүҙҙәр, *о-ла-тай, баш-ҡорт-са* – өс ижекле һүҙҙәр, *ке-се-лек-ле, иғ-ти-бар-һыҙ* – дүрт ижекле һүҙҙәр, *ур-ман-да-ғы-лар, ба-ла-лар-ҙы-ҡы* – биш ижекле һүҙҙәр, *ап-ты-раш-ҡан-һы-ғыҙ-ҙыр, бүл-мә-лә-ре-геҙ-ҙә-ме* – ете ижекле һүҙҙәр, *уй-лаш-тыр-ғы-ла-ма-ған-һы-ғыҙ-ҙыр* – ун ижекле һүҙҙәр һ. б.

Ижек тел ғилемендә ике планда: физиологик һәм акустик яҡтан тикшерелә.

Физиологик яҡтан (яһалышы буйынса) ҡарағанда, ижек тип бер тын өрөшө менән әйтелгән өнгә йәки бер нисә өн ҡушылмаһына әйтәләр.

Акустик яҡтан (яңғырашы буйынса) ижек тип күршеләренә ҡарағанда иң көслө яңғырашлы өн булған телмәр киҫәгенә әйтелә.

Төп башҡорт һүҙҙәрендә ижектәр бер, ике, өс һәм дүрт өндән торорға мөмкин, тик уларҙың береһе мотлаҡ ижек яһай алыу һәләтенә эйә булырға тейеш, сөнки бөтә өндәр ҙә ижек яһай алмайҙар. Ошо билдәләргә ҡарап, и ж е к я һ а й а л ы у с ы һәм и ж е к я һ а й а л м а у с ы өндәрҙе айырып йөрөтәләр. Башҡорт телендә ижек яһай алыусы өндәргә иң тәүҙә бөтә һуҙынҡылар инә: *а-ма-нат, у-ҡы, ик-мәк, тот-то, ө-лә-сәй, ү-лән, ы-рыҫ-лы, эш-сән* һ. б. Ҡайһы берҙә талғын тартынҡылар ҙа ижек яһай алалар[1]. Был күренеш рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә, шулай уҡ ымлыҡтарҙа күҙәтелә: а) *би-но-кль, ком-ба-йн, кло-ун, ми-ти-нг* һ. б.; б) *тррр, һммм, фррр* һ. б.

Һүҙ составындағы ижек яһай алыусы өндәрҙең урынына ҡарап, а с ы ҡ һәм я б ы ҡ, шулай уҡ ҡ а п л а н ғ а н һәм ҡ а п л а н - м а ғ а н ижек төрҙәре айырыла.

А с ы ҡ ижектәр һуҙынҡыларға тамамлана: *ҡа-ла, йә-йә, та-ма-ша, то-та, кө-тә, си-сә.*

Я б ы ҡ ижектәр тартынҡыларға тамамлана: *ҡайт, юл-даш, ип-тәш, таш-баш.*

Ҡ а п л а н ғ а н ижектәр тартынҡыларға башлана: *йәш-лек, тәү-лек, бал-та, бы-саҡ*, ҡ а п л а н м а ғ а н ижектәр һуҙынҡыларға башлана: *ат, ур-ман, өй-рәк, ү-лән.*

Баҫым төшөү-төшмәүгә ҡарап, ижектәр б а ҫ ы м л ы һәм б а - ҫ ы м һ ы ҙ төрҙәргә бүленәләр. Мәҫәлән, *ты-ныс-лы́ҡ, кил-гә́н-беҙ* һүҙҙәрендә баҫым ҡабул иткән *-лыҡ, -гән* ижектәре, көслөрәк тауыш менән әйтелеп – баҫымлы, ә ҡалғандары баҫымһыҙ була.

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө, 1986. 92-се б.

һүҙҙәрҙең ижектәргә бүленеше һәр саҡта ла даими түгел. Аффикстар ҡабул иткәндә йыш ҡына һүҙҙең һуңғы ижектәренең сиктәре боҙола: *таш: та-шы, ҡайт: ҡай-та, ете: е-тен-се.*

Башҡорт телендә һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү өндәрҙең яңғырашы арта барыу принцибына нигеҙләнә. Был законлылыҡ башланғыс ижектән башҡа ҡалған ижектәрҙең бөтәһендә лә һаҡлана. Тәүге ижек теләһә ниндәй өн менән башланырға мөмкин, ә ҡалған ижектәр һәр саҡта ла тик тартынҡыларға ғына башлана ала. Мәҫәлән, *ал-да-ны-раҡ, ҡайт-ҡы-лаш-тыр-һа-ғыҙ-сы.*

Башҡорт теленә, ҡәрҙәш төрки телдәрендәге кеүек үк, кәтғи ижек ҡалыптары хас. Улар түбәндәгеләр:

1) һуҙынҡы: *ә-сәй, ы-сын, у-лай, о-йоҡ;*

2) һуҙынҡы + тартынҡы: *ат, ул, ос, эл;*

3) тартынҡы + һуҙынҡы: *ба-ла, ке-ше, та-ба, ҡа-ла;*

4) тартынҡы + һуҙынҡы + тартынҡы: *баш-тан, кил-гән,* [йу]*л-даш;*

5) һуҙынҡы + тартынҡы + тартынҡы: *ант, илт, әйт, арт;*

6) тартынҡы + һуҙынҡы + тартынҡы + тартынҡы: *йылт, ҡарт, ҡылт.*

Телмәр ағышында ижектәр ҙурыраҡ фонетик берәмектәргә – такттарға берләшәләр. Такт тип (латинса: *taktuk* – «тейеү, тәрәлеү») телмәрҙең бер тын алышта әйтелеп, паузалар ярҙамында айырылып торған интонацион киҫәгенә әйтәләр. Телмәр ағышының бындай берәмектәре һүҙҙәр төркөмөнә, ҡайһы саҡта айырым һүҙҙәргә тап килергә мөмкин. Мәҫәлән: *Артист | үҙ героиняһының кисерештәрен | оҫта аса* һөйләмендә өс такт бар: *артист; үҙ героиняһының кисерештәрен; оҫта аса.* Такттарға бүленеш интонация һәм паузалар менән генә түгел, ә һүҙҙәрҙең үҙ-ара семантик төркөмләнеше менән дә бәйле. Юғарылағы һөйләмдә паузаларҙы белдереүсе вертикаль һыҙыҡтарҙы башҡаса ҡуйып сыҡһаҡ, такттарға бүленеш тәбиғи булмаҫ ине.

Телмәр ағышында такттар тағы ла ҙурыраҡ интонацион-мәғәнәүи киҫәктәргә – **синтагмаларға** (грекса: *syntagma* – «берләшкән, бер булған») берләшә. Синтагма – бер нисә һүҙҙән төҙөлөп, интонация һәм мәғәнә яғынан бер бөтөндө тәшкил иткән синтаксик берәмек. Контекстың характерына ҡарап, синтагма һөйләм йәки һүҙбәйләнеш менән тап килергә мөмкин. Синтагманың семантик һәм грамматик тәбиғәтен асыуҙа телмәр ағышының, контекстың әһәмиәте ҙур. Синтагма, телмәр берәмеге булараҡ, аралашыу процесында барлыҡҡа килә, ул – һөйләмдең сағыштырмаса үҙ аллы мәғәнәгә эйә булған бер өлөшөн тәшкил итеүсе быуын. Синтагмалар телмәрҙә паузалар менән айырыла. Пауза һауа запасы, тын алыу өсөн кәрәк. Тәжрибәле дикторҙар, ораторҙар, лекторҙар тын алыуҙы һиҙҙермәйсә эшләйҙәр. Тәжри-

бәһеҙ диктор, тейешле-тейешһеҙ урында тын алыу сәбәпле, мәғәнәгә зыян килтереп уҡырға мөмкин. Синтагма телмәрҙең мәғәнәһенә бәйле рәүештә барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, *Яҡшы ултыр* тигән һөйләмде, мәғәнәһен үҙгәртерҙәй итеп, төрлөсә уҡып була: *Яҡшы ултыр* ‖ – *Яҡшы* | *ултыр* ‖.

Телмәрҙең синтагмаларҙан да ҙурыраҡ киҫәге **фраза** (грекса: *phrasis* – «әйтем») тип йөрөтөлә. Фраза – аралашыу сараһы булып хеҙмәт итеүсе ҡатмарлы телмәр берәмеге. Ҡайһы бер телселәр фразаны синтаксик берәмек булған һөйләм менән тиңләһәләр ҙә, үҙенең ритмик-мелодик үҙенсәлектәре буйынса фраза менән һөйләм бер-береһенә тап килмәҫкә лә мөмкин. Фраза, ғәҙәттә, дөйөм бер уй-фекерҙе, берәй нәмә тураһында хәбәр итеүҙе үҙендә тотҡан һөйләмдәр төркөмөнән тора.

Миҫал өсөн түбәндәге ике телмәр өҙөгөн ҡарағыҙ: 1. *Ысынлап та, ҙур таш ҡала урамдары тәү ҡарамаҡта ғына шулай тыныс тойолған икән* (Д. Бүләков); 2. *Ана, ялбыр тирәккә һөйәлеп торған егет менән ҡыҙ ҡапыл яҡтыға тартылды, береһе сәғәтенә ҡараған булды, икенсеһе, егет остоғо, ашығып-ашығып яҡындағы сирень ботаҡтарын тунарға кереште* (Д. Бүләков).

Бирелгән өҙөктәрҙең һәр ҡайһыһы мәғәнәһе һәм ритмик-мелодик үҙенсәлеге буйынса берәр фразаны тәшкил итә: тәүге фраза бер ябай һөйләмгә тап килһә, икенсеһе өс ябай һөйләмде берләштерә.

## Баҫым. Башҡорт теленең баҫым системаһы

Телмәрҙең бер киҫәгенең (ижектең, һүҙҙең, такттың) башҡаларына ҡарағанда көслөрәк әйтелешен баҫым тиҙәр. Тел ғилемендә баҫым төшөнсәһе интернациональ термин менән **акцент** (латинса: *accentus* – «баҫым») тип йөрөтөлә, ә баҫым тураһындағы фән **акцентология** тип атала.

Һүҙ (ижек) баҫымы – һүҙҙәге бер ижектең башҡаларынан айырылып тороуы. Һүҙ баҫымы, ғәҙәттә, ижек баҫымы менән тап килә, шуға күрә уларҙың икеһен бер термин менән – ижек баҫымы тип атарға мөмкин[1].

Күп ижекле һүҙҙәрҙе әйткәндә, үпкәнән өрөлгән тындың (һауаның) көсөргәнешен талап иткән ижек баҫымлы ижек тип, баҫым төшмәгәне баҫымһыҙ ижек тип атала.

---

[1] *Сафиуллина Ф. С.* Тел гыйлеменә кереш. Югары уку йортларының филология факультеты студентлары өчен дәреслек. Казан, 2001. 62 нче б.

Башҡорт телендә һүҙ баҫымы экспираторлы (латинса: *expiro* – «һулыш сығарам»; «һауа, тын өрәм») баҫым, йәки динамик (грекса: *dynamis* – «көс») баҫым һанала[1]. Экспираторлы баҫым үпкәнән килгән һауа ағымының көсөнә һәм өндәрҙең оҙонлоғона бәйләнгән. Шуның өсөн һүҙ составындағы баҫымлы ижек башҡаларына ҡарағанда үҙенең көсөргәнешле тауыш һәм оҙонораҡ әйтелеүе менән айырылып тора.

Ижек баҫымы һүҙ составындағы баҫымлы ижек эсендәге өндәрҙең артикуляцияһына, төрлө көсөргәнеш менән әйтелеүенә һәм оҙонлоғона бәйләнгән. Ижек баҫымының түбәндәге төрҙәре билдәле:

1) баҫымлы ижек тик бер өндән генә торһа, ул тигеҙ баҫым тип атала (*а́-ша, у́-ҡыт, те-а́-тр*);

2) бер нисә өндән торған баҫымлы ижек һуҙынҡыға тамамланһа, ул ижектең баҫымы юғары күтәрелеүсе баҫым тип атала (*ба-ра́, ҡа-ты́, та-ра-та́*);

3) баҫымлы ижек, һуҙынҡы менән башланып, тартынҡыға тамамланһа, ул ижектең баҫымы түбән төшөүсе баҫым була (*у́т, ә́йт, у́л-тыр, ки́л-тер*);

4) баҫымлы ижектең башы ла, аҙағы ла тартынҡыларҙан торһа, ул ижектең баҫымы юғары күтәрелеп, түбән төшөүсе баҫым тип йөрөтөлә (*дәф-тә́р, ҡә-ләм́, ки-та́п*).

Төп башҡорт һүҙҙәрендә баҫым даими урынлы, йәғни ул, ҡағиҙә булараҡ, һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенә төшә, һүҙгә аффикстар ҡушылған һайын, һуңғы ижеккә күсә бара: *ағա́с, ағасы́, ағастա́р, ағастарғա́* һ. б. Был фонетик законлылыҡҡа рус теленән боронғо осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә буйһона. Мәҫәлән: *торба́ (труба́), кенәгә́ (кни́га), эҫкéрт (скúрда), эләүкә́ (ла́вка)* һ. б.

Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә баҫым башланғыс һәм урталағы ижектәргә лә төшөргә мөмкин:

1) һорау алмаштарында: *кéмгә? ни́мәне? ни́ндәй? ни́сек? ни́сә? ку́пме? ҡа́йһы? ҡа́йҙа? ҡа́сан?;*

2) ҡайһы бер рәүештәрҙә: *һа́ман, та́мам, йә́нә, хә́ҙер, ба́йтаҡ, кө́скә;*

3) ярҙамсы һүҙҙәрҙә: *ә́ммә, лә́кин, сө́нки, йә́ки, бә́лки, ха́тта.*

Ҡайһы бер аффикстар һәм киҫәксәләр баҫым ҡабул итмәйҙәр, шунлыҡтан баҫым уларҙың алдындағы ижеккә төшә:

1) хәбәрлек категорияһы аффикстары алдындағы ижеккә: *уҡыусы́мын, баты́рһың, районда́нмын;*

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө: 1964. 62-се б.

2) ҡылымдарҙың юҡлыҡ аффиксы алдындағы ижеккә: *йоҡла́ма, йоҡла́май, йоҡла́маған, йоҡла́магандар;*

3) ***-мы, -ме, -мо, -мө*** һорау киҫәксәләре алдындағы ижектәргә: *ҡайтҡа́нмы, өйҙә́ме, ҡаланыҡы́мы, һыуыҡмы;*

4) ***-сы, -се, -со, -сө*** раҫлау-көсәйтеү модаллеге аффикстары алдындағы ижеккә: *күргә́нсе, баягы́сы, әйткәндә́рсе, ҡу́йсы;*

5) ***-дыр, -дер, -тыр, -тер, -ҙыр, -ҙер, -лыр, -лер*** икеләнеү алдындағы ижеккә: *һөйләгә́ндер, иптәше́лер, киләлә́рҙер.*

Рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән һуңғараҡ осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә баҫым нигеҙ телдәгесә ҡала, башҡорт теленең баҫым системаһына буйһонмай һәм, ул һүҙҙәргә аффикстар ҡушылғанда ла, үҙ урынын үҙгәртмәй: *дека́да – дека́даға, телеви́зор – телеви́зорҙы, ле́ксика – ле́ксикала, награ́да – награ́далар.*

Бер тамырҙан йәки нигеҙҙән торған һүҙҙәрҙә, ҡағиҙә булараҡ, бер генә баҫым була. Уларҙан айырмалы рәүештә, ҡушма, парлы, ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙә, ҡайһы бер фразеологизмдарҙа көслө әйтелешле **төп баҫымдан** тыш уға ҡарағанда көсһөҙөрәк булған **өҫтәлмә баҫым** булыуы күҙәтелә[1]. Был күренеште түбәндәге миҫалдарҙа күрергә мөмкин:

1) ҡушма һүҙҙәр: *а̋шъяулы́ҡ*, ала̋буға́, ҡыҙы̋лтү́ш, бе̋лба́у;*

2) парлы һүҙҙәр: *та́у-та̋ш, тиме́р-томо̋р, а̋яҡ-ҡу́л, һирә́к-һая̋ҡ, һауы́т-һаба̋;*

3) фразеологизмдар: *энә́ буйы е̋р, бе́р бите а̋й, ҡу́л һелтә̋р, ая́ҡ салы̋у.*

Өҫтәлмә баҫым фразеологик берәмектәрҙең, ҡушма һәм ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең тәүге компоненттарына, ә төп баҫым аҙаҡҡы компоненттарға төшә, тик парлы һүҙҙәрҙә генә был дөйөм законлылыҡ эҙмә-эҙ һаҡланмай[2].

Башҡорт телендә һүҙ баҫымы бер нисә функция үтәй:

1) фонемаларҙың төрлөсә әйтелешен, уларҙың варианттарын билдәләй: *айы́р – айыра́та, эпо́с – геро́й, агроно́м;*

2) ябай һүҙбәйләнештәрҙән ҡушма һүҙҙәр формалашыуында ҡатнаша: *алма́ + ағас́ = алмаға́с, ҡара́ + иҙе́л = Ҡариҙе́л, а́ҡ + иҙе́л = Ағиҙе́л;*

3) һүҙҙең лексик мәғәнәләрен билдәләй, мәҫәлән: *физи́к* (исем) – *фи́зик есем* (сифат), *акаде́мик* (исем) – *академи́к отпуск*

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 94-се б.

* Иҫкәрмә. Төп баҫым ғәҙәттәге ҡыя һыҙыҡ менән, ә өҫтәлмә баҫым ике ҡыя һыҙыҡ менән бирелә.

[2] *Хәҙерге* башҡорт теле. Күрһәтелгән хеҙмәт. 94-се б.

(сифат), *барлыҡ* (исем) – *барлыҡ иген* (алмаш), *яңы кейем* (сифат) – *яңы килде* (рәүеш), *бүлмә* (исем) – *бүлмә* (ҡылым), *атыгыҙ* (исем) – *атыгыҙ* (ҡылым);

4) төрлө грамматик категорияларҙы айырыуҙа ҡатнаша:

а) башҡа һөйкәлеш формаларынан айырмалы рәүештә, бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарында баҫым башланғыс ижеккә (*ҡара, аша, атла*), *-йым/-йыҡ* аффикслы теләк-өндәү һөйкәлеше формаларында өҫтәлмә баҫым ике урталағы ижеккә төшә (*ҡарайым – ҡарайыҡ, ашайым – ашайыҡ, атлайым – атлайыҡ*);

б) эйәлек һәм хәбәрлек категорияларының күплектәге 1-се зат формаларын билдәләүҙә: *беҙ эшсебеҙ, төҙөүсебеҙ, уҡыусыбыҙ* (хәбәрлек категорияһы) – *беҙҙең эшсебеҙ, төҙөүсебеҙ, уҡыусыбыҙ* (эйәлек категорияһы);

в) сифаттарҙың дәрәжә категорияһы яһалышында: *ҡара – ҡап-ҡара, еңел – еп-еңел, яҡты – яп-яҡты*[1].

Һүҙ йәки ижек баҫымынан тыш, телмәр ағышында шулай уҡ такт һәм фраза баҫымдары айырыла.

**Такт баҫымы.** Телмәр такты составындағы мәғәнәһе буйынса мөһимерәк булған бер йәки бер нисә һүҙҙе айырып әйтеү такт баҫымы тип атала. Такт бер һүҙҙән торһа, такт баҫымы һүҙ баҫымы менән тап килә.

Бер такт эсендәге баҫымһыҙ әйтелгән ошондай һүҙ баҫымлы һүҙ алдында торһа, проклитика (грекса: proklitikos – алға эйелеүсе) тип атала. Башҡорт телендә ҡайһы бер сифаттар, алмаштар, һандар йыш ҡына, үҙенән һуң килгән баҫымлы һүҙгә эйәреп, проклитика булып киләләр: *ваҡыт ҡына, мин әйтәм, ул алған, теге кеше, ошо ауыл; өс рәт, ике әбей, оло ат, күк әрем, әҫе көн*[2].

Әгәр баҫымһыҙ һүҙҙәр баҫымлы һүҙҙең аҙағынан киләләр икән, ул саҡта бындай һүҙҙәрҙе энклитика (грекса: *enklitikos* – «артҡа эйелеүсе») тип йөрөтәләр. Энклитика рәүешендә йыш ҡына ярҙамсы һүҙҙәр (бәйләүестәр, теркәүестәр, киҫәксәләр), ҡайһы бер алмаштар киләләр: *ҡала баҡсаһы, көмөш йөҙөк, һәр кем, ҡош кеүек; ҡарты ла, йәше лә; башланды инде, әйттем бит, килгәнме ни, һөйлә әле*[3].

**Фраза баҫымы.** Фраза составындағы мәғәнә яғынан мөһимерәк бер телмәр тактын көслө баҫым һәм интонация менән айырып әйтеүгә фраза баҫымы тиҙәр. Мәҫәлән:

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 94-се б.

[2] Шунда уҡ. 95-се б.

[3] Шунда уҡ. 96-сы б.

*Мин, заманым, тиеп ҡысҡырманым,*
*Йөрәгемдә заман ҡысҡырҙы...*

Р. Ғарипов.

Был текст бер фразаны тәшкил итә, ул бер нисә тактҡа бүленә (*мин* | *заманым* | *тиеп ҡысҡырманым* || *йөрәгемдә* | *заман ҡысҡырҙы* ||), шуларҙың һуңғыһы, семантик һәм интонацион яҡтан айырылып торғаны (*заман ҡысҡырҙы*), фраза баҫымы ҡабул итә[1].

Интеллектуаль һәм эмоциональ йөкмәткеле телмәр аспектынан сығып, логик һәм эмфатик баҫым төрҙәрен билдәләйҙәр.

**Логик баҫым.** Фраза эсендә берәй һүҙҙе йәки тактты, уларҙың мәғәнә көсөн арттырыу маҡсатында фраза баҫымы һәм интонация менән айырып әйтеү логик (грекса: *logikos* – «мәғәнәле, фекерле») баҫым тип атала. Логик баҫым һөйләм киҫәктәренең актуалләшеү күренеше менән бәйле. Ошонан сығып, бер үк фраза эсендәге һәр һүҙ йәки такт билдәле бер шартта логик баҫым ҡабул итә ала. Фразала логик баҫымлы һүҙ йәки динамик төркөм көслө интонация (баҫым) менән әйтелә һәм һөйләүсе өсөн дә, тыңлаусы өсөн дә фразаның мәғәнәһен аңлауҙа хәл иткес роль уйнай[2]. Быны түбәндәге миҫалдарҙа күрергә мөмкин:

1. *Морат* | *саңғы ярышында* | *беренселекте алды* || (был фразала логик баҫым төшкән һүҙ йәки такт юҡ, шунлыҡтан ул ғәҙәттәге хәл тураһында хәбәр итә).

2. *Морат* | ***саңғы ярышында*** | *беренселекте алды* || (был фразала «саңғы ярышында» такты актуалләшеп килә һәм логик баҫым менән әйтелә, шуға күрә башҡа урында түгел, ә нәҡ саңғы ярышында беренселекте алыуы айырып әйтелә).

3. *Морат* | *саңғы ярышында* | ***беренселекте алды*** || (бында «беренселекте» һүҙе актуалләшеп килә һәм логик баҫым менән әйтелә, шуға күрә тап беренселекте алыуы айырып әйтелә).

4. ***Морат*** | *саңғы ярышында* | *беренселекте алды* || (бында «Морат» һүҙе актуалләшеп килә һәм логик баҫым менән әйтелә).

**Эмфатик баҫым.** Фраза составындағы берәй һүҙҙе йәки тактты тыңлаусыға, уның тәьҫир итеү көсөн арттырыу маҡсатында, фраза баҫымы һәм үҙенсәлекле хис-тойғо менән айырып әйтеү эмфатик (грекса: *emphasis* – «тәьҫир итеү») баҫым тип

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 96-сы б.

[2] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. 70-се б.

йөрөтөлә. Мәҫәлән: *Ниңә генә көтмәнем икән?!* Был фразала эмфатик баҫым «ниңә генә» тигән тактҡа төшә, ул үкенеү тойғоһо менән әйтелә.

## Интонация һәм уның элементтары

**Интонация** (латинса: *intonare* – «ҡысҡырып әйтеү») – телмәр ағышында әйтелгән берәй фекерҙе айырып алыу һәм уға һөйләүсенең субъектив мөнәсәбәтен белдереү өсөн ҡулланылған ритмик-мелодик сара.

Һәр бер фраза интонация бөтөнлөгө менән айырылып тора. Телмәр өндәренең һәм интонацияның яһалышы бер үк артикуляцион-акустик процесс булып тора, шуның өсөн интонация ла өндәргә хас булған акустик сифаттар менән характерлана[1]. Интонацияның акустик компоненттарына мелодика, ритм, интенсивлыҡ (көсөргәнешлек), темп, пауза, тембр, шулай уҡ баҫым (фраза баҫымы, логик баҫым, эмфатик баҫым) һ. б. инә.

**Мелодика** (грекса: *melodikos* – «көйлө», «моңло») фраза эсендәге тауыштың бер күтәрелеп, бер түбәнәйеп тороуҙан яңғырашты үҙгәртеү менән тормошҡа ашырыла. Һөйләү маҡсатынан һәм әйтелгән фекергә һөйләүсенең субъектив мөнәсәбәтенән сығып, телмәрҙә хәбәр итеү, һорау, бойороу һәм өндәү интонациялары айырыла.

Хәбәр итеү интонацияһы фраза аҙағында тауыштың түбәнәйеүе менән билдәләнә: *Көндәр аяҙ тора.*

Һорау интонацияһы ваҡытында фразаның аҙағында тауыш күтәрелә, ә һорау мәғәнәһен тотҡан һүҙгә йә тактҡа логик баҫым төшә: *Китапхана нисәгә тиклем эшләй?*

Бойороу интонацияһы үҙенең мелодикаһы буйынса хәбәр итеү интонацияһына яҡын тора, тик был саҡта фраза башында тауыш юғарыраҡ була: *Кискә килеп етегеҙ.*

Өндәү интонацияһы телмәрҙә эмоциональ-экспрессив функция башҡара, уға эмфатик баҫым булыуы, ә фраза аҙағында тауыштың күтәрелеүе һәм көсөргәнешлелеге артыу хас. Өндәү һөйләмдәр генә түгел, хәбәр, һорау һәм бойороҡ һөйләмдәр ҙә өндәү интонацияһы менән әйтелергә мөмкин: *Һыуы бигерәк тәмле был шишмәнең!*

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 97-се б.

Фразаның өлөштәре араһындағы төрлө синтаксик мөнәсәбәттәрҙе һәм уларҙың эмоциональ-экспрессив биҙәктәрен сағылдырыу өсөн телмәрҙә айырым интонация төрҙәре (һанау, ҡаршы ҡуйыу, шарт, билдәләү, мөрәжәғәт итеү һ. б.) ҡулланыла[1].

**Телмәр ритмы** (грекса: *rhytmos* – «бер тигеҙ сиратлашыу») фраза һәм такт составындағы һүҙҙәрҙә баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙең бер тигеҙ сиратлашып килеүе менән бәйле. Быны поэтик телмәр менән прозаик телмәрҙе сағыштырып ҡарағанда асыҡ күрергә мөмкин, сөнки поэтик телмәргә үҙенсәлекле ритмика хас. Мәҫәлән, түбәндәге шиғыр юлдарында баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙең бирелеше үҙенсәлекле бер интонацион-ритмик телмәр хасил итә:

*Эсәр һыу, һулар һауаңды*
*Уйла, хәстәрлә, кеше!*
*Һыуың, һауаңды ҡурсалау,*
*Хәстәрләү – һинең эшең...*

Д. Талхина.

**Пауза** – фразалар, синтагмалар араһындағы туҡталыш. Пауза синтаксик мөнәсәбәттәрҙе белдереү өсөн дә ҡулланыла: *Уҡытыусы апайым бар, Уҡытыусы – апайым.* Пауза кешенең хис-тойғоһон, ваҡиғаларға мөнәсәбәтен сағылдырырға ла ярҙам итә. Мәҫәлән, юмор, ирония, йә булмаһа кинәйәне белдерер өсөн, һүҙҙәр араһындағы мәғәнәүи мөнәсәбәттәрҙән тыш, паузаның булыуы мотлаҡ: *Ярышта барыбер беренсе урынды алдығыҙ бит!.. Арттан ҡарағанда* (һөйләү телмәренән).

**Телмәр темпы** (итальянса: *tempo* – «ваҡыт») айырым һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең билдәле бер ваҡыт эсендә әйтелеү тиҙлегенән һәм фразаның өлөштәрен әйткәндәге паузаның оҙонлоғонан сығып билдәләнә. Темп һөйләүсенең телмәргә булған мөнәсәбәтен белдерә: әһәмиәтлерәк хәбәр яйыраҡ, икенсе дәрәжәләге мәғлүмәт ҡыҙыуыраҡ әйтелә һ. б., телмәр шарттарына ҡарап темп үҙгәрергә лә мөмкин.

**Телмәр интенсивлығы** (латинса: *intensio* – «көсөргәнешлелек») үпкәнән килгән һауа ағымының бер көсәйеп, бер көсһөҙләнеүе арҡаһында фразаның әйтелеү көсөргәнешлелегә артыу йә кәмеү менән бәйләнгән. Телмәр интенсивлығының үҙенсәлеген, ғәҙәттәге һөйләшкән саҡтағы телмәр ағышын ҙур аудитория

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 97-се б.

алдында сығыш яһаған оратор телмәре менән сағыштырғанда, асыҡ күҙәтә алабыҙ.

**Телмәр тембры** – өҫтәмә төҫмөрҙәр иҫәбенә тауыштың үҙгәреүе, телмәрҙең үҙенсәлекле биҙәге, йәғни өндәрҙең артикуляцион-акустик үҙенсәлектәренән сығып, телмәрҙең билдәле бер эмоциональ-экспрессив төҫмөрләк алыуы. Беҙҙе кем тыңлауға ҡарап, тембр үҙгәрә. Мәҫәлән, беҙ балалар менән – бер төрлө, рәсми кешеләр менән икенсе төрлө һөйләшәбеҙ.

Шулай итеп, интонация – телмәрҙең семантик һәм эмоциональ төрлөлөгөн белдереү өсөн хеҙмәт иткән өндәрҙең артикуляцион-акустик билдәләренең, темп, интенсивлыҡ, ритм, мелодика, тембр күренештәренең үҙ-ара мөнәсәбәте һөҙөмтәһе.

Интонация ни тиклем бай һәм төрлө булһа, кешенең телмәре лә шул тиклем байыраҡ, күркәмерәк, үтемлерәк. Интонация яҙыуҙа тыныш билдәләре ярҙамында билдәләнә. Йыш ҡына интонацияны тыныш билдәләре менән генә еткереү ҡыйын була. Шуға күрә лә бер үк шиғыр, төрлө артистар уҡығанда, төрлөсә яңғырарға мөмкин.

Интонация ижтимағи характерға эйә. Телдә интонацион схемалар, интонацион ҡалыптар бар, һәм билдәле бер тел вәкиле, үҙен аңлауҙарын теләгәндә, уларҙы дөрөҫ һәм урынлы файҙалана ала. Мәҫәлән, әгәр һөйләүсе нимәнелер белергә теләһә, ул һорау интонацияһын ҡуллана; берәй нәмәгә һоҡлана, ғәжәпләнә, шатлана икән, уның телмәрендә тойғоло интонация барлыҡҡа килә. Телмәр ағышында интонация үҙгәрергә лә мөмкин, һөҙөмтәлә, телмәр темпына, паузаларға, тембрға бәйле интонацион варианттар барлыҡҡа килә. Оло кеше һәм бала интонацияһы, уҡытыусы һәм уҡыусы интонацияһы, сәләмәт кеше һәм ауырыу кеше интонацияһы шаҡтай айырылып тора.

Дөйөмләштереп әйткәндә, интонация – телмәрҙең биҙәге булған тондың үҙгәреше. Телмәрҙең маҡсатына, динамикаһына һәм компоненттарының нисбәтенә, ситуацияға, шарттарына ҡарап, ул һәр ваҡыт үҙгәреп тора, йәғни һәр ваҡыт хәрәкәттә була.

## ТЕЛМӘР АҒЫШЫНДА ӨНДӘРҘЕҢ (ФОНЕМАЛАРҘЫҢ) ҮҘГӘРЕШЕ

Телмәр ағышында өндәр бер-береһенә йоғонто яһайҙар һәм, ниндәй өн менән йәнәшә булыуына, ниндәй фонетик шарттарҙа килеүенә ҡарап, төрлө үҙгәрештәр кисерәләр. Телмәрҙәге өндәр үҙгәрешен **фонетик процестар** тиҙәр. Фонетик процестарҙың ике төрө айырып йөрөтөлә: 1) позицион үҙгәрештәр һәм 2) комбинаторлы үҙгәрештәр.

## Өндәрҙең позицион үҙгәрештәре

Өндәрҙең позицион (латинса: *positio* – «урынлашыу», «торош») үҙгәрештәре уларҙың һүҙҙәге урынына (һүҙ башы, һүҙ уртаһы, һүҙ аҙағы, ике һүҙ араһы) һәм баҫымға бәйле. Позицион үҙгәрештәргә түбәндәге процестар ҡарай: редукция, элизия, протеза, эпентеза һәм сингармонизм (өндәрҙең гармонияһы).

### *Редукция*

**Редукция** (латинса: *reductio* – «ҡыҫҡарыу», «кәмеү») тип һуҙынҡы өндәрҙең төрлө үҙгәрешкә (ҡыҫҡарыуға, кәмеүгә) бирелеүенә әйтәләр. Һуҙынҡы өндәрҙең редукцияһы һүҙҙең баҫымына бәйле. Күп ижекле һүҙҙәрҙә баҫым бөтә ижектәргә лә бер тигеҙ төшмәй. Уларҙың араһында көслө баҫым менән әйтелгән бер генә ижек була. Баҫымлы ижектең һуҙынҡыһы тулы яңғырашлы әйтелә, йәғни уның һаны ла, сифаты ла үҙгәрмәй. Баҫымһыҙ ижектәге һуҙынҡы өндөң физик билдәләре (көсө, оҙонлоғо, тембры) үҙгәрә, йәғни көсһөҙөрәк әйтелә һәм, көсһөҙ әйтелеү сәбәпле, йыш ҡына бөтөнләй төшөп ҡала. Баҫымһыҙ ижектәрҙәге һуҙынҡыларҙың көсһөҙләнеүе һәм шул арҡала бөтөнләй юғалыуы (төшөп ҡалыуы) **редукция** тип атала. Редукцияның тулы булмаған (йәки һан редукцияһы) һәм тулы (йәки сифат редукцияһы) төрҙәре бар. Башҡорт телендә, ғәҙәттә, тар әйтелешле [ы], [э(е)], [о°], [ө] һуҙынҡылары редукцияға бирелә.

**Тулы булмаған** редукция ваҡытында баҫымһыҙ һуҙынҡылар, үҙҙәренең тәүге сифатын юғалтмайынса тороп, бер ни тиклем ҡыҫҡа әйтеләләр. Мәҫәлән, *бойоро́ҡ, ологайы́у, тарыра́ҡ, айырата́, арыҫла́н* һүҙҙәрендә икенсе ижектәге [о°] һәм [ы] һуҙынҡылары баҫымһыҙ булғанға күрә, улар көсһөҙ әйтеләләр. Ләкин ул һуҙынҡылар үҙҙәренең тәүге сифаттарын юғалтмаған һәм [о°], [ы] өндәре булып ишетелә.

**Тулы** редукция ваҡытында һүҙҙәге баҫымһыҙ һуҙынҡылар бөтөнләй төшөп ҡала, йәғни үҙҙәренең сифатын да, һанын да юғалтып, нулгә әйләнә. Төп башҡорт һүҙҙәрендә, ғәҙәттә, ярым тар әйтелешле урта күтәрелеш һуҙынҡылары [ы], [э(е)], [о°], [ө] тулы редукцияға бирелеүсән. Һуҙынҡы өндәрҙең тулы редукцияһы түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

1) аффикстар ҡушылып, яңы һүҙҙәр яһалғанда, ҡайһы бер һүҙҙәрҙең тамырындағы һуҙынҡылар баҫымһыҙ позицияла төшөп ҡала, йәғни нуль фонемаға тигеҙләшә: *йоҡо – йоҡла, уйын – уйна, алты – алтмыш, ары, бире* тамыр һүҙҙәренән яһалған

*аръяҡ, бирьяҡ, арлы-бирле* һүҙҙәрендә лә [а], [э(е)] һуҙынҡылары тулы редукцияға бирелә;

2) төп башҡорт һүҙҙәре *бүрек, ирек* һәм боронғо осорҙа ғәрәп теленән үҙләштерелгән *милек, халыҡ, холоҡ* һүҙҙәре эйәлек категорияһы аффикстарын ҡабул иткәндә, тамырҙағы һуҙынҡылар баҫымын юғалта һәм әйтелештә төшөп ҡала: *бүрке, ирке, милке, халҡы, холҡо*;

3) ғәрәп теленән ингән бер төркөм исемдәрҙән **-и** аффиксы ҡушылып яһалған сифаттарҙа ла тулы редукцияға бәйле ике төрлө әйтелеш күҙәтелә: *ғилем – ғилми, рәсем – рәсми, синыф – синфи, сихыр – сихри, шиғыр – шиғри, шәхес – шәхси.*

Күрһәтелгән һуҙынҡыларҙың тулы редукцияға бирелеүе ошондай сәбәптәр менән аңлатыла: а) ярым тар әйтелешле урта күтәрелеш һуҙынҡылары [ы], [э(е)], [о°], [ө] үҙҙәренең артикуляцияһы буйынса тотороҡло түгел, шунлыҡтан баҫымһыҙ ижектә тороп ҡалыу менән уларҙың акустик билдәләре тиҙ юғалыусан; б) ғәҙәттә һуҙынҡыларҙың тулы редукцияға бирелеүе талғын (сонор) тартынҡылар [р], [л], [м], [н], [й], [ў] уратылышында саҡта күҙәтелә, сөнки талғын тартынҡылар үҙҙәренең артикуляцияһы менән һуҙынҡыларға яҡын торалар[1].

Тулы һәм тулы булмаған редукция мәсьәләһендә хәҙерге башҡорт яҙма телендә ике төрлө хәлде күҙәтергә була:

1) әйтелештә һуҙынҡы өндөң тулы редукцияһы булған урында орфографияла һуҙынҡы өн һаҡлана. Мәҫәлән, әйтелештә: [айрым], [арҫлан], [ҙурраҡ], [ҡаршлауыҡ], [тарраҡ], [яңлыш]; дөрөҫ яҙылышта: *айырым, арыҫлан, ҙурыраҡ, ҡарышлауыҡ, ҡыйышайыу, тарыраҡ, яңылыш;*

2) әйтелештә һуҙынҡы өндөң тулы булмаған редукцияһы урынында (йәғни һуҙынҡы өн көсһөҙ ишетелгән урында) орфографияла һуҙынҡы өн яҙылмай. Мәҫәлән, әйтелештә: [биҙерә], [бөҙөрә], [йо°мо°шаҡ], [күреше], [кәперән], [о°сорау], [тупыраҡ], [япыраҡ]; дөрөҫ яҙылышта: *биҙрә, бөҙрә, йомшаҡ, күрше, кәпрән, осрау, тупраҡ, япраҡ.*

## *Элизия*

Һуҙынҡы өндәрҙең телмәр ағышында ҡыҫырыҡлап сығарылыуы **элизия** (латинса: *elisio* – «ҡыҫырыҡлап сығарыу») тип атала. Элизия күренеше, ғәҙәттә, ике һүҙ араһында була. Һуҙын-

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 99–100-сө бб.

ҡы өнгә бөткән һүҙҙең артынса һуҙынҡы өн менән башланған һүҙ килһә һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, дөрөҫ әйтелештә ике һуҙынҡы өндөң береһе төшөп ҡала. Был саҡта әйтелешкә ярашлы рәүештә һүҙҙәрҙең фонетик ижектәргә бүленеше лә боҙола. Мәҫәлән: *кисә эшләнек* [ки-сәш-лә-нек].

Элизия күренеше, нигеҙҙә, яһалыштары буйынса бер төрлө йәки бер-береһенә яҡын булған һуҙынҡылар осрашҡанда барлыҡҡа килә:

1) ике һүҙ араһында киң әйтелешле һуҙынҡылар тап килгәндә:

[а] – [а]: *бара алманым* [баралманым];

[ә] – [ә]: *миңә әйтә* [миңәйтә];

[ә] – [а]: *килә алманым* [килалманым];

[а] – [ә]: *туҡта әле* [туҡтале];

2) ике һүҙ араһында киң һәм ярым киң әйтелешле һуҙынҡылар осрашҡанда:

[а] – [э]: *ҡала эргәһендә* [ҡаларгәһендә];

[а] – [о]: *арпа оно* [арпано];

[а] – [ө]: *бала өсөн* [баласөн];

[е] – [а]: *кеше араһында* [кешараһында];

[о] – [а]: *һоло ашат* [һолашат];

[ө] – [а]: *өсөнсө ай* [өсөнсай];

[ә] – [е]: *өйрә эстек* [өйрәстек];

[ә] – [о]: *сәскә орлоғо* [сәскәрлоғо];

[ә] – [ә]: *килә әле* [киләле];

[о] – [ә]: *ошо әкиәт* [ошәкиәт];

[ө] – [ә]: *төрлө әңгәмәләр* [төрләңгәмәләр];

3) ике һүҙ араһында тар һәм ярым тар әйтелешле һуҙынҡылар осрашҡанда:

[е] – [и]: *килде инде* [килдинде];

[е] – [у]: *килде улар* [килдулар];

[ы] – [и]: *ҡалды инде* [ҡалдинде];

[ы] – [у]: *тары уралар* [таруралар];

[о] – [у]: *оло улы* [олулы];

[ө] – [и]: *сөсө икмәк* [сөсикмәк];

[ө] – [у]: *көҙгө уңыш* [көҙгуңыш];

[ы] – [ө]: *балалы өйҙә* [балалөйҙә];

[и] – [э]: *ни эшләй* [нишләй].

Элизия күренеше ҡайһы бер ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышында ла сағылыш ала, был саҡта ул әйтелештә генә түгел, ә дөрөҫ яҙылышта ла норма булып ҡабул ителә: *алма+ағас = алмағас, ҡара+ағас = ҡарағас, арҡа+ауыл = Арҡауыл, күҙле+ут = күҙ-лут* һ. б.

Ике һүҙ араһында артикуляцияһы буйынса бер-береһенән нык айырылып тороусы киң әйтелешле [а], [ә] һуҙынҡылары менән тар әйтелешле [и], [у], [ү] һуҙынҡылары осрашһа, элизия күренеше күҙәтелмәй. Был саҡта һуҙынҡыларҙың әйтелешендә ошондай үҙгәреш барлыҡҡа килә: [а], [ә] фонемалары тулы өн булып асыҡ әйтелә, ә [и], [у], [ү] һуҙынҡылары үҙҙәренең артикуляцияһын үҙгәртә һәм [й], [ў], [ү̆] талғын фонемаларына тартым әйтелә башлай, һөҙөмтәлә, ике һүҙ араһында [ай], [әй], [аў], [әү̆] дифтонгылары яһала. Мәҫәлән:

[ай]: *ҡайта икән* [ҡайтайкән], *таҙа иҙән* [таҙайҙән];

[әй]: *килә ине* [киләйне], *өйгә инә* [өйгәйнә];

[аў]: *ҡала урамдары* [ҡалаўрамдары]; *бая уҡ* [байаўҡ];

[әү̆]: *кисә ук* [кисәү̆к], *түргә үтегеҙ* [түргәү̆тегеҙ] һ. б.

## *Протеза һәм эпентеза*

Башҡорт телендә һүҙ башында һәм һүҙ уртаһындағы ижектәрҙә ике тартынҡы өн йәнәшә тора алмай. «Башҡорт һүҙҙәренең ижек ҡалыбы буйынса, төп башҡорт һүҙҙәре тартынҡы өн менән башланһа, тартынҡы өндөң артынса уҡ һуҙынҡы өн килә. Йә, киреһенсә, һүҙ һуҙынҡы өн менән башланһа, тартынҡы өндөң артынса уҡ һуҙынҡы өн килә. Артабан инде икенсе, өсөнсө ижектәрҙә шул күренеш йәнә ҡабатлана: һуҙынҡы өнгә бөткән асыҡ ижектән һуң алдағы ижек йәнә тартынҡы өн менән башлана, тартынҡы өнгә бөткән ябыҡ ижектән һуң артабанғы ижек йәнә тартынҡы өн менән башланһа, уның артынса уҡ һуҙынҡы өн килә»[1].

Башҡорт һүҙҙәренең ижек ҡалыбын түбәндәге схема менән күрһәтергә мөмкин (Һ – һуҙынҡы өн, Т – тартынҡы өн):

1) Т – Һ – Т – Һ – Т *(б-а-л-ы-ҡ)*;

2) Һ – Т – Һ – Т *(а-л-а-м)*;

3) Т – Һ – Т – Т – Һ – Т *(й-а-л-ҡ-ы-н)*;

4) Һ – Т – Т – Һ – Т – Т – Һ *(а-л-д-ы-н-ғ-ы)*;

5) Һ – Т – Т – Һ *(у-н-д-а)*;

6) Т – Һ – Т – Т *(д-ү-р-т)*;

7) Т – Һ – Т – Т – Т – Һ *(т-а-р-т-ҡ-ы, д-ү-р-т-т-е)*[2].

Тик бер төркөм һүҙҙәрҙең генә аҙаҡҡы ижектәре эргәләш тороусы тартынҡыларға бөтөргә мөмкин. Был саҡта ла йәнәш

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәлелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 51-се б.

[2] Шунда уҡ. 51-се б.

килгән тартынҡыларҙың тәүгеләре тик [й], [л], [м], [н], [ң], [р] талғын тартынҡыларынан тора ала, ә икенселәре [к], [ҡ], [п], [т] һаңғырау шартлаулы өндәр була: *дүрт, ҡарт, ҡалҡ, ҡайт, сырҡ, мурт, һайт* һ. б[1].

Башҡорттарҙың телмәр аппараты борон-борондан ошо законлыҡҡа ҡулайлашҡан. Шуға күрә сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ике тартынҡы бер рәттән тора икән, уларҙы әйтеү телмәр аппараты өсөн уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Былдай уңайһыҙлыҡтан ҡотолоу өсөн, был һүҙҙәр, ғәҙәттә, тартынҡылар эргәһенә бер һуҙынҡы өн ҡушып әйтелә, йәғни башҡорт һүҙҙәренең әйтелешенә яраҡлаштырыла. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең әйтелешен еңелләштереү өсөн һүҙ башындағы ике тартынҡы алдына өҫтәлмә һуҙынҡы өн ҡушыуға **протеза** (грекса: prothesis – «алда торған, терәк») тиҙәр[2]. Мәҫәлән, *стол – өҫтәл, скирда – эҫкерт, скамья – эскәмйә, рожь – арыш, шляпа – эшләпә.*

Хәҙерге башҡорт телендә протеза күренешенә бәйле ике осраҡты күҙәтәбеҙ: а) бер төркөм һүҙҙәрҙә протеза дөрөҫ әйтелештә генә түгел, дөрөҫ яҙылышта ла ҡабул ителгән (*стол – өҫтәл, скирда – эҫкерт*); б) икенсеһендә протеза тик әйтелеш менән генә сикләнә, ә дөрөҫ яҙылышта бирелмәй (*стакан – ыстакан, стена – эстина, шкаф – ышкаф, станция – ыстансы*).

Протеза шулай уҡ [в], [л], [р] тартынҡыларына башланған ҡайһы бер рус һүҙҙәренең алдынан да ҡуйыла: *рожь – арыш, лавка – әләүкә, вал – ыуал* (һөйләштәрҙә) һ. б.

Монгол, ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һәм [в], [л], [р], [ч] тартынҡыларына башланған һүҙҙәр ҙә һөйләштәрҙә, ғәҙәттә, протеза менән әйтелә (*лачын – ыласын, чыҡ – ысыҡ, чын – ысын; ваҡ – ыуаҡ, ват – ыуат, рәүеш – эрәүеш, рәхәт – эрәхәт, рәнжү – эрәнйеү*), шуларҙың тәүге өсәүһе хәҙерге орфографияла әйтелештәре буйынса протеза менән, ә ҡалғандары протезаһыҙ яҙылалар.

Әйтелешен еңелләштереү өсөн ҡайһы бер үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең эсендә йәки аҙағында өҫтәлмә һуҙынҡы өн ҡушыу **эпентеза** (грекса: *epenthesis* – «йәбештереү, йәнәшә ҡуйыу») тип атала. Мәҫәлән: *кровать – карауат, бревно – бүрәнә, труба – торба, князь – кенәз.* Эпентеза күренеше рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙә осрай. Әгәр эргәләш тартынҡылар һүҙҙең башында килһә, һуҙынҡы шул тартынҡыларҙың

---

[1] *Хәҙерге* башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 102-се б.

[2] *Зәйнуллина Г. Д.* Урыҫса-башҡортса тел ғилеме терминдары һүҙлеге. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 50-се б.

уртаһына ҡуйыла (*бревно – бүрәнә*), ә инде ике тартынҡы һүҙ аҙағына тура килһә, эпентеза ул һүҙҙәргә аффикстар ҡушылғанда тамыр менән аффикс араһына ҡуйыла (*отпуск – отпуск-ы-нан*).

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә эпентеза күренешенең түбәндәге үҙенсәлектәрен күрһәтергә була:

а) боронғо осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең күбеһендә эпентеза орфографик норма итеп алынған: *бревно – бүрәнә, клеть – келәт, книга – кенәгә, хрен – керән, квас – кеүәҫ, крупа – көрпә;*

б) сағыштырмаса һуңғараҡ осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә эпентеза тик һөйләү телмәрендә йәки ерле һөйләштәрҙә генә күҙәтелә, ә әҙәби телдә ҡабул ителмәгән: *власть – вылас, протокол – партакол, акт – акыт, пункт – пункыт, полк – полык* һ. б.;

в) аффикстар ҡабул иткәндә ике тартынҡыға бөткән бер төркөм һүҙҙәрҙең тамыры менән аффикс араһында дөрөҫ әйтелештә лә, дөрөҫ яҙылышта ла эпентеза күҙәтелә: *Омск-и-га*, ләкин *Омск, киоск-ы-га*, ләкин *киоск, банк-ы-һы*, ләкин *банк, танк-ы-һы*, ләкин *танк* һ. б.

## Сингармонизм законы, башҡорт телендә уның үҙенсәлектәре

Һүҙ эсендәге өндәрҙең ярашыуы, әйтелеше буйынса бер-береһенә оҡшашыуы **сингармонизм** (грекса: *syn* – «бергә», *harmonia* – «бер төрлө яңғыраш, бәйләнеш») тип йөрөтөлә. Яҙма ҡомартҡыларҙан күренеүенсә, сингармонизм күренеше боронғо төрки телендә үк киң таралған булған. Шунлыҡтан хәҙерге күпселек төрки телдәренең фонетик системаһы сингармонизм законына нигеҙләнгән.

Башҡорт телендә сингармонизм күренешенә түбәндәге фонетик процестар ҡарай: а) аңҡау гармонияһы, б) ирен гармонияһы, в) һуҙынҡы өндәр менән тартынҡы өндәрҙең ярашыуы, г) сингармоник параллелизмдар.

**Аңҡау гармонияһы.** Һүҙ эсендәге һуҙынҡы өндәрҙең ярашыуы аңҡау гармонияһы тип атала. Һуҙынҡы өндәрҙең гармонияһы артикуляция буйынса телдең аңҡауға ҡарата горизонталь торошона бәйләнгән. Төп башҡорт һүҙҙәрендә һәр ваҡытта ла тик бер генә рәттең һуҙынҡылары була ала. Мәҫәлән, һүҙҙең тамырында артҡы һәм ярым артҡы рәт һуҙынҡылары (ҡалын һуҙынҡылар) тора икән, аффикстарҙа ла тик артҡы һәм ярым артҡы рәт һуҙынҡылары ҡулланыла (*ағас-тар-ҙы, урман-да-ғы*),

ә инде тамыр составында алғы һәм ярым алғы рәт һуҙынҡылары (нәҙек һуҙынҡылар) килһә, аффикстарҙа ла тик алғы һәм ярым алғы рәт һуҙынҡылары була (*үлән-дәр-е*).

Хәҙерге башҡорт телендә аңҡау гармонияһының түбәндәге үҙенсәлектәре билдәле.

1. Тамырҙағы һуҙынҡылар тотороҡло һәм һүҙҙең мәғәнәһенә бәйле булалар: ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы бер-береһе менән алмаштырыу, ғәҙәттә, һүҙҙең мәғәнәһе үҙгәреүгә килтерә: *аш – эш, был – бел, тыш – теш, бил – бул, там – тәм, ос – өс, йыл – [йе]л, убыу – үбеү* һ. б.

2. Аффикстар һәм ҡайһы бер киҫәксәләр, һүҙҙең тамырындағы һуҙынҡыларға ярашлы, ҡалын һәм нәҙек вариантта килә: *ҡунаҡ-тар, ҡунаҡ-ҡа, ҡунаҡ-мы, ҡунаҡҡа ла; иген-дәр, иген-гә, иген-лек, иген-ме, игенгә лә.*

3. Ҡушма һүҙҙәрҙә өс осраҡ күҙәтелә:

а) компоненттары тик бер генә рәт һуҙынҡыларынан торған ҡушма һүҙҙәрҙә өндәрҙең үҙгәреше булмай: *ашъяулыҡ, аҡтамыр, өсмөйөш* һ. б.;

б) төрлө рәт һуҙынҡылары булған компоненттарҙан яһалған ҡушма һүҙҙәрҙең күпселегендә һуҙынҡылар шулай уҡ үҙгәрешһеҙ, йәғни тамырҙағыса ҡала: *Ҡыҙылтүш, Ҡариҙел, билбау, төньяҡ, Бишҡайын* һ. б.;

в) төрлө рәт һуҙынҡылы өлөштәрҙән торған ҡушма һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәрендә йәнле һөйләү телендә һуҙынҡыларҙың үҙ-ара ярашыуы барлыҡҡа килә, йәғни төрлө рәт һуҙынҡылары тигеҙләшәләр һәм бер рәт һуҙынҡылары булып яңғырайҙар: *иртәнсәк* > [иртәнсаҡ], *көнбағыш* > [ҡомбағыш], *ҡартәсәй* > [ҡәртәсәй], *ҡайынбикә* > [ҡәйенбикә] һ. б.

4. Рус, ғәрәп һәм фарсы телдәренән боронғо осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәр тулыһынса сингармонизм законына буйһонғандар, уларҙың тамырындағы төрлө рәт һуҙынҡылары бер төрлө генә (йә ҡалын, йә нәҙек) әйтелә башлағандар:

а) *капуста* > *кәбеҫтә, шляпа* > *эшләпә, скирда* > *эҫкерт, квас* > *keүәҫ, печать* > *мисәт, чугун* > *сөгөн;*

б) *дәрман* > *дарман, дәва* > *дауа, әманәт* > *аманат, идарә* > *идара, жиһан* > *йыһан, мәйдан* > *майҙан, сәлам* > *сәләм, Халидә* > *Хәлидә.*

5. Төп башҡорт һүҙҙәрендә алғы рәт [и] һуҙынҡыһы урта һәм артҡы рәт һуҙынҡылары менән бер уратылышта килә ала: *ила, илаҡ, (еп) сират, сираҡ, сиҡан, силғау.* Шул уҡ хәлде ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙә лә осратырға мөмкин: *китап, ваҡиға, ғариза, инсаф, ихтирам, иғлан, идара.*

**Ирен гармонияһы.** Һүҙ тамырында һәм уның аффикстарында иренләшкән өндәрҙең эҙмә-эҙ һаҡланыуы ирен гармонияһы тип йөрөтөлә. Хәҙерге башҡорт телендә ирен гармонияһының асылы шунан тора:

1. Һүҙ тамырының беренсе ижегендә [о°], [ө] өндәре булһа, ҡалған ижектәрендә лә [о°], [ө] өндәре килә: *ойоҡ, соҡор, толоп, орсоҡ, ҡорот; бөртөк, өйөр, төлкө, Өфө* һ. б.

2. Һүҙҙең тамырында [о°], [ө] өндәре торһа, уға ҡушылған аффикстарҙа ла [о°], [ө] өндәре килә: *һоҫ-ҡо-һо, бо-лот-ло, тор-мош-о-ноң, ҡор-ол-ош-то; бө-гөн-гө-һө, төл-кө-нө-кө, төҙө-лөш-ө-нөң, көн-өбөҙ-ҙөң, көҙ-ҙө* һ. б.

Һүҙҙең тамырында [о°], [ө] өндәре булып та, уға ҡушылған аффикстарҙың береһендә [а], [ә], [ү], [у] өндәре осрай икән, был һүҙҙә ирен гармонияһы боҙола һәм артабанғы аффикстарҙа [о°], [ө] өндәре һаҡланмай: *ойош-ма-ның, йөрө-ү-ҙе* [йөрө-ӱ-ҙе], *ҡорол-о-у-ын* [ҡорол-оў-ын], *бөрө-лән-де, төҙөлөш-тәр-егеҙ-ҙе, көт-өү-егеҙ-ҙең* [көт-өӱ-егеҙ-ҙең] һ. б.

Рус теленән үҙләштерелгән [о] өнө һәм төп башҡорт һүҙҙәрендәге [у], [ү] өндәре аша ирен гармонияһы үткәрелмәй: а) *мотор-ым, фронт-тың, тормоз-ды, фото-ның (мотор-ом, фронт-тоң, тормоз-до, фото-ноң* түгел) һ. б.; б) *ҡул-ды, туп-тың, күл-де, ү-ҫем-лек-те, у-рын-лы, ү-те-нес (ҡул-ду, туп-туң, күл-дү, үҫ-үм-лүк-тү, у-рун-лу, ү-тү-нүс* түгел) һ. б.

Ирен гармонияһы төрки телдәр өсөн бик боронғо фонетик күренеш булып тора. Тик боронғо төрки телендә ирен гармонияһы [о°], [ө] өндәре буйынса түгел, ә [у], [ү] өндәре аша үткәрелгән. Телдәрҙең тарихи үҫешендә боронғо [у], [ү] өндәре башҡорт телендә күп осраҡта [о], [ө] өндәренә күскән, ләкин ирен гармонияһы законлылығы һаҡланған, һәм ул яңы [о°], [ө] өндәре буйынса үткәрелә башлаған: *улуғ, улуғлуғ – оло, ололоҡ; ҡудуҡ – ҡоҙоҡ; ҡутлуғ – ҡотло; күмүш – көмөш; күчлүг – көслө; бүкүл – бөгөл* һ. б.

**Һуҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһы.** Төп башҡорт һүҙҙәрендә һүҙҙең тамырында (һәм нигеҙендә) йә нәҙек һуҙынҡылар, йә ҡалын һуҙынҡылар ғына була. Шул нигеҙҙә нәҙек һуҙынҡылар эргәһендәге тартынҡы өндәр нәҙек (йомшаҡ) әйтелә, ә ҡалын һуҙынҡылар эргәһендәге тартынҡылар ҡалын (ҡаты) әйтелә. Мәҫәлән, *бүлде* һүҙендә [ү], [е] һуҙынҡылары эргәһендә торған [б], [л], [д] тартынҡылары йомшаҡ әйтелә, ә *булды* һүҙендә [у], [ы] һуҙынҡылары эргәһендә торған [б], [л], [д] тартынҡылары ҡаты (ҡалын) әйтелә. Бер һүҙ эсендәге һуҙынҡы өндәр менән тартынҡы өндәрҙең ҡалынлыҡ һәм нәҙеклек билдәләре буйынса үҙ-ара ярашып йөрөүҙәре һуҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһы тип атала.

Башҡорт телендә һуҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһының үҙенсәлеге шунда:

1. Һүҙҙең тамырында һәм аффикстарында алғы һәм ярым алғы рәт һуҙынҡылары (нәҙек һуҙынҡылар) килһә, был һүҙҙә аҙаҡҡа тиклем тартынҡылар нәҙек (йомшаҡ) әйтелә. Киреһенсә, һүҙҙең тамырында һәм аффикстарында артҡы һәм ярым артҡы рәт һуҙынҡылары (ҡалын һуҙынҡылар) килһә, был һүҙҙең бөтә өлөштәрендә лә тартынҡылар ҡалын (ҡаты) әйтелә. Мәҫәлән: *юн* [йун] – *йүн, тон – төн, отолдо – өтөлдө, ял* [йал] – *йәл, бара – бәрә, был – бел, тарта – тәртә.*

2. Төп башҡорт һүҙҙәрендә, ғәҙәттә, урта аңҡау [к], [г] тартынҡылары тик алғы һәм ярым алғы рәт һуҙынҡылары эргәһендә, ә артҡы аңҡау [ҡ], [ғ] тартынҡылары артҡы һәм ярым артҡы рәт һуҙынҡылары эргәһендә килә. Мәҫәлән: *баяғы – кисәге, ҡул – күл, ҡол – көл, ҡолас – көләс, ышыҡ – ишек, ҡайтҡан – киткән, таңға – төнгә, торогоҙ – төрөгөҙ.*

Юғарыла әйтелгәнсә, төп башҡорт һүҙҙәрендә һүҙҙең тамырында (һәм аффикстарында) аңҡау гармонияһы буйынса йә алғы рәт, йә артҡы рәт һуҙынҡылары ғына булыуы тартынҡы өндәрҙең йә йомшаҡ йә ҡаты әйтелеүен килтереп сығара; алғы рәт һуҙынҡылары уратылышында тартынҡы өндәр һәр ваҡыт йомшаҡ әйтелә, ә артҡы рәт һуҙынҡылары уратылышында ҡаты әйтелә. Шул рәүешле, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр араһында оҡшашлыҡ (гармония) барлыҡҡа килә. Профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың фекеренсә, «башҡорт теленең тартынҡыларын нәҙек һәм ҡалын тартынҡыларға айырыуҙың практик әһәмиәте юҡ. Европа телдәрендәге (мәҫәлән, рус телендәге) шикелле, башҡорт телендә артҡы рәт һуҙынҡылары уратылышында бер ваҡытта ла йомшаҡ тартынҡылар килмәй, һәм алғы рәт һуҙынҡылары уратылышында ҡалын тартынҡылар булмай»[1]. Башҡорт теленең шул үҙенсәлеген иҫәпкә алмайынса, ҡайһы бер телселәр башҡорт телендәге тартынҡыларҙы нәҙек һәм ҡалын тартынҡыларға айыралар[2].

Башҡорт теленең диалекттарында ла (һөйләштәрендә) алғы рәт (нәҙек) һуҙынҡылары комбинацияһында ҡалын тартынҡылар килеү һәм, киреһенсә, артҡы рәт (ҡалын) һуҙынҡылар уратылышында йомшаҡ тартынҡылар килеү хәле осрамай.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, рус теле аша боронғо осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәр ҙә ошо законлылыҡҡа буйһона: а) [к], [г]

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 162-се б.

[2] *Ҡасим Ә.* Башҡорт теле. Педучилищелар өсөн дәреслек. Өфө, 1941.

тартынҡылары әйтелгән һүҙҙәрҙә рус телендәге артҡы һәм ярым артҡы рәт һуҙынҡылары алғы һәм ярым алғы рәт һуҙынҡылары-на күскән: а) *лавка > әләүкә, трубка > төрөпкә, горшок > көршәк, корзинка > кәрзинкә, тарелка > тәрилкә*); б) бер төркөм һүҙҙәрҙә артҡы һәм ярым артҡы рәт һуҙынҡылары башҡорт теленә үҙгәрешһеҙ килеп ингәндәр, ләкин был саҡта [к], [г] тартынҡылары [ҡ], [ғ] тартынҡыларына күскән: *калач > ҡалас, казак > ҡаҙаҡ, дуга > дуға, колесо > ҡуласа йәки ҡулса, казарма > ҡаҙарма.*

Ғәрәп һәм фарсы, рус теленән сағыштырмаса һуңғараҡ осорҙарҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә [ҡ], [ғ] тартынҡылары нәҙек һуҙынҡылар менән дә килергә мөмкин: *шаһит, тарих, шағир, ҡәләм, фәҡир, тәҡдим; ғилем, сәғәт, вәғәҙә, иғтибар, Сәғит, Фәғилә; комитет, тракторист, механик, девиз, велосипед* һ. б.

Шул уҡ ваҡытта Ж. Ғ. Кейекбаев татар телендә тартынҡыларҙың ҡалынлыҡ-нәҙеклеген айырып күрһәтеүҙең фәнни яҡтан әһәмиәтле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала: «Татар телендә был йәһәттән эш башҡасараҡ тора[1], сөнки, беренсенән, татар телендә, бигерәк тә уның диалекттарында, артҡы рәт һуҙынҡылары ҡушылмаларында нәҙек тартынҡылар килергә мөмкин; мәҫәлән: барьам (байрам), каньар (ҡайнар), катьтым (ҡайттым)[2]; икенсенән, татар әҙәби телендә төп татар һүҙҙәрендәге тамаҡ төбө [ҡ] һәм [ғ] өнө өсөн дә, рус теленән ингән һүҙҙәргә [к] һәм [г] өсөн дә фәҡәт **к** һәм **г** хәрефтәре ҡулланыла»[3].

**Сингармоник параллелизмдар.** Башҡорт телендә сингармонизм законына ярашлы рәүештә бер үк тамырҙан формалашҡан ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙе с и н г а р м о н и к п а р а л л е л и з м д а р тип йөрөтәләр. Мәҫәлән: *асы – әсе, аҙ – әҙ, ғына – генә, һур – һүр, һалмаҡ – һәлмәк, сайыр – сәйер* һ. б. Тарихи планда бындай һүҙҙәрҙең ҡалын варианты беренсел, ә нәҙек варианты икенсел, йәғни һуңынан барлыҡҡа килгән форма һанала.

Башҡорт телендәге сингармоник параллелизмдарҙы мәғәнәләренә ҡарап ике төркөмгә бүлергә мөмкин:

1. Ике фонетик варианты ла бер үк мәғәнәлә ҡулланылып йөрөгән һүҙҙәр: *аҙ – әҙ, аҙай – әҙәй, аҙлап – әҙләп, аҙсылыҡ – әҙселек, аҙ-маҙ – әҙ-мәҙ, асы – әсе, асыған – әсегән, аҡрын – әкрен, аҡрынла – әкренлә, аҡрынай – әкренәй, сирҡан – сиркән, сирҡаныс – сиркәнес* һ. б. Бындай сингармоник параллелизмдар

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 163-сө б.

[2] *Шакирова Р. Ф.* Хәзерге татар теле фонетикасына кереш. Казан, 1954. 81нче б.

[3] Шунда уҡ. 76-сы б.

бигерәк тә йәнле һөйләү телендә киң таралған: *айҙан* (көнсығыш диалект) – *әйләң, сайыр – сәйер* (көньяҡ диалект), *йалпаҡ – йәлпәк* (көньяҡ диалект), *йолон* (көнсығыш диалект) – *йөлөн, йалсы* (көнсығыш диалект) – *йәлсе, йаш* (көнсығыш диалект) – *йәш, йан* (көнсығыш диалект) – *йән, сас* (көнсығыш диалект) – *сәс, сасаҡ* (көнсығыш диалект) – *сәсәк* һ. б.

2. Мәғәнәләре буйынса бер-береһенән айырылған вариант һүҙҙәр. Сингармоник параллелизмдарҙың был төрө һүҙьяһалышҡа бәйле һәм фонетик һүҙьяһалыштың бер ысулын тәшкил итә. Мәҫәлән: *бор* «поворачивай, закручивай» – *бөр* «делай оборки», *һалмаҡ* «медлительный, плавный» – *һәлмәк* «тяжелый, увесистый», *һуҡ* «ударь, бей» – *һүк* «ругай, брани» һ. б.

Оҡшатыу һүҙҙәренең күбеһе шулай уҡ ике фонетик вариантта ҡулланыла, улар төрлө мәғәнә төҫмөрҙәре менән бер-береһенән айырылалар: ҡалын әйтелешле варианттары ҡалын, тупаҫ тауышҡа оҡшатыуҙы белдерһә, нәҙек әйтелешле варианттары, киреһенсә, нәҙек, нескә тауышҡа оҡшатыуҙы күрһәтә. Миҫалдар: *ғыуылда – геүелдә, зыңла – зеңлә, ҡажғылда – кәжгелдә, ҡыртла – кертлә, сарылда – сәрелдә, соборла – сөбөрлә* һ. б.

## Өндәрҙең комбинаторлы үҙгәрештәре

Телмәрҙә өндәр, береһе артынан икенсеһе килеп, бер-береһенә йоғонто яһайҙар, шуға күрә лә телмәр ағышында ҡайһы бер өндәрҙең саф яңғырашы, хатта сиктәре лә юғалырға мөмкин.

Өндәрҙең артикуляцияһында экскурсия, туҡталыш, рекурсия тип аталған күренештәр бар. Телмәрҙә бер өндөң рекурсияһы икенсе өндөң экскурсияһына барып тоташа. Бер өндө әйтеп бөтмәҫ элек үк, икенсеһенә әҙерлек башлана: бер өндөң артикуляцияһына күрше өндәрҙең артикуляцияһы килеп өҫтәлә. Был процеста комбинатор (латинса: *combinare* – «бергә ҡушыу», «берләштереү») үҙгәрештәр барлыҡҡа килә.

**Комбинаторлы үҙгәрештәр** тип күрше өндәрҙең бер-береһенә тәьҫиренән барлыҡҡа килгән фонетик процестарға әйтәләр. Комбинаторлы үҙгәрештәргә ассимиляция, диссимиляция, метатеза, диэреза күренештәре инә.

### *Ассимиляция*

Телмәр ағышында тартынҡыларҙың бер-береһенә тәьҫир итешеүе һөҙөмтәһендә ике оҡшаш булмаған өндән бер төрлө йәки яҡын артикуляциялы оҡшаш өндәр формалаша. Эргәләш торған

тартынҡы өндәрҙең артикуляцион һәм акустик яҡтан бер-береһенә оҡшашыуы **ассимиляция** (латинса: *assimilatio* – «оҡшашыу») тип атала.

Тартынҡы өндәрҙең оҡшашыуы бергә әйтелгән ваҡытта уларҙың бер-береһенә йоғонто яһауы арҡаһында була. Йәнәш торған тартынҡылар бергә әйтелгәндә бер-береһенә төрлөсә йоғонто яһайҙар: йә улар бер-береһенә тулыһынса оҡшайҙар, йә бер ни тиклем генә оҡшайҙар. Йә һүҙҙең алғы яғында торған тартынҡы эргәләш торған тартынҡыны үҙенә оҡшата. Ҡайһы бер саҡта бер-береһенән алыҫ торған тартынҡылар ҙа оҡшашалар.

Шуға ҡарап, ассимиляцияны бер нисә төргә бүлеп йөрөтәләр: прогрессив ассимиляция һәм регрессив ассимиляция, тулы ассимиляция һәм тулы булмаған ассимиляция, шулай уҡ аралы йәки алыҫлыҡ ассимиляцияһы. Аралы ассимиляция, үҙ сиратында, тулы булырға мөмкин.

Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев күҙәтеүҙәре буйынса, тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияһы башҡорт әҙәби телендә һәм башҡорт диалекттарында, бөтә башҡа төрки телдәргә ҡарағанда ла, күберәк таралған. Был хәл башҡорт теленең тартынҡы өндәр системаһы менән бәйләнгән, сөнки башҡорт телендә [ҙ] өнөнә бөткән һүҙҙәрҙең аффикстары [ҙ] өнө менән башлана (мәҫәлән, *күҙ-ҙәр, күҙ-ҙең, күҙ-ҙе, күҙ-ҙә, күҙ-ҙән* һәм *яҙ-ҙым* һ. б.). Бынан тыш, [р], [й], [ў] тартынҡыларына бөткән һүҙҙәрҙең бер төркөм аффикстары ла [ҙ] өнө менән башлана. Ул аффикстар [ҙ] – [д] (йәки [ҙ] – [ҙ]) тартынҡыларының ассимиляцияһынан килеп сыҡҡан. Башҡа төрки телдәрендә [ҙ] өнө булмағанлыҡтан һәм һүҙҙәр [ҙ] өнө менән бөтмәгәнлектән, ассимиляция арҡаһында аффикстарҙың [ҙ] өнө менән башланған фонетик варианттары булыуы мөмкин түгел. Мәҫәлән, төрөкмән телендә [ҙ] өнө ассимиляцияға бирелмәй: *яҙ-ды, көҙ-дә* (башҡортса: *яҙ-ҙы, көҙ-ҙә*)[1].

**Прогрессив ассимиляция**. Алда торған тартынҡы өн үҙенән артта торған тартынҡыға йоғонто яһап, уны акустик һәм артикуляцион билдәләре буйынса үҙенә оҡшатһа, был фонетик күренеште прогрессив (йәки ыңғай) ассимиляция тиҙәр. Прогрессив ассимиляцияның тулы булмаған һәм тулы төрҙәре бар.

Тулы булмаған прогрессив ассимиляция ваҡытында алдағы тартынҡы үҙенән һуң торған тартынҡыны тик акустик билдәһе буйынса ғына оҡшата, йәғни яңғырау тартынҡы үҙенән һуң килгән тартынҡыларҙы яңғырау яһаған кеүек, һаңғырау тартынҡы ла үҙенән һуң тик һаңғырау тартынҡы килеүен талап

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 98-се б.

итә. Мәçәлән, боронғо төрки телендә талғын [л], [м], [н], [ң] тартынҡыларынан һуң һаңғырау [к], [т] өндәре килә алған, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә беҙ ассимиляция күренешен күҙәтәбеҙ. Мәçәлән: *бол-ты > бул-ды, ан-та > унда, күн-кә > көн-гә* һ. б. Бөгөн [лт], [мт], [мк], [мҡ], [нт], [нк], [ңт], [ңҡ] ҡушылмалары тик айырым һөйләштәрҙә генә (мәçәлән, көньяҡ диалекттың урта һөйләшендә һ. б.) һаҡланып ҡалған (*ауылта, балтыҙ, урамта, боронҡо, ямҡыр, еңкә, урамҡа* һ. б.). Хәҙерге башҡорт телендә [р] һәм [ў] талғын тартынҡыларынан һуң [ҙ] өнөнөң килеүе лә ассимиляция күренешенә бәйләнгән: *тау-да > тау-ҙа, бар-ды > бар-ҙы, тәү-дә > тәү-ҙә* һ. б.

Һаңғырау тартынҡыларҙан һуң яңғырау тартынҡы тора алмай, ул һәр осраҡта ла һаңғыраулана. Мәçәлән: *ҡайт-ты* (*ҡайт-ды* түгел), *аш-ты* (*аш-ды* түгел), *киç-те, яп-ты, таш-ты* һ. б.

Т у л ы  п р о г р е с с и в  а с с и м и л я ц и я булғанда, алда торған тартынҡы өн үҙенән һуң килгән тартынҡыны акустик билдәһе яғынан ғына түгел, ә артикуляцияһы (артикуляция урыны һәм артикуляция рәүеше) буйынса ла тулыһынса үҙенә оҡшата. Мәçәлән, *ат – аттар, һүҙ – һүҙҙәр, күҙ – күҙҙәр, күк – күккә, һуҡ – һуҡҡан, тот – тотто* һүҙҙәрендә һүҙҙең тамырындағы [т], [ҙ], [к], [ҡ] тартынҡылары менән ялғау башындағы шул уҡ [т], [ҙ], [к], [ҡ] тартынҡылары бер-береһенә тулыһынса оҡшаш: уларҙың артикуляция рәүеше лә, артикуляция урыны ла бер төрлө.

Йәнле һөйләү телендә лә [н], [ң] тартынҡылары менән уларҙан һуң килгән [л], [д] тартынҡыһы араһында оҡшашыу процесын күҙәтәбеҙ:

а) *дан-лыҡлы > дан-ныҡлы, маң-лай > маң-най, он-лата > он-ната, тын-лы (оркестр) > тын-ны, утын-лыҡ > утын-ныҡ, һуң-лама > һуң-нама* һ. б;

б) *моң-дар > моң-нар, төн-дәр > төн-нәр, таң-дар > таң-нар, ялан-дар > ялан-нар* һ. б.

Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә йәнәшә генә түгел, ә бер-береһенән алыç торған тартынҡылар ҙа оҡшашырға мөмкин. Мәçәлән, *ышаныс, мылтыҡ* һүҙҙәренең башҡорт һөйләштәрендә [ышаныш], [мынтыҡ] рәүешендә әйтелеп йөрөүҙәре ошоға миçал була, сөнки беренсе һүҙҙә [ш] тартынҡыһы [с] өнөн үҙенә артикуляция урыны буйынса оҡшатһа, икенсе һүҙҙә [м] тартынҡыһы [л] өнөн артикуляция рәүеше буйынса яраҡлаштыра.

Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияһына бәйле түбәндәгеләрҙе билдәләй: «Башҡорт телендә һүҙҙең тамырына (йәки нигеҙенә) ҡараған тартынҡылар ялғауҙарҙағы тартынҡыларҙың йоғонтоһо буйынса үҙгәрмәйҙәр һәм бик һирәк

хәлдәрҙә генә үҙгәрәләр. Аффикстар айырым торғанда бер ниндәй ҙә мәғәнә аңлатмайҙар һәм, һүҙгә ҡушылған саҡта, уларҙың тартынҡы (һәм һуҙынҡы) өндәре тамырҙағы тартынҡы өнгә ҡарап үҙгәреп йөрөй. Икенсе төрлө әйткәндә, тартынҡы өндәрҙең тулы һәм тулы булмаған прогрессив ассимиляцияһы арҡаһында, аффикстар төрлө фонетик вариантта килә»[1].

Башҡорт телендә аффикстарҙың һәр бер айырым һүҙ өсөн кәрәк булған фонетик варианты тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияһы нигеҙендә килеп сыҡҡан (мәҫәлән, тартынҡы өндәр линияһы буйынса булған фонетик варианттары); уларҙың һуҙынҡы өндәр буйынса булған фонетик варианттары аңҡау гармонияһы нигеҙендә барлыҡҡа килә.

Тартынҡы өндәрҙең прогрессив ассимиляцияһы буйынса башҡорт әҙәби телендә һәр бер аффикстың бер нисә фонетик варианты бар. Мәҫәлән, күплек, эйәлек, төшөм, сығанаҡ, урынваҡыт килеш, беренсе үткән заман формаһы зат аффикстарының, сағыштырыу аффикстарының, шулай уҡ *да-да* теркәүестәренең тартынҡылар буйынса дүрт төрлө фонетик варианты бар, ә башҡа ҡайһы бер аффикстарҙың ике төрлө фонетик варианты бар. Исем яһаусы *-лыҡ, -лек,* сифат яһаусы *-лы, -ле,* ҡылым яһаусы *-ла, -лә* (мәҫәлән, *таш-лыҡ, бер-лек, һыу-лы, йүн-ле, аҡ-ла, эш-лә*) аффикстарындағы [л] тартынҡыһы әҙәби телдә ассимиляцияға бирелмәй, һәм шуға ла был аффикстарҙың тартынҡы өндәр буйынса фонетик варианттары юҡ[2].

**Регрессив ассимиляция.** Бер тартынҡы өндөң үҙенән алда торған икенсе тартынҡы өнгә йоғонто яһап, уны акустик һәм артикуляцион билдәләре буйынса үҙенә оҡшатыу процесын регрессив ассимиляция (йәки кире) тип йөрөтәләр. Регрессив ассимиляцияның да тулы булмаған һәм тулы төрҙәре осрай.

*Тулы булмаған регрессив ассимиляция* ваҡытында тартынҡы өн үҙенән алда торған икенсе бер эргәләш тартынҡы акустикаһы һәм артикуляция урыны буйынса үҙенә оҡшата. Мәҫәлән:

1. Тел уртаһы [г], [к] һәм тел арты [ғ], [ҡ] тартынҡылары үҙҙәренең алдында йәнәш торған тел алды [н] тартынҡыһына йоғонто яһайҙар, яһалышы буйынса үҙенә яҡынайталар, һөҙөмтәлә, [н] өнө тел арты [ң] өнө булып әйтелә: *борон – боро*[ңғ]*о, иртән – иртә*[ңг]*е, күтәрен – күтәре*[ңк]*е, төн – тө*[ңг]*ө, төшөн – төшө*[ңк]*ө, тартын – тарты*[ңҡ]*ы, һуҙын – һуҙы*[ңҡ]*ы.* Бында беҙ [г] һәм [ғ] өндәренең эргәләш торған [н] өнөнә кирегә

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы (Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ нәшриәте, 2002. 101-се б.

[2] *Шунда уҡ.* 101–102-се бб.

табан (регрессив) йоғонтоһо сәбәпле, [н] өнөнөң [ң] өнөнә күсеүен күрәбеҙ.

2. Ирен өнө [б], үҙенән алда килгән тел алды [н] тартынҡыһының артикуляцияһына йоғонто яһап, үҙенең әйтелешенә яҡынайта, һөҙөмтәлә, [н] өнө ике ирен [м] өнөнә әүерелә: а) *килгән – килгә*[мб]*еҙ, ҡайтҡан – ҡайтҡа*[мб]*ыҙ, уҡыған – уҡыға*[мб]*ыҙ*; б) *Бура*[мб]*ай, кө*[мб]*айыш, кө*[мб]*ағыш, то*[мб]*ойоҡ, ун биш– у*[мб]*иш, ун бармаҡ – у*[мб]*армаҡ* һ. б. Был һүҙҙәрҙә икенсе һүҙҙең башындағы [б] өнө, беренсе һүҙҙең аҙағындағы [н] өнөнә көслө йоғонто яһап, уны үҙенә оҡшатҡан һәм [м] өнөнә әйләндергән. Шулай итеп, ике ирен [б] өнө аңҡау-танау [н] өнөн ике ирен [м] өнө иткән. Был һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың артикуляция урыны буйынса тулы булмаған регрессив ассимиляцияһы булған.

Юғарыла күрһәтелгән ике осраҡта ла ассимиляция күренеше башҡорт әҙәби теленең орфоэпик нормаһы итеп ҡабул ителгән.

**Тулы регрессив ассимиляция** булғанда бер тартынҡы өн алдында торған икенсе тартынҡы өндө акустикаһы һәм артикуляцияһы буйынса тулыһынса үҙенә оҡшата, йәғни төрлө әйтелешле эргәләш ике өн бер үк сифаттағы өндәргә әйләнәләр. Мәҫәлән, хәҙерге башҡорт әҙәби телендә *һанап бар, яуап бир* тибындағы аналитик ҡылым формаларында [б] тартынҡыһының кире йоғонтоһо һөҙөмтәһендә [п] өнөнөң ассимиляцияһы күҙәтелә: *һанап бар* > *һана*[бб]*ар* > *һана*[б]*ар, яуап бир* > *яуа*[бб]*ир* > *яуа*[б]*ир, һөйләп бир* > *һөйлә*[бб]*ир* > *һөйлә*[б]*ир, ҡайтып бара* > *ҡайты*[бб]*ара* > *ҡайты*[б]*ара* һ. б. Регрессив ассимиляция йәнле һөйләү телмәрендә *йыуғанмын – йыуға*[мм]*ын, ятлағанмын – ятлаға*[мм]*ын* [мм] формаһындағы үткән заман хәбәр ҡылымдарҙа ла күҙәтелә.

Башҡорт теленең һөйләштәрендә ҡайһы саҡта бер-береһенән алыҫ торған тартынҡылар араһында ла тулы регрессив ассимиляция күренешен осратырға була. Мәҫәлән, *салыш* > *шалыш, сатраш* > *шатраш, сырыш (битле)* > *шырыш, сүкеш* > *шүкеш* кеүек һүҙҙәрҙә алғы аңҡау [ш] өнө үҙенән күпкә алда торған теш [с] тартынҡыһын артикуляция урыны буйынса тулыһынса үҙенә оҡшатҡан һәм [ш] тартынҡыһына әйләндергән.

### *Диссимиляция*

**Диссимиляция** (латинса: *dissimilatio* – «оҡшашмау») тип артикуляцияһы буйынса бер төрлө йәки яҡын өндәрҙең оҡшашмауына, йәғни оҡшашлығы боҙолоуға әйтәләр. Шулай итеп, диссимиляция күренеше ассимиляцияның киреһе булып сыға. Ассимиляция ваҡытында эргәләш тартынҡылар бер-береһе менән

акустика, артикуляция урыны һәм рәүеше буйынса ярашып йөрөһәләр, диссимиляцияла был законлылыҡ боҙола һәм яһалыштары буйынса бөтөнләй алыҫ булған тартынҡылар ҙа рәттән тора алалар. Быны, мәҫәлән, яңғырау һәм талғын тартынҡылар эргәһендә һаңғырау тартынҡыларҙың килә алыуы яҡшы күрһәтә.

Башҡорт әҙәби телендә диссимиляция күренеше тамырҙың һәм ялғауҙарҙың тартынҡыларында ла, шулай уҡ өлөштәргә бүленмәй торған тамыр һүҙҙәрҙә лә осрай. Миҫалдар:

1. Тамыр (нигеҙ) аҙағындағы тартынҡы менән һүҙ яһаусы аффикс башындағы тартынҡының оҡшашмауы: *киҫен-те* (*киҫен-де* түгел), *йәйен-ке* (*йәйен-ге* түгел), *һығым-та* (*һығым-да* түгел), *һөҙөм-тә* (*һөҙөм-дә* түгел), *һөрөн-тө* (*һөрөм-дө* түгел), *көйән-тә* (*көйән-дә* түгел), *тапан-ты* (*тапан-ды* түгел), *үҫен-те* (*үҫен-де* түгел) һ. б.;

2. Тамыр һүҙҙәр эсендәге тартынҡыларҙың үҙ-ара оҡшашмауы: *көлтә, толпар, йылҡы, алтын, арпа, күркә, урта, һурпа, керпек, ялҡау, аңҡау, өлкә, бүлкә, янтау, олпат* һ. б.

Диссимиляция ассимиляцияға ҡарағанда боронғораҡ күренеш һанала, хәҙерге башҡорт телендә ул сағыштырмаса һирәк күҙәтелә. Боронғо төрки яҙма ҡомарткылары телдәрендә аффикстарҙа тартынҡы өндәрҙең диссимиляциялы ҡушылмалары өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән: *өл-ти* > *үл-де, бол-ты* > *булды, кәл-ти* > *кил-де, көр-тим* > *күр-ҙем, ан-та* > *ун-да, мун-та* > *бын-да, ан-таг* > *ун-дай, он-ҡа* > *ун-ға, күн-кә* > *көн-гә* һ. б.

Боронғо төрки телдәрендәге тартынҡы өндәр диссимиляцияһы хәҙерге төрки әҙәби телдәрендә бөтөнләй һаҡланмаған. Был күренеште башҡорт һәм себер татарҙары һөйләштәрендә генә осратырға мөмкин. Һүҙҙең тамыры менән аффикс араһында *лт, мт, ңт, нт* һәм *мҡ, мк, нҡ, нк, ңҡ, ңк* диссимиляциялы ҡушылмалар системалы рәүештә башҡорт теленең урта һөйләшендә генә һаҡланып ҡалған (Ҡырмыҫҡалы, Ғафури, Архангел, Ишембай, Ауырғазы райондарында, Белорет районының көнбайыш өлөшө һөйләштәрендә). Миҫалдар: *алты – алды, килте – килде, уңты – уңды, һүнте – һүнде, юлта – юлда, урманта – урманда, уңта – уңда, анта – унда, мынта – бында, һүнкән – һүнгән, күмкән – күмгән* һ. б. Шул уҡ күренеште өлөштәргә айырылмай торған тамырҙа ла күрергә мөмкин: *ҡантала – ҡандала, кентек – кендек, тамҡа – тамға, ямҡыр – ямғыр, ыңҡырсаҡ – ыңғырсаҡ, ҡумҡан – ҡомған, ҡонтоҙ – ҡондоҙ, өҙәңке – өҙәнге* һ. б.

## *Метатеза*

Әйтелештәрен еңелләштереү өсөн һүҙ составындағы тартынҡы өндәрҙең, өн ҡушылмаларының, ялғауҙарҙың урын алмаштырып, бер-береһенең урынында килеүен **метатеза** (грекса: *metathesis* – «алмаштырып ҡуйыу») тиҙәр. Тартынҡыларҙың метатезаһы бик боронғо күренеш иҫәпләнә. Мәҫәлән, башҡорт телендәге *ямғыр* [йамғыр] һүҙе боронғо төрки телендә параллель рәүештә ике варианта ҡулланылған: *йағмур йағды* (башҡорт телендә [ғ] > [ў] күсешенән һуң [*йаў*] тамыры формалаша) һәм *йамғур*. Шулай итеп, бөгөн ҡулланылған [йамғыр] һүҙе, әйтергә уңайлыраҡ булһын өсөн, боронғо *йағмур* һүҙендәге [ғ] һәм [м] өндәренең урындарын алмаштырыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән булып сыға.

Башҡорт телендә һәм уның диалекттарында бер һүҙ эсендә йәки ҡушма һүҙҙәрҙә тартынҡы өндәрҙең урынын алмаштырыу йыш осрай. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең метатезалы варианттары шулай уҡ йәнле һөйләү телендә, бигерәк тә балалар телмәрендә йыш күҙәтелә. Мәҫәлән: *аҡса* > *асҡа, аҫҡырғаҡ* > *аҡҫырғаҡ, аша атла* > *ашатла* > *аташла, беләҙек* > *беҙәлек, билбау* > *билғау, болар* > *борал, бурьяҡ* > *буйраҡ, ҡойроҡ* > *ҡорйоҡ, ҡырмыҫҡа* > *ҡымырҫҡа, мөрйә* > *мөйрә, мәрйен* > *мәйрен, оҡша* > *ҡоша (атаһына ҡошап* > *атаһынағошап), тирбәл* > *тибрәл, туҡта* > *тутҡа, ышҡыу* > *ыҡшыу* һ. б.

Метатеза күренеше рус теленән һәм рус теле аша Көнбайыш-Европа телдәренән үҙләштерелгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙә лә күҙәтелә: *бухгалтер* > *булхалтер, крокодил* > *коркодил, такси* > *таски, тәрилкә* > *тәлиркә, фельшер* > *фершель* һ. б.

Башҡорт теленең диалекттарында һәм һөйләштәрендә метатеза күренеше аффикстар һәм киҫәксәләр составында ла күҙәтелә: а) *алдыңмы* > *алдымың, барҙыниһә* > *барҙыһинә, әйттениһә* > *әйттеһинә;* б) *киләһеңме* > *киләмеһең, эшләйһеңме* > *эшләймеһең, киләһегеҙме* > *киләмеһегеҙ, эшләйһегеҙме* > *эшләймеһегеҙ* һ. б.

## *Диэреза*

Ассимиляция йәки диссимиляция һөҙөмтәһендә һүҙҙең берәй өнө йәки ижеге төшөп ҡалыуҙы **диэреза** (грекса: *diaeresis* – «өҙөү, бүлеү, алып ташлау») тип йөрөтәләр.

Башҡорт телендә диэреза, ғәҙәттә, йәнле һөйләү телендә һәм балалар телмәрендә осрай. Бигерәк тә талғын [л] тартынҡыһы

төшөп ҡалыусан. Был процесс төрлө фонетик шарттарҙа булырға мөмкин:

а) [л] өнөнә бөткән бер төркөм ҡылымдар тартынҡыға башланыусы ҡайһы бер аффикстар (*-ма, -һа, -тыр*) менән ҡулланылғанда: *булмаç > бумаç, булһа > буһа, килмә > кимә, килтер > китер, ултыр > утыр, тултыр > тутыр* һ. б.

б) тәүге компоненты *алып* һүҙенән торған бер төркөм аналитик ҡылым формаларында *-лы* төшөп ҡала: *алып бир > әпир, алып кил > әпкил, алып мен > әпмен, алып ҡайт > апҡайт, алып ҡал > апҡал, алып төш > әптөш* һ. б.

в) *ул, был, шул* алмаштары тартынҡыға башланған һүҙҙәр алдында торғанда: *ул тиклем > утиклем, был яҡҡа > быяҡҡа, шул ҡорло > шуғорло* һ. б.

г) *ни эшлә* һорау һүҙенең төрлө формаларында: *ни эшләй > нишәй, ни эшләмәк булаһың > нишәмәк булаһың, ни эшләмәгә бара > нишәмәгә бара* һ. б.

Ҡайһы бер зат һәм күрһәтеү алмаштарының эйәлек килеш формалары *белән* (әҙәби телдә *менән*) бәйләүесе менән ҡулланылғанда, килеш аффиксындағы [ң] өнө төшөп ҡала: *һинең менән > һине белән, шуның менән > шуны белән* һ. б.

*Йомортҡа, кеçәртке, сыбыртҡы, тумыртҡа, һепертке* кеүек һүҙҙәрҙә йыш ҡына ике тартынҡы араһындағы [т] өнө төшөп ҡалырға мөмкин: *йомортҡа > йоморҡа, кеçәртке > кеçәрке* һ. б.

Рус теленән һәм рус теле аша башҡа сит телдәрҙән үҙләштерелгән бер төркөм һүҙҙәрҙә лә айырым өндәрҙең йәки тотош ижектәрҙең һөйләү телендә ҡыçырыҡлап сығарылыу осраҡтары бар: *велосипед > лисәпит, квартира > фатир, центнер > цетнер, экскаватор > эскаватор.*

Әҙәби телдә был фонетик күренештәрҙең береһе лә орфоэпик норма итеп алынмаған.

## ОРФОЭПИЯ

### *Орфоэпия турağында төшөнсә*

Ћәр бер телдең үҙенә генә хас әйтелеш нормалары була. Әҙәби телдең дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләре йыйылмаһы орфоэпия (грекса: *orthos* – «дөрөҫ»; *epos* – «телмәр») тип атала. Орфоэпия телмәр ағышында айырым өндәрҙең (фонемаларҙың), һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен билдәләүҙе бурыс итеп ҡуя. Айырым һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең дөрөҫ әйтелешен билдәләгәндә, орфоэпия шул телдең йәнле һөйләү формаһын, халыҡтың йәнле һөйләү телендә тамам ныҒынған һәм ҡалыплanған, дөйөм ҡабул ителгән әйтелеш рәүешен, һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе әйтеү манераһын нигеҙ итеп ала.

Орфоэпия һүҙҙең төрлө урынында: башында, уртаһында һәм аҙағында телмәр өндәренең үҙгәреше менән эш итә. Шуға күрә орфоэпия фонетиканың бер бүлеге һанала.

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ОРФОЭПИК НОРМАЛАРЫ

Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеш нормалары башҡорт халҡының йәнле һөйләү теле нигеҙендә формалашҡан. Шуның өсөн дә әҙәби телдең орфоэпик нормалары башҡорт телен был телдә һөйләшеүселәр өсөн уртаҡ һәм аңлайышлы итә. Дөрөҫ әйтелеш ҡағиҙәләре әҙәби телгә хас булмаған, тик айырым һөйләштәрҙә һәм диалекттарҙа, ябай һөйләү телмәрендә генә осраған әйтелеш варианттарынан айырыла.

Хәҙерге башҡорт теленең орфоэпик нормалары телмәр ағышында булған фонетик процестарҙан, йәғни өндәрҙең позицион һәм комбинаторлы үҙгәрештәренән сығып билдәләнә. Һүҙ эсендәге һәм һүҙбәйләнештәр составындағы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең фонетик закондарына бәйле.

Орфоэпик ҡағиҙәләрҙе түбәндәгесә төркөмләргә мөмкин: һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше; тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше; дифтонгыларҙың әйтелеш үҙенсәлектәре; ҡайһы бер һүҙҙәрҙең һәм грамматик формаларҙың дөрөҫ әйтелеше; үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешендәге үҙенсәлектәр.

## Һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше

Хәҙерге башҡорт әҙәби телендә һуҙынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеше уларҙың телмәр ағышындағы позицион үҙгәрештәренән, йәғни редукция, элизия, протеза һам сингармонизм закондарынан сығып билдәләнә.

1. Әгәр һүҙҙең тәүге ижектәрендәге [о] һәм [ө] өндәре булһа, эргәләш ижектәрҙәге [а] һәм [ә] өндәре артикуляция яғынан ирен гармонияһы йоғонтоһонда бер ни тиклем [о°], [ө] һуҙынҡыларына яҡынлаша: *ботаҡ* [бо°та°ҡ], *йоҡа* [йо°ҡа°], *ҡорал* [ҡо°ра°л], *олатай* [о°ла°тай], *көрәш* [көрәᶱш], *көйәнтә* [көйәᶱнтә], *өйәңке* [өйәᶱңке].

2. [и] өнөнөң әйтелешендә түбәндәге үҙенсәлектәрҙе күрһәтергә була:

а) ғәрәп һәм фарсы телдәренән ингән кеше исемдәренең аҙағындағы [и] өнө дөрөҫ әйтелештә [ый], [ей], [ой], [өй] дифтонгыларына күсә: Садри [садрый], Вәли [ў̆әлей], Зәйни [зәйней], Лотфия [лотфойа], Гөлфиә [гөлфөйә];

б) *ни, ти* һүҙҙәрендә [и] өнө [ей] дифтонгыһы һымаҡ әйтелә: [ней], [тей], ни ти [ней тей];

в) башҡа осраҡтарҙа, шул иҫәптән псевдонимдарҙа, фамилияларҙа, шулай уҡ ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән -и аффикслы сифаттарҙа саф [и] өнө әйтелә: а) *М. Ғафури, Р. Ниғмәти, Ғ. Хәйри;* б) *ғилми, фәнни, әҙәби, ижади, тасуири, мәжүси.*

3. Тәүге һүҙ һуҙынҡы өнгә бөтөп, унық артынса килгән икенсе һүҙ һуҙынҡы өнгә башланһа һәм шул ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, тәүге һүҙҙең аҙағындағы һуҙынҡы өн төшөп ҡала (элизияға бирелә): *ҡоро утын* [ҡорутын], *арғы оста* [арғоста], *яҡшы уҡый* [йаҡшуҡый], *күрә алманы* [күрәлманы], *әйтә алманы* [әйталманы].

4. Беренсе һүҙ киң [а], [ә] һуҙынҡыларына бөтөп, унық артынса килгән һүҙ [и] өнөнә башланһа, ике һүҙ бергә әйтелгәнлектән, [ай], [әй] дифтонгылары барлыҡҡа килә: *килә инек* [киләйнек], *белә ине* [беләйне], *ҡайҙа икән* [ҡайҙайкән], *тора ине* [торайне].

5. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең баҫымһыҙ ижектәрендә һуҙынҡы өндәр яҙылһа ла, дөрөҫ әйтелештә бөтөнләй төшөп ҡала: *айырым* [айрым], *арыҫлан* [арҫлан], *бойороҡ* [бойроҡ], *яңылыш* [яңлыш].

6. Ҡайһы һүҙҙәрҙә һәм уларҙың төрлө формаларында баҫымһыҙ ижектә һуҙынҡы өн яҙылмаһа ла, дөрөҫ әйтелештә көсһөҙләнгән [ы], [е], [о], [ө] һуҙынҡы өндәре ишетелә: *биҙрә* [биҙерә], *бөҙрә* [бөҙөрә], *бысратыу* [бысыратыў], *күрше* [күреше], *тетрәү* [тетерәў], *томра* [томора].

7. *Бүрек, ирек, милек, халыҡ, холоҡ* һүҙҙәренә эйәлек ялғауҙары ҡушылһа, аҙаҡҡы ижектәге һуҙынҡы өн дөрөҫ әйтелештә лә, дөрөҫ яҙылышта ла бөтөнләй төшөп ҡала: *бүрек*, ләкин *бүркем, бүркең, бүркегеҙ*; *халыҡ*, ләкин *халҡым, халҡы, халҡыбыҙ; холоҡ*, ләкин *холҡом, холҡоң, холҡоғоҙ* һ. б.

Был һүҙҙәргә күплек, килеш һәм һүҙ яһаусы ялғауҙар ҡушылғанда, икенсе ижектәге һуҙынҡы өн төшөп ҡалмай. Мәҫәлән, яҙылышы һәм әйтелеше: *бүректәр, бүреклек, бүреккә, бүреклек; ирректә, ирекле, ирекһеҙҙән; халыҡтар, халыҡтың, халыҡсан; холоҡҡа, холоҡһоҙлоҡ* һ. б.

Иҫкәрмә. Башҡортса *кырк – кыркынсы, йолк – йолкто, курк – куркма, калк – калккан, һелк – һелкте, сәнс – сәнсте, сәнске* һүҙҙәре дөрөҫ әйтелештә бер ваҡытта ла *кырыҡ – кырығынсы, йолоҡ – йолоҡто, курыҡ – курыҡма, калыҡ – калыҡты, һелек – һелекте, сәнес – сәнесте, сәнеске* рәүешендә әйтелмәй.

## Дифтонгыларҙың дөрөҫ әйтелеше

Тар әйтелешле [ыў], [еў], [оў], [өў] һәм [ый], [ей], [ой], [өй] дифтонгылары, яҙылыштағы кеүек үк һәр ваҡыт асыҡ әйтеләләр: *һыу* [һыў], *килеү* [килеў], *тороу* [тороў], *көтөү* [көтөў], *серей* [серей], *йөрөй* [йөрөй]. Был типтағы һүҙҙәрҙә дифтонгыны ҡыҫҡартып, уларҙы *һу, килү, тору, көтү, сери, йөри* рәүешендә әйтеү хата әйтелеш һанала.

## Тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше

Әҙәби телдә тартынҡыларҙың дөрөҫ әйтелеш нормалары уларҙың телмәр ағышындағы комбинаторлы үҙгәрештәренә (ассимиляция һәм диссимиляция күренештәре), сингармонизм законлылыҡтарына нигеҙләнә.

### [б], [п] *өндәренең дөрөҫ әйтелеше*

1. Бер һүҙ эсендә ике һуҙынҡы араһында килгәндә шартлауы [б] тартынҡыһы ышҡыулы ике ирен [в] фонемаһы рәүешендә әйтелә: *бабай* [бавай], *ябай* [йавай], *кәбән* [кәвән], *хәбәр* [хәвәр].

2. Һүҙ эсендә [р], [л], [й], [ҙ], [з], [ж], [ў] тартынҡыларынан һуң килгәндә шартлаулы [б] өнө йомшаҡ [в] өнө кеүек әйтелә: *арба* [арва], *торба* [торва], *салбар* [салвар], *ялбыр* [ялвыр], *һәйбәт* [һәйвәт], *ҡыйбат* [ҡыйват], *аҙбар* [аҙвар], *туҙбаш* [туҙваш], *мәжбүри* [мәжвүри], *тәүбә* [тәүвә].

3. Тәүге һүҙ [р], [л], [й], [ҙ], [з], [ж], [ў] тартынҡыларына бөтөп, уның артынан килгән икенсе һүҙ [б] өнө менән башланһа һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, [б] өнө йомшаҡ [в] рәүешендә әйтелә: *ир бала* [ирвала], *һәр бер* [һәрвер], *юл буйы* [йулвуйы], *ай башы* [айвашы], *аҙ була* [аҙвула], *газ баҫымы* [газваҫымы], *багаж бар* [багажвар], *һау бул* [һаўвул].

4. Тәүге һүҙ һаңғырау [п] өнөнә бөтөп, уның артынса килгән икенсе һүҙ һуҙынҡы өн менән башланһа һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, шартлаулы [п] тартынҡыһы ышҡыулы ике ирен [в] өнө рәүешендә әйтелә: *барып ал* [барывал], *күп ине* [күвине], *уҡып ултыра* [уҡывултыра], *иҫәп өсөн* [иҫәвөсөн].

5. **[п]** өнөнә бөткән һүҙҙәрҙән һуң *бөт* ярҙамсы ҡылымы килһә, [п] тартынҡыһы үҙенән һуң торған яңғырау [б] тартынҡыһы йоғонтоһонда тулы ассимиляцияға бирелә, ә ике һуҙынҡы араһында тороп ҡалған [б] өнө, үҙ сиратында, ике ирен [в] тартынҡыһына күсә: *китап алдыҡ* [китавалдыҡ], *мәктәп эргәһендә* [мәктәвергәһендә], *талап итәләр* [талавитәләр], *уҡып була* [уҡывула], *туп уйнайҙар* [тувуйнайҙар], *күп эшләнек* [күвешләнек].

6. **-п, -ып, -еп** ялғауҙарына бөткән хәл ҡылымдарҙан һуң *бар, бир* һүҙҙәре килһә һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, дөрөҫ әйтелештә тәүге һүҙҙәге [п] өнө төшөп ҡала, ә икенсе һүҙҙәге [б] өнө дөрөҫ әйтелештә [п] өнөнә үҙгәрә: *алып бир* [алыпир], *китеп барҙы* [китепарҙы], *ҡайтып бара* [ҡайтыпара], *ултырып барҙыҡ* [ултырыпарҙыҡ], *яһап бирҙе* [яһапирҙе].

7. **-п, -ып, -еп** ялғауҙарына бөткән хәл ҡылымдарҙан һуң *бөт*-ҡылымы килһә һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, [п] өнө төшөп ҡала, ә [б] өнө дөрөҫ әйтелештә [в] өнөнә үҙгәрә: *ҡайтып бөттөләр* [ҡайтывөттөләр], *арып бөткән* [арывөткән], *уҡып бөт* [уҡывөт], *алып бөт* [алывөт], *йыйып бөткән* [йыйывөткән].

8. **[п]** өнөнә бөткән һүҙҙәрҙән һуң [б] тартынҡыһына башланған бүтән төрлө һүҙҙәр килә икән, ул саҡта [п] тартынҡыһы ассимиляцияға һәм оҙон [б] өнө әйтелә: *ҡыҙарып бешкән* [ҡыҙарыб̄ешкән], *шәп булған* [шәб̄улған], *уҡып була* [уҡыб̄ула], *ғәжәп бит* [ғәжәб̄ит].

### [к], [ҡ] *өндәренең дөрөҫ әйтелеше*

1. [к] һәм [ҡ] тартынҡыларына бөткән һүҙҙәрҙең артынса һуҙынҡы өн менән башланған һүҙ килһә һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, [к], [ҡ] өндәре әйтелештә [г], [ғ] өндәренә күсә: *кәрәк ине* [кәрәгине], *ишек алды* [ишегалды], *ураҡ өҫтө* [урағөҫтө], *тоҡ эсендә* [тоғесендә].

2. [к] һәм [ҡ] өндәренә башланған һүҙҙәр алдынан һуҙынҡы өнгә бөткән һүҙҙәр килһә һәм ике һүҙ бер интонация менән әйтелһә, [к], [ҡ] өндәре дөрөҫ әйтелештә [г], [ғ] өндәренә үҙгәрә: *алда ҡайтты* [алдағайтты], *ете көн* [йетегөн], *кисә күрҙем* [кисәгүрҙем], *нисә кеше* [нисәгеше], *ҡара ҡарға* [ҡарағарға], *яңы ҡала* [йаңығала].

3. [к] һәм [ҡ] өндәре менән башланған һүҙҙәр алдынан [ў], [ж], [з], [ҙ], [й], [л], [м], [н], [ң], [р] өндәренә бөткән һүҙҙәр килһә һәм ике һүҙ бер интонацион берҙәмлек тәшкил итһә, һүҙ башындағы [к], [ҡ] өндәре дөрөҫ әйтелештә [г], [ғ] өндәренә үҙгәрә: *уҡыу китабы* [уҡыугитавы], *һыу ҡошо* [һыуғошо], *таж кейгән* [тажгейгән], *Ғәзиз ҡарт* [ғәзизғарт], *тиҙ килегеҙ* [тиҙгилегеҙ], *яй ҡайттыҡ* [яйғайттыҡ], *бал ҡорто* [балғорто], *ҡыр ҡаҙы* [ҡырғаҙы], *һәр кем* [һәргем].

Иҫкәрмә. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙә һәм рус теленән һуңғы осорҙа үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә [к] һәм [ҡ] тартынҡылары үрҙә күрһәтелгән осраҡтарҙа ла, ғәҙәттә, үҙгәртелмәйенсә әйтелеп йөрөйҙәр: а) Мостай Кәрим [мостай кәрим], Балаҡатай районы [бала+ҡатай]; б) «Ҡыҙыл коммунар» колхозы [ҡыҙыл камунар калхозы], Париж коммунаһы [париш камунаһы], бай колхоз [бай калхос].

### [в] *өнөнөң дөрөҫ әйтелеше*

1. Төп башҡорт һүҙҙәрендә, шулай уҡ ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы [в] өнө [ў] өнө булып әйтелә: а) *ваҡ* [ўаҡ], *ваҡлау* [ўаҡлаў], *валсыҡ* [ўалсыҡ], *ватыҡ* [ўатыҡ].

Иҫкәрмә: Был һүҙҙәрҙе [ыўаҡ], [ыўаҡлау], [ыўалсыҡ], [ыўатыҡ] рәүешендә әйтеү ҙә дөрөҫ һанала:

б) *васыят* [ўасыйат], *ваҡиға* [ўаҡиға], *ваҡыт* [ўаҡыт], *ватан* [ўатан], *ватыҡ* [ўатыҡ], *вәғәҙә* [ўәғәҙә], *Вәсилә* [ўәсилә], *Ваһап* [ўаһап].

2. Рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә [в] өнө һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында һуҙынҡы өндәр араһында үҙгәрмәй: *вагон* [вагон],

*вокзал* [вагзал], *ваза* [ваза], *аватар* [аватар], *Иван* [иван], *Валя* [вал'я].

3. Рус теленән алынған һүҙҙәрҙең аҙағында һәм һүҙ уртаһында ябыҡ ижек аҙағында [в] тартынҡыһы [ф] өнө рәүешендә әйтелә: *актив* [актиф], *коллектив* [кал̄әиктиф], *автор* [афтор], *автобус* [афтобус], *автол* [афтол]. Һүҙ аҙағында [в] өнө килгән һүҙҙәргә һуҙынҡы өнгә башланған ялғау ҡушылғанда ла дөрөҫ әйтелештә [ф] өнө һаҡлана: ҡадиров – [ҡадироф], [ҡадирофығыҙ], актив – [актиф], [актифығыҙ].

### [д] *өнөнөң дөрөҫ әйтелеше*

1. Рус теленән алынған һүҙҙәрҙең аҙағында [д] өнө бөтә осраҡтарҙа ла дөрөҫ әйтелештә [т] өнө рәүешендә әйтелә: *доклад* [доклат], *докладты* [доклатты]; *завод* [завот], *заводта* [завотта]; *парад* [парат], *парадтың* [параттың]; *суд* [сут], *судтан* [суттан].

2. Рус теленән алынған һүҙҙәрҙең аҙағында [д] өнөнә бөткән һүҙҙәргә һуҙынҡы өн менән башланған ялғауҙар ҡушылғанда ла дөрөҫ әйтелештә [т] өнө һаҡлана: *халыҡ суды* [халыҡ суты], *кирбес заводы* [кирвес заводы], *мылтыҡ приклады* [мылтыҡ приклаты], *Еңеү парады* [еңеү параты].

Иҫкәрмә. Ижад һүҙе лә шул уҡ законға буйһона, мәҫәлән, дөрөҫ әйтелештә: *ижат* һәм *Мостай Кәрим ижаты* (дөрөҫ яҙылышта: *ижад – ижады*), ләкин сифат формаһы: *ижади.*

### [м] *өнөнөң дөрөҫ әйтелеше*

[м] өнөнә бөткән берлектәге 1-се зат ҡылым формаһынан аҙаҡ *мин* һүҙе килһә, дөрөҫ әйтелештә бер [м] өнө төшөп ҡала. Мәҫәлән: *алдым мин* [алдымин], *белә инем мин* [беләйнемин], *бирҙем мин* [бирҙемин], *килгәйнем мин* [килгәйнемин], *уҡыған инем мин* [уҡығайнымин].

### *Дөрөҫ әйтелештә тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияһы*

1. **-нк, -нҡ, -нг, -нғ** ҡушылмалары дөрөҫ әйтелештә **-ңк, -ңҡ, -ңг, -ңғ** рәүешендә әйтелә. Мәҫәлән: *егенке* [егеңке], *һуҙынҡы* [һуҙыңҡы], *тартынҡы* [тартыңҡы], *иртәнге* [иртәңге], *йыуынғы* [йыуыңғы].

2. [н] өнөнә бөткән һүҙҙәрҙән һуң [б] өнө менән башланған һүҙҙәр килһә, дөрөҫ әйтелештә [н] өнө [м] өнө рәүешендә әйтелә. Мәҫәлән: *Буранбай* [бурамбай], *ун биш* [умбиш], *ун бармаҡ* [умбармаҡ], *тонбойоҡ* [томбойоҡ], *һикһән бер* [һикһәмбер], *көнбайыш* [көмбайыш] һ. б.

## ҮҘЛӘШТЕРЕЛГӘН ҺҮҘҘӘРҘЕҢ ДӨРӨҪ ӘЙТЕЛЕШЕ

Сит телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелеше уларҙың ҡайһы осорҙа һәм ниндәй юл менән (һөйләү телмәре йәки яҙма телмәр аша) үҙләштерелеүенә бәйле.

1. Сит телдәрҙән боронғо осорҙа, нигеҙҙә, һөйләү телмәре аша үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең күбеһе башҡорт әҙәби теленең фонетик системаһына һәм орфоэпик нормаларына тулыһынса буйһонған, уларҙың дөрөҫ әйтелеше боронғо орфография ҡағиҙәләрендә лә сағылыш тапҡан, мәҫәлән:

а) рус теленән ингән һүҙҙәр: *бүрәнә < бревно, эшләпә < шляпа, йәҙрә < ядро, кирбес < кирпич, кенәгә < книга, мисәт < печать, мейес < печь, эҫкерт < скирда, сана – сани* һ. б.;

б) рус теле аша Көнбайыш Европа телдәренән ингән һүҙҙәр: *әнис < анис, карап < корабль, келәймә < клеймо, керәндил < крендель, мөштөк < мундштук, мәк < мак, эскәмйә < скамья* һ. б.

в) ғәрәп һәм фарсы телдәренән ингән һүҙҙәр: *бәлә < бәла, һәләкәт < һәлакәт, [йа]уап < жәвап, майҙан < мәйдан, талап < таләп* һ. б.

2. Бер төркөм үҙләштерелгән һүҙҙәр башҡорт теленә үҙгәрешһеҙ килеп ингән, һәм нигеҙ телдә нисек әйтелһә, башҡорт әҙәби телендә лә шулай әйтелеп йөрөнө. Һуңғы осорҙа уларҙы сингармонизм законы нигеҙендә тулыһынса алғы рәт һуҙынҡылары аша әйтеү күҙәтелә: Мәҫәлән, *ғаилә* [ғаилә] һәм [ғәилә], *рәссам* [рәссам] һәм [рәссәм], *фажиға* [фажиғә] һәм [фәжиғә] һ. б.

Шулай уҡ рус теленән һәм рус теле аша башҡа сит телдәрҙән яңы осорҙа яҙма телмәр аша үҙләштерелгән һүҙҙәр үҙҙәренең рус телендәге яҙылышын һәм әйтелешен, нигеҙҙә, һаҡлайҙар, башҡорт орфоэпияһына буйһонмайҙар. Быға миҫал итеп түбәндәге осраҡтарҙы күрһәтергә мөмкин:

1) Октябрь революцияһы һәм Совет власы урынлаштырыуға бәйле барлыҡҡа килгән һүҙҙәрҙең әйтелеше: *Совет, коммунизм, комсомол, революция, комитет, колхоз, пионер, директор, социализм, пропаганда* һ. б.;

2) *жи, ши, ци, жю, шю* тибындағы хәреф ҡушылмалары булған һүҙҙәрҙең әйтелеше: *жираф* [жы$^{и}$раф], *шинель* [шы$^{и}$н’эл’], *циркуль* [цы$^{и}$рк’ ул’], *жюри* [жур’и] һ. б.

3) *батальон, бульон, медальон* тибындағы һүҙҙәрҙең [йо] дифтонгыһы аша әйтелеше: [бъта̂л'йо́н], [м'э^иал'йо́н] һ. б.;

4) [э] өнө алдынан ҡалын тартынҡылар әйтелеше: *отель* [атэ́л'], *фонема* [фанэ́мъ], *демонтаж* [дэ^имантáш] һ. б.;

5) баҫымһыҙ ижектә лә саф [о] өнө әйтеү: *поэма* [поэ́мъ], *какао* [ка̂ка́о], *оазис* [оа́з'ис] һ. б.;

6) яңғырау тартынҡыларҙың һүҙ аҙағында һәм һаңғырау тартынҡылар алдында һаңғыраулановы, ә һуҙынҡы өн алдынан үҙ әйтелештәрен һаҡлауы: фла[к] – фла[г]ы, гер[п] – гер[б]ын, гара[ш] – гара[ж]ы һ. б.

Ләкин [в] һәм [д] тартынҡыларының әйтелешендә был законлыҡ боҙола. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙә [в], [д] өндәренә бәйле ҡағиҙәләр тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше бүлегендә бирелгән.

3. Аҙаҡҡы ижегендә нәҙек һуҙынҡылар булған сит тел һүҙҙәренең аффикстары ҡалын әйтелә: *тарих*[ы], *Закир*[ҙан], *лагер*[ҙа], *студент*[тың] һ. б.

## ГРАФИКА

**Графика** – сығышы буйынса грек һүҙе: *grapho* «яҙам».

Тел ғилемендә графика:

1. а) һөйләү телмәрен яҙыуҙа биреү өсөн ҡулланылған **һыҙылыштар системаһы**: алфавиттағы хәрефтәр (шрифҡа бәйле төрҙәре менән), баҫым билдәһе, апостроф. Тыныш билдәләре лә график системаның өлөшөн тәшкил итә (ләкин уларҙы ҡулланыу ҡағиҙәләре пунктуацияға ҡарай);

б) **фонемаларҙы һәм уларҙың ҡушылмаһын хәрефтәр** (йәки хәрефтәр ҡушылмаһы) **ярҙамында тамғалау ысулдары**: графика фонемаларға фонема булараҡ ҡына бәйләнә, һәм ул телдең мәғәнәле берәмектәрен иҫәпкә алмай (орфография иһә билдәле морфемалар һәм һүҙҙәр составындағы фонемаларҙы тамғалау ҡағиҙәләрен билдәләй; тимәк, орфография телдең мәғәнәле яғы менән эш итә);

в) киңерәк планда: **текста графемалар менән фонемалар араһындағы мөнәсәбәттәр системаһы.**

2. Хәрефтәр менән фонемалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тикшереүсе һәм тасуирлаусы фән.

**Фонема** – телдең иң бәләкәй (минималь) өн берәмеге. Ул ошо телдәге бөтә башҡа фонемаларға ҡаршы ҡуйылған телмәр өндәре рәте тураһындағы күҙаллауҙы дөйөмләштерә (ә өндәр акустик яҡтан бөтөнләй оҡшаш булмаҫҡа ла мөмкин). Был ҡаршы ҡуйылғанлыҡ фонеманың һүҙ яһаусы һәм һүҙ айырыусы функцияһы менән билдәләнә. Мәҫәлән, башҡорт телендә артикуляцион һәм акустик яҡтан төрлө булған ике [с] өнө (мәҫәлән: *сал* һәм *суҡ*) [с] фонемаһына ойоша. Һәр реаль әйтелгән өн (ә өндәр иҫәпһеҙ күп) ниндәйҙер бер фонеманың вәкиле, уның тормошҡа ашырылышы була (фонемалар һаны күп түгел, улар сикләнгән).

Иҫкәрмә 1. Китапта телмәр өндәре һәм фонемалар квадрат йәйәләр эсенә алып билдәләнә.

Алфавиттағы хәрефтәр (уларҙың һаны ла сикләнгән) телмәр өндәрен түгел, ә фонемаларҙы тамғалай.

Башҡорт теле буйынса мәктәп дәреслектәрендә башҡорт телмәренең өндәр составы таблицаһында фонемалар өндәр тип аталһа ла, асылда фонемалар күҙ уңында тотола. Айырым осраҡтарҙа был китапта ла фонемалар өн тип атала.

Иҫкәрмә 2. Яңғыраш (әйтелеш) тураһында һүҙ барғанда, «фонема» термины «өн» һүҙе менән алмаштырыла; мәҫәлән, [а] өнөнөң, [б] өнөнөң, [ы] өнөнөң һ. б. өндәрҙең әйтелеше тураһында тип әйтелә. Был осраҡта [а] фонемаһы төҫмөрләнешенең (сағылышының), [б] фонемаһы төҫмөрләнешенең һәм башҡаларҙың әйтелеше тураһында тип һөйләү дөрөҫ булыр ине, сөнки фонемалар әйтелмәй, ә теге йәки был фонеманың төҫмөрләнеше генә әйтелә, әммә ундай һүҙҙәр теҙмәһен ҡулланыу үтә ҡатмарлы.

Хәрефтәрҙең характерын, уларҙың үҫеш тарихын **алфавит теорияһы** өйрәнә. Алфавит теорияһы графиканан **айырылып** та бара keүек: графика айырым хәрефтәрҙең ниндәй өн мәғәнәләре булыуын йәки теге йәки был хәрефтең нисек уҡылыуын ҡарай. Икенсе төрлө әйткәндә, графика **ошо телдең өндәр системаһына ҡарата алфавиттың мөнәсәбәтен тикшерә**. Шулай итеп, хәрефтең өнгә (дөрөҫөрәге – фонемаға) ҡарата мөнәсәбәте графика ҡарай торған төп мәсьәлә булып тора; ә хәрефтәр үҙҙәре алфавит – **график саралар** ғына.

Графиканың, алфавит менән сағыштырғанда, үҙенә генә хас маҡсаты барлығы төрлө алфавиттарҙа хәрефтәрҙең өн мәғәнәһе, хатта хәрефтәр график яҡтан бер үк булған саҡтарҙа ла, төрлө булыу фактында күренә. Мәҫәлән, башҡорт алфавитында инглиз, немец, француз телдәрендә ҡулланылған латин алфавитындағы хәрефтәргә оҡшаш бер нисә хәреф бар: **А, В, Е, М, О, Р, Т, Х** (ҙур хәрефтәр) һәм **а, с, е, р, х, у** (бәләкәй хәрефтәр). Әммә башҡорт телендә һәм үрҙә аталған телдәрҙә был хәрефтәр төрлөсә уҡыла. Мәҫәлән, башҡорт яҙыуында **В** (ҙур) хәрефе [в] өнөн *(Вагон)* һәм [ў] өнөн *(ўаҡыт)*, инглиз, немец, француз телдәрендә [б] өнөн (инглиз телендәге *Black*, немец телендәге *Bad*, француз телендәге *Balle* һүҙҙәренең уҡылышы менән сағыштырығыҙ) тамғалай; башҡорт яҙыуында **С** хәрефе [с] өнөн *(сик)*, инглиз телендә [к] өнөн *(cold)* һәм [с] өнөн *(city)*, немец телендә [к] өнөн *(der Causin)* һәм [ц] өнөн *(das Cellephan)*, француз телендә [к] өнөн *(cas)* һәм [с] өнөн *(citoyen)* тамғалай. Бәләкәй **х** хәрефе башҡорт телендә [х] өнөн ([хаҡ]) тамғалаһа, инглиз, немец һәм француз телдәрендә [кс] ҡушылмаһын тамғалай: *extreme* – инглиз телендә, *extrem* – немец телендә, *extreme* – француз телендә.

Яҙыуҙа телмәр өндәрен тамғалауҙа төп график сара булып хәрефтәр тора. Был бүлектә төп иғтибар **алфавит теорияһына** бирелəсәкте ошо хәл билдәләй ҙә инде.

## АЛФАВИТ

**Алфавит** – теге йәки был телдең яҙыуында файҙаланылған график билдәләрҙең (хәрефтәрҙең) билдәле бер тәртиптә урынлаштырылған йыйылмаһы. *Алфавит* һүҙе грек алфавитының тәүге ике хәрефе исеменән төҙөлгән: «альфа» һәм «вита».

Иҫкәрмә. В хәрефенә «вита» исемен гректар һуңыраҡ биргән. Боронғо Грецияла ул «бета» исеме менән йөрөгән. Шуға ла Көнбайыш Европала: *альфа-бэт* (немец телендә – (*Alphabet*, француз телендә – *alphabet* һ. б.)

Рус теленең *азбука*, башҡорт теленең *әлифба* һүҙҙәре лә шул уҡ ысул менән яһалған. Рус алфавитының беренсе хәрефе элек «аз» тип, ә икенсеһе «буки» тип аталған, ғәрәп алфавитының беренсе хәрефе «әлиф» тип, икенсеһе «би» тип исемләнгән. Шуға ла: *аз-бука, әлиф-ба (әлепей).*

### *Хәҙерге алфавиттағы хәрефтәрҙең исеме һәм яҙылышы*

1939 йылдың декабрендә Башҡорт АССР-ы Юғары Советының Президиумы рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит ҡабул итә. Шуның менән бергә рус алфавитындағы хәреф исемдәре лә алына: «а», «бэ», «вэ» һ. б. Хәрефтәргә быңдай исемдәрҙе римляндар биргән. Римляндар грек алфавитын ҡабул итһәләр ҙә, грек хәрефтәренең оҙон исемен («альфа», «бета», «гамма», «дельта» һ. б.) алмай һәм улар урынына, хәрефтәрҙе мөмкин тиклем ҡыҫҡа атарға тырышып, үҙ исемдәрен ҡуша. Римляндар хәрефтең исеме менән шул исемгә ярашлы өндө күрһәтергә тырышҡан.

Элек хәрефтәр исемен ҡушып («бета» + «альфа» = ба) уҡырға өйрәткәндәрен иҫәпкә алғанда, яҙырға өйрәтеүҙә быны рево-

люцияға тиңләргә була (өн методы менән уҡырға өйрәтеү сағыштырмаса күптән түгел ҡабул ителә; рустарҙа ла, башҡорттарҙа ла элек шулай уҡырға өйрәткәндәр: «буки» + «аз» = ба, «би» + «әлиф» = бә).

Хәрефтәрҙең римляндар биргән ҡыҫҡа исеме уҡырға өйрәткәндә бигүк ҡамасауламай. Хәрефтәрҙең бына ошо латинса ҡыҫҡа исеме тора-бара рустарҙа, унан беҙҙә ҡабул ителә.

## Хәҙерге башҡорт алфавиты һәм хәрефтәр исеме

| №/№ | Баҫма хәреф | Яҙма хәреф | Хәреф исеме | Өн мәғәнәһе | №/№ | Баҫма хәреф | Яҙма хәреф | Хәреф исеме | Өн мәғәнәһе |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Аа | *Аа* | а | [а] | 22 | Пп | *Пп* | пэ | [п] |
| 2 | Бб | *Бб* | бэ | [б] | 23 | Рр | *Рр* | эр | [р] |
| 3 | Вв | *Вв* | вэ | [в] | 24 | Сс | *Сс* | эс | [с] |
| 4 | Гг | *Гг* | гэ | [г] | 25 | ҫ | *ҫ* | ҫэ | [ҫ] |
| 5 | Ғғ | *Ғғ* | ғы | [ғ] | 26 | Тт | *Тт* | тэ | [т] |
| 6 | Дд | *Дд* | дэ | [д] | 27 | Уу | *Уу* | у | [у] |
| 7 | Ҙҙ | *Ҙҙ* | ҙы | [ҙ] | 28 | Үү | *Үү* | ү | [ү] |
| 8 | Ее | *Ее* | е(йә) | [е], [йе] [э] | 29 | Фф | *Фф* | эф | [ф] |
| 9 | Ёё | *Ёё* | ё(йо) | [йо], [о'] | 30 | Хх | *Хх* | ха | [х] |
| 10 | Жж | *Жж* | жэ | [ж] | 31 | Һһ | *Һһ* | һа | [һ] |
| 11 | Зз | *Зз* | зэ | [з] | 32 | Цц | *Цц* | цэ | [ц] |
| 12 | Ии | *Ии* | и | [и] | 33 | Чч | *Чч* | чэ | [ч] |
| 13 | Йй | *Йй* | ҡыҫҡа и | [й] | 34 | Шш | *Шш* | ша | [ш] |
| 14 | Кк | *Кк* | ка | [к] | 35 | Щщ | *Щщ* | ща | [щ] |
| 15 | Ҡҡ | *Ҡҡ* | ҡы | [ҡ] | 36 | ъ | *ъ* | ҡалын айырыу билдәһе | ['] |
| 16 | Лл | *Лл* | эл | [л] | 37 | Ыы | *Ыы* | ы | [ы] |
| 17 | Мм | *Мм* | эм | [м] | 38 | ь | *ь* | нәҙеклек билдәһе | ['] |
| 18 | Нн | *Нн* | эн | [н] | 39 | Ээ | *Ээ* | э | [э] |
| 19 | ң | *ң* | эң | [ң] | 40 | Әә | *Әә* | ә | [ә] |
| 20 | Оо | *Оо* | о | [о] | 41 | Юю | *Юю* | ю (йу) | [йу], ['у] |
| 21 | Өө | *Өө* | ө | [ө] | 42 | Яя | *Яя* | я (йа) | [йа], ['а] |

Элек хәреф исемдәре күп осраҡта үҙ аллы һүҙҙәр булһа, хәҙерге башҡорт алфавитында хәреф исемдәре үҙ аллы һүҙҙәрҙән тормай. Хәрефтәрҙең исеме хәҙер хәрефтәр тамғалаған өндәрҙең сифатын ғына күрһәтә (*а – а, бэ – б, вэ – в, гэ – г* һ. б.).

Башҡорт әҙәби телендә һүҙҙәр *ң, ҫ, ъ, ь* хәрефтәре менән башланмай. Ләкин был хәрефтәр ингән һүҙҙәр һүҙлектәрҙә һәм айырым хеҙмәттәрҙә ҙур хәреф менән йыйылырға мөмкин.

Алфавиттан күренеүенсә, һәр хәреф дүрт варианттан тора: ике баш (ҙур) хәрефтән (баҫма һәм яҙма) һәм ике бәләкәй хәрефтән (баҫма һәм яҙма). Хәрефтәрҙең был «вариант»тарын (дөрөҫөрәге: хәрефтәрҙең үҙен) ғилми әҙәбиәттә бер үк «графема»ның «аллограф»тары тип атау ҡабул ителгән. **Графема** – ул, шулай итеп, алфавиттың дүрт төрлө формала сағылыш тапҡан абстракт берәмеге, мәҫәлән: Аа, *Аа*.

Башҡорт теленең специфик өндәре өсөн алынған хәрефтәрҙең күбеһе рус алфавитындағы хәрефтәргә өҫтәмә билдәләр ҡуйып бирелә. Шуға күрә лә һүрәтләнеше яғынан улар рус алфавитындағы ниндәй хәрефтән сығып яһалған булһа, башҡорт алфавитына рус алфавитындағы шул хәрефтән һуң урынлаштырылған: *г, ғ; к, ҡ; н, ң; о, ө; с, ҫ; у, ү; э, ә*. Ә бына *ҙ* һәм *һ* хәрефтәренең башҡорт алфавитындағы урыны рус алфавитындағы теге йәки был хәреф һүрәтләнешендәге оҡшашлыҡҡа нигеҙләнмәгән. Уларҙың тәүгеһе – рус алфавитының *д* хәрефенән, ә икенсеһе *х* хәрефенән һуң урынлаштырылған. Бында ошо хәрефтәр менән белдерелгән өндәр әйтелешендәге оҡшашлыҡ күҙ уңында тотолған: *д, ҙ; х, һ*.

Алфавиттағы хәрефтәрҙең ошолай урынлаштырылыуы хәҙер традицияға әйләнгән. Алфавиттағы хәрефтәр тәртибен белеү ҙур практик әһәмиәткә эйә. Иң элек грамотаға өйрәнеү (алфавиттағы хәрефтәрҙе иҫтә тотоу) өсөн кәрәк. Иректе тәртиптә хатта 12 һуҙынҡы хәрефте иҫкә төшөрөүе лә ауыр. Бына ошондай практик талаптар хәҙер традицияға әйләнгән хәрефтәр тәртибен тыуҙырған да инде.

# ОРФОГРАФИЯ

## ОРФОГРАФИЯ ҺӘМ УНЫҢ ӨЛӨШТӘРЕ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Орфография (грекса *orthos* – «дөрөҫ» һәм *grapho* – «яҙам» һүҙҙәренән) – дөйөм ҡабул ителгән, берҙәм нормаларға һалынған (унификацияланған) һәм һәр кем өсөн мәжбүри һаналған практик яҙыу системаһы. Икенсе төрлө әйткәндә, орфография – әҙәби телдең фәнни нигеҙләнгән һәм дәүләт тарафынан законлаштырылған яҙыу ҡағиҙәләре йыйылмаһы.

Орфографияның маҡсаты шул телдә яҙыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың бөтәһенә, бер төрлө яҙыуҙы билдәләү нигеҙендә, теләһә ниндәй тексты тиҙ, еңел уҡырға һәм яҙырға мөмкинлек биреүҙән тора.

Был маҡсатты үтәү өсөн, беренсенән, орфография бер булырға, уның ҡағиҙәләре шул телдә яҙыусы кешеләр тарафынан дөйөм ҡабул ителгән булырға тейеш. Һәр бер кеше өсөн айырым орфография була алмай. Икенсенән, орфографияға системалылыҡ, эҙмә-эҙлелек хас. Бер үк һүҙҙе ике төрлө яҙырға юл ҡуйылырға тейеш түгел. Өсөнсөнән, орфография еңел үҙләштерә алырлыҡ итеп төҙөлөргә тейеш.

Дөрөҫ яҙылыш, дөрөҫ әйтелеш кеүек үк, мөһим. Уларҙың икеһе лә яҙғандағы һәм ишеткәндәге һүҙҙәрҙе тиҙ, еңел һәм дөрөҫ аңлау өсөн кәрәк. Яҙышҡанда йәки һөйләшкәндә бер төрлөлөктән тайпылыу аңлауҙы ауырлаштыра.

Яҙыуҙы орфографик унификациялау тулы, абсолют унификациялауҙы аңлатмай: орфография, мәҫәлән, почерк, яҙыу темпы һәм башҡалар менән шөғөлләнмәй, был орфография сфераһы эсенә инмәй.

Ләкин яҙыуҙың орфографик сфераһы үҙе бик киң. Уға түбәндәгеләр инә:

1) һүҙҙәрҙең өн составын хәрефтәр менән билдәләү (алфавит менән графика билдәләмәгәнен): *йөрәк – йөрәге*;

2) ҙур һәм бәләкәй хәрефтәр ҡулланыу: *гүзәл* һәм *Гүзәл*;

3) ҡушып, айырып һәм һыҙыҡса аша яҙыу: *өс мөйөш* һәм *өсмөйөш; тел, әҙәбиәт* һәм *тел-әҙәбиәт; физика, математика* һәм *физика-математика*;

4) һүҙ киҫәктәрен юлдан юлға күсереү: *ки-сереш* йәки *кисе-реш*, ләкин *кис-ереш* түгел;

5) яҙыуҙа һүҙҙәрҙе график ҡыҫҡартыу: *киҫәксә – к.* йәки *киҫ.*, ләкин «*ки*» ҙә, «*киҫә*» лә түгел.

Былар – орфографияның өлөштәре. Һәм уларҙың һәр береһе байтаҡ конкрет ҡағиҙәләр йыйылмаһынан тора. Шулай ҙа орфографияның өлөштәре үҙҙәренең конкрет ҡағиҙәләре менән генә түгел һәм хатта уларҙың дөйөм йүнәлдерелгәнлеге (һүҙҙәрҙең өн составын күрһәтеү, ҙур һәм бәләкәй хәрефтәрҙе ҡулланыу һ. б.) менән генә лә түгел, ә үҙҙәренең конкрет ҡағиҙәләре нигеҙендә ятҡан дөйөм принциптары менән айырыла.

Орфографияның йәки уның айырым өлөштәренең принциптары – конкрет ҡағиҙәләргә нигеҙләнгән төп принцип ул. Был яҡтан башҡорт орфографияһының өлөштәре түбәндәгеләргә айырыла:

1. Орфографияның беренсе өлөшө (һүҙҙәрҙең өн составын хәрефтәр менән күрһәтеү) үҙенең конкрет ҡағиҙәләрен фонетик принципҡа нигеҙләнеп төҙөй. Орфографиялағы фонетик принциптың төп талабы: «Нисек ишетелһә, шулай яҙ!» Мәҫәлән, *йөрәк* тигәндә – «к», ә *йөрәге* тигәндә «г» яҙабыҙ, сөнки шулай ишетәбеҙ.

2. Ҙур һәм бәләкәй хәрефтәрҙе ҡулланыу (орфографияның икенсе өлөшө) һүҙҙәрҙең характеры (яңғыҙлыҡ исемдәр ҙур хәрефтәр менән башлап яҙыла, мәҫәлән: *Өфө ҡалаһы*) һәм шулай уҡ телмәрҙәге урыны (һәр үҙ аллы һөйләм ҙур хәреф менән башлап яҙыла) менән бәйле. Шуға күрә был өлөштөң төп принцибын – лексик-синтаксик принцип тип билдәләргә мөмкин.

3. Ҡушып һәм айырып яҙыуҙың төп ҡағиҙәһе булып түбәндәге ябай ғына ҡағиҙә тора: һүҙҙәр айырым, һүҙ өлөштәре ҡушып яҙыла. Күсмә йәки асыҡ булмаған осраҡтар өсөн һыҙыҡса (дефис) аша яҙыу индерелгән: *бер генә*, ләкин *берҙән-бер*. Быңдай киҫәксәләр нигеҙендә һүҙ төшөнсәһе ята: һәр һүҙ үҙ алдына ҡушып яҙыла һәм башҡа һүҙҙәрҙән айырыла. Тимәк, был принцип – лексик принцип, дөрөҫөрәге: лексик-морфологик принцип.

4. Һүҙҙең ниндәйҙер аҙаҡҡы өлөшөн икенсе юлға күсереп яҙғанда, һүҙҙең ижектәргә бүленеше иғтибарға алына: *дәрт-ле*, ләкин *дә-ртле* түгел. Был принцип ижек принцибы тип атала.

5. Яҙыуҙа һүҙҙәрҙе график ҡыҫҡартҡанда, өндәрҙең һәм шуларға ярашлы хәрефтәрҙең характеры иҫәпкә алына: һүҙҙәрҙе, мәҫәлән, башта тормаған һуҙынҡыларға ҡыҫҡартырға ярамай:

ҡылым – *к.*, йәки *ҡыл.*, ләкин «*ҡы.*» йәки «*ҡылы.*» түгел. Бында, шулай итеп, хәреф-өн принцибы ята.

Орфографияның төп өлөшө итеп уның беренсе – һүҙҙәрҙең өн составын хәрефтәр менән күрһәтеү – өлөшөн иҫәпләйҙәр. Был – орфографияның иң ҙур өлөшө. Орфографик ҡағиҙәләрҙең күпселеге ошо бүлектә тупланған. Унан килеп, орфографияның башҡа өлөштәренән бигерәк, уның нәҡ ошо өлөшө хәҙерге башҡорт яҙыуының төп хәреф-өн тибына тура килә. Был яҡтан ул туранан-тура алфавитты һәм графиканы дауам итә. Улар менән бергә хәҙерге башҡорт яҙыуын билдәләгән төп, иң кәрәкле факторҙарҙы туплай. Орфографияның башҡа өлөштәре, бигерәк тә һүҙ өлөштәрен юлдан юлға күсереү, ҡушып йәки айырып яҙыу өлөштәре, яҙыу төрө менән һәм уның нигеҙе булған алфавит һәм графика менән ул тиклем үк тығыҙ бәйләнмәгән.

Беренсе өлөштөң башҡа өлөштәрҙән өҫтөнлөгө шунда ла күренә: беренсе өлөштөң төп принцибы (фонетик), ғәҙәттә, бөтә орфографияның да төп принцибы – орфографияның фонетик принцибы – иҫәпләнә.

Орфографияның өлөштәре бер-береһенән нисек кенә айырылмаһын, уларҙы берләштерә торған нигеҙ бар: уларҙың барыһы ла һүҙгә ориентир тота (һүҙҙәрҙе ҡушып һәм айырып яҙыу, һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу, һүҙ киҫәктәрен күсереү). Хатта ҙур һәм бәләкәй хәрефтәрҙе ҡулланыу менән һүҙҙәр үҙҙәренән-үҙҙәре йәки текстағы урындары буйынса айырыла. Орфографияның беренсе өлөшө лә был ҡағиҙәнән ситтә тормай: фонетик принцип та һүҙҙәрҙе бер төрлө яҙыуға йүнәлтелгән. Был йәһәттән орфография һүҙҙәрҙе бер төрлө яҙыу ҡағиҙәләре йыйылмаһы тип билдәләнә ала. Орфография тип шул ҡағиҙәләрҙе билдәләүсе һәм өйрәнеүсе фәнде лә атайҙар.

**Орфографияның принциптары.** Орфография принциптарының исемен һәм уларҙың һанын төрлө авторҙар төрлөсә йөрөтһә лә, нигеҙҙә, улар өс төп принципҡа ҡайтып ҡала: фонетик, морфологик (фонематик-морфологик), тарихи (тарихи-традицион). Шуға тағы график принцип менән дифференциацион (дифференциацияланған) принципты өҫтәргә мөмкин, ләкин былар төп принцип булып тормай.

**1. Фонетик принцип** һүҙҙәр хәҙерге телдә нисек әйтелә, шулай яҙыуҙан тора. Фонетик принцип теорияла ла, практикала ла иң яҡшы, иң уңай принцип тип иҫәпләнә, сөнки һүҙҙә ниндәй өндәр әйтелһә, шул өндәрҙең үҙ график билдәләрен ҡуйып яҙыу анһат та, фонетик яҡтан теүәл дә. Һүҙҙәр үҙгәреү менән, өндәре артыҡ күп үҙгәрештәргә, сиратлашыуҙарға дусар булмаған телдәрҙең яҙыуы өсөн фонетик принцип, һис шикһеҙ, төп нигеҙ итеп алына. Хәҙерге башҡорт, татар, белорус, серб яҙыуҙары, башлыса,

шул принципҡа ҡоролған. Башҡорт әҙәби телендә һүҙҙәр нисек, ниндәй өндәр менән әйтелһә, шулай яҙыла. Был – башҡорт орфографияһы өсөн төп ҡағиҙә. Башҡорт яҙыуында был ҡағиҙәнең тотороҡло үткәрелеүе телебеҙгә хас сингармонизм законын сағылдырыуҙа ла, өндәрҙең төрлө-төрлө комбинатор үҙгәреүҙәрен, сиратлашыуҙарын тулыһынса биреүҙә лә күренә. Мәҫәлән, ҡалын һүҙҙәр ҡалын һуҙынҡылар менән генә, нәҙек һүҙҙәр нәҙек һуҙынҡылар менән әйтелә: *тамғалар – билдәләр.* Тамыр йәки нигеҙ аҙағындағы [ҡ], [к], [п] өндәре, һүҙгә һуҙынҡы өндән генә торған йәки һуҙынҡы өн менән башланған ялғау ҡушылғанда [ғ], [г], [б] өндәренә әйләнә, һәм был орфографияла ла сағылыш таба: *ҡалаҡ – ҡалағы, көрәк – көрәге, китап – китабы, бешереп – бешеребеоәк.* Ниндәй өндән һуң килеүҙәренә ҡарап, күплек һәм килеш (эйәлек, төбәү, төшөм, урын-ваҡыт һәм сығанаҡ) ялғауҙары бер нисә төр вариантта йөрөй, һәм был төрлөлөк тә яҙыуҙа күрһәтелә: *болондар – кейемдәр, тауҙар – көйҙәр, мышылар – төлкөләр, ағастар – ишектәр, (-дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр, -лар/-ләр, -тар/-тәр); ҡайындың – күлдең, ҡомдоң – төндөң, тауҙың – күҙҙең, ҡорҙоң – өйҙөң, баланың – кешенең, һолоноң – бөрөнөң, баштың – һәнәктең, ҡоштоң – көстөң* (*-дың/-дең, -доң/-дөң, -ҙың/-ҙең, -ҙоң/-ҙөң, -ның/-нең, -ноң/-нөң, -тың/-тең, -тоң/ -төң*) һ. б.

Фонетик принцип өн-хәреф яҙыуында орфографияның мөмкин булған берҙән-бер принцибы булып тормай. Башҡа телдәр яҙыуында орфографияның башҡа принциптары ҡулланылырға мөмкин һәм ҡулланыла ла.

Һүҙ үҙгәреү менән өндәре күп төрлө сиратлашыуҙар, комбинатор үҙгәрештәр кисерә торған телдәр өсөн (мәҫәлән, рус теле өсөн) фонетик принцип нигеҙ була алмай. Был телдәрҙә һүҙ үҙгәреү һөҙөмтәһендә бер үк тамырҙағы һүҙҙәр төрлө осраҡта төрлөсә яҙылалар. Ундағы өн үҙгәрештәренең һәм сиратлашыуҙарының барыһын да күрһәтә башлаһаң, һүҙҙең мәғәнәһен тиҙ генә айырыу бик үк еңел булмаҫ ине. Шуға күрә бындай телмәр өсөн морфологик принцип характерлы.

**2. Морфологик принцип** һүҙҙәрҙең мәғәнәле киҫәктәрен һәр осраҡта ла бер генә төрлө яҙыуҙы, һүҙ үҙгәртеү менән уларҙағы өн үҙгәрештәрен күрһәтеп тормауҙы маҡсат итеп ҡуя. Һәр телдә лә орфография бер генә принципҡа сикләнеп ҡала алмай. Фонетик принципҡа нигеҙләнгән башҡорт яҙыуына ла ҡайһы саҡта морфологик принцип кәрәк була. Был принцип, башлыса, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе, уларҙың теге йәки был өнө билдәле позицияла үҙгәреүгә ҡарамаҫтан, бер генә формала яҙыуға ҡайтып ҡала. Мәҫәлән, [н] өнөнә тамамланған һүҙҙәрҙә (йәки һүҙ формаларында) был тартынҡы, күрше өнгә эйәреп, [ң] йәки

[м] булып ишетелһә лә, һүҙҙең (тамырҙың, нигеҙҙең йәки алдағы ялғауҙың) мәғәнә асыҡлығы юғалмаһын өсөн, был үҙгәрештәр яҙыуҙа күрһәтелмәй. Мәҫәлән, *алдынғы, барғанмын, боронғо, бошонҡо, ҡоторонҡо, тартынҡы, түбәнге* һүҙҙәре [алдыңғы], [барғаммын], [бороңғо], [бошоңҡо], [ҡотороңҡо], [тартыңҡы], [түбәңге] формаһында түгел, тәүҙә яҙылғанса бирелә. *Айырым, бойороҡ, төкөрөк* кеүек һүҙҙәрҙе йәнле һөйләшеүҙәгесә [айрым], [бойроҡ], [төкрөк] рәүешендә [ы], [о°], [ө] өндәрен төшөрөп ҡалдырып түгел, бәлки тулыһынса (һүҙҙең тамырын боҙмайынса (*айыр, бойор, төкөр*) яҙыу ҙа морфологик принципҡа ҡарай.

**3. Тарихи (традицион) принцип** элекке яҙыуҙы һаҡларға тырыша. Уның төп талабын шулай әйтеп була: «Элек нисек яҙһалар, шулай яҙ!»

Тарихи принцип, тимәк, боронғо ваҡытта нисек ҡабул ителһә, хәҙерге көндә лә шулай яҙыу, йәғни һүҙҙәрҙең боронғо әйтелеше хәҙерге телдәге әйтелешкә тура килмәһә лә, уларҙың ҡасандыр элек яҙылған формалары һаҡланыу тигән һүҙ. Был шунан килеп сыға: орфография яҙыуҙа ныҡлы ҡағиҙәләр билдәләй, был ҡағиҙәләр шул телдә һөйләшкән кешеләр өсөн мәжбүри нормаға әйләнә. Ләкин тел бара-бара үҙгәрә, шуның һөҙөмтәһендә йәнле телдең өндәр системаһы менән уның орфографияһы араһында айырма тыуа. Айырым һүҙҙәрҙең яҙылышы ҡасандыр бер ваҡыт телдең өн системаһына тура килһә лә, хәҙерге көндә бөтөнләй тура килмәй башлай, ләкин улар традиция буйынса элеккесә яҙылып йөрөй бирәләр.

Инглиз теленең орфографияһына ошо принцип хас.

Тарихи (традицион) принцип рус яҙыуында ла күренә. Мәҫәлән, *ложь, мышь, рожь, тушь; едешь, идешь* һүҙҙәрендә **ь** билдәһе шул принциптан сығып ҡына ҡуйыла. Башҡорт орфографияһы ла был принциптан бөтөнләй үк азат түгел. Мәҫәлән, *ғаилә, матәм, мәғариф* һүҙҙәре сингармонизм законына буйһондоролмайынса, элек нисек яҙылып йөрөтөлгән булһа, шулай яҙыла.

Тарихи принциптағы яҙылышта һүҙҙәрҙең яҙылышын ныҡлы бер ҡағиҙә аҫтына алырға мөмкин түгел. Шуның өсөн дә был принциптағы яҙылышты һүҙҙәрҙең яҙылыу формаһын ныҡ хәтерҙә ҡалдырыу менән генә үҙләштерергә мөмкин. Шуға ла ул рациональ түгел.

**4. График принцип** хәҙерге ваҡытта бөтә телдәргә лә тип әйтерлек хас. Башҡорт орфографияһында ла ул ныҡ күҙгә ташлана. Беҙҙә рус теле аша үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең байтағы үҙҙәренең тамыр йәки нигеҙ өлөштәрендә рус орфографияһындағыса бирелә: *авиация, архив, аэрозоль, аэроклуб, диагноз, нацизм, топонимика, фантаст, фармацевт* һ. б.

**5. Дифференциацион (дифференциацияланған) принцип,** яҙыуҙа үҙенә башҡа алым буларaҡ, әйтелеше бер үк, ә мәғәнәләре

төрлө һүҙҙәрҙе бер-береһенән айырыу өсөн ҡулланыла: һүҙҙәр, мәғәнәләренә ҡарап, төрлөсә яҙыла, бер төрлө уҡыла. Дифференциацияланған яҙылыш орфография системаһына ингән ҡушып һәм айырып яҙыу алымы менән тығыҙ бәйләнештә килә: билдәле осраҡтарҙа ул алымды тулыландырып, шул нигеҙҙә һүҙҙәрҙе ҡушып яҙыу менән айырып яҙыу аша мәғәнә айырмалары белдерелә: *бер үк – берүк, биш бармаҡ – бишбармаҡ, дүрт мөйөш – дүртмөйөш, ҡарт айыу – ҡартайыу, өс аяҡ – өсаяҡ, өс мөйөш – өсмөйөш.*

Һәр орфографияла бер принцип өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, һүҙ үҙгәреү менән өндәре артыҡ күп үҙгәреүҙәргә, сиратлашыуҙарға осрамай торған телдәрҙең орфографияларында, ғәҙәттә, фонетик принцип өҫтөнлөк итә. Быға миҫал итеп башҡорт әҙәби теленең орфографияһын алырға мөмкин.

Һүҙ үҙгәреү менән өндәре күп төрлө үҙгәрештәргә осрай торған телдәрҙә морфологик принцип өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, рус теле орфографияһы морфологик принципҡа нигеҙләнгән.

**Һүҙҙәрҙең өн составын хәрефтәр менән билдәләү (орфографияның беренсе өлөшө).** Орфографияның был өлөшө туранантура графиканың дауамы булып тора. Графика ла һүҙҙең өн составын хәрефтәр менән тамғалау мәсьәләһен ҡарау менән шөғөлләнә.

Бында иң мөһим момент булып һүҙҙәге һуҙынҡы өндәрҙең оҡшашлығы (сингармонизм законы) һәм эргәләш торған тартынҡыларҙың ярашыу йәки ярашмау күренеше (ассимиляция һәм диссимиляция) һанала.

Һуҙынҡы өндәрҙең оҡшашыуы – бер үк һүҙҙә һуҙынҡы өндәрҙең оҡшашыуы ул. Төп башҡорт һүҙҙәренең тамырында йәки нигеҙендә һәр ваҡыт бер генә рәт һуҙынҡылары була: йә алғы рәт һуҙынҡылары (нәҙек һуҙынҡылар), йә артҡы рәт һуҙынҡылары (ҡалын һуҙынҡылар). Мәҫәлән: *иҙән, тоҡан.*

Башҡорт телендә бөтә орфографик ҡағиҙәләр ошо закондан сығып төҙөлә: нәҙек һуҙынҡылы һүҙгә – нәҙек һуҙынҡылы ялғау, ҡалын һуҙынҡылы һүҙгә ҡалын һуҙынҡылы ялғау ҡушыла. Мәҫәлән: *иҙән – иҙәне, иҙәнем, иҙәнгә, иҙәнде, иҙәндән; тоҡан – тоҡанға, тоҡандан, тоҡандың, тоҡаны, тоҡаным.*

Һуҙынҡы өндәр оҡшашыуының бер төрө булып иренләшкән һуҙынҡыларҙың ярашыуы (ирен гармонияһы) тора.

Ирен гармонияһы тип, ғәҙәттә, иренләшкән өндәрҙең һүҙ тамырында (шулай уҡ һүҙҙең ялғауҙарында) эҙмә-эҙ һаҡланыуына әйтәләр. Ирен гармонияһы башҡорт телендә фәҡәт төп башҡорт һүҙҙәрендә иренләшкән [о°] һәм [ө] өндәре буйынса ғына үткәрелә.

Башҡорт телендә ирен гармонияһы шунан тора: һүҙҙең тәүге ижегендә [о°] һәм [ө] өндәре булһа, уның башҡа ижектәрендә лә [о°] һәм [ө] өндәре һаҡлана. Шулай итеп, ирен гармонияһы иң башта һүҙҙең тамырына (нигеҙенә), унан ялғауҙарына тарала. Әгәр ялғауҙарҙың береһе составында [а], [ә] һәм [ў] өндәре булһа, ирен гармонияһы боҙола һәм артабан ирен гармонияһы һаҡланмай. Мәҫәлән: *болон, соҡор; сөрөк, төтөн; ҡор-ол-ош-о-ноң, тор-мош-о-ноң; бөл-гөн-лөк-тө, тот-ҡон-лоҡ-тоң; ҡоролошон-да-ғы, ойош-ҡан-лыҡ; көсһөҙ-лән-гән-лек, көнөн-дә-ге; тороу-ың-ды, йөрөү-ең-де* һ. б.

Сингармонизмдың тағы бер үҙенсәлеге бар. Ул үҙенсәлек һуҙынҡы өндәр менән тартынҡы өндәрҙең ярашыуынан тора. Был типтағы ярашыуҙың характерлы үҙенсәлеге шунда: әгәр һүҙҙең тамырында һәм нигеҙендә алғы рәт һуҙынҡылары булһа, ул һүҙҙең тамырында һәм нигеҙендә лә нәҙек (йомшаҡ) тартынҡылар була; киреһенсә, тамырҙа йәки нигеҙҙә артҡы рәт һуҙынҡылары булһа, ул һүҙҙең тамырында һәм нигеҙендә лә ҡалын (ҡаты) тартынҡылар була. Был хәл һүҙҙең ялғауҙарына ла бер тигеҙ тарала.

Юғарыла әйтелгәнсә, төп башҡорт һүҙҙәрендә һүҙҙең тамырында (һәм ялғауҙарында) аңҡау гармонияһы буйынса йә алғы рәт, йә артҡы рәт һуҙынҡылары ғына булыу тартынҡы өндәрҙең дә йомшаҡ йәки ҡаты әйтелеүен килтереп сығара: алғы рәт һуҙынҡылары уратылышында тартынҡы өндәр һәр ваҡыт йомшаҡ әйтелә, ә артҡы рәт һуҙынҡылары уратылышында ҡаты әйтелә. Шул рәүешле, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр араһында оҡшашыу (гармония) барлыҡҡа килә. Тартынҡыларҙың йомшаҡ йәки ҡаты әйтелеүе һүҙҙең мәғәнәһендә лә айырмалыҡ тыуҙырмай. Шуға күрә башҡорт теленең тартынҡыларын нәҙек (йомшаҡ) һәм ҡалын (ҡаты) тартынҡыларға айырыуҙың практик әһәмиәте юҡ.

Башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең аҙағындағы тартынҡылар менән төрлө ялғауҙарҙың башындағы тартынҡылар бер-береһенә оҡшашып килә: һаңғырау тартынҡыларға бөткән һүҙҙәргә – һаңғырау тартынҡылар менән, яңғырау тартынҡыларға бөткән һүҙҙәргә яңғырау тартынҡылар менән башланған ялғау ҡушыла: *таш – таш-тар, таш-ҡа; ҡар – ҡар-ға, ҡар-ҙы.*

Рус теле һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән Октябрь революцияһынан һуң үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең тамыр йәки нигеҙ өлөшө рус теле орфографияһындағыса (график принцип) яҙыла. Был һүҙҙәрҙә һүҙ яһаусы йәки һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар, нигеҙҙә, башҡорт орфографияһы ҡағиҙәләренә буйһона: *идея – идея-лы, океан – океан-ды.*

Әммә рус теленең нәҙек [и], [эи] һуҙынҡылары башҡорт теленең [и], [э(е)] һуҙынҡыларынан ҡалын, һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә был өндәр уратылышындағы тартынҡылар ҡаты (ҡалын) әйтелә. Шуға ла уларға ҡалын ялғау ҡушыла: *актив – актив-ты, велосипед – велосипед-ҡа, комитет – комитет-тың, лимит – лимит-тан, митинг – митинг-ы-ла, такси – такси-ҙы, текст – текс-та, тир – тир-ға, шрифт – шриф-ы.*

Ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге [и] өнө үҙенән алда килгән ҡалын һуҙынҡының йоғонтоһо менән ҡалын әйтелеп, үҙенән һуң килгән тартынҡының әйтелешен дә ҡалынайта. Шуға күрә бында ла һүҙҙәргә ҡалын ялғау ҡушыла: *Талип – Талип-ҡа, тарих – тарих-ы, Харис – Харис-ты, шағир – шағир-ҙың, шаһит – шаһит-ы.*

Башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә ялғауҙың ҡалынлыҡ-нәҙеклеге нигеҙгә ҡарап билдәләнә, йәғни нигеҙ ҡалын булһа, ҡалын ялғау, нигеҙ нәҙек булһа, нәҙек ялғау ҡушыла: *арба – арба-ны, ҡыш – ҡыш-тың, бесәй – бесәйҙең, эт – эт-кә.*

**Ҙур һәм бәләкәй хәрефтәр ҡулланыу.** Ҙур хәрефтәр боронғо текстарҙа уҡ тексты башлаусы беренсе һүҙҙең беренсе хәрефен яҙғанда ҡулланылған. Текстағы беренсе һүҙҙең беренсе хәрефен борон ҡара ҡара менән түгел, ҡыҙыл ҡара менән яҙғандар. Ҡыҙыл ҡара менән ҡайһы саҡта беренсе һүҙҙе тулы көйө һәм хатта бөтә юлды ла яҙғандар. *Ҡыҙыл юл, ҡыҙыл юлдан* әйтемдәре шунан килеп сыҡҡан. Ҙур хәреф менән һуңға табан тексттың яңы киҫәген башлаусы һүҙ яҙылған һ. б.

Хәҙерге башҡорт яҙыуында һөйләмдәге тәүге һүҙҙең тәүге хәрефе ҙур хәреф менән яҙыла. Мәҫәлән: *Хәрби һөнәр шулай уҡ халҡыбыҙ тормошонда ҙур урын тотҡан. Үҙ ереңде, үҙ азатлығыңды һаҡлау һәм яҡлау өсөн кәрәк булған ул* (М. Кәрим).

Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең беренсе хәрефе һәр ваҡыт ҙур хәреф менән яҙыла. Мәҫәлән: *Билал киткәс, Саҡайҙың йырлауҙарынан, үҙенең артислығында булған айырым эпизодтарын һөйләп көлдөрөүенән һуң, Шадрин менән Карсакова араһында ҡыҙыу һүҙ ярыштырыу башланды* (А. Таһиров).

Ер-һыу атамаларына аныҡлаусы булып килгән һүҙҙәр ҙур хәрефтәр менән башлап, айырым яҙыла: *Беренсе Этҡол, Оло Әйек, Үрге Йәркәй.*

Төп атамаға эйәреп килгән һүҙҙәр бәләкәй хәреф менән айырым яҙыла: *Ибраһимов бульвары, Октябрь проспекты, Үрген ауылы, Әй урамы; Башҡорт дәүләт университеты, Белорет металлургия комбинаты.*

Газета, журнал, китап, йыр, повесть, шиғыр һәм башҡа исемдәр, ҡайһы бер нәмәләрҙең шартлы атамалары ҙур хәрефтәр

менән башлап яҙыла һәм тырнаҡтар эсенә алына. Мәҫәлән: *«Ағиҙел» бальзамы, «Батыр» кафеһы, «Башҡортостан» ҡунаҡханаһы, Башҡорт халыҡ йыры «Урал», «Йәшлек» газетаһы, «Ҡан» романы* һ. б.

Диалогтарҙағы беренсе һүҙ һәр саҡ ҙур хәреф менән башлап яҙыла. Мәҫәлән:

*Мин тәмле йоҡоға киткәнмен. Байғужа мине уятты:*

*– Тор әле, Булат.*

*– Ниңә уятаһың тағы? Бөгөн һиңә ни булды?*

*– Һиңә генә һөйләй торған һүҙем бар.*

*– Иртәгә һөйләрһең әле, йоҡларға кәрәк! – Мин әйләнеп, шинелгә төрөнөп яттым* (Д. Юлтый).

Элек-электән ҙур хәрефтәр шиғри юлдарҙың башын билдәләү өсөн ҡулланыла:

*Ҡурҡыта ла, әҙерәк ҡаушата ла*
*Экзаменға керер алдынан.*
*Әллә нисек, бөтә уҡығаның*
*Сығып бөткән кеүек башыңдан...*

Н. Нәжми.

Яңғыҙлыҡ исемдәр булмаһалар ҙа, патетика йәки символика менән һуғарылған һүҙҙәр ҙә ҙур хәрефтәр менән башлап яҙыла. Мәҫәлән: *Замана сәнғәте мөрәжәғәт иткән замана проблемаларының өсәүһен – кешелектең иғтибар үҙәгендә торған үтә мөһим өс проблеманы айырып алғым килә: Кеше һәм Донъя, Кеше һәм Ер (был осраҡта, ер – ризыҡ биреүсе мәғәнәһендә), Кеше һәм уның Мөхите, – йәки тағы ла киңерәк итеп әйткәндә, – Кеше һәм Йәмғиәт. Етди драматургия үҙенең ижади эҙләнеүҙәрен, башлыса, ошо өс сферала алып бара* (М. Кәрим).

Аббревиатуралар, тулы исемдәрендәге һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәре бәләкәй хәрефтәр менән башлап яҙылһалар ҙа, тик ҙур хәрефтәр менән генә яҙыла: *БДПУ – Башҡорт дәүләт педагогия университеты, БДУ – Башҡорт дәүләт университеты, БР – Башҡортостан Республикаһы.*

Ҡайһы саҡта мәҫәлдәрҙәге һәм әкиәттәрҙәге уртаҡлыҡ исемдәр ҙә ҙур хәреф менән башлап яҙылырға мөмкин. Мәҫәлән: *Бер заман, яҙ көнө, Айыу, Бүре, Эт, Ҡуян бергә осрашҡандар, ти* («Етем төлкө» әкиәтенән).

**Ҡушып, айырып һәм һыҙыҡса (дефис) аша яҙыу.** Телмәрҙең мәғәнәле элементтарын ҡушып, айырып һәм һыҙыҡса (дефис) аша яҙыу – башҡорт дөрөҫ яҙыуында үҙ аллы бүлектәрҙең береһе. Айырым һүҙҙәрҙе айырып яҙыу ҡабул ителгән.

Ләкин яҙған кешегә ҡайһы саҡта еңел булмай: уның алдында бер һүҙме әллә ике һүҙме? Сағыштырығыҙ: *аҡбалыҡ* әллә *аҡ*

*балыҡ, аҡҡурғаш* әллә *аҡ ҡурғаш, алһыу ҡыҙыл* әллә *алһыу-ҡыҙыл, асыҡтан асыҡ* әллә *асыҡтан-асыҡ, башҡала* әллә *баш ҡала, быуындан быуынға* әллә *быуындан-быуынға, иҫ кереү* әллә *иҫкереү, ҡара йәшел* әллә *ҡара-йәшел, тар ҡалыу* әллә *тарҡалыу, үҙ аллы* әллә *үҙаллы, үҙҡиммәт* әллә *үҙ ҡиммәт, үҙ һүҙле* әллә *үҙһүҙле*?

Яҙған кеше был осраҡта орфографик һүҙлеккә, ҡағиҙәләргә мөрәжәғәт итә ала. Ә һүҙлек төҙөүселәр, ҡағиҙә сығарыусылар был мәсьәләне нисек хәл итә һуң? Айырым, конкрет осраҡтарҙы (үрҙә килтерелгән миҫалдарҙы ҡарағыҙ) хәл иткәндә, ғалимдар фәнни теорияға мөрәжәғәт итергә тейеш. Ләкин теорияла ла асыҡ булмаған нәмәләр бар. Бигерәк тә һүҙ төшөнсәһенең үҙен билдәләү ауыр. Ҡыйынлыҡ, беренсенән, һүҙҙең семантик типтарының һәм грамматик төҙөлөшөнөң күптөрлөлөгө һәм, икенсенән, һүҙҙе башҡа тел берәмектәренән айыра торған дифференциаль билдәләре йыйылмаһы төрлө осорҙа һәм төрлө авторҙар тарафынан төрлөсә билдәләнеүе менән аңлатыла. Шул арҡала яҙыуҙың үҙе үҙгәрә, ҡағиҙәләр ҙә үҙгәрә.

Һүҙҙең дифференциаль билдәләре һүҙҙе морфемаларҙан айыра торған һәм һүҙҙе һүҙбәйләнештәрҙән айыра торған билдәләргә бүленә. Ҡушып һәм айырып яҙыу тураһында ҡағиҙәләр сығарғанда, мәҫәлән, беренсе төр билдәләр, ҡушма һүҙҙәр яҙылышы тураһында ҡағиҙәләр сығарғанда, икенсе төр билдәләр иҫәпкә алынмай.

Һүҙҙәрҙе айырып яҙыуҙа дөйөм принцип булып семантик-грамматик (икенсе төрлө: лексик-морфологик) принцип иҫәпләнә.

Лексик-морфологик мөнәсәбәттә һүҙҙең дифференциаль билдәләре иҫәпкә алына. Үҙ аллы һүҙҙәр күберәк һәм асыҡ дифференциаль билдәләр йыйылмаһына эйә. Был инде уларҙы, ярҙамсы һүҙҙәрҙән айырмалы рәүештә, яҙыуҙа ла бер-береһенән айырырға ярҙам итә. Ә ярҙамсы һүҙҙәр һүҙ менән морфема араһында ята.

Ҡушып, айырып һәм һыҙыҡса аша яҙыуҙарға бигерәк тә һаҡ һәм иғтибарлы булырға кәрәк. Тел факттары бик хәрәкәтсел була, шуға ла улар менән шартлы орфографик ҡағиҙәләр араһында тулы ярашлылыҡҡа өлгәшеү еңел түгел.

Ҡайһы бер яңы төшөнсәләр бер һүҙ менән түгел, ә ике йәки бер нисә һүҙҙән төҙөлгән һүҙҙәр теҙмәһе менән белдерелә. Ошондай һүҙ теҙмәләренең компоненттары билдәле фонетик һәм морфологик шарттарҙа үҙ-ара бөтөнләй ҡушылырға, икенселәре яртылаш ҡына ҡушылырға, ә өсөнсөләре ҡушылмайынса яҙылырға мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан, бындай лексик берәмек эсенә ингән һәр киҫәк үҙенең айырым торғандағы мәғәнәһен теге йәки был дәрәжәлә юғалтҡан була. Бындай лексик берәмектәрҙе, ғәҙәттә, ҡушма һүҙҙәр тип йөрөтәләр. Орфография ҡағиҙәләрендә

ҡушып, айырып һәм һыҙыҡса аша (яртылаш ҡушып) яҙыуҙар уларҙың шул төҙөлөш үҙенсәлектәренең сағылышы була.

Яһалышы яғынан тулыһынса бер бөтөн хәлгә килгән (айырым киҫәктәренең фонетик-морфологик төҙөлөшө үҙгәргән йәки был осраҡта үҙ аллы мәғәнәләре юйылған) ҡушма лексик берәмектәр ҡушып яҙыла.

Ике һүҙҙән төҙөлгән лексик берәмектәрҙең, билдәле фонетик-морфологик йәки семантик шарттарға тура килмәү сәбәпле, бер бөтөн була алмай торғандары һыҙыҡса аша яҙыла.

Бер бөтөн мәғәнә аңлатҡан, структураһы яғынан ғәҙәттәге һүҙбәйләнешкә оҡшаған лексик берәмектәр (теҙмә һүҙҙәр) айырып яҙыла. Мәҫәлән: *ат ҡуҙғалағы, егерме алты, үгәй инә үләне.*

Ҡушып һәм һыҙыҡса аша яҙыуҙың бөтә һүҙ төркөмдәре өсөн дә дөйөм булған түбәндәге ҡағиҙәләрен бирергә мөмкин.

Ҡ у ш ы п  я ҙ ы л а л а р:

1) берәр компоненты (киҫәге) хәбәр мөнәсәбәтендә килгән ҡушма һүҙҙәр (тулыһынса йәки өлөшләтә тура мәғәнәләрен юғалтҡан була): *Абызгилде, Аҡбирҙе, Аҡбулды, Аҡкилде, Аллабирҙе, Килдейәр, Ҡотлобирҙе, Ҡотлогилде;*

2) беренсе компоненты (киҫәге) аныҡлаусы мөнәсәбәтендә килгән ҡушма һүҙҙәр (был осраҡта компоненттарының береһе йәки икеһе лә өлөшләтә йәки тулыһынса үҙҙәренең мәғәнәләрен юғалтҡан була): *аҡбалыҡ, аҡҡош, аҡтамыр, бишбармаҡ, күкйөн, өсмөйөш* (ләкин ирекле һүҙбәйләнештәр булараҡ улар айырым яҙыла: *аҡ балыҡ, аҡ ҡош, аҡ тамыр, биш бармаҡ, күк йөн, өс мөйөш*);

3) беренсе компоненты (киҫәге) тултырыусы мөнәсәбәтендә килгән ҡушма һүҙҙәр (был юлы ла компоненттар үҙҙәренең тура мәғәнәләрен юғалтҡан була): *башватҡыс, боҙватҡыс, илбаҫар, йөҙйәшәр, көнбағыш, көнкүреш, урынбаҫар*;

4) нуль ялғаулы (беренсе) изафеттан барлыҡҡа килгән ҡушма һүҙҙәр (был осраҡта ла компоненттар үҙҙәренең тура мәғәнәләрен юғалтҡан була): *билбау, ҡолаҡбау, ҡолонҡойроҡ, һабантурғай, һабантуй, һүҙбәйләнеш, һынташ*;

5) беренсе компоненты ҡыҫҡартылған, икенсе компоненты тулыһынса килгән ҡыҫҡартма һүҙҙәр: *драмтүңәрәк, педуниверситет, профхәрәкәт, телеүҙәк.*

А й ы р ы п  я ҙ ы л а л а р:

1) исемдән, исем урынында килгән һүҙҙәрҙән һәм ярҙамсы ҡылымдарҙан килгән ҡушма (теҙмә) ҡылымдар: *ант итеү, бер булыу, биш итеү, ғашиҡ булыу, дорҫ итеү, тәьмин итеү, тәьҫир итеү;*

2) хәл ҡылымдан һәм ярҙамсы ҡылымдан торған ҡушма (теҙмә) ҡылымдар: *буяп сығыу, йөрөп сығыу, көлөп ебәреү, эшләп ташлау, яҙып ҡуйыу;*

3) икеһе бергә теүәл бер төшөнсә белдерһә лә, үҙ-ара грамматик мөнәсәбәттәрен юғалтмаған, бер һүҙ берәмегенә әүерелмәгән, һәр береһе үҙ баҫымы менән әйтелгән ҡушма һүҙҙәр: *аҡ ҡурғаш, аҡһыл күк, ала ҡарға, ас күҙле, баш ҡала, баш ҡатырғыс, бер көнлөк, быуындан быуынға, ерле юҡҡа, йөҙ түбән, кеше йәнле, көн элгәре, сейә ҡыҙыл, суйыр таш, таш күмер, түҙә алмаҫлыҡ, ялан аяҡ;*

4) икенсе изафеттан барлыҡҡа килгән ҡушма һүҙҙәр: *айыу көпшәһе, бесәй табаны* (үлән), *күгәрсен күҙе* (сәскә), *кәзә һаҡалы* (үлән), *ҡаҙ үләне, ҡайын еләге, ҡара һауыты, сүл бүреһе, энә ҡарағы* (бөжәк);

5) ҡушма (теҙмә) һандар: *егерме алты, илле өс, ҡырҡ ете, туҡһан биш, ун туғыҙ, һикһән ике.*

Һ ы ҙ ы ҡ с а   а ш а   я ҙ ы л а л а р :

1) компоненттары теҙмә бәйләнештә булған һүҙҙәр, йәғни парлы һәм ҡабатлаулы һүҙҙәр: *ағай-эне, аң-белем, асыҡтан-асыҡ, батырҙарҙың-батыры, берҙән-бер, буй-буй, бәлә-ҡаза, илай-илай, йәйен-ҡышын, килгән-киткән, күҙгә-күҙ, кәкре-бөкрө, ҡасып-боҫоп, ҡыҫҡаргандан-ҡыҫҡара, матур-матур, социал-демократ, төньяҡ-көнсығыш, туҡтап-туҡтап, уңлы-һуллы;*

2) термин өсөн алынған шартлы билдәләр йәки хәрефтәр менән килгән цифрҙар: *ЗИЛ-4104, МАЗ-7310, Полюс-2.*

Орфография ҡағиҙәләре йыйынтыҡтарында ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы ентекләп күрһәтелә. Бында ҡушма һүҙҙәр дөрөҫ яҙылышының дөйөм ҡағиҙәләре генә бирелә.

Әлбиттә, дөрөҫ яҙылыш менән йәнле тел күренештәре араһында тулы ярашлылыҡ, ғөмүмән, бер ваҡытта ла булып бөтмәй. Бының сәбәбе шунда: ҡушма һүҙҙәр яһалышы күп төрлө һәм дауамлы процесс булып, орфография ҡағиҙәләре уларҙың хәҙерге ваҡытта иң типик булғандарын, иң ныҡ формалашҡандарын ғына иҫәпкә ала.

**Һүҙ киҫәктәрен юлдан юлға күсереү.** Башҡорт телендә һүҙ киҫәктәре юлдан юлға һүҙҙең ижеккә бүленгән урынынан күсерелә: *баҡ-са-лар-ҙы, мәк-тәп-кә, сен-тябрь, уҡы-тыу-сы.* Шуға күрә һүҙҙең ижек тәшкил итмәгән киҫәген юл аҙағында ҡалдырырға һәм икенсе юлға күсерергә ярамай: *сентя-брь* түгел.

Яңғыҙ бер хәреф юл аҙағында ҡалдырылмай, икенсе юлға ла күсерелмәй: *а-баға, а-кация, авиаци-я, а-ҡыя, аҡы-я* рәүешендә түгел. Дөрөҫ: аба-ға, ака-ция, аҡыя.

Һәр һүҙҙең тәүге өндәре йәки тәүге хәрефтәре исеме ҡушылмаларынан яһалған ҡыҫҡартмалар юлдан юлға күсереү өсөн

айырылмай. *БДПУ, БДУ, СДПИ, ТУ-144* кеүек һүҙҙәр тик шул формаларҙа ғына бер юлда яҙыла.

Асылған йәйә йәки тырнаҡ үҙҙәре генә юл аҙағында ҡалдырылмай, ябыла торған йәйә йәки тырнаҡ үҙҙәре генә икенсе юлға күсерелмәй. «Башҡортостан» газетаһы тигәндәге «Башҡортостан» һүҙен «-Башҡортостан» йәки «Башҡортостан-» тип күсереп булмай. Асылған йәйәне йәки тырнаҡты һүҙ киҫәге менән бер юлда ҡалдырырға, ябыла торған йәйәне йәки тырнаҡты һүҙ киҫәге менән икенсе юлға күсерергә мөмкин: «Баш-ҡортостан», «Башҡорт-остан», «Башҡорто-стан».

Ҡыҫҡартылған үлсәү берәмектәре, градус һәм процент билдәләре үҙҙәренән алда килгән цифрҙарҙан айырылып, юлдан юлға күсерелмәй, ә параграф билдәһе үҙенән һуң килгән цифрҙарҙан айырылып юл аҙағында ҡалдырылмай. *25 кг, 10 м, § 4, 30%, 12°* тигән яҙыуҙар тик килтерелгән формаларҙа бер юлда яҙыла.

Цифрҙарҙан һуң килеп, һыҙыҡса аша яҙылған ялғауҙар, цифрҙарҙан айырылып, икенсе юлға сығарылмай. Мәҫәлән, *1-се, 5-тә* тигән яҙыуҙар тик шулай бер юлда яҙыла.

Инициалдар фамилияларҙан айырып, юл аҙағында ҡалдырылмай: *Ж. Ғ. Кейекбаев, А. С. Пушкин* тигәндә инициалдарҙы белдергән *Ж. Ғ.* һәм *А. С.* үҙҙәре генә юл аҙағында ҡалдырылмай.

Һүҙҙәрҙе бүлеп икенсе юлға күсергәндә, бүленгән ижектән һуң юл аҙағында һәр саҡ һыҙыҡса ҡуйыла: *баҡ-сасыларҙы, баҡса-сыларҙы, баҡсасы-ларҙы, баҡсасылар-ҙы.*

**График ҡыҫҡартыуҙар, һүҙҙәр-аббревиатуралар һәм уларҙы яҙыу.** Хәҙерге башҡорт телендә ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр һәм хәрефтәрҙән торған ҡыҫҡартыуҙар (хәрефле аббревиатуралар, йәки һүҙҙәр-аббревиатуралар) осрай: *драмтүңәрәк, завком, БМО, ПТУ.*

Ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр һәм һүҙҙәр-аббревиатуралар – яңы тип һүҙҙәр ул. Башҡорт телендә улар ярайһы уҡ таралған.

Башҡорт әҙәби телендә ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙең һәм аббревиатураларҙың күпселеге рус теленән алынған:

ВВП (валовый внутренний продукт), ВТЭК (врачебно-трудовая экспертная комиссия), КПРФ (Коммунистическая партия Российской Федерации), НДС (налог на добавленную стоимость), ОАО (Открытое акционерное общество), РФ (Российская Федерация), УК (Уголовный кодекс), ФСБ (Федеральная служба безопасности), ЭВМ (электронная вычислительная машина) һ. б.

Һүҙ булараҡ, уларҙың да яҙыуҙа үҙ һыны булырға тейеш. Был осраҡта график ҡыҫҡартыуҙарҙы яҙыуҙа биреү мәсьәләһе специфик проблема иҫәпләнә.

График ҡыҫҡартмалар яҙыуҙың специфик факты булып тора. Хәрефле аббревиатураларҙан улар үҙ аллы һүҙ булмауҙары

менән айырыла. График ҡыҫҡартмаларҙың, аббревиатураларҙан айырмалы рәүештә, үҙҙәренә генә хас фонемалары булмай: уҡығанда график ҡыҫҡартма ниндәй һүҙҙең йәки һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартмаһы булһа, шул һүҙ йәки һүҙҙәр менән алмаштырыла. Мәҫәлән, *б.* график ҡыҫҡартмаһы – *бит* һәм *быуат*, *й.* – *йыл* һәм *йылға*, *һ. б. һәм башҡалар* тип уҡыла.

Аббревиатуралар иһә үҙ яңғырашында уҡыла: йә хәрефтәр исеме буйынса (*БДУ*), йә өндәр буйынса (*АҠШ*).

Яһалыштарының график алымдарына бәйле график ҡыҫҡартыуҙар түбәндәге төрҙәргә бүленә: 1) нөктәле, 2) дефислы, 3) ҡыя һыҙыҡлы, 4) курсивлы, 5) берләштерелгән.

1. Нөктәле ҡыҫҡартыуҙарға һүҙҙең беренсе өлөшөнән торған ҡыҫҡартыуҙар инә: быңдай саҡта һүҙҙең ҡалған өлөшөнән һуң нөктә ҡуйыла, мәҫәлән: *б. – бит, быуат, ип. – иптәш, й. – йыл, мин. – минут, мәҫ. – мәҫәлән, сек. – секунд, сәғ. – сәғәт.* Был – ҡыҫҡартыуҙарҙың иң күп таралған төрө.

Башҡорт яҙыуының тамырҙары V–X быуаттарҙа ҡулланылған боронғо төрки рун яҙыуына, йәғни орхон-йәнәсәй яҙма ҡомартҡыларына барып тоташа. Артабан XI быуаттан XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем – ғәрәп яҙыуы, 1929–1940 йылдарҙа – латин алфавиты һәм графикаһы, 1941 йылдан алып кириллица ҡулланылышта була.

Ҡыҫҡартылған һүҙҙәрҙең беренсе хәрефен ҡабатлау күплекте белдерә: *бб. – биттәр, быуаттар, йй. – йылдар.*

2. Дефислы ҡыҫҡартыуҙар – һүҙҙең төшөрөп ҡалдырылған урта өлөшөндә дефис ҡуйылған ҡыҫҡартыуҙар була: *б-ка – библиотека, гр-н – гражданин, д-р – доктор, ин-т – институт, р-ка – республика, р-н – район.*

3. Ҡыя һыҙыҡлы ҡыҫҡартыуҙар һүҙбәйләнештәрҙе йәки (һирәкләп) ҡушма һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартҡанда ҡулланыла: *к/т – кинотеатр, с/м – сәләм менән.*

4. Курсивлы ҡыҫҡартыуҙар – махсус шрифтар (курсив) менән баҫылған ҡыҫҡартыуҙар була: *в – вольт, г – грамм, га – гектар, кг – килограмм, л – литр, м – метр, мм – миллиметр, см – сантиметр, т – тонна, ц – центнер.*

5. Берләшкән ҡыҫҡартыуҙар бер юлы бер нисә ҡыҫҡартыу алымы ҡулланып яһала, мәҫәлән, дефислы-нөктәле алым ҡулланыу юлы менән: *Ҡаб.-Балҡ. – Ҡабарҙы-Балҡар.*

Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыуҙарҙың график принциптары түбәндәгеләр: 1) һүҙформаның баш өлөшө төшөрөп ҡалдырылырға тейеш түгел; 2) минимум ике хәреф төшөрөп ҡалдырыла; 3) ҡыҫҡартылғандан һуң ҡалған өлөш һуҙынҡы хәрефтәргә һәм **й, ъ, ь** хәрефтәренә тамамланырға тейеш түгел.

График ҡыҫҡартыуҙарҙың дөйөм принциптарын белеү яҙған кешегә үҙе ҡулланған график ҡыҫҡартыуҙарҙы дөрөҫ яҙырға ярҙам итә.

## БАШҠОРТ ЯҘЫУЫ ТАРИХЫНАН ҠЫҪҠАСА МӘҒЛҮМӘТ

Яҙыу – телдең аралашыу сфераһын киңәйтеүсе график формаһы. Яҙыуҙың барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше ижтимағи тормош талаптарына бәйләнгән. Кешеләргә үҙҙәренең уй-фекерҙәрен, һөйләгән һүҙҙәрен алыҫҡа илтергә, яҙыуҙа беркетергә, нығытырға, хәҙерге һәм киләсәк быуын өсөн онотолмаҫлыҡ итеп һаҡларға кәрәк булған. Шуның һөҙөмтәһендә яҙыу килеп тыуған.

XII–XIII быуаттарҙан алып XIX быуаттың аҙағына тиклем башҡорт йәмғиәтендә рәсми яҙма тел функцияһын иҫке төрки теле үтәгән.

Иҫке төрки теле өсөн урта быуаттарҙа уҡ ғәрәп яҙыуы ҡабул ителгән булған. Дөрөҫ яҙыу өсөн дә ғәрәп яҙыуының принциптары нигеҙ итеп алынған; мәҫәлән, бер үк хәрефтең дүрт төрлө һыҙылышы булыуы, һүҙ эсендә һуҙынҡы өндәр хәрефтәрен яҙмау һ. б.

Рус-грек-латин графикаһы нигеҙендә төҙөлгән беренсе башҡорт алфавиты башҡорт ғалимы Мөхәмәтхан Сәхибгәрәй улы Ҡулаевтың (1873–1958) эшмәкәрлеге менән бәйләнгән. М. С. Ҡулаев, ғәрәп яҙыуы башҡорт теленең спецификаһын бирә алмай, тигән ҡараште торған һәм XX быуаттың башында рус-грек-латин графикаһы нигеҙендә башҡорт теленең беренсе милли алфавитын төҙөгән. Алфавиттың теоретик нигеҙҙәрен һәм орфографияһын үҙенең «Основы звукопроизношения и азбука для башкир» тигән китабында биргән. (Был китап 1912 йылда Ҡазанда рус телендә баҫылған.) Әммә М. С. Ҡулаевтың был прогрессив ынтылышы ул ваҡытта ғәмәлгә ашмай ҡала.

Октябрь революцияһынан һуң, Совет власының беренсе йылдарында уҡ, Башҡортостанда башҡорт мәктәптәре асыла һәм башҡорт телендә уҡытыу индерелә. Был эштәрҙе уңышлы үтәү өсөн башҡорт телендә әлифбалар, уҡыу китаптары һәм бөтә фәндәр буйынса дәреслектәр сығарыу мәсьәләһе көн тәртибенә ҡуйыла.

Октябрь революцияһына тиклем башҡорт йәмғиәтендә ғәрәп яҙыуы булыуын иҫәпкә алып, иҫке традиция буйынса башҡорт әҙәби теленең алфавиты өсөн ғәрәп графикаһы нигеҙ итеп алына. Хәрефтәрҙең һыҙылышы өсөн ғәрәп графикаһының принцибы (йәғни бер хәреф өсөн өс һәм дүрт төрлө һыҙылыш булыу) һаҡлана. Дөрөҫ яҙыуҙа ла (орфографияла ла) ғәрәп яҙыуының

принцибы бер ни тиклем һаҡлана: һүҙ уртаһында тар [ы], [э] өндәренең хәрефтәре яҙылмай.

### М. С. Ҡулаев төҙөгән башҡорт алфавиты

| №№ | Баҫма хәреф | Яҙма хәреф | Өн мәғәнәһе | №№ | Баҫма хәреф | Яҙма хәреф | Өн мәғәнәһе |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | А а | *А а* | [а] | 18 | М м | *М м* | [м] |
| 2 | Ɑ ɑ | *Ɑ ɑ* | [ә] | 19 | Н н | *Н н* | [н] |
| 3 | Б б | *Б б* | [б] | 20 | Ң ң | *Ң ң* | [ң] |
| 4 | Г г | *Г г* | [г] | 21 | Ѡ ѡ | *Ѡ ѡ* | [о] |
| 5 | Ғ ғ | *Ғ ғ* | [ғ] | 22 | Ɔ ɔ | *Ɔ ɔ* | [ө] |
| 6 | Д д | *Д д* | [д] | 23 | П п | *П п* | [п] |
| 7 | Ъ ъ | *Ъ ъ* | [ы] | 24 | Р р | *Р р* | [р] |
| 8 | Ь ь | *Ь ь* | [е] | 25 | С с | *С с* | [с] |
| 9 | Ж ж | *Ж ж* | [ж] | 26 | ʃ ʃ | *ʃ ʃ* | [ҫ] |
| 10 | Ɉ ɉ | *Ɉ ɉ* | [җ] | 27 | Т т | *Т т* | [т] |
| 11 | З з | *З з* | [з] | 28 | У у | *У у* | [у] |
| 12 | Ҍ ҍ | *Ҍ ҍ* | [ҙ] | 29 | Ү ү | *Ү ү* | [ү] |
| 13 | И и | *И и* | [и] | 30 | Ф ф | *Ф ф* | [ф] |
| 14 | J j | *J j* | [й] | 31 | Х х | *Х х* | [х] |
| 15 | К к | *К к* | [к] | 32 | Ç ç | *Ç ç* | [һ] |
| 16 | Һ һ | *Һ һ* | [ҡ] | 33 | Ш ш | *Ш ш* | [ш] |
| 17 | Л л | *Л л* | [л] | 34 | , | , | [ъ], [ь] |

Яҙыу өлгөһө:

Бъ башһорт альпъјън јаһшъ бъльб алған кьшь уһъј ҍа јаҍа ла бъласак. Бъ альпъј бик јъңъл. Башһорттън һајçъ ғъна çуҍъ буçа ла альпъјға тɔшэнган кьшь уһъј ҍа јаҍа ла бъласак. Çар къмга иң ауал уҍ тьльнса уһъј јаҍа бъльу тъјъш.

## Ғәрәп алфавиты

| ХӘРЕФТӘРҘЕҢ | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ҺҮҘ АҘАҒЫНДА ЯҘЫЛЫШЫ | ҺҮҘ УРТАҺЫНДА ЯҘЫЛЫШЫ | ҺҮҘ БАШЫНДА ЯҘЫЛЫШЫ | АЙЫРЫМ ЯҘЫЛЫШЫ ҺӘМ УҠЫЛЫШЫ | |
| ـا | ـا | ا | ا | А, Ә (ӘЛИФ) |
| ـب | ـبـ | بـ | ب | Б (БӘ) |
| ـت | ـتـ | تـ | ت | Т (ТӘ) |
| ـث | ـثـ | ثـ | ث | Ҫ (ҪӘ) |
| ـج | ـجـ | جـ | ج | ДЖ (ДЖИМ) |
| ـح | ـحـ | حـ | ح | Х (ХӘ) ЙОМШАҠ ӘЙТЕЛЕШЕ |
| ـخ | ـخـ | خـ | خ | Х (ХА) ҠАТЫ ӘЙТЕЛЕШЕ |
| ـد | ـد | د | د | Д (ДӘЛ) |
| ـذ | ـذ | ذ | ذ | Ҙ (ҘӘЛ) |
| ـر | ـر | ر | ر | Р (РА) |
| ـز | ـز | ز | ز | З (ЗӘЙН) |
| ـس | ـسـ | سـ | س | С (СИН) |
| ـش | ـشـ | شـ | ش | Ш (ШИН) |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ـص | ـصـ | صـ | ص | С (САД) ҠАТЫ |
| ـض | ـضـ | ضـ | ض | Д (ДАД) |
| ـط | ـطـ | طـ | ط | Т (ТА) ҠАТЫ |
| ـظ | ـظـ | ظـ | ظ | Ҙ (ҘА) ҠАТЫ |
| ـع | ـعـ | عـ | ع | Ғ (ҒӘЙН) |
| ـغ | ـغـ | غـ | غ | Ғ (ҒАЙН) |
| ـف | ـفـ | فـ | ف | Ф (ФӘ) |
| ـق | ـقـ | قـ | ق | Ҡ (ҠАФ) |
| ـك | ـكـ | كـ | ك | К (КӘФ) |
| ـل | ـلـ | لـ | ل | Л (ЛӘМ) |
| ـم | ـمـ | مـ | م | М (МИМ) |
| ـن | ـنـ | نـ | ن | Н (НҮН) |
| ـه | ـهـ | هـ | ه | Һ (ҺӘ) |
| ـو | ـو | و | و | Ү (ҮӘҮ) |
| ـى | ـيـ | يـ | ى | Й (ЙӘ) |

## Иҫке башҡорт алфавиты (иҫкәлеп)

| Мәғәнәһе | Азаҡта | Уртала | Башта | Яңғыҙ | №/№ | Мәғәнәһе | Азаҡта | Уртала | Башта | Яңғыҙ | №/№ |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| [ф] | ـف | ـفـ | فـ | ف | 18 | [a] | ـا | | آ ئا | ا | 1 |
| [ҡ] | ـق | ـقـ | قـ | ق | 19 | [ә] | ـه ـە | | ئە | ه ە | 2 |
| [к] | ـك ـک | ـکـ | کـ | ك | 20 | [б] | ـب | ـبـ | بـ | ب | 3 |
| [г] | ـگ | ـگـ | گـ | گ | 21 | [п] | ـپ | ـپـ | پـ | پ | 4 |
| [ң] | ـڭ | ـڭـ | ڭـ | ڭ | 22 | [т] | ـت | ـتـ | تـ | ت | 5 |
| [л] | ـل | ـلـ | لـ | ل | 23 | [ç] | ـث | ـثـ | ثـ | ث | 6 |
| [м] | ـم | ـمـ | مـ | م | 24 | [ж] | ـج | ـجـ | جـ | ج | 7 |
| [н] | ـن | ـنـ | نـ | ن | 25 | [ч] | ـچ | ـچـ | چـ | چ | 8 |
| ۉ[вау] | ـو | | و | و | 26 | [х] | ـح | ـحـ | حـ | ح | 9 |
| [у],[ү] | ـو | | و | و | 27 | [ð] | ـد | | د | د | 10 |
| [в] | ـۋ | | ۋ | ۋ | 28 | [ҙ] | ـذ | | ذ | ذ | 11 |
| [о],[ө] | ـۇ | | ۇ | ۇ | 29 | [р] | ـر | | ر | ر | 12 |
| [һ] | ـه ـە | ـهـ | هـ | ه ە | 30 | [з] | ـز | | ز | ز | 13 |
| [й] | ـی | ـیـ | یـ | ي | 31 | [ж] | ـژ | | ژ | ژ | 14 |
| [и] [й] | ـی | ـیـ | یـ | ي | 32 | [с] | ـس | ـسـ | سـ | س | 15 |
| [ы] [е] | ـئ | ـئـ | ئـ | ئ | 33 | [ш] | ـش | ـشـ | شـ | ش | 16 |
| | | | | | | [ғ] | ـع | ـعـ | عـ | ع | 17 |

## Яңы башҡорт алфавиты (яңәлеп)

| № / № | Баҫма хәреф | Яҙма хәреф | Өн мәғәнәһе | № / № | Баҫма хәреф | Яҙма хәреф | Өн мәғәнәһе |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | A a | *A a* | [а] | 20 | Ņ ņ | *Ņ ņ* | [ң] |
| 2 | B ƀ | *B ƀ* | [б] | 21 | O o | *O o* | [о] |
| 3 | C c | *C c* | [ч] | 22 | Ɵ ɵ | *Ɵ ɵ* | [ө] |
| 4 | Ç ç | *Ç ç* | [ж] | 23 | P p | *P p* | [п] |
| 5 | D d | *D d* | [д] | 24 | R r | *R r* | [р] |
| 6 | Ď đ | *Ď đ* | [ҙ] | 25 | S s | *S s* | [с] |
| 7 | E e | *E e* | [э], [е] | 26 | Ş ş | *Ş ş* | [ш] |
| 8 | Ə ə | *Ə ə* | [ә] | 27 | T т | *T t* | [т] |
| 9 | F f | *F f* | [ф] | 28 | Ѣ ѣ | *Ѣ ѣ* | [ҫ] |
| 10 | G g | *G g* | [г] | 29 | U u | *U u* | [у] |
| 11 | Ƣ ƣ | *Ƣ ƣ* | [ғ] | 30 | V v | *V v* | [в],[ʋ],[вау] |
| 12 | H h | *H h* | [һ] | 31 | X x | *X x* | [х] |
| 13 | I i | *I i* | [и] | 32 | Y y | *Y y* | [ү] |
| 14 | J j | *J j* | [й] | 33 | Z z | *Z z* | [з] |
| 15 | K k | *K k* | [к] | 34 | Ƶ ƶ | *Ƶ ƶ* | [ж] |
| 16 | Q q | *Q q* | [ҡ] | 35 | Ь ь | *Ь ь* | [ы] |
| 17 | L l | *L l* | [л] | 36 | Ьj ьj | *Ьj ьj* | [ый] |
| 18 | M m | *M m* | [м] | 37 | ' | ' | апостроф |
| 19 | N n | *N n* | [н] | | | | |

Ғәрәп яҙыуы нигеҙендә төҙөлгән иҫке алфавит ни тиклем ҡулайлаштырылған булмаһын, ул башҡорт теленең үҙенсәлектәрен яҙыуҙа сағылдырыу өсөн тулыһынса яуап бирә алмай. Өҫтәүенә, ул уҡытыу процесында балаларҙы грамотаға өйрәтеүҙе ауырлаштыра; башланғыс мәктәп уҡыусыһы уҡырға һәм яҙырға өйрәнеү өсөн бер хәрефтең дүрт төрлө һыҙылышын белергә тейеш.

Ғәрәп алфавитының төрки телдәре өсөн яраҡһыҙ булыуын, уны башҡа төрлө алфавит менән алмаштырырға кәрәклеген тәү башлап әзербайжандар күтәреп сыға. 1923 йылда әзербайжан теле өсөн латин графикаһы нигеҙендә яңы алфавит рәсми рәүештә ғәрәп графикаһы менән тигеҙ хоҡуҡта ҡулланыла башлай. Башҡортостанда латинсылыҡ хәрәкәте ныҡлап 1924 йылда башлана.

Ваҡытлы яңалиф өлкә комитеты тарафынан башҡорт теленең латин графикаһы нигеҙендә беренсе алфавит проекты төҙөлә, һәм ул комитеттың 1924 йылдың 4 октябрендәге ултырышында ҡаралып раҫлана.

Башҡортостан Халыҡ комиссарҙары Советы 1924 йылдың 6 октябрь ҡарары менән Ғилми мәркәз эргәһендәге ваҡытлы яңалиф өлкә комитеты урынына Башҡортостан яңалиф үҙәк комитеты ойоштора. Ғилми мәркәз эргәһендәге Ваҡытлы яңалиф өлкә комитеты тарафынан төҙөлгән алфавит проектын ҡайтанан ҡарап сығыу өсөн комиссия ойошторола.

Беренсе тюркология съезына әҙерләнеү уңайы менән, яңы алфавит проекты Яңалиф комитетының 1926 йылдың февралендә булған ултырышында тағы бер ҡат тикшерелә.

Бөтә Союз Яңалиф үҙәк комитетының 1927 йылдың июнь айында буласаҡ пленумында яңы төрки алфавитын унификациялаштырыу мәсьәләһе ҡаралырға тейеш була. Шул уңай менән башҡорт алфавиты проекты яңынан ҡаралып, уға күп кенә үҙгәрештәр индерелә.

Бөтә Союз Яңалиф үҙәк комитетының 1927 йылдың июнендә үткәрелгән беренсе пленумында яңы алфавитты унификациялаштырыу мәсьәләһе ҡарала.

Бик ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң төрки телдәре өсөн берләштерелгән алфавит ҡабул ителә, һәм ул «Берләштерелгән яңы төрки Алифбаһы» тип атала.

Берләштерелгән алфавит ҡабул ителгәс, башҡорт теленең яңы алфавиты, тағы бер ҡаралып, рәсми рәүештә ҡабул ителә. Алфавит 36 хәрефтән тора. Шуларҙың уны – һуҙынҡы өн, егерме алтыһы тартынҡы өн хәрефтәре була.

1928 йылдың 7 июнендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитеты яңы алфавитты рәсми дәүләт алфавиты итеп ҡарар сығара.

Латин хәрефтәре менән китаптар 1928 йылдан сыға башлай.

Башҡорт әҙәби теленең латинлаштырылған алфавит нигеҙендәге орфографияһы 1930 йылда төҙөлә һәм ул, Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы тарафынан раҫланып, «Башҡорт теле имләһе» тигән исем менән шул йылда Өфөлә баҫылып сыға.

Башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавитҡа күсереү үҙ ваҡытында прогрессив күренеш була. Латинлаштырылған алфавит, ғәрәп алфавитына ҡарағанда, үҙләштереү өсөн еңелерәк һәм яҙыу өсөн уңайлыраҡ була. Уға күсеү арҡаһында йөҙҙәрсә мең башҡорт йәштәре әсә телендә уҡырға һәм яҙырға тиҙерәк өйрәнә.

Социалистик индустрия, ауыл хужалығын механизациялаштырыу йылдарында барлыҡҡа килгән төшөнсәләр, фәнни асыштар һәм башҡалар бик күп яңы һүҙҙәр, терминдар тыуҙыра. Башҡорт теленә бик күп яңы һүҙҙәр өҫтәлә. Был шарттарҙа быға тиклем йәшәп килгән латинлаштырылған алфавит халыҡтың мәҙәни талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмай башлай һәм телдең, яҙыуҙың артабан үҫешенә етди тотҡарлыҡ яһай, башҡорт теленә көндән-көн күберәк инә барған рус һүҙҙәрен һәм интернациональ һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуға ҡамасаулай.

Шуға күрә 1938 йылда Башҡортостанда башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсереү тураһында башҡорт хеҙмәтсәндәре араһында киң хәрәкәт башлана. Был турала 1938 йылдың 14 августа ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты бюроһының беренсе ҡарары, 1939 йылдың 21 апрелендә икенсе ҡарары сыға һәм башҡорт теленең алфавиты һәм орфографияһы проектын төҙөү өсөн комиссия төҙөлә.

Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы 1939 йылдың 26 декабрендә башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсереү һәм шул алфавитҡа ярашлы итеп эшләнгән орфографияны раҫлау тураһында Указ сығара. Был указ буйынса башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавиттан рус графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күсереү 1940–1941 йылдар эсендә тамамланырға тейеш була.

Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы тарафынан 1939 йылда раҫланған алфавит һәм орфография 1940 йылда айырым брошюра рәүешендә баҫылып сыға («Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы», Өфө).

Рус графикаһы нигеҙендә 1940 йылда төҙөлгән орфографияны ҡулланыу практикаһы уның ҡайһы бер параграфтарына асыҡлыҡ индереү кәрәклеген күрһәтә. Орфография ҡайтанан ҡарап сығыла һәм төҙәтмәләр индерелә.

Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы был мәсьәләне ҡарап, үҙенең 1941 йылдың 15 ноябрендә сығарылған Указы менән орфографияға индерелгән асыҡлауҙарҙы раҫлай.

Төҙәтмәләр индерелгәндән һуң, орфография яңы редакцияла 1942 йылда айырым брошюра рәүешендә баҫылып сыға[1].

1950 йылда башҡорт теле орфографияһына тағы бер ни тиклем төҙәтмәләр индерелә. Был асыҡлауҙар Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының 1950 йылдың 23 ноябрь Указы менән раҫлана, шунан һуң яңы редакцияла айырым брошюра булып баҫылып сыға[2].

1981 йылда башҡорт әҙәби теле һәм орфографияһына тағы үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индерелә. Был үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының 1981 йылдың 22 октябрь Указы менән раҫлана, шунан һуң яңы редакцияла айырым брошюра булып баҫылып сыға[3].

Шулай итеп, рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән башҡорт әҙәби теленең хәҙерге орфографияһы ярты быуаттан артыҡ ҡулланылып килә. Уның ҡағиҙәләренең күбеһе хәҙерге көндә стабилләшкән.

Ләкин тел үҫә, уның һүҙлек составы интенсив рәүештә тулылана, байыға бара: яңы һүҙҙәр яһала, икенсе телдәрҙән һүҙҙәр үҙләштерелә. Шул арҡала яҙылышы орфография ҡағиҙәләре менән ҡаралмаған һүҙҙәр, формалар барлыҡҡа килә.

Шуның өсөн орфографияның ҡайһы бер ҡағиҙәләрен асыҡлау, тултырыу талап ителә.

---

[1] *Башҡорт әҙәби* теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1942.
[2] *Башҡорт әҙәби* теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1951.
[3] *Башҡорт әҙәби* теленең алфавиты һәм орфографияһы. Өфө, 1982.

## ГРАММАТИКАНЫҢ ТӨП ТӨШӨНСӘЛӘРЕ

Тел ғилемендә **грамматика** (грекса *gramma* – «хәреф», «яҙылыш») һүҙенең ҡулланылышы ике мәғәнәлә күҙәтелә: беренсенән, был термин телдең грамматик төҙөлөшөн атау өсөн файҙаланыла; икенсенән, грамматик төҙөлөш тураһындағы фән дә грамматика тип атала. Был фән телде һәм телмәрҙе синхроник һәм диахроник планда өйрәнә.

Тел ғилеменең бер бүлеге булараҡ, грамматика үҙ эсенә морфология менән синтаксисты берләштерә[1].

**Морфология** (грекса *morphe* – «форма» + *logos* – «фән», «тәғлимәт») һүҙ формаларын, уларҙың грамматик мәғәнәләрен, һүҙ төркөмдәрен, уларға хас грамматик категорияларҙы өйрәнә.

«Морфология» терминын тел ғилеменә генә ҡағылған терминдар рәтенә индереп булмай. 1822 йылда немец ғалимы Гёте тәү башлап уны тәбиғәт фәндәре өлкәһендә ҡулланыу тәҡдиме менән сығыш яһай (биология, физиология, геологияла был термин менән әлегәсә тәбиғәттең төрлө «форма»лары аталып йөрөтөлә). Лингвистика өлкәһенә ул XIX быуаттың икенсе яртыһында ғына килеп инә. Тел ғилемендә «морфология» термины бөгөн ике мәғәнәлә ҡулланыла: 1) лингвистика фәненең бер бүлеге; 2) тел системаһының бер кимәле.

**Синтаксис** (грекса *syntaxis* – «төҙөү», «теҙеү») айырым телдең телмәр төҙөлөшөн өйрәнә. Атап әйткәндә, телдәге һүҙҙәрҙең телмәр процесында үҙ-ара бәйләнеү ҡанундарын, һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу ысулдарын, төрҙәрен һәм һөйләмдең төҙөлөшөн өйрәнеү менән шөғөлләнә.

Билдәле булыуынса, һәр бер тел тәү сиратта лексик байлыҡтан, икенсе сиратта грамматик формаларҙан, йәғни грамматик

---

[1] *Башҡорт* теле: Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г. Р. Абдуллина, Г. Д. Вәлиева, К. Ғ. Ишбаев (яуаплы мөхәррир) һ. б. Өфө: Китап, 2012. 296-сы б.

мөнәсәбәттәрҙе белдереүсе сараларҙан тора. Лексик берәмек һәм грамматик форманы бер-береһенән айыра белеү ифрат ҙур әһәмиәткә эйә.

Лексик берәмек булыу йәһәтенән һүҙ теге йәки был күренештең атамаһы, ниндәйҙер төшөнсәне аңлатыусы билдә һәм башҡалар булараҡ сығыш яһай. Һүҙҙең лексик мәғәнәһе – ысынбарлыҡ тураһындағы төшөнсәнең һүҙҙә сағылдырылыуы; ул тел ғилеменең лексикология бүлегендә өйрәнелә.

**Грамматик форма** иһә грамматик мәғәнә менән берлектә грамматик категория барлыҡҡа килтерә; улар морфология бүлегенең өйрәнеү объекты булып торалар. Грамматик форма мотлаҡ рәүештә билдәле бер грамматик мәғәнәне белдерә.

Тел ғилемендә **грамматик категория** термины ике мәғәнәлә йөрөй: 1) телдең грамматик төҙөлөшөнә хас дөйөм төшөнсәләр (һан, килеш, заман һ. б.); 2) бер үк төрлө грамматик билдәләргә эйә булған һүҙ төркөмдәре.

Төрлө телдәрҙә грамматик категорияларҙың һаны төрлөсә була, донъя телдәре араһында ҡайһы берҙәренең хатта грамматик категорияларға бөтөнләй эйә түгеллеге билдәле. Был – тәбиғи күренеш; ысынлап та, йәнле аралашыу өсөн грамматик категорияларҙың кәрәге лә юҡ кеүек, сөнки һөйләүсе, уларҙы ҡулланмайынса ла, үҙ фекерен тыңлаусыға еткерергә мөмкин; грамматик категория был осраҡта һөйләүсенең әйтергә теләгән һүҙҙәрен билдәле бер ҡалыпҡа һалырға ғына ярҙам итә.

Телдә һәр **грамматик күренеш** ниндәй ҙә булһа грамматик категорияға ҡаратыла. Үҙ сиратында, һәр грамматик категория, ғәҙәттә, үҙ өлкәһенә ҡараған грамматик күренештәрҙең барыһын да берләштерергә тейеш. Шул рәүешле, грамматик категорияны грамматик мәғәнәнең грамматик саралар (формалар) ярҙамында бирелеше тип һанарға мөмкин[1].

Һәр тел күренеше кеүек, грамматик күренештең тышҡы яңғырашы (йәғни формаһы) һәм эске мәғәнәһе (йәғни йөкмәткеһе) була. Уларҙы икенсе төрлө әйтеү планы һәм йөкмәтке планы тип тә атау бар. Грамматика һәр грамматик күренеште мотлаҡ рәүештә әйтеү планында һәм йөкмәтке планында өйрәнә. Ул һәр саҡ грамматик мәғәнә һәм грамматик форма менән эш итә. Грамматик йөкмәтке – грамматик мәғәнә тип, йөкмәткене белдереүсе тел саралары грамматик форма тип атала. Грамматик

---

[1] *Башҡорт* теле: Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г. Р. Абдуллина, Г. Д. Вәлиева, К. Ғ. Ишбаев (яуаплы мөхәррир) һ. б. Өфө: Китап, 2012. 297-се б.

күренеш грамматик мәғәнәнең һәм грамматик форманың берҙәмлегенән хасил була.

**Грамматик мәғәнә** – билдәле бер һүҙ төркөмдәрен берләштереүсе дөйөм мәғәнә. Ғәҙәттә, бер грамматик категория эсенә бер-береһенән ҡырҡа айырылып тороусы грамматик мәғәнәләр берләшә; икенсе төрлө әйткәндә, улар бер үк һүҙ формаһы эсендә бер юлы ҡулланыла алмайҙар. Мәҫәлән, башҡорт телендә, башҡа телдәрҙәге кеүек үк, исем бер үк ваҡытта берлек һәм күплек һандарҙа тора алмай, ҡылым да бер юлы хәҙерге һәм үткән заман күрһәткестәре ҡабул итә алмай һ. б.

Грамматик мәғәнәләрҙең грамматик категориялар барлыҡҡа килтереүе тәбиғи күренеш һанала: телдә бер генә килеш йәки бер генә һөйкәлеш формаһы булмай. Былдай осраҡта, ҡағиҙә булараҡ, был телдә килеш йәки һөйкәлеш категорияһы юҡ, тиҙәр, сөнки бер генә элемент ниндәйҙер система барлыҡҡа килтерә алмай.

Шулай итеп, грамматик категорияны грамматик мәғәнәләрҙең дөйөмләштерелеүе тип һанарға нигеҙ бар; ул бер-береһенән ҡырҡа айырылыусы йәки эргәләш ҡулланылыусы ике йәки бер нисә грамматик мәғәнәнән төҙөлә. Мәҫәлән, башҡорт телендә килеш, заман, һөйкәлеш, йүнәлеш һ. б. кеүек грамматик категориялар хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин, ә инде айырым килештәр, заман, йүнәлеш формалары грамматик мәғәнәне тәшкил итәләр.

Тел ғилемендә шулай уҡ «парадигма» термины ла ҡулланыла (мәҫәлән, «исемдәрҙең килеш парадигмаһы» һ. б.). Парадигма тип бер үк лексик мәғәнәгә эйә булған, ләкин грамматик мәғәнәләре яғынан айырылған һүҙ формаларының йыйылмаһын атайҙар. Һүҙ формалары составында мәғәнәләре буйынса бер-береһенән ҡырҡа айырылған аффикстар, ғәҙәттә, бер парадигмаға ойошалар.

# МОРФЕМИКА

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺҮҘҘӘРҘЕҢ МОРФЕМАТИК ТӨҘӨЛӨШӨ

Тел ғилеменең **морфемика** бүлеге һүҙҙәрҙең мәғәнәүи өлөштәрен, уларҙың төрҙәрен һәм үҙ-ара бәйләнеү мөнәсәбәттәрен өйрәнә. Һүҙҙең морфематик төҙөлөшө, морфемика бүлегенән тыш, һүҙьяһалыш, морфонология һәм морфология бүлектәрендә лә бер ни тиклем тикшерелә.

Башҡорт морфемикаһы фәненең өйрәнеү объекты булып башҡорт һүҙҙәренең, шулай уҡ хәҙерге башҡорт лексикаһы составында урын алған үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөштәре сығыш яһай. Морфемика фәне һүҙҙәрҙең мәғәнәүи өлөштәрен билдәләүсе төшөнсәләрҙе, мәғәнәүи киҫәктәрҙең төрҙәрен, уларға ярашлы терминдарҙың бирелешен, һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөндә телдең тарихи үҫеш барышында күҙәтелгән үҙгәрештәрҙе тикшереүҙе төп маҡсат итеп ҡуя.

Һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөн, морфемаларҙың төрҙәрен, уларҙы билдәләү принциптарын һәм ҡулланыу үҙенсәлектәрен өйрәнеүсе морфемика бүлегенең төп берәмеге – морф; шулай уҡ телселәр һүҙҙәрҙең һәм уларҙың формаларының, морфтарҙан тыш, алломорфтарҙан, морфемаларҙан һәм морфемаларҙың варианттарынан тороуҙарын билдәләйҙәр[1].

**Морф** (грекса *morphe* – «форма») – һүҙҙең артабан бүленә алмай торған иң бәләкәй мәғәнәүи өлөшө. Һүҙ кәмендә бер йәки унан күберәк морфтан торорға мөмкин. Ошоға ярашлы, телдә бер морфлы (мәҫәлән: *баш, кук, әйт-, кем, ун, тиҙ*) һәм күп морфлы

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 15-се б.

(мәҫәлән: *баш-лыҡ, күк-һел, әйт-мә-не-ме, тиҙ-ерәк*) һүҙҙәрҙе айырып йөрөтәләр.

**Алломорфтар** тип бер үк морфтың, урындары һәм мәғәнә үҙенсәлектәре буйынса тап килеп тә, фонологик төҙөлөштәре буйынса бер ни тиклем айырылған фонетик төрҙәрен атап йөрөтәләр: *һуҡ-ты, һуғ-а, яҙ-ма, һөйлә-мә* һүҙҙәренең тәүге төркөмөндә *һуҡ-, һуғ-* өлөштәре *һуҡ-* морфының, ә икенсе төркөмдә *-ма, -мә* өлөштәре *-ма* морфының алломорфтары булып тора.

Бер үк мәғәнәгә эйә булыуҙары, урынлашыу тәртибе, фонологик төҙөлөштәренең яҡынлығы менән бер-береһенә мөнәсәбәттәш морфтар йыйылмаһы бер **морфемаға** ойоша. Мәҫәлән, *ҡалаҡ-тар, ҡалағ-ы* һүҙҙәрендәге *ҡалаҡ, ҡалағ* өлөштәре һәм *бала-ны, әсә-не* һүҙҙәрендәге *-ны, -не* өлөштәре һәр береһе үҙ төркөмөндә бер морфемаға ҡарай.

Бер үк **морфеманың варианттары** ла булыуы мөмкин. Улар бер үк морф менән бәйләнешкә инә алалар һәм формаль яҡтан һәм мәғәнәләре буйынса бер-береһен алмаштырып йөрөй алалар. Мәҫәлән, *аҡрын* һәм *әкрен* һүҙҙәре бер тамыр морфеманың варианттары булып торалар.

Башҡорт теле, башҡа төрки телдәр кеүек үк, һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшө, төрлө типтағы яһалма һүҙҙәрҙең һәм уларҙың грамматик формаларының яһалыу үҙенсәлектәре буйынса агглютинатив телдәрҙең аффиксаль төркөмөнә ҡарай. Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшө билдәле бер функция башҡарған аффикстарҙың механик рәүештә тамыр (нигеҙ) һүҙ аҙағына эҙмә-эҙлекле ҡушылыуы һөҙөмтәһендә формалаша: *ауыл-дыҡы-лар-ҙыҡы, матур-ҙар-ҙы, ошо-но-мо.*

Башҡорт телендә морфемалар, үҙҙәре аңлатҡан мәғәнәгә, һүҙҙәге позицияһына һәм башҡарған функцияһына ҡарап, ике ҙур төргә: **тамыр морфемаларға (тамырҙарға)** һәм **ярҙамсы** йәки **аффиксаль морфемаларға (аффикстарға)** бүлеп ҡарала. Мәҫәлән: *китапҡа* һүҙендә *китап* – тамыр, *-ҡа* – аффикс, *дәфтәрҙәлер* һүҙендә *дәфтәр* – тамыр, *-ҙә* – аффикс, *-лер* – аффикс.

## ТАМЫР ҺӘМ ЯРҘАМСЫ (АФФИКСАЛЬ) МОРФЕМАЛАР

Морфемаларҙы өйрәнеү, ғәҙәттә, тамыр һәм ярҙамсы морфемаларҙы (махсус әҙәбиәттә ярҙамсы морфемаларҙы йыш ҡына аффикстар тип йөрөтәләр) айырыуҙан, уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйыуҙан башлана.

**Тамыр** – үҙендә һүҙҙең лексик мәғәнәһен тотҡан морфема. Тамыр морфема һәр һүҙҙең төп һәм даими өлөшө һанала. Ул – һүҙҙең төп, үҙәк өлөшө. **Ярҙамсы (аффиксаль) морфемалар** тамыр мәғәнәһен төрләндерә, конкретлаштыра ғына, йәғни һүҙҙең төрлө грамматик йәки һүҙьяһалыш мәғәнәләрен сағылдыра.

Тамыр морфемалар ысынбарлыҡтың элементын (киҫәген) белдерә. Тимәк, уларҙың мәғәнәһе реаль була. Аффиксаль морфемалар ысынбарлыҡтың бер ниндәй элементы менән туранан-тура бәйләнештә булмай. Улар төрлө һүҙ мәғәнәләренең модификаторы булараҡ ҡына ҡулланыла, йәғни логик-грамматик мәғәнә сағылдыра.

Һүҙҙең төп өлөшө булараҡ, тамыр һәр һүҙ өсөн мәжбүри булған морфема иҫәпләнә, ярҙамсы морфемаларҙың иһә һүҙ составында булыуы мәжбүри түгел, улар һүҙҙең факультатив элементтары һанала. Хәҙерге башҡорт телендә һүҙҙәрҙең бөтәһе тиерлек ярҙамсы морфемаларҙан (аффикстарҙан) башҡа ҡулланыла ала, ә тамырһыҙ һүҙ булмай.

Хәҙерге башҡорт телендә, күпселек төрки телдәрендәге кеүек үк, тамырҙар, башлыса, бер ижектән, һирәкләп – ике, айырым осраҡтарҙа өс ижектән торалар (*ҡарт, таш, бир-*; *һа-рыҡ, ма-тур, а-лыҫ, ҡа-ра-*; *сәт-лә-үек, бәл-те-рә-*).

Тамыр һәм ябай яһалма һүҙҙәр бер тамырҙан торһа (*баш-лыҡ, кис-ке, баш-ла-*), ҡушма һүҙҙәрҙә (ҡушма, парлы, ҡабатлаулы, ҡыҫҡартылған ҡушма төрҙәрендә) тамыр морфемаларҙың һаны икенән дә кәм булмай (*аҡкош, атай-әсәй, «Юлдаш» радиоһы, кино-фото-йылъ-яҙ-ма, Башҡорт дәүләт университеты*).

Тамыр морфемалар тамырҙаш һүҙҙәр яһау өсөн нигеҙ булып тора: *таш – ташлыҡ, ташсы, ташбаш, ташбаҡа, таш күмер, ташлы* һ. б., *аҡ – аҡлыҡ, аҡла-, аҡкош, Аҡбай, аҡ-ҡара, аҡлы-ҡаралы* һ. б. Улар, ярҙамсы (аффиксаль) морфемаларҙан айырмалы рәүештә, һүҙьяһалыш оялары төҙөгән бөтә тамырҙаш һүҙҙәрҙең составында һәм тамырҙаш һүҙҙәрҙең бөтә грамматик формаларында ҡабатлана: *баш, баш-тың, баш-ҡа, баш-ты, баш-тан, баш-та, баш-ым, баш-ын, баш-ы, баш-ыбыҙ, баш-ығыҙ, баш-тар, баш-аҡ, баш-аҡланған, баш-аҡлы.*

Хәҙерге башҡорт телендәге тамыр морфемаларҙың күбеһе башҡа морфемалар менән бәйләнешһеҙ, ирекле ҡулланыла, йәғни улар **ирекле морфема** һанала. Ярҙамсы (аффиксаль) морфемалар иһә тамыр менән бәйләнешһеҙ ҡулланыла алмай. Тамыр морфемаларҙан айырмалы рәүештә, улар тамырға «йәбештерелгән», «бәйләп ҡуйылған» була, йәғни һәр саҡ **бәйле морфемалар** булып сығыш яһай.

Тел ғилемендә тамыр морфемаларҙы ике төргә бүлеп йөрөтөү бар[1]:

а) **ирекле тамырҙар** икенсе бер тамыр морфемалар, шулай уҡ аффикстар менән ирекле бәйләнешкә инәләр һәм телмәрҙә уларҙан башҡа ла үҙ аллы ҡулланыла алалар: *матур, матур-лыҡ, матур-ла-*; *көл, көл-әмәс, көл-дөр-гөс, көл-әкәс, көл-кө*; *баш-, баш-лы, баш-ҡа, баш-лыҡ, баш-һыҙ, баш-баш-таҡ-лыҡ, баш-тан, баш-бир-мәҫ* һ. б.;

б) **бәйле тамырҙар** тик һүҙ яһаусы аффикстар менән булған ҡушылмаларҙа ғына осрайҙар, үҙ аллы ҡулланылыштан төшөп ҡалғандар, уларҙы тамырҙаш һүҙҙәр рәтендә генә билдәләргә була: *оҙ-ай-, оҙ-ай-лы, оҙ-аҡ, оҙ-аҡ-ла-, оҙ-ам, оҙ-он, оҙ-он-ай-, оҙ-он-лоҡ*; *өйрә-н-, өйрә-н-сек, өйрә-т-* һ. б.

Тамыр морфемаларҙың мөһим билдәләрен иҫәпкә алып, уны түбәндәгесә билдәләргә мөмкин: тамыр – һәр лексик берәмек өсөн мәжбүри булған, барлыҡ тамырҙаш һүҙҙәрҙә һәм уларҙың грамматик формаларында ҡабатланған һәм һүҙҙең төп лексик мәғәнәһен сағылдырған үҙәк морфема ул.

Ярҙамсы (аффиксаль) морфеманы тамырҙың мәғәнәһен конкретлаштырған, төрләндергән, йәғни һүҙҙең төрлө грамматик һәм һүҙьяһалыш мәғәнәләрен сағылдырған, факультатив (һүҙҙең составында мәжбүри булған) морфема тип билдәләргә мөмкин.

## *Аффикс тураһында төшөнсә*

**Аффикс** (латинса *affixus* – «теркәлгән») – һүҙгә өҫтәлмә лексик, грамматик һәм лексик-грамматик мәғәнә биреүсе ярҙамсы морфема. Аффикстар туранан-тура тамырға йәки тамырҙан һуң килгән башҡа аффикстарға ҡушылып йөрөйҙәр: *йәшел-лек, ошо-мо, кил-гелә-һен-, ҡабат-ла-*.

Тамыр морфемаларҙан айырмалы рәүештә, аффикс һәр һүҙҙә лә булмаҫҡа мөмкин. Аффикс бәйле морфема иҫәпләнә, сөнки ул тамырҙан башҡа ҡулланыла алмай, айырым торғанда мәғәнә аңлатмай.

Башҡорт телендә, башҡа төрки телдәрҙәге кеүек үк, аффикстарҙың иҫәбе сикле. Шулай ҙа, тарихи яҡтан ҡарағанда, ниндәйҙер кимәлдә үҫеш тә күҙәтелә: һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөндәге тарҡалыу, ҡатмарланыу һәм алмашыныу кеүек процестар һөҙөмтәһендә һирәкләп булһа ла яңы аффикстарҙың барлыҡҡа

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 17-се б.

килеп тороуы, сит телдәрҙән айырым аффиксоидтар (префикстар, префиксоидтар, суффикстар, суффиксоидтар) үҙләштерелеүе – быға асыҡ дәлил.

## АФФИКСТАРҘЫҢ ТӨРҘӘРЕ

Төрки телдәрҙә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, аффикстарҙың тәбиғәте тулыһынса асыҡланып етмәгән. Мәғәнәләре һәм башҡарған функциялары буйынса уларҙы телселәр өс төргә: һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарға бүлеп йөрөтәләр[1].

**Һүҙ яһаусы аффикстар**, һүҙҙең тамырына (йәки нигеҙенә) ҡушылып, уның лексик мәғәнәһен үҙгәртәләр һәм яңы һүҙ барлыҡҡа килтерәләр. Һүҙ яһаусы аффикстарҙы функциялары буйынса ике төркөмгә бүлеп ҡарарға була:

1) бер һүҙ төркөмөнән икенсе һүҙ төркөмөнә ҡараған яңы лексик мәғәнәле һүҙ яһаусы аффикстар; мәҫәлән, *-лыҡ* аффиксы ярҙамында төрлө һүҙ төркөмдәренән исемдәр яһала: *матур-лыҡ, ун-лыҡ, тиҙ-лек*; *-ла* аффиксы төрлө һүҙ төркөмдәренән ҡылымдар яһауҙа ҡатнаша: *баш-ла-, матур-ла-, аҡ-ла-, түбән-лә*;

2) шул уҡ һүҙ төркөмө эсендә яңы лексик мәғәнәле һүҙ яһаусы аффикстар; мәҫәлән, *-сы* аффиксы исемдәрҙән икенсе бер мәғәнәле исем яһау өсөн ҡулланыла: *таш-сы, биҙәк-се, ҡороҡ-со, көмөш-сө.*

**Форма яһаусы аффикстар**, һүҙҙең тамырына (йәки нигеҙенә) ҡушылып, билдәле бер дәрәжәлә уның лексик һәм грамматик мәғәнәһен үҙгәртәләр; һөҙөмтәлә шул уҡ һүҙ төркөмө эсендә лексик мәғәнәһе бер ни тиклем яңы төҫмөрләнеш алған яңы морфологик категория барлыҡҡа килә. Ҡайһы бер телселәр (мәҫәлән, Н. А. Баскаков) был төр аффикстарҙы функциональ-грамматик һүҙьяһалыш аффикстары тип тә йөрөтәләр.

Хәҙерге башҡорт телендә форма яһаусы аффикстар рәтенә түбәндәгеләр ҡаратыла:

1) субъектив баһалауҙы (иркәләүҙе, кесерәйтеүҙе, кәмһетеүҙе һ. б.) белдереүсе аффикстар: *ҡош-соҡ, төйөр-сөк, Урал-ҡай, Һиҙәҙе-кәй, матур-ҡас*;

2) һан (күплек) категорияһы аффикстары (затлы ҡылымдарҙан башҡа): *китап-тар, ҡәләм-дәр, сибәр-ҙәр, икенсе-ләр, кем-дәр, тырышыу-ҙар, күп-тәр*;

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 18-се б.

3) модаллек категорияһы аффикстары: *баш-мы, өлкән-ме, алтау-мы, теге-ме, бара-мы, кисә-ме, мотлаҡ-мы*; *баш-тыр, өлкән-дер, алтау-ҙыр, теге-лер, бара-лыр, кисә-лер, мотлаҡ-тыр*; *баш-сы, өлкән-се, алтау-сы, теге-се, бара-сы, кисә-се, мотлаҡ-сы*;

4) дәрәжә категорияһы аффикстары: *оло-раҡ, күк-һел, түбән-ерәк*;

5) иҫәп төшөнсәһе категорияһы (һан төркөмсәләре) аффикстары: *ете-нсе, дүрт-әр, ун-ау, йөҙ-ләп*;

6) ҡылым төркөмсәләре аффикстары: *ҡайт-ырға, ҡайт-ыу, ҡайт-ҡан* (*ваҡыт*), *ҡайт-ыусы* (*бала*), *ҡайт-ыр* (*көн*), *ҡайт-асаҡ* (*кеше*), *ҡайт-ып, ҡайт-ҡас, ҡайт-ҡансы, ҡайт-ҡанса*;

7) ҡылымдарҙың йүнәлеш категорияһы аффикстары: *биҙ-ән, биҙә-л, биҙә-т, биҙә-ш*;

8) ҡылымдарҙың күләм (аспектуаллек) категорияһы аффикстары: *әйт-келә, кил-гелә, һал-ыңҡыра, күтәр-еңкерә, әйт-ештер, бор-ғосла, төрт-көслә*;

9) ҡылымдарҙың һөйкәлеш категорияһы аффикстары: *яҙ-а, яҙ-һын, яҙ-һа, яҙ-ғы* (*кил-*), *яҙ-маҡсы*;

10) хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының заман категорияһы аффикстары: *һөйлә-не, ҡаҙ-ҙы; һөйлә-й, ҡаҙ-а; һөйлә-р, ҡаҙ-ыр; һөйләй-әсәк, ҡаҙ-асаҡ*;

11) ҡылымдарҙың юҡлыҡ категорияһы аффикстары: *ят-ма, көл-мә, ят-маҫ, көл-мәҫ.*

**Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар**, һүҙҙең тамырына (йәки нигеҙенә) ҡушылып, уның лексик мәғәнәһенә тәьҫир итмәйенсә, тик грамматик мәғәнәһен генә үҙгәртәләр һәм һүҙбәйләнеш йәки һөйләм эсендәге башҡа һүҙҙәр менән синтаксик мөнәсәбәттәр урынлаштырыу өсөн хеҙмәт итәләр.

Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарға түбәндәге грамматик категорияларҙың аффикстары ҡаратыла:

1) килеш категорияһы аффикстары: *көҙгө-нөң, көҙгө-гә, көҙгө-нө, көҙгө-нән, көҙгө-лә*;

2) эйәлек категорияһы аффикстары: *әсәй-ем, әсәй-ең, әсәй-е, әсәй-ебеҙ, әсәй-егеҙ, әсәй-е*;

3) хәбәрлек категорияһы аффикстары: *хәбәрсе-мен, ихлас-мын, ҡайҙа-мын, хәбәрсе-һең, ихлас-һың, ҡайҙа-һың, хәбәрсе-беҙ, ихлас-быҙ, ҡайҙа-быҙ, хәбәрсе-һегеҙ, ихлас-һығыҙ, ҡайҙа-һығыҙ*;

4) ҡылымдарҙың зат һәм һан категориялары аффикстары: *уҡыр-мын, уҡыр-һың, уҡыр-быҙ, уҡыр-һығыҙ, уҡыр-ҙар.*

Тел ғилемендә шулай уҡ **нуль аффикс** термины осрай. Нуль аффикс – теге йәки был грамматик категорияның тулы парадиг-

маһы эсендәге формаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәшлеге аша билдәләнеүсе күрһәткес.

Башҡорт телендә һүҙ яһаусы аффикстар һәр саҡта ла формаль күрһәткестәр, йәғни конкрет фонема йәки фонемалар ҡушылмалары аша белдереләләр. Форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың иһә айырым осраҡтарҙа гәҙәттәге матди күрһәткестәре булмаҫҡа ла мөмкин, йәғни улар нулгә тиңләшергә мөмкиндәр. Мәҫәлән, һан категорияһының берлек формаһы (китап-Ø – *китап-тар, һөйкөмлө-Ø – һөйкөмлө-ләр, алтынсы-Ø – алтынсы-лар, һөйләй-Ø – һөйләй-ҙәр*), килеш категорияһының төп, билдәһеҙ эйәлек, билдәһеҙ төбәү һәм билдәһеҙ төшөм формалары (*Себер-Ø үҙенә тарата*; *Себер-ҙең, Себер-Ø һыуығы*; *Себер-гә, Себер-Ø сығып китте*; *Себер-ҙе, Себер-Ø әйләнеп ҡайтты*), ҡылымдарҙың берлектәге 3-сө зат формалары (*ул тыйҙы-Ø, ул тыя-Ø, ул тыйыр-Ø, ул тыйһа-Ø*) нуль аффиксы аша белдерелә.

Аффикстар **бер морфемалы (йәки ябай)** һәм **күп морфемалы (йәки ҡушма)** булырға мөмкин:

а) *-сы / -се: ҡайт-сы-, әйт-се-*; *-ма / -мә: яҙ-ма, кил-мә*; *-ҙы / -ҙе: бар-ҙы, бир-ҙе*; *-ҡай/ -кәй: матур-ҡай, сибәр-кәй*;

б) *-мтал* < *-м-тал / -мтәл* < *-м-тәл: ары-мтал, өшө-мтәл*; *-ғаса* < *-ға-са / -гәсә* < *-гә-сә, -ҡаса* < *-ҡа-са / -кәсә* < *-кә-сә: урамғаса, йәй-гәсә, боролош-ҡаса, бесәнлек-кәсә*; *-мһыра* < *м-һыра / -мһерә* < *м-һерә, -мһора* < *м-һора / -мһөрә* < *м-һөрә: ила-мһыра-, йоҡо-мһора-, көл-*өмһөрә-.

Башҡорт телендә үҙҙәренең мәғәнә үҙенсәлектәре һәм функциялары буйынса тамыр һәм аффиксаль морфемалар араһында йөрөүсе **аффиксоид** (грекса *eidos* – «образ», «рәүеш») тип аталыусы һүҙ яһаусы форманттар осрай. Улар башҡорт телендә үҙҙәренең беренсел мәғәнәләренән алыҫлашҡандар, үҙ аллы ҡулланылыуҙан туҡтағандар һәм, башлыса, яһалма һүҙҙәр составында һүҙ яһаусы сара булараҡ ҡулланылалар: *намә* (*йондоҙнамә, хәбәрнамә*), *стан* (*Башҡортостан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан*), *хана* (*ашхана, китапхана, бөҙрәхана, сәйхана*), *хур* (*сәйхур*) һ. б.

Дөйөм төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәрендә, башҡа төрки телдәрендәге кеүек үк, аффикстар тик тамырҙан һуң урынлашалар, тамыр алдынан тороусы аффикстар, йәғни **префикстар,** юҡ. Шулай ҙа башҡорт телендә, морфематик юлдың бер ысулы булараҡ, префикслашыу күҙәтелә, тип әйтергә мөмкин. Фарсы, латин, грек телдәренән килеп ингән бындай префикстарҙың ҡулланылыу даирәһе башҡорт телендә, әлбиттә, сикле: а) улар күбеһенсә рус теле аша килеп ингән интернациональ һүҙҙәрҙе тәржемә итеп алғанда (калькаларҙа һәм ярымкалькаларҙа) һаҡланғандар: *анти-вещество* > *анти-матдә, инфра-звук* >

*инфра-тауыш, контр-мера > контр-сара, ультра-короткий > ультра-ҡыҫҡа, де-монти-ровать > де-монтажла-*; б) фарсы һәм ғәрәп һүҙҙәре менән килеп ингәндәр, һуңынан уларҙың ҡайһы берҙәре башҡорт һүҙҙәренә лә ҡушылып йөрөй башлағандар: *хисап > би-хисап, баштаҡ > би-баштаҡ, доға > бәд-доға, хаҡ > на-хаҡ.*

### *Башҡорт телендә аффиксаль морфемаларҙың бер-береһенә ялғаныу үҙенсәлектәре*

Башҡорт телендә аффикстарҙың тамырға ҡушылыу тәртибенең төрки телдәренә хас билдәле бер законлылығы бар. Ҡағиҙә булараҡ, тамырға туранан-тура аффикстарҙың өс төрө лә ҡушыла ала: *матур-лыҡ* (һүҙ яһаусы аффикс), *матур-мы* (форма яһаусы аффикс), *матур-ҙы* (һүҙ үҙгәртеүсе аффикс).

Бер тамырға бер юлы бер нисә һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикс ҡушылып килә ала: *баҡ* (тамыр) + *-са* (һүҙ яһаусы аффикс) *-сы* (һүҙ яһаусы аффикс) *-лар* (форма яһаусы аффикс) *-ға* (һүҙ үҙгәртеүсе аффикс) *-мы* (форма яһаусы аффикс). Ҡайһы саҡта бер тамырға бер юлы бер нисә һүҙ яһаусы аффикс (*мал-сы-лыҡ, көл-кө-лө, иг-ен-лек*), икенсе бер осраҡта бер нисә форма яһаусы аффикс (*ике-нсе-ләр, бар-ма-ны, кил-гән-дер*), өсөнсө осраҡта бер нисә һүҙ үҙгәртеүсе аффикс (*дәфтәр-ем-дә, ауыл-да-мын*) ялғанып килергә мөмкин.

Һүҙ составында аффикстарҙың бөтә төрө лә бар икән, ғәҙәттә, тамырға иң тәүҙә һүҙ яһаусы, унан һуң форма яһаусы, ә иң аҙаҡтан һүҙ үҙгәртеүсе аффикс ҡушылып килә: *матур-лыҡ* (һүҙ яһаусы аффикс) *-тар* (форма яһаусы аффикс) *-ға* (һүҙ үҙгәртеүсе аффикс).

Былдай тәртиптә урынлашыу аффикстарҙың дөйөм тәбиғәтенә бәйле, сөнки уларҙың мәғәнәүи үҙенсәлектәре конкреттан абстрактҡа, айырымлыҡтан дөйөмләккә табан күсә барыу принцибына ҡоролған. Һүҙ яһаусы аффикстар, ҡағиҙә булараҡ, конкрет бер лексик мәғәнәгә эйә булған һүҙҙәр яһауҙа ҡатнашалар, форма яһаусы аффикстар билдәле бер лексик мәғәнә төҫмөрөнә эйә грамматик категорияларҙың яһалышын тәьмин итәләр, һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар иң абстракт мәғәнәле һаналған синтаксик категорияларҙың күрһәткестәре булып сығыш яһайҙар.

Әлбиттә, был законлылыҡ һәр һүҙҙә лә һаҡланмай, һүҙ яһаусы аффикстың форма яһаусы йәки һүҙ үҙгәртеүсе аффикстан һуң килгән осраҡтары ла күҙәтелә: *урман-да* (һүҙ үҙгәртеүсе аффикс) *-ғы* (һүҙ яһаусы аффикс) *-лар* (форма яһаусы аффикс), *атай-ым* (һүҙ үҙгәртеүсе аффикс) *-дар* (форма яһаусы аффикс) *-ҙыҡы* (һүҙ яһаусы аффикс).

Һүҙ яһаусы һәм форма яһаусы аффикстар һәр тамыр менән дә яраша алмаҫҡа мөмкин. Уларҙың үҙ-ара ҡушылыу мөмкинлеге тамырҙың да, уға ҡушылыусы аффикстың да мәғәнә үҙенсәлектәренән сығып билдәләнә. Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың күпселеге (ҡайһы бер сикләүҙәрҙән тыш) теләһә ниндәй тамырға ҡушыла алалар.

Һүҙ яһаусы һәм форма яһаусы аффикстарҙың күбеһе, ғәҙәттә, бер генә мәғәнәгә эйә, ҡайһы берҙәренә генә күп мәғәнәлелек хас. Мәҫәлән, -лыҡ аффиксы, төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡушылып, исемдәр яһауҙа ҡатнаша, айырым осраҡтарҙа исем һәм ҡылым нигеҙле сифаттар ҙа яһай ала (*орлоҡлоҡ һуған, өйлөк таҡта, юллыҡ аҡса, салбарлыҡ туҡыма*; *әйтерлек һүҙ, ҡайтырлыҡ урын, боролорлоҡ урам, өҙөлөрлөк еп*).

Ҡылымдарҙың йүнәлеш категорияһы аффикстары айырым осраҡтарҙа яңы мәғәнәле һүҙ яһауҙа ҡатнашалар: *һөйлә-, һөйлә-н-*; *һуҡ-, һуғ-ыш-*; шулай уҡ һөйкәлеш һәм заман категориялары бер үк аффикстар менән белдереләләр: *ҡайт-ты* (хәбәр һөйкәлеше, үткән заман).

Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙан эйәлек, хәбәрлек һәм ҡылымдарҙың зат категориялары күп мәғәнәле булып торалар һәм һәр ҡайһыһы бер үк ваҡытта затты ла, һанды ла күрһәтеп киләләр (*бала-быҙ*: 1-се зат, күплектә; *һауынсы-мын*: 1-се зат, берлектә; *бар-а-һығыҙ*: 2-се зат, күплектә).

## АФФИКСТАРҘЫҢ ПРОДУКТИВЛЫҒЫ ҺӘМ РЕГУЛЯРЛЫҒЫ

Аффиксаль морфемалар тел үҫешенең билдәле бер осоронда, атап әйткәндә – хәҙерге осоронда, яңы һүҙҙәр йәки грамматик формалар яһай алыу-алмау һәләтлеге буйынса айырыла. Ошо үҙенсәлеккә ярашлы рәүештә, продуктив һәм продуктив булмаған аффикстар айырыла.

Хәҙерге башҡорт телендә яңы һүҙҙәр йәки грамматик формалар яһауҙа иркен ҡулланылған ярҙамсы морфемалар **продуктив** иҫәпләнә. Продуктив аффикстарға, мәҫәлән, исемдәрҙән исем яһаусы *-даш/-дәш, -ҙаш/-ҙәш, -лаш/-ләш, -таш/-тәш*; *-лек/-лоҡ, -лөк/-лыҡ*; *-се/-со, -сө/-сы* аффикстары (*килендәш, көрәштәш, курсташ, ҡорҙаш, ҡәбиләләш, өйҙәш, табындаш, фамилиялаш*; *ауыҙлыҡ, битлек, бөйөрлөк, моронлоҡ*; *аҙғынлыҡ, алйотлоҡ, бөйөклөк, тинтәклек*; *йомошсо, кәңәшсе, өгөтсө, сихырсы*), исемдәрҙән сифат яһаусы *-ле/-ло, -лө/-лы*; *-һеҙ/-һоҙ, -һөҙ/-һыҙ* аффикстары (*ботаҡлы, ҡойроҡло, мөгөҙлө, тешле*; *игелекһеҙ, оятһыҙ, өмөтһөҙ, холоҡһоҙ*), исемдәрҙән ҡылым

яһаусы *-ла/-лә* (*алҡымла, аула, ишарала, йүнлә, рәтлә, эшлә*), сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең сағыштырыу дәрәжәһен яһаусы *-ерәк/-ораҡ, -өрәк/-раҡ, -рәк/-ыраҡ* аффикстары (*беҙҙеңсәрәк, йәшерәк, ҡапылыраҡ, ҡороораҡ, оҙонораҡ, өлгөрөрәк, тиҙерәк, уныңсараҡ, эҫерәк*), килеш һәм зат, һан аффикстарының барыһы ла инә.

Хәҙерге ваҡытта яңы һүҙҙәр һәм һүҙҙәрҙең грамматик формаларын яһамаған ярҙамсы морфемалар **продуктив булмаған** аффикстар иҫәпләнә. Уларға, мәҫәлән, исем яһаусы *-ғый* (ҡоҙағый), *-дәмә* (билдәмә), *-елдерек* (күҙелдерек, түшелдерек), *-емтә* (эҙемтә), *-кән* (елкән), *-ҡым* (шауҡым), *-ләмә* (гөлләмә), *-мес* (елкәмес), *-тәй* (түбәтәй), *-һәләк* (иңһәләк), *-әнәк* (күҙәнәк), ҡылымдарҙан исем яһаусы *-ат* (һыҙат), *-ҙаҡ* (ҡурҙаҡ), *-кәүел* (үткәүел), *-ҡолоҡ* (йотҡолоҡ), *-мас* (ҡурмас), *-мер* (үҫмер), *-мес* (биләмес), *-әбә* (күсәбә), исемдәрҙән сифат яһаусы *-амыҡ* (һаҙамыҡ), *-кәр* (хәйләкәр), *-сыр* (ҡулсыр), ҡылымдарҙан сифат яһаусы *-ан* (ҡыҫан), *-ғалаҡ* (тайғалаҡ), *-ғас* (ҡыйғас), *-дәм* (күндәм), *-м* (сыҙам), *-сан* (оялсан) аффикстарын, билдәһеҙ киләсәк замандың барлыҡтағы беренсе зат берлек формаһын яһаусы *-ем/-ом, -өм/-ым* (*алырым, бororом, килерем, күтәрөм, уҡырым, эшләрем*) аффикстарын индерергә мөмкин.

Продуктив һәм продуктив булмаған аффиксаль морфемаларҙан тыш, ҡайһы бер ғалимдар тарафынан **аҙ продуктив** аффиксаль морфемалар айырыла. Яңы һүҙҙәрҙе һәм формаларҙы регуляр яһамаған ярҙамсы морфемаларҙы шулай атайҙар. Уларға, мәҫәлән, исемдәрҙән исем яһаусы *-са/-сә* (*бармаҡса, күкрәксә, муйынса, табанса*), *-сай/-сәй* (*кендексәй, тоҡсай, түбәсәй*), *-сыҡ* (*ҡапсыҡ, уйынсыҡ, янсыҡ*), *-сын* (*бармаҡсын, ҡолаҡсын*), *-сән* (*телсән, хеҙмәтсән*), ҡылымдарҙан исем яһаусы *-кә/-ҡа* (*бүлкә, киҫкә, ярҡа*), *-се/-сы* (*күҙәтсе, тамсы, теләнсе*), *-сен/-сын* (*күгәрсен, ҡырсын, эйәрсен*), исемдәрҙән ҡылым яһаусы *-һыра* (*аяҡһыра-, намыҫһыра-, талымһыра-*) аффикстарын индерәләр.

Бер үк аффикс төрлө ҡулланылышта продуктив ярҙамсы морфема булып та, продуктив булмаған (аҙ продуктив) морфема булып та сығыш яһарға мөмкин. Мәҫәлән, *-а / -ә* аффиксы исемдәрҙән ҡылым яһағанда (*ата-, аша-, телә-, төнә-, үртә-, һына-*) продуктив була, ә сифаттарҙан ҡылым яһағанда (*буша-, йылтыра-, төҙә-*) продуктив түгел; *-ай/-әй* аффиксы сифаттарҙан ҡылым яһағанда (*ҙурай-, еңеләй-, иркенәй-, киңәй-, күмәгәй-, матурай-, насарай-*) продуктив булһа, исемдәрҙән ҡылым яһағанда (*иҫәй-, көсәй-, соҡорай-*) продуктив булмай; *-ар/-р/-әр* аффиксы сифаттарҙан ҡылым яһағанда продуктив була (*ағар-, буҙар-, бүҫкәр-, иҫкер-, йоҡар-, ҡатыр-, йәшәр-, күгәр-*), ә исем-

дәрҙән ҡылым яһағанда продуктив түгел (*бәсәр-, ҡайғыр-*); *-се/-со, -сө/-сы* аффиксы исемдәрҙән исем яһағанда (*димсе, имсе, йоҡосо, йомошсо, өгөтсө, сихырсы, һунарсы*) продуктив булһа, ҡылымдарҙан исем яһағанда (*күҙәтсе, тамсы, теләнсе*) продуктив түгел.

Хәҙерге башҡорт телендә аффиксаль морфемалар (продуктив булғандары ла, продуктив булмағандары ла, йәки аҙ продуктив булғандары ла), ғәҙәттә, байтаҡ ҡына һүҙҙәргә ҡушылып, бик күп һүҙ йәки һүҙ формалары составына инә. Ундай морфемаларҙы регуляр (юғары регулярлыҡҡа эйә булған) тип иҫәпләү ҡабул ителгән. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге башҡорт телендә сикләнгән төркөм һүҙҙәргә генә ҡушыла алған аффиксаль морфемалар ҙа аҙ түгел. Улар, ғәҙәттә, регуляр булмаған (түбән регулярлыҡҡа эйә булған) тип ҡарала.

Ярҙамсы морфемаларҙың регулярлығын шулай билдәләү конкрет булмай. Аффикстарҙың регулярлығын һәм регуляр булмағанлығын һан яғынан түгел, ә сифат яғынан нигеҙләнгән айырмалыҡҡа, йәғни төрлө һүҙҙәрҙә йәки һүҙ формаларында ҡабатлана алыу һәләте булыу-булмауға, таянып билдәләүҙе дөрөҫөрәк һәм эҙмә-эҙлеклерәк тип иҫәпләргә кәрәк. Шулай итеп, төрлө һүҙҙәр йәки һүҙ формалары составында ҡабатлана алған, йәғни һис юғында ике һүҙҙә йәки һүҙ формаһында ҡабатлана алған аффиксаль морфемалар **регуляр** була. Төрлө һүҙҙәр йәки һүҙ формалары составында ҡабатлана алмаған, йәғни берҙән-бер, уникаль морфема һаналған, морфемаларҙы **регуляр булмаған** аффикстар тип һанарға кәрәк.

Хәҙерге башҡорт телендә аффикстарҙың күбеһе регуляр иҫәпләнә. Уларға продуктив һәм аҙ продуктив ярҙамсы морфемаларҙың барыһы ла һәм шулай уҡ продуктив булмағандарҙың ҡайһы берҙәре (мәҫәлән, һүҙ яһаусы *-ҙаҡ, -мес* аффикстары; билдәһеҙ киләсәк замандың барлыҡтағы беренсе зат берлек формаһын яһаусы *-ем/-ом/-өм/-ым* аффиксы) инә.

Регуляр булмаған аффикстар хәҙерге башҡорт телендә бик күп түгел. Уларҙың күбеһе һүҙ яһаусы морфемалар иҫәпләнә; мәҫәлән, исемдәрҙән исем яһаусы *-ай* (*ҡомай*), *-амыҡ* (*һаҙамыҡ*), *-анаҡ* (*һаҙанаҡ*), *-дәр* (*телдәр*), *-с* (*тирәс*), *-әс* (*көнәс*), ҡылымдарҙан исем яһаусы *-а* (*быуа*), *-алҡа* (*ҡуналҡа*), *-ҡалаҡ* (*ҡасҡалаҡ*), *-ҡыр* (*сапҡыр*), *-ләс* (*киртләс*), *-нә* (*бирнә*), сифаттарҙан исем яһаусы *-һым* (*аҡһым*) *аффикстары*.

Продуктив булмаған һүҙ яһаусы аффикстар араһында йыш ҡына **«тере»** һәм **«үле»** морфемалар айырыла.

Телдең хәҙерге торошонда һүҙ составынан иркен айырыла торған морфемалар «тере» иҫәпләнә. Мәҫәлән, *ҡурҡаҡ, өркәк* һүҙҙәре составындағы *-аҡ, -әк*; *күҙелдерек, түшелдерек* һүҙҙәре

составындағы *-елдерек*; *йәйлә, ҡышла* һүҙҙәре составындағы *-ла/-лә*; *йомошсо, өгөтсө, хеҙмәтсе, һунарсы* һүҙҙәре составындағы *-се/-со, -сө/-сы*; *бармаҡсын, колаҡсын* һүҙҙәре составындағы *-сын* аффикстары шундайҙарҙан.

Телдә яңы һүҙҙәр яһауҙан туҡтаған, һөйләшеүселәргә һүҙ өлөшө булып тойолмаған һәм һүҙ составынан махсус эҙләнеүҙәрҙән һуң этимологик күҙлектән генә айырыла торған аффиксаль морфемаларҙы «үле» тип йөрөтәләр. Уларға, мәҫәлән, *ботаҡ, ебәк, ишәк, яңаҡ* һүҙҙәре составындағы *-аҡ/-әк*; *бейек, йомшаҡ, йыраҡ, оҙаҡ* һүҙҙәре составындағы *-к/ҡ*; *айран, бесән, буран, кәбән, ҡабан* һүҙҙәре составындағы *-ан/-ән* аффикстары ҡарай.

Хәҙерге башҡорт теленең төрлө һүҙҙәре составында этимологик яҡтан айырыла торған «үле» аффикстар синхрон күҙлектән ярҙамсы морфемалар иҫәпләнмәйенсә, ярашлы тамыр морфемалар составына инә.

### *Морфемаларҙың вариантлығы*

Телдең иң бәләкәй мәғәнәле берәмектәре булараҡ, морфемалар ҡулланылышта үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәттәрен, йәғни фонемалар составын, үҙгәртергә мөмкин. Бер үк морфема тамырҙарға (нигеҙҙәргә) йәки башҡа морфемаларға ҡушылып, төрлө морф, төрлө вариант (ысын морф варианты йәки алломорф) хәлендә сығыш яһарға мөмкин.

Морфемаларҙың төрҙәрен, төрлө үҙгәрештәрен морфема варианттары йәки морфтар тип атау ҡабул ителгән. Морф сифатында, ғәҙәттә, формаль яҡтан яҡын булған, йәғни фонемалар составы буйынса бер ни тиклем тап килгән һәм уртаҡ, берҙәй мәғәнәһе булған морфема элементтары атала. Морфтарҙың фонемалары составында булған бер ни тиклем оҡшашлыҡ морфтарҙың формаль яҡынлығы тип атала. Шул уҡ ваҡытта фонемалар составы буйынса оҡшаш морфтарҙа тура килмәгән айырым фонемалар булырға, морфтарҙың береһе эсендә ниндәйҙер бер фонема булмаҫҡа мөмкин: *кип-* һәм *киб-ен-*, *күк* һәм *күг-әр-*, *күп-* һәм *күб-ек*, *ҡаҡ-* һәм *ҡағ-ыш*, *мауыҡ-* һәм *мауығ-ыу*, *ныҡ* һәм *ныг-ыу*; *бөрөш-* һәм *бөрш-әй-*, *бүрек* һәм *бүрк-е*, *көйөш* һәм *көйш-ә-*, *халыҡ* һәм *халҡ-ы*.

Шулай итеп, үҙ-ара бәйләнешле булған морфема һәм морф, йәки морфема варианты төшөнсәләре айырыла. Морфема тип ҡайһы бер осраҡтарҙа төрлө матди кәүҙәләнеш алған, фонемалар составы төрлө булған дөйөмләштерелгән тел берәмегенә әйтәләр. Морф (йәки морфема варианты) тип теге йәки был

морфеманың конкрет ҡулланылыш шарттарында билдәле матди кәүҙәләнеш алған конкрет вәкиле, репрезентанты атала.

Бер үк морфеманың тарихтан килгән варианттарын алломорфтар тип йөрөтәләр. Флектив телдәрҙә алломорфтар (морфтың борондан килә торған варианттары) бик йыш осрай һәм улар айырым өйрәнелә. Агглютинатив төҙөлөшкә ҡараған төрки телдәрҙә, мәҫәлән, башҡорт телендә, алломорфтар аҙ күҙәтелә. Шуға күрә уларҙы айырым алып өйрәнеп тормайҙар, морфтың хәҙерге фонетик ҡанунлылыҡтарға нигеҙләнеп яһалған фонетик төрҙәре менән бергә ҡарайҙар.

Башҡорт телендә осраған алломорфтарға миҫалдар: *арҡыры – арҡыр-саҡ, борош – борш-ай-, бөкөс – бөкс-әй-, бүрек – бүрк-е, бәгер – бәгр-ем, ғилем – ғилм-и, ирек – ирк-е, кесе – кес-кәй, күрек – күрк-е, ҡыйыш – ҡыйш-ай-, ҡыҙыл – ҡыҙ-ар-, оҙон – оҙ-ай-, рәсем – рәсм-и, салыш – салш-ай-, халыҡ – халҡ-ы, һин – һи-нең, әсе – әс-келт*. Былар – тамыр алломорфтар.

Аффиксаль алломорфтар ҙа була: 1) киләсәк заман алломорфтары – *-р, -ҫ*: *йөрө-р, йөрөмә-ҫ*; 2) йөкмәтеү йүнәлеше алломорфтары – *-геҙ, -ҙер*: *тей-геҙ, тей-ҙер*; 3) беренсе зат алломорфтары – *-м, -мын*: *бара-м, бара-мын*.

Үҙҙәре ялғанып килгән тамыр (нигеҙ) составындағы фонемаларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, яңғыраулығына-һаңғыраулығына, иренләшкәнлегенә-иренләшмәгәнлегенә ҡарап, башҡорт телендә бөтә типтағы аффикстар ҙа төрлө фонологик варианттарҙа киләләр. Бындай варианттарҙың һаны бер парҙан һигеҙ парға тиклем етеүе мөмкин[1].

Юҡлыҡ категорияһы аффиксы *-ма/-мә* ике вариантта килә: *һал-ма, кил-мә*. Һүҙ яһаусы *-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк* аффиксының дүрт варианты бар: *саф-лыҡ, гүзәл-лек, һомғол-лоҡ, һөйкөмлөлөк*. Һан категорияһы күрһәткесе аффикстарҙың һигеҙ төрлө варианты менән белдерелә: *-лар/-ләр, -дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр, -тар/-тәр*: *бала-лар, әсә-ләр, туған-дар, ейән-дәр, атай-ҙар, өләсәй-ҙәр, дуҫ-тар, иптәш-тәр*. Бер үк ваҡытта билдәле төшөм килеш күрһәткестәре һәм хәбәр һөйкәлешенең үткән заман формаһы күрһәткестәре функцияларын башҡарып йөрөүсе омонимик аффикстар ун алты вариантта килә ала: *-ды/-де, -до/-дө, -ҙы/-ҙе, -ҙо/-ҙө, -ны/-не, -но/-нө, -ты/-те, -то/-тө*: а) *солан-ды, өҫтәл-де, ҡором-до, өйкөм-дө, баҙ-ҙы, кейеҙ-ҙе, соҡор-ҙо, сөй-ҙө, баҡса-ны, кәртә-не, борғо-но, өкө-нө, тупраҡ-ты, сүп-те, солоҡ-то, өрөк-тө*; б) *һын-ды, эйел-де, борол-до, өйөл-дө, ҡаҙ-ҙы, иҙ-ҙе,*

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 22-се б.

*ҡой-ҙо, сөй-ҙө, ары-ны, илә-не, ҡоро-но, төкө-нө, баҫ-ты, һелкет-те, ҡорот-то, һөрт-тө.*

Аффикстарҙың фонетик төрҙәре, ҡағиҙә булараҡ, сингармоник ассимиляция һөҙөмтәһендә яһала: *-дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр, -лар/-ләр, -тар/-тәр; -ырға/-ергә, -рға/-ргә; -лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк; -сы/-се, -со/-сө; -лы/-ле, -ло/-лө; -һыҙ/-һеҙ, -һоҙ/-һөҙ; -ығ/-ек, -оҡ/-өк, -ҡ/-к; -ым/-ем, -ом/-өм, -м; -ыш/-еш, -ош/-өш, -ш; -ын/-ен, -он/-өн, -н* һ. б.

Фонетик варианттар ҡайһы бер киҫәксәләрҙә лә күҙәтелә: *да, дә, ҙа, ҙә, ла, лә, та, тә; уҡ, үк, ғына, генә, ҡына, кенә; һана, һәнә; -дыр/-дер, -дор/-дөр, -ҙыр/-ҙер, -ҙор/-ҙөр, -лыр/-лер, -лор/-лөр, -тыр/-тер, -тор/-төр* һ. б.

Хәҙерге башҡорт телендә морфемаларҙың үҙгәреше (вариантлашыуы) төрлө тел күренештәре менән, атап әйткәндә, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы, йүгерек һуҙынҡыларҙың төшөп ҡалыуы йәки килеп сығыуы, ҡайһы бер морфемаларҙың ҡыҫҡарыуы һәм башҡалар менән бәйләнгән.

Тамыр морфемаларҙың вариантлығы күп осраҡта [ҡ], [к], [п] тартынҡы өндәренең [ғ], [г], [б] тартынҡы өндәре менән сиратлашыуына бәйле: *ҡалаҡ, ҡалағ-ы; көрәк, көрәг-е; китап, китаб-ы.*

Тамыр морфемаларҙың үҙгәреше (вариантлашыуы) улар аҙағындағы йәки уртаһындағы йүгерек һуҙынҡылар төшөп ҡалғанда йәки килеп сыҡҡанда ла булырға мөмкин. Сағыштырығыҙ:

1) *арҡыры, арҡыр-саҡ; кесе, кес-кәй; борош, борш-ай-; бөкөс, бөкс-әй-; бүрек, бүрк-е; бәғер, бәғр-ем; ғилем, ғилм-и; ирек, ирк-е; күрек, күрк-е; ҡыйыш, ҡыйш-ай-; рәсем, рәсм-и; салыш, салш-ай-; халыҡ, халҡ-ы;*

2) *йомро, йомор-саҡ, йомор-тҡа; кәкре, кәкер-сәк; һары, һарғ-ай-.*

Ҡайһы бер тамыр морфемаларҙың ҡыҫҡарыуы һөҙөмтәһендә лә үҙгәреш барлыҡҡа килә. Мәҫәлән: *ҡыҙыл, ҡыҙ-ар.*

Ярҙамсы морфемаларҙың үҙгәреше (вариантлашыуы) хәҙерге башҡорт телендә йыш осрай. Ул күпселек осраҡта ярҙамсы морфемаларҙан алда килгән тамыр морфемаларҙың йәки икенсе бер ярҙамсы морфемаларҙың (һуҙынҡығамы, һаңғырау тартынҡығамы әллә яңғырау тартынҡығамы) тамамланыуына һәм шул уҡ тамыр йәки ярҙамсы морфемаларҙағы һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына йәки нәҙеклегенә, иренләшеүенә йәки иренләшмәүенә бәйле.

### *Һүҙ яһаусы аффикстарҙың вариантлығы*

Һүҙ яһаусы аффикстарҙың варианттары барлыҡҡа килеү тамыр морфемаларҙағы һуҙынҡының (һуҙынҡыларҙың) ҡалынлығына йәки нәҙеклегенә генә бәйләнһә, һүҙ яһаусы аффикстар ике вариантта килә һәм үҙҙәрендәге һуҙынҡыларҙың ҡалынлығы йәки нәҙеклеге менән айырыла. Мәҫәлән, исем яһаусы *-ма/-мә* (*атла-ма, бул-мә*), *-са/-сә* (*муйын-са, күкрәк-сә*), *-сай/-сәй* (*тоҡ-сай, түбә-сәй*), *-саҡ/-сәк* (*уйын-саҡ, ир-сәк*), сифат яһаусы *-аҡ/-әк* (*баҡыр-аҡ, өрк-әк*), ҡылым яһаусы *-а/-ә* (*ат-а-, тел-ә-*), *-ай/-әй* (*соҡор-ай-, иҫ-әй-*), *-лан/-лән* (*бала-лан-, ен-лән-*), *-лаш/-ләш* (*ғау-ға-лаш-, бәхәс-ләш-*) аффикстары шундайҙарҙан иҫәпләнә.

Һүҙ яһаусы аффикстарҙың варианттары (морфтары) барлыҡҡа килеү тамыр морфемаларҙағы һуҙынҡының (һуҙынҡыларҙың) ҡалынлығына йәки нәҙеклегенә һәм иренләшеүенә йәки иренләшмәүенә бәйләнһә, һүҙ яһаусы аффикстар дүрт вариантта (дүрт төрлө морфта) килә һәм үҙҙәрендәге һуҙынҡыларҙың ҡалынлығы-нәҙеклеге һәм иренләшеүе-иренләшмәүе менән айырыла. Мәҫәлән, исем яһаусы *-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк* (*балан-лыҡ, бесән-лек, болон-лоҡ, бөйөр-лөк*), *-сы/-се, -со/-сө* (*ау-сы, дим-се, йомош-со, өгөт-сө*) һәм сифат яһаусы *-лы/-ле, -ло/-лө* (*ат-лы, ек-ле, ос-ло, йөк-лө*), *-һыҙ/-һеҙ, -һоҙ/-һөҙ* (*оят-һыҙ, ғәм-һеҙ, моң-һоҙ, көй-һөҙ*) аффикстары шундайҙарҙан.

Әгәр һүҙ яһаусы аффикстарҙың вариантлығы тамыр морфемаларҙың һуҙынҡыға йәки тартынҡыға тамамланыуына һәм шул уҡ ваҡытта тамыр морфемаларҙағы һуҙынҡының (һуҙынҡыларҙың) ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә бәйләнһә, улар биш йәки алты вариантта килә һәм үҙҙәрендәге һуҙынҡыларҙың булыу-булмауы һәм шул уҡ һуҙынҡыларҙың ҡалынлығы-нәҙеклеге, иренләшеүе-иренләшмәүе менән айырыла: исем яһаусы *-ыҡ/-ек, -оҡ/-өк, -ҡ/-к* (*һыҙ-ыҡ, тиш-ек, бойор-оҡ, көй-өк, алда-ҡ, терә-к*), *-ым/-ем, -ом/-өм, -м* (*баҫ-ым, бел-ем, йот-ом, төш-өм, бәйлә-м*), *-ыш/-еш, -ош/-өш, -ш* (*ас-ыш, үҫ-еш, ос-ош, төҙөл-өш, суке-ш*), ҡылым яһаусы *-ын/-ен, -он/-өн, -н* (*ағар-ын-, екер-ен-, бош-он-, һөрт-өн-, бысра-н-*) аффикстары шундайҙарҙан иҫәпләнә.

Һүҙ яһаусы аффикстарҙың вариантлығы тамырҙағы һуҙынҡының (һуҙынҡыларҙың) ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм шулай уҡ тамыр аҙағындағы өндөң һуҙынҡымы-тартынҡымы булыуына, һуҙынҡы булһа – ҡалынмы-нәҙекме, иренләшкәнме-иренләшмәгәнме, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы булыуына бәйләнһә, улар һигеҙәр вариантта (һигеҙ төрлө морфта) килә һәм үҙҙәрендәге һуҙынҡыларҙың ҡалынлығы-нәҙеклеге, иренләшкәнлеге-иренләшмәгәнлеге, тар-

тынҡыларҙың яңғыраулығы-һаңғыраулығы менән айырыла. Исем яһаусы *-ҡы/-ке, -ҡо/-кө, -ғы/-ге, -ғо/-гө* (*тарт-ҡы, сәнс-ке, ойот-ҡо, көл-кө, юн-ғы, кир-ге, той-ғо, һөҙ-гө*) һәм *-ҡыс/-кес, -ҡос/-көс, -ғыс/-гес, -ғос/-гөс* (*ас-ҡыс, киҫ-кес, ос-ҡос, һөрт-көс, ал-ғыс, бүл-гес, бор-ғос, бөтөр-гөс*) аффикстары шундайҙарға ҡарай. Һүҙ яһаусы морфема варианттары (морфтар), күренеүенсә, бер-береһенән һуҙынҡылар менән генә түгел, морфема баштарындағы тартынҡылар менән дә айырыла.

Һүҙ яһаусы морфема варианттары морфема аҙаҡтарындағы тартынҡылар менән дә айырыла. [ҡ], [к] өндәренә тамамланған һүҙ яһаусы аффикстарҙан һуң һуҙынҡыларҙан ғына торған йәки һуҙынҡылар менән башланған форма яһаусы аффикстар килһә, был өндәр [ғ], [г] өндәре менән сиратлашып, яңы морфема варианттарын (яңы морфтар) барлыҡҡа килтерә. Шундай юл менән *-аҡ/-әк* урынында *-ағ/-әг* аффиксаль морфтар (*быс-аҡ, быс-ағ-ы, киҫ-әк, киҫ-әг-е*), *-ыҡ/-ек, -оҡ/-өк, -ҡ/-к* урынында *-ығ/-ег, -оғ/-өг, -ғ/-г* аффиксаль морфтар (*һыҙ-ыҡ, һыҙ-ығ-ы; тиш-ек, тиш-ег-е; бойор-оҡ, бойор-оғ-о; көй-өк, көй-өг-ө; осра-ҡ, осра-ғ-ы; сере-к, сере-г-е*), *-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк* урынында *-лығ/-лег, -лоғ/-лөг* аффиксаль морфтар (*һаҙ-лыҡ, һаҙ-лығ-ы; бесән-лек, бесән-лег-е; болон-лоҡ, болон-лоғ-о; көл-лөк, көл-лөг-ө; баҫ-лыҡ-ҡан, баҫ-лығ-ыу; етлек-кән, ет-лег-еү; тот-лоҡ-ҡан, тот-лоғ-оу; һөр-лөк-кән, һөр-лөг-өү*), *-маҡ/-мәк* урынында *-мағ/-мәг* (*ҡой-маҡ, ҡой-мағ-ы, ик-мәк, ик-мәг-е*) барлыҡҡа килгән. Шулай итеп, һүҙ яһаусы аффикстарҙың *-аҡ/-әк; -ыҡ/-ек, -оҡ/-өк, -ҡ/-к; -лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк; -маҡ/-мәк* варианттары менән бер рәттән, *-ағ/-әг, -ығ/-ег, -оғ/-өг, -ғ/-г; -лығ/-лег, -лоҡ/-лөг, -мағ/-мәг* варианттары ла бар.

### *Форма яһаусы аффикстарҙың вариантлығы*

Форма яһаусы аффикстарҙың вариантлығы ла сингармонизм законына бәйле. Уларҙың варианттары икенән алып ун алтыға етә.

Хәбәр һөйкәлешенең билдәле киләсәк заман 1) (*-асаҡ, -әсәк, -ясаҡ, -йәсәк*), сифат ҡылымдың билдәле киләсәк заман 2) (*-асаҡ, -әсәк, -ясаҡ, -йәсәк*) һәм тейешле киләсәк заман 3) (*-аһы, -әһе, -йһы, -йһе*) формаларын яһаусы аффикстар дүртәр вариантта йөрөй. Уның шулай булыуы тамырҙарҙағы (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығы-нәҙеклегенән һәм шул ҡылым тамырҙарының (нигеҙҙәренең) һуҙынҡыға йәки тартынҡыға тамамланыуынан килә. Мәҫәлән:

1) *утын ян-асаҡ, ҡоштар кил-әсәк, кәбән ҡола-ясаҡ, машина йөрө-йәсәк*;

2) *ян-асаҡ утын, кил-әсәк ҡоштар, ҡола-ясаҡ кәбән, йөрөйәсәк машина*;

3) *яҙ-аһы хат, бир-әһе аҡса, ҡара-йһы фильм, түлә-йһе бурыс.*

Хәбәр һөйкәлешенең шаһитһыҙ үткән заман (1), сифат ҡылымдың үткән заман (2), рәүеш /хәл/ ҡылымдың өсөнсө (3), дүртенсе (4), бишенсе (5) формаларын яһаусы аффикстар дүртәр вариантта килә. Уларҙың вариантлығы тамырҙарының (нигеҙҙәренең) һуҙынҡығамы-тартынҡығамы тамамланыуына, тамырҙарҙағы (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, тамырҙар (нигеҙҙәр) һуңындағы тартынҡыларҙың яңғыраулығына-һаңғыраулығына бәйле. Мәҫәлән:

1) *һалдат ҡайт-ҡан, аш беш-кән, кәбән ҡола-ған, ҡоштар кил-гән*;

2) *ҡайт-ҡан һалдат, беш-кән аш, ҡола-ған кәбән, кил-гән ҡоштар*;

3) *ҡайт-ҡас, беш-кәс, ҡола-ғас, кил-гәс*;

4) *ҡайт-ҡансы, беш-кәнсе, ҡола-ғансы, кил-гәнсе*;

5) *ҡайт-ҡанса, беш-кәнсә, ҡола-ғанса, кил-гәнсә.*

Ҡайтым йүнәлеше 1) (*-ын, -ен, -он, -өн, -н*), уртаҡлыҡ йүнәлеше 2) (*-ыш, -еш, -ош, -өш, -ш*), хәбәр һөйкәлешенең билдәһеҙ киләсәк заман 3) (*-ыр, -ер, -ор, -өр, -р*), сифат ҡылымдың билдәһеҙ киләсәк заман 4) (*-ыр/-ер, -ор/-өр, -р*), рәүеш (хәл) ҡылымдың беренсе 5) (*-ып/-еп, -оп/-өп, -п*) формаларын яһаусы аффиксаль морфемалар бишәр вариантта килә. Был хәл тамырҙарҙағы (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә, тамырҙарҙың (нигеҙҙәрҙең) һуҙынҡығамы-тартынҡығамы тамамланыуына, тартынҡыға тамамланһа – яңғырау тартынҡығамы, һаңғырау тартынҡығамы тамамланыуына бәйле. Мәҫәлән:

1) *ҡыр-ын, кей-ен, тот-он, һөрт-өн, биҙә-н*;

2) *ҡаҙ-ыш, теҙ-еш, боҙ-ош, һөрт-өш, ута-ш*;

3) *ҡоштар ҡайт-ыр, ҡоштар кил-ер, ҡоштар ос-ор, ҡоштар төш-өр, ҡоштар һайра-р*;

4) *ҡайт-ыр ҡоштар, кил-ер ҡоштар, ос-ор ҡоштар, төш-өр ҡоштар, һайра-р ҡоштар*;

5) *ал-ып, бүл-еп, тор-оп, көл-өп, аша-п.*

Инфинитив 1) (*-ырға, -ергә, -орға, -өргә, -рға, -ргә*), сифаттарҙың сағыштырыу дәрәжәһе 2) (*-ыраҡ, -ерәк, -ораҡ, -өрәк, -раҡ, -рәк*), исем ҡылым 3) (*-ыу, -еү, -оу, -өү, -у, -ү*), сифат ҡылымдың хәҙерге заман 4) (*-ыусы, -еүсе, -оусы, -өүсе, -усы, -үсе*) формаларын яһаусы аффиксаль морфемалар алтышар вариантта килә. Был хәл

тамырҙарҙағы (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм шул уҡ тамырҙар (нигеҙҙәр) аҙағындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы икәнлегенә бәйле. Мәҫәлән:

1) *ҡайт-ырға, кил-ергә, от-орға, көл-өргә, уҡы-рға, төҙө-ргә*;

2) *ҙур-ыраҡ ҡамыт, бәләкәй-ерәк һауыт, оҙон-ораҡ таяҡ, төҙ-өрәк ҡыуал, тура-раҡ юл, беше-рәк ағас*;

3) *ҡайт-ыу, кил-еү, от-оу, көл-өү, уҡы-у, төҙө-ү*;

4) *ҡайт-ыусы һалдат, кил-еүсе ҡатын, от-оусы кеше, көл-өүсе ҡыҙ, уҡы-усы ҡыҙ, төҙө-үсе ир.*

Күплек формаһын яһаусы аффиксаль морфема һигеҙ морфлы була: *-дар, -дәр, -ҙар, -ҙәр, -лар, -ләр, -тар, -тәр*. Бындай морфеманың һигеҙ вариантта килеүе тамырҙарҙағы (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡының (һуҙынҡыларҙың) ҡалынлыгына-нәҙеклегенә һәм шул тамыр (нигеҙ) аҙаҡтарындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуына бәйле. Мәҫәлән:

1) *таж-дар, таң-дар, указ-дар, урман-дар, урам-дар, юл-дар*;

2) *бәз-дәр, ил-дәр, миң-дәр, төн-дәр, шәм-дәр*;

3) *бай-ҙар, рухани-ҙар, тау-ҙар, шар-ҙар, яҙ-ҙар*;

4) *вәхши-ҙәр, йәй-ҙәр, күҙ-ҙәр, сиркәү-ҙәр*;

5) *бола-лар, ҡошсо-лар, мышы-лар, оя-лар*;

6) *бәке-ләр, өкө-ләр, әсә-ләр*;

7) *ағас-тар, ат-тар, балаҫ-тар, картуф-тар, монах-тар, плащ-тар, толоп-тар, шаһ-тар, ураҡ-тар, штык-тар, яҡташ-тар*;

8) *бит-тәр, көрәк-тәр, кәҫ-тәр, мәктәп-тәр, сәс-тәр, хәреф-тәр, шәйех-тәр, эш-тәр.*

Бер ижекле ҡылымдарҙан йөкмәтеү йүнәлеше формаһын яһаусы аффиксаль морфема ун ике вариантта килә. Уның ошо рәүешле килеүе ошо морфема ҡушылған тамырҙарҙағы һуҙынҡының ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм шул уҡ тамыр аҙаҡтарындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы булыуына, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуына бәйләнә. Мәҫәлән: 1) *ал-дыр-, уң-дыр-, юн-дыр-*; 2) *ел-дер-, им-дер-, һең-дер-*; 3) *йом-дор-, тон-дор-*; 4) *көл-дөр-, өң-дөр-*; 5) *аҙ-ҙыр-, уй-ҙыр-, ыуҙыр-, яр-ҙыр-*; 6) *иҙ-ҙер-, үр-ҙер-, эй-ҙер-*; 7) *боҙ-ҙор-, ҡой-ҙор-, һөр-ҙөр-*; 8) *йөҙ-ҙөр-, көй-ҙөр-, өр-ҙөр-*; 9) *ас-тыр-, аҫ-тыр-, йыш-тыр-, яҡ-тыр-, яп-тыр-*; 10) *ек-тер-, иш-тер-, үп-тер-, үҫ-тер-, эс-тер-, әйт-тер-*; 11) *ҡоҫ-тор-, һөс-төр, от-тор-, тот-тор-*; 12) *бөк-төр-, көт-төр-.*

Хәбәр һөйкәлешенең шаһитлы үткән заман формаһын яһаусы аффиксаль морфема ун алты вариантта (морфта) килә: *-ды, -де,*

*-до, -дө, -ҙы, -ҙе, -ҙо, -ҙө, -ны, -не, -но, -нө, -ты, -те, -то, -тө.* Был морфеманың ун алты вариантта йөрөүе ошо аффикс ҡушылған ҡылым тамырҙарындағы йәки нигеҙҙәрендәге һуҙынҡының йәки һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм шул тамыр йәки нигеҙ аҙаҡтарындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы булыуына, һуҙынҡы булһа – иренләшеүенә-иренләшмәүенә, тартынҡы булһа, яңғыраумы-һаңғыраумы булыуына, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуына бәйләнә.

[л], [м], [н], [ң] яңғырау тартынҡыларына тамамланған ҡылым тамырҙары йәки нигеҙҙәре:

1) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-ды*) ҡушыла;

2) иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-де*);

3) иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-до*);

4) иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-дө*) ;

[ў], [ҙ], [й], [р] яңғырау тартынҡыларына тамамланған ҡылым тамырҙары йәки нигеҙҙәре:

5) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-ҙы*) ҡушыла;

6) иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-ҙе*);

7) иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-ҙо*);

8) иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-ҙө*) ҡушыла;

һуҙынҡыларға тамамланған ҡылым тамырҙары йәки нигеҙҙәре:

9) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы өндәргә тамамланған ҡылым тамырҙарына йәки нигеҙҙәренә морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-ны*) ҡушыла;

10) иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы өндәргә тамамланған ҡылым тамырҙарына йәки нигеҙҙәренә – морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-не*);

11) иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы өндәргә тамамланған ҡылым тамырҙарына йәки нигеҙҙәренә – морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-но*);

12) иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы өндәргә тамамланған ҡылым тамырҙарына йәки нигеҙҙәренә – морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-нө*) ҡушыла;

[к], [ҡ], [п], [с], [ҫ], [т], [ш] һаңғырау тартынҡыларына тамамланған ҡалын тамырҙары йәки нигеҙҙәре:

13) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-ты*) ҡушыла;

14) иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-те*);

15) иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-то*);

16) иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-тө*) .

Мәҫәлән: 1) *ал-ды, уң-ды, шым-ды, ян-ды*; 2) *ең-де, им-де, ин-де, эл-де*; 3) *йом-до, отол-до, тон-до*; 4) *бөл-дө, өң-дө, төрөн-дө*; 5) *аҙ-ҙы, тыу-ҙы, уй-ҙы, ур-ҙы*; 6) *бир-ҙе, иҙ-ҙе, тей-ҙе*; 7) *боҙ-ҙо, бор-ҙо, той-ҙо*; 8) *өҙ-ҙө, өй-ҙө, һөр-ҙө*; 9) *буя-ны, ила-ны, уҡы-ны*; 10) *ебе-не, ти-не, үтә-не*; 11) *ойо-но*; 12) *өшө-нө*; 13) *баҫ-ты, ҡаҡ-ты, ҡас-ты, уп-ты, ят-ты*; 14) *ет-те, иҫ-те, үп-те, эс-те*; 15) *йоҡ-то, боҫ-то, ос-то, тот-то*; 16) *бөк-тө, көт-тө.*

### *Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың вариантлығы*

Хәҙерге башҡорт телендә һүҙ үҙгәртеүсе морфемаларҙың да вариантлығы сингармонизм законына бәйле. Уларҙың варианттары икенән алып ун етегә етә.

Эйәһе бер (*минең, һинең, уның*) йәки күп (*беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың*) булған күплектәге исемдәрҙән эйәлек категорияһының:

1) беренсе (*-ым, -ем; -ыбыҙ, -ебеҙ*),

2) икенсе (*-ың, -ең; -ығыҙ, -егеҙ*),

3) өсөнсө зат (*-ы, -е*) формаларын,

4) шарт (*-һа, -һә*) һәм

5) ниәт-маҡсат (*-маҡсы, -мәксе*) һөйкәлештәре формаларын яһаусы морфемалар икешәр вариантта килә. Был аффиксаль морфемаларҙың икешәр вариантта килеүе тамырҙағы (нигеҙҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә бәйле. Мәҫәлән:

1) *ат-ым, эш-ем*; *ат-ыбыҙ, эш-ебеҙ*;

2) *аттар-ым, эштәр-ем*; *аттар-ыбыҙ, эштәр-ебеҙ*;

3) *ат-ы, эш-е*; *аттар-ы, эштәр-е*;

4) *бар-һа, кил-һә*;

5) *бар-маҡсы, кил-мәксе.*

Эйәһе бер (минең, һинең, уның) булған берлектәге исемдәрҙән эйәлек категорияһының:

1) беренсе (*-ым/-ем, -ом/-өм, -м*);

2) икенсе (*-ың/-ең, -оң/-өң, -ң*) зат формаларын яһаусы аффикстар бишәр вариантта килә. Был хәл тамырҙарҙағы (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм тамырҙарҙың (нигеҙҙәрҙең) тартынҡығамы-һуҙынҡығамы тамамланыуына бәйләнгән. Мәҫәлән:

1) *мал-ым, эт-ем, бот-ом, йөҙ-өм, күҙгө-м*;

2) *мал-ың, эт-ең, бот-оң, йөҙ-өң, күҙгө-ң.*

Эйәһе күп (*беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың*) булған берлектәге исемдәрҙән эйәлек категорияһының 1) беренсе (*-ыбыҙ/-ебеҙ, -обоҙ/-өбөҙ, -быҙ/-беҙ, -боҙ/-бөҙ*), 2) икенсе (*-ығыҙ/-егеҙ, -огоҙ/-өгөҙ, -ғыҙ/-геҙ, -ғоҙ/-гөҙ*), эйәһе күп һәм бер булған берлектәге исемдәрҙән эйәлек категорияһының 3) өсөнсө (*-ы/-е, -о/-ө, -һы/-һе, -һо/-һө*) зат формалары яһаусы морфемалар һигеҙәр вариантта килә. Был ике тамырҙағы (нигеҙҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалын йәки нәҙек, иренләшкән йәки иренләшмәгән булыуы, тамырҙарҙың (нигеҙҙәрҙең) тартынҡығамы әллә һуҙынҡығамы тамамланыуына бәйле. Мәҫәлән:

1) *аш-ыбыҙ, эш-ебеҙ, он-обоҙ, өй-өбөҙ, оя-быҙ, әнә-беҙ, һоҫҡо-боҙ, һөлгө-бөҙ*;

2) *аш-ығыҙ, эш-егеҙ, он-огоҙ, өй-өгөҙ, оя-ғыҙ, әнә-геҙ, һоҫҡо-ғоҙ, һөлгө-гөҙ*;

3) *аш-ы, эш-е, он-о, өй-ө, оя-һы, әнә-һе, һоҫҡо-һо, һөлгө-һө.*

Хәбәр һөйкәлешендәге шаһитһыҙ үткән заман һәм билдәле киләсәк заман формаларындағы ҡылымдарҙан берлектәге һәм күплектәге беренсе (*-мын, -мен*; *-быҙ, -беҙ*) һәм икенсе (*-һың, -һең*; *-һығыҙ, -һегеҙ*) зат, шарт һөйкәлешендә торған ҡылымдарҙан күплектәге беренсе (*-ҡ, -к*) һәм икенсе (*-ғыҙ, -геҙ*), хәбәр һөйкәлешендәге шаһитлы үткән заман формалы ҡылымдарҙың күплектәге беренсе (*-ҡ, -к*) зат формаларын яһаусы морфемалар икешәр вариантта килә. Был хәл уларҙан алда килгән форма

яһаусы морфема вариантының ҡалын йәки нәҙек һуҙынҡылы булыуынан тора: форма яһаусы аффикс варианты ҡалын һуҙынҡылы булһа – морфеманың ҡалын һуҙынҡылы морфы, нәҙек булһа – нәҙек һуҙынҡылыһы ҡушыла. Мәҫәлән:

| | | | |
|---|---|---|---|
| *мин* | *йыҡҡан-мын* | *беҙ* | *йыҡҡан-быҙ* |
| | *теккән-мен* | | *теккән-беҙ* |
| | *алған-мын* | | *алған-быҙ* |
| | *ингән-мен* | | *ингән-беҙ* |
| | *уҡыған-мын* | | *уҡыған-быҙ* |
| | *иләгән-мен* | | *иләгән-беҙ* |
| *һин* | *йыҡҡан-һың* | *һеҙ* | *йыҡҡан-һығыҙ* |
| | *теккән-һең* | | *теккән-һегеҙ* |
| | *алған-һың* | | *алған-һығыҙ* |
| | *ингән-һең* | | *ингән-һегеҙ* |
| | *уҡыған-һың* | | *уҡыған-һығыҙ* |
| | *иләгән-һең* | | *иләгән-һегеҙ* |
| *беҙ* | *алһа-ҡ* | *һеҙ* | *алһа-ғыҙ* |
| | *китһә-к* | | *китһә-геҙ* |
| | *яһаһа-ҡ* | | *яһаһа-ғыҙ* |
| | *үтһә-к* | | *үтәһә-геҙ* |

Хәбәрлек категорияһының, хәбәр һөйкәлешендәге хәҙерге һәм билдәһеҙ киләсәк замандарҙың берлектәге һәм күплектәге беренсе (*-мын, -мен, -мон, -мөн*; *-быҙ, -беҙ, -боҙ, -бөҙ*) һәм икенсе (*-һың, -һең, -һоң, -һөң*; *-һығыҙ, -һегеҙ, -һоғоҙ, -һөгөҙ*) зат формаларын яһаусы морфемалар дүртәр вариантта килә. Был хәл ошо морфемалар ҡушылған һүҙ тамырҙарындағы (нигеҙҙәрендәге) һуҙынҡының йәки һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә һәм иренләшеүенә-иренләшмәүенә бәйле. Мәҫәлән:

| | | | |
|---|---|---|---|
| *мин* | *уҡытыусы-мын* | *беҙ* | *уҡытыусы-быҙ* |
| | *эшсе-мен* | | *эшсе-беҙ* |
| | *ҡошсо-мон* | | *ҡошсо-боҙ* |
| | *һөтсө-мөн* | | *һөтсө-бөҙ* |
| *һин* | *уҡытыусы-һың* | *һеҙ* | *уҡытыусы-һығыҙ* |
| | *эшсе-һең* | | *эшсе-һегеҙ* |
| | *ҡошсо-һоң* | | *ҡошсо-һоғоҙ* |
| | *һөтсө-һөң* | | *һөтсө-һөгөҙ* |

Бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың өсөнсө зат формаһын яһаусы морфема дүрт вариантта (*-һын, -һен, -һон, -һөн*) килә. Был хәл ошо морфема ялғанған ҡылым тамырҙарындағы (нигеҙҙәрендәге) һуҙынҡының (һуҙынҡыларҙың) ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә бәйле. Мәҫәлән:

*ул* *ая-һын, бар-һын, ила-һын, юн-һын,*
*ек-һен, ең-һен, кил-һен, эл-һен,*
*йом-һон, ҡой-һон, ос-һон, тон-һон,*
*көй-һөн, көт-һөн, өҙ-һөн, өр-һөн.*

Хәбәр һөйкәлешендәге хәҙерге замандың берлектәге беренсе зат формаһы тағы бер төрлө морфема менән яһала (уның беренсе төрө тураһында алда һүҙ булғайны инде). Ул биш вариантта килә: *-ым, -ем, -ом, -өм, -м*. Был морфеманың шулай биш вариантта килеүе хәҙерге заман формаһындағы ҡылым тамырҙарындағы (нигеҙҙәрендәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшкәнлегенә-иренләшмәгәнлегенә һәм хәҙерге заман формаһын яһаусы аффиксаль морфема варианттарының ниндәй өнгә (һуҙынҡығамы-тартынҡығамы) тамамланыуынан килә. Мәҫәлән:

| | | |
|---|---|---|
| *мин* | *уҡый-ым* | *йөрөй-өм* |
| | *эшләй-ем* | *бара-м* |
| | *борсой-ом* | *килә-м* |

Бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың күплектәге икенсе зат формаһы һигеҙ вариантта (*-ғыҙ, -геҙ, -ғоҙ, -гөҙ, -ығыҙ, -егеҙ, -оғоҙ, -өгөҙ*) килә. Был хәл ошо морфема ҡушылған ҡылым тамырҙарындағы йәки нигеҙҙәрендәге һуҙынҡының йәки һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм шул тамыр йәки нигеҙ аҙаҡтарындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы булыуына бәйле. Мәҫәлән:

*һеҙ* *буя-ғыҙ, ила-ғыҙ, уҡы-ғыҙ, ута-ғыҙ,*
*бейе-геҙ, илә-геҙ, эҙлә-геҙ, әрсе-геҙ,*
*борсо-ғоҙ, йонсо-ғоҙ, оло-ғоҙ, соҡо-ғоҙ,*
*йөрө-гөҙ, көргө-гөҙ, төҙө-гөҙ, төпсө-гөҙ.*

Сығанаҡ килеш формаһын яһаусы морфема һигеҙ вариантта (*-дын, -дән, -ҙан, -ҙән, -нан, -нән, -тан, -тән*) килә. Бының шулай булыуы ошо морфема ҡушылған һүҙ тамырындағы йәки нигеҙендәге һуҙынҡының йәки һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә һәм шул тамыр йәки нигеҙ аҙаҡтарындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы булыуына, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуына бәйләнә:

1) [ж], [л], [м], [н], [ң] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙ тамырҙары йәки нигеҙҙәре ҡалын һуҙынҡылы булһа, ундағы морфеманың [д] яңғырау тартынҡы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-дан*), нәҙек һуҙынҡылы булһа – ундағы морфеманың [д] яңғырау тартынҡы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-дән*) ҡушыла: *ҡом-дан, таж-дан, таң-дан, указ-дан, һал-дан*; *гөл-дән, йән-дән, кенәз-дән, ләм-дән, миң-дән*;

2) [ғ], [ҙ], [й], [р] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙ тамырҙары йәки нигеҙҙәре ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-ҙан*), нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға

морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-ҙән*) ҡушыла: *айыу-ҙан, боҙ-ҙан, май-ҙан, яр-ҙан*; *иҙеү-ҙән, көҙ-ҙән, көй-ҙән, үр-ҙән*;

3) һүҙ тамырҙары йәки нигеҙҙәре ҡалын һуҙынҡыларға тамамланһа, ундағы морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-нан*), нәҙек һуҙынҡыларға тамамланһа – ундағы морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы варианты (*-нән*) ҡушыла: *ара-нан, оро-нан, оя-нан, яры-нан*; *өрө-нән, эне-нән*; *өрө-нән, эне-нән*;

4) һаңғырау тартынҡыларға тамамланған һүҙ тамырҙары йәки нигеҙҙәре ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы варианты (*-тан*), нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы варианты – (*-тән*) ҡушыла: *аш-тан, боҫ-тан, зат-тан, ожмах-тан, бит-тән, кис-тән, кук-тән, кәйеф-тән.*

Төбәү килеш формаһын яһаусы морфема биш вариантта (*-ҡа, -кә, -ка, -ға, -гә*) йөрөй. Уның шулай биш вариантта йөрөүе ошо морфема ҡушылған һүҙ тамырҙарындағы йәки нигеҙҙәрендәге һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә һәм шул тамыр йәки нигеҙ аҙағындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы, һуҙынҡы булһа – ҡалынмы-нәҙекме, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы булыуына бәйле:

1) әгәр һүҙ һаңғырау тартынҡыға тамамланып, тамыры йәки нигеҙе ҡалын һуҙынҡылы булһа – *-ҡа* морфы; нәҙек һуҙынҡылы булһа – *-кә* морфы, ә рус теленән үҙләштерелеп, *к, г* хәрефтәренә тамамланған булһа – *-ка* морфы ҡушыла: *аҫ-ҡа, ат-ҡа, аш-ҡа, картуф-ҡа, һаҡ-ҡа, ос-ҡа, тараф-ҡа, туп-ҡа, шаһ-ҡа*; *ит-кә, йөк-кә, өҫ-кә, суп-кә, үс-кә, хәүеф-кә, эш-кә*; *гудок-ка, залог-ка* [залокка], *каток-ка, кубок-ка, флаг-ка* [флакка];

2) әгәр һүҙ яңғырау тартынҡыларға йәки һуҙынҡыларға тамамланып, тамыры йәки нигеҙе ҡалын һуҙынҡылы булһа – *-ға* морфы, нәҙек һуҙынҡылы булһа – *-гә* морфы ҡушыла: *ай-ға, аң-ға, асыу-ға, даһи-ға, он-ға, оро-ға, оя-ға, таба-ға, таж-ға, ут-ҡа, ым-ға, яр-ға, яры-ға*; *ем-гә, өң-гә, ил-гә, кеше-гә, өй-гә, өрө-гә, эҙ-гә, эйә-гә.*

Эйәлек категорияһының берлектәге беренсе, икенсе һәм өсөнсө зат формаларында торған һүҙҙәрҙән төбәү килеш формаһы дүрт вариантлы (*-на, -нә, -а, -ә*) икенсе бер морфема менән яһала:

1) берлектәге өсөнсө зат эйәлек аффикслы һүҙҙең тамыры (нигеҙе) ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға ҡалын һуҙынҡылы *-ны* морфы, нәҙек һуҙынҡылы булһа – *-нә* морфы ҡушыла: *уның*

*атаһы-на, йоҡоһо-на, усы-на, оно-на*; *уның әсәһе-нә, көпөһө-нә, эсе-нә, өңө-нә*;

2) берлектәге беренсе һәм икенсе зат эйәлек аффикслы һүҙҙең тамыры (нигеҙе) ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға *-а* морфы, нәҙек булһа – *-ә* морфы ҡушыла: *минең башым-а, ботом-а, аҡсам-а*; *минең күҙем-ә, көсөм-ә, кеҫәм-ә*; *һинең башың-а, ботоң-а, аҡсаң-а*; *һинең күҙең-ә, көсөң-ә, кеҫәң-ә.*

Урын-ваҡыт килеше формаһын яһаусы аффикс ун вариантта (*-да, -дә, -нда, -ндә, -ҙа, -ҙә, -ла, -лә, -та, -тә*) килә. Бының шулай булыуы ошо аффиксаль морфема ҡушылған һүҙҙәрҙең тамырындағы (нигеҙендәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә һәм шул тамырҙар (нигеҙҙәр) аҙағындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы, тартынҡы булһа, яңғыраумы-һаңғыраумы, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуына бәйле.

Ҡалын һуҙынҡыларға йәки [ж], [з], [л], [м], [н], [ң] яңғырау тартынҡыларына тамамланған ҡалын һуҙынҡылы тамырҙарға (нигеҙҙәргә) морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы *-да* варианты, нәҙек һуҙынҡыларға йәки [ж], [з], [л], [м], [н], [ң] яңғырау тартынҡыларына тамамланған нәҙек һуҙынҡылы тамырҙарға (нигеҙҙәргә) морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы *-дә* варианты ҡушыла. Ләкин тамыр (нигеҙ) аҙаҡтарындағы [ы], [о°] ҡалын һуҙынҡылағы эйәлек категорияһының өсөнсө зат аффикстарына ҡараһа, уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы *-нда* варианты һәм тамыр (нигеҙ) аҙаҡтарындағы [э(е)], [ө] нәҙек һуҙынҡылары эйәлек категорияһының өсөнсө зат аффикстарына ҡараһа, уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы *-ндә* варианты ҡушыла. Бындағы [н] – әйтелеште еңеләйтеү маҡсатында өҫтәлгән асемантик фонема. Хәҙерге башҡорт телендә ул морф составында ҡарала.

[ў], [д], [й], [р] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙ тамырҙары (нигеҙҙәре) ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы *-ҙа* варианты, нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға аффикстың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы *-ҙә* варианты ҡушыла.

Ҡалын һуҙынҡыларға тамамланған һүҙ тамырҙарына (нигеҙҙәренә) морфеманың [л] яңғырау тартынҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы *-ла* варианты, нәҙек һуҙынҡыларға тамамланғандарына – морфеманың [л] яңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы *-лә* варианты ҡушыла.

Һаңғырау тартынҡыларға тамамланған ҡалын һуҙынҡылы тамырҙарға (нигеҙҙәргә) морфеманың [т] һаңғырау тартын-

ҡыһы менән башланған ҡалын һуҙынҡылы *-та* варианты, нәҙек һуҙынҡылыларына – морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы *-тә* варианты ҡушыла.

Эйәлек килеш формаһын яһаусы аффиксаль морфема ун алты вариантта (*-дың, -дең, -доң, -дөң, -ҙың, -ҙең, -ҙоң, -ҙөң, -ның, -нең, -ноң, -нөң, -тың, -тең, -тоң, -төң*) йөрөй. Был морфеманың шулай ун алты вариантта йөрөүе ошо морфема ҡушылған һүҙҙәрҙең тамырындағы (нигеҙендәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм шул тамыр (нигеҙ) аҙаҡтарындағы өндәрҙең һуҙынҡымы-тартынҡымы, һуҙынҡы булһа – ҡалынмы-нәҙекме, иренләшкәнме-иренләшмәгәнме, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуына бәйле.

[ж], [з], [л], [м], [н], [ң] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы *-дың* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы *-дең* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы *-доң* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы *-дөң* варианты ҡушыла.

[ў], [ҙ], [р] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы *-ҙың* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы *-ҙең* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы *-ҙоң* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы *-ҙөң* варианты ҡушыла.

Һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡыларға тамамланһа, уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы *-ның* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы *-нең* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [н] яңғырау

тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы -*ноң* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы -*нөң* варианты ҡушыла.

Һаңғырау тартынҡыларға тамамланған һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы -*тың* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы -*тең* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы -*тоң* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы -*төң* варианты ҡушыла.

Төшөм килеш формаһын яһаусы морфема ун ете вариантта килә: -*ды*, -*де*, -*до*, -*дө*, -*ҙы*, -*ҙе*, -*ҙо*, -*ҙө*, -*ны*, -*не*, -*но*, -*нө*, -*н*, -*ты*, -*те*, -*то*, -*тө*. Төшөм килеш морфемаһының шулай ун ете вариантта килеүе морфема ҡушылған һүҙҙәрҙең тамырындағы (нигеҙендәге) һуҙынҡының ҡалынмы-нәҙекме, иренләшкәнме-иренләшмәгәнме, тамыр (нигеҙ) аҙаҡтарындағы өндәр һуҙынҡымы-тартынҡымы, һуҙынҡы булһа – тамыр һуҙынҡымы, әллә эйәлек категорияһының һуҙынҡыһымы, тартынҡы булһа – яңғыраумы-һаңғыраумы, яңғырау булһа – ниндәй яңғырау булыуға бәйләнә.

[ж], [з], [л], [м], [н], [ң] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы -*ды* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы -*де* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы -*до* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [д] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы -*дө* варианты ҡушыла.

[ў], [ҙ], [й], [р] яңғырау тартынҡыларына тамамланған һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [ҙ] янғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы -*ҙы* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы -*ҙе* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы

булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы *-ҙо* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [ҙ] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы *-ҙө* варианты ҡушыла.

Һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) ҡалын һуҙынҡылы булып, иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡыларға тамамланһа, уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы *-ны* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡыларға тамамланһа – уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы *-не* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы *-но* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [н] яңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы *-нө* варианты, һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) аҙағындағы [ы], [э(е)], [о°], [ө] һуҙынҡылары эйәлек категорияһынытҡы (*-һы, -һе, -һо, -һө, -ы, -е, -о, -ө*) булһа, уларға морфеманың *-н* варианты ҡушыла.

Һаңғырау тартынҡыларға тамамланған һүҙҙәрҙең тамыры (нигеҙе) иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы булһа, уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшмәгән ҡалын һуҙынҡылы *-ты* варианты, иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған нәҙек һуҙынҡылы *-те* варианты, иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән ҡалын һуҙынҡылы *-то* варианты, иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы булһа – уларға морфеманың [т] һаңғырау тартынҡыһы менән башланған иренләшкән нәҙек һуҙынҡылы *-тө* варианты ҡушыла.

## АФФИКСТАРҘЫҢ ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ БӘЙЛӘНЕШТӘРЕ

Аффиксаль морфемаларҙың һүҙьяһалыш бәйләнештәре, уларҙың *яһаусы* һүҙҙәр йәки нигеҙҙәр менән берләшә алыу-алмауы, башлыса, *яһаусы* һүҙҙәрҙең йәки яһаусы нигеҙҙәрҙең морфологик, морфематик, фонетик һәм башҡа үҙенсәлектәренә бәйле.

Теге йәки был дәрәжәлә аффикстарҙың һүҙьяһалыш мөмкинлектәрен билдәле грамматик, морфологик билдәләр араһынан яһаусы һүҙҙәрҙең билдәле һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығын күрһәтергә мөмкин.

Мәҫәлән, һүҙ яһаусы морфемалар араһында билдәле бер һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәр (һүҙҙәрҙең нигеҙе) менән берләшә

алған аффикстар бар: *-ҡыс, -кес, -ҡос, -көс, -ғыс, -гес, -ғос, -гөс* аффикстары тик ҡылымдар менән генә берләшә (*ас – асҡыс, бор – борғос, быу – быуғыс, йыу – йыуғыс, ос – осҡос, сәс – сәскес, төй – төйгөс, һөрт – һөрткөс*), *-даш, -дәш, -ҙаш, -ҙәш, -лаш, -ләш, -таш, -тәш* аффикстары – тик исемдәр менән генә (*йәш – йәштәш, килен – килендәш, курс – курсташ, ҡарын – ҡарындаш, ҡор – ҡорҙаш, ҡәбилә – ҡәбиләләш, өй – өйҙәш, фамилия – фамилиялаш*), *-ылда, -елдә, -олда, -өлдә* аффикстары – тик оҡшатыу һүҙҙәре менән генә (*гөп – гөпөлдә-, дер – дерелдә-, ҡорҡ – ҡорҡолда-, лыр – лырылда-*), *-ынты, -енте, -онто, -өнтө* аффикстары – тик ҡылымдар менән генә (*йоҡ- – йоғонто, киҫ- – киҫенте, уй- – уйынты, һөр- – һөрөнтө*) берләшә. Әлбиттә, төрлө һүҙ төркөмөнән булған һүҙҙәргә (һүҙҙәрҙең нигеҙенә) ҡушыла алған һүҙ яһаусы морфемалар ҙа байтаҡ. Мәҫәлән, *-лан, -лән* аффиксы исемдәр һәм сифаттар менән берләшә (*аҡыл – аҡыллан-, дәрт – дәртлән-; беше – бешелән-, ҡаты – ҡатылан-*), *-ла, -лә* аффикстары исемдәр, сифаттар, рәүештәр, оҡшатыу һүҙҙәре, ымлыҡтар һәм модаль һүҙҙәр менән берләшә (сағыштырығыҙ: *дан – данла-, дим – димлә-; матур – матурла-, тигеҙ – тигеҙлә-; оҙаҡ – оҙаҡла-, тиҙ – тиҙлә-; геү – геүлә-, ғыр – ғырла-; мыяу – мыяула-, әйҙә – әйҙәлә-; бар – барла-, эйә – эйәлә-*).

Яһаусы һүҙҙәрҙең (нигеҙҙәрҙең) фонетик структураһы һүҙ яһаусы аффикстарҙың һүҙьяһалыш мөмкинлегенә йоғонто яһай.

Һүҙ яһаусы аффикстарҙың вариантын һайлау яһаусы һүҙҙәрҙәге (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә, яһаусы һүҙҙәрҙең (нигеҙҙәрҙең) ниндәй өндәргә – һуҙынҡыларғамы-тартынҡыларғамы, һуҙынҡыларға булһа – ҡалындарғамы-нәҙектәргәме, иренләшкәндәргәме-иренләшмәгәндәргәме, тартынҡыларға булһа – яңғырауҙарғамы, һаңғырауҙарғамы, яңғырауҙарға булһа – ниндәйҙәренә тамамланыуына бәйле. Мәҫәлән, ҡылым яһаусы *-ла, -лә* аффикстарының ике вариантта килеүе яһаусы һүҙҙәрҙәге (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә бәйләнә (сағыштырығыҙ: *бура – бурала-, бүләк – бүләклә-, наҙ – наҙла-, оло – олола-, төйөн – төйөнлә-, тәнҡит – тәнҡитлә-, һый – һыйла-, шөрөп – шөрөплә-*); исем яһаусы *-ҡыс, -кес, -ҡос, -көс, -ғыс, -гөс, -ғос, -гөс* аффиксының һигеҙ вариантта килеүе яһаусы һүҙҙәрҙәге (нигеҙҙәрҙәге) һуҙынҡыларҙың ҡалынлығына-нәҙеклегенә, иренләшеүенә-иренләшмәүенә һәм яһаусы һүҙҙәрҙең (нигеҙҙәрҙең) ниндәй өндәргә – һуҙынҡыларғамы-тартынҡыларғамы, һуҙынҡыларға булһа – ҡалындарғамы-нәҙектәргәме, иренләшкәндәргәме-иренләшмәгәндәргәме, тартынҡыларға булһа – яңғырауҙарғамы-һаңғырауҙарғамы тамамланыуына бәйләнә (*ас – асҡыс,*

*йөҙ – йөҙгөс, киҫ – киҫкес, ос – осҡос, осор – осорғос, туҡы – туҡығыс, һөрт – һөрткөс*) һ. б.

Аффиксаль морфемалар менән яһаусы һүҙҙәрҙең һүҙьяһалыш бәйләнештәре яһаусы һүҙҙәрҙең (нигеҙҙәрҙең) семантик үҙенсәлектәренә лә бәйле. Ул шунда күренә: күп кенә морфемалар билдәле семантикалы һүҙҙәргә генә ҡушыла. Морфемалар (һүҙ яһаусылар булһынмы, һүҙ үҙгәртеүселәр булһынмы) берләшмәһендәге сикләүҙәр шунан ғибәрәт: морфемалар ниндәйҙер уртаҡ семантик үҙенсәлектәргә эйә булған һүҙҙәр менән генә берләшә. Аффикс менән яһаусы һүҙ (нигеҙ) берләшмәһе килеп сығһын өсөн, улар семантик яҡтан бергә һыйыша алырға тейеш. Бер нисә миҫал килтерәйек: *-ҡы, -ке, -ҡо, -кө, -ғы, -ге, -ғо, -гө* аффиксы күпселек осраҡта, хәрәкәтте, процесты, хәлде белдергән нигеҙҙәргә ҡушылып, ҡоралды, йәйланманы атаған йәки абстракт мәғәнәгә эйә булған исемдәр яһай: (*быс – бысҡы, кир – кирге, сәнс – сәнске, һоҫ – һоҫҡо, һөҙ – һөҙгө, юн – юнғы*). *-а, -ә, -ай, -әй* аффиксы, башлыса, исем нигеҙҙәре менән берләшә (*ат – ата-, аш – аша-, тел – телә-, төн – төнә-*; *соҡор – соҡорай-, көс – көсәй-*) һ. б.

Ярҙамсы морфемаларҙың һүҙьяһалыш бәйләнештәре яһаусы һүҙҙәрҙең (нигеҙҙәрҙең) шәхси үҙенсәлектәренә генә түгел, ә ярҙамсы морфемаларҙың үҙҙәренең ҡайһы бер үҙенсәлектәренә лә, атап әйткәндә, уларҙың семантик билдәләренә лә бәйле. Һүҙ яһаусы аффикстарҙың мәғәнәһе ни тиклем киңерәк, абстрактыраҡ булһа, нигеҙҙәр (һүҙҙәр) менән бәйләнеше шул тиклем киңерәк һәм телдәге роле лә юғарыраҡ була. Аффиксаль морфеманың мәғәнәһе ни тиклем тар булһа, һүҙҙәр менән бәйләнеше лә шул тиклем сикләнгәнерәк, яңы һүҙҙәр яһау мөмкинлеге лә шул тиклем кәмерәк була. Башҡорт телендә *-ла, -лә, -лан, -лән* аффикстары ярҙамында йөҙәрләгән ҡылым яһалыу факты күп дәрәжәлә нәҡ шуның менән аңлатыла ла инде. Шул уҡ ваҡытта *-ар, -әр*; *-ы, -е*; *-ыҡ, -ек*; *-һын, -һен* аффикстары менән яһалған ҡылымдарҙың һаны унарлап йәки берәрләп кенә иҫәпләнә.

## НИГЕҘ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Тамыр морфема телдә, башлыса, үҙ аллы ҡулланылып, айырым һүҙ булып йөрөй, шул уҡ ваҡытта артабан яңы һүҙҙәр һәм уларҙың лексик-грамматик формаларын яһау өсөн нигеҙ булып та тора. Ошо сәбәпле башҡорт телендә һүҙҙең тамырын йыш ҡына нигеҙ тип тә йөрөтәләр.

Һүҙҙең **нигеҙе** формаль яҡтан тамыр морфемаға (*ер-гә, күл-е, һау-ҙы*) йәки тамыр һәм аффиксаль морфемалар ҡушылмаһына (*белеш-кә, бүлек-тең, ураҡ-тан*) тигеҙ була.

Билдәле булыуынса, рус телендә (немец телендә лә) яһаусы нигеҙгә ҡушылған аффикс (суффикс йәки префикс) яңы һүҙҙең үҙен түгел, ә нигеҙен генә яһай. Һүҙ яһау, йәғни яңы лексик берәмек төҙөү, был һүҙҙе билдәле бер һүҙ төркөмө булараҡ грамматик яҡтан ойошоу менән тамамлана.

Башҡорт телендә эш икенсерәк тора: унда бүлгеләнмәгән, семантикалы нигеҙгә ҡушылған аффикс, ғәҙәттә, билдәле лексик-грамматик типҡа ҡараған һүҙ төҙөй. Һүҙ яһаусы аффикс ҡушыу унда һүҙ төркөмдәре буйынса билдәләүҙең (һүҙҙе категориаль ойошторроуҙың) һуңғы этабы була. Шулай итеп, башҡа формалар булмаған осраҡта һүҙьяһалыш һүҙҙәрҙе лексик-грамматик кластарға айырырға ярҙам итә.

Телдең мәғәнәле берәмеге булараҡ, нигеҙ төшөнсәһен ғалимдар төрлөсә билдәләй: берәүҙәр, нигеҙҙе һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе морфемаһын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө, икенселәре, һүҙ үҙгәртеүсе һәм форма яһаусы морфемаларын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө, тип иҫәпләй. Ике фекерҙе лә дөрөҫ тип иҫәпләргә була. Шул уҡ ваҡытта нигеҙ төшөнсәһе төрлө күҙлектән сығып билдәләнә икән, нигеҙ тип төрлө тел берәмектәре ҡарала. Бында һүҙ телдә реаль булған һәм төрлө кимәлдәрҙә лингвистик анализ яһағанда эш итергә тура килгән нигеҙҙәрҙең төрлө типтары тураһында бара.

Шулай итеп, бер үк һүҙҙең, бер үк һүҙформаның составында төрлө типтағы нигеҙҙәр айырылырға мөмкин. Мәҫәлән, *ултырттым* һүҙформаһында төрлө типтағы шундай нигеҙҙәр айырыла:

– һүҙҙең үҙгәртеүсе *-м* морфемаһын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө булараҡ *ултыртты* нигеҙе (*ултыртты-ғыҙ, ултыртты-ҡ, ултыртты-ң*);

– һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе *-м* форма яһаусы *-ты* морфемаларын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө булараҡ *ултырт* нигеҙе (*ултырт-а, ултырт-асаҡ, ултырт-ҡан, ултырт-ҡас, ултыр-тыр*);

– һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе *-м* форма яһаусы *-ты*, һүҙ (йүнәлеш) яһаусы *-т* морфемаларын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө булараҡ *ултыр* нигеҙе (*ултыр-а, ултыр-асаҡ, ултыр-ҙы, ултыр-тыр*).

Тимәк, һүҙҙең нигеҙе аффикс ҡушырға мөмкин булған морфема йәки морфемалар ҡушылмаһы була.

Лингвистик әҙәбиәттә «нигеҙ» термины һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе һәм форма яһаусы морфемаларын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө тип кенә түгел, уның менән яһалған һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе, форма һәм һүҙ яһаусы морфемаларын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө тип тә билдәләнә.

Һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе, форма һәм һүҙ яһаусы морфемаларын алып ташлағандан һуң ҡалған өлөшө һүҙҙең тамыры була. Икенсе төрлө әйткәндә, ул – тамырға тигеҙ нигеҙ, тамыр-нигеҙ була.

Нигеҙ башҡарған функцияға һәм уға ҡушылған аффикстарҙың функциональ-семантик үҙенсәлектәренә ҡарап, башҡорт телендә нигеҙҙәрҙе өс төргә бүлеп йөрөтәләр:

1) **һүҙ яһаусы нигеҙ** – яһалма һүҙҙең һүҙ яһаусы морфемалар менән берләшә алыу һәләте булған һәм ярашлы яһалма һүҙҙәрҙең бер ни тиклем лексик мәғәнәһен сағылдырған өлөшө (һүҙ яһаусы нигеҙ ярашлы яһалма һүҙҙәр белдергән лексик мәғәнәләрҙең төп, дөйөмләштерелгән компоненты һанала); һүҙ яһаусы нигеҙ уға һүҙ яһаусы аффикстарҙың ҡушылыуы йәки икенсе бер нигеҙҙең ҡушылыуы йәки ишләшеүе, бер бөтөнгә ойошҡан нигеҙҙәрҙең ҡыҫҡарыуы һәм башҡалар һөҙөмтәһендә яңы лексик берәмектәр яһауҙа ҡатнаша;

2) **форма яһаусы нигеҙ** – үҙгәреүсе һүҙҙең форма яһаусы морфемалар менән берләшә алыу һәләтенә эйә булған һәм һүҙҙең тик лексик мәғәнәһен генә сағылдырған өлөшө; форма яһаусы нигеҙгә форма яһаусы аффикстар ҡушылып, төрлө морфологик категориялар яһала;

3) **һүҙ үҙгәртеүсе нигеҙ** – үҙгәреүсе һүҙҙең һүҙ үҙгәртеүсе морфемалар менән берләшә алыу һәләтенә эйә булған лексик йәки лексик һәм синтаксик булмаған грамматик мәғәнәләрҙе сағылдырған өлөшө; һүҙ үҙгәртеүсе нигеҙгә һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар ҡушылып, төрлө синтаксик мөнәсәбәттәр белдереүсе грамматик категориялар формалаша.

Был өс төр нигеҙҙең һәр ҡайһыһы төҙөлөшө буйынса бер морфемалы (ябай йәки тамыр нигеҙ) йәки күп морфемалы (яһалма нигеҙ, ҡушма нигеҙ, парлы нигеҙ) булырға мөмкин.

Барлыҡ өс төрлө нигеҙ араһында принципиаль айырма булыуға ҡарамаҫтан, улар билдәле оҡшашлыҡ менән характерлана: барыһы ла һүҙҙәрҙең йәки айырым һүҙформаларҙың мәғәнәгә эйә булған төп өлөшөн тәшкил итә. Төрлө төрҙәге нигеҙҙәрҙең оҡшашлығы уларҙың морфемалар составында ла күренә.

Нигеҙҙәрҙең күрһәтелгән төрҙәре араһында мәғәнәле өлөштәргә бүленмәй торған бер морфемалы нигеҙҙәр ҙә (ябай, яһалма булмаған, тарҡалғыһыҙ, тамыр нигеҙҙәр ҙә), тағы ла бәләкәйерәк мәғәнәле өлөштәргә бүленә торған күп морфемалы нигеҙҙәр ҙә (яһалма, тарҡала торған, комплекслы нигеҙҙәр ҙә) бар. *Ҡош-то, ҡошоғоҙ-ҙо* һәм *аҡҡош-то* һүҙҙәрендәге һүҙ үҙгәртеүсе нигеҙҙәрҙе, *ҙур-ыраҡ, аңғыҙ-ыраҡ* һәм *елғыуар-ыраҡ* һүҙҙәрендәге форма яһаусы нигеҙҙәрҙе, *ас-ҡыс, йылыт-ҡыс* һәм *алъяп-ҡыс* һүҙҙәрендәге һүҙ яһаусы нигеҙҙәрҙе сағыштырыу – быға асыҡ дәлил.

Нигеҙҙәр һүҙҙәрҙең мәғәнәле өлөштәре булғанын иҫтә тотоп, ҡайһы саҡта уларҙы морфемалар менән бер рәттә ҡарайҙар. Шул уҡ ваҡытта күп морфемалы нигеҙҙәргә ҡарата йыш ҡына «яһалма морфема» термины ҡулланыла. Нигеҙгә ҡарата бындай ҡараш бәхәсле. Нигеҙҙе морфемаға тиңләп ҡарау был төшөнсәләргә ҡарата бөтәһе тарафынан ҡабул ителгән билдәләмәгә, атап әйткәндә, морфеманы телдең иң бәләкәй (минималь), башҡа киҫәктәргә бүленмәй торған өлөшө тип ҡарауға ҡаршы килә.

Бер морфемалы нигеҙҙәр бөтә осраҡтарҙа ла тамыр морфемаларҙан тора. Формаль яҡтан, үҙҙәренең морфемалар составы буйынса, ундай нигеҙҙәр ярашлы тамырҙар менән тап килә (шуға ла улар ҡайһы саҡта тамыр нигеҙҙәр тип атала). Мәҫәлән: *аҡ, ағ-ыраҡ, аҡ-лыҡ, аҡ-һыл*; *ал, ал-а, ал-асаҡ, ал-ған, ал-ғас, ал-ды, ал-маҡсы, ал-һа, ал-ып*; *ал-ыр, ал-ырға*; *һыу, һыу-ға, һыу-лан, һыу-ланған, һыу-лы, һыу-лыраҡ*. Шул уҡ ваҡытта бер морфемалы нигеҙҙәр менән тамыр морфемаларҙың тышҡы күренешенә ҡарап, уларҙы тиңләштерергә ярамай. Улар араһында төп айырма шунда: бер морфемалы нигеҙҙәр һәр саҡ тамыр морфемалар булһа, тамыр морфемалар һүҙҙә башҡа морфемалар булмаған осраҡтарҙа ғына бер морфемалы нигеҙҙәр була. Мәҫәлән, *ал-*, *бул-*, *быуын-*, *ват-*, *мөйөш-* һүҙҙәренең тамырҙары *боҙватҡыс, күпбыуынлы, күпмөйөшлө, һаубуллашыу, яҡшатланыу* һүҙҙәрендә.

Үрҙә килтерелгән нигеҙ төрҙәре төрлө функция үтәгән ярҙамсы (аффиксаль) морфемаларҙың төрлө төрҙәре менән бергә килә (берләшә) ала. Һүҙ үҙгәртеүсе нигеҙҙәр эҙмә-эҙлекле рәүештә – һүҙ үҙгәртеүсе морфемалар менән, форма яһаусылар – форма яһаусы морфемалар менән, һүҙ яһаусылар – һүҙ яһаусы морфемалар менән.

Төрлө төрҙәге нигеҙҙәрҙең ярашлы морфемалар менән бергә килеү (берләшеү) һәләте бер төрлө түгел. Грамматик морфемаларҙың ярашлы парадигмаларын төҙөп, һүҙҙәрҙең һүҙ үҙгәртеүсе һәм форма яһаусы нигеҙҙәре ярашлы морфемаларҙың билдәле йыйылмаһы менән даими рәүештә берләшә. Икенсе төрлө әйткәндә, һүҙ үҙгәртеүсе һәм форма яһаусы аффиксаль морфемалар билдәле һүҙ төркөмдәренең һүҙҙәренә (һүҙҙәрҙең нигеҙҙәренә) һүҙ төркөмдәре эсендә лексик-грамматик разрядтарға ныҡлы беркетелгән.

Бер үк грамматик категорияға ҡараған төрлө һүҙҙәрҙең яһаусы нигеҙҙәре төрлө-төрлө яһаусы морфемалар менән бергә килергә (берләшергә) мөмкин. Һүҙ яһаусы аффиксаль морфемалар һүҙҙәрҙең билдәле категорияларына ныҡлы беркетеп ҡуйылмаған. Улар яһаусы нигеҙҙәрҙең йәки уларҙың нигеҙҙәренең күп кенә шәхси үҙенсәлектәренә, аффикстарҙың ҡайһы

бер үҙенсәлектәренә һәм ҡайһы бер башҡа факторҙарға бәйле билдәле грамматик категорияларға ҡараған һүҙҙәрҙең һүҙ яһаусы нигеҙҙәре менән һайланма рәүештә берләшә. Шулай итеп, һүҙ яһаусы морфемалар төрлө һүҙҙәр (һүҙҙәрҙең нигеҙҙәре) менән берләшә алыу һәләте буйынса бер-береһенән ныҡ айырыла, йәғни төрлө һүҙьяһалыш мөмкинлектәренә, һүҙьяһалыш бәйләнештәренә эйә.

## ҺҮҘҘӘРҘЕҢ МОРФЕМАТИК ТӨҘӨЛӨШӨНДӘГЕ ҮҘГӘРЕШТӘР

Һүҙҙең морфематик структураһы был һүҙ менән тамырҙаш булған һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнешенән сығып билдәләнә. Һүҙҙе тамырҙаш һүҙҙәр менән сағыштырып ҡарап, бер морфеманан торған тамыр һүҙҙәр һәм ике йәки өс морфеманан торған күп морфемалы (полиморфемалы) һүҙҙәр айырыла; һуңғыларында морфемалар һаны, уларҙың һуҙымы (оҙонлоғо), сиге, һүҙ нигеҙендә ярҙамсы морфемаларҙың бер-бер артлы урынлашыу тәртибе һәм башҡалар билдәләнә. Мәҫәлән, *уҡыусы* һүҙе составында *уҡы*, *йәшелсәсе* һүҙе составында *йәшел* тамыры менән һүҙ яһаусы *-сә* һәм *-се* аффикстары айырыла, сөнки хәҙерге башҡорт телендә *йәшелсәсе* һүҙе менән бер рәттән уға тамырҙаш *йәшел* һәм *йәшелсә* һүҙҙәре лә ҡулланыла.

Телдең тарихи үҫеш осоронда, тамырҙаш һүҙҙәр араһында булған тәүге бәйләнештәр үҙгәреп китергә лә мөмкин. Шуға ла ҡайһы саҡта һүҙҙәрҙә структур үҙгәрештәр килеп тыуа. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең, мәҫәлән, морфемалар һаны, айырым морфемаларҙың өн составы үҙгәрә, морфемаларҙың мәғәнәләрендә, функцияларында үҙгәрештәр барлыҡҡа килә.

Башҡорт телендә һүҙҙең морфематик үҙгәрешен килтереүсе төп сәбәп булып яһалма һүҙ менән яһалма нигеҙ (һүҙ) араһындағы тәүге бәйләнештәрҙең үҙгәреүе һанала. Яһалма һүҙ менән яһаусы нигеҙ араһында булған тәүге бәйләнештәрҙең боҙолоуы (үҙгәреүе) яһалма йәки яһаусы һүҙҙең лексик мәғәнәһе үҙгәреү, яһалма һүҙҙең йәки уны яһаусы һүҙҙең өн составы үҙгәреү, телдең һүҙлек составында элек һүҙ яһауҙа база булып хеҙмәт иткән һүҙ төшөп ҡалыу кеүек сәбәптәр менән килеп сығырға мөмкин.

Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөндәге үҙгәрештәрҙең ябайлашыу, тарҡалыу, ҡатмарланыу һәм алмашыныу кеүек төрҙәрен күрһәтергә була[1].

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 26-сы б.

## *Ябайлашыу*

**Ябайлашыу** – килеп сығышы буйынса күп морфемалы булған һүҙҙәрҙең телдең оҙайлы үҫеш барышында үҙҙәренең яһалма йәки ҡушма характерын юғалтыуы һәм телдең хәҙерге торошо күҙлегенән ҡарағанда ябай (тамыр) нигеҙ сифатында ҡабул ителә башлауы. Һүҙҙең морфематик төҙөлөшөндәге бындай үҙгәреште икенсе төрлө **интеграция** (латинса *integratio* – «айырым өлөштәрҙең бер бөтөнгә ойошоуы») тип тә йөрөтәләр. Мәҫәлән, *ағыу* < *аҡ-ыу*, *уян-* < *у*[й-а]*н-*, *юғары* < [йу]*-ғары* һ. б.

Һүҙҙәрҙә барған семантик һәм фонологик үҙгәрештәр, шулай уҡ яһаусы нигеҙҙең актив ҡулланылыштан төшөп ҡалыуы кеүек күренештәр ябайлашыу процесын барлыҡҡа килтерә.

Сағыштырмаса һуңыраҡ барлыҡҡа килгән һүҙҙең элекке тамыры һәм уның нигеҙендә яһалған тамырҙаш һүҙҙәр менән семантик бәйләнеше аҡрынлап юғалыуы мөмкин. Шул рәүешле был һүҙҙең морфематик төҙөлөшө ябайлаша, һәм ул үҙе тамыр нигеҙ булып йөрөй башлай. Мәҫәлән, *йәш, ҡара, ни, уй, һын* тамырҙары нигеҙендә яһалған *йәшел, ҡараҡ, нисә, уйан-* (*уян-*), *һына-* һүҙҙәре мәғәнәләре буйынса яһаусы нигеҙҙәренән алыҫлашҡандар һәм тора-бара ябайлашыу процесы һөҙөмтәһендә телдең хәҙерге торошона ҡарағанда тамыр һүҙ булып ҡабул ителәләр.

Телмәр ағышында барлыҡҡа килгән төрлө фонетик процестар (әйтәйек, фонемаларҙың позицион һәм комбинатор үҙгәрештәре арҡаһында морфемалар үҙҙәренең фонологик ҡоролошон үҙгәртәләр, һөҙөмтәлә һүҙҙең тәүге морфематик бүленеш сиктәре юйыла, һәм ул бер тамыр һүҙ булып ойоша: *һуғар-* (< *һыу-ғар-*), *менән* (< *белән* < *бер-лән*), *асыу* (< *асы-ыу*), *ҡарға* (< *ҡарҡ-а*), *олғаш-* (<*олоға аш-*).

Ябайлашыу процесына килтереүсе сәбәп итеп яһаусы нигеҙҙең йәки тамыр һүҙҙең хәҙерге көндә үҙ аллы ҡулланылыштан төшөп ҡалыуын күрһәтергә була: *мин* (< *ми-н*), *һин* (< *һи-н*), *ул* (< *у-л*), *шул* (< *шу-л*), *оҙаҡ* (< *оҙ-аҡ*), *элек* (< *эл-ек*), *быйыл* (< *бы-йыл*).

Төп башҡорт һүҙҙәрендә был күренеш тамыр менән форма яһаусы аффикстың ҡушылыуы (*и-не* > *ине, и-кән* > *икән, и-һә* > *иһә*), тамыр менән һүҙ яһаусы аффикстың бер бөтөн булып ойошоуы (*ут-а-* > *ута-, һын-а-*> *һына-*), тамыр менән һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың ҡушылыуы (*ю-ғары* > *юғары, эл-гәре* > *элгәре*), яһаусы нигеҙҙәрҙең берләшеүе (*аҡ ыу* > *ағыу, асы ыу* > *асыу, һары ыу* > *һарыу*) кеүек осраҡтарҙа күҙәтелә.

Ябайлашыу фарсы, ғәрәп, рус, шулай уҡ рус теле аша Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә күҙәтелә. Үҙләштермәләрҙең күбеһе, башҡорт теле системаһына яраҡлашыу маҡсатында, үҙҙәренең фонематик һәм морфематик төҙөлөштәрен

үҙгәртә. Ошо сәбәпле айырым осраҡта нигеҙ телдәге күп морфемалы һүҙҙәр башҡорт телендә бер морфемалы һүҙҙәр рәтенә күсә:

1) фарсы теленән: *дүшәмбе* (< *дү-шәмбе*), *шахмат* (< *шаһмат*);

2) ғәрәп теленән: әлифба (< *алиф-би*), *мәктәп* (< *мә-ктб*);

3) рус теленән: батмус (< *под-нос*), *самауыр* (< *сам-о-вар*);

4) рус теле аша: а) латин теленән: деканат (< *decan* (*us*) *–at*), *республика* (< *res-publica*); б) грек теленән: алфавит (< *alpha-beta*), графика (< *graph-ike* < *grapho*); в) немец теленән: *йәрминкә* < *ярмарка* (< *Jahr-märkt*), галстук (< *Hals-tuch*); г) инглиз теленән: футбол (< *foot-ball*), *волейбол* (< *volley-ball*).

Башҡорт телендә ябайлашыу күренешен төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәрҙә күҙәтергә була. Был күренеш йышыраҡ һүҙ яһаусы аффикстар ярҙамында яһалған һүҙҙәр составында күҙәтелә. Мәҫәлән, *аҙаш* (*атташ* исеме менән сағыштырығыҙ: *ат* «исем, атама»), *аҡса* (*аҡ* сифаты менән сағыштырығыҙ), *ҡарға* (өноҡшаш һүҙ *ҡар* менән сағыштырығыҙ), *сәүкә* (өноҡшаш һүҙ *сәү* менән сағыштырығыҙ).

Һүҙ яһаусы аффикстар ярҙамында яһалып, ябайлашыуға дусар ителгән яһалма ҡылымдар араһынан түбәндәгеләрҙе күрһәтергә мөмкин: *ута* (*ут* «үлән» һүҙе менән сағыштырығыҙ), *үкер* (өноҡшаш һүҙ *ү* менән сағыштырығыҙ), *һөйлә* (*һүҙлә* һүҙе менән сағыштырығыҙ), *һығар* (*һыу* һүҙе менән сағыштырығыҙ).

Ябайлашыу һөҙөмтәһендә тарихи яҡтан ике һүҙҙе ҡушыу юлы менән яһалған ҡушма һүҙҙәр хәҙерге башҡорт телендә ябай һүҙҙәр сифатында ҡулланыла. Мәҫәлән, *беләҙек* (*беләк* + *йөҙөк*), *бөгөн* (*был* + *көн*), *ҡуҙғалаҡ* (*ҡуҙы* «һарыҡ бәрәсе» + *ҡолаҡ*), *Оморҙаҡ* (*ғүмер* + *оҙаҡ*), *ситек* (*эске* + *итек*), *умырзая* (*ғүмер* + *зая*).

Тарихи яҡтан яһалма булған һүҙҙәрҙең ябайлашыуына уларҙың өн составындағы үҙгәрештәр булышлыҡ итә. Миҫал итеп түбәндәге һүҙҙәрҙе килтерәйек: *аҙаш* (*ат* «исем, атама» һүҙенә *-таш* аффиксы ҡушылыу аша *атташ* һүҙе яһалған, унан ҡуш тартынҡылар бер тартынҡы булып ҡыҫҡарған, һәм ул [т] тартынҡыһы [ҙ] тартынҡыһы менән сиратлашҡан), *бирле* (*бире* «бәрей» һүҙенә *-ле* аффиксы ҡушып яһалған, аҙаҡ һүҙҙең баҫымлы ижеге алдында тороп ҡалған [э(е)] өнө төшөп ҡалған).

Ябайлашыу процесының телдең һүҙлек байлығын яңы тамыр һүҙҙәр менән тулыландырыуҙа әһәмиәте ҙур, сөнки был һүҙҙәр, ғәҙәттә, үҙ сиратында тәүге яһаусы нигеҙ булып сығыш яһайҙар. Мәҫәлән: *ип-тәш* > *иптәш: иптәш-ле, иптәш-һеҙ, иптәш-ләш-, иптәш-лек, иптәш-тәр-сә*; *ҡыҙ-ыл* > *ҡыҙыл: ҡыҙыл-лыҡ, ҡыҙыл-са, ҡыҙыл-ғүҙ, ҡыҙыл-ғанат, ҡыҙыл-түш*; *ут-а-* > *ута-: ута-у, ута-у-сы, ута-у-лы, ута-у-һыҙ*.

## *Тарҡалыу*

**Тарҡалыу** – яһаусы нигеҙ менән аффикстар араһындағы сиктәрҙең күсеше, башҡасараҡ әйткәндә, һүҙҙең тәүге морфематик бүленешенең үҙгәреүе. Яһаусы нигеҙ, ваҡыт үтеү менән, үҙ аллы ҡулланылышын юғалтып, тәүге мәғәнәүи өлөштәренә – тамырға һәм аффиксҡа – тарҡала, ә бүленеп сыҡҡан элекке һүҙ яһаусы йәки форма яһаусы аффикс яңы ҡушылған аффиксаль морфема составына күсә. Һөҙөмтәлә үҙ аллы ҡушма аффикс (ул һүҙ яһаусы йәки форма яһаусы аффикс рәүешендә ҡабул ителеүе мөмкин) барлыҡҡа килә.

Тарҡалыу процесында яһалма һүҙ составындағы ярҙамсы морфемаларҙың тышҡы күренеше (өн составы) үҙгәргәс, яһаусы нигеҙ менән һүҙ яһаусы аффикс составындағы сик бер урындан икенсе урынға күсә. Шул уҡ ваҡытта һүҙ яһаусы аффикстың күләме тарҡалыу моментында үҙ аллы ярҙамсы морфема булып торған өлөшө иҫәбенә киңәйә, ҙурая; йәғни бер ярҙамсы морфема икенсе ярҙамсы морфема менән йотола.

Бер нәмәне иҫтә тоторға кәрәк: тарҡалыу күренеше механик процесс тип кенә ҡаралырға тейеш түгел. Нигеҙ аҙағындағы өндәр аффикс составына билдәле шарттарҙа ғына инеп китергә мөмкин. Иң мөһиме шул: нигеҙҙең аффиксҡа китеүсе өлөшө шул моментта (аффиксҡа күсеү моментында) үҙ аллы өндәрҙең билдәле берҙәмлеге булыуы мотлаҡ, йәғни өндәрҙең осраҡлы берләшмәһе түгел, ә ҡулланыла торған «тере» морфема булырға тейеш.

Был күренеш, ғәҙәттә, һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың яһаусы нигеҙ составындағы морфемалар иҫәбенә ҡатмарланыуы барышында күҙәтелә.

Һүҙ яһаусы аффикстар барлыҡҡа килеү түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

1) яһаусы нигеҙ тамырға һәм һүҙ яһаусы аффиксҡа тарҡала, бүленеп сыҡҡан аффикс яңы ҡушылған һүҙ яһаусы аффикс составына күсә, һәм улар, үҙ-ара ойошоп, һүҙ яһаусы ҡушма аффикс барлыҡҡа килтерәләр: а) *һөҙөм-тә* > *һөҙ-өм-тә* > *һөҙ-өмтә*; *элем-тә* > *эл-ем-тә* > *эл-емтә*; б) *арым-тал* > *ары-м-тал* > *ары-мтал*, *өшөм-тәл* > *өшө-м-тәл* > *өшө-мтәл*;

2) яһаусы нигеҙ тамырға һәм форма яһаусы аффиксҡа тарҡалып, бүленеп сыҡҡан аффикс яңы ҡушылған һүҙ яһаусы аффикс составына күсә һәм һүҙ яһаусы ҡушма аффикс барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнаша: а) *йыуын-ты* > *йыу-ын-ты* > *йыу-ынты*; *һүрен-те* > *һүр-ен-те* > *һүр-енте*; б) *тартын-ҡы* > *тарт-ын-ҡы* > *тарт-ынҡы*; *һуҙын-ҡы* > *һуҙ-ын-ҡы* > *һуҙ-ынҡы*.

Һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе нигеҙҙәрҙең үрҙә күрһәтелгән сәбәптәр арҡаһында тамыр һәм аффикстарға тарҡалыуы һәм аффиксаль морфемаларҙың был нигеҙҙәргә һуңыраҡ ҡушылған аффикстар менән берләшеүе арҡаһында ҡылымдарҙың төрлө морфологик категорияларының күрһәткестәре булып йөрөгән форма яһаусы ҡушма аффикстар:

1) шарт һөйкәлеше аффикстары: а) *-дымы: иртән ысыҡ булдымы* (*булды-мы > бул-ды-мы > бул-дымы*), *көнө буйы аяҡ булыр*; б) *-ғанда: ат дағалағанда* (*дағалаған-да > дағала-ған-да > дағала-ғанда*), *баҡа ботон ҡыҫтырған* (Әйтем);

2) ниәт-маҡсат һөйкәлеше аффиксы *-маҡсы: бармаҡ-сы > бар-маҡ-сы > бар-маҡсы*;

3) күләм (аспектуаллек) категорияһы аффикстары: а) *-ңҡыра: һалың-ҡыра- > һал-ың-ҡыра- >һал-ыңҡыра-*; *әйтең-керә- > әйт-ең-керә-> әйт-еңкерә-*; б) *-мһыра: илам-һыра- > ила-м-һыра- > ила-мһыра-*, *көлөм-һөрә- >көл-өм-һөрә- > көл-өмһөрә-*; в) *-штыр: ҡараш-тыр- > ҡара-ш-тыр- > ҡара-штыр-*; *һөртөш-төр- > һөрт-өш-төр- > һөрт-өштөр-*; г) *-ғысла-: ҡырғыс-ла- > ҡыр-ғыс-ла- > ҡыр-ғысла-*; *тотҡос-ла- >тот-ҡос-ла- > тот-ҡосла-*; ғ) *-ҡла-: уйнаҡ-ла- > уйна-ҡ-ла- > уйна-ҡла-*; *һөйрәк-лә- > һөйрә-к-лә- > һөйрә-клә-*; д) *-ҡысла-: тартҡыс-ла- > тарт-ҡыс-ла- > тарт-ҡысла-*; *өҙгөс-лә- > өҙ-гөс-лә- > өҙ-гөслә-*;

4) ҡылым төркөмсәләре аффикстары: а) *-ырға / -маҫҡа* (инфинитив): *тартыр-ға > тарт-ыр-ға > тарт-ырға*; *әйтмәҫ-кә > әйт-мә-ҫ-кә > әйт-мәҫкә*; б) *-ғансы* (рәүеш ҡылым) : *ҡыҙған-сы > ҡыҙ-ған-сы > ҡыҙ-ғансы*; *кергән-се > кер-гән-се > кер-гәнсе*; в) *-ғанса* (рәүеш ҡылым): *һораған-са > һора-ған-са > һора-ғанса*; *вәғәҙәләгән-сә > вәғәҙәлә-гән-сә > вәғәҙәлә-гәнсә*; г) *-ышлай* (*рәүеш ҡылым*): *уҙыш-лай > уҙ-ыш-лай > уҙ-ышлай*; *китешләй > кит-еш-ләй >кит-ешләй.*

Тарҡалыу процесы күберәк исемдәрҙең һәм сифаттарҙың яһалышында, шулай уҡ ҡылымдарҙың морфологик категориялары формалашыу барышында осрай.

Был күренеш һөҙөмтәһендә башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһы һәм морфологияһы яңы һүҙ яһаусы һәм форма яһаусы ҡушма төрҙәге аффикстар менән тулыландырыла.

## *Ҡатмарланыу*

Морфематик төҙөлөшө буйынса ябай булып, тик тамырҙан ғына торған һүҙҙең яһалма һүҙ рәүешендә ҡулланылыуы **ҡатмарланыу** тип атала. Ул ябайлашыу процесының киреһе иҫәпләнә. Ҡатмарланыу һөҙөмтәһендә нигеҙ телдә тамыр һаналған

һүҙ башҡорт телендә ике морфемалы һүҙ сифатында ҡабул ителә һәм тамыр менән һүҙ яһаусы аффиксҡа бүлеп йөрөтөлә башлай.

Бындай күренештең төп сәбәбе булып нигеҙ телдә үҙенең фонематик төҙөлөшө буйынса үҙләштерелгән тамыр һүҙгә тап килгән аффиксаль морфемалы һүҙҙең булыуы һәм бындай яһалма һүҙҙең килеп сығышы буйынса тик тамырҙан ғына торған һүҙҙең морфематик төҙөлөшөнә йоғонто яһауы тора. Мәҫәлән, рус теленән үҙләштерелгән интернациональ нигеҙле бер нисә төркөмгә ҡараған сифат һүҙҙәр, ошо оҡшашлыҡ принцибынан сығып, тамырға һәм һүҙ яһаусы аффиксҡа бүлеп йөрөтөләләр.

Беренсе төркөмгә ҡараған *горизонт-альн-ый, музык-альн-ый, молекул-ярн-ый, федерат-ивн-ый, эффект-ивн-ый, аналит-ическ-ий, геолог-ическ-ий* тибындағы рус һүҙҙәре башҡорт теленә күскәндә бер аҙ ҡыҫҡаралар, шулай ҙа нигеҙ телдәге морфематик бүленешен һаҡлайҙар һәм *горизонт-аль, музык-аль, молекул-яр, федерат-ив, эффект-ив, аналит-ик, геолог-ик* формаһында килеп инәләр.

Икенсе бер төркөмгә ҡараған, үҙҙәренең фонетик яңғыраштары буйынса тәүге төркөм һүҙҙәренә оҡшаш булған, ләкин морфематик төҙөлөштәре буйынса айырылған *генераль-н-ый, популяр-н-ый, регуляр-н-ый, перспектив-н-ый, примитив-н-ый, физич-еск-ий, этич-еск-ий, акустич-еск-ий* кеүек һүҙҙәр башҡорт теленә шулай уҡ ҡыҫҡарып, тамыр рәүешендә килеп инәләр, ләкин үрҙә ҡаралған күп морфемалы һүҙҙәр йоғонтоһо аҫтында, оҡшашлыҡ принцибынан сығып, ике морфемалы яһалма һүҙ булып ҡабул ителәләр: *генер-аль, попул-яр, регул-яр, перспект-ив, примит-ив, физ-ик, эт-ик, акуст-ик.* Бындай күренешкә ҡарата диахроник планда, һүҙҙәрҙең этимологияһынан сығып, ниндәйҙер аңлатмалар табырға мөмкин булһа ла, телдең хәҙерге үҫеш торошонан сығып, синхроник планда ҡараһаҡ, уларҙы тамыр һүҙҙәр рәтендә өйрәнеү маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

Башҡорт телендә ҡатмарланыу процесы әллә ни киң таралған күренеш түгел. Ҡағиҙә булараҡ, ул сит телдәрҙән (башлыса, рус теле аша) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә генә күҙәтелә.

## *Алмашыныу*

Телдең тарихи үҫеш процесында айырым осраҡтарҙа һүҙҙең морфематик төҙөлөшө һан яғынан үҙгәрешһеҙ ҡалһа ла, сифаты яғынан үҙгәрергә мөмкин. Бындай осраҡта морфемаларҙың характерҙары (мәғәнәләре һәм функциялары) үҙгәрә, ә һаны, һүҙ эсендәге урыны, фонологик төҙөлөшө үҙгәрешһеҙ ҡала. Тел ғилемендә был процесс **алмашыныу** тип атала. Уны икенсе төрлө

**декорреляция** (латинса *decorrelatio* – «үҙ-ара бәйләнеш, мөнәсәбәттәшлек юғалыу») тип тә йөртәләр.

Башҡорт телендә алмашыныу күренеше, башлыса, аффиксаль морфемаларҙың тәбиғәте, мәғәнә үҙенсәлектәре үҙгәреүендә (атап әйткәндә, ҡайһы бер форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың һүҙ яһаусы аффикстарға күсеүендә) сағыла.

Форма яһаусы аффикстарҙың һүҙ яһаусы аффикстар рәтенә күсеүе түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

1) ҡылымдарҙың уртаҡлыҡ йүнәлеше аффиксы -***ш*** (-***ыш*** / -***еш***, -***ош*** / -***өш***) айырым осраҡтарҙа яңы мәғәнәле ҡылым яһап йөрөй: *бул- «быть» – бул-ыш- «помогать»*; *һуҡ- «бить, ударять» – һуғыш- «драться, воевать»*; *күр- «видеть» – күр-еш- «здороваться»*; *таны- «узнавать» – таны-ш- «знакомиться»*;

2) йүнәлеш категорияһының айырым аффикстары ҡатнашлығында ҡылым яһаусы үҙ аллы аффикстар ҙа барлыҡҡа киләләр; мәҫәлән, шундайҙар рәтенә -***ла*** аффиксы нигеҙендә формалашҡан -***лан*** (< -***ла-н***), -***ландыр*** (< ***ла-н-дыр***), -***лаш*** (< ***ла-ш***), -***лаштыр*** (< ***ла-ш-тыр***) кеүек ҡушма аффикстарҙы индерергә була: *иҫәр-лән-*, *ҡәнәғәт-лән*; *рух-ландыр-*, *хеҙмәтләндер-*; *дәғүә-ләш-*, *хәрәм-ләш-*; *компьютер-лаштыр-*, *электрлаштыр-*;

3) һан категорияһы аффикстары -***лар***/-***ләр***, -***дар***/-***дәр***, -***ҙар***/-***ҙәр***, -***тар***/-***тәр*** ер-һыу атамаларын белдереүсе исемдәргә ҡушылып, шул урындарҙа йәшәгән кешеләр коллективын аңлатып йөрөйҙәр: *Салауат – салауат-тар «салаватцы»*, *Япония – япон-дар «японцы»*, *Өфө – өфө-ләр «уфимцы»*, *Ишембай – ишембай-ҙар «ишимбайцы»*;

4) киләсәк заман сифат ҡылымдың боронғо формаһы аффиксы -***ар*** / -***әр*** хәҙерге башҡорт телендә ҡылымдарҙан сифат яһаусы аффикс рәүешендә йөрөтөлә: *быу-ар* (*йылан*), *ос-ар* (*ҡоштар*), *эс-әр* (*һыу*), *ян-ар* (*тауҙар*).

Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың һүҙ яһаусы аффикстар сифатында ҡулланылыуын хәҙерге башҡорт телендә рәүешләшкән грамматик формалар өлгөһөндә күҙәтергә була. Боронғо төрки телендә ҡорал килеш аффиксы булып йөрөгән -***н*** (-***ын***/-***ен***, -***он***/-***өн***) форманты менән ҡулланылған йыл миҙгелдәре һәм тәүлек өлөштәре атамаларынан торған грамматик формалар хәҙер рәүеш функцияһын башҡарып йөрөйҙәр, ә боронғо килеш аффиксы рәүеш яһаусы аффикс булып сығыш яһай: а) *йәй-е-н*, *көҙ-ө-н*, *ҡыш-ы-н*, *яҙ-ы-н*, *кис-е-н*, *төн-ө-н*; б) *йәй-ге-һе-н*, *көҙ-гө-һөн*, *ҡыш-ҡы-һы-н*, *яҙ-ғы-һы-н*, *кис-ке-һе-н*, *иртә-ге-һе-н*.

*Аҙыҡҡа, бушҡа, ғәйепһеҙгә, йыраҡҡа, кирегә, кәрәкһеҙгә, уңға, уртаҡҡа, урынһыҙға, файҙаһыҙға, юғарыға, ятҡа*; *алыҫта, аулаҡта, йәшлектә, көҙлөктә, ҡышлыҡта, уңда, яҙлыҡта*;

*аңһыҙҙан, бәләкәйҙән, сараһыҙҙан, уңдан, уртаҡтан, юғарынан, яҡындан, яңынан* тибындағы рәүештәр сығышы буйынса ярашлы сифаттарҙан һәм рәүештәрҙән төбәү (*-ҡа, -кә, -ға, -гә*), сығанаҡ (*-дан, -дән, -ҙан, -ҙән, -тан, -тән*), урын-ваҡыт (*-да, -дә, -ла, -лә, -та, -тә*) килештәренең аффикстары ҡушып яһалған. Әммә хәҙер улар һүҙ яһаусы аффикстар ҡушып яһалған яһалма һүҙҙәр тип ҡарала.

Килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, алмашыныу күренешенә башҡорт телендә форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар ярҙамында яһалған яһалма һүҙҙәр дусар ителә.

Алмашыныу күренешенең төп әһәмиәте – башҡорт һүҙьяһалышын үҙ заманында форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар рәтендә йөрөгән форманттар ҡатнашлығында барлыҡҡа килгән тотош бер ҡатлам тәшкил иткән һүҙ яһаусы яңы аффикстар менән тулыландырыу.

## МОРФОНОЛОГИЯ

Морфонология (айырым осраҡтарҙа уны «фономорфология», «морфофонология», «морфофонемика», «морфонемика» тип тә йөрөтәләр) тел ғилеменең үҙ аллы бүлеге булараҡ һуңғы осорҙа өйрәнелә башланы.

**Морфонология** – һүҙьяһалыш, форма яһалыш һәм һүҙ үҙгәреш процестарында ҡатнашыусы морфемаларҙың үҙ-ара бәйләнеү үҙенсәлектәрен һәм фонологик төҙөлөшөн өйрәнеүсе бүлек. Тимәк, морфонологик күренештәр һүҙҙәрҙең статик торошонда түгел, ә динамик хәлдә булғанында, йәғни төрлө үҙгәрештәр кисергән осоронда күҙәтелә.

**Морфонологик күренештәр** тип һүҙьяһалыш процесында, форма яһалыш өлкәһендә һәм һүҙ үҙгәреш барышында ҡулланылған морфемаларҙың бәйләнеү үҙенсәлектәренә һәм уларҙың фонемалары составында күҙәтелгән төрлө үҙгәрештәргә әйтәләр.

Морфонология фәне һүҙьяһалышта, форма яһалышта һәм һүҙ үҙгәрештә барған процестарҙы, нигеҙҙә, ике яҡлап өйрәнеүгә ҡоролған: а) бер яҡтан – тамыр һәм аффиксаль морфемаларҙың ҡулланылыу мөмкинлектәре, йәғни уларҙың функциональ-семантик үҙенсәлектәре ҡаралһа, б) икенсе яҡтан – ошо процестар барышында күҙәтелгән фонологик үҙгәрештәр, йәғни был мөнәсәбәттәрҙең формаль күрһәткестәре тикшерелә.

Морфонология бүлегенең үҙ берәмеге бар, телселәр уны, поляк ғалимы Г. Улашин һәм рус телсеһе Н. С. Трубецкойға эйәреп, морфонема тигән термин менән атайҙар[1]. **Морфонема** – һүҙ үҙгәреше, форма һәм һүҙ яһалышы процестарында ҡатнашыусы бер үк морфеманың составындағы үҙ-ара сиратлашыусы фонемалар теҙмәһе. Әйтәйек, *китап* һүҙенә *-ым* һүҙ үҙгәртеүсе

---

[1] *Абдуллина Г. Р.* Башкирский язык. Морфонология. Уфа: Гилем, 2004. С. 8.

аффиксы ҡушылғанда, тамыр морфемала [п] фонемаһының [б] фонемаһы менән сиратлашыуы күҙәтелә. Һүҙ үҙгәреш процесында тамыр морфема *(китап-)* менән аффиксаль морфеманың *(-ым)* ҡушылыуҙары һөҙөмтәһендә бер үк тамыр морфема эсендә барлыҡҡа килгән сиратлашыусы фонемалар [п–б] морфонема булып сығыш яһайҙар.

Хәҙерге башҡорт телендә, башҡа төрки телдәрҙәге кеүек үк, морфонемаларҙың түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә була:

а) фонема – фонема [ҡ–ғ]: *ҡармаҡ – ҡармағым*;

б) фонема – нуль [ы– Ø]: *халыҡ – халҡым*;

в) фонемалар рәте – фонема [ғы–ҡ]: *ҡул яулығы – ҡулъяулыҡ*;

г) фонемалар рәте – нуль [ыл–Ø]: *ҡыҙыл – ҡыҙғылт*;

ғ) фонемалар рәте – фонемалар рәте [ие–оо]: *тимер – тимер-томор*;

д) нуль – фонема [Ø–ш]: *ике – икешәр*;

ҙ) нуль – фонемалар рәте [Ø–ий]: *Петровск – Петровскийым.*

Һүҙьяһалыш, форма яһалыш һәм һүҙ үҙгәреш процестарында ҡатнашыусы морфемаларҙың төрлө ҡушылмаларға берләшеүе һөҙөмтәһендә күҙәтелгән фонологик үҙгәрештәр морфонологик системаны тәшкил итә.

Морфонология тел ғилеменең башҡа бүлектәре, бигерәк тә үҙенә сиктәш булғандары менән билдәле бер мөнәсәбәттә һәм бәйләнештә тора.

Морфонологияның фонетика, фонология һәм акцентология бүлектәре менән бәйләнешенә ҡарата түбәндәгеләрҙе билдәләргә мөмкин[1]:

– телдә күҙәтелгән морфонологик күренештәр морфемаларҙың үҙ-ара ҡушылыу процесындағы фонетик процестар (редукция, ассимиляция, элизия һ. б.) һөҙөмтәһе булараҡ формалашалар;

– морфонемалар фән берәмеге булараҡ тамыр һәм аффиксаль морфемаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте барышында күҙәтелгән фонологик үҙгәрештәр (һуҙынҡы һәм тартынҡы фонемаларҙың, шулай уҡ уларҙың ҡушылмаларының сиратлашыуы һ. б.) рәүешендә ҡабул ителәләр;

– агглютинация ҡанундарына ярашлы, башҡорт телендәге акцентологик үҙгәрештәр (тамыр морфемалар ҡушылғанда, ишләшкәндә, ҡабатланғанда баҫым көсөнөң үҙгәреүе һ. б.) морфонологик үҙгәрештәрҙең үҙенсәлекле бер төрө һанала.

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р.* Башҡорт теленең морфологияһы. Өфө: Ғилем, 2000. 14-се б.

Морфонология менән морфемика бүлектәренең бәйләнеше туранан-тура тамыр һәм аффиксаль морфемаларҙың төҙөлөшөн асыҡлауҙан һәм уларҙың үҙ-ара төрлө мөнәсәбәттәргә инеү үҙенсәлектәренән (тамыр менән тамырҙың, тамыр менән аффикстарҙың төрлө типтағы ҡушылмалары формалашыуҙан) сығып билдәләнә.

Морфонология менән һүҙьяһалыш һәм морфология (форма яһалыш, һүҙ үҙгәреш) араһындағы бәйләнештәрҙе һүҙ яһалыш, форма яһалыш һәм һүҙ үҙгәреш процестарында ҡатнашыусы тамыр (яһаусы нигеҙҙәр) һәм аффиксаль морфемалар сиктәрендә барған морфонологик күренештәрҙең уртаҡлығында (һүҙ яһаусы, форма яһаусы, һүҙ үҙгәртеүсе нигеҙҙәрҙең ҡыҫҡарыуы, морфемалар араһына өҫтәлмә фонемалар ҡуйылыу, фонемалар сиратлашыу һ. б.) күрергә була.

Бынан тыш, морфонологияның тел системаһының башҡа бүлектәре (мәҫәлән, лексикология, стилистика) менән билдәле бер дәрәжәлә мөнәсәбәттәш икәнлеген билдәләү фарыз.

Хәҙерге башҡорт телендә морфонологик күренештәрҙең дүрт төрөн айырып ҡарарға була: нигеҙ (тамыр) ҡыҫҡарыу, фонемалар өҫтәлеү, фонемалар тәңгәлләшеү, фонемалар сиратлашыу.

## *Нигеҙ ҡыҫҡарыу*

Билдәле булыуынса, айырым осраҡтарҙа морфемалар киҫешкән урында бер үк типтағы фонемалар тупланыуы күҙәтелә. Бындай ауыр әйтелешле фонемаларҙың эргәләш тороуы хәҙерге башҡорт теленең орфоэпик ҡағиҙәләренән ситкә тайпылыу булып иҫәпләнә. Шуға күрә был осраҡта айырым фонемалар йәки фонемалар комплексы алып ташлана, бөтөнләй әйтелмәй, йәғни ҡыҫҡара. Нигеҙ ҡыҫҡарыу башҡорт һүҙҙәренең төҙөлөшөнә хас традицион эске законлылыҡтарға, дөрөҫ яңғырашҡа ынтылыш менән аңлатыла.

Әлеге күренешкә килтереүсе сәбәптәрҙән түбәндәгеләрҙе күрһәтергә була:

– башҡорт һүҙҙәренең баҫым төҙөлөшөнә бәйле рәүештә һүҙҙә баҫымдың һуңғы ижеккә (йәғни һүҙ үҙгәртеүсе аффиксҡа) күсеүе һөҙөмтәһендә яһаусы нигеҙҙәге баҫымһыҙ ҡалған һуҙынҡының һан һәм сифат яғынан үҙгәреүе;

– үҙ-ара ҡушылыусы ике нигеҙ (тамыр) араһында ҡалған һуҙынҡы фонемаларҙың ҡыҫырыҡланыуы;

– элекке ябай һүҙбәйләнештәрҙең бер һүҙгә ойошоуы һөҙөмтәһендә яһаусы нигеҙҙәрҙең икенсе компонентында аҙаҡҡы һуҙынҡының төшөп ҡалыуы һ. б.

Нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу күренешен фонемалар комплексы буйынса классификациялағанда, уны өс төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин:

а) һуҙынҡы фонемалар ҡыҫҡарыуы;

б) тартынҡы фонемалар төшөп ҡалыуы;

в) фонемалар комплексы ҡыҫҡарыуы.

Был морфологик күренеш, ҡағиҙә булараҡ, төп башҡорт һүҙҙәрендә лә, үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә күҙәтелә.

## *Фонемалар өҫтәлеү*

Һүҙҙәге морфемаларҙы бер-береһенә ялғау өсөн айырым осраҡтарҙа өҫтәлмә фонема йәки фонемалар комплексы ҡулланыла. Уларҙы йыш ҡына *интерфонема* (йәки *интерфикс)* тип тә йөрөтәләр.

Фонемалар өҫтәлеү күренеше фонемаларҙың бер-береһенә ҡушылыуын еңеләйтә, башҡорт һүҙҙәренең төҙөлөшөнә бик үк хас булмаған фонема ҡушылмаларынан арынырға, шулай уҡ әйтелештәре уңайһыҙ булған бер типтағы морфемаларҙы ҡабатлауҙан ҡотолорға ярҙам итә.

Өҫтәлмә фонема йәки фонемалар комплексын асемантик фонема тип атап йөрөтөү ҙә бар, сөнки улар бер ниндәй ҙә лексик мәғәнәгә эйә түгелдәр, үҙҙәрендә айырым грамматик мәғәнә лә тотмайҙар, уларҙың билдәле генә һүҙьяһалыш мәғәнәһе лә юҡ. Шулай итеп, интерфонемалар морфемаларҙы бер-береһенә ҡушыу вазифаһын ғына башҡара.

Фонемалар өҫтәлеү күренеше башҡорт телендә артыҡ киң таралмаған, шуға ҡарамаҫтан ул телдең морфонологик системаһында айырым урын алып тора.

## *Фонемалар тәңгәлләшеү*

Һүҙьяһалыш, форма яһалыш һәм һүҙ үҙгәреш процестарында бер-береһенә ҡушылыусы беренсе морфеманың аҙағы менән икенсе морфеманың башында ҡайһы саҡта бер үк төрлө һуҙынҡы йәки тартынҡы фонемалар осрашалар. Ындай бер үк яңғырашлы фонемаларҙың ҡабатланыуынан ҡотолоу маҡсатында улар бер-береһе менән тәңгәлләшәләр, йәғни береһе өҫтөнә икенсеһе тап килтерелә. Һөҙөмтәлә морфемалар сигендә осрашҡан ике бер төрлө фонема урынына бер генә фонема әйтелә башлай. Ындай морфонологик күренеш фонемалар тәңгәлләшеү тип йөрөтөлә.

Фонемалар тәңгәлләшеү нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу күренешенә бик яҡын тора, хатта ҡайһы бер ғалимдар был ике күренеште берләштереп ҡарарға ла тәҡдим итә. Әлеге морфонологик күренештәрҙе бер-береһенән нисек айырырға һуң?

Беренсенән, нигеҙ ҡыҫҡарыу процесында тамыр морфемалағы һуҙынҡы йәки тартынҡы фонемалар ҡыҫҡара; фонемалар тәңгәлләшеү иһә тик морфемалар сигендә барлыҡҡа килә (әгәр тамырҙағы фонема төшөп ҡалһа, ул мотлаҡ рәүештә яһаусы нигеҙҙең аҙағында урынлашҡан була).

Икенсенән, нигеҙ ҡыҫҡарыу барышында морфемалар сигендә төрлө типтағы фонемалар осраша һәм фонема (йәки фонемалар комплексы) төшөп ҡала; ә инде фонемалар тәңгәлләшеү процесында морфемалар сигендә ике бер төрлө фонема осрашыуы күҙәтелә, һөҙөмтәлә ошо ике фонеманың береһе генә тороп ҡала.

Башҡорт телендә фонемалар тәңгәлләшеү ике төргә бүлеп ҡарала:

а) һуҙынҡы фонемалар тәңгәлләшеү;

б) тартынҡы фонемалар тәңгәлләшеү.

## *Фонемалар сиратлашыу*

Фонемалар сиратлашыуҙы беҙ фонетик күренеш итеп ҡарарға күнеккәнбеҙ. Шул уҡ ваҡытта ул морфонологик күренеш булып та һаналырға хаҡлы, сөнки бер үк морфеманың (тамырҙың, нигеҙҙең йәки аффикстың) фонетик төҙөлөшөндәге үҙгәрештәр сиратлашыуҙың бер төрө итеп иҫәпләнә. Сиратлашыуҙар барлыҡҡа килһен өсөн, ҡайһы ваҡытта фонетик позициянан бигерәк грамматик позиция ҙур әһәмиәткә эйә.

Мәҫәлән, һаңғырау [п] үҙенең яңғырау ише [б] менән сиратлашһын өсөн, уның интервокаль позицияла, йәғни һуҙынҡы фонемалар араһында тороуы ғына етмәй (сағыштырығыҙ: *һыпыр-, һепер-*); был һаңғырау [п] фонемаһының билдәле бер морфеманың аҙағында тороуы һәм уға икенсе бер морфема ҡушылыуы мотлаҡ (*һип- + -ә = һибә*), йәғни [п] фонемаһының морфемалар сигендә урынлашыуы талап ителә.

Фонемаларҙың сиратлашыуы бер-береһе менән ҡушылыусы морфемаларҙың (тамыр, нигеҙ, аффикс) тоташҡан урындарында хасил була. Улар ниндәйҙер бер айырым мәғәнәгә (лексик, һүҙьяһалыш һ. б.) эйә түгелдәр, тик һүҙьяһалыш, форма яһалыш, һүҙ үҙгәреш процестарында ҡатнашыусы морфемаларҙың бер-береһе менән ҡушылыусанлыҡ мөмкинлектәрен киңәйтеүсе өҫтәлмә сара ғына булып йөрөйҙәр.

Башҡорт телендә иң киң таралған морфонологик күренеш булараҡ, фонемалар сиратлашыуын түбәндәгесә төркөмләргә мөмкин: а) нигеҙ аҙағындағы фонемалар сиратлашыуы; б) сингармонизм законына ярашлы, аффикстарҙың (һүҙ яһаусы, форма яһаусы, һүҙ үҙгәртеүсе) төрлө фонологик варианттарҙа ҡулланылыуы.

Фонемалар сиратлашыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүсе морфонемаларҙың ике төрөн айырып йөрөтәләр:

– үҙҙәренең составында һуҙынҡы фонемаларҙы берләштереүсе морфонемалар, йәғни һуҙынҡы морфонемалар;

– сиратлашыусы тартынҡы фонемаларҙы берләштереүсе морфонемалар, йәғни тартынҡы морфонемалар.

Шулай итеп, башҡорт телендә күҙәтелгән морфонологик күренештәргә нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу, фонемалар өҫтәлеү, фонемалар тәңгәлләшеү, фонемалар сиратлашыу күренештәрен индерәбеҙ. Ҡайһы бер үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмағанда, улар, нигеҙҙә, һүҙьяһалыш, форма яһалыш, һүҙ үҙгәреш өлкәләренең һәр береһе өсөн дә уртаҡ.

## ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ ӨЛКӘҺЕНДӘГЕ МОРФОНОЛОГИК КҮРЕНЕШТӘР

Һүҙьяһалыш процесында нигеҙ ҡыҫҡарыу, фонемалар өҫтәлеү, фонемалар тәңгәлләшеү, фонемалар сиратлашыу кеүек морфонологик күренештәр күҙәтелә.

### *Тамыр йәки нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу*

Һүҙьяһалыш процесында аффикслашыу, һүҙҙәр ҡушылыу, ҡабатланыу (редупликация), ҡыҫҡарыу (аббревиация) ысулдары менән һүҙҙәр яһалғанда, яһаусы нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуға биреләләр.

Нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу ике төрлө булырға мөмкин:

а) нигеҙҙең һуңғы фонемалары ҡыҫҡарыу: *һалпы* + -ай = *һалпай, кәкре* + *-әй* = *кәкрәй-;*

б) нигеҙҙең уртаһында урынлашҡан һуҙынҡылар төшөп ҡалыу: *ирек* + *-ен* = *иркен, ғилем* + *-и* = *ғилми.*

Нигеҙҙең һуңғы һуҙынҡыһы ҡыҫҡарыу телдә йыш күҙәтелә. Күпселек осраҡта нигеҙ составынан редукция тәьҫиренә йыш бирелеүсе [ы] һәм [э(е)] фонемалары төшөп ҡала, һирәклəп [о°], [ө], [ә] һуҙынҡыларына тамамланған нигеҙҙәр ҙә ҡыҫҡаралар: *йоҡо* + *-ла* = *йоҡла-, көмрө* + *-әй* = *көмрәй-, Йыһанша* + *-ин* = *Йыһаншин.*

Нигеҙ уртаһындағы һуҙынҡылар ҡыҫҡарыу, ҡағиҙә буларак, ике тартынҡы араһына тура килеүсән; был тартынҡылар йә сонор (талғын) характерлы, йә шартлаулы [к], [ҡ] тартынҡылары булырға мөмкин: *уйын + -а = уйна-, киҫек + -ен = киҫкен.*

Нигеҙ ҡыҫҡарыу күренешенә миҫалдарҙың байтаҡ ҡына өлөшө башҡорт теленең дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрендә сағылыш тапмаған, һәм улар тик йәнле һөйләү телмәрендә генә күҙәтелә. Шунлыҡтан әйтелештә ике вариант (тулы һәм тулы булмаған) йөрөй: *һуҡыр – һуҡырай-, һуҡрай-; ялтыр – ялтыра-, ялтра-.*

*Шиғыр – шиғри, шәхес – шәхси, сихыр – сихри, енес – енси, синыф – синфи* тибындағы ишле һүҙҙәрҙә лә [ы], [э(е)] фонемаларының төшөп ҡалыуы күҙәтелә:

*Ай тулғанда, тула минең күңел*
*Матурлыҡтан, яҡты донъянан.*
*Онотола хатта төн икәне,*
*Серле мәлдән **сихри** моң алам.*

Ғ. Дәүләтов.

Башҡорт телендә был һүҙ парҙарының килеп сығыу тарихы алыҫ үткәндәргә барып тоташа: нигеҙ телдә *шиғыр, шәхес, сихыр* һ. б. исемдәр ике тартынҡыға тамамланған бер генә ижекле һүҙ (*шиғр, шәхс, сихр*) булғандар. Башҡорт теле, башҡа төрки телдәре менән бер рәттән, яһаусы нигеҙҙе лә, яһалма нигеҙҙе лә айырым-айырым ғәрәп теленән үҙләштергәндә, уларҙы үҙенең фонетик ҡағиҙәләренә ҡалыплаштырған. Белеүебеҙсә, фонетик закондарға ярашлы, бер нисә тартынҡы йәнәш тора алмай; шуға күрә улар араһына һуҙынҡы фонема өҫтәлгән.

Ваҡыт үтеү менән, был һүҙ иштәренең исемдән килгән өлөшөн – яһаусы нигеҙ итеп, ә инде сифат менән белдерелгән өлөшөн яһалма һүҙ итеп ҡарай башлағандар. Хәҙерге башҡорт телендә улар бер-берећенән айырым рәүештә барлыҡҡа килгән һүҙҙәр рәүешендә түгел, үҙ-ара һүҙьяһалыш мөнәсәбәтендә тороусы һүҙ парҙары итеп ҡабул ителә.

Һүҙьяһалыш процесында айырым фонемалар ҡыҫҡарыуын һәм фонемалар комплексы төшөп ҡалыуын бүлеп ҡарарға була.

## *Айырым фонемалар ҡыҫҡарыу*

Аффикслашыу барышында исем, сифат, һан, ҡылым, рәүештәрҙән килгән яһаусы нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуға бирелә.

Ир-егет исемдәренән *-ин(а)* рус суффиксы ҡушылып башҡорт фамилиялары яһалғанда, һуңғы ижектәге [а], [ә], [о°], [ы], [э(е)]

һуҙынҡылары төшөп ҡала: *Ғәйнулла – Ғәйнуллин (а), Мортаза – Мортазин (а), Йәнтүрә – Йәнтүрин (а), Йәһүҙә – Йәһүҙин (а), Йәнбирҙе – Йәнбирҙин (а), Амангилде – Амангилдин (а), Юлғотло – Юлғотлин (а), Байғотло – Байғотлин (а).*

Ир-егет исемдәренә *-ич, -ович, -овна* суффикстары ҡушылып кешеләрҙең аталарының исемдәре яһалғанда, нигеҙҙәге [а] фонемаһы ҡыҫҡара: *Сафа – Сафич, Вафа – Вафич, Сәйфулла – Сәйфуллович, Ғарифулла – Ғарифуллович, Абдулла – Абдулловна, Хәйбулла – Хәйбулловна.*

Исемдәргә *-а/-ә, -ла/-лә* аффикстары ялғанып ҡылымдар яһалғанда, яһаусы нигеҙҙәге [ы], [э(е)], [о°], [ө], [ә] һуҙынҡылары төшөп ҡала: *уйын – уйна-; йәшен – йәшнә-; йоҡо – йоҡла-; төйөн – төйнә-; терәк – теркә-.*

Ҡайһы бер үҙләштерелгән исемдәрҙән ҡылымдар барлыҡҡа килгәндә, аҙаҡҡы [а] фонемаһы ҡыҫҡарыуға бирелә: *награда – наградла-, гравюра – гравюрла-, гранула – гранулла-.*

Исемдәрҙән сифаттар яһалғанда ла һирәкләп нигеҙ ҡыҫҡарыу күренеше осрай: *ирек – иркен, киҫек – киҫкен, бөҙөр – бөҙрә.*

Сифаттарға *-ай/-әй* аффиксы ҡушылып ҡылымдар яһалғанда, [ы], [э(е)], [о], [ө] һуҙынҡылары төшөп ҡалыусан: *һары – һарғай-, кәкре – кәкрәй-, олоғ – олғай-* (орф. *олоғай-*), *көмрө – көмрәй-:*

*Япраҡтарҙай* ***һарғайһам да,***
*Ашыҡмағыҙ ҡыҙғанырға.*
*Был яныуҙар – үҙе бәхет,*
*Күмеләйем ҡуҙҙарына.*

М. Нәзиров.

Ҡайһы бер һандарҙың нигеҙендә (атап әйткәндә, *алты, ете* һүҙҙәренә күплек мәғәнәһен биреүсе *-мыш/-меш* ҡушма форманты ҡушылғанда) һуңғы [ы], [э(е)] фонемаларының ҡыҫҡарыуы күҙәтелә: *алты – алтмыш; Алты йәшәр сәфәрҙән ҡайтһа,* ***алтмыш*** *йәшәр күрә килер, ти* (Мәҡәл); *ете – етмеш; Егет кешегә* ***етмеш*** *төрлө һөнәр ҙә аҙ* (Мәҡәл).

Исемдәр яһалышында ҡатнашыусы ҡылым нигеҙҙәренең һуңғы һуҙынҡылары ҡыҫҡарыуға бирелеүсән: *талҡы- – талҡан, баҫыр- – баҫрау, һула- – һулыш, йөрө- – йөргөнсө.* Миҫалдарҙан күренеүенсә, әлеге осраҡта, нигеҙҙәге һуңғы һуҙынҡылар менән бер рәттән, уртала урынлашҡандары ла төшөп ҡалырға мөмкин.

Ҡушма һүҙҙәр яһалышында ҡушылыусы нигеҙҙәрҙең һәр ҡайһыһы (I нигеҙ ҙә, II нигеҙ ҙә, III нигеҙ ҙә һ. б.) ҡыҫҡара ала: *һары + ут = һарут, ни + эшлә- = нишлә-.*

Әңгәмә барышында шәп (ҡыҙыу) итеп һөйләгән ваҡытта һүҙбәйләнеш йәки һөйләм эсендәге ике һүҙ араһында йыш ҡына йә һуҙынҡы, йә тартынҡы фонемалар төшөп ҡала:

а) *ҡара әле – ҡарәле* [а – Ø];

б) *шул кеше – шугеше, шул тиклем – шутиклем, шул саҡлы – шусаҡлы, шул хәтле – шухәтле* [л – Ø];

в) *был тиклем – бытиклем, был ҡәҙәр – быгәҙәр, был хәтлем – быхәтлем* [л – Ø].

Әлбиттә, был осраҡта *шул, был* һүҙҙәренең боронғо төрки телендә [шу], [бы < бу] рәүешле яңғырауын да иҫтән сығарырға ярамай.

Һүҙҙәр ҡушылыу процесында нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу күренеше башҡорт теле тарихының боронғораҡ осоронда ла күҙәтелә. Түбәндәге миҫалдар быны асыҡ дәлилләй: *ҡуҙғалаҡ < ҡуҙы ҡолаҡ, ярғанат < яры ҡанат, умырзая < гүмере зая, Оморҙаҡ < гүмере оҙаҡ, беләҙек < беләк йөҙөгө, йәйғор < йәй ҡоро;*

*Һыу шикелле аға был гүмерҙәр,*
*Тынғы белмәй ваҡыт, эй елә!*
*Күҙ тултырып, көнгә бер баға ла*
*Умырзая ергә эйелә.*

Р. Бикбаев.

Нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы менән һүҙҙәр яһалыу барышында нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуҙың төрлө типтары киң таралыш алған. Быны ниндәйҙер кимәлдә башҡорт телендә терминология өлкәһенә (ботаника, зоология, география һ. б.) ҡараған үҙенсәлекле ҡушма һүҙҙәрҙең ҙур бер ҡатламын барлыҡҡа килтереүҙә ошо ысулдың активлыҡ күрһәтеүе менән дә аңлатырға булалыр. Бындай ҡушма һүҙҙәрҙең компоненттары булып күберәк исемдәр, сифаттар, һандар, һирәгерәк ҡылымдар һәм рәүештәр сығыш яһайҙар.

«Билдәһеҙ эйәлек килештәге исем + эйәлек формаһындағы исем» тибындағы һүҙбәйләнештәр бер бөтөн һүҙ булып ҡушылған саҡта:

– II компонент нигеҙендәге [ы], [э(е)], [о°], [ө] эйәлек аффикстары төшөп ҡала: *һабан туйы – һабантуй, иләк йондоҙо – Иләкйондоҙ, ҡарға мороно – ҡарғаморон;*

– II компонент аҙағындағы һуҙынҡылар төшөп ҡалыу менән бер рәттән, [ҡ–ғ], [к–г], [п–б] тибындағы сиратлашыуҙар туҡтап ҡала һәм нигеҙ тәүге формаһына ҡайта: *ат ҡолағы – атҡолаҡ, ҡуян тубығы – ҡуянтубыҡ, икмәк силәге – икмәксиләк;*

– ике нигеҙ араһындағы һуҙынҡы фонемалар осрашһа, I компонент аҙағындағы һуҙынҡы фонема ла ҡыҫҡарыуға бирелә: *таба икмәге – табикмәк, бәпкә үләне – бәпкүлән;*

– ике нигеҙ араһындағы (I компонент аҙағындағы йәки II компонент башындағы) [к] һәм [ҡ] тартынҡылары ике һуҙынҡы йәки [ў], [ж], [з], [ҙ], [й], [л], [м], [н], [ң], [р] тартынҡылары менән һуҙынҡылар уратылышында ҡалалар икән, был осраҡта улар үҙҙәренең яңғырау парҙары [г ] һәм [ғ ] менән сиратлашалар: *бал ҡалағы – балғалаҡ, таба күмәсе – табагүмәс.*

Ҡайһы бер ҡушма кеше исемдәре яһалышында I компоненттың уртаһында йәки аҙағында урынлашҡан һуҙынҡылар төшөп ҡалалар: *ғилем + нур = Ғилминур, миңле + ислам = Миңлислам / Минислам, хужа + әхмәт = Хужәхмәт.*

«Эйәлек аффикслы исем + сифат» тибындағы һүҙбәйләнештәрҙең бер лексемаға ҡушылыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүсе ҡушма һүҙҙәрҙә лә I компонент аҙағындағы һуҙынҡы фонеманың ҡыҫҡарыуы күҙәтелә: *муйыны аҡ – Муйнаҡ, таҙы ҡара – таҙғара, эсе керле – эскерле.*

«Сифат + исем» тибындағы һүҙбәйләнештәрҙән исемдәр яһалыу барышында һуҙынҡыға башланған исемдәр алдынан килгән сифаттарҙың аҙаҡҡы һуҙынҡылары төшөп ҡала: *оло атай – олатай, оло әсәй – өләсәй, ҡары урман – ҡарурман:*

*Өмөт бөрөләрен ҡырау һуҡты –*
*Китеп барҙы беҙҙең аранан:*
*Әйтерһең дә, ер тетрәтеп ауҙы*
*Ҡарурманда ҡарт бер ҡарағай.*

А. Ғарифуллина.

Был күренеш айырым географик атамаларҙың яһалышында ла урын алған: *яңы ауыл – Яңауыл, ҡара иҙел – Ҡариҙел, ҡоро әйләнмә – Ҡорәйләнмә.*

Һандарҙан килгән яһаусы нигеҙҙәр аҙағындағы һуҙынҡы фонемаларҙың ҡыҫырыҡлап сығарылыуы түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

– ҡушма һүҙҙәр яһалышында: *туғыҙ* (бор. төрки: *токуз*) + *ун* (бор. төрки: *он, ан*) = *туҡһан; һигеҙ* (бор. төрки: *секиз*) + *ун* (бор. төрки: *он, ан*) = *һикһән;*

– һуҙынҡыға тамамланған һанға һуҙынҡы менән башланған исемдәр, ҡылымдар ҡушылып ҡушма исемдәр яһалғанда: *алты атар – алтатар (револьвер төрө), ике алыш – икалыш (спорт төрө), ете атар – етатар (винтовка төрө).*

Ҡушма һүҙҙәр яһалышында ҡатнашыусы ҡылымдарҙан һәм рәүештәрҙән килгән нигеҙҙәрҙең ҡыҫҡарыуына миҫалдар:

– [й] тартынҡыһынан һуң килгән ҡылымдың башланғыс тартынҡы фонемаһы төшөп ҡала: *бойһондор < буйһондор – бойондороҡһоҙ, бойондороҡло;*

– йәнле һөйләү телмәрендә ҡушма ҡылымдар яһалышында ярҙамсы ҡылымдың башланғыс һуҙынҡыһы ҡыҫҡара: *ҡайһылай* һорау алмашы + *ит-* ярҙамсы ҡылымы = *ҡайһылайт-*; *улай, былай, шулай, ошолай, тегеләй* билдәләү алмаштары + *ит-* = *улайт-, былайт-, шулайт-, ошолайт-, тегеләйт-*;

– ҡушылыусы нигеҙҙәрҙең икенсеһе [й] тартынҡы өнөнә башлана икән, беренсе нигеҙ аҙағындағы һуҙынҡы фонема ҡыҫырыҡлап сығарыла: *ары яҡ – аръяҡ, бире яҡ – бирьяҡ.*

*Нигеҙҙәр ҡабатланыу (редупликация)* ысулы менән һүҙҙәр яһалғанда, нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу үҙенсәлекле бер формала күҙәтелә: яһаусы нигеҙ үҙенең башланғыс формаһын юғалта һәм төп компоненттың «яңғырағы» сифатында ҡушма һүҙҙең I компоненты ролендә сығыш яһай башлай: *зыҡ – ызы-зызы, соңғор – оңғор-соңғор (юл), сыбыр – ыбыр-сыбыр, икһеҙ – икһеҙ-сикһеҙ:*

*Эй һеҙ, юлдар,* ***икһеҙ-сикһеҙ*** *юлдар,*
*Һеҙ – шаһиты ауыр хеҙмәттең.*

Р. Ғарипов.

## *Нигеҙҙәрҙең фонемалар комплексы иҫәбенә ҡыҫҡарыуы*

Аффиксаль һүҙьяһалыш барышында фонемалар комплексы ҡыҫҡарыу, ғәҙәттә, нигеҙҙең һуңғы өлөшөндә күҙәтелә[1]. Алып ташланыусы киҫәк (сегмент) түбәндәгесә булырға мөмкин:

а) **Һ+Т** (һуҙынҡы + тартынҡы): бындай тип фонемалар комплексы, ҡағиҙә булараҡ, ошондай ҡалыптар (моделдәр) менән һүҙҙәр яһалыуҙа осрай:

– сифат + *-ай/-әй* = ҡылым: *ҡылтыҡ – ҡылтай-, йәмшек – йәмшәй-;*

– ҡылым + *-ыш/-еш* = исем: *һағын- – һағыш;*

---

[1] *Абдуллина Г. Р.* Усечение производящей основы как регулярное морфонологическое явление в словообразовательной системе башкирского языка // Вестник Томского государственного университета. Филология. 2014. № 2(28). С. 7.

б) **Т+Һ:** быndай структура «сифат + *-лан/-лән-* = ҡылым» моделендә ҡыҫҡарыуға бирелә: *яҡшы атлы – яҡшатлан-*, *яман атлы – яманатлан-*, *ҡара эсле – ҡареслән-*.

Фразеологик берәмектәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән сифаттарға ҡылым яһаусы *-лан/-лән* аффиксы ҡушылғанда, *-лы/-ле* морфемаһының төшөп ҡалыуын ауыр әйтелешле *-лы* + *-лан* / *-ле* + *-лән* морфемалары ҡушылыуҙан ҡотолоу маҡсаты менән аңлатырға булалыр;

в) **Т+Һ+Т:** интернациональ һүҙҙәр базаһында барлыҡҡа килеүсе бер төркөм үҙләштерелгән сифаттарҙың аҙаҡҡы *-ный* өлөшө (*-ый* флексияһы һәм суффикстың һуңғы [н] фонемаһы) ҡыҫҡара; был күренеш түбәндәге суффикслы сифаттарға ҡағыла:

-альн-: *музыкальное (образование) – музыкаль (белем), документальная (повесть) – документаль (повесть);*

-арн-: *элементарное (понятие) – элементар (төшөнсә), фрагментарное (произведение) – фрагментар (әҫәр);*

-ивн-: *оперативное (действие) – оператив (хәрәкәт), субъективная (оценка) – субъектив (баһа);*

-н-: *вульгарная (речь) – вульгар (телмәр), актуальная (проблема) – актуаль (проблема);*

-ональн-: *профессиональное (образование) – профессиональ (белем биреү);*

-онн-: *революционное (движение) – революцион (хәрәкәт), реакционные (силы) – реакцион (көстәр);*

-орн-: *рефлекторная (дуга) – рефлектор (дуға);*

-уальн-: *индивидуальная (работа) – индивидуаль (эш), текстуальный (перевод) – текстуаль (тәржемә);*

-ичн-: *фанатичный (человек) – фанатик (кеше), архаичный (взгляд) – архаик (ҡараш);*

г) **Һ+Т+Т+Һ+Т:** *-ическ* суффикслы үҙләштерелгән сифаттарҙа һуңғы *-еский* өлөшө алып ташлана; шулай уҡ был осраҡта суффикстың тороп ҡалған *-ич* өлөшө *-ик* булып китә: *этнический (состав)* – этник (состав), *техническое (оснащение) – техник (йыһазландырыу), эстетический (вкус) – эстетик (зауыҡ).*

Нигеҙҙәр ҡушылыу процесында фонемалар комплексы ҡыҫҡарыу, башлыса, йәнле һөйләү телмәрендә һәм диалект һүҙҙәрендә урын алған:

1) I компоненты *алып* булған ҡушма ҡылымдарҙа әлеге компоненттың [лы] фонемалар комплексы иҫәбенә ҡыҫҡарыуы күҙәтелә: *алып + кил- = апкил-/әпкил-, алып + ҡуй- = апҡуй-, алып + ҡайт- = апҡайт-, алып + ҡал- = апҡал-, алып + ҡас- = апҡас-, алып + кит- = апкит- / әпкит-, алып + сыҡ- = апсыҡ-, алып + бир- = апир- / әпир-, алып + бар- = апар-;*

2) йәнле һөйләү телмәрендә I компоненты *ҡайһы* һүҙенән килгән айырым ҡушма һүҙҙәр яһалышында [һы] фонемалар комплексы төшөп ҡала: *ҡайһы ерҙә – ҡа*[йе]*рҙә, ҡайһы яҡта – ҡа*[йа]*ҡта* һ. б.

**Аббревиация** барышында ҡушылыусы нигеҙҙәрҙең айырым өлөштәре киҫелеп алыныу нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуҙың үҙенсәлекле бер төрө булып иҫәпләнә. Аббревиация юлы ике ысулды үҙ эсенә ала: а) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу; б) һүҙбәйләнештәрҙе ҡыҫҡартыу.

Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу ысулы менән ҡыҫҡартма һүҙҙәр (йәки аббревиатуралар) яһала. Аббревиатуралар, үҙ сиратында, график һәм лексик ҡыҫҡартмаларға бүленә.

**График ҡыҫҡартмалар** тик яҙма телмәрҙә генә ҡулланыла, ә һөйләү телмәрендә уларҙың тулы әйтелешле варианттары һаҡлана. Нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу күпселек осраҡтарҙа түбәндәге төр ҡыҫҡартмаларҙа күҙәтелә:

а) һүҙҙәрҙе тәүге хәрефтәренә тиклем ҡыҫҡартыу: *й. – йыл, ж. – журнал, с. – сәғәт, һ. – һум;*

б) һүҙбәйләнештәр составында ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙәге һәр нигеҙ тәүге хәрефенә тиклем ҡыҫҡарғанда: *һ. б. – һәм башҡалар, б. э. т. – беҙҙең эраға тиклем;*

в) һүҙҙәрҙе тартынҡы фонемаға тиклем ҡыҫҡартыу, тәүге өлөшөн генә ҡулланыу: *дүш. – дүшәмбе, проф. – профессор, үзб. – үзбәк;*

г) һүҙҙәрҙе тәүге һәм аҙаҡҡы хәрефтәрен йәки өлөштәрен алыу юлы менән ҡыҫҡартыу: *м-н – мәҫәлән, к-з – колхоз;*

ғ) һүҙҙәрҙәге һуҙынҡыларҙы алып ташлау: *Хжхмтв (Хужәхмәтов), Ғйнтднв (Ғәйнетдинов).*

**Лексик аббревиатуралар** стилистик ҡыҫҡартмаларға һәм ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәргә айырып ҡарала.

Стилистик ҡыҫҡартмалар битараф лексикаға ҡараған ғәҙәттәге тулы әйтелешле һүҙҙәрҙең йәки һүҙбәйләнештәрҙең ҡыҫҡартылған стилистик варианттары булып торалар: *Стәрле < Стәрлетамаҡ, мафон < магнитофон, «Уҡытыусы» < «Башҡортостан уҡытыусыһы».*

Ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙә нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуҙың түбәндәге төрҙәре күҙәтелә:

– нигеҙҙәрҙең башланғыс фонемаларына тиклем: *БЙИ – Башҡорт йәштәре иттифағы, БМО – Берләшкән милләттәр ойошмаһы;*

– нигеҙҙәрҙең тәүге хәрефтәренә тиклем: *БР* [*БэәР*] *– Башҡортостан Республикаһы, СДПА* [*эСДэПэА*] *– Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы;*

– нигеҙҙәрҙең тәүге өлөштәренә тиклем: *филфак – филология факультеты, профком – профсоюз комитеты;*

– «I нигеҙҙең тәүге өлөшө + II нигеҙ»: *драмтүңәрәк – драматик түңәрәк, мотобыҫҡы – моторлы быҫҡы;*

– инициаль характерҙағы ҡыҫҡартыуҙар:

а) фамилияның башланғыс фонемаһы менән тотош исемдең ҡушылыуы: *Ғ. Сәләм – Ғәлимов Сәләм, М. Хәй – Мөхәмәтйәров Хәй;*

б) исемдең башланғыс фонемаһы менән ҡыҫҡартылған фамилияның берләшмәһе: *М. Тажи – Мөхөтдин Тажетдинов, Н. Нәжми – Назар Нәжметдинов;*

в) ҡыҫҡартылған исем һәм фамилияның берләшмәһе: исем был осраҡта бер ни тиклем үҙгәреш кисерә: *Мостай Кәрим – Мостафа Кәримов;*

г) тотошлай исемдең һәм ҡыҫҡартылған фамилияның берләшмәһе: *Тимер Йосоп – Тимер Йосопов, Әхмәр Үтәбай – Әхмәр Үтәбаев;*

ғ) тотош исемдең һәм ҡыҫҡартылған, бер ни тиклем үҙгәртелгән фамилияның (*-и* суффикслы) ҡушылыуы: *Рәшит Нигмәти – Рәшит Нигмәтуллин, Мәжит Ғафури – Мәжит Ғафуров, Әхмәтзәки Вәлиди – Әхмәтзәки Вәлидов.*

## Фонемалар өҫтәлеү

Һүҙьяһалышта фонемалар өҫтәлеү күренеше күпселек осраҡта аффикслашыу һәм нигеҙҙәр ҡабатланыу (редупликация) барышында күҙәтелә[1].

### *Аффиксаль һүҙьяһалышта яһаусы нигеҙгә фонемалар өҫтәлеү*

Аффикслашыу процесында нигеҙҙең аҙағына фонемалар өҫтәлеүсән. Өҫтәлеүсе фонемалар булып башлыса тартынҡылар сығыш яһай, шул уҡ ваҡытта һуҙынҡы интерфонемалар ҙа осрай.

Морфемалар сигендә [н] интерфонемаһының барлыҡҡа килеүе *-са/-сә* аффиксы ярҙамында рәүештәр яһалғанда күҙәтелә: *бары – бары + н + са, гәҙәте – гәҙәте + н + сә, тейеше – тейеше + н + сә, кәрәге – кәрәге + н + сә.*

---

[1] *Абдуллина Г. Р.* Башҡорт телендә морфонологик күренештәр // Башҡортостан уҡытыусыһы. 2000. № 4. 29-сы б.

Миҫалдарҙан күренеүенсә, өҫтәлмә фонема эйәлек формаһындағы исем һәм модаль һүҙҙәрҙән рәүештәр яһалғанда ҡуйыла.

***-мп, -нг, -нк, -рв, -ск*** тартынҡылар ҡушылмаларына тамамланыусы үҙләштерелгән һүҙҙәргә һүҙ яһаусы *-ла, -лаш, -лы, -һыҙ, -лыҡ, -сы* аффикстары ҡушылғанда, нигеҙ менән аффикс араһында [Ø–ы] морфонемаһы барлыҡҡа килә: *штамп – штамп + ы + ла-, дифтонг – дифтонг + ы +лаш-, шланг – шланг + ы + лы (насос), бланк – бланк + ы + лыҡ (ҡағыҙ), банк – банк + ы + һыҙ (илдәр), нерв – нерв + ы +лы (кеше), пропуск – пропуск + ы +лы (эшсе).*

«Тартынҡыға бөтөүсе этноним + *-стан* аффиксоиды» моделе менән ил һәм дәүләт исемдәре, шул типтағы айырым һүҙҙәр яһалғанда, [о°], [ө], [ы], [и] интерфонемалары ҡуйыла: *башҡорт – Башҡорт + о + стан, һинд – Һинд + о + стан, төрөк – Төрк + ө + стан, үзбәк – Үзбәк + ы + стан* (орф. *Үзбәкстан*), *пак – Пак + и + стан:*

> ***Башҡортостан*** *– гөлбостан,*
> ***Сөмбөлостан,*** *нурбостан,*
> ***Башҡортостан*** *– гөлбостан,*
> ***Рәйхәностан,*** *нурбостан...*
> ***Башҡортостан*** *– йәмбостан,*
> ***Илһамыстан,*** *шиғырстан...*
>
> Ш. Бабич;

> *Һулар һауам, йәнгә дауам,*
> *Сыуаҡ, матур көнгөнәм,*
> *Күңелдәргә йәйғор һуҙған*
> *Ғәзиз, сәсән телгенәм,*
> ***Башҡортостан*** *– илгенәм!*
>
> А. Игебаев

***-ск, -вск, -дск, -еск, -лск, -нск, -мск, -рск*** менән бөтөүсе топонимдарға *-ҙар* аффиксы ҡушылғанда (һөҙөмтәлә шул территорияла йәшәүсе кешеләр төркөмө атамалары барлыҡҡа килә), нигеҙ һәм аффикс араһына [и] интерфонемаһы өҫтәлә: *Хабаровск – хабаровскиҙар, Петрозаводск – петрозаводскиҙар, Тобольск – тобольскиҙар, Томск – томскиҙар, Омск – омскиҙар, Ульяновск – ульяновскиҙар, Минск – минскиҙар.*

Ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән *-и* суффикслы ҡайһы бер яһалма сифаттарҙа [ў], [ү̆] (у – ү) интерфонемаһы күҙәтелә: *тәрбиә – тәрбиә + ү + и (әңгәмә), фәлсәфә – фәлсәфә + ү + и (уйҙар), донъя – донъя + у + и (эштәр).*

*-ик* суффиксы ярҙамында интернациональ һүҙҙәр базаһында барлыҡҡа килгән сифаттарҙа яһаусы нигеҙгә – *(а)т* интерфонемаһы өҫтәлә: *морфемный (анализ) – морфем + ат + ик (анализ), фонемный (характер) – фонем + ат + ик (характер).*

## *Һүҙ яһаусы аффиксҡа фонемалар өҫтәлеү*

*-ыҡ/-үек* [ўыҡ/ӳек] һәм *-ыс/-үес* [ўыс/ӳес] аффикстарында [ў], [ӳ] өҫтәлмә тартынҡы фонемаһы күҙәтелә: *гөрөлдә- – гөрөлдәүек, тәтелдә- – тәтелдәүек, елпе- – елпеүес, бәйлә- – бәйләүес.*

Башҡорт телендә тартынҡыға бөткән һүҙ яһаусы нигеҙҙәр менән тартынҡы фонемаларҙан ғына торған аффикстар араһына һуҙынҡы фонемалар ҡуйылыу ҙа осрай. Интерфонемалар булып, ғәҙәттә, [ы], [э(е)], [о°], [ө] тар әйтелешле һуҙынҡылар йөрөй, шулай уҡ айырым осраҡтарҙа киң әйтелешле [а] һәм [ә] һуҙынҡылары ла өҫтәлмә фонемалар рәүешендә сығыш яһайҙар. Морфемалар сигендә теге йәки был конкрет фонеманың барлыҡҡа килеүе яһаусы нигеҙҙең фонемалар составына бәйле, йәғни сингармонизм законына ярашлы була. Әлеге күренеш түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

а) ҡылымдарҙан *-с, -н, -ҡ/-к, -м, -ш* һүҙ яһаусы аффикстары ярҙамында процестың атамаһын белдереүсе исемдәр яһалышында: *йыуан – + -с = йыуаныс, йыр- + -н = йырын, ур- + -ҡ = ураҡ, көй- + -к =көйөк;*

б) «тартынҡыға бөткән ҡылым нигеҙҙәре + һүҙ яһаусы *-с, -ш, -м, -ҡ, -к* аффикстары моделе» буйынса процесс һөҙөмтәһен һәм эмоциональ билдәләрҙе белдереүсе сифаттар яһалғанда: *ашыҡ- – ашығыс, ау- – ауыш, айыр- – айырым;*

в) тартынҡы менән тамамланыусы исемдәш нигеҙҙәргә *-ҡ/-к, -л, -р, -т* аффикстары ҡушылып, хәл-торошто аңлатыусы ҡылымдар барлыҡҡа килгәндә: *юл- – юлыҡ-, һау- – һауыҡ-, күҙ- – күҙәт-, буҙ- – буҙар-;*

г) исем нигеҙҙәргә *-н* һүҙ яһаусы аффиксы ҡушылыу юлы менән ваҡыт рәүештәре яһалышында: *яҙ – яҙын, көҙ – көҙөн, кис – кисен.*

Юғарыла килтерелгән миҫалдарҙа өҫтәлмә һуҙынҡы фонема консонант (йәғни тартынҡынан торған) аффикстар алдына ҡуйыла ине. Ә түбәндә консонант аффикстарҙан һуң өҫтәлмә фонемалар ҡуйылыу осраҡтары ҡарала:

а) тартынҡыға бөткән ҡылым нигеҙҙәргә *-м, -г, -ғ, -к, -ҡ* һүҙ яһаусы аффикстары ҡушылып, процесс һөҙөмтәһе, шулай уҡ эш ҡоралы мәғәнәһендәге исемдәр яһалғанда: *баҫ- – баҫма, ҡур- – ҡурғы, ойот- – ойотҡо;*

б) исем нигеҙҙәрҙән *-л, -ғ, -г, -ҡ* аффикстары ярҙамында нимәгәлер эйә булыу мәғәнәһендәге, шулай уҡ ара һәм ваҡытҡа мөнәсәбәтте белдереүсе сифаттар барлыҡҡа килгәндә: ***ай – айлы, ал – алғы, аҫ – аҫҡы;***

в) исем нигеҙҙәргә *-с* аффиксы ҡушылып, эш башҡарыусы мәғәнәһендәге исемдәр яһалғанда: ***һаҡ – һаҡсы, итек – итексе, борғо – борғосо.***

Аффиксҡа ҡушылыусы киҫәк (сегмент) фонемалар составы буйынса үрҙә ҡаралған миҫалдарҙағыса бер генә фонеманан түгел, ә фонемалар комплексынан да торорға мөмкин. Был киҫәк (сегмент) Һ + Т ([ыл], [ел]) рәүешендә була: ***мыр – мырылда-, таҡ – таҡылда-, сәр – сәрелдә-.***

Шулай итеп, аффиксаль һүҙьяһалыш барышында фонемалар өҫтәлеү күренеше ҡатмарлы, үҙенсәлекле процесс итеп һаналырға хаҡлы. Өҫтәлмә фонемаларҙың ҡайһы морфемаға (нигеҙгәме әллә аффиксҡамы) ҡарауын билдәләү күп осраҡта ҡыйынлыҡтар тыуҙырыуы мәғлүм. Быны билдәләү өсөн махсус критерийҙар бар: өҫтәлмә фонеманың йәки фонемалар комплексының бер үк аффикслы бер нисә яһалма һүҙҙә ҡулланылыуы (был осраҡта сегмент аффиксҡа ҡарай) йәки интерфонемаларҙың төрлө аффикстар ярҙамында бер үк яһаусы нигеҙҙән барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәрҙә ҡулланылыуы (әлеге осраҡта сегмент яһаусы нигеҙгә ҡаратыла). Интерфонемалар, күренеүенсә, нигеҙҙең һуңғы өлөшөнә өҫтәлә, ә аффикстарҙың алдынан да, уларҙан аҙаҡ та ҡуйылырға мөмкин[1].

## ***Нигеҙҙәр ҡабатланыу (редупликация) процесында фонемалар өҫтәлеү***

Редупликация ысулы менән яһалған ҡайһы бер һүҙҙәрҙең II компоненты беренсеһенең тартынҡы фонема өҫтәлгән варианты булып тора. Ғәҙәттә, был өҫтәлмә фонема II компоненттың башында урынлаша. II компонентҡа тартынҡы фонемалар өҫтәлеү барышында түбәндәге морфонема моделдәре барлыҡҡа килә:

Мәҫәлән, **[Ø–м]** морфонемаһының ҡулланылыу осраҡтары:

а) исемдәрҙә: ***иҫке – иҫке-моҫҡо, ағас – ағас-мағас, имеш – имеш-мимеш***; шулай уҡ был морфонема яҙыусылар тарафынан стилистик маҡсаттарҙа уйлап сығарылған һүҙҙәрҙә, балалар

---

[1] *Абдуллина Г. Р.* Морфонология // Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2012. 190–195-се бб.

телмәрендә осрай: *уйын – уйын-муйын, китап – китап-митап, ит – ит-мит, иһаһай – иһаһай-миһаһай;*

б) сифаттарҙа: *иләҫ – иләҫ-миләҫ, икеле – икеле-микеле, аҡыш – аҡыш-маҡыш;*

в) рәүештәрҙә: *аҙ – аҙ-маҙ, өҫтән – өҫтән-мөҫтән*;

г) ҡылымдың аналитик формаларында: *ыҡ – ыҡ-мыҡ (кил-, ит-); ыр – ыр-мыр (кил-).*

**[Ø–т]** моделе лә киң таралған:

а) исемдәрҙә: *им – им-том, аҡһаҡ – аҡһаҡ-туҡһаҡ;*

б) рәүештәрҙә: *аңҡы – аңҡы-тиңке, алмаш – алмаш-тилмәш, әпен – әпен-төпөн, әүеш – әүеш-тәүеш, алпан – алпан-толпан, арҡыры – арҡыры-торҡоро.*

**[Ø–һ]** морфонемаһы, башлыса, рәүештәрҙә күҙәтелә: *урыҡ – урыҡ-һурыҡ, унда – унда-һанда, илке – илке-һалҡы;* айырым исемдәрҙә лә осрай: *алам – алам-һалам, әбей – әбей-һәбей.*

**[Ø–б]** йышыраҡ рәүештәрҙә һәм сифаттарҙа барлыҡҡа килә: *ашыҡ – ашыҡ-бошоҡ, артыҡ – артыҡ-бортоҡ.*

**[Ø–й]** морфонемаһы, ҡағиҙә булараҡ, ҡылымдың аналитик формаларында күҙәтелә: *алан – алан-йолан (ҡара-), алда – алда-йолда-.*

**[Ø–ш]** сифаттарҙа һәм ҡылымдың аналитик формаларында урын ала: *аҡай – аҡай-шаҡай, алтман – алтман-шалтман* (диал.), *әрәм – әрәм-шәрәм (ит-, бул-).*

**[Ø–с]** исемдәрҙә һәм сифаттарҙа ҡуйыла: *ырым – ырым-сырым, ала – ала-сола.*

Һирәкләп башҡа морфонема моделдәре лә осрарға мөмкин. Мәҫәлән:

**[Ø–ў]**: *ах – ах-вах* [ах-ўах];

**[Ø–к]**: *әшен – әшен-көшөн* (диал.);

**[Ø–п]**: *ух – ух-пух (кил-)* һ. б.

Килтерелгән миҫалдарға нигеҙләнеп, ҡабатлаулы һүҙҙәрҙе өс төркөмгә бүлергә була:

1) яһаусы нигеҙҙең, фонематик төҙөлөшөн үҙгәртмәйенсә, ҡабатланып килеүе: *имеш – имеш-мимеш;*

2) һуҙынҡылары шул уҡ рәткә ҡараған икенсе һуҙынҡылар менән алмашынған нигеҙҙәрҙең ҡабатланып килеүе: *аҡһаҡ – аҡһаҡ-туҡһаҡ;*

3) һуҙынҡылары башҡа рәт һуҙынҡыларына күскән һәм шуға ярашлы тартынҡылары ла йә ҡалынайып, йә нәҙегәйеп килгән нигеҙҙәр ҡабатланыуы: *алмаш – алмаш-тилмәш.*

Исем һәм һан нигеҙҙәре базаһында ҡабатлаулы һүҙҙәрҙең ҙур булмаған бер төркөмө яһалышында *-ма/-мә* формантын да ниндәйҙер кимәлдә интерфонема итеп ҡарарға мөмкин: *баш – башма-баш, һүҙ – һүҙмә-һүҙ, эҙ – эҙмә-эҙ, бер – бермә-бер.*

### *Һүҙҙәрҙең ҡыҫҡарыуы (аббревиация) барышында фонемалар өҫтәлеү*

Аббревиация ысулы менән яһалған ҡайһы бер кеше исемдәрендә ҡыҫҡарыусы нигеҙ аҙағына [и] фонемаһы өҫтәлеүе күҙәтелә: *Фәйзрахман – Фәйзи, Өммөямал – Өмми, Хәйретдин – Хәйри.*

## Фонемалар тәңгәлләшеү

Башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһында фонемалар тәңгәлләшеү ике кимәлдә күҙәтелә:

а) һуҙынҡы фонемалар тәңгәлләшеү;

б) тартынҡы фонемалар тәңгәлләшеү[1].

### *Һуҙынҡы фонемалар тәңгәлләшеү*

Фонемалар тәңгәлләшеү һөҙөмтәһендә түбәндәге һуҙынҡы морфонемалар барлыҡҡа килә:

**[аа–а].** Был морфонеманың ҡулланылыу осраҡтары:

а) «билдәһеҙ эйәлек килештәге исем + эйәлек формаһындағы исем» тибындағы һүҙбәйләнештәр базаһында ҡушма исемдәр яһалғанда: *алма ағасы – алмағас, таба ағасы – табағас;*

*Өҙөлөп тә төштө пар алмаҡай,*
*Йәтимләнеп ҡалды* ***алмағас.***

Йырҙан;

б) «сифат + исем» тибындағы һүҙбәйләнештәр нигеҙендә берекмә ҡушма исемдәр яһалышында: *ана андыҙ – анандыҙ (диал.), ҡара ағас – ҡарағас: Алдар ҡая ситенән бара бирҙе лә ҡарағастар теҙелеп үҫкән кәлтәгә менеп китте* (Н. Мусин);

в) айырым ҡушма ҡылымдар яһалғанда: *аша атла – ашатла-, олоға аш – олғаш-:*

*Тауҙарың күккә* ***олғашҡан,***
*Үҙәктә үҙәндәрең,*
*Йөрәгем аша аҡҡандай*
*Еҙемең, Егәндәрең.*

Р. Ниғмәтуллин;

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 64-се б.

г) һүҙбәйләнештәр нигеҙендә яһалған ҡушма һүҙҙәрҙә: *ҡаба алмай – ҡабалмай, таба алмай – табалмай:*

***Ҡыялманым,***
*Ләкин* ***тыялманым***
*Хистәремде оҙаҡ йүгәнләп.*

Ғ. Дәүләтов;

*Һандуғастар алма тешләй,*
*Тешләһә лә* ***ҡабалмай.***
*Минең күңел һине эҙләй,*
*Эҙләһә лә* ***табалмай.***

Халыҡ йырынан;

***Эйәралмай*** *етеҙ аҙымына,*
*Мин йүгерәм унан ҡалмаҫҡа.*
*Әйтә кеүек: «Кеше етмәй эшкә,*
*Үҫә һалсы, улым,* ***алмашҡа!****»*

Ғ. Дәүләтов.

**[ии–и]** морфонемаһы барлыҡҡа килеүгә миҫалдар:

а) [и] һуҙынҡыһына бөткән ир-егет исемдәренә *-ин (а)* суффиксы ҡушылып, башҡорт фамилиялары яһалғанда: *Ғәли – Ғәлин, Ғази – Ғазин, Хажи – Хажин;*

б) [й] фонемаһына тамамланыусы рәүештәргә *ит-* ҡылымы ҡушылып, бер төркөм ҡушма ҡылымдар яһалышында: *былай ит – былайт-, ошолай ит – ошолайт-, ҡайһылай ит – ҡайһылайт-;*

в) ҡушма ҡылымдар яһалғанда: *ни ит – нит-.*

**[ыы–ы].** Был морфонема «сифат + исем» тибындағы һүҙбәйләнештәр базаһында яһалған ҡушма исемдәрҙә күҙәтелә: *асы ыу – асыу, һары ыу – һарыу.*

### *Тартынҡы фонемалар тәңгәлләшеү*

Башҡорт теленең һүҙьяһалыш өлкәһендә, тәңгәлләшеү һөҙөмтәһе буларак, түбәндәге тартынҡы морфонема типтары урын алған:

**[нн–н].** Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән яһалған антропонимдарҙың морфемалары составында барлыҡҡа килә: *фән + нур = Фәнүр, йыһан + нур = Йыһанур, фән + ниса = Фәнисә, фән + нияз = Фәнияз.*

**[ӱӱ–ӱ]**; (орфографияла уу – у). Был морфонема «күрһәтеү алмашы + исем» тибындағы һүҙбәйләнештәрҙә осрай: *ана* [ӱ] [ӱ] *аҡыт – ана*[ӱ]*аҡытта, бына*[ӱ] [ӱ]*аҡыт – быңа*[ӱ]*аҡытта*.

**[йй–й]** морфонемаһы күҙәтелеү осраҡтары; I компоненты *ҡай, ней (<ни)* һорау алмаштарынан килгән һүҙбәйләнештәрҙә (миҫалдар йәнле һөйләү телмәренән алынды): *ҡай* [йа]*ҡ – ҡа*[йа]*ҡта, ҡай*[йе]*р – ҡа*[йе]*рҙә, ней* [йе]*р – не*[йе]*рҙә*.

## Фонемалар сиратлашыу

Һүҙъяһалыш процесында фонемалар сиратлашыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүсе морфонемалар ике төргә бүлеп ҡарала: 1) һуҙынҡы морфонемалар; 2) тартынҡы морфонемалар.

### *Һуҙынҡы морфонемалар*

Билдәле булыуынса, башҡорт теленең һуҙынҡылар системаһында сингармонизм законы үҙенең әһәмиәте буйынса айырым урын алып тора. Һүҙҙә мәғәнәүи һәм фонетик берҙәмлек барлыҡҡа килтереү маҡсатында, морфемаларҙы бер-береһенә ялғау барышында һуҙынҡылар гармонияһы төп роль уйнай.

Һуҙынҡылар гармонияһына ярашлы рәүештә, бер һүҙ эсендә (төп башҡорт һүҙҙәре күҙ уңында тотола) төрлө сингармоник моделгә ҡараған һуҙынҡылар ҡулланыла алмай. Шул сәбәпле бер фонема урынына икенсеһе әйтеп йөрөтөлә башлай. Һүҙҙәрҙе формалаштырыусы морфемалар төҙөлөшөнә ярашлы, сиратлашыусы фонемалар әлеге осраҡта морфонема барлыҡҡа килтерәлә инде.

### *Аффиксаль һүҙъяһалышта күҙәтелеүсе һуҙынҡы морфонемалар*

Түбәндәге аффикстар ярҙамында исемдәр яһалышында:
**-сы/-се/-со/-сө:** умарта-сы, тел-се, ҡош-со, йөк-сө;
**-лыҡ/-лек/-лоҡ/-лөк:** аш-лыҡ, күп-лек, боҙ-лоҡ, төн-лөк;
**-ыш/-еш/-ош/-өш:** йыйыл-ыш, әйт-еш, борол-ош, төҙөл-өш:

*Өмөт менән сыҡтым һәр юлыма,*
*Хаҡлығына уның инанып.*
***Ағыштарын**, беләм, бороп булмай,*
*Үкенһәң дә, ғүмер-йылғаның.*

Г. Әхмәтҡужина;

**-ҡыс/-кес/-ҡос/-көс, -ғыс/-гес/-ғос/-гөс:** ас-ҡыс, сәс-кес, тот-ҡос, өт-көс, юй-ғыс, эл-гес, бор-ғос, төй-гөс;

**-ма/-мә:** яҙ-ма, ҡуллан-ма, күтәр-мә.

Шулай итеп, аффикслашыу юлы менән яһалған исемдәрҙә [ы–э–о°–ө] һәм [а–ә] морфонема моделдәре осрай.

Сифаттар яһалышында:

**-ҡы/-ке/-ҡо/-кө, -ғы/-ге/-ғо/-гө:** *арт-ҡы, кис-ке, ос-ҡо, төш-кө, ал-ғы, әле-ге, борон-ғо, көҙ-гө;*

**-лы/-ле/-ло/-лө:** *яй-лы, ип-ле, моң-ло, көс-лө:*

*Инеш буйың **йәмле**,*
*Һыуҙарың да **тәмле**,*
*Елдәрең дә **наҙлы, ягымлы**.*
***Айлы** кистәрең дә*
*Әле иҫтәремдә –*
*Яратам мин тыуған ауылымды.*

Н. Иҙелбай;

**-һыҙ/-һеҙ/-һоҙ/-һөҙ:** *аяу-һыҙ, шәфҡәт-һеҙ, бойондороҡ-һоҙ, һөйкөм-һөҙ;*

**-лыҡ/-лек/-лоҡ/-лөк:** *тыш-лыҡ (материал), эс-лек (туҡыма), он-лоҡ (аҡса), өй-лөк (бүрәнә);*

**-сыл/-сел/-сол/-сөл:** *ваҡ-сыл, сәм-сел, ҡон-сол, көн-сөл;*

**-ғыс/-гес/-ғос/-гөс, -ҡыс/-кес/-ҡос/-көс:** *башлан-ғыс (класс), емер-гес (көс), тонсоҡтор-ғос, көйҙөр-гөс, ялҡыт-ҡыс, әлһерәт-кес;*

**-сан/-сән:** *уй-сан, аралашыу-сан, һүҙ-сән, хәрәкәт-сән;*

**-ыҡ/-ек/-оҡ/-өк:** *тым-ыҡ, йүгер-ек, боҙ-оҡ, өт-өк;*

**-ма/-мә:** *башҡар-ма (комитет), үр-мә (гөл);*

**-ҡаҡ/-кәк:** *ас-ҡаҡ, һөҙөш-кәк (һыйыр);*

**-саҡ/-сәк:** *тартын-саҡ, күңел-сәк;*

**-сыҡ/-сек:** *ҡылан-сыҡ, һөйлән-сек;*

**-һыу/-һоу:** *яман-һыу, моң-һоу:*

*Был ғүмер – туҡтамай аҡҡан һыу,*
*Ағымда яңғыҙың **яманһыу**,*
*Ҡайт инде, тиҙ килер тағы ҡыш,*
*Осалмаҫ йыраҡҡа яңғыҙ ҡош.*

С. Әлибай;

**-аҡ/-әк:** *ҡурҡ-аҡ, өрк-әк;*

**-даш/-дәш** (фонетик варианттары менән): *туған-даш, бил-дәш (һыйыр);*

**-ай/-әй:** *яндыр-ай, тик-әй* (диал.) *(көн).*

Күренеүенсә сифаттарҙың аффиксаль һүҙьяһалышы барышында [а–ә], [ы–е], [ы–о°], [ы–е–о°–ө] һуҙынҡы морфонема моделдәре барлыҡҡа килә.

Ҡылымдарҙа:

**-ай/-әй:** *оҙон-ай-, әкрен-әй-;*

**-ар/-әр/-ыр, -ер/-ор/-өр:** *буҙ-ар-, йәш-әр-, баҫ-ыр-, күп-ер-, ҡот-ор-, өй-өр-;*

**-ы/-е:** *бай-ы-, елп-е-;*

**-һын/-һен:** *юҡ-һын-, кәм-һен-;*

**-а/-ә:** *аш-а-, төҙ-ә-;*

**-лан/-лән:** *уй-лан-, эҙ-лән-;*

**-лаш/-ләш:** *ҡаршы-лаш-, кәңәш-ләш-.*

Үрҙә килтерелгән миҫалдарға ҡарағанда, ҡылымдар яһалышында [а–ә] һәм [ы–е] морфонемалары активлыҡ күрһәтәләр.

Рәүештәрҙә тик бер [а–ә] һуҙынҡы морфонема моделе генә ҡулланыла: **-са/-сә:** *ҡыҫҡа-са, иҫке-сә;* **-лай/-ләй:** *ярты-лай, тере-ләй;* **-лата/-ләтә:** *он-лата, әйбер-ләтә*; **-лап/-ләп:** *ай-лап, сәғәт-ләп.*

## *Редупликация процесында барлыҡҡа килеүсе һуҙынҡы морфонемалар*

Башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһында яһаусы нигеҙҙәрҙе ҡабатлау (редупликация) юлы менән яһалған һүҙҙәр айырым урын алып тора.

Редупликация барышында, ғәҙәттә, тәүге ижектәге һуҙынҡылар сиратлаша. Шул уҡ ваҡытта ҡалған ижектәрҙә лә сиратлашыу күренеше күҙәтелергә мөмкин.

Ҡабатлаулы һүҙҙәр яһалғанда, һуҙынҡы морфонемаларҙың түбәндәге типтары күҙәтелә:

**[а–о°].** Был төрҙәге морфонема оҡшатыу һүҙҙәрендә, исемдәрҙә һәм рәүештәрҙә осрай:

а) *шарт – шарт-шорт, даң – даң-доң, лас – лас-лос;*

б) *ҡарсыҡ – ҡарсыҡ-ҡорсоҡ, таныш – таныш-тонош, тамыр – тамыр-томор.*

Миҫалдарҙан күренеүенсә, исемдәрҙең тәүге ижегендә [а–о°] морфонемаһы барлыҡҡа килеү икенсе ижектә [ы–о°] һуҙынҡыларының сиратлашыуы менән берлектә бара.

в) айырым рәүештәрҙә, һуҙынҡы фонемалар сиратлашыуынан тыш, икенсе бер морфологик күренеш – фонемалар өҫтәлеүе күҙәтелә: *сатлы – сатлы-сотло, ашыҡ – ашыҡ-бошоҡ, алпан – алпан-толпан.*

**[о—а].** Был морфонеманың фонемалары сиратлашыуы, ҡағиҙә булараҡ, исемдәрҙә осрай: *соҡор – соҡор-саҡыр, ҡоро – ҡоро-һары, ботаҡ – ботаҡ-сатаҡ.*

**[а—ы].** Өноҡшаш һүҙҙәрҙә күҙәтелә: *шау – шау-шыу, шалтыр – шалтыр-шылтыр (шалтыр-шолтор), сатыр – сатыр-сытыр.*

**[и—о].** Исемдәрҙә урын алған: *им – им-том, тимер – тимер-томор, тишек – тишек-тошоҡ.*

**[ә—ө].** Рәүештәрҙә, оҡшатыу һүҙҙәрендә күҙәтелә: *әштер – әштер-өштөр, әпен – әпен-төпөн, сәп – сәп-сөп.*

**[ы—а].** Оҡшатыу һүҙҙәрендә һәм исемдәрҙә осрай: *лысҡ – лысҡ-ласҡ, сыбыҡ – сыбыҡ-сабыҡ, дығыр – дығыр-дағыр.*

**[а—у].** Исемдәрҙә һәм ымлыҡтарҙа урын алған: *аҡһаҡ – аҡһаҡ-туҡһаҡ, ах – ах-ух.*

Үрҙә һаналып кителгән морфонемалар ҡабатланыусы нигеҙҙәрҙең һуҙынҡы фонемалары сиратлашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Башҡорт телендә тик һуҙынҡы фонемалары менән генә бер-береһенән айырылыусы ҡабатлаулы һүҙҙәр һирәк осрай; башлыса, һуҙынҡыларҙың сиратлашыуы II компонентҡа тартынҡы фонема өҫтәлеү һәм тартынҡыларҙың сиратлашыуы менән берлектә бара.

Шулай итеп, редупликация процесында һуҙынҡы фонемалар сиратлашыуын ике төргә бүлеп ҡарарға мөмкин:

а) ҡабатлаулы һүҙҙең II компонентында ҡалын әйтелешле нигеҙҙәрҙең һуҙынҡылар составы тулыһынса сиратлаша: *соҡор – соҡор-саҡыр, ашыҡ – ашыҡ-бошоҡ;*

б) нәҙек әйтелешле нигеҙҙәрҙең яңғыраҡтары ҡабатланып килгәндә, улар составындағы һуҙынҡылар башҡа рәткә ҡараған ҡалын һуҙынҡылар менән сиратлашалар; был осраҡта тартынҡыларҙың ҡалын әйтелешле варианттары ҡулланыла: *көңгөр – көңгөр-ҡаңғыр, тишек – тишек-тошоҡ.*

## *Тартынҡы морфонемалар*

Башҡорт телендә тартынҡы морфонемалар һаны һуҙынҡы морфонемаларҙыҡынан артығыраҡ. Был күренеште башҡорт телендә, башҡа төрки телдәрендәге кеүек үк, тартынҡы фонемаларҙың һуҙынҡы фонемаларға ҡарағанда күберәк булыуы менән аңлатырға була.

Юғарыла билдәләп үтелеүенсә, ҡайһы ваҡытта морфемалар сигендә тел нормаларына ярашлы бер-береһе менән йәнәшә урынлаша алмаған фонемалар осраша. Был саҡта бер фонема урынына икенсеһе ҡулланыла башлай, йәғни сиратлашыу барлыҡҡа

килә. Артта урынлашҡан фонема йоғонтоһо аҫтында алда торған фонема сиратлашыуға бирелергә мөмкин (йәки – киреһенсә).

Башҡорт теленең һүҙьяһалыш өлкәһендә тартынҡы фонемалар сиратлашыуы аффикслашыу, нигеҙҙәр ҡушылыу һәм редупликация процестарында күҙәтелә.

## *Аффиксаль һүҙьяһалышта тартынҡы фонемалар сиратлашыу*

Һуҙынҡы фонемаға башланыусы һүҙ яһаусы аффикстар ҡушылғанда, яһаусы нигеҙҙең һуңғы тартынҡыһы сиратлашыуға бирелә.

Ҡылым, сифат, модаль һүҙҙәрҙән торған яһаусы нигеҙ аҙағында һуҙынҡылар уратылышында ҡалған [к] һәм [ҡ] тартынҡылары [г] һәм [ғ] менән сиратлаша: а) *яҡ- – яғынты, аҡ- – ағым, бөк- – бөгөм;* б) *аҡ – ағар-, нәҙек – нәҙегәй-;* в) *юҡ – юғал-.*

Исем, ҡылым, рәүеш нигеҙҙәр аҙағында һуҙынҡы фонемалар араһында [п–в] (орф. *б*) сиратлашыуы күҙәтелә: *һап – һа*[в]*аҡ, ҡап – ҡа*[в]*ыҡ, сап- – са*[в]*ын, күп- – кү*[в]*ек, күп – кү*[в]*әй-.*

Ҡылым, рәүеш, исем, сифат нигеҙҙәр аҙағында [к], [ҡ], [г], [ғ] фонемаларына башланған һүҙ яһаусы аффикстар алдынан [н-ң] сиратлашыуы осрай. Йәнле һөйләү телмәренә хас булған һәм башҡорт теленең орфографияһында сағылыш тапмаған был морфонологик күренеш регрессив ассимиляция менән аңлатыла: *ҡабарын- – ҡабары*[ң]*ҡы, күтәрен- – күтәре*[ң]*ке, алдын – алды*[ң]*ғы, көн – (теге) кө*[ң]*гө (ваҡиға), тын – ты*[ң]*ғы.*

Яһаусы нигеҙҙәрҙең һуңғы тартынҡылары сиратлашыуҙан тыш, аффиксаль һүҙьяһалышта морфонологик сиратлашыуҙар һүҙ яһаусы аффикстар составында ла осрай. Һүҙ яһаусы аффикстарҙың яһаусы нигеҙҙәр менән ярашыуы процесында, һуҙынҡы фонемалар сиратлашыу менән бер рәттән, үрҙә әйтелгәнсә, тартынҡылар сиратлашыуы ла күҙәтелә. Был типтағы сиратлашыуҙар морфемалар сигендәге фонетик процестар һәм сингармонизм законына бәйләп аңлатыла; һөҙөмтәлә аффикстарҙың фонетик варианттары менән эш итәбеҙ.

Һүҙ яһаусы аффикстар составында тартынҡы морфонемаларҙың ошондай төрҙәре урын алған:

а) түбәндәге аффикстар ярҙамында яһалыусы исемдәрҙә: **-лыҡ/-лек** (фонетик варианттары менән): *яңы-лыҡ, бит-лек;* **-ҡыс/-кес/-ғыс/-гес** (фонетик варианттары менән): *ҡыҫ-ҡыс, тиш-кес, йыу-ғыс, бел-гес;*

б) сифаттарҙа: **-ғы/-ге/-ҡы/-ке** (фонетик варианттары менән): *һуң-ғы, йәй-ге, ҡыш-ҡы, кис-ке;* **-даш/-таш/-ҙаш/-лаш:** *ауылдаш (ҡыҙ), яҡ-таш (бабай), ҡор-ҙаш (ир), оя-лаш (һүҙҙәр).*

### *Нигеҙҙәр ҡушылғанда тартынҡы фонемалар сиратлашыуы*

Нигеҙҙәр ҡушылыу процесында тартынҡы фонемалар сиратлашыуы ҡушылыусы ике нигеҙ сигендә күҙәтелә:

– һуҙынҡы фонемаға йәки [ж], [з], [ҙ], [й], [л], [м], [н], [ң], [р], [ғ] тартынҡыларына тамамланыусы нигеҙгә [ҡ] һәм [к] тартынҡыларына башланған икенсе бер исем йәки ҡылым нигеҙ ҡушылғанда, [ҡ–ғ] һәм [к–г] сиратлашыуҙары; бындай сиратлашыуҙар түбәндәге лексик-семантик төркөмдәр барлыҡҡа килтереүсе исемдәр яһалышында осрай:

а) һүҙбәйләнештәр базаһында терминдар (зоологик, ботаник, географик һ. б.) яһалғанда:

«исем + исем»: *бесәй + күҙ = бесәйгүҙ, тимер + ҡаҙыҡ = Тимерғаҙыҡ, ай + ҡолаҡ = айғолаҡ;*

«сифат + исем»: *ҡара + ҡойроҡ = ҡарағойроҡ, тере + көмөш = терегөмөш, ҡыҙыл + күҙ = ҡыҙылгүҙ;*

*Күгүләнен күккә сөйөп,*
*Яҙғы миҙгел етһә әгәр,*
*Үҙ-үҙемде дәртләндерәм,*
*Түҙәйек, тип, көҙгә ҡәҙәр.*

Ҡол Дәүләт;

б) һүҙбәйләнештәр нигеҙендә антропонимдар яһалғанда:

«сифат + *килде* ҡылымы»: *бай + килде = Байгилде, иҫән + килде = Иҫәнгилде;*

«сифат + *ҡол* исеме»: *миңле + ҡол = Миңлеғол, тере + ҡол = Тереғол;*

в) «сифат + исем» тибындағы һүҙбәйләнештәр базаһында яһалған гидронимдарҙа: *ала + күл = Алагүл, һай + кисеү = Һайгисеү, балыҡлы + күл = Балыҡлыгүл;*

– [ҡ] һәм [к] фонемаларына бөткән исем, сифат, һан нигеҙҙәренә һуҙынҡыға башланыусы икенсе нигеҙ ҡушылғанда, [ҡ-ғ] һәм [к-г] сиратлашыуҙары күҙәтелә: *ҡашыҡ + аяҡ = ҡашығаяҡ, асыҡ + ауыҙ = асығауыҙ, күк + иҙел = Күгиҙел;*

– [п] тартынҡыһына тамамланған I нигеҙгә [б] фонемаһына йәки һуҙынҡыға башланған II нигеҙ ҡушылғанда, интервокаль позицияла [п–в] (орф. *б*) сиратлашыуы урын ала: *һиҙәп + үлән = һиҙә*[в]*үлән, һатып + ал- = Һаты*[в]*ал;*

– [н–м] сиратлашыуы [б] һәм [м] тартынҡылары йоғонтоһо аҫтында ассимилятив характерҙа була; был типтағы сиратлашыуҙар, ҡағиҙә булараҡ, башҡорт теленең орфографияһында сағылыш тапмаған: *ун + биш* = [умбиш], *көн + бағыш* = [көмбағыш], *буран + бай* = [бурамбай].

### *Редупликация процесында тартынҡылар сиратлашыуы*

Башҡорт телендә ҡабатлаулы һүҙҙәрҙең компоненттарындағы тәүге тартынҡылар йышыраҡ сиратлашалар. Күпселек осраҡта ҡабатлаулы һүҙҙәрҙең II компонентында башланғыс фонема сифатында [м], [б], [һ] тартынҡылары ҡулланыла:

**[к—м].** Был морфонема исем, сифат, рәүештәрҙә, оҡшатыу һүҙҙәрендә киң таралған: *китап-митап, кирле-мырлы, келт-мелт.*

**[ҡ—м].** Ҡағиҙә булараҡ, рәүештәрҙә һәм оҡшатыу һүҙҙәрендә осрай: *ҡыйыҡ-мыйыҡ, ҡырын-мырын, ҡыштыр-мыштыр.*

**[ш—м].** Ғәҙәттә, оҡшатыу һүҙҙәрендә күҙәтелә: *шатыр-мотор, шар-мар, шылт-мылт.*

**[т—м].** Сифаттарҙа, оҡшатыу һүҙҙәрендә һәм ҡылымдарҙың аналитик формаларында барлыҡҡа килә: *тиле-миле, тырт-мырт, тар-мар (кил-).*

**[һ—м].** Был морфонема рәүештәрҙә һәм сифаттарҙа урын алған: *һирәк-мирәк, һырлы-мырлы, һары-мары (үлән).*

**[б—һ].** Башлыса, рәүештәрҙә һәм исемдәрҙә барлыҡҡа килә: *берәм-һәрәм, ботаҡ-һатаҡ.*

## ФОРМА ЯҺАЛЫШТАҒЫ МОРФОНОЛОГИК КҮРЕНЕШТӘР

Башҡорт телендәге һүҙ төркөмдәренең морфологик категориялары формалашыу процесында үҙ-ара грамматик бәйләнештә тороусы тамыр һәм форма яһаусы аффикс составында төрлө үҙгәрештәр күҙәтелә. Форма яһалыштағы бындай күренештәр нигеҙ һәм уға ҡушылыусы аффикс составындағы фонемаларҙа телмәр ағышында барлыҡҡа килеүсе төрлө фонетик процестар менән аңлатыла.

Форма яһалышта морфонологик күренештәрҙең түбәндәге төрҙәрен айырып ҡарарға мөмкин: форма яһаусы нигеҙҙәрҙең ҡыҫҡарыуы, фонемалар өҫтәлеү, фонемалар тәңгәлләшеү, фонемалар сиратлашыу.

### Нигеҙ ҡыҫҡарыу

Форма яһаусы нигеҙҙәрҙең ҡыҫҡарыуы башҡорт һүҙҙәренең акцент-ритмик структураһына бәйле. Бындай ҡыҫҡарыуҙың сәбәбе итеп һуҙынҡылар редукцияһы күрһәтелә. Әлеге морфонологик күренештең төрлө һүҙ төркөмдәрендә һәм айырым

грамматик формаларҙа таралыу кимәле төрлөсә. Нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу күренеше исемдәрҙең һәм сифаттарҙың грамматик формалары яһалышында киң таралған, шулай уҡ йыйыу һандары яһалғанда ла йыш күҙәтелә[1].

Фонемалар комплексы буйынса классификациялағанда, форма яһаусы нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуҙы өс төргә бүлеп ҡарарға була:

– һуҙынҡы фонемаларҙың ҡыҫҡарыуы;

– тартынҡы фонемаларҙың төшөп ҡалыуы;

– фонемалар комплексы ҡыҫҡарыуы.

Һуҙынҡы фонемалар ҡыҫҡарыу ошондай осраҡтарҙа күҙәтелә:

а) йыйыу һандарының яһалышында: *алты – алт-ау, ете – ет-әү, ике – ик-әү:*

*Икәү бергә йөрөгән туғайҙарҙа*
*Таныш ине һәр гөл, һәр һуҡмаҡ.*
*Күҙ алдыңа килер, төштәреңә керер,*
*Һағындырыр әле тыуған яҡ.*

Р. Мифтахов;

б) сифаттарға дәрәжә категорияһы аффикстары ҡушылғанда: *һары – һар-ғылт, ҡаты – ҡат-ҡыл, әсе – әс-келт, һоро – һор-ғолт, сөсө – сөс-көлт (өм):*

*Һандыҡ төбөндәге һарғылт хаттар,*
*Эленеп торған һарғылт һүрәттәр.*

Р. Бикбаев;

в) субъектив баһалауҙы белдереүсе сифаттар яһалғанда: *яҫы – яҫ-маҡ, ҡыйыш – ҡыйш-ыҡ, йомро – йомор-ҡай, йомор-той, йомор-сай;* был төркөмгә ҡараған һүҙҙәр, ғәҙәттә, йәнле һөйләү телмәренә хас.

Тартынҡы фонемалар төшөп ҡалыу күренеше башлыса үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә осрай; шул уҡ ваҡытта йәнле һөйләү телмәренә ҡараған бер төркөм башҡорт һүҙҙәрендә лә нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуҙың тартынҡы фонемалар иҫәбенә башҡарылыуы билдәле.

Бер иш тартынҡыларға бөткән сит тел һүҙҙәренең күплек формалары яһалғанда был тартынҡыларҙың береһе төшөп ҡала: *класс – клас-тар, компресс – компрес-тар, пресс – прес-тар,*

---

[1] *Абдуллина Г. Р.* О месте морфонологии в языковой иерархии // Роль личности в историко-культурном пространстве: Материалы межд. науч.-практ. конф. Уфа: РИЦ Баш ГУ, 2014. С. 15.

*грамм – грам-дар, килограмм – килограм-дар, кристалл – кристал-дар, металл – метал-дар.*

Субъектив баһа аффикслы исемдәрҙә форма яһаусы нигеҙҙәрҙең һуңғы фонемалары ҡыҫҡара: *бабай – баба-ҡай, малай – мала-ҡай, абзый* (диал.) – *абзы-ҡай, әпәй* (диал.) – *әпә-кәй.*

Йәнле һөйләү телмәрендә [л] тартынҡыһына тамамланыусы ҡайһы бер ҡылымдарға йүнәлеш, һөйкәлеш, заман категориялары аффикстары ҡушылғанда, тамырҙың һуңғы фонемаһы әйтелмәй: *бул- – бу-һа, бу-ған; кил- – ки-һә, ки-гән, ки-тер.*

Фонемалар комплексы ҡыҫҡарыу күренешенә түбәндәге миҫалдарҙы килтерергә мөмкин:

*Урал ғына тауҙың көн битендә*
*Үҫә икән ҡырлы бер ҡурай,*
*Шул ҡурайҙы ҡырҡып уйнаниһәң,*
*Моңо донъяларҙы бер урай.*

Ҡ. Аралбай.

Аҙһытыу дәрәжәһе аффикслы сифаттарҙа [ыл] һәм [ел] фонемалар комплексы ҡыҫҡарыуы осрай: *ҡыҙыл – ҡыҙ-ғ*[ыл]*т, йәшел – йәш-к*[ел]*т:*

*Киске* ***ҡыҙғылт*** *ағын һыу өҫтөндә*
*Йөҙөп барам көндәм кәмәлә.*
*Бәхет хаҡында юҡ ҙур хыялым,*
*Ваҡ ғәмем юҡ фани нәмәлә.*

М. Кәрим.

Субъектив баһа төҫмөрлө исемдәрҙә лә был күренешкә миҫалдар табып була: *бәрҙе – бәр-сәк* (диал.), *ҡолон – ҡол-ҡай, ҡол-ҡас* (диал.).

Артыҡлыҡ дәрәжәһендә тороусы сифаттарҙа фонемалар комплексы ҡыҫҡарыу киң таралған: *таҙа – тап-таҙа, йәшел – йәп-йәшел, ҡара – ҡап-ҡара, көрән – көп-көрән.* Килтерелгән миҫалдарҙа нигеҙҙәр ҡыҫҡарыуы фонемалар өҫтәлеү күренеше менән берлектә бара, йәғни ҡабатлаулы һүҙҙең I компонентына [п] фонемаһы өҫтәлә.

## Фонемалар өҫтәлеү

Алда билдәләп үтелеүенсә, айырым осраҡтарҙа һүҙҙәге морфемаларҙы бер-береһенә ялғаусы морфонологик сара булып өҫтәлмә фонемалар (йәки фонемалар комплексы) сығыш яһай.

Улар лексик һәм грамматик мәғәнәгә эйә түгелдәр, морфемаларҙы бер-береһенә ялғап ҡына йөрөйҙәр. Форма яһалыш процесында фонемалар өҫтәлеү күренешенең түбәндәге төрҙәре осрай.

### *Һуҙынҡы фонемалар өҫтәлеү*

Субъектив баһа аффикслы ҡайһы бер исемдәрҙә [ы] һәм [е] интерфонемалары күҙәтелә: *ҡыҙ – ҡыҙ*-[ы]-*ҡай, ҡарт – ҡарт*-[ы]-*ҡай, ул – ул*-[ы]-*ҡай* (һөйл.), *ир – ир*-[е]-*кәй* (һөйл.), *йән – йән*-[е]-*кәй* (һөйл.).

Һуҙынҡы фонемалар өҫтәлеү тәртип һандары яһалышында киң таралған: *алтмыш*-[ы]-*нсы, бер*-[е]-*нсе, биш*-[е]-*нсе, өс*-[ө]-*нсө, йөҙ*-[ө]-*нсө:*

*Өсөнсө көн епшек ҡар яуа,*
*Өсөнсө көн тоташ, өсөнсө көн*
*Әрней минең иҫке бер яра.*
*Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.*

М. Кәрим.

Бүлем һандары яһалғанда ла һуҙынҡы морфонема моделдәре осрай: *туҡһан*-[ы]-*шар, һикһән*-[е]-*шәр.*

Шулай уҡ [мп], [нг], [нк], [рв], [ск] тартынҡыларына тамамланыусы сит тел һүҙҙәренә күплек аффикстары ҡушылғанда, тамыр һәм аффиксаль морфемалар араһына [ы] интерфонемаһы өҫтәлә: *штамп-ы-лар, ранг-ы-лар, бланк-ы-лар, нерв-ы-лар, киоск-ы-лар.*

Тартынҡы фонемаға бөтөүсе сифат һәм рәүештәргә сағыштырыу дәрәжәһе аффикстары өҫтәлгәндә лә был морфологик күренеш киң таралған:

а) *ауыр*-[ы]-*раҡ, еңел*-[е]-*рәк, һәйбәт*-[е]-*рәк, оҙон*-[о°]-*раҡ, өлгөр*-[ө]-*рәк, сабыр*-[ы]-*раҡ;*

б) *аҙ*-[ы]-*раҡ, тиҙ*-[е]-*рәк, борон*-[о°]-*раҡ, көндөҙ*-[ө]-*рәк, аҙаҡтан*-[ы]-*раҡ, йәһәт*-[е]-*рәк.*

Һуңғы фонемаһы тартынҡы булған ҡылымдарҙан затһыҙ ҡылым формалары (исем ҡылым, сифат ҡылым, рәүеш ҡылым, инфинитив) яһалған осраҡта форма яһаусы нигеҙгә һуҙынҡы фонема өҫтәлә: *йәшен*-[е]-*ү, йәшен*-[е]-*р, йәшен*-[е]-*п, йәшен*-[е]-*ргә; ҡаран*-[ы]-*у, ҡаран*-[ы]-*р, ҡаран*-[ы]-*п, ҡаран*-[ы]-*рға; онот*-[о°]-*у, онот*-[о°]-*р, онот*-[о°]-*п, онот*-[о°]-*рға.*

Ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ йүнәлеше формалары яһалыу процесында тартынҡы фонемаға тамамланған ҡылымдарҙа ла өҫтәлмә һуҙынҡы фонемалар ҡуйыла: *йый*-[ы]-*н-, йый*-[ы]-*л-,*

*йый*-[ы]-*ш*-; *эт*-[е]-*н*-, *эт*-[е]-*л*-, *эт*-[е]-*ш*-; *тот*-[о°]-*н*-, *тот*-[о°]-*л*-, *тот*-[о°]-*ш*-.

Аҙаҡҡы фонемаһы тартынҡынан килгән ҡылым тамырҙарына күләм категорияһы аффикстары өҫтәлгәндә, интерфонемалар барлыҡҡа килеүе күҙәтелә: *яҙ*-[ы]-*ңҡыра*-, *яҙ*-[ы]-*штыр*-; *бор*-[о°]-*штор*-, *бор*-[о°]-*ңҡора*-; *һөрт*-[ө]-*штөр*-, *һөрт*-[ө]-*ңкөрә*-.

Ҡылымдарҙың ҡайһы бер һөйкәлеш һәм заман формалары яһалышында ла морфемаларҙы бер-береһенә ялғаусы һуҙынҡы фонемалар урын ала: *яҙ*-[а]-*саҡ*, *яҙ*-[ы]-*р*, *яҙ*-[а]-*һы (килә)*; *әйт*-[ә]-*сәк*, *әйт*-[е]-*р*, *әйт*-[ә]-*һе (килә)*; *йөҙ*-[ә]-*сәк*, *йөҙ*-[ө]-*р*, *йөҙ*-[ә]-*һе (килә)*.

### *Тартынҡы фонемалар өҫтәлеү*

Был морфонологик күренеш сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең артыҡлыҡ дәрәжәһе яһалышында осрай; [п] һәм [м] интерфонемаларының барлыҡҡа килеүе әлеге осраҡта нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу процесы менән берлектә бара: *ҡыҙыл – ҡып-ҡыҙыл, һыуыҡ– һып-һыуыҡ, яңы – яп-яңы, йәшел – йәм-йәшел, күк – күм-күк, бушҡа – буп-бушҡа:*

*Башҡортостан! Һинең гүзәллеккә*
*Тиң булырлыҡ ерҙәр бар микән?*
*Аҡҡош кеүек ап-аҡ Агиҙелкәй*
*Ҡайһы илдә генә бар икән?*

З. Ҡолбаев.

Һуҙынҡы фонемаға тамамланған һандарҙан бүлем төркөмсәһе формаһы яһалғанда, [ш] интерфонемаһы өҫтәлә: *илле-ш-әр, егерме-ш-әр, алты-ш-ар, ике-ш-әр.*

Ҡайһы бер алмаш төркөмсәләрендә нигеҙ менән аффикс араһында [н] өҫтәлмә фонемаһы ҡуйылыуы күренә: *теге-н-дәй, ошо-н-дай.*

Теләк-өндәү һәм хәбәр һөйкәлешенең киләсәк заман формалары яһалышында һуҙынҡыға бөтөүсе ҡылым нигеҙҙәренә фонемалар өҫтәлеүе йыш ҡына осрай: *уҡы*[й-асаҡ], *йөрө*[й-әсәк], *йоҡла*[й-асаҡ], *бейе*[й-әсәк].

### *Фонемалар комплексы өҫтәлеү*

Морфонологик күренештәрҙең был төрөнә миҫалдарҙы сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең артыҡлыҡ дәрәжәһе категорияһы яһалышында күҙәтергә була: *тиң – типә-тиң, яңғыҙ – япа-яңғыҙ:*

*Һинән башҡа донъя япа-яңғыҙ,*
*Донъя етем, үкһеҙ.*
*Әйтерһең, күк ерһеҙ тороп ҡалды,*
*Ә ер ҡалды күкһеҙ.*

М. Кәрим.

Фонемалар өҫтәлеүҙе төрлө һүҙ төркөмдәре эсендә таралыу даирәһе буйынса классификациялағанда, шуны әйтергә мөмкин: был күренеш башлыса ҡылым, исем, һандарға хас, шулай уҡ айырым осраҡтарҙа сифат, рәүеш һәм алмаштарҙың грамматик формалары яһалышында ла күҙәтелә.

## Фонемалар тәңгәлләшеү

Һүҙ формалары яһалышында фонемалар тәңгәлләшеү телдең фонетик законлылыҡтарына нигеҙләнә. Был күренеш артикуляцион яҡтан оҡшаш булған эргәләш тороусы бер нисә фонеманың тап килеүен булдырмау маҡсатында барлыҡҡа килә.

Фонемалар тәңгәлләшеү күренешенә миҫалдар һөйләү телмәрендә лә, яҙма телмәрҙә лә урын ала; ҡайһылары тик айырым диалекттарҙа һәм һөйләштәрҙә генә осрай. Форма яһалыш процесында фонемалар тәңгәлләшеү исем һәм сифаттарҙың грамматик категориялары яһалышында ғына күҙәтелә.

[к] һәм [ҡ] фонемаларына бөткән исемдәргә һәм сифаттарға субъектив баһалауҙы белдереүсе *-ҡай/-кәй* аффиксы ҡушылғанда, эргәләш тороусы бер үк әйтелешле ике фонема урынына береһе генә әйтелә башлай:

– яңғыҙлыҡ исемдәрҙә: *Кәмәлек + -кәй = Кәмәлекәй, Ирәндек + -кәй = Ирәндекәй, Ҡыуандыҡ+ -ҡай = Ҡыуандыҡай:*

***Ирәндекәй** тауы бигерәк бейек,*
*Тора-тора мендем дә башына.*
*Кемдәр генә ғашиҡ, ай, булмаған,*
*Сәлимәкәй, ҡара ла ҡашыңа.*

Халыҡ йырынан;

– уртаҡлыҡ исемдәрҙә: *йөрәк + -кәй = йөрәкәй, сәтәк + -кәй = сәтәкәй, беләҙек + -кәй = беләҙекәй, үҙәк + -кәй = үҙәкәй:*

*Дим буйҡайҙары, ай, бүтәгә,*
*Ат **аяҡайҙарын** шул күтәрә.*
*Йыр йырлауҡайҙары тәсбих түгел,*
*Әҙерәк-әҙерәк күңел күтәрә.*

Халыҡ йырынан;

– сифаттарҙа: *түңәрәк* + -*кәй* = *түңәрәкәй, ҡыйтыҡ* + -*ҡай* = *ҡыйтыҡай, йомшаҡ* + -*ҡай* = *йомшаҡай, нәҙек* + -*кәй* = *нәҙекәй:*

*Түңәрәкәй күлдә, ай, дүрт өйрәк,*
*Мәргән үк булһаң да, ат, егет.*

Халыҡ йырынан.

Үрҙә күрһәтелгән миҫалдар, нигеҙҙә, йәнле һөйләү телмәренә хас, һәм уларҙың ҡайһы берҙәре башҡорт теленең орфографияһында сағылыш тапмаған.

-*зд*, -*ст*, -*сть*, -*вт* менән тамамланыусы үҙләштерелгән исемдәр күплек категорияһы аффикстары ҡабул иткәндә, ике бер иш фонема тәңгәлләшә: *поезд* + -*дар* = *поездар, филателист* + -*тар* = *филателистар, повесть* + -*тар* = *повестар, космонавт* + -*тар* = *космонавтар.*

## Фонемалар сиратлашыу

Фонемалар сиратлашыу форма яһалыштағы (шулай уҡ һүҙьяһалыштағы, һүҙ үҙгәрештәге кеүек үк) морфонологик күренештәр рәтендә иң йыш таралған булыуы менән үҙенсәлекле. Форма яһалыш процесында фонемалар сиратлашыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүсе морфонемаларҙы ике ҙур төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин:

1) сиратлашыусы һуҙынҡы фонемаларҙан торған морфонемалар, йәғни һуҙынҡы морфонемалар;

2) үҙенең составында тартынҡы морфонемаларҙы берләштереүсе морфонемалар, йәғни тартынҡы морфонемалар.

### *Һуҙынҡы морфонемалар*

Һуҙынҡы морфонемалар, ҡағиҙә буларaҡ, һүҙ төркөмдәренең морфологик категорияларын яһаусы аффикстарҙа урын ала:

1) модаллек категорияһы яһалышында:

а) исемдәрҙә: *ат-тыр, эт-тер, ҡорт-тор, бөркөт-төр; ат-сы, эт-се, ҡорт-со, бөркөт-сө; ат-мы, эт-ме, ҡорт-мо, бөркөт-мө;*

*Тау биткәйҙәрендә бер ҡош уйнай,*
*Бүҙәнәлер тиһәм, ҡор икән.*
*Был донъяла бәхет –* ***малдыр*** *тиһәм,*
*Ай-тай баҫҡан тыуған ер икән.*

Халыҡ йырынан;

б) сифаттарҙа: *тулы-лыр, бикле-лер, осло-лор, сөсө-лөр; тулы-сы, бикле-се, осло-со, сөсө-сө; тулы-мы, бикле-ме, осло-мо, сөсө-мө;*

в) һандарҙа: *утыҙ-ҙыр, һигеҙ-ҙер, йөҙ-ҙөр; утыҙ-сы, һигеҙ-се, йөҙ-сө; утыҙ-мы, һигеҙ-ме, йөҙ-мө;*

г) алмаштарҙа: *шул-дыр, үҙем-дер, ошо-лор, көлләһә-лөр; шул-сы, үҙем-се, ошо-со, көлләһә-сө; шул-мы, үҙем-ме, ошо-мо, көлләһә-мө;*

ғ) ҡылымдарҙа: *ҡарай-ҙыр, ирей-ҙер, йөрөй-ҙөр; ҡарай-сы, ирей-се, йөрөй-сө; ҡарай-мы, ирей-ме, йөрөй-мө;*

д) рәүештәрҙә: *аҙ-ҙыр, тиҙ-ҙер, борон-дор, көндөҙ-ҙөр; аҙ-сы, тиҙ-се, борон-со, көндөҙ-сө; аҙ-мы, тиҙ-ме, борон-мо, көндөҙ-мө;*

ҙ) модаль һүҙҙәрҙә: *мөмкин-дер, түгел-дер; мөмкин-се, түгел-се; мөмкин-ме, түгел-ме;*

е) бәйләүестәрҙә: *(уның) һымаҡ-тыр, (һинең) кеүек-тер, (шуның) өсөн-дөр; (уның) һымаҡ-сы, (һинең) кеүек-се, (шуның) өсөн-сө; (уның) һымаҡ-мы, (һинең) кеүек-ме, (шуның) өсөн-мө;*

ж) киҫәксәләрҙә: *(шул) ғына-лыр, (һин) генә-лер; (шул) ғына-сы, (һин) генә-се; (шул) ғына-мы, (һин) генә-ме.*

2) исемдәргә, сифаттарға субъектив баһалауҙы белдереүсе аффикстар ҡушылғанда:

а) -ҡай/-кәй: *Ашҡаҙар-ҡай, Стәрле-кәй, бала-ҡай, бәғер-кәй; ҡара-ҡай, тәмле-кәй, матур-ҡай, сибәр-кәй:*

*Уң **биткәйең** яҡты айға оҡшаш,*
*Һул **биткәйең** балҡый, гүйә, ҡояш.*
*Бер ҡулыңда һайрай **һандуғасҡай**,*
*Бер ҡулыңда – моңло ҡурай.*

Ә. Әхмәт-Хужа;

б) -сыҡ/-сек/-соҡ/-сөк: *баҙар-сыҡ, мендәр-сек, ҡош-соҡ, төйөн-сөк;*

3) күплек категорияһы яһалышында (затлы ҡылымдарҙан башҡа):

а) исемдәрҙә: *бабай-ҙар, әбей-ҙәр; ҡала-лар, сәскә-ләр; юл-дар, үлән-дәр; китап-тар, һүрәт-тәр;*

*Иң беренсе ишеткәнем ерҙә,*
*Иң беренсе күргән **күҙҙәрем** –*
*Әсәйемдең яҡты йөҙө менән*
*Әсәйемдең йылы **һүҙҙәре**.*

Р. Бикбаев;

*Тыйнаҡ оҫталарҙың нурын ҡай саҡ*
*Баҫып ҡуя әрһеҙ һөнәрсе:*
*Ҡыҙыл буяу ҡаплай йөрәк ҡанын*
*Һәм боҙло һыу ҡаплай күҙ йәшен.*

Р. Назаров;

б) сифаттарҙа: *тырыш-тар, зирәк-тәр; яҡшы-лар, көслө-ләр;*
в) һандарҙа: *алтынсы-лар, икенсе-ләр; миллион-дар, мең-дәр;*
г) алмаштарҙа: *у-лар, теге-ләр; ошондай-ҙар, ниндәй-ҙәр;*
ғ) исем ҡылымдарҙа: *барыу-ҙар, килеү-ҙәр; ҡайтыу-ҙар, китеү-ҙәр;*
д) рәүештәрҙә: *һыбай-ҙар, йәйәү-ҙәр; алда-лар, күмәк-тәр;*
ҙ) модаль һүҙҙәрҙә: *юҡ-тар, тейеш-тәр; кәрәк-тәр;*
е) бәйләүестәрҙә: *(һинең) һымаҡ-тар, (минең) кеүек-тәр;*
ж) киҫәксәләрҙә: *(аҡ) ҡына-лар, (күк) кенә-ләр;*

4) сифаттарға, рәүештәргә, сифат ҡылымдарға һәм рәүеш ҡылымдарға дәрәжә категорияһы аффикстары өҫтәлгәндә:
а) сағыштырыу дәрәжәһе: *матур-ыраҡ, сибәр-ерәк, һомғол-ораҡ, көсһөҙ-өрәк; аҙ-ыраҡ, әҙ-ерәк; тырыш-ҡан-ыраҡ (уҡыусы), белгән-ерәк (бала); тартыныб-ыраҡ, иренеб-ерәк;*

*Йылы икмәк барҙа күңелдәр көр,*
*Ҡорған табындар ҙа йәмлерәк,*
*Ә шулай ҙа әсәй ҡулдарынан*
*Алған икмәк һәр саҡ тәмлерәк.*

Ә. Таһирова;

б) аҙһытыу дәрәжәһе: *ҡыҙ-ғылт, күк-һел, һор-ғолт, сөс-көл;*

*Тауҙар тауы күкһел Торатауым –*
*Бер биҙәк һин тыуған яғыма.*
*Һиңә ҡайтһам, ҡоштай ҡанатланам,*
*Ситкә китһәм, тағы һағынам.*

Я. Ҡолмой;

5) һан төркөмсәләре яһалғанда:
а) йыйыу һандарында: *алт-ау, дүрт-әү, өс-әү;*
б) тәртип һандарында: *утыҙ-ынсы, етмеш-енсе, өс-өнсө;*
в) бүлем һандарында: *туғыҙ-ар, һигеҙ-әр, йөҙ-әр;*
г) сама һандарында: *ун-лап, егерме-ләп, мең-ләп;*

6) алмаштарҙың ҡайһы бер төркөмсәләре яһалышында:
а) күрһәтеү алмаштары: *ошо-лай, теге-ләй;*
б) билдәһеҙлек алмаштары: *ҡасан-дыр, кем-дер;*

7) ҡылымдарға йүнәлеш аффикстары ҡушылғанда:

а) ҡайтым: *йыу-ын-, кей-ен-, ҡой-он-, төр-өн-;*

б) уртаҡлыҡ: *ҡаҙ-ыш-, һиб-еш-, тот-ош-, һөр-өш-;*

в) төшөм: *ас-ыл-, һиҙ-ел-, той-ол-, бөг-өл-;*

г) йөкмәтеү: *тарт-тыр-, һип-тер-, ҡорот-тор-, һөрт-төр-;*

8) ҡылымдарҙың күләм категорияһы яһалышында: *һуҙ-ыңҡыра-, эйел-еңкерә-, бор-оңҡора-, көт-өңкөрә-; тарт-ҡысла-, эт-кеслә-, тот-ҡосла-, төрт-көслә-; бар-ғыла-, кил-гелә-, бор-ғола-, төй-гөлә-;*

9) ҡылымдар юҡлыҡ аффиксы ҡабул иткәндә: *бар-ма-, кил-мә-; уҡы-ма-, һөйлә-мә-;*

*Беҙ мәңгегә ергә* ***килмәгәнбеҙ,***
*Беҙҙең ғүмер – үҙе бер ваҡыт.*
*Бер-беребеҙҙең ҡәҙерҙәрен беләйек,*
*Ваҡыттарҙы* ***булмай*** *туҡтатып.*

Х. Мөҙәрисова;

10) һөйкәлеш һәм заман формалары яһалышында:

а) хәбәр һөйкәлеше:

үткән заман: *ҡайт-ты-, кит-те-, ос-то-, көт-тө-;*

хәҙерге заман: *яҙ-а-, кил-ә-; саҡыр-а-, әйт-ә-;*

*Парһыҙ ҡалһа, ҡабат ҡайтмай, тиҙәр,*
***Ҡайта*** *икән,* ***ҡайта*** *аҡҡоштар.*
*Ҡоштарҙы ла, кешеләр шикелле,*
*Үҙе менән* ***йөрөтә*** *яҙмыштар.*

Р. Ханнанов;

11) киләсәк заман: *бар-асаҡ-, кил-әсәк-; саҡыр-ыр-, әйт-ер-, ҡор-ор-, көт-өр-;*

б) бойороҡ һөйкәлеше: *ултыр-һын, килтер-һен, бор-һон, төҙө-һөн;*

в) теләк-өндәү һөйкәлеше: *бар-айыҡ, күр-әйек;*

*Бөгөн эшләр эште бөгөн эшләп,*
*Шатлыҡтарҙы тигеҙ* ***бүләйек.***
*Иртәгә һуң булыр. Бөгөнгөнөң*
*Ҡәҙерҙәрен бөгөн* ***беләйек.***

Р. Бикбаев;

г) шарт һөйкәлеше: *уҡы-һа, бел-һә; яҙ-һа, кил-һә;*

*Ҡояш көлһә, ай йылмайһа*
*Илем күргендә,*
*Тирбәлә йыр тулҡындары*
*Минең күңелдә.*

Г. Зәйнәшева;

ғ) ниәт-маҡсат һөйкәлеше: *туҡтат-маҡсы-, һөйлә-мәксе-;*

12) ҡылым төркөмсәләрендә:

а) исем ҡылым: *тый-ыу, һиҙ-еү, той-оу, көл-өү;*

б) сифат ҡылым: *(ишек) ас-ыусы (кеше), (хәбәрҙе) ет-кер-еүсе (әҙәм), (ҡул) һон-оусы (кеше), (тауарҙы) төр-өүсе (эшсе); яҙыл-ыр (хат), эшлән-ер (эш), ҡотол-ор (әмәл), көт-өр (кеше);*

*Ел ҡапҡаны ел астымы,*
*Кемдер килә, кемдер бар.*
***Ҡайтыр** кешем булмаһа ла,*
*Килер кешем кемдер бар.*

Р. Нуретдинов;

в) рәүеш ҡылым: *ҡайт-ып, һиҙ-еп, тор-оп, көл-өп; баҫ-ҡас, әйт-кәс;*

***Уйылып** ҡына аҡҡан Уйыл һыуы*
*Уйландыра уйсан ирҙәрҙе,*
***Уйландырып** ҡалмай, моңландыра,*
*Һағындыра тыуған ерҙәрҙе.*

Халыҡ йырынан;

г) инфинитив: *яҙ-ырға, бир-ергә, тот-орға, көт-өргә.*

### *Тартынҡы морфонемалар*

Форма яһалышта тартынҡы фонемаларҙың сиратлашыуын ике төргә бүлеп ҡарарға мөмкин:

1) нигеҙҙәрҙең һуңғы фонемаларының сиратлашыуы;

2) аффикс составындағы фонемаларҙың сиратлашыуы.

Тәүге төркөмгә ҡараған сиратлашыуҙар түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

*-раҡ/-рәк* аффиксы ярҙамында сағыштырыу дәрәжәһе формалары яһалғанда, [ҡ], [к], [п] фонемаларына тамамланыусы

форма яһаусы нигеҙ аҙағында [ҡ–ғ], [к–г], [п–б] сиратлашыуҙары барлыҡҡа килә:

а) сифаттарҙа: *һыуыҡ – һыуығ-ыраҡ, бейек – бейег-ерәк;*

б) рәүештәрҙә: *оҙаҡ – оҙағ-ыраҡ, һирәк – һирәг-ерәк, шәп – шәб-ерәк;*

в) рәүеш ҡылымдарҙа: *яйлап – яйлаб-ыраҡ, көйләп – көйләб-ерәк.*

Затһыҙ ҡылым формалары яһалышында ла ошо уҡ типтағы сиратлашыуҙар урын ала: *сыҡ- – сығ-ыу, тек- – тег-еү, тап- – таб-ыу; сыҡ- – сығ-ып, тек- – тег-еп, тап- – таб-ып; сыҡ- – сығ-асаҡ, тек- – тег-әсәк, тап- – таб-асаҡ; сыҡ- – сығ-ырға, тек- – тег-ергә, тап- – таб-ырға.*

Ҡылымдар һөйкәлеш һәм заман менән үҙгәргәндә, [ҡ–ғ], [к–г], [п–б] морфонемалары барлыҡҡа килә: *ҡаҡ- – ҡағ-а, ҡағ-асаҡ, ҡағ-ыр, ҡағ-аһы (ине); тек- – тег-әсәк, тег-ер, тег-әһе (ине); яп- – яб-а, яб-асаҡ, яб-ыр, яб-аһы (ине).*

Ҡылымдарҙың йүнәлеш категорияһы яһалышында ла нигеҙ аҙағындағы тартынҡы фонемалар сиратлашыуы күҙәтелә: *ҡаҡ- – ҡағ-ын-, ҡағ-ыл-, ҡағ-ыш-; түк- – түг-ел-, түг-еш-; сап- – саб-ып, саб-ыш-.*

Сиратлашыуҙарҙың икенсе төрөнә миҫалдарҙы ошондай морфологик категорияларҙың яһалышында табырға мөмкин:

– күплек категорияһы:

а) исемдәрҙә: *йыр-ҙар, моң-дар, хат-тар, ҡала-лар;*

б) сифаттарҙа: *ҡыйыу-ҙар, йылдам-дар, алсаҡ-тар, тоғро-лар;*

в) һандарҙа: *алтау-ҙар, миллион-дар, миллиард-тар, унынсы-лар;*

г) алмаштарҙа: *шундай-ҙар, ҡайһылайыраҡ-тар* (һөйл.), *ошо-лар;*

ғ) затһыҙ ҡылымдарҙа: *тыйыу-ҙар, ҡайтҡан (кеше) – ҡайтҡан-дар, барыусы (кеше) – барыусы-лар;*

– исемдәрҙең һәм сифаттарҙың субъектив баһа категорияһы: *бала-ҡай, бәгер-кәй; ҡара-ҡай, тәмле-кәй;*

– сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең дәрәжә категорияһы: *татлы-раҡ, көслө-рәк, ҡыҙ-ғылт, йәш-келт; яй-ыраҡ, тиҙ-ерәк;*

– йыйыу һандары яһалышында: *ун-ау, өс-әү; алт-ау, биш-әү;*

– ҡылымдарҙың йөкмәтеү йүнәлеше формаһында: *ҡаҙ-ҙыр-, ян-дыр-, ҡаҡ-тыр-; ят-ҡыр-, ет-кер-;*

– күләм категорияһы: *яҙ-ыңҡыра-, әйт-еңкерә-; яҙ-ғыла-, әйт-кelә-;*

– затһыҙ ҡылым формаларында:

а) исем ҡылымдарҙа: *бар-ыу, кил-еү, ят-ыу, тор-оу;*

б) сифат ҡылымдарҙа: *ҡал-ған (кеше), кил-гән (ҡунаҡ); бар-асаҡ (урын), эшлән-әсәк (эш); бар-ыусы (кеше), кил-еүсе (кеше);*

в) рәүеш ҡылымдарҙа: *тор-ғас, күр-гәс; сап-ҡас, һип-кәс;*

г) инфинитивтарҙа: *яҙ-ырға, киҫ-ергә; ҡал-маҡ, кил-мәк;*

– һөйкәлеш һәм заман категорияһы:

а) хәбәр һөйкәлеше: *бар-ҙы, ҡал-ды, сап-ты, ҡара-ны; уҡы-ған, кил-гән, тап-ҡан, һип-кән;*

б) шарт һөйкәлеше: *бар-ҙыниһә, ҡал-дыниһә, сап-тыниһә, ҡара-ныниһә* (һөйл.); *әйт-теме, күр-ҙеме, еҫ-деме, үлсә-неме;*

в) теләк-өндәү һөйкәлеше: *бар-айыҡ, кил-әйек; бар-мағайы, кил-мәгәйе;*

г) ниәт-маҡсат һөйкәлеше: *уҡы-маҡсы, көт-мәксе, тап-маҡсы, түҙ-мәксе;*

– модаллек категорияһы:

а) исемдәрҙә: *йола-лыр, ауыл-дыр, тау-ҙыр, юлдаш-тыр;*

б) сифаттарҙа: *йылы-лыр, ыҡсым-дыр, тынсыу-ҙыр, буш-тыр;*

в) һандарҙа: *илле-лер, һикһән-дер, икәү-ҙер, биш-тер;*

г) алмаштарҙа: *нисә-лер, үҙең-дер, үҙебеҙ-ҙер, нисек-тер;*

ғ) ҡылымдарҙа: *һанай-ҙыр, яҙа-лыр, ҡалған-дыр;*

д) рәүештәрҙә: *юрамал-дыр, былтыр-ҙыр, күмәк-тер;*

е) модаль һүҙҙәрҙә: *бар-ҙыр, юҡ-тыр, мөмкин-дер.*

Шулай итеп, форма яһалыш процесында барлыҡҡа килгән фонемалар сиратлашыу күренеше барлыҡ һүҙ төркөмдәрендә лә тиерлек (теркәүестәрҙән тыш) күҙәтелә. Һуҙынҡы морфонемалар тик аффикстар составында осрай, тартынҡы морфонема моделдәре форма яһаусы нигеҙ аҙағында ла, уға ҡушылыусы аффикстарҙа ла урын ала. Һуҙынҡы фонемалар сиратлашыуҙа сингармонизм законы ҙур роль уйнаһа, тартынҡы морфонемалар барлыҡҡа килеүе ассимиляция, тарихи сиратлашыуҙар һәм башҡа факторҙар менән бәйле.

## ҺҮҘ ҮҘГӘРЕШ БАРЫШЫНДА МОРФОНОЛОГИК КҮРЕНЕШТӘР

Һүҙ үҙгәреш процесында нигеҙ (тамыр) менән аффикстар араһындағы бәйләнеш һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүсе морфонологик күренештәрҙең һүҙьяһалыш һәм форма яһалыш өлкәләрендә күрһәтелгән барлыҡ төрҙәре лә күҙәтелә.

## Нигеҙҙәр ҡыҫҡарыу

Һүҙгә килеш, эйәлек, хәбәрлек һәм зат-һан категорияларына ҡараған һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар ҡушылғанда, нигеҙ ҡыҫҡарыу күренеше күҙәтелә. Был морфонологик күренеш төп башҡорт һүҙҙәрендә лә, сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә осрай.

**лл, сс, мм, тт, пп** менән тамамланыусы үҙләштерелгән исемдәргә килеш һәм эйәлек аффикстары ҡушылғанда, ҡуш тартынҡының береһе әйтелмәҫ була; әлеге күренеш яҙылышта ла сағылыш таба: *металл – метал-ы, ме-тал-ды; стресс – стрес-тан, стрес-ы; килограмм – кило-грам-ға, килограм-ы; ватт – ват-ҡа; грипп – грип-тан.*

**ст, ст', вт, зд** ҡуш тартынҡыларына бөткән сит тел һүҙҙәренә төбәү килеш һәм эйәлек, хәбәрлек күрһәткестәре ҡушылған осраҡта был тартынҡыларҙың һуңғыһы төшөп ҡала: *артист – артис-ҡа, артис-ығыҙ, артис-мын; власть – влас-ҡа, влас-ыбыҙ; космонавт – космонав-ҡа, космонав-ы, космонав-һың; съезд – съез-ға, съез-ы.*

Ҡайһы бер исемдәргә эйәлек аффикстары өҫтәлгәндә, нигеҙҙәге һуҙынҡы фонемаларҙың ҡыҫҡарыуы күҙәтелә:

а) төп башҡорт һүҙҙәрендә: *ирек – ирк-ебеҙ, бүрек – бүрк-ем; Ялҡау – өйҙә, бүрке – сөйҙә* (Мәҡәл);

б) ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә: *холоҡ – холҡ-оғоҙ, ғишыҡ – ғишҡ-ым, милек – милк-ең, халыҡ – халҡ-ыбыҙ;*

*Әсәм теле миңә – сәсән теле,*
*Унан башҡа минең **халҡым** юҡ.*
*Йөрәгендә **халҡы** булмағандың*
*Кеше булырға ла хаҡы юҡ!*

Р. Ғарипов.

Йәнле һөйләү телмәрендә осраған түбәндәге күренеште билдәләп үтергә мөмкин: *-ыр/-ер* аффикслы ҡылымдар 1-се зат менән үҙгәргәндә, нигеҙ аҙағындағы [р] фонемаһы айырым осраҡтарҙа әйтелмәҫ була: *барыр- – ба-ры-мын, бары-быҙ; бороp- – боро-мон, боро-боҙ һ. б.*

## Фонемалар өҫтәлеү

Һүҙ үҙгәрештә нигеҙ менән аффикс араһына фонемалар өҫтәлеү күренеше башҡорт теленең эске традицион закондарына бәйле. Һүҙҙәрҙең әйтелеш яғынан еңелләшергә, ябайлашырға һәм матур яңғырашлы булырға ынтылыуы телдә тәбиғи күренеш

һанала. Бер иш фонемаларҙың эргәләш тороуынан ҡотолорға тырышыу морфемалар араһына интерфонемалар ҡуйыуу ихтыяжын тыуҙыра.

[ск] менән тамамланыусы географик атамаларға килеш һәм эйәлек категорияларының күрһәткестәре ҡушылғанда, нигеҙ менән аффикс араһына [и] фонемаһы һәм [ий] фонемалар комплексы өҫтәлә: *Красноусольск-и-ҙан, Красноусольск-ий-ым; Хабаровск-и-ға, Хабаровск-ий-ығыҙ.*

[нг], [ск], [кт], [рв] тартынҡыларына бөтөүсе үҙләштерелгән исемдәр килеш менән үҙгәргәндә, [ы] интерфонемаһы барлыҡҡа килә: *митинг-ы-нан, лозунг-ы-ға, отпуск-ы-ла, допуск-ы-ға, продукт-ы-ның, нерв-ы-ға.*

Рус теленән күплек формаһы *-и* менән үҙләштерелгән исемдәргә эйәлек категорияһы күрһәткестәре ҡушылғанда, нигеҙ һәм аффикс араһына [й] фонемаһы өҫтәлә: *туфли-й-ы, коньки-й-ым.*

Һуҙынҡы фонема менән бөтөүсе һүҙҙәрҙең берлектәге 3-сө зат формаһы яһалған осраҡта морфемалар сигендә [һ] элементы барлыҡҡа килә:

а) исемдәрҙә: *бала-һ-ы, әсә-һ-е*;

*Ошонда уҙҙы ғүмерҙең*
*Сабый сағы, шуҡ сағы.*
*Киң донъяға алып сыҡты*
*Тыуған йорттоң **тупһаһы**.*

Р. Бикбаев;

б) сифаттарҙа: *яҡшы-һ-ы, таҙа-һ-ы;*
в) төп һәм тәртип һандарында: *илле-һ-е, икенсе-һ-е;*
г) алмаштарҙа: *ҡайһы-һ-ы, теге-һ-е;*
ғ) хәҙерге заман сифат ҡылымдарҙа: *йөрөүсе-һ-е, һөйләүсе-һ-е;*
д) рәүештәрҙә: *башҡортса-һ-ы, йәнәшә-һ-е;*
ҙ) бәйләүестәрҙә: *(шул) тикле-һ-е, (был) хәтле-һ-е.*

3-сө эйәлек заты аффикслы һүҙҙәр урын-ваҡыт килешкә ҡуйылғанда, эйәлек күрһәткесе менән килеш аффиксы араһына [н] фонемаһы өҫтәлә:

а) исемдәрҙә: *йорто-н-да, өйө-н-дә*;

*Рәхмәт һеҙгә...*
*Уны һеҙ үҫтергән,*
***Йөрәгендә** – һеҙҙең йылығыҙ,*
***Күңелендә** – һеҙҙең иркенлектәр,*
***Күҙҙәрендә** – һеҙҙең нурығыҙ.*
*Эйе, ул бит – һеҙҙең ҡыҙығыҙ.*

М. Кәрим;

б) сифаттарҙа: *(иң) матуры-н-да (туҡталдым), (сәхнә-ләр-ҙең) һәйбәте-н-дә (сығыш яһаным);*

в) һандарҙа: *(ярыш төрҙәренең) унлабы-н-да (ҡатнаштым), (варианттарҙың) дүртенсеһе-н-дә (хата ебәрҙем);*

г) алмаштарҙа: *ошоһо-н-да, бәғзеһе-н-дә;*

ғ) исем ҡылымдарҙа: *барыуы-н-да, килеүе-н-дә.*

Түбәндәге миҫалдар һүҙҙәге тарихи сиратлашыуҙар менән бәйле: *ал, аҫ, өҫ* ярҙамсы һүҙҙәренә эйәлек күрһәткестәре өҫтәлгәндә, тамыр менән аффикс араһында [д] һәм [т] фонемалары барлыҡҡа килә *(ал-д-ы, аҫ-т-ы, өҫ-т-ө)*. Шуныһы үҙенсәлекле, ошо уҡ тамырҙарға бүтән аффикстар (мәҫәлән, килеш) ҡушылғанда, морфемалар сигендә был өҫтәлмә фонемалар күҙәтелмәй: *ал-ға, аҫ-ҡа, өҫ-кә*. Шунлыҡтан ҡайһы бер осраҡтарҙа [д] һәм [т] фонемаларын тамыр составындағы тартынҡыларға индереп йөрөтәләр, һәм был һүҙҙәр *аҫ (т), өҫ (т)* формаһында ҡабул ителәләр. Беҙҙең ҡарашҡа, әлеге осраҡ һүҙҙәге тарихи үҙгәрештәргә нигеҙләнгән морфонологик сиратлашыу төрөнә ҡарай. Әлбиттә, ярҙамсы һүҙҙәрҙә [д] һәм [т] фонемаларының барлыҡҡа килеүен фонемалар өҫтәлеү күренешенә индереү бәхәсле. Шулай ҙа хәҙерге башҡорт әҙәби телендә *өҫ, аҫ* формалары ҡабул ителгәс, әлеге миҫалдар ниндәйҙер кимәлдә фонемалар өҫтәлеү күренешенең бер төрө итеп иҫәпләнергә хаҡлы.

## Фонемалар тәңгәлләшеү

Фонемалар тәңгәлләшеү һүҙ үҙгәреш системаһында һирәк күҙәтелә. Был морфонологик күренеш [зд], [ст], [вт], [тт] менән бөткән үҙләштерелгән һүҙҙәргә эйәлек, төшөм, урын-ваҡыт, сығанаҡ килеш аффикстары ҡушылғанда осрай: *поезд + -да = поезда, съезд + -ды = съезды; артист + -тан = артистан, машинист + -ты = машинисты; астронавт + – тың = астронавтың; ватт + -тан = ваттан.*

## Фонемалар сиратлашыу

Фонемалар сиратлашыу башҡорт теленең һүҙ үҙгәреш өлкәһендә киң таралған. Был өлкәлә сиратлашыуҙарҙы ике төргә бүлеп ҡарарға була:

1) нигеҙ аҙағындағы фонемаларҙың сиратлашыуҙары;

2) һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың, сингармонизм законына бәйле рәүештә, төрлө фонологик варианттарҙа ҡулланылыуы.

Үҙгәртеүсе аффикс ҡушылғанда, ике һуҙынҡы араһында ҡалған осраҡта нигеҙ аҙағындағы ҡайһы бер тартынҡы фонемалар икенсе бер тартынҡы менән сиратлашалар. Күпселек осраҡтарҙа [ҡ–ғ], [к–г], [п–б] тибындағы сиратлашыуҙар күҙәтелә.

[ҡ], [к], [п] фонемаларына бөткән һүҙҙәргә эйәлек аффикстары ҡушылғанда, сиратлашыу күренеше барлыҡҡа килә:

а) исемдәрҙә: *бармаҡ – бармағ-ым, көрәк – көрәг-ем, китап – китаб-ым;*

*Таштуғайҡай, һинең ҡамышыңды*
*Сор ҡурайҡай итеп тартайым.*
*Ялан ғына ерҙең кәкүге юҡ,*
*Үҙ Уралҡайыма ҡайтайым.*

Халыҡ йырынан;

*Күге бейек булһа – кем дә бөркөт,*
*Баш өҫтөмдә бейек күк кәрәк.*
*Был донъяға күпте бирер өсөн,*
*Был донъяла миңә күп кәрәк.*

Р. Назаров;

б) сифаттарҙа: *йыйнаҡ – йыйнағ-ы, зирәк – зирәг-е, гәрип – гәриб-е;*

в) сама һандарында: *унлап – унлаб-ы, егермеләп – егермеләб-е;*

г) сифат ҡылымдарҙа: *барырлыҡ (кеше) – барырлығ-ы, кейер-лек (кейем) – кейерлег-е;*

ғ) модаль һүҙҙәрҙә: *юҡ – юғ-ы, кәрәк – кәрәг-е: Бар **барын** һөйләр, юҡ **юғын** һөйләр* (Мәҡәл).

Субъектив баһа аффикслы исемдәр эйәлек категорияһы менән үҙгәргәндә лә ошо уҡ күренеш күҙәтелә: *майҙансыҡ – майҙансығ-ыбыҙ, мендәрсек – мендәрсег-ең; ҡошсоҡ – ҡошсоғ-ом, төйөнсөк – төйөнсөг-өгөҙ.*

Үҙләштерелгән һүҙҙәр составында ла сиратлашыу осраҡтары бар: *летчик – летчиг-ыбыҙ, график – графиг-ым, карап – караб-ың, этап – этаб-ы.*

Һөйләү телмәрендә осраған ошондай миҫалдарға туҡталырға мөмкин: сығанаҡ килештәге исемдәргә һәм [н] фонемаһына тамамланыусы сифаттарға хәбәрлек аффиксы өҫтәлгәндә, [н–м] сиратлашыуы барлыҡҡа килә: *ауылдан* – [*ауылдаммын*], *ҡаланан* – [*ҡаланамбыҙ*], *иҫән* – [*иҫәммен*], *шаян* – [*шаямбыҙ*].

Һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың сингармонизм законына ярашлы төрлө фонологик варианттарҙа килеүе, нигеҙҙең ниндәй фонемаға бөтөүенә ҡарап, төрлө фонеманан башланған аффикс-

тар ҡушылыуға һәм, тамыр составындағы һуҙынҡыларға ҡарап, аффикста һуҙынҡыларҙың ҡалын йәки нәҙек вариантта ҡулланылыуына ҡайтып ҡала.

Һүҙҙәр килеш категорияһы (эйәлек, төшөм, урын-ваҡыт, сығанаҡ килештәр) менән үҙгәргәндә төрлө фонеманан башланған аффикстар ҡабул итәләр.

Һуңғы фонемаһы [з], [ж], [л], [м], [н], [ң] булған һүҙ төркөмдәренә [д] фонемаһынан башланған аффикстар ҡушыла:

а) исемдәрҙә: *фараз-ды, таж-дың, юл-да, сәләм-дән, тун-ды, саң-дың;*

*Оло юлдың туҙанын*
*Үҙем күрҙем туҙғанын.*
*Белмәй ҡалдым, һиҙмәй ҡалдым*
*Йәш ғүмерҙең уҙғанын.*

Халыҡ йырынан;

б) сифаттарҙа: *яуыз-ды, ҡыҙыл-дан, йылдам-дың, тәрән-дә, тиң-де;*

в) һандарҙа: *һикһән-дең, туҡһан-дан;*

г) алмаштарҙа: *кем-дең, ҡасан-дан;*

ғ) рәүештәрҙә: *борон-дан, быйыл-дан, әүәл-дән.*

Әгәр нигеҙҙәр һаңғырау тартынҡыға бөтһәләр, килеш аффикстары [т] фонемаһынан башлана:

а) исемдәрҙә: *суп-те, һүрәт-тән, ҡолаҡ-та, йөрәк-тең, бәхәс-тә, төҫ-төң, кәйеф-те, миләш-тән, ожмах-тың, гонаһ-та;*

б) сифаттарҙа: *ят-ты, ғәрип-тең, ҡыҙыҡ-тан, бейек-те, ихлас-тың, тупаҫ-тан, тырыш-ты;*

в) һандарҙа: *алтмыш-тан, йөҙләп-те;*

г) бәйләүестәрҙә: *(уның) һымаҡ-ты, (улар) кеүек-те.*

Башҡорт телендә [ҙ], [й], [р], [ў], [и] фонемаларына тамамланған нигеҙҙәргә [ҙ] фонемаһына башланған аффикстар ҡушылып килә:

а) исемдәрҙә: *ҡаҙ-ҙың, һыйыр-ҙы, быҙау-ҙан, иләү-ҙән, хажи-ҙан, абруй-ҙың;*

б) сифаттарҙа: *яңғыҙ-ҙың, ялҡау-ҙы, һәлкәү-ҙән, ябай-ҙың, һуҡыр-ҙың; Һуҡырҙың теләгәне – ике күҙ, ти* (Мәҡәл);

в) һандарҙа: *туғыҙ-ҙа, ун бер-ҙән, алтау-ҙың, берәү-ҙе;*

г) алмаштарҙа: *беҙ-ҙе, улар-ҙан, былдай-ҙы;*

ғ) исем ҡылымдарҙа: *һанау-ҙың, көлөү-ҙән, сығыу-ҙы, килеү-ҙә.*

Әгәр нигеҙҙәр һуҙынҡы фонемаға бөтһәләр, эйәлек, төшөм, сығанаҡ килеш аффикстары [н] фонемаһына башланалар:

а) исемдәрҙә: *ҡала-ның, күтәрмә-нән, борғо-но, төлкө-нөң, бысҡы-ның;*

б) сифаттарҙа: *ҡаты-нан, иҫке-нең, аңра-ны, иркә-нән, тоғроно;*

в) һандарҙа: *унынсы-ны, ете-нән, өсөнсө-нө, алты-нан;*

г) алмаштарҙа: *ҡайһыһы-ның, теге-нән, ошо-но;*

ғ) сифат ҡылымдарҙа: *(китеп) барыусы (кеше) – барыусынан, (уны) белеүсе (кеше) – белеүсе-не.*

Юғарыла билдәләп үтелеүенсә, һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар үҙҙәренең составындағы фонемаларҙың сиратлашыуы һөҙөмтәһендә төрлө фонологик варианттарҙа килә ала, бындай варианттар һаны 4-тән 16-ға тиклем етергә мөмкин.

Хәбәрлек һәм эйәлек аффикстары ҡабул иткән һүҙҙәр, сингармонизм законының аңҡау гармонияһына ярашлы рәүештә, 4 вариантта килә ала:

а) исемдәрҙә: *уҡыусы-мын, илсе-мен, ҡошсо-мон, сөгөлдөрсө-мөн; атай-ым, әсәй-ем, йорт-ом, өй-өм;*

*Ваҡыт толпарында еләсаба*
*Уҙып китһәләр ҙә* ***йылдарым,***
*Килер заманда ла яңғырар өсөн,*
*Уралымда ҡалыр* ***йырҙарым.***

А. Игебаев;

*Һин үҙеңде* ***саҡматашмын*** *тигәс,*
*Ут биреүсе ҡуҙҙар һүнгәндә,*
*Өшәндереп епшек көндәр килһә,*
*Хис итәмен һине эргәмдә.*

В. Әхмәҙиев;

б) сифаттарҙа: *оялсан-һың, бәхетле-һең, тоғро-һоң, көлкөһөң;*

*Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем –* ***тәрәнһең*** *һин,*
*Айға-көнгә тиңләмәйем –* ***гүзәлһең*** *һин,*
*Ҡаяларға тиңләмәйем –* ***бөйөкһөң*** *һин,*
*Эй хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.*

З. Биишева;

в) һандарҙа: *утыҙ-ы, һигеҙ-е, йөҙ-ө;*

г) алмаштарҙа: *ҡайһы-һы, теге-һе, ошо-һо, көллө-һө.*

Ҡылымдар зат-һан менән үҙгәргәндә лә 4 фонологик вариант күҙәтелә: *таныр-мын, килер-мен, борор-мон, төрөр-мөн; саҡы-рығыҙ, һикер-егеҙ, тор-оғоҙ, көл-өгөҙ.*

Эйәлек, төшөм, сығанаҡ, урын-ваҡыт килеш аффикстары ҡабул иткән исемдәр, төшөм килештә тороусы сифаттар 16 вариантта ҡулланыла алалар:

а) исемдәрҙә: *бала-ның, әсә-нең, борго-ноң, көҙгө-нөң, урман-дың, үлән-дең, болон-доң, төн-дөң, яҙ-ҙың, йәй-ҙең, йондоҙ-ҙоң, көҙ-ҙөң, ат-тың, эт-тең, йорт-тоң, һөт-төң;*

б) сифаттарҙа: *йоҡа-ны, кесе-не, оло-но, көслө-нө, яҡын-ды, иркен-де, оҙон-до, бөтөн-дө, ҙур-ҙы, бәләкәй-ҙе, отҡор-ҙо, өлгөр-ҙө, алсаҡ-ты, зирәк-те, сос-то, өтөк-тө.*

Дөйөм алғанда, һүҙ үҙгәрештә морфонологик күренештәр исемдәрҙә, сифаттарҙа, һандарҙа һәм ҡылымдарҙа йыш осрай. Иң йыш ҡулланылғаны – фонемалар сиратлашыу күренеше.

# ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ

## Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең яһалыштары буйынса төҙөлөшө

Башҡорт тел ғилемендә һүҙҙәрҙең яһалыш структураһы буйынса бүленеше, нигеҙҙә, дөйөм тел ғилемендә һәм төркиәт өлкәһендә ҡабул ителгән төркөмләүҙәргә яҡын күрһәтелә, йәғни һүҙҙәр өс ҙур төркөмгә: тамыр, яһалма һәм ҡушма һүҙҙәргә, үҙ сиратында, яһалма һәм ҡушма һүҙҙәр тағы ла вағыраҡ төркөмсәләргә бүлеп ҡарала.

Шулай ҙа XX быуаттың 50–60-сы йылдарына тиклем телселәр, һүҙҙәрҙең яһалышы буйынса төрҙәрен атап тормайынса, күберәк уларҙың морфематик төҙөлөштәре буйынса типтарын билдәләү менән[1] сикләнһәләр, 80–90-сы йылдарға инде һүҙьяһалыш төҙөлөшө буйынса һүҙҙәрҙе төркөмләү тулыраҡ һәм ентеклерәк үткәрелә башланы, терминология мәсьәләһенә лә иғтибар көсәйҙе[2].

«Һүҙҙәрҙең яһалыштары буйынса төҙөлөшө» тигән бүлек эсендә һүҙҙәрҙең яһалыштары буйынса структур төрҙәре, һүҙ яһаусы нигеҙ һәм һүҙ яһаусы саралар, һүҙьяһалыш мәғәнәһе, һүҙьяһалыш тибы, һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдары, һүҙьяһалыш ояһы кеүек мәсьәләләрҙе ҡарау маҡсатҡа ярашлы тип табылды.

---

[1] *Дмитриев Н. К.* Башҡорт теленең грамматикаһы. Өфө, 1950. 50-се б.

[2] Грамматика современного башкирского литературного языка/Под ред. Юлдашева А. А. М.: Наука, 1981; Хәҙерге башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек / Яуаплы ред. Ураҡсин З. Г., Ишбаев К. Г. Өфө, 1986; *Ишбаев К. Г.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. Өфө, 1994; *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование. Уфа, 2000; *Әхтәмов М. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Һүҙьяһалыш. Өфө, 2000.

## Тамыр һәм яһалма һүҙҙәр

Башҡорт телендә һүҙҙәр үҙҙәренең яһалыш үҙенсәлектәре буйынса ике төркөмгә: тамыр һәм яһалма һүҙҙәргә бүлеп ҡарала. Тамыр һүҙ ҙә, яһалма һүҙ ҙә – һәр береһе ике аспекттан сығып, йәғни морфематик төҙөлөшө һәм һүҙьяһалыш структураһы үҙенсәлектәренә ҡарап характерлана.

Һүҙьяһалыш күҙлегенән сығып ҡарағанда, **тамыр һүҙ** – ул ниндәйҙер икенсе бер һүҙҙән яһалмаған, килеп сығышы буйынса беренсел һүҙ; ул үҙендә төп лексик мәғәнәне тота: *кеше, һыу, аҡ, йылы, өс, мең, тиҙ, һуң, бир-, тор-, быш, геү, ах, уф.*

Морфематик төҙөлөшө яғынан тамыр һүҙ бер тамырҙан ғына тора, уның составында һүҙ яһаусы аффикстар була алмай; уға тик форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар ғына ҡушылып килергә мөмкин: *кеше, кеше-гә; һыу, һыу-ҙа; аҡ, аҡ-һыл; йылы, йылы-раҡ; өс, өс-әр; мең, мең-енсе; тиҙ, тиҙ-ерәк; һуң, һуң-ға; бир-, бир-ҙе; тор-, тор-ған.*

Һүҙьяһалыш үҙенсәлеге буйынса **яһалма һүҙ** икенсе бер һүҙҙән, һүҙҙәр теҙмәһенән, һүҙбәйләнеш йәки һөйләм нигеҙендә яһалған һүҙ булып тора: *кеше > кеше-лек, кеше-фәлән; һыу > һыу-лы, һыубаҫ-ар (туғай); аҡ > аҡ-ла-, аҡҡош; йылы > йылы-лыҡ; өс > өс-көл, өсмөйөш; мең > меңаяҡ, меңьяпраҡ; тиҙ > тиҙ-лек; һуң > һуң-ғы, һуң-ла-; бир- > бир-ем, ал-ыш-бир-еш; тор- > тор-мош, тор-а-бар-а; быш > быш-ылда-, быш-быш кил-; геү > геү-елдә-, геү кил-; ах > ах-ылда-, ах та ух кил-; уф > уф-тан-, уф-ылда-.*

Яһалма һүҙҙең мәғәнәһе уның яһалышында ҡатнашҡан нигеҙ (тамыр) менән һүҙ яһаусы саралырҙың мәғәнәләренә бәйле, шунлыҡтан ул тамыр һүҙ менән сағыштырғанда һүҙьяһалыш күҙлегенән икенсел күренеш һанала: *һыу-лы* «*һыу менән еүешләнгән, сыланған*»; *аҡҡош* «*аҡ төҫтәге ҡош*»; *геү-елдә-* «*геү тигән тауыш сығар-*» һ. б.

Морфематик төҙөлөштәренә килгәндә, яһалма һүҙҙәр ҡатмарлы төҙөлөшлө лексик берәмектәр булып тора; был йәһәттән уларҙың ошондай төрҙәре булыуы мөмкин: а) бер тамырҙан һәм бер йәки бер нисә һүҙ яһаусы аффикстан (был осраҡта, билдәле, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың булыу-булмауҙары иҫәпкә алынмай) торғандары: *йылҡы-сы, йылҡы-сы-лыҡ; ҡыш-ҡы, ҡыш-ҡы-са; уй-сан, уй-сан-лыҡ;* б) ҡушылып, ишләшеп, ҡабатланып йәки теркәлеп килгән ике (һирәклэп икенән күберәк) тамырҙан йәки уның өлөштәренән торғандары: *ҡулъяулыҡ < ҡул, яулыҡ; ата-әсә < ата, әсә*; *миҙгел-миҙгел < миҙгел, миҙгел*; *ҡурай еләге < ҡурай, еләк*; *драмтүңәрәк < драматик түңәрәк*; в) ике йәки унан күберәк тамырға һүҙ яһаусы аффикстар

ҡушылыу ярҙамында яһалғандары: *ҡулъяҙмалағы* < *ҡулъ-яҙ-ма-ла-ғы*; *ир-егеттәрсә* < *ир-егет-тәр-сә*; *боҙватҡыс* < *боҙ-ват-ҡыс*.

Яһалма һүҙҙәрҙе, үҙ сиратында, уларҙың морфематик төҙөлөштәренән һәм һүҙьяһалыш үҙенсәлектәренән сығып, түбәндәге төрҙәргә бүлеп ҡарарға була: ябай яһалма һүҙ, ҡушма һүҙҙәр (улар эсендә: берекмә ҡушма һүҙ, теркәлмә ҡушма һүҙ, парлы һүҙ, ҡабатлаулы һүҙ, ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙ), ҡыҫҡартма һүҙ, күсмә һүҙ.

**Ябай яһалма һүҙҙәр** (был һүҙҙәрҙе практикала «яһалма һүҙ» (тар мәғәнәлә) термины менән йөрөтөү ҙә осрай) тамырға (нигеҙгә) һүҙ яһаусы аффикс ҡушылыу юлы менән яһала; һүҙ яһаусы аффикс туранан-тура тамырға ялғанып килергә йәки тамырға ҡушылған башҡа аффикстарҙан (улар һүҙ яһаусы, форма яһаусы йәки һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар булыуы мөмкин) һуң торорға мөмкин, йәғни һүҙ яһаусы нигеҙ был осраҡта тик яңғыҙ тамырҙан ғына йәки тамырҙан һәм уға ҡушылған төрлө функциялы аффикстарҙан торорға мөмкин: а) *ау-сы, төн-гө, һыу-ла-, эҫе-ләй*; б) *ҡош-со-лоҡ, ялан-да-ғы, батыр-ҙар-са*.

**Ҡушма һүҙҙәр** бер нисә тамыр һүҙҙең (яһаусы нигеҙҙең) бәйләнешкә инеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә; һүҙ яһаусы нигеҙҙәрҙең мәғәнә үҙенсәлектәренә һәм бер-береһе менән ниндәй дәрәжәлә бәйләнеүҙәренә (ҡушылыу, теркәлеү, ишләшеү, ҡабатланыу, ҡыҫҡарыу) ҡарап, ҡушма һүҙҙәрҙең ошондай структур төрҙәрен билдәләргә була: берекмә ҡушма һүҙ, теркәлмә ҡушма һүҙ, парлы һүҙ, ҡабатлаулы һүҙ, ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙ.

*Берекмә ҡушма һүҙҙәр* яһалғанда, яһаусы нигеҙҙәрҙең бер бөтөн булып ҡушылыуы һөҙөмтәһендә бер лексема барлыҡҡа килә; был осраҡта ҡушылыусы компоненттар үҙ-ара атрибутив (а), комплетив (б) һәм предикатив (в) мөнәсәбәттәрҙә килергә мөмкин: а) *ҡыҙылтүш* < *ҡыҙыл + түш, һигеҙаяҡ* < *һигеҙ + аяҡ*; б) һыуалғыс < *һыу + ал-ғыс, елғыуар* < *ел + ҡыу-ар*; в) *Ишкилде* (кеше исеме) < *иш килде, Яуғасҡан* (тау) < *яу ҡасҡан*.

*Теркәлмә ҡушма һүҙҙәрҙә* яһаусы нигеҙҙәр бер-береһе менән теркәлеп нығынған һүҙбәйләнештәр хасил итә һәм ҡатмарлы бер төшөнсәнең атамаһы булып сығыш яһай; был саҡта ла компоненттар үҙ-ара атрибутив (а), комплетив (б) һәм предикатив (в) бәйләнештәргә инәләр: а) *таш күмер, һоро күмер*; *бер айлыҡ, күп йыллыҡ*; б) *саң һурҙырғыс, күҙ асҡыһыҙ, тәҡдим ит-*; в) *ҡот осҡос, еҫ тей-, күҫ ет-*.

Берләшмәләр составындағы яһаусы нигеҙҙәр, бер-береһе менән тулыһынса ҡушылмайынса, тик үҙ-ара ишләшеп (парлашып) кенә килһәләр, бындай ҡушма һүҙҙәр *парлы һүҙҙәр* тип йөрөтөлә; парлы һүҙҙәр, ҡағиҙә булараҡ, ике үҙ аллы компоненттан (беренсе компоненты үҙ аллы һүҙҙән (а), ә икенсеһе үҙ аллы

ҡулланыла алмаған һүҙҙән (б) торорға мөмкин: а) *дуҫ-иш, ҡарлы-буранлы, биш-алты, бәрел-һуғыл-, ары-бире*; б) *айыу-фәлән, кеше-маҙар, сүп-сар.*

Һирәкләп ошо уҡ ҡалып менән яһалған өс-дүрт компонентлы ҡушма һүҙҙәр ҙә осрай: *Иҙел – Урал – Алтай регионы* («Башҡортостан»), *белем-һөнәр-күнекмәләргә өйрәтеү* (Т. Сәғитов), *фәнни, уҡытыу-фәнни йәки уҡытыу-фәнни-етештереү комплекстары* («Башҡортостан»).

Бер үк яһаусы нигеҙ ҡабатланыу юлы менән барлыҡҡа килгән ҡушма һүҙҙәр **ҡабатлаулы һүҙҙәр** тип йөрөтөлә; ҡабатлаулы һүҙҙәрҙең компоненттары бер ниндәй үҙгәрешһеҙ ҡулланылырға (а), берәйһе билдәле бер формант ҡабул итергә (б), шулай уҡ компоненттар араһына интерфонемалар өҫтәлергә (в) йәки икенсеһе тәүгеһенең яңғырағы рәүешендә килергә (г) мөмкин: а) *ваҡыт-ваҡыт, йөк-йөк, күлә-күлә*; б) *ғүмер-ғүмергә, элек-электән, берҙән-бер*; в) *ағас - м+ағас, әбей - һ+ әбей, әрәм - ш+әрәм*; г) *малай-шалай, ҡый-мый, тамыр-томор, тәмле-томло.*

*Ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр (аббревиатуралар)* нығынған һүҙбәйләнештәрҙең ҡыҫҡартылған компоненттарын бер һүҙ итеп ҡушыу нәтижәһендә барлыҡҡа килә; тулы әйтелешле һүҙбәйләнештәрҙең компоненттары, ғәҙәттә, үҙ-ара атрибутив бәйләнештә булһалар ҙа, ҡыҫҡартылған өлөштәре (башланғыс хәрефтәре, башланғыс фонемалары, тәүге өлөштәре һ. б.) бер-береһенә теҙмә юл менән бәйләнеп йөрөйҙәр: *БДУ < Башҡорт дәүләт университеты, медколледж < медицина колледжы*.

*Ҡыҫҡартма һүҙҙәр* тулы әйтелешле һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу, йәғни уларҙың составындағы айырым өлөштәрен (морфемаларҙы йәки фонемаларҙы) алып ташлау юлы менән яһала; яһалыу һәм телмәрҙә ҡулланылыу үҙенсәлектәренә ҡарап, уларҙы ике төргә: лексик һәм график ҡыҫҡартмаларға бүлеп ҡарарға була. Лексик ҡыҫҡартмалар тулы әйтелешле үҙ аллы һүҙ булараҡ сығыш яһайҙар, шулай уҡ стилистик биҙәктәр ҡабул итеү һөҙөмтәһендә улар, ғәҙәттә, рәсми булмаған шарттарҙа йәнле һөйләү телмәрендә ҡулланылыусан: *Магнит ҡалаһы < Магнитогорск ҡалаһы, Сәғи < Сәғиҙулла, ятаҡ < ятаҡхана*; график ҡыҫҡартмалар иһә тик яҙыуҙа ғына ҡулланыла, ә әйтелештә был һүҙҙәрҙең тулы варианттары һаҡлана: *ҡ. < ҡала, ур. < урам, б. < быуат, сәғ. < сәғәт, т. < тин.*

**Күсмә һүҙҙәргә** үҙҙәренең тура йәки беренсел мәғәнәһендә түгел, ә күсмә йәки икенсел мәғәнәһендә ҡулланылыусы һүҙҙәр ҡаратыла: *иҙәнде **буяу*** (исем ҡылым) > *һары төҫтәге **буяу*** (исем); *утын **ҡырҡа** башланы* (ҡылым) > *көн торошо **ҡырҡа** үҙгәрҙе* (рәүеш).

## Һүҙ яһаусы нигеҙ һәм һүҙ яһаусы сара

Телдә ҡулланылған бөтә яһалма һүҙҙәр ҙә (киң мәғәнәлә), ғәҙәттә, ике өлөштән – һүҙ яһаусы нигеҙҙән һәм һүҙ яһаусы саранан тора. Был осраҡта «һүҙ яһаусы нигеҙ» термины морфема төрө булараҡ түгел, ә база мәғәнәһендә ҡулланыла, сөнки ул ниндәйҙер башҡа бер һүҙҙең йәки тотош бер төркөм һүҙҙәрҙең яһалышында нигеҙ йәки база хеҙмәтен үтәй: *ватан – ватандаш, ватандашлыҡ, ватандаштарса, ватансы, ватансылыҡ, ватандағы, ватандыҡы, ватанлы, ватансыл, ватанһыҙ, ватанһыҙлыҡ.*

Хәҙерге башҡорт телендә һүҙ яһаусы нигеҙ функцияһын тамыр һүҙҙәр ҙә, яһалма һүҙҙәрҙең бөтә төрҙәре лә башҡарып йөрөй ала:

1) тамыр һүҙҙәр: *ҡар – ҡарлы, ҡарлы-ямғырлы, ҡарлан-*; *бер – берлек, бергә; ек- – егем, еген, екке*;

2) ябай яһалма һүҙҙәр: *аҡыллы – аҡыллылыҡ, илсе – илселек, илселектәге*; *шарла- – шарлауыҡ*;

3) берекмә ҡушма һүҙҙәр: *ҡарағас – ҡарағаслыҡ, аръяҡ – аръяҡтағы*;

4) теркәлмә ҡушма һүҙҙәр: *яр буйы – яр буйындағы, баш ҡала – баш ҡаланыҡы*;

5) парлы һүҙҙәр: *ата-әсә – ата-әсәле, ел-ямғыр – ел-ямғырһыҙ*;

6) ҡабатлаулы һүҙҙәр: *соҡор-саҡыр – соҡор-саҡырлы, һирәк-мирәк – һирәк-мирәкләп*;

7) ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр: *драмтүңәрәк – драмтүңәрәктеке, телеүҙәк – телеүҙәктәге*;

8) ҡыҫҡартма һүҙҙәр: *автомашина* > *машина – машиналы, радиоалғыс* > *радио – радиолағы*;

9) күсмә һүҙҙәр: *киләсәк (быуын)* «будущее (поколение)» > *киләсәк* «будущность, будущее» – *киләсәкле.*

Һүҙ яһаусы нигеҙҙән яңы һүҙ яһауҙа ҡатнашыусы формаль һәм мәғәнәүи күрһәткес **һүҙ яһаусы сара** тип йөрөтөлә. Һүҙ яһаусы сара сифатында башҡорт телендә, ғәҙәттә, түбәндәге материаль һәм семантик күрһәткестәр йөрөй:

1) һүҙ яһаусы аффикстар: *бел- – бел-гес, бел-ек, белек-ле, белек-һеҙ, бел-ем, белем-ле, белемле-лек, белем-һеҙ, белемһеҙ-лек* һ. б.;

2) тамыр һүҙҙәрҙе (һүҙ яһаусы нигеҙҙәрҙе) ҡушыу (*ары + яҡ* > *аръяҡ*), ишләү (уй, фекер > уй-фекер), ҡабатлау (*саҡ-саҡ, буй-буй*), ҡыҫҡартыу (*р-н* < *район, һ.* < *һум*), һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартылған өлөштәрен ҡушыу (*БМО* < *Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы*) кеүек күренештәр;

3) һүҙҙәге баҫымдың урынын алмаштырыу: *ғүмере́ оҙон булды* (исем) > *ғү́мере онотмам* (рәүеш);

4) семантик билдә, йәғни һүҙҙең мәғәнәләре үҙгәреү: *эйә «хозяин, владелец»* > (һөйләмдең) *эйәһе «подлежащее»*;

5) морфонологик күренештәрҙең айырым осраҡтары.

## Һүҙьяһалыш мәғәнәһе

Һүҙьяһалыш процесында, йәғни һүҙ яһаусы нигеҙ менән һүҙ яһаусы сараларҙың ҡушылыуы һәм бер-береһенә тәьҫир итешеүе һөҙөмтәһендә, форма (һүҙҙең фонологик һәм морфематик төҙөлөшө) һәм йөкмәткенең (һүҙҙең мәғәнәһе) берҙәмлеге булараҡ яңы һүҙ барлыҡҡа килә. Үҙ сиратында яңы барлыҡҡа килгән һүҙ (яһалма, ҡушма, ҡыҫҡартма, күсмә), телдәге тамыр һүҙҙәр кеүек үк, лексик (материаль, индивидуаль) һәм грамматик (категориаль, дөйөм) мәғәнәләргә эйә; быларҙан тыш, яһалма һүҙҙәргә (киң мәғәнәлә) һүҙьяһалыш мәғәнәһе лә хас. **Һүҙьяһалыш мәғәнәһе** яһалма һүҙҙәр менән уларҙы яһаусы нигеҙҙең лексик мәғәнәләре араһындағы мөнәсәбәт булараҡ формалаша, шунлыҡтан ул – яһалма һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен яһаусы нигеҙҙәрҙең мәғәнәләре менән сағыштырғанда ғына уларҙың араһындағы мәғәнә айырмаһы булараҡ асыҡ күренә[1]. Миҫалдар: 1) *мал* > *малсы*: «мал ҡараусы, аҫраусы, тәрбиәләп үҫтереүсе, шул тармаҡта эшләүсе» – (был осраҡта «–» алыу билдәһен аңлата, йәғни «малсы»нан «мал» һүҙе алына, «-сы» аффиксы тороп ҡала) «мал» = *-сы* (һүҙьяһалыш мәғәнәһе: «һүҙ яһаусы нигеҙ аңлатҡан нәмәне ҡараусы, аҫраусы, тәрбиәләп үҫтереүсе, шул тармаҡта эшләүсе»); 2) *уй* > *уйсан*: «уйға бирелеүгә әүәҫ» – «уй» = *-сан* «... бирелеүгә әүәҫ» (һүҙьяһалыш мәғәнәһе: «һүҙ яһаусы нигеҙҙә белдерелгән нәмәгә, эш, хәл, хәрәкәткә әүәҫ»); 3) *шарт* > *шартылда-*: «шарт тигән тауыш сығар-» – «шарт» = *-лда* «... тигән тауыш сығар-»).

Шулай итеп, һүҙьяһалыш мәғәнәһенең күрһәткесе булып яһалма һүҙҙәр составындағы һүҙ яһаусы саралар (был осраҡта *-сы, -сан, -ылда* һүҙ яһаусы аффикстары) сығыш яһай. Үҙ сиратында һүҙьяһалыш мәғәнәһе яһалма һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәһе составына инеп китә һәм уның формалашыуына, аҙағынаса нығыныуына булышлыҡ итә.

---

[1] *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. Өфө, 1994. 55–56-сы бб.; *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование. Уфа, 2000. С. 47–48.

## Һүҙьяһалыш тибы

**Һүҙьяһалыш тибы** – ул билдәле бер лексик-семантик төркөмгә ҡараған яһалма һүҙҙәрҙең (киң мәғәнәлә) барлыҡҡа килеү ҡалыбы. Һүҙьяһалыш тибы яһалма һүҙҙәрҙең уларҙы яһаусы нигеҙҙәр һәм яһаусы саралар, шулай уҡ уларға хас уртаҡ һүҙьяһалыш мәғәнәһе менән үҙ-ара мөнәсәбәттәре аша формалаша. Ошонан сығып, бер үк һүҙьяһалыш тибына ҡараған яһалма һүҙҙәргә хас түбәндәге билдәләрҙе[1] күрһәтергә була: а) уларҙы яһаусы нигеҙҙәр бер үк һүҙ төркөмөнән килә; б) барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәр үҙҙәре лә тик билдәле бер һүҙ төркөмөнә ҡарайҙар; в) улар бер үк төрлө һүҙ яһаусы саралар ярҙамында яһалалар; г) был процесс һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәр уртаҡ бер һүҙьяһалыш мәғәнәһенә эйә булалар. Мәҫәлән, *геүелдә-, дөпөлдә-, тыҡылда-, шаҡылда-* һүҙҙәре бер һүҙьяһалыш тибына ҡарайҙар, сөнки улар үҙҙәрендә үрҙә һаналған билдәләрҙе тоталар, йәғни уларҙы яһаусы нигеҙҙәр бер үк һүҙ төркөмөнән – оҡшатыу һүҙҙәренән (*геү, дөп, тыҡ, шаҡ*) килгәндәр; яңы барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәр ҙә бер үк һүҙ төркөмөнә – ҡылымдарға (*геүелдә-, дөпөлдә-, тыҡылда-, шаҡылда-*) ҡарайҙар; һүҙ яһаусы сара функцияһын бер үк күрһәткес – *-ылда* аффиксы үтәй; улар барыһы ла уртаҡ бер һүҙьяһалыш мәғәнәһенә («һүҙ яһаусы нигеҙ аша белдерелгән тауыш сығар-» ) эйә.

## Һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдары

**Һүҙьяһалыш юлдары** «телдә һүҙҙәр нисек яһалғандар һәм нисек яһалалар» тигән һорауҙарға яуап биреүсе төп күрһәткестәр булып тора. Яңы һүҙҙәр һүҙ яһаусы нигеҙгә һүҙ яһаусы сараларҙың туранан-тура йоғонтоһо аҫтында яһала. Был процесс барышында һүҙ яһаусы нигеҙҙәр төрлө үҙгәрештәргә бирелә: а) йә уларҙың күләме үҙгәрә, йәғни һүҙ яһаусы нигеҙҙәр өлөшләтә, ҡайһы берҙә хатта башланғыс хәрефтәренә тиклем ҡыҫҡара; б) бер-береһе менән бер бөтөн булып ойоша; в) ҡайһы саҡта улар икенсе нигеҙҙәр менән ишләшә йә үҙҙәре ҡабатланып килә; г) ҡайһы берҙә улар тышҡы төҙөлөштәрен үҙгәртмәйенсә үк яңы өҫтәлмә мәғәнә ҡабул итә; ғ) йә булмаһа фонологик төҙөлөшөн һәм баҫым урынын үҙгәртә һ. б.

[1] *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. Өфө, 1994. 56–57-се бб.; *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование. Уфа, 2000. С. 49.

Был күренештәр, билдәле булыуынса, лексикология һәм семасиология, фонетика һәм фонология, морфемика, морфология һәм синтаксис бүлектәренең асылын тәшкил итәләр. Ошонан сығып, хәҙерге башҡорт телендә, күпселек төрки телдәрҙәге кеүек үк, һүҙьяһалыштың лексик-семантик, фонологик, морфематик, һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (аббревиация), лексик-грамматик һәм лексик-синтаксик юлдарын күрһәтергә була.

Үҙ сиратында һүҙьяһалыш юлдарының ҡайһы берҙәре айырым ысулдарҙан йәки алымдарҙан тора. Мәҫәлән, морфематик юл эсендә аффикслашыу, нигеҙҙәр ҡушылыу, нигеҙҙәр ишләшеү, нигеҙҙәр ҡабатланыу кеүек ысулдарҙы, ә лексик-грамматик юлдың исемләшеү, сифатлашыу, һанлашыу, алмашлашыу, ҡылымлашыу, рәүешләшеү кеүек ысулдарын билдәләп була.

## Һүҙьяһалыш ояһы

**Һүҙьяһалыш ояһы** – ул яһалыштары буйынса үҙ-ара бәйләнгән тамырҙаш һүҙҙәр йыйылмаһы. Мәҫәлән, *ил, илдәш, илсе, илселек, илселектәге, илбағар, илбаҫар, илбаҫарлыҡ, илбаҫарҙарса, илгиҙәр, илһөйәр, ил-йорт, ил-һыу, ил ағаһы, ил азаматтары, ил ҡарттары, ил өҫтө, сит ил, тыуған ил, илле, илһеҙ, ил-ара, илһен-, илһерә-*. Һүҙьяһалыш ояһына ингән һүҙҙәр өсөн материаль яҡтан да (бер үк тамырҙан яһалыуҙары), мәғәнә яғынан да (ойлаш һүҙҙәрҙең барыһында ла уртаҡ тамырға хас мәғәнә үҙенсәлектәре һаҡланыуы) дөйөмлөк булыуы кәрәк.

Ләкин ҡайһы бер һүҙҙәр, материаль һәм мәғәнә уртаҡлыҡтары булыуға ҡарамаҫтан, бер ояға инмәҫкә мөмкин. Бының сәбәбе – яһалма һүҙҙәрҙең формалашыуына ҡайһы дәүер күҙлегенән (синхроник пландамы әллә диахроник пландамы) ҡарауҙа. Билдәле булыуынса, һүҙьяһалышта, ғәҙәттә, һүҙҙәр телдең бөгөнгө торошо күҙлегенән, йәғни синхроник планда, ҡарала, ә тарихи күҙлектән, йәғни диахроник пландан, сығып тикшереү ул, нигеҙҙә, этимология бүлегенең бурысы булып тора. Ошонан сығып, мәҫәлән, *мин – беҙ, һин – һеҙ, күр – күҙ, һөйлә – һүҙ, өс – утыҙ, ике – егерме – ҡырҡ, ғүмер – умырзая, итек – ситек, беләк – беләҙек, бөртөк – бер төк, бойондороҡ – буй һон-, бойор- – буй ор-, им- – имгәк* кеүек бер-береһенә мөнәсәбәттәш һүҙҙәр, тарихи планда бер үк тамырҙан формалашҡан булыуға һәм ниндәйҙер кимәлдә мәғәнә бәйләнештәрен һаҡлауға ҡарамаҫтан, телдең бөгөнгө торошо күҙлегенән сығып тикшергәндә, бер һүҙьяһалыш ояһына ҡаратылмай, сөнки улар телдең оҙайлы үҫеш процесында ҙур морфонологик, шулай уҡ семантик үҙгәрештәр кисергән һәм һөҙөмтәлә бөгөн үҙ аллы тамыр һүҙҙәр булып ҡабул ителә.

Һүҙьяһалыш ояһының нигеҙен тамыр һүҙ тәшкил итә, ул оя эсендә баш һүҙ булып сығыш яһай. Оялағы ҡалған һүҙҙәр турананан-тура баш һүҙҙән (тамырҙан) йәки уның нигеҙендә яһалған икенсе бер яһалма һүҙҙән барлыҡҡа килгән һүҙҙәр булып торалар. Ҡушма һәм парлы һүҙҙәр, нисә тамырҙан тороуҙарына ҡарап, ике (*алмағас, дуҫ-иш, халыҡ-ара*) йәки унан күберәк ояға (*Аҡбуҙат, кинофотойылъяҙма*) инәләр.

Һүҙьяһалыш ояһында баш һүҙ функцияһында тамыры ирекле булған һүҙҙәр ҙә (мәҫәлән, *ер, ил, тар, эҫе, ике, ете, кем, ни, бир-, тот-, аҙ, тиҙ, бар, юҡ, их, уф, дыр, гөлт*), тамыры бәйле булған һүҙҙәр ҙә (мәҫәлән, *йүткер-, йүтәл; оҙаҡ, оҙон; өйрән-, өйрәт-*) йөрөй ала.

Башҡорт телендәге барлыҡ һүҙҙәр ҙә һүҙьяһалыш ояһында баш һүҙ булып сығыш яһай ала. Тик шуныһы – үҙ аллы һүҙ төркөмдәре вәкилдәре оя туплаусы булараҡ һүҙьяһалыш системаһында төп урынды алып торһа, ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең һүҙьяһалыш мөмкинлектәре күпкә сикләнгән, шунлыҡтан һүҙ яһаусы нигеҙ булараҡ улар һирәк ҡулланыла.

Һүҙьяһалыш ояларының күләменә килгәндә, уларҙың нисә һүҙҙән тора алыуҙарын аныҡ билдәләүе ҡыйын. Шулай ҙа «Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге»н төҙөү барышында үткәрелгән күҙәтеүҙәргә һәм тикшеренеүҙәргә таянып, ошондай һығымталар яһала:

1) иң бәләкәй һүҙьяһалыш оялары бер һүҙҙән генә тора, йәғни яңы һүҙҙәр яһауҙа ҡатнаша алмаусы тамыр һүҙ үҙе генә бер ояны тәшкил итә;

2) ҙур һүҙьяһалыш оялары 40 – 50 һүҙҙән алып 100 – 120 һүҙгә тиклем ојлаш лексик берәмектәрҙе үҙ эсенә алырға мөмкин; мәҫәлән, әлегә баш һүҙе «*үт-*» – (*йөрө-* мәғәнәһендә) булған ояның 43 һүҙҙән, «*ел*» булғанының – 54, «*бел-*» – 57, «*һыу*» – 78, «*эш*» – 78, «*ер*» – 84, «*аш*» – 96, «*юл*» – 102, «*үҙ*» – 106, «*бер*» – 107, «*баҫ-*» – 109, «*баш-*» – 109, «*аҡ*» – 120, «*күр-*» – 121 һүҙҙән торғанлыҡтары күрһәтелә[1].

Һүҙьяһалыш ояларының сиктәре хәрәкәтсән, уларҙың күләме үҙгәреүсән. Ваҡыт үтеү менән, телдә яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килә, улар ояларҙы тулыландыралар, йә булмаһа, киреһенсә, айырым һүҙҙәр бара-тора ојлаш һүҙҙәр менән мәғәнә бәйләнештәрен юғалта һәм, был оянан айырылып сығып, үҙ аллы оя барлыҡҡа килтерә.

---

[1] *Ишбаев К. Ғ., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге. Өфө: Ғилем, 2005. 22-се б.

Хәҙерге башҡорт телендәге һүҙьяһалыш ояларын төҙөлөштәре буйынса ошондай төрҙәргә бүлеп ҡарарға була:

1. Яңғыҙ һүҙҙәрҙән торған һүҙьяһалыш оялары. Яҙыуҙа шартлы тамғаһы – (·), бындай ояларҙы, асылда, һүҙьяһалыш процесында ҡатнаша алмайынса, телдә яңғыҙ ҡулланылып йөрөүсе тамыр һүҙҙәр тәшкил итә. Хәҙерге башҡорт телендә бындайҙар рәтенә индерергә мөмкин булған һүҙҙәр түбәндәгеләр:

1) ҡайһы бер ымлыҡтар һәм саҡырыу һүҙҙәре: *аһа/әһә, һы/һе, фу, тфу, их, трр* һ. б.; 2) киҫәксәләрҙең бер аҙы: *ә, нәҡ, тас, ғәйәт, ифрат;* 3) ҡайһы бер теркәүестәр: *фәҡәт, гәрсә*; 4) бәйләүестәрҙең бер нисәһе: *һайын, өсөн*; 5) модаль һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәре: *могайын, исмаһам, мотлаҡ, әлбиттә*; 6) рәүештәрҙең бер аҙы: *дәррәү, һаман, һануз, тағы.*

Быларҙан тыш, яңғыҙ һүҙҙән торған ояларға сит телдәрҙән (грек, латин, ғәрәп, фарсы, рус һ. б.) үҙләштерелгән айырым һүҙҙәрҙе (*абракадабра, алло, ассорти, зинһар, исмаһам, метатеза, синекдоха, эврика, элизия, хәҡиҡәт* һ. б.), шулай уҡ латин, грек, иҫке славян, ғәрәп, рус һәм башҡорт алфавиттарындағы хәрефтәрҙең атамаларын (айырым осраҡтарҙы иҫәпкә алмағанда) ҡаратырға була.

2. Ике һүҙҙән торған һүҙьяһалыш оялары (·–·). Бындай оялар баш һүҙҙән һәм шуның нигеҙендә барлыҡҡа килгән берҙән-бер яһалма һүҙҙән тора. Башҡорт телендә был төрҙәге һүҙьяһалыш ояларының формалашыуында, нигеҙҙә, түбәндәге лексик берәмектәр ҡатнаша: а) ҡылым яһаусы нигеҙ функцияһын башҡарыусы ҡайһы бер ымлыҡтар, саҡырыу һүҙҙәре, оҡшатыу һүҙҙәре: *ыһ – ыһылда-, әһ – әһелдә-, һөс – һөсләт-;* б) ҡылымдар яһалышында нигеҙ булып торған ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән айырым һүҙҙәр: *гәп – гәпләш-, ғәйҙәр – ғәйҙәрлән-*; в) *-лыҡ* аффиксы ҡушылып исемдәр яһалыуҙа нигеҙ булып йөрөүсе бер төркөм ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре: *даими – даимилыҡ, ихтимал – ихтималлыҡ, ҡәтғи – ҡәтғилек.*

3. Һүҙҙәр теҙмәһенән торған һүҙьяһалыш оялары (·–·–·–·).

Был осраҡта оялаш һүҙҙәр бер-береһенә ҡарата эҙмә-эҙлелек мөнәсәбәтендә торалар, йәғни был һүҙҙән бер генә яһалма һүҙ барлыҡҡа килә (I баҫҡыс), үҙ сиратында был яһалма һүҙ икенсе бер яһалма һүҙ өсөн нигеҙ булып сығыш яһай (II баҫҡыс), был процесс артабан да дауам итергә мөмкин: *баҙ – баҙла- – баҙлауыҡ, лай – лайылда- – лайылдаҡ, сырт – сыртла- – сыртлаҡ.*

Башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһында был төрҙәге оялар «таҙа» көйө сағыштырмаса һирәк осрайҙар; ғәҙәттә, уларҙа төп йүнәлеш һаҡланһа ла, сылбырҙың билдәле бер быуынында йыш ҡына тармаҡланалар, йәғни өҫтәлмә рәүештә эргәләш йүнәлештәр хасил була.

4. Тармаҡланған һүҙьяһалыш ояларыы (· – ·<).

Был саҡта оялаш һүҙҙәр бер нөктәнән төрлө яҡҡа таралған нурҙар принцибында яһалалар, йәғни баш һүҙ нигеҙендә ике йәки унан күберәк I баҫҡыс яһалма һүҙҙәр барлыҡҡа килә (әлбиттә, һүҙьяһалыш процесы һәр йүнәлештәң II һәм артабанғы баҫҡыстарында ла дауам итеүе ихтимал):

*даға* → *дағалы*, *дағаһыҙ*, *дағала-*, *дағалай*

*матур* → *матурлыҡ*, *матурла-*, *матурай-*, *матурлан-*

5. Ҡатмарлы һүҙьяһалыш ояларыы (· – ·—· йәки · – ·<·).

Бындай оялар бер үк ваҡытта эҙмә-эҙлекле һәм нурҙар принцибы буйынса барлыҡҡа килгән һүҙьяһалыштар һөҙөмтәһе булып торалар (3-сө һәм 4-се төрҙәр); улар кәмендә дүрт оялаш һүҙҙе (баш һүҙ һәм өс яһалма һүҙ) үҙ эсенә алалар:

*быяла* → *быяласы*, *быялалы*, *быялаһыҙ*, *быялала-*, *быялалай*

*быяласы* → *быяласыныҡы*, *быяласылағы*, *быяласылай*

Ҡатмарлы һүҙьяһалыш оялары башҡалары менән сағыштырғанда иң киң таралған төр булып торалар һәм һүҙьяһалыш системаһының нигеҙен тәшкил итәләр.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ СИСТЕМАҺЫ

Тел үҙенең номинатив (атау, исемләү), коммуникатив (хәбәр итеү, аралашыу) һәм төҙөү (төҙөлөш, ҡоролош) берәмектәре, грамматик категориялары һәм төрлө кимәлдәре менән бөтөн бер системаны тәшкил итә. Үрҙә ҡаралғанса, ошо дөйөм тел системаһының бер өлөшө (кимәле) булараҡ үҙ сиратында һүҙьяһалыш та, уға ҡараған бөтә төҙөү берәмектәре (фонема, морфема, һүҙ, һүҙбәйләнеш һ. б.) һәм яңы һүҙҙәр яһалыу барышында улар араһында барлыҡҡа килгән мөнәсәбәттәр (һүҙ яһаусы нигеҙ, һүҙ яһаусы сара, һүҙьяһалыш мәғәнәһе, һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдары һ. б.) менән үҙе бер бәләкәй системаға ойоша. Ошо әйткәндәрҙән сығып, һүҙьяһалыш системаһына уның өйрәнеү объекттары һәм берәмектәре сифатында ошондай тел күренештәрен ҡаратырға була: тамыр һәм яһалма һүҙҙәр (киң мәғәнәлә), уларҙың төҙөлөшө һәм төрҙәре, ниндәй һүҙ төркөмдәренә ҡарауҙары; яһалма һүҙҙең

өлөштәре (һүҙ яһаусы нигеҙ, һүҙ яһаусы сара, һүҙьяһалыш мәғәнәһе) һәм уларҙың үҙенсәлектәре; һүҙ яһаусы нигеҙ, уның төрҙәре, ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауы һәм ниндәй һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәр яһауҙа ҡатнашыуы; һүҙ яһаусы саралар, уларҙың төрҙәре; һүҙьяһалыш тибы, уның үҙенсәлектәре; һүҙьяһалыш ояһы, уның формалашыуы һәм төҙөлөшө буйынса төрҙәре, әһәмиәте; һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдары, уларҙың һәр береһенең ниндәй һүҙ төркөмдәрен яһауҙа ҡулланылыуы, телдең һүҙ байлығын үҫтереүҙә әһәмиәте.

Шулай уҡ һәр конкрет телдә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, уның һүҙьяһалыш системаһын өйрәнгәндә яһалма һүҙ (киң мәғәнәлә) төп объект булып иҫәпләнә; тик бөтә хикмәт шунда ғына: тел ғилемендә яһалма һүҙҙең тәбиғәтен асыу, уны тикшереү, башлыса, ике аспектта алып барыла:

1) «һүҙҙәр нисек яһалғандар» тигән мәсьәләне хәл итеү бурысы ҡуйыла икән, был саҡта яһалма һүҙ төп фигура булып сығыш яһай, һәм һүҙьяһалыш анализы методы менән яһалма һүҙҙең барлыҡҡа килеүе кире (ретроспектив) йүнәлештә тикшерелә;

2) «һүҙҙәр нисек яһалалар» тигән мәсьәлә ҡарала икән, был осраҡта төп фигура булып һүҙ яһаусы нигеҙ (башлыса, тамыр һүҙ) сығыш яһай, һәм һүҙьяһалыш синтезы методы менән яһалма һүҙҙең барлыҡҡа килеү процесын тикшереү ыңғай (перспектив) йүнәлештә алып барыла.

Һүҙьяһалыш системаһы ҡайһы йүнәлештә генә ҡаралмаһын, яһалма һүҙҙәрҙең ниндәй юлдар һәм ысулдар менән барлыҡҡа килеүен билдәләү һәр саҡта ла күрһәтелергә тейешле төп бурыстарҙың береһе булып ҡала.

## Һүҙьяһалыш юлдары һәм ысулдары

Башҡорт телендә, төрки телдәренең күпселегенә хас булған кеүек үк, һүҙьяһалыш юлдарының түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә була[1]: 1) лексик юл, 2) лексик-семантик юл, 3) фонологик юл,

---

[1] *Дмитриев Н. К.* Грамматика башкирского языка. М.; Л., 1948; *Дмитриев Н. К.* Башҡорт теленең грамматикаһы. Өфө, 1950; *Юлдашев А. А.* Система словообразования и спряжение глаголов в башкирском языке. М., 1958; *Гарипов Т. М.* Башкирское именное словообразование. Уфа, 1959; *Хәҙерге* башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Яуаплы ред. З. Ғ. Ураҡсин, К. Ғ. Ишбаев. Өфө: Китап, 1986; *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. Өфө, 1994; *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование. Уфа, 2000. *Ишбердин Э. Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. М., 1986; *Әхтәмов М. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Ялғауҙар ярҙамында һүҙьяһалыш. Өфө: БДУ, 1994. *Әхтәмов М. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Һүҙьяһалыш. Өфө, 2000.

4) морфематик юл, 5) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (аббревиация юлы), 6) лексик-грамматик юл, 7) лексик-синтаксик юл.

Һүҙьяһалыштың һәр юлы һәм уларға ҡараған айырым ысулдар, ҡағиҙә булараҡ, бер нисә аспекттан сығып ҡарала: а) диахроник һәм синхроник планда; б) тәғәйенләнеше буйынса, йәғни ниндәй һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәрҙе яһауҙа ҡатнашыуҙарынан сығып; в) таралыш һәм ҡулланылыш даирәһенә ҡарап (продуктив, аҙ продуктив һәм продуктив булмаған төрҙәре).

### *Лексик һүҙьяһалыш*

Һүҙ – атау (исемләү) процесында барлыҡҡа килгән номинатив берәмек; семантик яҡтан һүҙҙәр предметлыҡ төшөнсәһен, предметтың билдәһен йәки иҫәбен, процесты, процестың билдәһен һәм башҡаларҙы белдереп йөрөйҙәр. Ысынбарлыҡтағы төрлө күренештәрҙе һәм төшөнсәләрҙе атау, исемләү, йәғни номинация һөҙөмтәһендә икенсе бер һүҙ нигеҙендә яһалмаған, ә тәү башлап формалашҡан беренсел тамыр һүҙҙәр барлыҡҡа килеүҙең был башланғыс этабын шартлы рәүештә генә һүҙьяһалышҡа ҡаратырға булалыр, сөнки, үрҙә әйтелгәнсә, номинация тел үҫешендә – беренсел, ә һүҙьяһалыш – икенсел баҫҡыс; һуңғыһында, билдәле булыуынса, яңы һүҙҙәр телдә быға тиклем булған башҡа һүҙҙәр һәм һүҙ яһаусы саралар нигеҙендә формалаша.

Телдә башлап тамыр һүҙҙәр барлыҡҡа килеү процесын диахроник планда һүҙьяһалыштың лексик юлы[1] тип атарға булалыр. Телдең тарихи үҫеше һөҙөмтәһе булараҡ, беренсел тамыр һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәре, бара-тора төрлө аффикстар (башлыса, һүҙ яһаусы аффикстар) ҡабул итеп, яңы мәғәнәле яһалма һүҙҙәр барлыҡҡа килтергән, ләкин синхроник планда бөгөн улар тамыр һүҙ сифатында ҡабул ителә, яһалма һүҙ рәүешендә тамыр һәм аффиксаль морфемаларға тарҡатылмай; мәҫәлән, боронғо *һы-* тамыр һүҙе нигеҙендә яһалған ҡылымдарҙы шундайҙар рәтенә ҡаратырға була: *һы- + н > һын-*, *һы- + т > һыт-*, *һы- + ҡ > һыҡ-*[2].

Фоно-морфематик яҡтан телселәр бындай тамыр һүҙҙәрҙе ике төркөмгә: а) бер ижеклеләргә һәм б) күп ижеклеләргә бүлеп ҡарайҙар һәм бер ижеклеләрен беренсел тамырҙар[3], ә күп ижек-

---

[1] *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. Өфө, 1994. 70–72-се бб.; *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование. Уфа, 2000. С. 59–60.

[2] *Ишбердин Э. Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. М., 1986. С. 54–55.

[3] *Юлдашев А. А.* Система словообразования и спряжение глаголов в башкирском языке. М., 1958. С. 23; *Баскаков Н. А.* Историко-типологическая фонология тюркских языков. М., 1988. С. 59.

леләрен икенсел тамырҙар[1] йәки тамыр тип түгел, ә тамыр һүҙ йә булмаһа яһалма тамыр[2] тип йөрөтәләр.

Бер ижекле һәм өс фонемалы тамыр морфема (ТһТ) – төрки телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт теленең, күпселек тамыр һүҙҙәренә хас фоно-морфематик структура булып тора[3], ә бер ижекле тамыр һүҙҙәрҙең ҡалған төрҙәре (һ, һТ, һС) аҙыраҡ таралған (Н. А. Баскаковтың раҫлауынса, улар ТһТ тибындағы төп варианттың төрлө фонологик типтары ғына булып сыға); ә инде бер ижекле тамырҙарҙан һТ + Т, ТһТ + Т тибындағылары һәм һТ + һ, ТһТ + һ тибындағы бөтә күп ижекле тамырҙар икенсел тамыр һүҙҙәр булып иҫәпләнә, ә морфематик яҡтан улар беренсел тамырҙан һәм һүҙ яһаусы аффикстарҙан тора.

Башҡорт телендә лексик юл менән барлыҡҡа килгән тамыр һүҙҙәрҙең ике төркөмө лә осрай, шулай ҙа иң киң таралыш алған варианты булып ТһТ тибындағылары иҫәпләнә[4]. Миҫалдар:

1) беренсел тамыр һүҙҙәр:

һ: *ә, у(л), ө-(өйрәт-);*

һТ: *ау, ай, ик-, эс, ос-, өс, уй, ым, ах, эш;*

Тһ: *ни, ти-, на!, фу!, йә!;*

ТһТ: *бай, баҡ-, бир-, бит, йыл, күс, ҡош, сыҡ-, таш, тел.*

2) икенсел тамыр һүҙҙәр:

һТ + Т: *арт, арт-, илт-, өрк-, үрт-;*

ТһТ + Т: *йолҡ-, йорт, күрк, сәнс-, тарт-, һарҡ-;*

һТ + һ: *айа, ике, ире-, уҡы-, эҫе;*

ТһТ + һ: *буға, бүре, йоҡа, [йа]һа-, ҡара.*

---

[1] *Баскаков Н. А.* Историко-типологическая фонология тюркских языков. М., 1998. С. 59.

[2] *Юлдашев А. А.* Система словообразования и спряжения глаголов в башкирском языке. М., 1958. С. 28.

[3] *Юлдашев А. А.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 19–46-сы бб; *Щербак А. М.* Сравнительная фонетика тюркских языков. Л., 1970. С. 193–198; *Ахметов М. А.* Глагол в языке орхоно-енисейских памятников (в сравнительном плане с современным башкирским языком). Саратов, 1978. С. 13–43; *Баскаков Н. А.* Тюркские языки (общие сведения и типологические сведения) // Языки народов СССР. Т. II. Тюркские языки. М., 1966. С. 16–18; *Баскаков Н. А.* Историко-типологическая морфология тюркских языков. М., 1979. С. 141–187; *Баскаков Н. А.* Историко-типологическая фонология тюркских языков. М., 1988. С. 26–71; *Кайдаров А. Т.* Структура односложных корней и основ в казахском языке. Алма-Ата, 1986. С. 37–68; *Гарипов Т. М.* Историко-этимологический словарь башкирского языка. Первый выпуск. Уфа, 2007.

[4] *Юлдашев А. А.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 22-се б.; *Ахметов М. А.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 19–27-се бб.

## *Лексик-семантик һүҙьяһалыш*

Һүҙьяһалыштың лексик-семантик юлы полисемия һәм омонимия күренештәре менән бәйле. Билдәле булыуынса, полисемия нигеҙендә һүҙҙәрҙең мәғәнәләре алыҫлашыу һөҙөмтәһендә семантик омонимдар барлыҡҡа килә, ә семантик омонимдар үҙ сиратында, ваҡыт үтеү менән, телдә үҙ аллы яңы һүҙҙәр сифатында ҡулланыла башлайҙар; былдай һүҙҙәрҙе, үрҙә әйтелгәнсә, күсмә һүҙҙәр тип йөрөтәләр.

Был төрҙәге һүҙьяһалыш юлының асылы шунда: телдә быға тиклем ҡулланылып йөрөгән һүҙ үҙенең фоно-морфематик төҙөлөшөн үҙгәртмәйенсә һаҡлаған хәлдә лексик мәғәнәһен (тимәк, был осраҡта һүҙ яһаусы сара булып һүҙ яһаусы нигеҙҙең лексик мәғәнәһе үҙгәреү тора), шуға ярашлы билдәле бер кимәлдә морфологик категорияларын, синтаксик функцияларын һәм стилистик биҙәктәрен үҙгәртә; һөҙөмтәлә тәүге һүҙҙән (яһаусы нигеҙҙән) үҙенең лексик-семантик үҙенсәлектәре, грамматик (морфологик һәм синтаксик) билдәләре һәм стилистик биҙәктәре менән айырылған яңы лексик берәмек (күсмә һүҙ) барлыҡҡа килә. Миҫалдарҙы сағыштырығыҙ:

1) *ай*[1] «күк есеме»: а) берлек формаһында ғына ҡулланыла (*ай ҡалҡты*); б) ошондай һүҙбәйләнештәрҙә йөрөй ала (*яңы ай, тулы ай, иҫке ай* һ. б.);

*ай*[2] «йылдың 1/12 өлөшөнә тиң ваҡыт үлсәү берәмеге»: а) берлек һәм күплек формаларында ҡулланыла ала (*ай башланды – айҙар үтте*); б) ошондай һүҙбәйләнештәргә инә ала (*бер ай, өс ай, биш ай* һ. б.; *яҙ айҙары, йәй айҙары, көҙ айҙары, ҡыш айҙары;* (*һин*) *тыуған ай,* (*ул*) *ҡайтҡан ай* һ. б.);

2) *баҫ-*[1] «аяҡ үрә тор-, атла-»: а) күсемһеҙ ҡылым (*ергә баҫ-, алға баҫ-*); б) күләм категорияһының синтетик формалары менән үҙгәрә (*баҫынҡыра-, баҫҡыла-*); в) ғәҙәттә, төбәү килеш менән идара итә (*иҙәнгә баҫ-, һыуға баҫма*);

*баҫ-*[2] «нәшер ит-»: а) күсемле ҡылым (*китап(ты) баҫ-, журнал(ды) баҫ-*); б) күләм категорияһының синтетик формалары аффикстарын ҡабул итә алмай (*китап(ты) баҫынҡыра-* йә *баҫҡыла-* формалары, ғәҙәттә, ҡулланылмай); в) башлыса, төшөм һәм урын-ваҡыт килештәре менән идара итә (*гәзит(те) баҫ-, гәзит(тә) баҫ-*).

Русистика өлкәһендәге айырым эштәрҙә лә, төрки тел ғилемендә лә, шул иҫәптән башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, үзбәк, ҡырғыҙ, хакас, ҡуман телдәре буйынса донъя күргән ҡайһы бер хеҙмәттәрҙә лексик-семантик юл (ҡайһы бер эштәрҙә «лексик юл» йәки «семантик юл» тигән терминдар ҙа осрай) менән һүҙҙәр яһалыу үҙенсәлектәре күрһәтелә, был күренештең конкрет телдәрҙә төп билдәләрен асыҡлауға ынтылыш яһала.

Башҡорт телендә лексик-семантик юл менән һүҙҙәр барлыҡҡа килеү бөгөнгө осорҙа ла йәнле күренеш булып тора, быны бигерәк тә төрлө хужалыҡ тармаҡтарына, фән, техника, мәғрифәт, мәҙәниәт өлкәләренә ҡараған терминдар яһалышында күҙәтергә була. Миҫал өсөн тел ғилеменең морфология һәм синтаксис бүлектәренә ҡараған ошондай лингвистик терминдарҙың формалашыуын күрһәтеү ҙә етә:

а) морфология буйынса: *исем*$^{1}$ «имя, название, наименование» > *исем*$^{2}$ «имя существительное»; *сифат*$^{1}$ «качество» > *сифат*$^{2}$ «имя прилагательное»; *һан*$^{1}$ «число, количество, численность» > *һан*$^{2}$ «имя числительное»; *алмаш*$^{1}$ «смена, замена» > *алмаш*$^{2}$ «местоимение»; *рәүеш*$^{1}$ «образ, вид; уклад, манера» > *рәүеш*$^{2}$«наречие»;

б) синтаксис буйынса: *эйә*$^{1}$ «владелец, собственник, хозяин» > *эйә*$^{2}$ «подлежащее»; *хәбәр*$^{1}$ «известие, весть, сообщение; слух, молва» > *хәбәр*$^{2}$ «сказуемое»; *аныҡлаусы*$^{1}$ «уточняющий» > *аныҡлаусы*$^{2}$ «определение»; *тултырыусы*$^{1}$ «наполняющий, дополняющий» > *тултырыусы*$^{2}$ «дополнение»; *хәл*$^{1}$ «положение, состояние, обстановка, обстоятельство; сила, бодрость» > *хәл*$^{2}$ «обстоятельство».

Лексик-семантик һүҙьяһалыш күберәк үҙ аллы һүҙ төркөмдәре, бигерәк тә исемдәр, сифаттар һәм ҡылымдар араһында киң таралыш алған. Түбәндәге миҫалдарҙы ҡарағыҙ:

а) исемдәр: *ағза*$^{1}$ «организмдың бер өлөшө, орган» > *ағза*$^{2}$ «берәй коллективта, ойошмала тороусы кеше»; *башаҡ*$^{1}$ «ҡыяҡлы үҫемлектең емле башы» > *башаҡ*$^{2}$ «уҡ башына ҡуйылған үткер ос»; *инеш*$^{1}$ «бәләкәй һыу сығанағы, шишмә» > *инеш*$^{2}$ «телмәрҙең, яҙма хеҙмәттең йәки музыкаль әҫәрҙең башланғыс өлөшө»; *табаҡ*$^{1}$ «аш-һыу өсөн ҙур һауыт» > *табаҡ*$^{2}$ «ҡағыҙ, ҡалай кеүек нәмәләрҙең дүрткелләп ҡырҡылған бер өлөшө; баҫма әйберҙе үлсәү берәмеге»;

б) сифаттар: *елле*$^{1}$ «ел иҫеп торған» > *елле*$^{2}$ «етеҙ, көслө; уңған, шәп»; *тиҫкәре*$^{1}$ «бер нәмәнең киреһе» > *тиҫкәре*$^{2}$ «тыңлауһыҙ, кире»; *оло*$^{1}$ «йәше буйынса өлкән» > *оло*$^{2}$ «төп, ҙур әһәмиәтле»;

в) ҡылымдар: *аҡла-*$^{1}$ «ағарт-» > *аҡла-*$^{2}$ «ғәйепһеҙгә сығар-»; *иҙ-*$^{1}$ «төйөп йәнс-, йомшарт-» > *иҙ-*$^{2}$ «эксплуатацияла-»; *һөр-*$^{1}$ «ерҙе һуҡа, һабан менән эшкәрт-» > *һөр-*$^{2}$ «ҡыу-, һөргөнгә ебәр-»; *ҡара-*$^{1}$ «күр-, күҙәт-, тамаша ҡыл-» > *ҡара-*$^{2}$ «тәрбиәлә-».

## *Фонологик һүҙьяһалыш*

Телдең тарихи үҫеше барышында айырым һүҙҙәр, үҙҙәренең тәүге морфематик төҙөлөштәрен һаҡлаһалар ҙа, фонематик төҙөлөштәренең йәки баҫым урындарының үҙгәреүҙәре һөҙөмтәһендә

яңы лексик мәғәнәләр ҡабул итәләр; ошо рәүешле төрлө фонологик үҙгәрештәр нәтижәһендә яңы лексик берәмектәрҙең барлыҡҡа килеүен фонологик һүҙьяһалыш тип атарға була; лингвистик әҙәбиәттә «фонетик юл» тигән термин күберәк ҡулланыла, шулай уҡ «фонетик-морфологик юл», «акцентуацион юл», «фонематик юл» тигәндәре лә осрай. Был процесс барышында беҙ ябай телмәр өндәре менән генә түгел, ә һүҙҙең мәғәнәләрен айырыу һәм билдәләү функцияларын башҡарыусы берәмек булараҡ фонемалар һәм айырым һүҙҙәрҙә баҫымдың урындарын алмаштырыу күренештәре менән эш итәбеҙ, шунлыҡтан һүҙьяһалыштың был төрөн фонологик юл тип йөрөтөү маҡсатҡа ярашлы буласаҡ.

Фонологик юл менән яңы һүҙҙәр яһалыу һәр телдең үҫеш тарихында боронғо күренеш һанала, хәҙерге осорҙа ул күп телдәрҙә үҙенең элекке продуктивлығын юғалтҡан, шунлыҡтандыр телселәр һүҙьяһалыштың был төрөнә бик үк иғтибар итеп бармайҙар.

Тюркологияла телдәрҙең тарихи фонологияһына бағышланған һәм һүҙьяһалыштың ҡайһы бер мәғәнәләре ҡаралған монографияларҙы, фонологик күренештәрҙең һүҙ мәғәнәләрен айырыуға килтереү осраҡтарын күрһәтеүсе ҡайһы бер мәғлүмәттәр тотҡан йәки фонологик һүҙьяһалыштың барлығын атап киткән айырым эштәрҙе, шулай уҡ фонологик һүҙьяһалыш буйынса махсус тикшеренеүҙәрҙе[1] әйтеп китергә була.

Башҡорт тел ғилемендә иһә Ж. Ғ. Кейекбаевтың[2], Ә. Ә. Юлдашевтың[3], Т. М. Ғариповтың[4] был өлкәлә фонологик тикшеренеүҙәргә дөйөм йүнәлеш бирерҙәй билдәле хеҙмәттәрен, шулай уҡ Э. Ф. Ишбирҙиндең һәм К. Ғ. Ишбаевтың фонологик һүҙьяһалыштың конкрет мәсьәләләренә арналған эштәрен[5] күрһәтә алабыҙ.

Әйткәнебеҙсә, башҡа телдәрҙәге кеүек үк, хәҙерге башҡорт телендә лә фонологик һүҙьяһалыш киң таралмаған; был юл, башлыса, исем, сифат һәм ҡылымдар араһында, һирәкләп алмаштар һәм рәүештәр яһалышында күҙәтелә.

---

[1] *Ганиев Ф. А.* Фонетическое словообразование в татарском языке. Казань, 1973.

[2] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы. Өфө, 1958.

[3] *Юлдашев А. А.* Система словообразования и спряжение глаголов в башкирском языке. М., 1958.

[4] *Гарипов Т. М.* Башкирское именное словообразование. Уфа, 1959.

[5] *Ишбердин Э. Ф.* Фонетическое словообразование в башкирском языке// Исследования по грамматике башкирского языка: Сб. статей. Уфа, 1979; *Ишбердин Э. Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. М., 1986; *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. Өфө, 1994; *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование. Уфа, 2000.

Фонологик һүҙьяһалыштың башҡорт телендә ошондай ысулдары осрай: 1) фонемаларҙың сиратлашыуы, 2) һүҙҙең тотош нәҙегәйеүе (палатализация), 3) айырым фонемаларҙың төшөп ҡалыуы, 4) баҫымдың урыны үҙгәреүе.

Фонемаларҙың сиратлашыуы:

а) һуҙынҡы фонемаларҙың күсеше:

[а] – [ы]: [*йа*]*р-* – *йыр-* , *һан* – *һын, һары-* – *һыры-*;

[а] – [о]: [йа]*ҡ-* – *йоҡ-*;

[е] – [ө]: *бейек* – *бөйөк, серек* – *сөрөк*;

[у] – [ы]: *урғы-* – *ырғы-, сусай-* – *сысай-*;

[у] – [о]: *бута-* – *бота-, суҡы-* – *соҡо-, ҡура-* – *ҡоро-*;

б) тартынҡы фонемаларҙың күсеше:

[р] – [ҙ]: *бур* – *буҙ, күр-* – *күҙ, сирәм* – *сиҙәм, һөр-* – *һөҙ-*;

[т] – [ҙ] – [й]: *бат-* – *бай(ы)* -, *ҡат-* – *ҡаҙ-* – *ҡай(ы)-, ҡаҙау* – *ҡа*[йа]*у*;

[ғ] – [й]: *ағыш* – *айыш, һағыҙ* – *сайыр*;

[ҡ] – [ў]: *һаҡ* – *һау, ҡаҡ* – *ҡау* – *ҡыу*;

в) һуҙынҡы һәм тартынҡы фонемаларҙың бергә күсеше: *бағла-* – *баула-* – *бәйлә-*, [йа]*т-* – [йа]*ҙ-* – *йәй-, сыу* – *һыу* – *һүт* – *һүл, һур-* – *һуҙ-* – *һүр-* – *һүт-, тек-* – *сик-, тейен* – *тин, туған* – *тыуған*.

Һүҙҙең тотош нәҙегәйеүе (палатализация):

а) исемдәр яһалышында: *ҡабыҡ* – *кәбәк, ҡайны* – *ҡәйнә, оро* – *өрө, суҡыш* – *сүкеш*;

б) сифаттар яһалышында: *балаҡай* – *бәләкәй, һалмаҡ* – *һәлмәк*;

в) ҡылымдар яһалышында: *бор-* – *бөр-, быс-* – *бес-, ҡуп-* – *күп-, суҡы-* – *сүке-, уп-* – *үп-, һуҡ-* – *һүк-, һыпыр-* – *һепер-*.

Айырым фонемаларҙың төшөп ҡалыуы:

а) һүҙ башында: *ғазап* – *аҙап, ғәмәл* – *әмәл, хисап* – *иҫәп, хәҙер* – *әҙер*;

б) һүҙ уртаһында: *мәғәнә* – *мәне, тыума* – *тома, тәңре* – *тәре, шыума* – *шыма*;

в) һүҙ аҙағында: *олуғ (= бөйөк)* – *оло, остаз* – *оҫта*.

Баҫымдың урыны үҙгәреү ысулы менән һүҙҙәр яһалыу, башлыса, түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

а) рус теленән үҙләштерелгән *-ик* суффикслы һүҙҙәрҙәге баҫым башҡорт телендәге баҫым системаһына буйһонмай, йәғни ул үҙ урынын үҙгәртмәй, ә нигеҙ телдәге урынын һаҡлай, һөҙөмтәлә беҙ тәүге осраҡта – исемгә (баҫым һүҙҙең тамырында), ә икенсе осраҡта сифатҡа (баҫым ҡыҫҡартып алынған **-ик** (< **ическ-ий**) суффиксында) ҡараған тамырҙаш һүҙҙәр менән эш итәбеҙ; улар бер-береһенә морфематик төҙөлөштәре һәм яҙылыштары буйынса

тап килһәләр ҙә, мәғәнәләре һәм әйтелештәре буйынса айырым һүҙҙәр булып торалар; миҫалдарҙы сағыштырығыҙ: *акаде́мик* (исем) – *академи́к ял* (сифат), *те́хник* (исем) – *техни́к прогресс* (сифат), *хи́мик* (исем) – *хими́к реакция* (сифат);

б) ҡайһы бер исем һәм ҡылымдарға ҡараған һүҙҙәр, баҫым урындарын үҙгәртеп, алмаштарға әйләнә: *барлы́ҡ* (исем) – *ба́рлыҡ аҡса* (алмаш), *бөтә́* (ҡылым) – *бө́тә нәмә* (алмаш), *булға́н* (ҡылым) – *бу́лған кеше* (алмаш);

в) айырым исемдәрҙең һәм ҡылымдарҙың билдәле бер грамматик формалары, ҡайһы бер сифаттар баҫымдың күсеүе арҡаһында рәүештәргә әйләнә: *башта́ бүрек ине* (исем) – *ба́шта һин әйт* (рәүеш), *көскә́ ышана* (исем) – *кө́скә ҡуҙғала* (рәүеш), *өйгә ҡайта́* (ҡылым) – *ҡа́йта шәбәйҙе* (рәүеш), [йа]*ңы́ урам* (сифат) – *я́ңы башланды* (рәүеш), [йе]*рле́ халыҡ* (сифат) – *е́рле йүгерә алмай* (рәүеш).

Телдә һүҙҙәрҙең фоно-морфематик төҙөлөшөндәге үҙгәрештәр нигеҙендә яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килеү осраҡтары ла күҙәтелә; был күренеште фоно-морфематик һүҙьяһалыш тип атарға булалыр.

Фоно-морфематик һүҙьяһалыштың асылы шунда: ул фонологик юл менән морфематик юлдың аффикслашыу ысулын берләштерә, йәғни был процесс барышында һүҙ яһаусы нигеҙҙәр фонематик төҙөлөштәрен үҙгәртеү менән бер рәттән төрлө типтағы һүҙ яһаусы аффикстар ҙа ҡабул итәләр, һөҙөмтәлә төрлө мәғәнәле тамырҙаш һүҙҙәр (тарихи планда) барлыҡҡа киләләр. Миҫалдар: *атла – аҙым – а*[йа]*ҡ* [т – ҙ – й, -ла, -ым, -аҡ], *бысаҡ, бысҡы – бесән, бестер-* [быс- – бес-, -аҡ, -ҡы, -ән, -тер], [йу]*рған – йүргәк* [йур – йүр, -ған, -гәк], *тумыр- – түмәр – түмгәк* [тум – түм, -ыр, -әр, -гәк], *һаҡлыҡ – һағын – һаулыҡ* [ҡ–ғ – ў, -лыҡ, -ын, -ыҡ], *һүҙлә(ш)- – һөйлә(ш)-* [һүҙ – һөй].

### *Морфематик һүҙьяһалыш*

Яһаусы нигеҙҙәргә аффикстар ҡушылыу ярҙамында, шулай уҡ бер нисә яһаусы нигеҙҙең ҡушылыуы, ишләшеүе йәки бер үк яһаусы нигеҙҙең ҡабатланыуы һөҙөмтәһендә яңы һүҙҙәр яһалыуҙы **морфематик һүҙьяһалыш** тип йөрөтөргә була. Һүҙьяһалыштың был төрө агглютинатив һәм флектив телдәрҙең һәр береһендә тиерлек киң таралған юл булып тора, тик ул күпселек телселәрҙең эштәрендә традиция буйынса (заманында һүҙьяһалыш бүлегенең морфология эсендә булыуы) морфологик юл тип ҡарала; беҙҙеңсә, морфематик юл тип атау дөрөҫөрәк буласаҡ, сөнки бындай һүҙьяһалыш барышында беҙ төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған

айырым үҙ аллы һүҙҙәр, уларға бәйле морфологик процестар һәм категориялар менән түгел, ә яңы һүҙҙәр яһалыуҙа ҡатнашыусы морфематик берәмектәр (тамыр, нигеҙ, аффикс) менән эш итәбеҙ.

Хәҙерге башҡорт телендә морфематик һүҙьяһалыштың аффикстар ҡушылыу (аффикслашыу), нигеҙҙәр ҡушылыу, нигеҙҙәр ишләшеү һәм нигеҙҙәр ҡабатланыу кеүек ысулдарын күрһәтергә була.

**Аффикслашыу.** Аффикслашыу һөҙөмтәһендә яһаусы нигеҙгә һүҙ яһаусы аффикстар ҡушылып яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килә. Былдай ысул менән яһалған һүҙҙәрҙе яһалма һүҙҙәр тип йөрөтәләр; үрҙә әйтелгәнсә, яһалма һүҙҙәр термины бында тар мәғәнәлә ҡулланыла, йәғни ябай яһалма һүҙҙәр күҙ уңында тотола.

Башҡорт телендә аффикслашыу процесында һүҙ яһаусы нигеҙ сифатында нигеҙҙең бөтә төрҙәре лә (ябай йәки тамыр нигеҙ, яһалма нигеҙ, ҡушма нигеҙ, парлы нигеҙ) ҡатнаша ала; был саҡта улар үҙҙәре генә лә, йә булмаһа төрлө форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар менән ҡатмарланған хәлдә лә ҡулланылырға мөмкин:

1) ябай йәки тамыр нигеҙҙәр үҙҙәре генә (*эш-се, яҙ-ғы, фекер-лә-, дөһөр-лә-, өс-ләтә, йылы-лай*); ябай нигеҙ төрлө форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар менән ҡатмарланған (*бел-еш-мә, ҡурҡ-ын-ыс, йәш-тәр-сә; ҡала-ла-ғы, гәзит-тәр-ҙә-ге, әйт-кә-н-ем-сә*);

2) яһалма нигеҙҙәр үҙҙәре генә (*иг-ен-се, ел-гәр-гес, һүрәт-лә-мә*); форма яһаусы йәки һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар менән ҡатмарланған яһалма нигеҙҙәр (*аң-ла-т-ма, баш-ла-н-ғыс, күр-һәт-мә-лә-ге*);

3) ҡушма нигеҙҙәр үҙҙәре генә (*ҡара+ғат-лыҡ, ҡарт+атай-ҙыҡы*); форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар менән ҡатмарланған ҡушма нигеҙҙәр (*аҡ+һаҡал-дар-са, ашъ+яулыҡ-та-ғы*);

4) парлы нигеҙҙәр үҙҙәре генә (*ата-әсә-ле, сәй-шәкәр-лек*); төрлө форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар менән ҡатмарланған парлы нигеҙҙәр (*дуҫ-иш-тәр-сә, һауыт-һаба-ла-ғы*).

Һүҙ яһаусы аффикстар килеп сығыштары буйынса дөйөм төрки сығанаҡлы төп башҡорт аффикстарына һәм сит телдәрҙән (башлыса, фарсы, ғәрәп, рус, грек, латин телдәренән) үҙләштерелгән аффикстарға бүлеп ҡаралалар.

Төп башҡорт аффикстары үҙ аллы һүҙҙәрҙең күбеһенең һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәренең яһалышында ҡатнашалар, шулай уҡ аффикслашыу бигерәк тә исемдәрҙең, сифаттарҙың, ҡылымдарҙың һәм рәүештәрҙең яһалышында иң продуктив ысул булып иҫәпләнә. Миҫалдар:

а) исем яһаусы аффикстар:

***-ғы, -ге, -ғо, -гө; -ҡы, -ке, -ҡо, -кө:*** *кирге, борғо, ҡырҡҡы, һоҫҡо;*

***-ғын, -ген, -ғон, -гөн; -ҡын, -кен, -ҡон, -көн:** янғын, һөргөн, упҡын, тотҡон;*

***-ғыс, -гес, -ғос, -гөс; -ҡыс, -кес, -ҡос, -көс:** ҡырғыс, белгес, борғос, асҡыс, осҡос, сәскес;*

***-даш, -дәш, -ҙаш, -ҙәш, -таш, -тәш:** замандаш, ҡорҙаш, серҙәш, йәштәш;*

***-ҡ, -к, -аҡ, -әк:** ҡайраҡ, көрәк, ураҡ, киҫәк;*

***-лыҡ, -лек, -лоҡ, -лөк:** утынлыҡ, кәрәклек, боҙлоҡ, бөйөклөк;*

***-м, -ым, -ем, -ом, -өм:** услам, һауым, белем, йотом, өйөм;*

***-ма, -мә:** баҫма, ярма, бүлмә, күргәҙмә;*

***-сы, -се, -со, -сө:** балыҡсы, мәғрифәтсе, ҡошсо, сөгөлдөрсө;*

***-уыҡ, -үек:** шарлауыҡ, тарлауыҡ, гөрләүек;*

***-ымта, -емтә, -омта, -өмтә:** ҡушымта, элемтә, һөҙөмтә;*

***-ынты, -енте, -онто, -өнтө:** һырынты, үҫенте, һөрөнтө;*

б) сифат яһаусы аффикстар:

***-ғы, -ге, -ғо, -гө; -ҡы, -ке, -ҡо, -кө:** яҙғы, арғы, яландағы, йәйге, боронғо, көҙгө, ҡышҡы, эске, өҫкө;*

***-ғыр, -гер; -ҡыр, -кер, -ҡор, -көр:** тапҡыр, үткер, отҡор, һиҙгер;*

***-ҡалаҡ, -кәләк; -ғалаҡ, -гәләк:** ҡасҡалаҡ, сумғалаҡ, көйгәләк;*

***-лы, -ле, -ло, -лө:** балыҡлы, йәмле, ҡомло, көслө;*

***-сан, -сән:** тормошсан, оялсан, һүҙсән, телсән;*

***-сыл, -сел, -сол, -сөл:** ҡунаҡсыл, ғауғасыл, тирсел, ҡонсол, көнсөл;*

***-һыҙ, -һеҙ, -һоҙ, -һөҙ:** урманһыҙ, күңелһеҙ, тоҙһоҙ, көйһөҙ;*

***-мтал, -мтәл:** арымтал, өшөмтәл, йөрөмтәл;*

***-ынҡы, -енке, -онҡо, -өнкө:** тартынҡы, күтәренке, бошонҡо, төшөнкө;*

в) ҡылым яһаусы аффикстар:

***-а, -ә:** аша-, һына-, төҙә-, үсә-;*

***-ғар, -гәр, -ҡар, -кәр:** аңғар-, елгәр-, ҡотҡар-;*

***-й, -ай, -әй:** ҡарай-, матурай-, ҙурай-, нәҙегәй-;*

***-л, -ал, -әл, -ол, -өл:** терел-, ҡотол-, юғал-, йүнәл-;*

***-ла, -лә:** болотла-, уйла-, матурла-, эшлә-, көсөклә-;*

***-лан, -лән-:** ғорурлан-, тамырлан-, рәхәтлән-, емешлән-;*

***-лаш, -ләш:** дуҫлаш-, кристаллаш-, берләш-, усләш-;*

***-лаштыр, -ләштер:** идеаллаштыр-, электрлаштыр-, индивидуалләштер-;*

***-н, -ан, -ән:** йылын-, эҫен-, бушан-, көсән-;*

***-р, -ар, -әр, -ыр, -ер, -ор, -өр:** яңыр-, ҡайғыр-, ағар-, күгәр-, иҫер-, ҡотор-;*

***-һы, -һе, -һо, -һө:** үкһе-, ерһе-, һөрһө-;*

***-һын, -һен, -һон, -һөн:** ятһын-, юҡһын-, үҙһен-;*

***-hыра, -hерә, -hора, -hөрә:*** *ҡанhыра-, етемhерә-;*

***-hыт, -hет, -hот, -hөт:*** *кәмhет-, үгәйhет-;*

***-ылда, -елдә, -олда, -өлдә:*** *шаҡылда-, сәрелдә-, тоҡолда-, гөпөлдә-, ахылда-, ухылда-;*

г) рәүеш яhаусы аффикстар:

***-лай, -ләй:*** *йылылай, бушлай, тереләй, эҫеләй;*

***-лап, -ләп:*** *айлап, йыллап, көнләп, сәғәтләп;*

***-лата, -ләтә:*** *аҡсалата, игенләтә; унлата, өсләтә; күрәләтә;*

***-са, -сә:*** *башҡортса, русса; батырҙарса, иптәштәрсә; яңыса, иҫкесә.*

Үҙләштерелгән аффикстарға фарсы, ғәрәп, рус hәм рус теле аша Көнбайыш Европа (башлыса, грек hәм латин) телдәренән килеп ингән префикстар hәм суффикстар ҡарай. Быңдай префикстарҙың hәм суффикстарҙың ҡулланылышы (префикслашыу, суффикслашыу, префикслашыу + суффикслашыу), нигеҙҙә, исемдәрҙең, сифаттарҙың hәм ҡылымдарҙың яhалыштарында күҙәтелә.

**Префикслашыу.** Үрҙә әйтелгәнсә, төрки телдәре, шул иҫәптән башҡорт теле ерлегендә аффиксаль морфемаларҙың бер төрө булараҡ префикстар күҙәтелмәй; ә префикслашыу ысулы менән яңы hүҙҙәр яhалыу тик алда күрhәтелгән телдәрҙән үҙләштерелгән префикстар ярҙамында ғына бара, был саҡта яhаусы нигеҙ сифатында башҡорт hүҙҙәре лә, үҙләштерелгән hүҙҙәр ҙә сығыш яhайҙар.

Префикстарҙың ҡулланылыу осраҡтары:

1) фарсы теленән ингән *би-, бәд-, на-* префикстары яhаусы нигеҙ аңлатҡан мәғәнәнең киреhен, юҡлыҡты белдереүсе исемдәр hәм сифаттар яhауҙа ҡатнашалар:

***би-:*** *баштаҡ – бибаштаҡ, тараф – битараф, сара – бисара, маҙа – бимаза, ғәйеп – биғәйбә, хисап – бихисап, хәбәр – бихәбәр, hуш – биhуш;*

***бәд-:*** *бәхет – бәдбәхет, гөман – бәдгөман, доға – бәддоға, намә – бәднамә;*

***на-:*** *дан – наҙан (< надан), мәғлүм – намәғлүм, разый (=риза) – наразый, хаҡ – нахаҡ;*

2) грек hәм латин телдәренән ингән префикстар (йәки префиксоидтар) исемдәр (а), сифаттар (б) hәм ҡылымдар (в) яhалышында ҡулланылалар:

а) ***анти-:*** *антидонъя, антийесем;*

***гипер-:*** *гиперматдә, гипертауыш;*

***контр-:*** *контрхәрәкәт, контрhөжүм;*

***макро-:*** *макродонъя, макроиҡтисад;*

***микро-:*** *микродонъя, микрокиҫәксә;*

***прото-:*** *протобашҡорттар, прототип;*

б) ***а-***: *анормаль, асинхрон;*

***архи-***: *архиреакцион, архимөһим;*

***интер-***: *интервокаль, интерлингвистик;*

***инфра-***: *инфраҡыҙыл, инфрафиолет;*

***ультра-***: *ультраҡыҫҡа, ультрафиолет;*

в) ***де-***: *демобилизацияла-, демонтажла-;*

***дез-***: *дезинфекцияла-, дезинформацияла-;*

***дис-***: *дисквалификацияла-.*

**Суффикслашыу.** Башҡорт телендә сит телдәрҙән үҙләштерелгән суффикстарҙың ҡулланылыу осраҡтары түбәндәгеләр:

1) фарсы теленән ингән суффикстар (һәм суффиксоидтар), башлыса, исем, һирәкләп сифаттар яһалышында ҡатнаша:

***-гир***: *ҡәләмгир, яугир, Йыһангир;*

***-гәр, -кәр, -ҡәр***: *сауҙагәр, фиҙаҡәр, хәйләкәр, һәүәҫкәр, эшмәкәр;*

***-дар, -дәр, -ҙар***: *диндар, малдар, хөкөмдар, телдәр, хәбәрҙар, Ғилемдар, Илдар;*

***-ман, -мән***: *бағман, ҡаһарман, көйәрмән, һөнәрмән, әҙәрмән;*

***-намә***: *йондоҙнамә, йыһаннамә, указнамә, хәбәрнамә;*

***-стан***: *Башҡортостан, Ғәрәбстан, Ҡаҙағстан;*

***-хана***: *ашхана, дарыухана, ҡунаҡхана, ҡымыҙхана;*

***-хур***: *балхур, мәйхур, сәйхур;*

2) ғәрәп теленән килеп ингән суффикстар исемдәр, сифаттар, рәүештәр һәм модаль һүҙҙәр яһалышында осрай:

***-ан, -ән***: *ғөмүмән, хосусан, шәхсән;*

***-ат, -әт, -иат, -иәт***: *исламиәт, мәғлүмәт, сәләмәт, хакимиәт, тәьминәт, һәләкәт;*

***-и, -ани, -уи, -үи***: *ғәҙәти, донъяуи, ижади, мәғәнәүи, рухани, төрки, М. Ғафури, Р. Нигмәти;*

3) рус теленән алынған суффикстар фамилиялар һәм кешеләрҙең аталарын белдереүсе һүҙҙәр яһалышында ҡулланыла:

***-ев(а), -ов(а), -ин(а), -ский(ая)***: *Булатов(а), Ҡәҙербаев(а), В. Мортазин-Иманский;*

***-евич, -ович, -ич, -евна, -овна***: *Вәлиевич, Вәлиевна, Заһитович, Заһитовна, Сафич;*

4) Көнбайыш Европа (башлыса, грек һәм латин) телдәренән рус теле аша үҙләштерелгән исемдәрҙә (а) һәм сифаттарҙа (б) осраған суффикстар:

а) ***-ал***: *театрал, провинциал;*

***-ар, -яр***: *юбиляр, коммунар;*

***-ер***: *миллиардер, миллионер;*

***-изм***: *марксизм, капитализм;*

***-ист***: *журналист, марксист;*

***-оид***: *дифтонгоид, монголоид;*

***-смен***: *рекордсмен, яхтсмен;*

б) ***-абель:*** *диссертабель, коммуникабель;*

***-аль, -иаль, -ональ, -уаль:*** *горизонталь, профессиональ, принципиаль, индивидуаль;*

***-ив:*** *прогрессив, экспрессив;*

***-ик:*** *метрик, филологик;*

***-ист/ик:*** *идеалистик, социалистик;*

***-он:*** *дискуссион, конституцион.*

**Префикслашыу + суффикслашыу.** Бер үк ваҡытта префикстарҙың да, суффикстарҙың да ҡатнашлығы һөҙөмтәһендә һүҙҙәр яһалыу, ғәҙәттә, исемдәр, сифаттар һәм ҡылымдар араһында күҙәтелә:

а) исемдәр яһалышында:

***пан- ... -сы-лыҡ:*** *паназиатсылыҡ, панболғарсылыҡ, пантөрксөлөк;*

б) сифаттар яһалышында:

***анти- ... -ик:*** *антидемократик, антимилитаристик;*

***архи ... -он:*** *архиреакцион;*

***пост- ... -ист/ик:*** *посткоммунистик, постсоциалистик;*

***про- ... -ист/ик:*** *прокоммунистик, просоциалистик;*

***ультра- ... -он:*** *ультрареволюцион, ультрареакцион;*

***транс- ... -аль:*** *трансконтиненталь;*

в) ҡылымдар яһалышында:

***де-/дез- ... -ла:*** *дегазацияла-, дезинфекцияла-, деморализацияла-;*

***ре- ... -ла:*** *реконструкцияла-, реабилитацияла-.*

**Нигеҙҙәр ҡушылыу.** Нигеҙҙәр ҡушылыу процесында бер нисә яһаусы нигеҙ бер бөтөн булып ойоша, һөҙөмтәлә ике, һирәклəп өс йәки дүрт нигеҙҙән торған берекмә ҡушма һүҙҙәр барлыҡҡа килә: *ҡара+ағас > ҡарағас, өс+мөйөш > өсмөйөш, аҡ+буҙ > аҡбуҙ, аҡ+буҙ+ат > аҡбуҙат, йыл+яҙма > йылъяҙма, фото+йыл+яҙма > фотойылъяҙма, кино+фото+йыл+яҙма > кинофотойылъяҙма.*

Башҡорт телендә нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы менән һүҙҙәр яһалыу аффикслашыуҙан ҡала иң киң таралыш алған алымдарҙың береһе булып иҫәпләнә; был ысул менән яһалған берекмә ҡушма һүҙҙәрҙән күберәк исемдәр, һирәкләп сифаттар, ҡылымдар һәм рәүештәр осрай; быларҙан тыш, айырым үрнәктәрҙе һандар, алмаштар, шулай уҡ ярҙамсы һүҙҙәрҙән теркәүестәр араһында ла табырға була:

1) берекмә ҡушма исемдәр: *аръяҡ < ары+яҡ, көнсығыш < көн+сығыш, аҡсарлаҡ < аҡ+сарлаҡ, үҙидара < үҙ+идара, ҡулйыуғыс < ҡул+йыуғыс, ярымшар < ярым+шар;*

2) берекмә ҡушма сифаттар: *ҡарағусҡыл < ҡара+ҡусҡыл, атҡаҙанған < ат+ҡаҙанған, үҙйөрөшлө < үҙ+йөрөшлө, үҙешмәкәр < үҙ+эшмәкәр;*

3) берекмә ҡушма ҡылымдар: *ашатла- < аша+атла-, буйһон- < буй+һон-, олғаш- < олоға+аш-, һаубуллаш- < һау+бул-лаш-;*

4) берекмә ҡушма рәүештәр: *бөгөн < бы(л)+көн, быйыл < бы(л)+йыл, барыбер < бары+бер;*

5) берекмә ҡушма һандар: *һикһән < һигеҙ ун < сәкиз ан, туҡһан < туғыҙ ун < тоҡуз ан;*

6) берекмә ҡушма алмаштар: *ҡасан < ҡай сағын;*

7) берекмә ҡушма теркәүестәр: *йәиһә < йә+иһә, йәки < йә+ки, юғиһә < юҡ+иһә.*

Телдең тарихи үҫеше процесында нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы менән берекмә ҡушма һүҙҙәр яһалышында даими ҡулланылып йөрөүсе ҙур бер һүҙҙәр ҡатламы хасил булған; ҡушма һүҙҙәр составында ҡулланылыу урыны буйынса улар терәк компоненттарға ҡарата препозитив йәки постпозитив хәлдә торорға мөмкиндәр, ә килеп сығыштары буйынса төп башҡорт һүҙҙәренә һәм сит телдәрҙән (күбеһенсә фарсы, ғәрәп һәм рус теле аша грек һәм латин телдәренән) үҙләштерелгән һүҙҙәргә ҡарайҙар.

Төп башҡорт һүҙҙәре иҫәпләнгән ҡушылыусы компоненттарҙың функциялары бик киң; улар төрлө өлкәләргә ҡараған терминдар, ер-һыу атамалары, кеше исемдәре, мал-тыуар һәм ҡош-ҡорт ҡушаматтары яһауҙа ҡатнашалар. Уларҙың терәк компонентҡа ҡарата:

1) препозитив хәлдә ҡулланылғандарына миҫалдар: *ай, көн, таң, иш, йән, тимер, ырыҫ, юл; аҡ, ҡара, кинйә, ҡотло, миңле; бик, тәү, үҙ, ярым* һ. б., мәҫәлән, *«ай»* һүҙе ҡатнашлығында яһалған исемдәр: *айбағар, айбалта, айбалыҡ, айғолаҡ, аймиләүшә, айташ, айһын; «үҙ»* һүҙе ҡатнашлығында яһалғандары: *үҙағас, үҙағыш, үҙаң, үҙбилдәләнеш, үҙбушатҡыс, үҙидара, үҙҡиммәт, үҙмаҡсат, үҙөҫтәмә;*

2) постпозитив хәлдә торғандарының бер төркөмө – дөйөм тәғәйенләнешле һүҙҙәр һәм ер-һыу атамалары (а), ә икенсе төркөмө кеше исемдәре һәм аҙаҡ шуларға бәйле ер-һыу атамалары (б) яһалыуҙа ҡулланыла:

а) *ай, ауыл, баш, иҙел, күл, тамаҡ, тау, мөйөш, яҡ* һ. б.; мәҫәлән *«ай»* һүҙе менән яһалған халыҡ календарында һаҡланған берекмә ҡушма исемдәр: *аҡъюлай, алағарай, буранай, ҡарасай, ҡырпағай, майай, урағай, һабанай, һарығай, һатай, һыуығай, шаҡай; «яҡ»* һүҙе ҡатнашлығында яһалғандары: *аръяҡ, бирьяҡ, көньяҡ, төньяҡ;*

б) *бай, булат, бикә, туған, һылыу; шат; бирҙе, булды, килде* һ. б.; мәҫәлән, *«бирҙе»* һүҙе ярҙамында яһалған кеше исемдәре

һәм шуларға бәйле ер-һыу атамалары: *Аллабирҙе, Хоҙайбирҙе, Бикбирҙе, Дәүләтбирҙе, Ишбирҙе, Йәнбирҙе, Тәңребирҙе.*

Фарсы һәм ғәрәп телдәренән ингән һүҙҙәр, башлыса, кеше исемдәре һәм шуларға бәйле ер-һыу атамалары яһалышында осрайҙар:

1) фарсы ҡатламынан:

а) препозитив хәлдә ҡулланылғандары: *биби, гөл, йыһан, маһи, мир, мырҙа* һ. б.; мәҫәлән, *Гөлбикә, Гөлғәйшә, Гөлйыһан, Гөлнур, Гөлсара, Гөльямал; Йыһангир, Йыһандар, Йыһаннур, Йыһанша;*

б) постпозитив хәлдә торғандары: *баныу, гәрәй, йыһан, йәр, камал, мырҙа, сара, хужа, шаһ* һ. б.; мәҫәлән: *Аҡмырҙа, Бикмырҙа, Ғәҙелмырҙа, Ишмырҙа, Йәнмырҙа, Кинйәмырҙа, Ҡотломырҙа, Миңлемырҙа, Бибисара.*

2) ғәрәп ҡатламынан:

а) препозитив ҡулланылған һүҙҙәр: *аҫыл, аҙна, алла, аман, ғәли, дәүләт, нур, солтан, сәфәр, хажи, хаҡ, хөбби, хәйер, хәсби, шәмси, фәрхи, фәхри* һ. б.; мәҫәлән: *Ғәлийән, Ғәлинур, Ғәлиулла, Ғәлиәхмәт;*

б) постпозитив ҡулланылған һүҙҙәр: *ғәли, (ет)дин, нур, ниса, өмбәт, солтан, улла, хаҡ, ямал* һ. б.; мәҫәлән: *Байөмбәт, Илөмбәт, Ишөмбәт, Тер(е)өмбәт, Туйөмбәт, Ҡолөмбәт, Теләүөмбәт.*

Грек һәм латин телдәренән рус теле аша ингән һүҙҙәр (йәки тамыр морфемалар), ғәҙәттә, калькаларҙа һәм ярымкалькаларҙа осрайҙар; бындай һүҙҙәр төп компонентҡа ҡарата препозитив хәлдә лә, постпозитив хәлдә лә ҡулланылып йөрөйҙәр һәм төрлө фән, техника һәм ижтимағи өлкәгә ҡараған терминдар яһауҙа ҡатнашалар.

Бындай һүҙҙәрҙең препозитив хәлдә ҡулланылып йөрөгәндәренән түбәндәгеләре киң таралыш алған: *авиа-, авто-, агит-, агро-, астро-, аэро-, био-, ватт-, вело-, видео-, вольт-, гелио-, гео-, гидро-, грамм-, зоо-, кило-, кино-, космо-, милли-, моно-, мото-, нарко-, нео-, поли-, радио-, стерео-, теле-, фото-, электро-, этно-;* мәҫәлән:

***авто-**: а) автотейәгес, автототаштырғыс, автоуятҡыс, автоһуғарғыс, автоэсергес, автояуапбиргес;*

б) *автомәктәп, автосәйәхәт, автотуҡтатҡыс, автоуҙыш, автоһәүәҫкәр;*

***радио-**: радиоалғыс, радиобәйләнеш, радиойышлыҡ, радиокүҙәтеү, радиокупер, радиомаяҡ, радиометеоүҙәк, радиосәнәғәт, радиотапшырғыс, радиотапшырыу, радиотауарҙар, радиотулҡын, радиоүҙәк, радиохәбәр, радиоһәүәҫкәр, радиоэлемтә;*

***фото-:*** *фотомылтыҡ, фотоҙурайтҡыс, фотокүргәҙмә, фотоҡағыҙ, фототауарҙар, фототүңәрәк, фотойылъяҙма, фотокүсермә, фоторәсем.*

Үҙләштерелгән берекмә ҡушма һүҙҙәрҙә постпозитив хәлдә II компонент булараҡ ҡулланылып йөрөүсе тамыр морфемалар: *-актив, -бол, -грамма, -граф, -дром, -комиссия, -лог, -метр, -навт, -скоп, -тека, -фил, -фоб;* мәҫәлән:

***-актив:*** *радиоактивлыҡ, сейсмоактивлыҡ;*

***-фил:*** *германофил, славянофиллыҡ;*

***-фоб:*** *германофоб, германофоблыҡ.*

**Нигеҙҙәр ҡушылыу + аффикслашыу.** Нигеҙҙәр ҡушылыу ысулының бер тармағы булып яһаусы нигеҙҙәрҙең үҙ-ара берләшеүе һәм шул уҡ ваҡытта һүҙ яһаусы аффикстар ҡабул итеүе һөҙөмтәһендә яңы лексик берәмектәр барлыҡҡа килеү тора. Башҡорт телендә былдай ҡатнаш ысул менән берекмә ҡушма һүҙҙәр яһалыуҙы күберәк исемдәр (а), сифаттар (б) һәм ҡылымдар (в) араһында күҙәтергә була:

а) *алып һат-ар > алыпһатар, һыу ал-ғыс > һыуалғыс, һыу ҡой-ар > Һыуғо*[йа]*р (йондоҙлоҡ);*

б) *үҙ ағыш-лы > үҙағышлы, эскер-ле > эскерле, яҡшы ат-лы > яҡшатлы;*

в) *ҡара эс(ле)-лән > ҡареслән-, үҙ һүҙ(ле)-лән > үҙһүҙлән-, һау бул-лаш- > һаубуллаш-.*

**Нигеҙҙәр ишләшеү.** Нигеҙҙәр ишләшеү процесында яһаусы нигеҙҙәр бер-береһе менән тулыһынса ҡушылып етмәйҙәр, ә йәнәшә торалар, ишләшәләр; һөҙөмтәлә бер ҡатмарлы төшөнсәнең атамаһы булып йөрөүсе парлы һүҙҙәр барлыҡҡа килә. Орфографияла парлы һүҙҙәр, ҡабатлаулы һүҙҙәр кеүек үк, берекмә һәм теркәлмә ҡушма һүҙҙәрҙән һыҙыҡса аша яҙылыуҙары менән айырылалар.

Ишләшеүсе нигеҙҙәр морфематик төҙөлөштәре буйынса тамыр һүҙҙәр (*ата-әсә, көн-төн, юҡ-бар*), яһалма һүҙҙәр (*аталы-әсәле, барлы-юҡлы*) һәм ҡушма һүҙҙәр (*көньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш*) рәүешендә килергә мөмкин.

Парлы һүҙҙәр үҙҙәренең килеп сығыштары буйынса, төп башҡорт һүҙҙәренән тыш (улар, әлбиттә, күпселекте тәшкил итәләр), ғәҙәттә, ғәрәп, фарсы, рус, грек һәм латин телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән торалар; уларҙың бер-береһе менән ишләшеп килеүе төрлө варианттарҙа булыуы мөмкин:

1) башҡорт һүҙе – башҡорт һүҙе: *ир-егет, кәкре-бөкрө, тегебыл, уйна-көл-;*

2) башҡорт һүҙе – үҙләштерелгән һүҙ (йәки киреһенсә): а) башҡорт – ғәрәп: *кеше-маҙар, хис-тойғо, уй-фекер;* б) баш-

ҡорт – фарсы: *дуҫ-иш, моң-зар;* в) рус – башҡорт: *завод-ара, ведомство-ара;* г) грек – башҡорт: *альфа-киҫәксәләр;*

3) үҙләштерелгән һүҙ – үҙләштерелгән һүҙ: а) ғәрәп – ғәрәп: *ғөрөф-ғәҙәт, шик-шөбһә;* б) фарсы – фарсы: *дуҫ-дошман, йән-фарман;* в) рус – рус: *кривошиплы-шатунлы (механизм), колхоз-совхоз;* г) латин – латин: *вокаль-инструменталь (ансамбль), информацион-публицистик (тапшырыу);* ғ) грек – грек: *лексик-семантик (үҙенсәлек), лексик-синтаксик (һүҙьяһалыш);* грек – ғәрәп: *бета-нурҙар* һ. б.

Парлы һүҙҙәр яһалышында терәк компонентҡа ҡушылып йөрөүсе ошондай һүҙҙәрҙе индерергә була:

1) терәк компоненттан аҙаҡ тороусы төп башҡорт һүҙҙәренән өлгөләр: *ара, ҡара, ни, нит- (ни ит-);* мәҫәлән: *дәүләт-ара, кеше-ҡара, арбаһы-ние, күрә-нитә (ҡалһа);*

2) терәк компоненттан аҙаҡ ҡулланылыусы ҡайһы бер ғәрәп һүҙҙәре: *ғәләмәт, маҙар, фәлән, фәсмәтән;* мәҫәлән: *кеше-маҙар, ҡорал-фәлән, фәлән-фәсмәтән;*

3) терәк компонент алдынан килеүсе айырым грек һүҙҙәре: *альфа, бета, гамма;* мәҫәлән: *альфа-тарҡалыш, бета-радиоактивлыҡ, гамма-нурҙар.*

Парлы һүҙҙәрҙең компоненттары функцияларын башҡарып йөрөүсе ишләшеүсе нигеҙҙәр семантик яҡтан, башлыса, үҙ-ара синонимик йәки антонимик мөнәсәбәттәрҙә торалар, йә булмаһа бер лексик-семантик төркөмгә ҡараған булалар; йыш ҡына икенсе нигеҙ тәүгеһенең иҫкергән варианты булып та сығыш яһай; ҡайһы бер ишләшеүсе нигеҙҙәр үҙ аллы ҡулланылыу һәләтлеген юғалтҡан булалар.

Башҡорт телендә нигеҙҙәр ишләшеү ысулы менән, ҡағиҙә булараҡ, үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән парлы исемдәр, сифаттар, алмаштар, ҡылымдар, рәүештәр, шулай уҡ ҡайһы бер парлы ымлыҡтар һәм оҡшатыу һүҙҙәре яһалалар; миҫалдар:

1) парлы исемдәр: а) синонимик иштәрҙән торғандары: *буй-һын, дан-шөһрәт, көс-хәл;* б) антонимик иштәрҙән яһалғандары: *кейем-һалым, ут-һыу, юҡ-бар;* в) бер лексик-семантик төркөмгә ҡараған иштәрҙән торғандары: *аш-һыу, ир-егет, эш-хәрәкәт;* г) икенсе өлөшө *ни, ҡара, фәлән, маҙар, ғәләмәт* кеүек һүҙҙәрҙән торғандары: *кейеме-ние, кеше-ҡара, бүре-фәлән, эт-маҙар, ҡый-ғәләмәт;*

2) парлы сифаттар: а) синонимик иштәрҙән яһалғандары: *осһоҙ-ҡырыйһыҙ (тигеҙлек), сит-ят (кешеләр), тәмле-татлы (аҙыҡ);* б) антонимик иштәрҙән торғандары: *аҡлы-ҡаралы (ситса), аслы-туҡлы (тормош), уйынлы-ысынлы (хәбәр);* в) бер лексик-семантик төркөмгә ҡараған һүҙҙәрҙән торғандары: *ижтимағи-сәйәси (журнал), лексик-морфологик (категория),*

*еңел-елпе (эш);* г) икенсе компоненты «ара» һүҙенән килгәндәре: *континент-ара (маршрут), милләт-ара (мөнәсәбәттәр), ҡала-ара (бәйләнеш);*

3) парлы алмаштар, ғәҙәттә, антонимик иштәрҙән торалар: *ул-был, теге-был;*

4) парлы ҡылымдар: а) синонимик иштәрҙән яһалғандары: *бөгөл-эйел-, бәрел-һуғыл-, ялын-ялбар-;* б) антонимик иштәрҙән килгәндәре: *ин-сыҡ-, кил-кит-, мен-төш-;* в) икенсе компоненты *нит- (< ни ит-)* ҡушма ҡылымынан торғандары: *ауырыһа-нитһә, уяна-нитә ҡалһа, әйтмәй-нитмәй киткән;* г) икенсе компоненты *фәлән* һүҙенән килгән осраҡтар: *ҡайтһа-фәлән, ҡолап-фәлән ҡуймаһын;*

5) парлы рәүештәр: а) синонимик мәғәнәле рәүеш ҡылымдарҙың ишләшеүе һөҙөмтәһендә яһалғандары: *бара-тора, бөгөлә-һығыла, арып-талып (арымай-талмай), илай-һыҡтай;* б) антонимик мәғәнәле ҡайһы бер исемдәрҙең (*көнө-төнө, йәйен-ҡышын*), сифаттарҙың (*уңға-һулға, яҙлы-көҙлө*), алмаштарҙың (*унда-бында, унан-бынан*), рәүештәрҙең (*ары-бире, улай-былай*), модаль һүҙҙәрҙең һәм уларҙың грамматик формаларының ишләшеүенән (*юҡҡа-барға, барына-юғына*) барлыҡҡа килгәндәре;

6) парлы ымлыҡтар: *ай-бай, ай-һай, ах-ух;*

7) парлы оҡшатыу һүҙҙәре: *дөбөр-шатыр, сыр-сыу, шау-гөр.*

**Нигеҙҙәр ишләшеү + аффикслашыу.** Бер төркөм парлы һүҙҙәрҙең яһалышында нигеҙҙәр ишләшеү менән аффикслашыу ысулдарының ҡатнаш ҡулланылыуы осрай:

1) парлы исемдәргә *-лы* һәм *-һыҙ* аффикстары ҡушылып парлы сифаттар яһала: *ағай-энеле, ағай-энеһеҙ, ел-дауыллы, ел-дауылһыҙ;*

2) парлы ымлыҡтарға *-ла* аффиксы ҡушылып парлы ҡылымдар формалаша: *ай-байла-, ай-һайла-;*

3) парлы оҡшатыу һүҙҙәренә *-лаш* аффиксы ҡушылып парлы ҡылымдар барлыҡҡа килә: *сыр-сыулаш-.*

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу (редупликация).** Бер үк яһаусы нигеҙҙәрҙең үҙгәрешһеҙ көйө йә булмаһа бер ни тиклем морфологик йәки грамматик үҙгәрештәр менән ҡабатланыуы һөҙөмтәһендә яңы лексик мәғәнәле һүҙҙәр яһалыуҙы нигеҙҙәр ҡабатланыу йәки редупликация (латинса: reduplicatio – ҡабатланыу) ысулы тип йөрөтәләр.

Нигеҙҙәр ҡабатланыу ысулы менән яһалған һүҙҙәрҙе төрки тел ғилемендә парлы һүҙҙәр рәтендә ҡарау һәм ҡабатлаулы һүҙҙәр тип йөрөтөү күҙәтелә; үрҙә күрһәтелгәнсә, яһалыу үҙенсәлектәренән сығып, ҡушма һүҙҙәрҙең бындай төрөн, әлбиттә, ҡабатлаулы һүҙҙәр тип өйрәнеү маҡсатҡа ярашлы.

Башҡорт телендә нигеҙҙәр ҡабатланыу ысулының ошондай төрҙәрен күрһәтергә була:

1) яһаусы нигеҙҙең һүҙмә-һүҙ ҡабатланыуы (*ваҡыт-ваҡыт, саҡ-саҡ*);

2) яһаусы нигеҙҙең морфонологик варианттары ҡабатланыу (*ҡыйыш-мыйыш, шатыр-шотор*);

3) яһаусы нигеҙҙәрҙең грамматик формалары ҡабатланыу: а) һүҙҙең грамматик формаһы I компонент функцияһында сығыш яһай (*буйҙан-буй, берҙән-бер*); б) һүҙҙең грамматик формаһы II компонент рәүешендә килә (*ғүмер-ғүмергә, борон-борондан*); в) ике компоненты ла һүҙҙең грамматик формаларынан тора (*йылдың-йылы*); г) һүҙҙең барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары осраша (*ирекле-ирекһеҙҙән, булыр-булмаҫ*); ғ) һүҙҙең берлек һәм күплек формалары (мәҫәлән, ғәрәп теленән ингән һүҙҙәрҙә: *ғалим-ғөләмә, фәҡир-фоҡара*); д) һүҙҙең төрлө енесте белдергән формалары (бында ла ғәрәп теленән ингән һүҙҙәр ҡатнаша: *әҙип-әҙибә, шағир-шағирә*).

Ҡабатлаулы һүҙҙәр башҡорт телендә күбеһенсә исемдәр, сифаттар, алмаштар, рәүештәр, ымлыҡтар, саҡырыу һүҙҙәре һәм оҡшатыу һүҙҙәре араһында урын алғандар; уларҙың һәр береһенең яһалыу үҙенсәлектәре түбәндәгесә:

1) ҡабатлаулы исемдәр: а) морфонологик варианттарҙың ҡабатланыуы: *ағас-мағас, тимер-томор, малай-шалай*; б) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә грамматик формаларҙың (берлек һәм күплек формалары, енес билдәһен белдереүсе формалар) ҡабатланыуы: *ғәрип-ғөрәбә;*

2) ҡабатлаулы сифаттар: а) исемдәрҙе һүҙмә-һүҙ ҡабатлау аша: *ҡат-ҡат (Ҡат-ҡат ҡатлама, аҡылың булһа ташлама* (Йомаҡ), *буй-буй (ыҙан), тулҡын-тулҡын (һыҙыҡтар)*; б) сифаттарҙың морфонологик варианттары ҡабатланыу юлы менән: *иҫке-моҫҡо (кейем), тәмле-томло (ашамлыҡ)*;

3) ҡабатлаулы алмаштар, ғәҙәттә, алмаштарҙың айырым грамматик формалары ҡабатланыуы аша яһалалар: *ҡайҙан-ҡайҙа, ҡасандан-ҡасанға*;

4) ҡабатлаулы рәүештәр: а) яһаусы нигеҙҙәрҙең (улар күбеһенсә исемдәрҙән, бүлем һандарынан, рәүеш ҡылымдарҙан, оҡшатыу һүҙҙәренән киләләр) һүҙмә-һүҙ ҡабатланыуҙары: *ваҡыт-ваҡыт, миҙгел-миҙгел, саҡ-саҡ; бишәр-бишәр, унар-унар; йырлай-йырлай, йүгерә-йүгерә; быш-быш, ҡылтыр-ҡылтыр;* б) рәүештәрҙең һәм оҡшатыу һүҙҙәренең морфонологик варианттары ҡабатланыу аша: *аҙ-маҙ, һирәк-мирәк; даһыр-доһор, шатыр-шотор*; в) исемдәргә, сифаттарға, һандарға, алмаштарға, ҡылымдарға һәм рәүештәргә ҡараған һүҙҙәрҙең төрлө грамматик формаларҙа ҡабатланып килеүе аша: *ҡулға-ҡул, һүҙмә-һүҙ,*

*буйҙан-буйға; асыҡтан-асыҡ, ысын-ысындан; бермә-бер, икәүҙән-икәү; үҙ-үҙенән, үҙенән-үҙе; теләр-теләмәҫ, яныр-янмаҫ; аҙ-аҙлап, борон-борондан*;

5) ҡабатлаулы ымлыҡтар, ғәҙәттә, бер үк нигеҙҙе һүҙмә-һүҙ ҡабатлау һөҙөмтәһендә яһалалар; улар төҙөлөштәре буйынса ике компоненттан ғына түгел, эмоциональ көсөргәнешлекте белдереү маҡсатынан сығып, өс, хатта дүрт компоненттан торорға мөмкин: а) эмоциональ ымлыҡтар: *ай-ай, ай-ай-ай, ай-ай-ай-ай; һай-һай, һай-һай-һай, һай-һай-һай-һай;* б) императив ымлыҡтар: *әйҙә-әйҙә, әйҙә-әйҙә-әйҙә; әйҙүк-әйҙүк; ҡана-ҡана, ҡана-ҡана-ҡана*;

6) саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәре морфематик төҙөлөштәре буйынса, ҡағиҙә булараҡ, ҡабатлаулы булалар; улар ҙа ике һәм унан күберәк компоненттарҙан торалар: *бәр-бәр, бәр-бәр-бәр; бес-бес, бес-бес-бес; һәү-һәү, һәү-һәү-һәү; сип-сип, сип-сип-сип, сип-сип-сип-сип;*

7) ҡабатлаулы оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙҙәрҙең һүҙмә-һүҙ ҡабатланыуҙары (*ғыж-ғыж, сылтыр-сылтыр; ем-ем, ялп-ялп*) һәм морфонологик варианттары ҡабатланыу аша (*лап-лоп, шатыр-шотор; ялт-йолт*) яһалалар.

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу + аффикслашыу.** Башҡорт телендә, һирәкләп булһа ла, ҡабатлаулы һүҙҙәргә аффикстар ҡушылып яңы һүҙҙәр яһалыу осраҡтары күҙәтелә; бындай төрҙәге ҡабатлаулы һүҙҙәрҙе исемдәр (а), сифаттар (б), ҡылымдар (в) һәм рәүештәр (г) араһында табырға була: а) *баш-баштаҡ > баш-баштаҡлыҡ, мин-мин > мин-минлек;* б) *соҡор-саҡыр > соҡор-саҡырлы, ярыҡ-йороҡ > ярыҡ-йороҡло;* в) *мин-мин > мин-минлән-, әрәм-шәрәм > әрәм-шәрәм-лә-;* г) *берәм-һәрәм > берәм-һәрәмләп, һирәк-мирәк > һирәк-мирәкләп.*

## *Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (аббревиация)*

Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡыҫҡартыу йәки **аббревиация** (инглизсә: *abbreviation* < латинса: *brevis* – «ҡыҫҡа») – һүҙьяһалыштың үҙенсәлекле бер төрө; был үҙенсәлектең асылы шунда: ҡыҫҡартыу һөҙөмтәһендә беҙ формаль яҡтан, йәғни фонематик һәм морфематик төҙөлөштәре буйынса, яңы лингвистик берәмек алһаҡ та, лексик-семантик яҡтан был берәмек ысын мәғәнәһендәге яңы һүҙ була алмай, сөнки ул бер ниндәй ҙә яңы мәғәнә ҡабул итмәй, ә тәүге һүҙ йәки һүҙбәйләнештең лексик мәғәнәһен тулыһынса ҡабатлай ғына. Һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡыҫҡартыу һөйләгәндә һәм яҙғанда ваҡытты һәм урынды экономия-

лау, шулай уҡ телмәрҙе ыҡсымландырыу һәм уның ағышын еңелләштереү маҡсатында ҡулланыла.

Шулай итеп, ҡыҫҡартмалар йәки аббревиатуралар, асылда, тулы әйтелешле һәм тулы яҙылышлы һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең төрлө алымдар менән ҡыҫҡартылған варианттары ғына булып тора. Миҫалдарҙы сағыштырығыҙ: *XXI б. = XXI быуат, м-н = менән, һ. = һум, Магнит (ҡала) = Магнитогорск, БДУ = Башҡорт дәүләт университеты.*

Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (аббревиация) күренешен морфематик (элеккесә морфологик) юлдың, дөрөҫөрәге, уның бер ысулы булған нигеҙҙәр ҡушылыуҙың бер төрө итеп кенә түгел, ә һүҙьяһалыштың үҙ аллы бер юлы итеп ҡарарға тулы нигеҙ бар, сөнки был осраҡта беҙ морфемалар менән түгел, ә һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм уларҙың иреклe рәүештә киҫеп алынған билдәле бер өлөштәре (фонемалар, хәрефтәр һәм айырым киҫәктәр) менән эш итәбеҙ.

Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (аббревиация) юлы, асылда, ике ысулды үҙ эсенә ала: а) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (был ысул менән ҡыҫҡартма һүҙҙәр йәки ҡыҫҡартмалар яһала) һәм б) һүҙбәйләнештәр составындағы һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартылған өлөштәрен ҡушыу (был алым менән ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр барлыҡҡа килә).

**Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу.** Яһалыу үҙенсәлектәренә һәм ҡулланылыу өлкәләренә ҡарап, башҡорт телендәге ҡыҫҡартмаларҙы (аббревиатураларҙы) ике төркөмгә бүлеп ҡарарға була: 1) график ҡыҫҡартмалар һәм 2) лексик ҡыҫҡартмалар.

График ҡыҫҡартмалар тик яҙыуҙа ғына ҡулланылалар, ә һөйләү телмәрендә ул һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартылмаған тулы әйтелешле варианттары һаҡлана; график ҡыҫҡартмаларҙың барлыҡҡа килеүендә түбәндәге саралар билдәле:

1) һүҙҙәрҙе тәүге хәрефенә тиклем ҡыҫҡартыу: *б. (быуат), ҡ. (ҡала), й. (йыл)*;

2) һүҙбәйләнештәрҙең, теркәлмә ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙең тәүге хәрефтәренән торған ҡыҫҡартмалар: *б. э. т. (беҙҙең эраға тиклем), һ. б. (һәм башҡалар), т.-к. с. (төньяҡ-көнсығыш)*;

3) һүҙҙәрҙе киҫеп, тәүге өлөштәрен алыу юлы менән ҡыҫҡартыу: *ипт. (иптәш), проф. (профессор), мәҫ. (мәҫәлән), сәғ. (сәғәт)*;

4) һүҙҙең тәүге һәм аҙаҡҡы хәрефтәрен генә йәки тәүге һәм аҙаҡҡы өлөштәрен алып ҡыҫҡартыу: *м-н (менән), р-н (район), ф-ка (фабрика), физ-ра (физкультура)*;

5) һүҙҙәге һуҙынҡы өндәрҙе күрһәткән хәрефтәрҙе алып ташлап ҡыҫҡартыу: *дш (дүшәмбе), Йрмхмтв (Йәрмөхәмәтов), Рхмтлн (Рәхмәтуллин).*

Лексик ҡыҫҡартмалар формаль яҡтан телдә үҙ аллы лексик берәмектәр булараҡ сығыш яһайҙар; төҙөлөштәре һәм ҡулланылыш үҙенсәлектәре буйынса уларҙы ике төргә айырып була: 1) стилистик ҡыҫҡартмалар һәм 2) ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр.

*Стилистик ҡыҫҡартмалар* тулы әйтелешле тәүге һүҙҙәр менән сағыштырғанда ябай һүҙ формаһын ҡабул итәләр; мәғәнә яғынан уларға стилистик биҙәктәр (башлыса, ябайлыҡ, халыҡсанлыҡ, хатта кәмһетеү, түбәнһетеү һ. б.) хас; улар, ғәҙәттә, йәнле һөйләү телмәрендә ҡулланылалар. Ошо билдәләренән сығып, бындай һүҙҙәрҙе битараф лексикаға ҡараған ғәҙәттәге тулы әйтелешле һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартылған стилистик варианттары тип ҡарарға була.

Башҡорт телендә стилистик ҡыҫҡартмаларҙың ошондай лексик-семантик төркөмсәләре күҙәтелә:

1) кеше исемдәре: *Ғатау < Ғатаулла, Йомай < Йомабикә, Сәги < Сәгиҙулла*;

2) ер-һыу атамалары: *Стәрле (ҡала) < Стәрлетамаҡ, Магнит < Магнитогорск*;

3) ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар, ваҡытлы матбуғат, төрлө учреждение исемдәре: *Октябрь < Октябрь революцияһы, Себер < Себер һөргөнө, «Уҡытыусы» < «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы, «Китап» < Башҡортостан «Китап» нәшриәте*;

4) төрлө техника, эш ҡоралдары, көнкүреш әйберҙәре атамалары: *машина < автомашина, матай < мотоцикл, радио < радиоалғыс.*

*Һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартылған өлөштәрен ҡушыу.* Күрһәтелгән сәбәптәр арҡаһында телдәге ҡайһы бер нығынған һүҙбәйләнештәр составындағы һүҙҙәр төрлөсә ҡыҫҡартылалар, ә ҡыҫҡартылған элементтар (фонемалар, хәрефтәр, һүҙҙең төрлө өлөштәре) бер һүҙ булып ҡушылалар; һөҙөмтәлә формаль яҡтан берекмә ҡушма һүҙҙәргә оҡшаған лексик берәмектәр хасил була, шунлыҡтан уларҙы **ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр** тип йөрөтәләр.

Башҡорт телендә ҡыҫҡартылған һүҙҙәрҙе ҡушыу ысулы менән ҡағиҙә булараҡ исемдәргә ҡараған һүҙҙәр яһала; бындай һүҙьяһалыш процесы түбәндәгесә башҡарыла:

1) һүҙҙәрҙең тәүге фонемаларын ҡушыу юлы менән: *БМО < Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы; АҠШ < Америка Ҡушма Штаттары;*

2) һүҙҙәрҙең тәүге хәрефтәрен ҡушыу юлы менән: *БР* [*бә-эр*] < *Башҡортостан Республикаһы; БДУ* [*бә-дә-у*] < *Башҡорт дәүләт университеты;*

3) һүҙҙәрҙең тәүге өлөштәре берләшә: *филфак < филология факультеты, универмаг < универсаль магазин;*

4) тәүге һүҙҙең беренсе өлөшө менән икенсе һүҙҙең ҡушылыуы аша: *мотобысҡы* < *моторлы бысҡы, телеүҙәк* < *телевизион үҙәк;*

5) ҡушма һүҙбәйләнештәр составындағы төп мәғәнәләрҙе үҙендә тотҡан һүҙҙәрҙең тәүге өлөштәрен айырып алып бергә ҡушыу юлы менән: *«Башгаз»* < *Газ табыу һәм эшкәртеү сәнәғәтенең Башҡортостан Республикаһы производство берекмәһе, «Башагро»* < *Башҡортостан Республикаһының агросәнәғәт комплексы.*

Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу (аббревиация) юлы менән һүҙҙәр яһалыу һәм башҡорт теленең лексикаһын тулыландырыу бигерәк тә һуңғы осорҙа киң таралыш ала бара, был процеста, әлбиттә, рус теленең дә йоғонтоһо бар, сөнки башҡорт телендә ҡулланылған ҡыҫҡартмалар һәм ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәр араһында, башҡорт теле ерлегендә яһалғандарынан тыш, рус теленән тәржемә итеп алынған байтаҡ калькаларҙы (мәҫәлән: *автомәктәп, драмтүңәрәк, телетапшырыу*) һәм шул көйө килеп ингән аббревиатураларҙы ла (мәҫәлән: *вуз, колхоз, военкомат*) табырға була.

### *Лексик-грамматик һүҙьяһалыш*

Телдең тарихи үҫеше процесында айырым һүҙҙәр үҙҙәренең тәүге лексик мәғәнәләрен, грамматик формаларын һәм билдәләрен үҙгәртәләр; һөҙөмтәлә үҙенә хас лексик-семантик һәм грамматик (морфолого-синтаксик) билдәләргә эйә булған яңы лексик берәмек барлыҡҡа килә. Ошоға ярашлы уның морфологик категориялары һәм синтаксик функциялары үҙгәрә; был процестар яһаусы нигеҙҙең тәбиғәтен тулыһынса үҙгәртә һәм икенсе бер лексик-грамматик разрядҡа (һүҙ төркөмөнә) ҡараған яңы лексема формалашыуға килтерә.

Һүҙьяһалыштың был төрө буйынса мәғлүмәттәрҙе тел ғилеменең германистика, русистика һәм тюркология өлкәһенә ҡараған эштәрҙә табырға була; был проблемаға арналған бер нисә махсус хеҙмәтте лә[1] күрһәтергә мөмкин. Тикшеренеүҙәрҙә был юлды семантик-морфологик, морфологик-синтаксик, лексик-синтаксик, лексик-грамматик, конверсия, транспозиция кеүек терминдар менән йөрөтөү осрай; һүҙьяһалыштың был юлын лексик-грамматик тип атау уңышлыраҡ буласаҡ, сөнки был осраҡта телдәге быға тиклем ҡулланылған һүҙҙәрҙең яңы лексик мәғәнә, яңы грамматик формалар һәм категориялар ҡабул итеүҙәре

---

[1] *Ганиев Ф. М.* Конверсия в татарском языке. Казань, 1985.

нәтижәһендә бер һүҙ төркөмөнән икенсеһенә, йәғни бер лексик-грамматик разрядтан икенсеһенә, күсеүҙәре күҙәтелә.

Лексик-грамматик һүҙьяһалыш башҡорт тел ғилемендә һуңғы йылдарға тиклем тейешле кимәлдә өйрәнелмәне; быға тиклем нәшер ителгән эштәрҙең күбеһендә телселәр уның тик исемләшеү, сифатлашыу, рәүешләшеү кеүек төрҙәрен генә күрһәтеү менән сикләнделәр, башҡа һүҙ төркөмдәренә күсеү осраҡтары иғтибарға алынманы.

Үткәрелгән күҙәтеүҙәргә һәм тикшеренеүҙәргә таянып, шуны билдәләргә була: а) лексик-грамматик һүҙьяһалыш хәҙерге башҡорт телендә продуктив юлдарҙың береһе булып тора; б) был юл менән бөтә үҙ аллы һүҙ төркөмдәре генә түгел, шулай уҡ экспрессив-эмоциональ һүҙҙәр ҙә (оҡшатыу һүҙҙәренән башҡалары) һәм барлыҡ ярҙамсы һүҙҙәр ҙә яһала ала; в) был һүҙьяһалыш юлының нәтижәһе булараҡ барлыҡҡа килгән күсмә һүҙҙәр башҡорт лексикаһын яңы һүҙҙәр менән тулыландырыуҙа әһәмиәтле урындарҙың береһен алып тора.

**Исемләшеү (субстантивация).** Ғәҙәттә, түбәндәге һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәр һәм һүҙ формалары исемләшеп йөрөйҙәр: 1) сифаттар: *бай* (*кеше*) > *бай(ҙар): Бурысһыҙ ярлы бурыслы байҙан байыраҡ* (Мәҡәл); *батыр* (*һуғышсы*) > *батыр(ҙар): Батырҙарға дан!; һары* (*сәскә*) > *һары* (*ауырыу төрө*); 2) ҡылым формаларынан а) исем ҡылымдар: (*иҙәнде*) *буяу* > (*һары*) *буяу; белдереү: килеүегеҙ тураһында алдан белдереү кәрәк > белдереү: стенаға белдереү эленгән; ҡотлау: юбилярҙы ҡотлау өсөн килгәндәр > ҡотлау: юбилярҙы ҡотлауҙар башланды;* б) сифат ҡылымдар: *ҡапҡан: ауыҙға ҡапҡан ризыҡ > ҡапҡан: кейек ҡапҡанға эләккән; уҡыусы: техникумда уҡыусы йәштәр > уҡыусы: мәктәп уҡыусылары, яҙыусы: мәҡәлә яҙыусы кеше > яҙыусы: билдәле яҙыусының әҫәре; аласаҡ: аласаҡ әйбер > аласағым бар, бирәсәк: бирәсәк бурыс > бирәсәк: бирәсәгем юҡ;* в) инфинитив: *ашарға ултырҙылар > ашарға: ашарға бөттө, яғырға: мейескә утын яғырға кәрәк > яғырға: яғырға юҡ;* 3) ҡайһы бер ымлыҡтар: *аһ: кешеләр аһ итеп ҡалды > аһ: Ҡурай моңо ир азаматының аһы булып сыҡты* (Ә. Вахитов); *аһ-зар;* 4) оҡшатыу һүҙҙәре: *саң: Саң иткән тимер тауышы > Саң тауышын ишетеп йүгерештеләр; сың: Тәҙрә быялаһы сың итеп ҡалды > сың: Бесәнлектә салғы, сүкеш сыңы ишетелә.*

**Сифатлашыу (адъективация).** Сифаттарға күберәк түбәндәге һүҙ төркөмдәре күсә ала: 1) ҡылым формаларынан а) сифат ҡылымдар: *атҡаҙанған (уҡытыусы), кипкән (бесән);* б) исем ҡылымдар: *иреү (ҡар), ҡыҙыу (ваҡыт);* в) йүнәлеш категорияһы формалары: *таныш (кеше), йәшерен (урын);* г) нигеҙ ҡылымдарҙың ҡайһы берҙәре: *туң (ер), шым (кеше);* 2) рәүеш менән

сифат араһында йөрөгән һүҙҙәр: *яҡшы (иптәш), һирәк (урман), шәп (ат).*

**Һанлашыу (нумерализация).** Һандарға, ҡағиҙә булараҡ, исемдәр күсәләр; килеп сығыштары буйынса күсмә һандар түбәндәге сығанаҡтарға ҡарайҙар: 1) төп башҡорт һүҙҙәре: *бөтөн (=1), ярты йәки ярым (=$^1/_2$), томан > төмән (=10$^4$);* 2) үҙләштерелгән һүҙҙәр: а) фарсы теленән: *сирек (< чарик) =* $^1/_4$, *тиҫтә (< дәстә) = 10;* б) рус теленән: *әсмуха (< осьмуха) =* $^1/_8$; в) латин теленән: *нуль (< nullus «бер нindәй, һис бер ни») = 0;* г) грек теленән: *дека (< deka) = 10;* ғ) француз теленән: *миллион (< million «мең мең») = 10$^6$; миллиард (< milliard «мең миллион») = 10$^9$; триллион (< trillion «мең миллиард») = 10$^{12}$; квадриллион (< quadrillion) = 10$^{15}$* һ. б.

**Алмашлашыу (прономинализация).** Айырым осраҡтарҙа ҡайһы бер исемдәр (1) һәм һандар (2) алмаш функцияларын башҡарып йөрөй ала: 1) *кеше (= кемдер), фәлән (= шул, шундай, теге): һиңә кеше килгән; фәлән ваҡытта;* 2) *бер (= ниндәйҙер), бер-бер (= ниндәйҙер), берәү (= кемдер), берәүҙәр (= ҡайһылары): һиңә берәү килгән; алда бер нәмә ята.*

**Ҡылымлашыу (вербализация).** Үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән ҡайһы бер үҙләштерелгән исемдәр, сифаттар һәм рәүештәр, ҡылымдарға күсеп, предметтың эшен, хәлен, хәрәкәтен белдереп йөрөй алалар: 1) фарсы теленән ингән исемдәр: *шабаш («һәйбәтлек, яҡшылыҡ») = бөттө, етте, тамам булды;* ғәрәп теленән ингән исемдәр: *ләм-мим («л» һәм «м» хәрефтәренең исемдәре) = өндәшмәй, шым булды; сәләм («именлек, тыныслыҡ») = тыныс йөрө-, имен бул-, иҫән-һау бул-; вәссәләм («һәм именлек, һәм тыныслыҡ») = бөттө, тамам булды;* француз теленән ингән исем: *марш («атлау ысулы») = ҡуҙғал(ығыҙ), кит(егеҙ);* 2) фарсы теленән ингән сифаттар: *хуш («гүзәл, күркәм, яҡшы, шат») = яҡшылыҡ теләйем; хуп («гүзәл, яҡшы, күркәм») = яҡшы тип иҫәпләйем, хуплайым;* 3) итальян теленән ингән рәүеш: *баста («етерлек тиклем») = етер, етте, булды, бөттө.*

Былар҇ан тыш, бер төркөм императив ымлыҡтар шулай уҡ ҡылымлашып йөрөргә мөмкин: а) төп башҡорт ымлыҡтары: *йә, йәгеҙ; ҡана, ҡанағыҙ; мә, мәгеҙ; сеү, сеүегеҙ;* б) рус теленән үҙләштерелгән ымлыҡтар: *тшшш, шшш, тссс, ссс (< тише) = өндәшмә(геҙ), шым булы(ғыҙ), тауышланма(ғыҙ); алло (< hello) = иғтибар ит(егеҙ).*

**Рәүешләшеү (адвербиализация).** Ҡағиҙә булараҡ, рәүештәргә төрлө грамматик формаларҙа нығынып ҡалған күп һанлы исемдәр (1), ҡайһы бер сифаттар (2), һандар (3), алмаштар (4) һәм ҡылым формалары (5) күсеп йөрөй: 1) *иртә (килгән), ҡыш*

*(йөрөмә), көскә (атлай);* 2) *яҡын (килә), ауыр (күҙгала);* 3) *бер (һуңламаны), бергә (килде), өсәү (булғандар);* 4) *бында (кил), тегендә (кит-);* 5) *ҡырҡа (үҙгәрҙе), үтә (сыҡҡан).*

**Ымлыҡлашыу (интеръективация).** Ымлыҡтарға айырым һүҙ төркөмдәренә ҡараған лексик берәмектәр, шулай уҡ ҡайһы бер һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр күсергә мөмкиндәр: 1) исемдәрҙән ҡайһы бер төп башҡорт һүҙҙәре: *атаҡай! әсәкәй! бәлеш! ҡарауыл!* 2) ҡайһы бер үҙләштерелгән исемдәр: а) фарсы теленән: *ай Хоҙайым!*; б) ғәрәп теленән: *ай Аллам! бәрәкәт! ғәләмәт!* 3) үҙләштерелгән сифаттарҙың ҡайһы берҙәре: а) фарсы теленән: *афарин! хуп! хуш!* б) ғәрәп теленән: *ләғин! ахмаҡ!* 4) алмаштар: *ҡайҙа! ҡайҙа ул! бына тағы!* 5) ҡылым формалары: *ҡара! ҡара уны! ҡуй!* 6) һүҙбәйләнештәр: *бына һин уны! бына һиңә тағы! абау Алла! Аллаға шөкөр!* 7) айырым һөйләмдәр: *Алла һаҡлаһын! Алла бирһә! ҡәһәр һуҡһын! Хоҙай һаҡлаһын!*

**Бәйләүесләшеү (постпозиционализация).** Бәйләүестәргә күберәк нығынып ҡалған исем (1) һәм ҡылым формалары (2), шулай уҡ ҡайһы бер рәүештәр (3), сифаттар (4) һәм алмаштар (5) күсә:

1) *(китаптарҙан) башҡа, (йыл) буйы(на), (йылы) көйгә, (ҡоро) мәлдә, (йылытылған) рәүештә, (шыйыҡ) хәлдә;*

2) *(юл) аша, (яҙҙан) башлап, (бәхеткә) күрә, (ауылға) ҡарай, (ямғыр яуыуға) ҡарамаҫтан;*

3) *(дәрестән) аҙаҡ, (үкенескә) ҡаршы, (концерттан) һуң, (ямғырҙан) элек;*

4) *(мал-тыуарҙан) бүтән, (буран башланыу) сәбәпле, (йәш бала) төҫлө;*

5) *(атаһынан) былай, (һарайҙан) тегеләй.*

**Теркәүесләшеү (конъюнкционализация).** Теркәүестәр, ғәҙәттә, ҡайһы бер һандар (1), алмаштар (2), рәүештәр (3) һәм нығынған һүҙбәйләнештәр (4) иҫәбенә тулылана:

1) *бер ... бер: Эт хужаһының бер алдына, бер артына сыға;*

2) *ни ... ни: Ни хәбәре килмәй, ни үҙе ҡайтмай; ул ... ул: Ул йырға, ул бейеүгә – һәр нәмәгә әүәҫ кеше ине; шуға: Спорт менән даими шөғөлләнә, шуға уның һаулығы яҡшы;*

3) *берсә ... берсә: Берсә һыуытып ебәрә, берсә йылыта; әле ... әле: Әле килеп инә, әле сығып китә; тик: Килде, тик оҙаҡ булманы;*

4) *йә булмаһа: Иртәгә йә булмаһа иртәнән һуңға; шуға күрә: Буран башланды, шуға күрә туристар ялға туҡтаны; шуға ҡарамаҫтан: Ҡараңғы төштө, шуға ҡарамаҫтан, эш дауам итте.*

**Киҫәксәләшеү (партикулизация).** Киҫәксәләргә айырым исемдәр *(ғәләмәт (ҙур), һәләк (бейек)*, сифаттар *(ғәжәп (матур), ныҡ (ҡурҡҡан), хас (атаһы), яман (уҫал)*, алмаштар *(килер)*

*теге, (ҡайтырҙар) ул, (барҙы) шул)*, рәүештәр *(һөйлә) һуң, (әйт) әле)* һәм ҡайһы бер ҡылым формалары *(һыуыҡ) икән, (кил) инде, (әйтте) иһә, (уйланы) ти)* күсә.

### *Лексик-синтаксик һүҙьяһалыш (лексемалашыу)*

Айырым һүҙҙәрҙең нығынған һүҙбәйләнештәргә, ә һөйләмдәрҙең үҙ аллы һүҙҙәргә ойошоп ҡушма һүҙҙәр яһалыуҙы **лексик-синтаксик һүҙьяһалыш** йәки **лексемалашыу** тип йөрөтәләр. Күренеүенсә, лексик-синтаксик һүҙьяһалыш ике процесты үҙ эсенә ала:

1) айырым һүҙҙәр нығынған һүҙбәйләнештәргә ойошалар һәм ҡатмарлы бер төшөнсәнең атамаһы рәүешендә ҡушма һүҙ функцияһын үтәй башлайҙар: *таш, күмер* (айырым һүҙҙәр) > *таш күмер* (нығынған һүҙбәйләнеш, бер төшөнсәнең атамаһы булып ҡушма һүҙ сифатында ҡулланыла); *донъя, көт-* > *донъя көт-; бер, ваҡыт* > *бер ваҡыт;*

2) айырым һөйләмдәр үҙҙәренең коммуникатив функцияларын юғалталар һәм, үҙ аллы ҡушма һүҙҙәргә ойошоп, номинатив функциялы лексик берәмектәргә әйләнәләр: *Яу ҡасҡан* (һөйләм) > *Яуғасҡан* (ҡушма һүҙ, тау исеме); *Алла бирҙе* (һөйләм) > *Аллабирҙе* (ҡушма һүҙ, кеше исеме, аҙаҡ ауыл исеме).

Башҡорт телендә, башҡа төрки телдәрендәге кеүек үк, лексик-синтаксик юлдың ике ысулын күрһәтергә була: а) лексемалашыу һәм б) лексемалашыу + аффикслашыу.

**Лексемалашыу.** Предикатив булмаған һүҙбәйләнештәр лексемалашҡан саҡта формаль яҡтан ҙур үҙгәрештәргә бирелмәйҙәр; нығынған һүҙбәйләнештәргә ингән һүҙҙәр, нигеҙҙә, үҙҙәренең фонематик һәм морфематик төҙөлөштәрен һаҡлайҙар; был процестың һөҙөмтәһе буларак, телдә *теркәлмә ҡушма һүҙҙәр* барлыҡҡа килә (мәҫәлән: *ябай һөйләм, ҡушма һөйләм, теҙмә ҡушма һөйләм, эйәртеүле ҡушма һөйләм*).

Предикатив һүҙбәйләнештәр, йәғни һөйләмдәр, лексемалашыу һөҙөмтәһендә *берекмә ҡушма һүҙҙәр* барлыҡҡа килә; бындай төрҙәге лексемалашҡан синтаксик берәмектәр, ғәҙәттә, бер составлы йәки ике составлы ябай һөйләмдәр рәүешендә йөрөйҙәр; уларҙың һәр ҡайһыһында предикативлыҡ хәбәр составы менән белдерелә, ә хәбәрҙәре төрлө ҡылым формаларынан, сифаттарҙан һәм модаль һүҙҙәрҙән килергә мөмкин.

Башҡорт телендә лексемалашыу ысулы менән бигерәк тә исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш, шулай уҡ ымлыҡ категорияларына ҡараған берекмә һәм теркәлмә ҡушма һүҙҙәр күп-

ләп яһалалар; былдай ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышында һәр һүҙ төркөмөнә ҡараған лексик берәмектәрҙә күп төрлө үҙенсәлектәр күҙәтелә.

Һүҙбәйләнештәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән *теркәлмә ҡушма исемдәрҙең* күбеһе төрлө өлкәгә ҡараған махсус терминдар сифатында сығыш яһайҙар; төҙөлөштәре буйынса улар, башлыса, түбәндәге ҡалыптарҙа киләләр:

1) «төп килештәге исем + төп килештәге исем (I төр изафет)»: *бала саҡ, баш ҡала, тимер юл;*

2) «билдәһеҙ эйәлек килештәге исем + эйәлек категорияһы аффикслы исем (II төр изафет)»: *ер еләге, ҡайын еләге, ҡурай еләге, мүк еләге; диңгеҙ балығы;*

3) «сифат + төп килештәге исем»: *аҡ май, һары май, туң май;*

4) ҡушма һүҙбәйләнештәр: *бер составлы һөйләмдәр, ике составлы һөйләмдәр, Стәрлетамаҡ педагогия колледжы.*

Һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә, ғәҙәттә, кеше исемдәре һәм ер-һыу атамалары яһала; был процеста төҙөлөштәре буйынса ошондай типтағы һөйләмдәр күберәк урын ала:

1) хәбәрҙәре бойороҡ йәки хәбәр һөйкәлештәре ҡылымдарынан килгән бер составлы һөйләмдәр: *Баламйәбеш (тау атамаһы), Илгиз (кеше исеме), Иҫәнгилде (кеше исеме, ауыл атамаһы), Байбул (кеше исеме);*

2) эйәләре төп килештәге исемдәрҙән, хәбәрҙәре үткән йәки киләсәк заман хәбәр ҡылымдарҙан килгән ике составлы һөйләмдәр: *Дәүләткилде (кеше исеме), Юлбирҙе (кеше исеме), Ҡыҙғасҡан (йылға атамаһы), Таңатар (кеше исеме, ауыл атамаһы), Айтыуар (кеше исеме);*

3) эйәләре төп килештәге исемдәрҙән, хәбәрҙәре сифаттарҙан килгән һөйләмдәр: *Дәүләтбай (кеше исеме), Ишбай (кеше исеме), Илбатыр (кеше исеме), Юлғотло (кеше исеме);*

4) эйәләре төп килештәге исемдәрҙән, хәбәрҙәре «бар» модаль һүҙенән килгән һөйләмдәр: *Игенбар (йылға атамаһы), Ҡойобар (йылға атамаһы).*

Түбәндәге төрҙәге һүҙбәйләнештәр лексемалашыу нәтижәһендә *теркәлмә ҡушма сифаттар* барлыҡҡа килә:

1) «исем + сифат»: *алма сыбар (ат), тимер күк (ат), сейә ҡыҙыл (төҫ);*

2) «сифат + сифат»: *ерән ала, күк ала, ҡара ала, ҡола ала, туры ала (ат төҫтәре).*

Һүҙбәйләнештәр лексемалашыу ысулы менән *теркәлмә ҡушма һандарҙың* түбәндәге төркөмсәләре яһала:

1) төп һандар юғары разряд һаны аҙағына түбән разряд һандарын йәнәшә ҡуйыу юлы менән яһала: *ун биш, утыҙ ете, туҡһан өс; дүрт йөҙ биш; ике мең бер йөҙ алты;*

2) сама һандарының бер төркөмө төп һандар алдынан «сама менән, артығы менән, яҡынса» һүҙҙәре, ә аҙағынан «самаһы, артыҡ, яҡын, тирәһе» һүҙҙәре теркәлеү юлы менән яһала:

а) *сама менән илле, артығы менән өс йөҙ, яҡынса ун мең;* б) *егерме биш самаһы, ундан артыҡ, йөҙгә яҡын, мең тирәһе;*

3) кәсер һандарының яһалыу тәртибе түбәндәгесә: тәүҙә бөтөн һан («бөтөн» һүҙе менән), аҙаҡтан кәсерҙәр өлөшө әйтелә; был саҡта кәсерҙең бүлеүсе һаны сығанаҡ килеш формаһында – тәүҙә, ә бүленеүсе һаны төп килештә һуңынан әйтелә: $5\ ^{3}/_{7}$ — $5\frac{3}{7}$ *биш бөтөн етенән өс; 7,1 – ете бөтөн ундан бер.*

*Теркәлмә ҡушма алмаштар* яһалыштары буйынса ошондай төрҙәге һүҙбәйләнештәрҙән торалар:

1) күрһәтеү алмаштары: а) *«ана + шул, шунда, теге, тегендә» (ана шул, ана шунда, ана теге, ана тегендә)*; б) *«бына + был, шул, ошо, теге, бында, шунда, ошонда» (бына был, бына бында, бына ошо, бына ошонда);*

2) һорау алмаштары: *«ни + ҡәҙәр(е), саҡлы, тиклем» (ни ҡәҙәр(е), ни саҡлы, ни тиклем);*

3) билдәләү алмаштары: а) *«һәр + бер» (һәр бер);* б) *«һәр + кем, ни, нимә, ҡайҙа, ҡасан, ҡайһы» (һәр кем, һәр ни, һәр нимә, һәр ҡайҙа, һәр ҡасан, һәр ҡайһы);* в) *«зат алмаштары + үҙ (эйәлек формаһында)» (мин үҙем, һин үҙең, ул үҙе, беҙ үҙебеҙ, һеҙ үҙегеҙ, улар үҙҙәре);*

4) билдәһеҙлек алмаштары: а) *«әллә, теләһә + кем, ни, нимә, ҡайҙа, ҡасан, ҡайһы, нисек, нисә» (әллә кем, теләһә кем, әллә нимә, теләһә нимә, әллә ҡайҙа, теләһә ҡайҙа* һ. б. *);* б) *«ҡайһы + бер(әү)» (ҡайһы бер(әү);*

5) юҡлыҡ алмаштары: а) *«һис + кем, ни, нимә, ниндәй, ҡайҙа, ҡасан» (һис кем, һис ниндәй, һис ҡасан* һ. б.); б) *«бер + кем, ни, нимә, ниндәй, ҡайҙа, ҡасан» (бер кем, бер ҡайҙа, бер ҡасан);* в) *«һис бер + кем, ни, нимә, ниндәй, ҡайҙа, ҡасан» (һис бер кем, һис бер ҡасан, һис бер ҡайҙа* һ. б.).

*Теркәлмә ҡушма ҡылымдар* һүҙбәйләнештәрҙең һәм һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа киләләр.

Һүҙбәйләнештәр нигеҙендә яһалған ҡушма ҡылымдарҙың II компоненттары ярҙамсы ҡылымдарҙан, ә тәүгеләре – күп ваҡыт исемдәрҙән, оҡшатыу һүҙҙәренән, рус теленән ингән ҡайһы бер инфинитив формаларынан, һирәкләп айырым сифаттарҙан, һандарҙан, алмаштарҙан, рәүештәрҙән, модаль һүҙҙәрҙән һәм ымлыҡтарҙан киләләр. Ярҙамсы ҡылымдарҙан даими рәүештә *бул-, ит-* һүҙҙәре *(балиғ бул-, һау бул-, юҡ бул-; азат ит-, байрам ит-, хөрмәт ит-, үҙ ит-, юҡ ит-, буксовать ит-, страховать ит-)*, уларҙан ҡала *ал-, бар-, бир-, кил-, күр-, ҡал-, һал-, яҙ-* кеүек

ҡылымдар *(өлгө ал-, кәңәш бир-, ҡолаҡ һал-, һуштан яҙ-)* ҡулланылалар.

Һөйләмдәр нигеҙендә яһалған ҡушма ҡылымдар төрлө тәбиғәт күренештәрен, ижтимағи-сәйәси хәлдәрҙе, психологик һәм физиологик торошто белдереп йөрөйҙәр; быңдай төрҙәге һөйләмдәрҙең эйәләре төп килештәге исемдәрҙән, ә хәбәрҙәре эске мәғәнәләре буйынса уларға ныҡлы бәйләнгән ҡылымдарҙан тора, һөҙөмтәлә был типтағы һөйләмдәр берәй процесты, йәғни хәл-торошто, хәрәкәтте, эште белдереүсе фразеологизмдарға әйләнәләр. Хәҙерге башҡорт телендә ошо төрҙәге һөйләм-фразеологизмдарҙың хәбәрҙәре булып йөрөүсе ҡылымдарҙың һаны өс тиҫтәнән ашып китә, уларҙың киң таралыш алғандары түбәндәгеләр: *асыл- (күңел асыл-, тел асыл-), баҫ- (йоҡо баҫ-, һыу баҫ-), бөт- (көн бөт-, хәл бөт-), ет- (баш ет-, иҫ ет-), ин- (иҫ ин-, хәл ин-), кер- (аҡыл кер-, күс кер-), кил- (асыу кил-, намыҫ кил-), кит- (иҫ кит-, рәт кит-), көй- (йән көй-, үҙәк көй-), ҡат- (баш ҡат-, һын ҡат-), сыҡ- (бола сыҡ-, тын сыҡ-), тей- (еҫ тей-, күҙ тей-), төш- (күҙ төш-, күңел төш-)* һ. б.

*Теркәлмә ҡушма рәүештәр*, ғәҙәттә, хәл, ваҡыт, урын, күләм-дәрәжә мәғәнәләрен аңлатып йөрөйҙәр; улар күберәк ошондай төрҙәге һүҙбәйләнештәр нигеҙендә формалашалар:

1) «сифат + исем»: *ялан аяҡ, ялан баш, ялан күлдәк;*

2) «исем + рәүеш»: *баш түбән, йөҙ түбән, аяҡ үрә;*

3) «исем + *буйы*»: *ай буйы, йыл буйы, көн буйы;*

4) «*бер* + исем, сифат, рәүеш»: *бер ваҡыт, бер ыңғай, бер аҙ;*

5) «алмаштар *(ул, был, ошо, шул; ни, ҡайһы; һәр)* + ваҡыт һәм урынды белдереүсе исемдәр»: *шул ваҡыт, ни арала, ҡайһы саҡта, һәр ерҙә.*

*Теркәлмә ҡушма ымлыҡтар* ҡайһы бер һүҙбәйләнештәрҙең һәм тотош һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа киләләр.

Ымлыҡтарға күскән һүҙбәйләнештәрҙең түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә була:

1) «алмаш + рәүеш»: *бына тағы! бына һиңә тағы!*

2) «ымлыҡ + алмаш»: *эй бынауыны! эй ошоно!*

3) «ымлыҡ + исем»: *эй Алла(м)! эй Илаһым!*

Ымлыҡтар рәтенә күскән һөйләмдәр, башлыса, фразеологик берәмектәр нигеҙендә формалашҡандар; уларҙың күбеһе синтаксик төҙөлөштәре буйынса түбәндәгесә характерланалар:

1) бер составлы (билдәле эйәле) һөйләмдәр рәүешендә: *Алдың байыңды! Ташҡа үлсәйем! Кит инде! Ҡуй инде!*

2) хәбәрҙәре бойороҡ, хәбәр һәм теләк-өндәү һөйкәлештәре ҡылымдарынан килгән ике составлы һөйләмдәр сифатында:

а) *Күҙе сыҡһын! Ҡәһәр һуҡһын!* б) *Ана бара юлың!* в) *Рәхмәт яуғыры! Шайтан алғыры! Бүре ашағыры!*

3) ҡушма һөйләмдәр формаһында: *Һин күр ҙә мин күр! Һин һорама, мин әйтмәйем инде!*

**Лексемалашыу + аффикслашыу.** Лексемалашҡан һүҙбәйләнештәргә һәм һөйләмдәргә һүҙ яһаусы аффикстар ҡушылыу ярҙамында яңы һүҙҙәр яһалыу процесын «лексемалашыу + аффикслашыу» термины аҫтында өйрәнеү маҡсатҡа ярашлы. Был ысул менән башҡорт телендә ҡушма һүҙҙәрҙең *теркәлмә* һәм *берекмә төрҙәре* яһала; улар араһында сифаттар өҫтөнлөк итә, шулай уҡ исемдәр, ҡылымдар һәм рәүештәр ҙә осрай.

*Теркәлмә ҡушма исемдәрҙең* яһалыу үҙенсәлектәре:

1) «һүҙбәйләнеш + *-сы* афф.»: *бала ҡараусы, ҡорос ҡойоусы;*

2) «һүҙбәйләнеш + *-ғыс* афф.»: *газ үткәргес, һыу һаҡлағыс;*

3) «һүҙбәйләнеш + *-лыҡ* афф.»: *аҙ ҡанлылыҡ, күп теллелек.*

*Теркәлмә ҡушма сифаттар* лексемалашҡан һүҙбәйләнештәргә һәм һөйләмдәргә түбәндәге төр аффикстар ҡушылыу юлы менән яһала:

1) а) «һүҙбәйләнеш + *-лы* афф.»: *күп милләтле, оҙон буйлы;*

б) «һүҙбәйләнеш + *-лыҡ* афф.»: *бер көнлөк, күп йыллыҡ; ғәфү итмәҫлек, түҙә алмаҫлыҡ;*

в) «һүҙбәйләнеш + *-сан* афф.»: *алдан күреүсән, эш һөйөүсән;*

г) «һүҙбәйләнеш + *-ғыс* афф.»: *баш ҡатырғыс, йөрәк әрнеткес;*

ғ) «һүҙбәйләнеш + *-ғы* афф.»: *йәш саҡтағы, юл буйындағы;*

д) «һүҙбәйләнеш + *ғыһыҙ* афф.»: *күҙ асҡыһыҙ, тын алғыһыҙ;*

е) «һүҙбәйләнеш + *-малы* афф.»: *тышҡа асылмалы, үтә күренмәле.*

2) а) «һөйләм + *-ғыс* афф.»: *иҫ киткес, ҡот осҡос;*

б) «һөйләм + *-ҙай* афф.»: *иҫ китерҙәй, ҡот осорҙай;*

в) «һөйләм + *-лыҡ* афф.»: *баш ҡатырлыҡ, иҫ китерлек;*

г) «һөйләм + *-мәле* афф.»: *иҫ китмәле, һуш китмәле.*

*Теркәлмә ҡушма рәүештәр* яһалышында лексемалашҡан һүҙбәйләнештәр ҙә, һөйләмдәр ҙә ҡатнашалар:

а) «һүҙбәйләнеш + *-лап* афф.»: *ҡуш ҡуллап, ҡуш услап;*

б) «һүҙбәйләнеш + *-һыҙ* афф.»: *бер туҡтауһыҙ, бер һүҙһеҙ;*

в) «һөйләм + *-ҙан* афф.»: *кем еңәрҙән, кем уҙарҙан.*

Ныҕынған һүҙбәйләнештәргә аффикстар ҡушылыу ысулы менән **берекмә ҡушма ҡылымдар** яһала: а) сифат һүҙбәйләнештәр нигеҙендә: *ҡара эсле + -лән > ҡареслән-, үҙ һүҙле + -лән > үҙһүҙлән-, яҡшатлы + -лан > яҡшатлан-, яманатлы + -лан > яманатлан-;* б) ҡылым һүҙбәйләнештәрҙән: *һау бул- + -лаш > һаубуллаш-.*

## ҺҮҘЬЯҺАЛЫШТЫ ӨЙРӘНЕҮҘӘ ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ АНАЛИЗЫ ҺӘМ ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ СИНТЕЗЫ МЕТОДТАРЫ

Тел ғилемендә һүҙьяһалыш системаһын, нигеҙҙә, ике принциптан сығып өйрәнеү күҙәтелә. Традиция буйынса был принциптар тюркологияла ла ҡабул ителгән.

Һүҙьяһалыш системаһын беренсе принципҡа ярашлы тикшереүҙең нигеҙендә һүҙьяһалыш анализы методы менән эш итеү ята. Был йүнәлештең асылы шунда: төп иғтибар һүҙьяһалыштың һөҙөмтәһенә йүнәлтелә; был саҡта, һүҙьяһалыш нәтижәһендә барлыҡҡа килеп, һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланылып йөрөгән яһалма һүҙҙәргә анализ (бында һүҙьяһалыш анализы күҙ уңында тотола) үткәрелә; һүҙьяһалыш анализы был осраҡта түбәндәге схема буйынса алып барыла: иң тәүҙә бирелгән яһалма һүҙҙең ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығы билдәләнә; артабан уның морфематик төҙөлөшө һәм яһалышы буйынса төрө (ябай яһалма, ҡушма (үҙ сиратында, уның берекмә ҡушма, теркәлмә ҡушма, парлы; ҡабатлаулы, ҡыҫҡартылған ҡушма төрҙәре), ҡыҫҡартма, күсмә һүҙҙәр) күрһәтелә; шулай уҡ был һүҙҙең яһаусы нигеҙе һәм уның ниндәй һүҙ төркөмөнән булыуы асыҡлана; һуңынан яһалма һүҙҙең ниндәй юл һәм ул юлдың ҡайһы ысулы менән барлыҡҡа килгәнлеге, был процеста ниндәй һүҙ яһаусы саралар ҡулланылғанлығы, уларҙың мәғәнә үҙенсәлектәре әйтелә.

Шулай итеп, һүҙьяһалыш процесын тикшереү һүҙьяһалыш анализы методы менән башҡарылғанда, һүҙьяһалыш барышын асыҡлау һөҙөмтәнән сығанаҡҡа ҡарата, йәғни процестың аҙағынан башына табан кире йүнәлештә, алып барыла.

Конкрет телдәрҙең һүҙьяһалыш системаһын өйрәнеүҙә һүҙьяһалыш анализы методы менән эш итеү киң таралған алым булып тора; һүҙьяһалыш проблемаларына арналған махсус эштәр ҙә, фәнни грамматикаларҙағы, шулай уҡ юғары һәм урта уҡыу йорттары өсөн сығарылған дәреслектәрҙәге материалдар ҙа быға тиклем, нигеҙҙә, ошо аспекттан сығып бирелгәндәр. Был йүнәлештә тикшеренеүҙәр алып барыу дөйөм тел ғилемендә лә, шул иҫәптән русистикала, ғәҙәттәге күренеш булып тора.

Ә инде һүҙьяһалыш системаһын икенсе, йәғни ыңғай йүнәлештә, тикшереү, үрҙә әйтелгәнсә, һүҙьяһалыш процесын тәүгеһенә ҡапма-ҡаршы рәүештә һүҙьяһалыш синтезы методы ярҙамында алып барыла. Был йүнәлештең асылы ошонан тора: иң тәүҙә һүҙьяһалыш процесының сығанағына, йәғни уның базаһына, иғтибар ителә; һуңынан яңы һүҙ яһалыуҙың барышы тикшерелә. Һүҙьяһалыш синтезы методы менән эш итеү түбәндәге тәртиптә бара: тәүҙә һүҙ яһаусы нигеҙ функцияһын башҡарыусы лексик берәмек алына, уның ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауы

билдәләнә; артабан был яһаусы нигеҙҙең ниндәй һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәрҙе яһауҙа ҡатнаша алыуы асыҡлана; шулай уҡ был процестың ниндәй юлдар һәм ысулдар менән һәм ниндәй мәғәнәләр белдереүсе һүҙ яһаусы саралар (морфонемалар, аффикстар, нигеҙҙәр ҡушылыу, нигеҙҙәр ишләшеү, һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу һ. б.) аша башҡарылыуы күрһәтелә; һуңынан яңы барлыҡҡа килгән һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөштәре һәм яһалыш үҙенсәлектәре буйынса төрҙәре (ябай яһалма, берекмә ҡушма, теркәлмә ҡушма, парлы, ҡабатлаулы, ҡыҫҡартылған ҡушма, ҡыҫҡартма, күсмә һүҙҙәр) билдәләнә.

Шулай итеп, һүҙьяһалыш процесының барышын һүҙьяһалыш синтезы методы аша тикшереү уның сығанағынан, нигеҙенән һөҙөмтәгә ҡарата, йәғни процестың башынан аҙағына табан ыңғай йүнәлештә, алып барыла.

Һүҙьяһалыш системаһын тикшереүҙе һүҙьяһалыш синтезы методы ярҙамында ошолай итеп ыңғай йүнәлештә алып барыу тел ғилемендә сағыштырмаса яңы күренеш булып тора, мәҫәлән, русистикала ла быңдай алым менән башҡарылған эштәр әллә ни күп түгел, башҡорт тел ғилемендә лә һүҙьяһалыш мәсьәләләрен һүҙьяһалыш синтезы методы аша өйрәнеүгә һуңғы йылдарҙа ғына етди иғтибар бирелә башланы, диссертациялар яҡланды, монографиялар донъя күрҙе, шулай уҡ ошо һүҙьяһалыш методына нигеҙләнгән, һүҙьяһалыш оялары принцибына ҡоролған «Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге» төҙөлдө.

Телдең һүҙьяһалыш системаһы ҡайһы йүнәлештән сығып ҡаралһа ла, яһалма һүҙҙәрҙең ниндәй юлдар һәм ысулдар ярҙамында барлыҡҡа килеүен билдәләү һәр осраҡта ла күрһәтелергә тейешле төп бурыстарҙан һанала.

Бынан тыш, тел ғилемендә һүҙьяһалыш системаһын тикшереүҙә был телдәге һүҙьяһалыш юлдарын һәм ысулдарын нигеҙ итеп алалар, ҡайһы берҙә был эш һүҙ яһаусы саралар нигеҙендә башҡарыла; шулай ҙа иң киң таралған күренеш булып һүҙьяһалышты тикшереү эшен, үрҙә күрһәтелгән аспекттарҙан сығып, комплекслы планда алып барыу тора.

Үрҙә әйтелгәндәрҙе йомғаҡлап, түбәндәгеләрҙе билдәләргә була: 1) хәҙерге тел ғилемендә, шул иҫәптән тюркологияла ла, телдәрҙең һүҙьяһалыш системаһын өйрәнеүҙә, нигеҙҙә, һүҙьяһалыш анализы һәм һүҙьяһалыш синтезы методтары урын алған; 2) һәр методтың үҙ мөмкинлектәре һәм үҙ урыны бар, шулай ҙа уларҙы тейешле шарттарҙа айырым-айырым йәки параллель ҡулланыу бер-берен тулыландырасаҡ һәм һүҙьяһалыш системаһын төрлө яҡлап комплекслы тикшереүгә, уның күп яҡлы тәбиғәтен тәрәнерәк асыуға мөмкинлек бирәсәк.

## ҺҮҘЬЯҺАЛЫШТА СЕМАСИОЛОГИК КҮРЕНЕШТӘР

Һүҙ, уның семантик төҙөлөшө телдең эске закондарына һәм ҡулланылыш шарттарына ярашлы рәүештә даими үҫеш һәм үҙгәреш хәлендә; һөҙөмтәлә, телдә ҡулланылған бер үк һүҙ бер, ике, хатта унан да күберәк мәғәнәләрҙә йөрөй ала; күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең төрлө йүнәлештә үҫеүе күп мәғәнәлелектең (полисемия) билдәле шарттарҙа яңы лексик берәмектәр формалашыуға нигеҙ булып тороуы омонимия һәм паронимия күренештәренә килтерә; ә инде бер лексик берәмектең башҡа лексемалар менән төрлө семантик мөнәсәбәттәргә инеүе һөҙөмтәһендә беҙ синонимия һәм антонимия күренештәрен күҙәтәбеҙ.

Семасиологик күренештәр телдең тарихи үҫеше процесында күп яҡтары менән лексикология сиктәренән ситкә сығалар һәм тел системаһының башҡа кимәлдәре, бигерәк тә һүҙьяһалыш менән берлектә формалашалар. Быны беҙ һүҙҙең семантик-структур төҙөлөшөнөң, мәғәнә үҙенсәлектәренең (лексик, һүҙьяһалыш, грамматик мәғәнәләр) төрлө үҙгәрештәр кисереүе уның фонематик һәм морфематик төҙөлөштәрендәге үҙгәрештәрҙә сағылыш алыуында, дөрөҫөрәге, уларҙың үҙ-ара бәйләнешендә, бер-береһенә тәьҫир итешеүендә күрәбеҙ.

**Һүҙьяһалыш һәм полисемия.** Күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөнән һәм һүҙьяһалыш үҙенсәлектәренән сығып, полисемия күренешенең тамыр (нигеҙ) һәм аффиксаль морфемаларға бәйле осраҡтарын күрһәтергә була.

Полисемантик тамыр морфемалар башҡорт лексикаһын яңы һүҙҙәр менән тулыландырыуҙа билдәле бер урын тоталар. Телдә ҡулланылыш үҙенсәлектәренә ҡарап, бындай полисеманттарҙы ике төркөмгә бүлеп ҡарай алабыҙ.

Беренсе төркөмгә ҡараған полисеманттар төрлө юлдар һәм саралар ярҙамында башҡа һүҙҙәр менән берлектә үҙҙәренең тура мәғәнәләренә мөнәсәбәттәрен әле юғалтып өлгөрмәгәндәр, шулай ҙа яңы лексик берәмек итеп ҡабул ителгән һүҙҙәр яһауҙа ҡатнашалар; шундайҙар рәтенә, мәҫәлән, оҡшашлыҡ буйынса тәбиғәттәге һәм тормоштағы йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы атау өсөн хеҙмәт иткән, ә беренсел мәғәнәләре буйынса йән эйәләренең (кеше, хайуан, ҡош-ҡорт, бөжәк һ. б.) төрлө ағза атамаларын белдергән *баш, ҡолаҡ, күҙ, тамаҡ, боғаҙ, морон, ҡултыҡ, арҡа, ҡанат, ҡойроҡ* кеүек һүҙҙәрҙе ҡаратырға була.

Икенсе төркөмгә ҡараған полисеманттар үҙҙәренең фонематик һәм морфематик төҙөлөштәрен үҙгәртмәйенсә, өҫтәлмә мәғәнәләренең беренсел мәғәнәләренән алыҫлашыуы һөҙөмтәһендә, семантик омонимдар рәтенә күсәләр, йәғни лексик-семантик юл менән яңы һүҙҙәр барлыҡҡа киләләр; ошондай семантик омо-

нимдар сифатында барлыҡҡа килгән яңы лексик берәмектәр башлыса исемдәр, сифаттар һәм ҡылымдар araһында күҙәтелә-ләр: а) *ай «луна» > ай «месяц»; хәбәр «весть» > хәбәр «сказуемое»;* б) *ишле «парный» > ишле «многочисленный»; ерле «имеющий землю» > ерле «местный»;* в) *баҫ- «ступать» > баҫ- «печатать»; иш- «вить» > иш- «грести»*.

Хәҙерге башҡорт телендәге һүҙ яһаусы полисемантик аффикстар рәтенә миҫал өсөн түбәндәге аффикстарҙы индерергә була (уларҙың барыһы ла тиерлек, яһаусы нигеҙҙәргә ҡушылып, берәүҙәренән исемдәр (а), икенселәренән сифаттар (б) яһап йөрөй алалар):

***-ғыс/-гес, -ғос/-гөс, -ҡыс/-кес, -ҡос/-көс:*** а) *асҡыс, белгес, йыуғыс;* б) *йөҙәткес (əңгəмə), ялҡытҡыс (эш);*

***-ыс/-ес, -ос/-өс:*** а) *йыуаныс, һөйөнөс;* б) *ашығыс (ярҙам), ҡыҙғаныс (хәл);*

***-ғаҡ/-гәк, -ҡаҡ/-кәк:*** а) *ишкәк, төргәк;* б) *тайғаҡ (юл), һөҙгәк (һыйыр);*

***-даш/-дәш, -ҙаш/-ҙәш, -лаш/-ләш, -таш/-тәш:*** а) *ауылдаш, яҡташ;* б) *туғандаш (халыҡтар), эргәләш (бүлмә);*

***-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк:*** а) *боҙлоҡ, йондоҙлоҡ;* б) *өйлөк (ағас), юллыҡ (аҡса);*

***-ма/-мә:*** а) *бүлмә, кәңәшмә;* б) *киҫмә (хәрефтәр), күсмә (күргәҙмә);*

***-ыҡ/-ек, -оҡ/-өк, -ҡ/-к:*** а) *бойороҡ, төкөрөк;* б) *ҡыҫыҡ (ишек), серек (ағас).*

**Һүҙьяһалыш һәм омонимия.** Һүҙьяһалышҡа мөнәсәбәтле төрлө лингвистик саралар аша барлыҡҡа килгән лексик, лексик-грамматик һәм грамматик омонимдарҙың күп кенә үҙенсәлекле төрҙәре осрай.

*Лексик омонимдар* булып йөрөгән һүҙҙәргә бер үк яһаусы аффикстар ҡушылыу нәтижәһендә нигеҙҙәрҙең омонимлыҡ мәғәнәләрен һаҡлаған йәки үҙҙәренә күсергән яһалма омонимдар барлыҡҡа киләләр, уларҙы күсмә омонимдар тип йөрөтөргә була; миҫалдар: *ат (исем) – ат (хайуан төрө), атлы (кем атлы булаһың) – атлы (атлы ғәскәр); пар (боҫ) – пар (иш), парла- (парға тот-) – парла- (ишлә-).*

Мәғәнәләре айырылған, ләкин әйтелештәре менән яҡын булған ҡайһы бер һүҙҙәр һүҙ һәм форма яһалыу процесында үҙҙәренең фонематик һәм морфематик төҙөлөштәрен үҙгәртәләр һәм һәр береһе бер үк йәки төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған *лексик-грамматик омонимдар* хасил итәләр: *тан-* (*инҡар ит-, баш тарт-, кире ҡаҡ-*) – *таны-* (*иҫләп ал-, бел-*); *таныу* (*әйткәндән баш тартыу, кире ҡағыу*) – *таныу* (*белеү*); *таныусы* (*инҡар итеүсе*) – *таныусы* (*белеүсе*).

Төрлө нигеҙҙәргә ҡушылып йөрөүсе һүҙ яһаусы аффикстарҙың үҙ-ара йәки форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстар менән омонимик мөнәсәбәттәргә инеүе һөҙөмтәһендә, телдә *омонимик аффикстарҙың* ҙур бер ҡатламы формалашҡан; морфематик һәм функциональ үҙенсәлектәренән сығып, уларҙы аффиксаль омонимдар тип атарға була. Бындай күренештәргә ҡараған түбәндәге осраҡтарҙы билдәләргә мөмкин:

1) һүҙ яһаусы аффикстарҙың омонимлығы:

*-ай/-әй*[1] (ҡылым яһай): *аҙай-, күбәй-, оҙонай-;*

*-ай/-әй*[2] (сифат яһай): *ҡулай (эш), уңай (ваҡыт);*

2) һүҙ яһаусы һәм форма яһаусы аффикстарҙың омонимлығы:

а) *-ма/-мә*[1] (исем яһай): *баҫма́, ҡорма́;*

*-ма/-мә*[2] (юҡлыҡ категорияһы яһай): *ба́ҫма-, ҡо́рма-;*

б) *-сы/-се, -со/-сө*[1] (исем яһай): *итексе́, тимерсе́;*

*-сы/-се, -со/-сө*[2] (модаллек категорияһы яһай): был – *ите́ксе*, ни эшләп быйма булһын, был – *тиме́рсе*, ни эшләп баҡыр булһын;

*-сы/-се, -со/-сө*[3] (бойороҡ һөйкәлеше яһай): *ҡайтсы, килсе;*

3) һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе аффикстарҙың омонимлығы:

*-а/-ә*[1] (исем яһай): *йәйә, күбә, уба;*

*-а/-ә*[2] (ҡылым яһай): *ата- (исемлә-), тешә-, һана-;*

*-а/-ә*[3] (һөйкәлеш һәм заман категорияһы яһай): *(ул) ала, (ул) бирә;*

*-а/-ә*[4] (инфинитив формаһы яһай): *бесән саба китте;*

*-а/-ә*[5] (рәүеш ҡылым яһай): *үтә сыҡты, йыға һуҡты.*

**Һүҙьяһалыш һәм синонимия.** Башҡорт телендәге синонимдарҙы, башҡа телдәрҙәге кеүек үк, морфематик төҙөлөштәре буйынса төрлө тамырлы һәм тамырҙаш синонимдарға бүлеп ҡарарға була. Төрлө тамырлы синонимдар рәтенә тик тамыр һүҙҙәрҙән генә торған синонимдар (мәҫәлән: *маҡсат, морат, ниәт; иҫ-, өр-*), йә булмаһа, тамыр һүҙҙәрҙән дә, яһалма һүҙҙәрҙән дә торған синонимдар (мәҫәлән: *арт-, күбәй-, ишәй-*) инергә мөмкин. Тамырҙаш синонимдар бер үк тамырҙың төрлө фонематик (мәҫәлән: *бат- – байы-*) йә морфематик үҙгәрештәре (мәҫәлән: *аҡ-ла-, ағ-ар-т-*), шулай уҡ төрлө һүҙбәйләнештәргә инеүе арҡаһында (мәҫәлән: *ғүмер ит-, ғүмер кисер-, ғүмер һөр-*) барлыҡҡа килә; шунлыҡтан уларҙы һүҙьяһалыш синонимдары тип тә йөрөтәләр.

Башҡорт телендә был төрҙәге һүҙьяһалыш синонимдары яһалыу башлыса фонологик, морфематик, лексик-синтаксик һәм аббревиация юлдары аша бара:

1) фонологик юл: *бау, бәй; ҡаҙаҡ, ҡаҙау;* [йа]ҙ-, *йәй-; һүт-, һүр-;*

2) морфематик юл:

а) төрлө тамырҙан торған, ләкин мәғәнә яҡынлыҡтары булған яһаусы нигеҙҙәргә бер үк аффикстар ҡушылып, синонимик рәт хасил итә; бындай яһалма синонимдар рәте, ғәҙәттә, исемдәрҙән, сифаттарҙан, ҡылымдарҙан һәм рәүештәрҙән тора: *дөрөҫлөк, хаҡлыҡ, ысынлыҡ; аҙаҡҡы, ахырғы, һуңғы; кәмһет-, түбәнһет-; сараһыҙҙан, ирекһеҙҙән;*

б) тамырҙаш синонимдар яһалыу сараларының күп төрлөлөгө һәм телдә киң таралыш алыуҙары менән айырылып тора: *арзан, арзанлы; тура-, тураҡла-; тирә, тирә-яҡ, тирә-йүн, әйләнә-тирә; ятаҡ, ятаҡхана; баҙнатлы, баҙнатсыл; аҡрынай-, аҡрынла-; тереләй, тереләтә; гуманизм, гуманлылыҡ; тимерсыбыҡ, сыбыҡтимер;*

3) лексик-синтаксик юл: *аҡыллан-, аҡылға кил-, аҡылға ултыр-, аҡыл ин-, аҡыл ултыр-; тел белеме, тел ғилеме; оҙон ҡуллы, кәкре ҡуллы, шуҡ ҡуллы.*

**Һүҙьяһалыш һәм антонимия.** Морфематик төҙөлөштәре буйынса антонимдарҙы ике төркөмгә: төрлө тамырлы һәм тамырҙаш антонимик иштәргә бүлеп ҡарарға була: *алыҫ – яҡын, алыҫай – яҡынай, алыҫлаш- – яҡынлаш-, алыҫтағы – яҡындағы; әҙәп – әҙәпһеҙлек, әҙәпле – әҙәпһеҙ, әҙәплелек – әҙәпһеҙлек.*

Төрлө тамырлы антонимдар нигеҙендә антонимик оялар формалаша; оялағы һүҙҙәрҙең антонимлығы яңы барлыҡҡа килгән яһалма йәки ҡушма һүҙҙәрҙе яһаусы формаль күрһәткестәргә һәм сараларға (аффикслашыу, нигеҙҙәр ҡушылыу һ. б.) бәйле түгел, ә баш компоненттарҙы тәшкил итеүсе антонимик иштәрҙең мәғәнәләренә ярашлы формалаша, йәғни баш компоненттарҙың контраслыҡ мәғәнәләре улар нигеҙендә барлыҡҡа килгән иштәргә күсә (мәҫәлән: *йомарт – һаран, йомартлан- – һаранлан-, йомартлыҡ – һаранлыҡ*); шунлыҡтан был күренеште күсмә антонимия, ә уның сағылышы булараҡ формалашҡан антонимик иштәрҙе күсмә антонимдар тип атарға булыр ине.

Күсмә антонимдар, нигеҙҙә, исемдәрҙән, сифаттарҙан, ҡылымдарҙан һәм рәүештәрҙән торған антонимик оялар хасил итә, ә бер оя эсендә төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған иштәр туплана ала, тик һәр иш эсендәге компоненттар бер үк һүҙ төркөмөнә ҡарай: *дуҫ – дошман, дуҫлыҡ – дошманлыҡ, дуҫлаш- – дошманлаш-, дуҫтарса – дошмандарса.*

Төрлө тамырлы антонимик иштәр үҙҙәренең беренсел ҡапма-ҡаршылыҡ мәғәнәләренә өҫтәп йыйыу мәғәнәләре лә ҡабул итеп, ҡайһы берҙә үҙ аллы лексик берәмек хасил итәләр һәм парлы һүҙҙәрҙең үҙенсәлекле бер төрөнә әйләнеп китәләр: *алыш-биреш, инәле-сығалы, килә-китә, йәйен-ҡышын.*

Тамырҙаш антонимдар туранан-тура һүҙьяһалыш процесы менән бәйләнгәндәр, сөнки уларҙа контраслыҡ мәғәнәһе тик һүҙьяһалыш һөҙөмтәһендә генә формалаша; был процесс антонимик иштәрҙең икенсе һыңары йәки икеһе лә бер-береһенә ҡапма-ҡаршылыҡ мәғәнәләре тотҡан аффикстар ҡабул итеү аша башҡарыла:

1) фарсы һәм ғәрәп телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙәге *би-*, *бәд-*, *на-* префикстары ярҙамында: *тараф – битараф, хисап – бихисап; доға – бәддоға, бәхет – бәдбәхет; хаҡ – нахаҡ, мәғлүм – намәғлүм;*

2) Көнбайыш Европа телдәре аша ингән һүҙҙәрҙәге *а-*, *анти-*, *де-/дез-*, *дис-*, *ир-*, *контр-* кеүек префикстар аша: *нормаль – анормаль, есем – антийесем, монтажла- – демонтажла-, квалификацияла- – дисквалификацияла-, регуляр – иррегуляр, дәлил – контрдәлил;*

3) *-лы/-ле* һәм *-һыҙ/-һыҙ* аффикстары ярҙамында: *эшле (кеше) – эшһеҙ (кеше), айлы (төн) – айһыҙ (төн)*;

4) *-лы/-ле* һәм *-һыҙ/-һеҙ* аффикстарына өҫтәп *-лыҡ* аффиксы ҡушылыу аша: *намыҫлылыҡ – намыҫһыҙлыҡ, тәртиплелек – тәртипһеҙлек;*

5) икенсе компоненты *-ма/-мә* аффиксы ҡабул итеү һөҙөмтәһендә: *бирешеүсән – бирешмәүсән, ышаныусанлыҡ – ышанмаусанлыҡ.*

**Һүҙьяһалыш һәм паронимия.** Морфематик төҙөлөштәре һәм һүҙьяһалыш үҙенсәлектәре буйынса паронимдарҙы ике төргә бүлеп өйрәнергә була: 1) тамыр паронимдар (ҡар) *ире-* – (һөт) *эре-*, *бейек* (ағас) – *бөйөк* (кеше) һәм 2) яһалма паронимдар (*алмаш* үҫә – майҙанда *алыш* бара, *йүнле* эш – *йүнсел* кеше, киске *һауым* – *һауын* һыйыр).

Һүҙьяһалыш йәһәтенән ҡарағанда паронимик иштәрҙең, нигеҙҙә, фонологик һәм морфематик юлдар менән яһалыуҙары күҙәтелә.

Сығыштары буйынса бер үк тамырҙан торған бер төркөм төп башҡорт һүҙҙәре, ваҡыт үтеү менән, үҙҙәренең фонематик төҙөлөштәрен үҙгәрткәндәр һәм һәр береһе үҙенсәлекле мәғәнә айырмалыҡтары ҡабул иткәндәр; бындайҙар рәтенә ошондай паронимик иштәрҙе индерергә була: яңы *нәмә – нимә* күренә? [ә-и], *туған* тел – *тыуған* ауыл [у-ыу], *тейен* тиреһе – хаҡы ун *тин* тора һ. б.

Паронимдарҙың морфематик юл менән яһалған һүҙҙәр нигеҙендә формалашыуы фонологик саралар ға ҡарағанда киңерәк таралған, бындай күренеш бөгөн дә күҙәтелә:

1) ҡылымдар нигеҙендә яһалған *-ым* һәм *-ын* аффикслы һүҙҙәр: *ағым* (исем) – *ағын* (сифат), *һауым* (исем) – *һауын* (сифат);

2) исемдәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән *-сы/-се* һәм *-сыл/-сел* аффикслы һүҙҙәр: *динсе* (исем) – *динсел* (сифат), *енәйәтсе* (исем) – *енәйәтсел (сифат);*

3) *-ар/-әр* аффикслы сифаттар менән *-р, -ыр/-ер, -ор/-өр* аффикслы сифат ҡылымдар: һыу *ағыр* урын – *ағар* һыуҙар, *осор* ваҡыт – *осар* ҡоштар, сәй *эсер* ваҡыт – *эсәр* һыу;

4) *-ле* һәм *-ләҫ* аффикслы сифаттар: *итле* (аш) – *итләҫ* (бит);

5) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең башҡорт телендә морфематик төҙөлөштәрендә төрлө үҙгәрештәр кисереүе: *идеальный* > *идеаль* (сифат) – *идеал* (исем); *потенциальный* > *потенциаль* (сифат) – *потенциал* (исем); *классический* > *классик* (сифат) – *кла́ссик* (исем); *теоретический* > *теорети́к* (сифат) – *теоретик* (исем).

## ҺҮҘ ТӨРКӨМДӘРЕНЕҢ ЯҺАЛЫШЫ

Һүҙьяһалыш системаһын өйрәнгәндә лә һүҙ яһаусы нигеҙҙәрҙең һәм һүҙьяһалыш процесы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәрҙең лексик-грамматик тәбиғәтен билдәләү, йәғни уларҙың ҡайһы һүҙ төркөмдәренә ҡарауҙарын асыҡлау, шулай уҡ төп бурыстарҙың береһе һанала. Бындай талаптың ҡуйылыуы һүҙьяһалыш менән һүҙ төркөмдәре араһындағы ошондай мөнәсәбәттәр менән аңлатыла: 1) телдәге һәр һүҙ, килеп сығышы буйынса тамырмы ул, яһалмамы (киң мәғәнәлә), айырым бер лексик-грамматик разрядҡа ҡаратыла һәм шул һүҙ төркөмө эсендә өйрәнелә; 2) йыш ҡына һүҙ яһаусы саралар һүҙ төркөмдәрен айырыусы билдә булып та сығыш яһай алалар, шунлыҡтан морфологияла һүҙ төркөмдәрен билдәләүҙә традицион принциптар (семантик, морфологик, синтаксик) менән бер рәттән һүҙьяһалыш принцибын да күрһәтергә була; 3) телдең һүҙьяһалыш системаһын өйрәнгәндә, ғәҙәттә, айырым һүҙ төркөмдәренең яһалышын, уларҙың нисек барлыҡҡа килеү юлдарын һәм ысулдарын тикшерәбеҙ йәки бер һүҙ төркөмөнә ҡараған лексик берәмектең бүтән һүҙ төркөмдәренең ҡайһыларын яһауҙа ҡатнаша алыуын күрһәтәбеҙ.

Үрҙә әйткәнебеҙсә, һүҙьяһалыш процесында ҡатнашыусы лексик берәмектәрҙең ниндәй һүҙ төркөмдәренә ҡарауҙарын билдәләү, үҙ сиратында уларҙың һүҙ яһаусы нигеҙ сифатында башҡа һүҙ төркөмдәрен яһауҙа ҡатнаша алыу мөмкинлектәрен күрһәтеү ҙур теоретик һәм практик әһәмиәткә эйә.

Хәҙерге башҡорт телендә һүҙ төркөмдәренең барыһы ла билдәле бер кимәлдә һүҙ яһаусы нигеҙ функцияһын башҡарып йөрөй ала; был осраҡта һүҙ төркөмдәренең һәр ҡайһыһы бер-береһенән тик активлыҡтары һәм продуктивлыҡтарының төрлөсә булыу-

ҙары менән генә айырыла; был йәһәттән үҙ аллы һүҙ төркөмдәре (исемдәр, сифаттар, һандар, алмаштар, ҡылымдар, рәүештәр) актив ҡатламды тәшкил итәләр, эмоциональ-экспрессив һүҙ төркөмдәре (оҡшатыу һәм саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәре, ымлыҡтар, модаль һүҙҙәр) уларҙан байтаҡҡа ҡалышалар; ә инде ярҙамсы һүҙҙәрҙең (бәйләүестәр, теркәүестәр, киҫәксәләр) мөмкинлектәре тәүгеләргә ҡарағанда күпкә сикләнгәнлеге күҙәтелә.

Миҫал өсөн исемдәрҙең башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһын үҫтереүҙә һәм уны артабан байытыуҙа башҡарған урынын ҡараһаҡ, ошондай күренеш күҙәтелә: исемдәргә ҡараған лексик берәмектәр һүҙ яһаусы нигеҙ булараҡ исемдәрҙең (*имән-лек, заман-даш, аҡ-ҡош, уй-фекер, БДУ*), сифаттарҙың (*көс-лө (ат), ел-һеҙ (көн), уй-сан (кеше), тел-дәр (бала), анти-империалистик (ҡараш), шәхес-ара (мөнәсәбәт)*, ҡылымдарҙың (*аң-ла-, йөрәк-һе-, көс-әй-, хеҙмәт ит-, сәскә ат-*) һәм рәүештәрҙең (*башҡорт-са, дуҫтар-са, ай-лап, аҡса-лата, йыл-дан-йыл-ға, көн һайын*) яһалыштарында актив ҡулланылалар; быларҙан тыш, улар шулай уҡ ҡайһы бер һандарҙың (*бөтөн = 1, ярты = $^1/_2$, сирек = $^1/_4$, тиҫтә = 10*), алмаштарҙың (*барлыҡ (исем) > барлыҡ (алмаш)*, модаль һүҙҙәрҙең (*асыл > асыл-да, ахыры > ахыры-һы*) һәм ымлыҡтарҙың (*бәрәкәт (исем) > бәрәкәт! (ымлыҡ), илаһы (исем) > әй илаһым! (ымлыҡ)*) яһалыштарында ла ҡатнашалар; һирәкләп ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым төрҙәре формалашыуында ла осрайҙар.

## Исемдәрҙең яһалышы

### *Исемдәрҙең лексик-семантик юл менән яһалышы*

Исемдәрҙең лексик-семантик юл менән яһалышы полисемия һәм омонимия күренештәре нигеҙендә башҡарыла: телдә быға тиклем булған исемде белдереүсе айырым һүҙҙәр, ваҡыт үтеү менән, төрлө оҡшашлыҡ билдәләренән сығып, үҙҙәренең тәүге мәғәнәләрен үҙгәртәләр һәм яңы төшөнсәнең атамаһы булып сығыш яһай башлайҙар.

Башҡорт телендә ошондай юл менән исемдәр яһалышының түбәндәге осраҡтарын күрһәтергә була:

1) күк есемдәре атамалары > ваҡыт үлсәү берәмеге атамалары:

*ай* (күк есеме) – *ай* (йылдың $^1/_{12}$ өлөшөнә тиң ваҡыт үлсәү берәмеге),

*көн* (иҫк.: ҡояш) – *көн* (тәүлектең ҡояш булған ваҡыты);

2) конкрет предметтар атамалары > медицина терминдары:

*арпа* (ашлыҡ) – *арпа* (керпек төбөнә сыға торған эренле шешек),

*сәсәк* (үҫемлек сәскәһе) – *сәсәк* (тәнде шаҙра итә торған йоғошло ауырыу);

3) ағза (организмдың бер өлөшө) > ер-һыу атамалары:

*баш* – *баш* (берәй нәмәнең өҫкө өлөшө, осо),

*түбә* – *түбә* (тауҙың өҫкө өлөшө, йорт-ҡаралтының ҡыйығы),

*морон* – *морон* (берәй нәмәнең һеməге; берәй әйберҙең, шулай уҡ ҡоро ерҙең һыуға ослайып сығып торған өлөшө),

*боғаҙ* – *боғаҙ* (һыу яткылығының тар урыны),

*ҡултыҡ* – *ҡултыҡ* (һыуҙың ҡоро ергә инеп торған өлөшө),

*арҡа* – *арҡа* (тау һырты, ҡалҡыу урын);

4) ағза атамалары > зат, социаль төркөм атамалары:

*баш* – *баш* (башлыҡ, етәкселек),

*күҙ* – *күҙ* (кеше, шәхес, зат),

*күҙ-ҡолаҡ* – *күҙ-ҡолаҡ* (ҡараусы, күҙәтсе),

*тамаҡ* – *тамаҡ* (кеше, шәхес, зат),

*быуын* – *быуын* (бер осор кешеләре);

5) ағза атамаһы > көнкүреш кәрәк-яраҡы, техник ҡулайлама атамаһы:

*аяҡ* – *аяҡ* (һауыт-һаба),

*ҡаш* – *ҡаш* (йөҙөктөң өҫкө йөҙө, эйәрҙең тирәсе),

*терһәк* – *терһәк* (терәк, бөгөм);

6) предметтарҙың төрлө билдәләренә ҡағылышлы абстракт төшөнсәле атамалар > лингвистик терминдар (һүҙ төркөмдәре һәм һөйләм киҫәктәре атамалары): *исем* – *исем*, *сифат* – *сифат*, *һан* – *һан*, *алмаш* – *алмаш*, *рәүеш* – *рәүеш*, *хәбәр* – *хәбәр*, *хәл* – *хәл*.

## *Исемдәрҙең фонологик юл менән яһалышы*

Исемдәрҙең фонологик юл менән яһалышы башҡорт телендә түбәндәге ысулдар аша башҡарыла:

1) фонемаларҙың сиратлашыуы:

а) һуҙынҡы фонемаларҙың күсеше:

[а] – [ы]: *һан* (кәүҙә өлөшө) – *һын* (кәүҙә, буй);

[е] – [и]: *сере-* (боҙол-, тарҡал-) – *сир* (боҙолған, серегән ер; ауырыу);

[е] – [ө]: *серек* (боҙолған, тарҡалған) – *сөрөк* (ныҡ серегән ағас онтағы);

[и] – [ә]: *нимә* (һорау һүҙе) – *нәмә* (әйбер, предмет);

б) тартынҡы фонемаларҙың күсеше:

[р ] – [ҙ]: *күр-* – *күҙ*; *сирәм* – *сиҙәм*; *ҡаран* – *ҡаҙан*;

[ғ] – [й]: *ағыш – айыш;*

[ҙ] – [й]: *ҡаҙау – ҡа[йа]у; ҡоҙоҡ – ҡойо;*

[с] – [һ]: *сыу – һыу; сөйәл – һөйәл;*

[т] – [с]: *бөртөк – бөрсөк;*

в) һуҙынҡы һәм тартынҡы фонемаларҙың бергә күсеше:

[ейе] – [и]: *тейен – тин;*

[һ, ғ, ҙ] – [с, й, р]: *һағыҙ (< сағыҙ) – сайыр;*

[к, р] – [г, ҙ]: *үкер – үгеҙ;*

2) һүҙҙең тотош нәҙегәйеүе (палатализация): *бағыр (< бауыр) – бәгер, ҡабыҡ – кәбәк, ҡайны – ҡәйнә, оро – өрө, суҡыш – сүкеш, сайыр – сәйер;*

3) айырым фонемаларҙың төшөп ҡалыуы:

а) һүҙ башында: *ғаләм – әләм, ғазап – аҙап, ғәмәл – әмәл, хисап – иҫәп;*

б) һүҙ уртаһында: *мәғәнә – мәне, Тәңре – тәре.*

### *Исемдәрҙең морфематик юл менән яһалышы*

Хәҙерге башҡорт телендә исемдәрҙең морфематик юл менән яһалышында аффикслашыу, нигеҙҙәр ҡушылыу, нигеҙҙәр ишләшеү һәм ҡабатланыу ысулдары ҡулланыла.

**1. Аффикслашыу**

**1) исемдәр нигеҙендә:**

***-лыҡ/-лек, - лоҡ/-лөк*** аффиксы:

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән нәмәләр күп булған урын мәғәнәһендәге: *таулыҡ, йүкәлек, боҙлоҡ;*

эш башҡарыу йәки нимәнелер һаҡлау урыны мәғәнәһендәге: *бесәнлек, тимерлек, утынлыҡ, көллөк;*

аҙыҡ-түлек атамалары: *ашамлыҡ, эсемлек, ҡымыҙлыҡ, тоҙлоҡ;*

кейем-һалымға бәйле атамалар: *башлыҡ, биллек;*

төрлө ҡорамал һәм ҡулайламалар: *ауыҙлыҡ, күҙлек, ситлек;*

социаль тормошҡа бәйле абстракт мәғәнәләге: *атайлыҡ, балалыҡ, әсәлек, кешелек;*

һөнәр, эш-шөғөлгә бәйле абстракт атамалар: *малсылыҡ, сөгөлдөрсөлөк, уҡытыусылыҡ.*

***-сы/-се, -со/-сө*** аффиксы:

шәхес атамаһы (эш башҡарыусы) мәғәнәһенең төрлө төҫмөрҙәре:

һөнәре, кәсеп-шөғөлө буйынса: *малсы, балыҡсы, тимерсе, игенсе;*

шәхестең характер һыҙаттары буйынса: *алдаҡсы, енәйәтсе, боласы;*

ижтимағи-сәйәси мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы: *ватансы, мәғрифәтсе, милләтсе;*

***-даш-/-дәш, -ҙаш/-ҙәш, -таш/-тәш, -лаш/-ләш*** аффиксы:

бер урынға, дәүергә, уртаҡ уй-фекергә бәйле шәхестәрҙең атамалары: *ауылдаш, замандаш, серҙәш, ҡорҙаш, яҡташ;*

**2) сифаттар нигеҙендә:**

***-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк*** аффиксы:

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән билдәгә бәйле ысынбарлыҡтағы хәл-торошто, шәхестең характер һыҙаттарын белдереүсе абстракт мәғәнәләге исемдәр: *бөйөклөк, дөрөҫлөк, яуаплылыҡ, әҙәплелек, йүнһеҙлек, шатлыҡ, ғәриплек;*

***-сылыҡ/-селек*** аффиксы:

абстракт мәғәнәләге исемдәр: *арзансылыҡ, ҡыйбатсылыҡ;*

***-са/-сә*** аффиксы:

конкрет мәғәнәле предмет атамалары: *йәшелсә, ҡыҙылса, аласа;*

**3) һандар нигеҙендә:**

***-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк*** аффиксы:

аҡса берәмектәре атамалары: *берлек, өслөк, унлыҡ, йөҙлөк, меңлек;*

**4) алмаштар нигеҙендә:**

***-лыҡ/-лек*** аффиксы:

абстракт мәғәнәләге исемдәр: *кемлек, нилек, ҡайҙалыҡ, күпмелек;*

**5) ҡылымдар нигеҙендә:**

***-ғын/-ген, -ғон/-гөн, -ҡын/-кен, -ҡон/-көн*** аффиксы:

процестың атамаһын, урынын, субъектын һәм объектын белдергән исемдәр: *ҡыуғын, осҡон, тотҡон, һөргөн, янғын;*

***-н, -ын/-ен, -он/-өн*** аффиксы:

процестың һөҙөмтәһен белдергән исемдәр: *иген, ҡойон, тибен, төйөн;*

***-ҡ, -ыҡ/-ек, -оҡ/-өк*** аффиксы:

процестың һөҙөмтәһен белдереүсе исемдәр: *алдаҡ, бойороҡ, ҡатыҡ, китек, төкөрөк;*

***-ымта/-емтә, -омта/-өмтә*** аффиксы:

процестың һөҙөмтәһен белдереүсе исемдәр: *барымта, һығымта, элемтә, һөҙөмтә;*

***-ынты/-енте, -онто/-өнтө*** аффиксы: *ҡырынты, киҫенте, һөрөнтө;*

процесс һөҙөмтәһе, эш ҡоралы, көнкүреш әйберҙәре, аҙыҡ-түлек атамалары:

***-ғаҡ/-гәк, -ҡаҡ/-кәк*** аффиксы: *батҡаҡ, йомғаҡ; бешкәк, ишкәк, ырғаҡ;*

***-маҡ/-мәк*** аффиксы: *һуҡмаҡ, уймаҡ, әлмәк; икмәк, ҡоймаҡ;*

***-(у)ыҡ/-(ү)ек*** аффиксы: *гөрләүек, шарлауыҡ;*

***-ма/-мә*** аффиксы: *ашлама, баҫма, бүлмә, иҙмә, иретмә; ҡуллама, һалма, һөҙмә, ярма;*

***-ғыс/-гес, -ғос/-гөс, -ҡыс/-кес, -ҡос/-көс*** аффиксы: *асҡыс, баҫҡыс, сәскес, элгес, төйгөс;*

***-ҡы/-ке, -ҡо/-кө, -ғы/-ге, -ғо/-гө*** аффиксы: *бысҡы, кирге, ҡырҡҡы, һоҫҡо, һөҙгө;*

***-ҡ/-к, -аҡ/-әк*** аффиксы: *бысаҡ, иләк, терәк, ураҡ;*

төрлө шәхес, зат атамалары:

***-ҡ/-к*** аффиксы: *ләпелдәк, тызылдаҡ, шарҡылдаҡ;*

процестың объектын белдереүсе исемдәр:

***-(у)ыс/-(ү)ес*** аффиксы: *болғауыс, елпеүес, һәрмәүес;*

процестың һөҙөмтәһен, күләмен, субъектын һәм объектын белдереүсе исемдәр:

***-м, -ым/-ем, -ом/-өм*** аффиксы: *ағым, баҫым, йәйем, өйөм, семтем, телем;*

процесҡа бәйле хис-тойғо атамалары:

***-ыс/-ес, -ос/-өс*** аффиксы: *йыуаныс, ҡыуаныс, үтенес, һөйөнөс.*

**6) рәүештәр нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙгә бәйле абстракт мәғәнәле исемдәр:

***-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк*** аффиксы: *алыҫлыҡ, күплек, тиҙлек, юғарылыҡ;*

***-сылыҡ/-селек*** аффиксы: *аҙсылыҡ, күпселек, кәмселек, түбәнселек.*

**7) модаль һүҙҙәр нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙгә бәйле абстракт мәғәнәле исемдәр:

***-лыҡ/-лек*** аффиксы: *барлыҡ, юҡлыҡ, кәрәклек, мөмкинлек, тейешлек; мөмкин түгеллек, кәрәк түгеллек.*

**8) оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән ауаздарға бәйле хайуан һәм ҡошҡорт атамалары:

***-а/-ә*** аффиксы: *баҡа, ҡарға, сәүкә;*

***-ай, -ей, -әк*** аффикстары: *тартай, сепей, бөжәк.*

**2. Префикслашыу**

**Исемдәр нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙ белдергән нәмәнең киреһен аңлатыусы исемдәр:

а) фарсы теленән үҙләштерелгән префикстар:

***би-:*** *бимаза;*

***бәд-:*** *бәдбәхет, бәддоға;*

б) Көнбайыш Европа телдәренән килеп ингән префикстар һәм префиксоидтар:

***анти-:*** *антидонъя, антийесем;*

***контр-:*** *контрхәрәкәт, контрһөжүм;*

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән төшөнсәләрҙең норманан артыҡ булыуын аңлатыусы исемдәр:

Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән префикстар:

***гипер-**: гиперматдә, гипертауыш, гиперъяҫылыҡ, гиперйөҙ;*

***инфра-**: инфратауыш;*

***ультра-**: ультратауыш;*

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән төшөнсәләрҙең иң ҙур йәки иң бәләкәй күләмдә булыуын белдергән атамалар (Көнбайыш Европа телдәренән килеп ингән префикстар):

а) ***макро-**: макродонъя, макроиҡтисад;*

б) ***микро-**: микродонъя, микрокиҫәксә.*

**3. Суффикслашыу**

**Исемдәр нигеҙендә:**

шәхес атамаһының төрлө мәғәнә төҫмөрҙәрен белдереүсе исемдәр:

фарсы һәм ғәрәп телдәренән ингән суффикстар:

***-гәр, -кәр**: сауҙагәр, хеҙмәткәр, эшмәкәр;*

***-гир**: ҡәләмгир, яугир, йыһангир;*

***-дар-, -дәр, -ҙар**: Ғилемдар, Гөлдәр, Айҙар; хөкөмдар;*

***-ман/-мән**: һөнәрмән, эҙәрмән;*

рус теле ҡалыбы менән яһалған башҡорт фамилиялары:

рус теленән алынған суффикстар:

***-ов(а), -ев(а), -ин(а), -ский(ая)**: Хәлитов(а), Ҡотлобаев(а), Амангилдин(а), Мортазин(а)-Иманский(ая);*

ил һәм дәүләт атамалары:

фарсы теленән ингән ***-стан*** суффиксоиды: *Башҡортостан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан;*

берәй эш-хәлде, процесты башҡарыу урыны:

фарсы теленән алынған ***-хана*** суффиксоиды: *ашхана, китапхана, дарыухана, шифахана;*

яҙма документтар, төрлө белешмәләр атамалары:

фарсы теленән үҙләштерелгән ***-намә*** суффиксоиды: *йондоҙнамә, тарихнамә, сәйәхәтнамә, шикәйәтнамә.*

**4. Префикслашыу менән суффикслашыу**

Исем һүҙ төркөмөнә ҡараған яһаусы нигеҙҙәргә бәйле ижтимағи-сәйәси һәм фәнни йүнәлештәрҙе, шул йүнәлештәрҙе яҡлаусы шәхес атамаларын белдереүсе исемдәр:

***пан-...-сы**: панисламсы, пантөрксө, панболғарсы;*

***пан-...-сы-лыҡ**: панисламсылыҡ, пантөрксөлөк, пантурансылыҡ.*

**5. Нигеҙҙәр ҡушылыу**

Нигеҙҙәр ҡушылыу ысулы менән берекмә ҡушма исемдәр яһала; был осраҡта ҡушылыусы нигеҙҙәрҙең төп, йәғни эйәртеүсе, компоненты булып исем сығыш яһаһа, эйәреүсе компонент ролендә башҡа исемдәр, шулай уҡ сифаттар, һандар, алмаштар, ҡылым формалары һәм рәүештәр ҡулланыла:

1) **«исем + исем»**: ай, *ҡолаҡ – айғолаҡ; һабан, туй – һабантуй; йылан, балыҡ – йыланбалыҡ; һын, таш – һынташ;*

2) **«сифат + исем»**:

туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек атамалары: *ҡартатай, ҡартәсәй, олатай, өләсәй;*

кеше исемдәре, хайуан, ҡош-ҡорт ҡушаматтары: *Аҡйегет, Баййегет, Аҡсәсәк, Ҡарасәс; Аҡтырнаҡ, Ҡарағолаҡ;*

ер-һыу атамалары: *Аҡкүл, Ҡыҙылъяр, Ағиҙел, Яңауыл, Ҡуштау;*

төрлө өлкәләргә ҡараған терминдар (халыҡтар, ҡоштар, балыҡтар, үҫемлектәр, минералдар һ. б. атамалары): *ҡарағалпаҡ, ҡарасәй; аҡҡош, ҡарағош, ҡыҙылғанат, алабуға; ҡарағат, аҡтамыр; терегөмөш, ағалтын*;

3) **«һан + исем»**:

төрлө өлкәгә ҡараған терминдар (этник берәмектәр, хайуандар, ҡош-ҡорт, үҫемлектәр, геометрик фигуралар һ. б. атамалары): *етырыу, бишул; һигеҙаяҡ, ҡырҡаяҡ; ҡырҡбыуын, меңьяпраҡ; өсмөйөш, дүртмөйөш;*

4) **«алмаш + исем»**:

ижтимағи-сәйәси һәм юридик терминдар: *үҙбилдәләнеш, үҙҡиммәт, үҙаң, үҙидара;*

5) **«ҡылым+ исем»**:

төрлө ҡылым формалары: *тораташ, Янғантау, әсеүташ;*

*-ар/-әр* аффикслы боронғо сифат ҡылым формалары:

төрлө шәхес атамалары: *башкиҫәр, алыпһатар, урынбаҫар, елғыуар, эшҡыуар;*

әкиәт батырҙары исемдәре: *Күлуртлар, Уғатар;*

үҫемлек, бөжәк атамалары: *һыуһөйәр, һыугиҙәр;*

6) **«рәүеш+ исем»**:

математик терминдар: *күпбыуын, күпмөйөш, күпҡыр;*

урынды белдергән атамалар: *аръяҡ, бирьяҡ, артъяҡ, өҫъяҡ.*

**6. Нигеҙҙәр ишләшеү**

Парлы исемдәр түбәндәге лексик-семантик бәйләнештә булған яһаусы нигеҙҙәр ишләшеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә:

1) үҙ-ара синонимик мөнәсәбәттәрҙә булған нигеҙҙәр: *аң-белем, ғөрөф-ғәҙәт, бәлә-ҡаза;*

2) антонимик мөнәсәбәтле нигеҙҙәр: *ағай-эне, алыш-биреш; килем-китем;*

3) бер лексик-семантик төркөмгә ҡараған нигеҙҙәр: *бит-ҡул, аяҡ-ҡул, йорт-ҡура, китап-дәфтәр;*

4) тәүге нигеҙҙең иҫкергән варианты: *бала-саға, һауыт-һаба, аҙыҡ-түлек, мал-тыуар;*

5) тәүге нигеҙгә ниндәйҙер оҡшашлыҡ мәғәнәһен биреүсе «фәлән, маҙар, ғәләмәт, ни, ҡара» һүҙҙәре: *айыу-фәлән, бүре-маҙар, эт-ғәләмәт, ат-ҡара, кейеме-ние.*

**7. Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Ҡабатлаулы исемдәр яһаусы нигеҙҙәрҙең түбәндәге төрҙәре ҡабатланыуы аша барлыҡҡа килә:

1) яһаусы нигеҙҙең морфонологик варианттары: *әбей-һәбей, таш-маш, эт-мет;*

2) ғәрәп теленән ингән исемдәрҙең айырым грамматик формалары:

а) исемдәрҙең берлек һәм күплек формалары: *ғалим-ғөләмә, фәҡир-фоҡара, хәл-әхүәл;*

б) енес категорияһы формалары: *табип-табибә; мөғәллим-мөғәллимә, мәрхүм-мәрхүмә.*

## *Исемдәрҙең һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән яһалышы*

Һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән барлыҡҡа килгән исемдәрҙе ике төркөмгә бүлеп йөрөтәләр: 1) график ҡыҫҡартмалар һәм 2) лексик ҡыҫҡартмалар.

**График ҡыҫҡартмаларға** ҡараған исемдәрҙең барлыҡҡа килеүендә ошондай саралар ҡулланыла:

1) һүҙҙәрҙе тәүге хәрефенә тиклем ҡыҫҡартыу: *г. (гәзит), һ. (һум), й. (йылға), к.-к. б. (көньяҡ-көнбайыш);*

2) һүҙҙәрҙең тәүге өлөштәрен алып ҡыҫҡартыу: *акад. (академик), доц. (доцент), мин. (минут);*

3) һүҙҙең тәүге һәм аҙаҡҡы хәрефтәрен йә өлөштәрен алып ҡыҫҡартыу:

*з-д (завод), ун-т (университет);*

**Лексик ҡыҫҡартмаларға** ҡараған исемдәрҙең ике төрө билдәле: 1) стилистик ҡыҫҡартмалар һәм 2) ҡыҫҡартылған ҡушма исемдәр.

Стилистик маҡсаттарҙа барлыҡҡа килгән ҡыҫҡартма исемдәрҙең түбәндәге төркөмсәләре осрай:

1) кеше исемдәре: *Хөрмөй < Хөрмәтулла, Гөлкәй < Гөльямал, Алма(ҡай) < Алмабикә;*

2) ер-һыу атамалары: *Магнит (ҡала) < Магнитогорск, Рәсәй < Рәсәй Федерацияһы, Америка (дәүләт) < Америка Ҡушма Штаттары;*

3) ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар, ваҡытлы матбуғат, төрлө предприятие һәм учреждениелар исемдәре: *Гагарин паркы < Юрий Гагарин исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркы; «Энциклопедия» (нәшриәт) < «Башҡортостан энциклопедияһы» нәшриәте;*

4) төрлө техника, эш ҡоралдары һәм көнкүреш әйберҙәре атамалары: *видео < видеомагнитофон, «Волга»(автомобиль) < «Волга» маркалы автомобиль, велик < велосипед.*

Ҡыҫҡартылған ҡушма исемдәр түбәндәге саралар ярҙамында яһала:

1) һүҙҙәрҙең тәүге фонемаларын ҡушыу юлы менән: *БАМ < Байҡал-Амур магистрале;*

2) һүҙҙәрҙең тәүге хәрефтәрен ҡушыуҙан: *БДПУ* [*бэ-дэ-пэ-у*] < *М. Аҡмулла исемендәге Башҡортостан дәүләт педагогия университеты;*

3) һүҙҙәрҙең тәүге өлөштәрен ҡушыуҙан: *физмат < физика-математика факультеты, раймаг < район магазины;*

4) беренсе һүҙҙең тәүге өлөшө менән икенсе һүҙҙең ҡушылыуы аша: *телетапшырыу < телевизион тапшырыу, драмтүңәрәк < драматик түңәрәк.*

## *Исемдәрҙең лексик-грамматик юл менән яһалышы (исемләшеү)*

**Сифаттарҙың исемләшеүе** һөҙөмтәһендә түбәндәге мәғәнәләрҙе белдереүсе исемдәр барлыҡҡа килә:

1) предметтарҙың төҫтәренә бәйле конкрет төшөнсә атамалары:

| сифаттар | исемдәр |
|---|---|
| *аҡ* – | *аҡ* (һөт продукттары; күҙ ауырыуы) |
| *ҡара* – | *ҡара* (яҙыу ҡараһы) |
| *күк* – | *күк* (күк йөҙө) |

2) организмдың физик, психик торошона, характер һыҙаттарына бәйле шәхес атамалары:

| сифаттар | исемдәр |
|---|---|
| *батыр* – | *батыр* (баһадир, герой) |
| *иҫәр* – | *иҫәр* (алйот, ахмаҡ) |
| *илаҡ* – | *илаҡ* (илап барыусы кеше) |
| *ярлы* – | *ярлы* (ярлы кеше) |

3) тәбиғәт торошона бәйле атамалар:

| сифаттар | исемдәр |
|---|---|
| *йылы* – | *йылы* (йылы урын, йылылыҡ) |
| *һалҡын* – | *һалҡын* (һалҡын урын, һалҡынлыҡ) |
| *яҡты* – | *яҡты* (яҡты урын, яҡтылыҡ) |
| *ҡараңғы* – | *ҡараңғы* (ҡараңғы урын, ҡараңғы ваҡыт, ҡараңғылыҡ) |

4) кеше исемдәре (антропонимдар):

| сифаттар | исемдәр |
|---|---|
| *гүзәл* – | *Гүзәл* |
| *зифа* – | *Зифа* |
| *иркә* – | *Иркә* |
| *алһыу* – | *Алһыу* |

**Һандарҙың исемләшеүе** аша ҡайһы бер төшөнсә атамалары барлыҡҡа килә ала:

1) башҡорт ырыуҙары һәм ҡәбиләләре атамалары (этнонимдар):

| төп һандар (күплек формаһында) | исемдәр |
|---|---|
| *меңдәр* – | *меңдәр* |
| *алтауҙар* – | *алтауҙар* |
| *ундар* – | *ундар* |
| *ҡырҡтар* – | *ҡырҡтар* |

2) кулинария өлкәһенә ҡараған териндар:

| тәртип һандары | исемдәр |
|---|---|
| *беренсе* – | *беренсе* (ашамлыҡ, блюдо төрө) |
| *икенсе* – | *икенсе* (ашамлыҡ, блюдо төрө) |
| *өсөнсө* – | *өсөнсө* (ашамлыҡ, блюдо төрө) |

**Затһыҙ ҡылым формалары** исемләшеп йөрөйҙәр һәм түбәндәге мәғәнәләрҙә ҡулланылалар:

1) төрлө һөнәр, шөғөл атамалары:

***-(ы)усы/-(е)үсе*** аффикслы хәҙерге заман сифат ҡылымдар: *буяусы, күтәреүсе, төҙөүсе;*

2) процестың барышы, үҙенсәлеге, һөҙөмтәһе атамалары:

***-маҡ/-мәк*** аффикслы боронғо исем ҡылымдар: *табышмаҡ, һанашмаҡ, уймаҡ, уҫмаҡ;*

***-(ы)ш/-(е)ш*** аффикслы боронғо исем ҡылымдар: *алыш, йөрөш, ҡыйралыш, торош, һуғыш;*

***-(ы)у/-(е)ү*** аффикслы исем ҡылымдар: *күтәү, уҡыу, һыулау, һайлау, яҙыу*;

3) аҙыҡ-түлек атамалары:

*-маҡ/-мәк* аффикслы исем ҡылымдар: *икмәк, ҡоймаҡ, ҡаймаҡ*;

*-(ы)рға/-(е)ргә* аффикслы инфинитив: *ашарға* (=ашамлыҡ) бөттө, *эсергә* (=эсемлек) алырға кәрәк, *тартырға* (=тәмәке) юҡ;

4) күрһәтелгән процесҡа бәйле конкрет мәғәнәләге исемдәр (аҙыҡ-түлек, көнкүреш әйберҙәре, ҡорамалдар):

*-ған/-гән* аффикслы үткән заман сифат ҡылымдар: *ҡапҡан, ҡорған* (=ҡорма), *ойотҡан* (=ҡатыҡ);

5) күрһәтелгән процесҡа бәйле абстракт мәғәнәле исемдәр:

*-асаҡ/-әсәк* аффикслы киләсәк заман сифат ҡылым: *киләсәк, күрәсәк*;

*-аһы/-әһе* аффикслы киләсәк заман сифат ҡылым: *алаһы, бирәһе, күрәһе.*

## Экспрессив-эмоциональ һүҙ төркөмдәренең исемләшеүе:

1) «кәрәк, тейеш, бар, юҡ» модаль һүҙҙәре исемләшә һәм абстракт мәғәнәләге исемдәр функцияһында ҡулланыла; был осраҡта улар һан, килеш, эйәлек, хәбәрлек категориялары менән үҙгәрә ала:

| модаль һүҙҙәр | исемдәр |
|---|---|
| *кәрәк* – | *кәрәк* (кәрәк нәмә): *Кәрәктәрен айырып алығыҙ.* |
| *тейеш* – | *тейеш* (тейеш нәмә): *Тейеше ошо. Кешегә тейештәренә теймәгеҙ.* |
| *бар* – | *бар* (булған нәмә, бар нәмә): *Барына риза бул.* |
| *юҡ* – | *юҡ* (юҡ нәмә, булмаған нәмә): *Юғын таптырма.* |

2) ҡайһы бер ымлыҡтар исемләшеп йөрөй:

| ымлыҡтар | исемдәр |
|---|---|
| *аһ* – | *аһ* (ҡайғы, хәсрәт, ғазап) |
| *ура* – | *ура* (яуға өндәүҙе йәки шатлыҡты, хуплауҙы белдереүсе ауаз): *Ура яңғыраны.* |

3) саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәренең бер төркөмө, балалар телмәрендә исемләшеп, мал-тыуар, ҡош-ҡорт атамалары булып йөрөй:

| саҡырыу һүҙҙәре | исемдәр |
|---|---|
| *һәү-һәү, һәукәш* – | *һәү-һәү, һәукәш* (һыйыр) |
| *на-на* – | *на-на* (ат) |

| | |
|---|---|
| *бес-бес* – | *бес-бес* (бесәй) |
| *сип-сип* – | *сип-сип* (себеш) |
| *типей-типей* – | *типей-типей* (тауыҡ) |

4) оҡшатыу һүҙҙәренең исемләшеү осраҡтары:

өноҡшаш һүҙҙәрҙең бер төркөмө исемләшеп, конкрет предмет атамалары булып йөрөй:

| өноҡшаш һүҙҙәр | исемдәр |
|---|---|
| *бытбылдыҡ* – | *бытбылдыҡ* (ҡош исеме) |
| *дөмбөр* – | *дөмбөр* (таяҡ) |
| *кәкүк* – | *кәкүк* (ҡош исеме) |
| *саң* – | *саң* (ҡыңғырау) |
| *сың* – | *сың* (тимер йә быяла бәрелеүе аша сыҡҡан тауыш атамаһы) |

5) ҡабатланып килеүсе өноҡшаш һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәре балалар телмәрендә мал-тыуар, ҡош-ҡорт, төрлө ҡорамалдар атамалары булып йөрөй:

| өноҡшаш һүҙҙәр | исемдәр |
|---|---|
| *уау-уау* йәки *һау-һау* – | *уау-уау, һау-һау* (эт) |
| *мыяу-мыяу* – | *мыяу-мыяу* (бесәй) |
| *ҡаҡ-ҡаҡ* – | *ҡаҡ-ҡаҡ* (ҡаҙ) |
| *түт-түт* – | *түт-түт* (машина) |
| *тох-тох* – | *тох-тох* (мылтыҡ) |

### *Исемдәрҙең лексик-синтаксик юл менән яһалышы (лексемалашыу)*

1. **Һүҙбәйләнештәрҙең лексемалашыуы.** Төп компоненты исемдән торған һүҙбәйләнештәр нигеҙендә яһалған теркәлмә ҡушма исемдәр, ҡағиҙә булараҡ, төрлө өлкәләргә ҡараған махсус атамаларҙы белдереп йөрөй: а) *ел тирмәне, һыу тирмәне, электр тирмәне;* б) *алтын сәғәт, таш келәт, ағас һарай;* в) *ҡорос иретеүсе, иретеп йәбештереүсе, сым һуҙыусы;* г) *Башҡортостан Республикаһы, Сибай дәүләт драма театры;* ғ) *Етегән йондоҙ, Өлкәр йондоҙ, Ҡош юлы;* д) *тел ғилеменә инеш, форма яһалыш, һүҙ үҙгәреш*; ҙ) *Аҡ диңгеҙ, Ҡара диңгеҙ, Ҡыҙыл диңгеҙ, Һары диңгеҙ.*

2. **Һөйләмдәрҙең лексемалашыуы.** Эйәһе исемдән, ә хәбәрҙәре сифаттан, ҡылым формаларынан килгән һөйләмдәрҙең исемдәргә күсеүе аша антропонимдар, топонимдар, зоонимдар һәм башҡа атамалар яһала: а) *Илшат, Айшат, Илбай, Таңһылыу, Гөлзифа, Ишбулды;* б) *Яуғасҡан* (тау), *Этимгән* (йылға), *Таңһыҙар* (ауыл); в) *биле ала – билала* (ҡош), *таҙы ҡара – таҙғара* (ҡош), *һырты аҡ – һыртаҡ* (мал).

## Сифаттарҙың яһалашы

### *Сифаттарҙың лексик-семантик юл менән яһалышы*

*дауыллы* (көн) – *дауыллы* (шаулы, тынғыһыҙ, ығы-зығылы): *дауыллы ваҡиғалар;*

*ишле* (парлы) – *ишле* (күп һанлы, күп балалы): *ишле ғаилә;*

*ерле* (ере булған) – *ерле* (урындағы, был ерҙә борондан йәшәгән): *ерле халыҡ;*

*емешле* (емеше булған) – *емешле* (нәтижәле, һөҙөмтәле, уңышлы): *ғалимдың емешле эшмәкәрлеге.*

### *Сифаттарҙың фонологик юл менән яһалышы*

Сифаттарҙың фонологик юл менән яһалышы айырым исемдәр, сифаттар, ҡылымдар һәм рәүештәр нигеҙендә түбәндәге ысулдар аша башҡарыла:

1) фонемаларҙың сиратлашыуы:

[е] – [ө]: *бейек* (юғары) – *бөйөк* (әһәмиәте ҙур, оло);

[сиф] – [һып]: *сифатлы* (сифаты яҡшы) – *һыпатлы* (матур төҫ-ҡиәфәтле);

*сифатһыҙ* (сифаты түбән) – *һыпатһыҙ* (йәмһеҙ, килбәтһеҙ);

[р] – [ҙ]: *һимер-* (ҡылым) – *һимеҙ* (сифат);

[м] – [н]: *тамам* (рәүеш) – *таман* (сифат).

2) палатализация күренештәре:

а) һүҙҙең тамам нәҙегәйеүе:

*һалмаҡ* (яй яңғырашлы, әкрен хәрәкәтле) – *һәлмәк* (ауыр ғына, тос);

б) рус теленән үҙләштерелгән [*л'*] фонемаһына бөткән бер төркөм сифаттарҙың *(-ль < -льный)* уларҙы яһаусы исем нигеҙҙәрендәге [*л*] фонемаһы менән мөнәсәбәттәшлеге:

*минерал* – *минераль* (ашлама);

*профессионал* – *профессиональ* (фотограф);

*федерал* – *федераль* (агентлыҡ);

*финал* – *финаль* (ярыштар);

3) айырым фонемаларҙың төшөп ҡалыуы:

*хәҙер* (рәүеш) – *әҙер* (сифат);

*остаз* (исем) – *оҫта* (сифат);

4) баҫымдың урыны үҙгәреү (рус теленән үҙләштерелгән бер төркөм *-ик* суффикслы тамырҙаш исемдәр һәм сифаттар *(-ик < -ический)* бер-береһенән баҫым урындары менән айырыла):

акаде́мия: *акаде́м-ик* (исем); *академ-и́к баҫма* (сифат);

сати́ра: *сати́р-ик* (исем); *сатир-и́к журнал* (сифат);
тео́рия: *теор-е́т-ик* (исем); *теор-ет-и́к проблема* (сифат).

### *Сифаттарҙың морфематик юл менән яһалышы*

**1. Аффикслашыу:**

**1) исемдәр нигеҙендә:**

***-лы/-ле, -ло/-лө*** аффиксы:

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән нәмәгә эйә булыу мәғәнәһендәге: *йәнле, көслө, һыулы, тоҙло;*

***-һыҙ/-һеҙ, -һоҙ/-һөҙ*** аффиксы:

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән нәмәнең юҡлығын аңлатҡан: *ҡарһыҙ, елһеҙ, төҫһөҙ, болотһоҙ;*

***-лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк*** аффиксы:

ваҡыт үлсәмен белдереүсе: *айлыҡ* (эш), *аҙналыҡ* (ял), *ҡышлыҡ* (бесән);

предметтарҙың тәғәйенләнешен белдереүсе: *өйлөк* (ағас), *быймалыҡ* (йөн), *күлдәклек* (ситса);

***-ғы/-ге..., -ҡы/-ке ...*** аффикстары:

урынға, ваҡытҡа ҡараған билдәләрҙе аңлатҡан: *аҫҡы, тышҡы, ситке; ауыл-да-ғы, ҡала-ла-ғы; ҡышҡы, төнгө;*

***-сан/-сән, -сыл/-сел..., -һыу/-һеү..., -с*** аффикстары:

предметтарҙың үҙенсәлектәрен, айырым шәхестәрҙең характер һыҙаттарын белдереүсе: *уйсан, халыҡсан, хәрәкәтсән; ватансыл, милләтсел, кенәсел; моңһоу, көлһыу; атас, инәс;*

**2) сифаттар нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән билдәгә эйә булыу мәғәнәһендәге: ***-лы/-ле/-ло/-лө*** аффиксы: *аҡлы* (ситса), *йәшелле* (балаҫ), *күкле* (еп);

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән билдә менән характерланыусы мәғәнәһендәге:

***-сыл/-сел...*** аффиксы: *һаҡсыл* (хужа), *ваҡсыл* (әҙәм), *йыйнаҡсыл* (ҡатын);

**3) һандар нигеҙендә:**

предметтарҙың формаһына ҡағылышлы:

***-кел/-көл*** аффиксы: *өскөл* (хат), *дүрткел* (участка);

берәй системалағы урынға мөнәсәбәтле:

***-(ы)нсыл/-(е)нсел*** аффиксы: *беренсел* (мәғәнә), *икенсел* (осор), *өсөнсөл* (дәүер);

**4) алмаштар нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән нәмәгә (зат, урын, ваҡыт) ҡараған мәғәнәһендәге сифаттар зат, күрһәтеү, һорау алмаштарының урын-ваҡыт формаларына ***-ғы/-ге...*** аффиксы ҡушылып яһала:

а) *миндәге* (китап), *беҙҙәге* (ҡунаҡ), *һиндәге* (дәфтәр); б) *бындағы* (тәбиғәт), *тегендәге* (кешеләр); в) *кемдәге* (телефон), *ҡайҙағы* (баҡса), *ҡасанғы* (ваҡиға);

5) **ҡылымдар нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән хәл, эш-хәрәкәткә һәләтле мәғәнәһендәге:

***-ғыс/-гес*** аффиксы: *һоҡланғыс* (хәл), *ялҡытҡыс* (эш);

***-малы/-мәле*** аффиксы: *аҫмалы* (лампа), *үрмәле* (гөл), *һыҡмалы* (крем);

***-ғыр/-гер*** аффиксы: *алғыр* (кеше), *отҡор* (бала), *үткер* (балта);

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән процесс өсөн тәғәйенләнгән мәғәнәһендәге:

***-ғы/-ге*** аффиксы: *менге* (ат), *екке* (эт), *һоҫҡо* (көрәк);

***-лыҡ/-лек*** аффиксы: *һатлыҡ* (мал);

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән хәл, эш-хәрәкәткә әүәҫ, бирелеп барыусан мәғәнәһендәге:

***-сан/-сән*** аффиксы: *оялсан* (бала), *тыңлаусан* (эшсе), *көнләшеүсән* (кеше);

***-ғаҡ/-гәк*** аффиксы: *һөҙгәк* (һыйыр), *тибешкәк* (ат), *тайғаҡ* (юл);

***-сыҡ/-сек*** аффиксы: *болғансыҡ* (һыу), *һөйләнсек* (кеше), *ҡылансыҡ* (ҡыҙ);

яһаусы нигеҙгә бәйле характер һыҙаты, эш һөҙөмтәһе, күрһәтелгән процесты башҡара алырлыҡ мәғәнәһендәге:

***-(ы)нҡы/-(е)нке*** аффиксы: *йәйенке* (мөйөш), *күтәренке* (тауыш), *һуҙынҡы* (өн);

***-(ы)ҡ/-(е)к*** аффиксы: *илаҡ* (бала), *китек* (һауыт), *тоноҡ* (һыу);

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән процесс билдәһе йәки эш-хәрәкәт һөҙөмтәһе мәғәнәһендәге:

***-ма/-мә*** аффиксы: *өҫтәлмә* (мәғлүмәт), *сәсмә* (әҫәр), *яһалма* (күн);

***-аҡ/-әк*** аффиксы: *баҡыраҡ* (мал), *ҡурҡаҡ* (кеше), *ултыраҡ* (тормош);

***-ҡа/-кә*** аффиксы: *бөҫкә* (һауыт), *ҡыҫҡа* (һүҙ);

***-ыҙ/-еҙ*** аффиксы: *етеҙ* (хәрәкәт), *тығыҙ* (ҡар);

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән процесс менән характерланыусы мәғәнәһендәге:

***-ын/-ен*** аффиксы: *ағын* (һыу), *йәшерен* (ойошма), *һауын* (һыйыр);

***-ғын/-ген*** аффиксы: *аҙғын* (мал), *киҫкен* (хәрәкәт), *талғын* (ел);

***-мтал/-мтәл*** аффиксы: *арымтал* (ат), *өшөмтәл* (кеше);

*-(ы)мһаҡ/-(е)мһәк* аффиксы: *тартымһаҡ* (әҙәм), *йөрөмһәк* (кеше);

*-ғалаҡ/-гәләк* аффиксы: *ҡасҡалаҡ* (мал), *тайғалаҡ* (юл);

*-наҡ/-нәк* аффиксы: *йыйнаҡ* (бүлмә), *тыйнаҡ* (кеше);

*-мыр/-мер* аффиксы: *бөтмөр* (кеше), *һыҡмыр* (хужа);

*-саҡ/-сәк* аффиксы: *тартынсаҡ* (бала), *иренсәк* (кеше);

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән эш-хәрәкәткә килтереүсе йәки хис-тойғо тыуҙырыусы мәғәнәһендәге:

*-(ы)с/-(е)с...* аффиксы: *ашығыс* (ярҙам), *ҡыҙғаныс* (хәл), *тыныс* (кеше), ерәнес (нәмә);

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән процесс һөҙөмтәһенә бәйле билдәне белдереүсе:

*-лы/-ле* аффиксы: *ҡараулы* (бала), *тыңлаулы* (эшсе), *егеүле* (ат);

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән процестан ситтә ҡалған предмет һәм шәхестәргә ҡағылышлы билдәне күрһәтеүсе:

*-һыҙ/-һеҙ* аффиксы: *ҡарауһыҙ* (баҡса), *тыңлауһыҙ* (бала);

**6) рәүештәр нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙҙәргә *-ғы/-ге* аффиксы ҡушылыу һөҙөмтәһендә урын, ваҡыт мөнәсәбәттәрен белдереүсе сифаттар яһала: *баяғы* (ваҡиға), *һуңғы* (рейс), *элекке* (осор), *арғы* (кисеү);

**7) модаль һүҙҙәр нигеҙендә:**

яһаусы нигеҙҙә әйтелгән нәмә менән характерланыусы мәғәнәһендәге сифаттар түбәндәге аффикстар ҡушылып яһала:

*-лы/-ле: кәрәкле* (әйбер), *тейешле* (ваҡыт), *барлы-юҡлы* (нәмә);

*-һыҙ/-һеҙ: кәрәкһеҙ* (нәмә), *тейешһеҙ* (ваҡыт);

*-лыҡ/-лек: ярарлыҡ* (эш), *ярамаҫлыҡ* (хәл);

*-ҙай/- ҙәй: кәрәгерҙәй* (эш), *ярарҙай* (урын);

*-һы: ярайһы* (кимәл);

**8) оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙендә:**

түбәндәге аффикстар ярҙамында яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән өноҡшаш һәм һыноҡшаш һүҙҙәргә бәйле билдәләрҙе белдереүсе сифаттар яһала:

*-аҡ/-әк: өрпәк* (ҡар), *шапаҡ* (ауыҙ);

*-ғыр: ыжғыр* (ел), *ҡыйғыр* (ҡош);

*-ы: һалпы* (ҡолаҡ);

*-ыҡ/-ек: шалбыҡ* (ирен), *сыпыҡ* (күҙ), *ҡыпыҡ* (кеше);

*-ым: ҡылтым* (кеше), *зыйтым* (балыҡ);

*-ыр: һалбыр* (ҡолаҡ), *ялбыр* (ҡойроҡ), *ялтыр* (нәмә).

**2. Префикслашыу (сит телдәрҙән ингән префикстар):**

яһаусы нигеҙҙәр аңлатҡан нәмәнең юҡлығын белдереүсе:

а) *би-: битараф* (мөнәсәбәт), *бихисап* (байлыҡ);

*на-: нахаҡ* (һүҙ), *насар* (уй);

б) *а-: анормаль* (хәл), *асемантик* (морфема);

*дис-: дисгармоник* (яңғыраш);

*ир-: иррациональ* (һандар), *иррегуляр* (ғәскәр);

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән билдәнең киреһен аңлатыусы:

*анти-: антипедагогик* (ҡараш), *антифашистик* (хәрәкәт);

*контр-: контрреволюцион* (көрәш);

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән билдәгә яҡын, унан түбән кимәлдә мәғәнәһендәге:

*инфра-: инфраҡыҙыл* (нурҙар);

*суб-: субмикроскопик* (күҙәнәктәр), *субэкваториаль* (бүлкәт);

яһаусы нигеҙҙә белдерелгән билдәнең норманан артыҡ, иң юғары дәрәжәлә булыуын аңлатҡан:

*архи-: архимөһим* (мәсьәлә), *архиҡурҡыныс* (хәл);

*супер-: супермодалы* (кейем), *суперэластик* (материал);

*ультра-: ультраҡыҫҡа* (тулҡындар), *ультрафиолет* (нурҙар);

яһаусы нигеҙгә бәйле арауыҡ аша хәрәкәт итеүсе мәғәнәһендәге:

*транс-: трансконтиненталь* (самолет), *трансатлантик* (сәйәхәт).

**3. Суффикслашыу**

Яһаусы нигеҙҙә белдерелгән нәмәләргә эйә булыу йәки әүәҫлек мәғәнәһендәге сифаттар фарсы (а) һәм ғәрәп (б) телдәренән үҙләштерелгән суффикстар аша:

а) *-дар/-дәр/-ҙар: телдәр* (бала), *малдар* (хужа), *хәбәрҙар* (кеше);

*-кәр/-ҡәр: фиҙаҡәр* (хеҙмәт), *эшмәкәр* (кеше);

*-хур: балхур* (айыу), *ҡанхур* (дошман), *сәйхур* (әбей);

б) *-и/-ани/-уи/-үи: матди* (ярҙам), *рухани* (көс), *донъяуи* (ҡараш), *тәрбиәүи* (эш);

– яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән нәмәгә ҡараған мәғәнәһендәге сифаттар рус теле аша Көнбайыш Европа телдәренән үҙләштерелгән интернациональ суффикстар:

*-ик: алгебраик* (миҫал), *типик* (характер), *химик* (реакция);

*-ист/-ик: капиталистик* (мөнәсәбәттәр), *идеалистик* (ҡараш);

*-р/-ар/-яр: легендар* (батыр), *фрагментар* (материал).

**4. Нигеҙҙәр ҡушылыу**

1) «исем + ҡылым формалары»: а) *атҡаҙанған* (малсы), *данҡаҙанған* (яугир); б) *елғыуар* (кеше), *һыубаҫар* (туғай);

2) «һан + ҡылым формалары»: *йөҙйәшәр* (әбей), *меңйәшәр* (имән);

3) «сифат + сифат»: а) *аҡбуҙ* (ат), *ҡарағусҡыл* (төҫ); б) *яҡшатлы* (кеше), *яманатлы* (әҙәм);

4) «алмаш + сифат»: *үҙағышлы* (канал), *үҙйөрөшлө* (комбайн), *үҙешмәкәр* (композитор).

**5. Нигеҙҙәр ишләшеү**

Яһаусы нигеҙҙәрҙә күрһәтелгән билдәләрҙең төрләнгән күрһәтеүсе парлы сифаттар түбәндәге лексик-семантик төркөмдәргә ҡараған һүҙҙәрҙең ишләшеүе һөҙөмтәһендә яһала:

синонимик мәғәнәле һүҙҙәр: *елле-дауыллы* (көндәр), *ҡарлы-буранлы* (ҡыш);

антонимик мәғәнәле һүҙҙәр: *асмалы-япмалы* (ҡумта), *эреле-ваҡлы* (алмалар);

бер лексик төркөмгә ҡараған һүҙҙәр: *ала-ҡола* (аттар), *алһыу-зәңгәр* (сәскәләр);

туғанлыҡ-кәрҙәшлек билдәләре буйынса ишләшеүсе сифаттар: *аталы-уллы* (кешеләр), *ағалы-энеле* (егеттәр), *апалы-һеңлеле* (ҡыҙҙар);

айырым исемдәрҙең «ара» һүҙе менән ишләшеп килеүҙәре: *дәүләт-ара* (килешеү), *республика-ара* (конференция).

**6. Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Ҡабатлаулы сифаттарҙың яһалыуы түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

– айырым исемдәрҙең һүҙмә-һүҙ ҡабатланыуы аша: *тимгел-тимгел* (йәшеллек), *юлаҡ-юлаҡ* (тап);

– ҡайһы бер исемдәрҙең морфонологик варианттары ҡабатланыу: *тишек-тошоҡ* (тоҡ), *соҡор-саҡыр* (юл);

– айырым сифаттарҙың морфонологик варианттары ҡабатлана: *китек-митек* (кирбес), *ҡыйыш-мыйыш* (рәшәткә), *һыныҡ-мыныҡ* (таяҡтар).

## *Сифаттарҙың лексик-грамматик юл менән яһалышы (сифатлашыу)*

**Исемдәрҙең сифатлашыуы:**

*буй – буй* (оҙонға һуҙылған; буй йүнәлештә): *буй балаҫ, буй бысҡы;*

*арҡыры(һы) – арҡыры* (буйҙы киҫеп үткән, арҡыры йүнәлештә): *арҡыры урам, арҡыры бысҡы;*

*бөҙрә – бөҙрә* (бөҙрәләнеп торған): *бөҙрә сәс.*

**Ҡылым формаларының сифатлашыуы:**

1) тамыр ҡылымдар:

*шым- – шым* (тауышһыҙ; аҫтыртын): *шым урам, шым кеше;*

*туң- – туң* (һыуыҡҡа ҡатҡан): *туң тупраҡ, туң ит;*

*тын- – тын* (тыныс): *тын урын, тын иртә;*

2) исем ҡылым формалары:

*ҡырҡыу – ҡырҡыу* (әсе, ҡәтғи, киҫкен): *ҡырҡыу ҡамыр, ҡырҡыу хәл;*

*ҡыҙыу – ҡыҙыу* (эҫе; етеҙ, ярһыу): *ҡыҙыу көн, ҡыҙыу эш, ҡыҙыу кеше;*

3) сифат ҡылым формалары:

*кипкән – кипкән* (ҡоро): *кипкән бесән, кипкән утын;*

*үткән – үткән* (былтырғы): *үткән йыл, үткән ҡыш;*

*еткән – еткән* (ҙурайған, бала йәшенән сыҡҡан): *еткән егет, еткән ҡыҙ.*

**Модаль һүҙҙәрҙең сифатлашыуы:**

*кәрәк – кәрәк* (талап ителгән, мәжбүри булған): *кәрәк* (китап), *кәрәк* (белгес);

*тейеш – тейеш* (туранан-тура ҡағылышлы): *тейеш* (хаҡ), *тейеш* (күләм).

**Оҡшатыу һүҙҙәренең сифатлашыуы:**

*ҡыптыр – ҡыптыр* (ҡыптырлап тороусы): *ҡыптыр тун;*

*шыптыр – шыптыр* (шыптырлап торған): *шыптыр төргәк.*

### *Сифаттарҙың лексик-синтаксик юл менән яһалышы (лексемалашыу)*

Түбәндәге төрҙәге һүҙбәйләнештәрҙең лексемалашыуы:

1) «исем + сифат»: *эш һөйөүсән* (кеше), *баш ҡатырғыс* (ваҡиға), *урман ситендәге* (бесәнлек), *таш стеналы* (һарай);

2) «сифат + сифат»: *ҡыҙыл ала* (һыйыр), *ҡара ала* (ат);

3) «һан + сифат»: а) *туғыҙ йыллыҡ* (мәктәп), *утыҙ етенсе йылғы* (ваҡиғалар); б) *бер төҫлө* (балалар), *бер тигеҙ* (оҙонлоҡ);

4) «алмаш + сифат»: *үҙ аллы* (дәүләт), *үҙ һүҙле* (кеше);

5) «рәүеш + сифат»: *күп милләтле* (ил), *аҙ һанлы* (халыҡ);

Айырым һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә сифаттарҙың яһалыуы түбәндәге осраҡтарҙа күҙәтелә:

1) эйәләре – исемдәрҙән, хәбәрҙәре төрлө яһалма сифаттарҙан килә: *ҡот осҡос* (хәлдәр), *һуш китмәле* (мөғжизә), *көс етмәҫлек* (йөк);

2) эйәләре – исемдәрҙән, хәбәрҙәре ҡылым формаларынан тора: *һыубаҫар* (туғайҙар), *кеше ышанмаҫ* (хәбәр).

## Һандарҙың яһалышы

### *Һандарҙың морфематик юл менән яһалышы*

Һандарҙың морфематик юл менән яһалышы тик **һандар нигеҙендә** генә башҡарыла:

**1) аффикслашыу:** *-мыш/-меш: алтмыш, етмеш*;

**2) нигеҙҙәр ҡушылыу:** *һигеҙ, ун = һикһән; туғыҙ, ун = туҡһан*;

**3) нигеҙҙәр ишләшеү:** *бер-ике, ете-һигеҙ, ҡырҡ-илле*;

**4) нигеҙҙәр ҡабатланыу:** *йөҙәрләгән-йөҙәрләгән, меңәрләгән-меңәрләгән.*

### *Һандарҙың лексик-синтаксик юл менән яһалышы*

Һандар, теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнештәргә берләшеп, теркәлмә ҡушма һандар хасил итә: а) *ун биш, илле ете, етмеш бер, туҡһан өс;* б) *ике йөҙ, алтмыш мең, ун мең, йөҙ мең;* в) *бер мең өс йөҙ ун ике, ике мең биш йөҙ егерме ете.*

### *Һандарҙың лексик-грамматик юл менән яһалышы*

Һандарға исемдәргә ҡараған бер төркөм төп башҡорт һүҙҙәре (а) һәм бер ни тиклем сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр (б) күсә: а) *бөтөн, ярты, ярым;* б) *сирек, тиҫтә; әсмуха; нуль, миллион, миллиард, триллион* һ. б.

## Алмаштарҙың яһалышы

### *Алмаштарҙың фонологик юл менән яһалышы*

Айырым исем һәм ҡылым формаларында баҫымдың үҙгәреүе һөҙөмтәһендә уларҙың билдәләү алмаштарына күсеүе күҙәтелә. Мәҫәлән:

а) *барлы́ҡ* (исем) – алмаш: *ба́рлыҡ (= бөтә, һәммә) халыҡ;*

б) *бөтә́* (ҡылым) – алмаш: *бө́тә (= һәммә) кеше;*

в) *булға́н* (ҡылым) – алмаш: *бу́лған (= һәммә) нәмә.*

### *Алмаштарҙың морфематик юл менән яһалышы*

**Һандар нигеҙендә**

**Аффикслашыу**

«Бер» һанына *-әй* аффиксы ҡушылып, билдәһеҙлек алмашы яһала; ул эйәлек категорияһы формаһында ла ҡулланыла ала: *берәй (= ниндәйҙер), берәйһе (= кемдер, нимәлер).*

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

а) «бер» һаны ҡабатланып, билдәһеҙлек алмашы яһала: *бер-бер (= ниндәйҙер)*; *бер-бер хәл булмағайы*;

б) шул уҡ «бер» һаны эйәлек формаһында (I компоненты) ҡабатланып килһә, юҡлыҡ алмашы яһала: *береһе-бер (= бер кем дә, бер нәмә лә): береһе-бер килмәне.*

**Алмаштар нигеҙендә**
**Аффикслашыу:**

1) *-дыҡы/-деке, -ҙыҡы/-ҙеке, -ныҡы/-неке* аффикстары ҡушылып, түбәндәге алмаш төркөмсәләре яһала:

а) һорау алмаштарынан – һорау алмаштары: *кемдеке, ниҙеке, нимәнеке*;

б) зат алмаштарынан – эйәлек алмаштары: *минеке, һинеке, уныҡы, беҙҙеке, һеҙҙеке, уларҙыҡы*;

в) күрһәтеү алмаштарынан – күрһәтеү алмаштары: *быныҡы, ошоноҡо, тегенеке, шуныҡы, быларҙыҡы, тегеләрҙеке*;

2) *-дыр/-дер, -ҙыр/-ҙер, -лыр/-лер, -тыр/-тер* аффикстары ҡушылып, һорау алмаштары нигеҙендә билдәһеҙлек алмаштары яһала: *кемдер, ниҙер, нимәлер, ҡайҙалыр, ниндәйҙер, нисектер.*

### *Алмаштарҙың лексик-грамматик юл менән яһалышы*

**Һандар нигеҙендә**

«Бер, берәү, берәүҙәр» һандары, айырым осраҡтарҙа алмашлашып, билдәһеҙлек алмаштары рәтендә йөрөй: *бер (= ниндәйҙер): Бер ауыл күренде; берәү (= кемдер): Был яҡҡа берәү килә; берәүҙәр (= кемдәрҙер): Берәүҙәр алға атланы.*

### *Алмаштарҙың лексик-синтаксик юл менән яһалышы*

**Һандар нигеҙендә**

«Бер» һаны, күп төрлө һүҙҙәр менән бәйләнешкә инеп, түбәндәге алмаш төркөмсәләре яһалыуҙа ҡатнаша:

1) билдәләү алмашы: «һәр» алмашы + «бер» һаны: *һәр бер;*

2) билдәһеҙлек алмаштары:

а) «ҡайһы, бәғзе» алмаштары + «бер» һаны: *ҡайһы бер, бәғзе бер;*

б) «бер, берәй» + «кеше, нәмә; ваҡыт, заман, саҡ; ер, урын» кеүек исемдәр: *бер(әй) кеше, бер(әй) нәмә, бер(әй) ваҡыт; бер(әй) ер;*

в) «бер-бер» + «кеше, нәмә, ер» кеүек исемдәр: *бер-бер кеше, бер-бер нәмә;*

3) юҡлыҡ алмаштары:

а) «бер» һаны + «кем, ни, нимә, ҡайҙа, ҡасан, ниндәй, нисек» һорау алмаштары (*да/дә, ла/лә* ... көсәйтеү киҫәксәләре лә ҡулланылыуы мөмкин): *бер кем (дә), бер ҡайҙа (ла), бер нисек (тә);*

б) «һис» алмашы + «бер» һаны + «кем, ни, нимә, ҡайҙа, ҡасан, ниндәй» алмаштары: *һис бер кем, һис бер ҡасан, һис бер ни;*

в) «бер» һаны + «кеше, нәмә, ваҡытта, ерҙә» кеүек исемдәр (*ла/лә, да/дә* ... көсәйтеү киҫәксәләре ҡулланыла ала): *бер кеше (лә), бер нәмә (лә), бер ваҡытта (ла).*

**Алмаштар нигеҙендә**

Алмаштар нигеҙендә формалашҡан һүҙбәйләнештәр айырым осраҡтарҙа алмаштарға күсә; уларҙы түбәндәге алмаш төркөмсәләре рәтендә күҙәтәбеҙ:

а) күрһәтеү алмаштары («ана, бына» киҫәксәләре + күрһәтеү алмаштары): *ана шул, ана теге, ана шулай, бына был, бына ошо, бына ошолай;*

б) һорау алмаштары («ни» алмашы + «ҡәҙәр, саҡлы, тикле» һүҙҙәре): *ни ҡәҙәр, ни саҡлы, ни тикле;*

в) билдәләү алмаштары:

«һәр» алмашы + һорау алмаштары: *һәр кем, һәр ҡайһы, һәр ҡасан;*

«һәр» алмашы + «нәмә» исеме: *һәр нәмә;*

«был, шул, ошо» алмаштары + «ҡәҙәр, саҡлы, хәтле» һүҙҙәре: *был ҡәҙәр, шул саҡлы, ошо хәтле;*

г) билдәһеҙлек алмаштары («әллә» киҫәксәһе + һорау алмаштары): *әллә кем, әллә ни, әллә ҡайһы, әллә ниндәй, әллә нисек;*

ғ) юҡлыҡ алмаштары («һис» киҫәксәһе + һорау алмаштары): *һис кем, һис ни, һис ҡасан, һис ниндәй.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

Модаль һүҙҙәр нигеҙендә формалашҡан һүҙбәйләнештәр билдәләү алмаштары рәтендә йөрөй:

«ни» алмашы + «бар(ы)» модаль һүҙе: *ни бары (бары, барыһы, бөтәһе); Ни бары ошомо?*

«бар» модаль һүҙенең грамматик формалары + *«ҙа, ла»* киҫәксәләре: *барыбыҙ ҙа, барығыҙ ҙа, барыһы ла.*

## Ҡылымдарҙың яһалышы

### *Ҡылымдарҙың лексик-семантик юл менән яһалышы*

Телдең тарихи үҫеше барышында күҙәтелгән омонимия һәм полисемия күренештәре һөҙөмтәһендә ҡайһы бер ҡылымдар лексик-семантик үҙгәрештәргә дусар була һәм яңы лексемалар хасил итә; уларға түбәндәге мәғәнә үҙенсәлектәре хас:

1) конкрет эш башҡарыу мәғәнәһендәге: *ат-* «берәй нәмәне ырғыт-, ташла-» – *ат-* «махсус ҡоралдарҙан таш, туп, уҡ, пуля, йәҙрә, ракета кеүек нәмәләрҙе осороп ебәр-», *баҫ-* «аяҡта тор-» – *баҫ-* «кейеҙләндер-; яҙма төшөр- һ. б.», *тапа-* «баҫып иҙ-» – *тапа-* «сүкеш менән салғы, балта кеүек ҡоралдарҙың йөҙөн сүкеп йоҡартып үткерлә-»;

2) хәл-торошто белдергән: *ҡун-* «осоп килеп ултыр-, һуғыл-» – *ҡун-* «төн үткәр-», *уян-* «йоҡонан тор-» – *уян-* «йәнлән-, хәрәкәткә кил-», *ойо-* «йоҡомһора-» – *ойо-* «әсеп ҡуйыр-» (һөт-ҡатыҡ);

3) абстракт процесты аңлатҡан: *иҙ-* «ваҡлап болғат-» – *иҙ-* «ирекһеҙләп эшләт-», *тыу-* «донъяға кил-» – *тыу-* «барлыҡҡа кил-», *әйлән-* «түңәрәк буйынса хәрәкәтлән-, борол-» – *әйлән-* «әүерел-».

### *Ҡылымдарҙың фонологик юл менән яһалышы*

Ҡылымдарҙың фонологик юл менән яһалышы түбәндәге ысулдар аша башҡарыла:

1) фонемаларҙың сиратлашыуы:

а) [а] – [о]: [йа]*ҡ-* – *йоҡ-;*

[у] – [ы]: урғы- – *ырғы-;*

[ыу] – [у] – [о]: *ҡыуар-* – *ҡура-* – *ҡоро-;*

б) [һ, ҙ] – [с, й]: *һыҙ-* – *сый-;*

[к] – [й]: *һуҡ-* – *һуй-;*

[т] – [ҙ] – [й]: *ҡат-* – *ҡаҙ-* – *ҡай(ы)-;*

в) [у, р, ҙ] – [ү, т]: *һур-* – *һуҙ-* – *һүр-* – *һүт-*

[а, т, ҙ] – [ә, й]: [йа]*т-* – [йа]*ҙ-* – *йәй-;*

2) һуҙҙең тотош нәҙегәйеүе (палатализация):

[о] – [ө]: *бор-* – *бөр-*, *борҡо-* – *бөрк(ө)-;*

[у] – [ү]: *суҡы-* – *сүке-;*

[ы] – [е]: *һыпыр-* – *һепер-;*

3) фоно-морфематик ысул: *аҡ-тар-* – *ау-ҙар-*, *ҡағ-ыл-* – *кәй-ел-* , *ҡур-ҡыт-* – *ҡуҙ-ғыт-*, *һүҙ-лә* – *һөй-лә-; йыш-* – *ыш-ҡы-*.

### *Ҡылымдарҙың морфематик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

**Аффикслашыу** аша түбәндәге мәғәнәүи төркөмсәләрҙе белдергән ҡылымдар яһала:

1) фекерләүҙе, хис-тойғоно белдереүсе:

***-ла/-лә:** аңла-, уйла-, анализла-;*

***-ғар/-гәр, -ҡар/-кәр:** аңғар-, иҫкәр(т)-;*

2) тәбиғәт күренештәрен белдереүсе:

***-ла/-лә:** буранла-, болотла-, ҡояшла-, ямғырла-;*

3) төрлө физик хәл-торошто белдергән:

***-ла/-лә:** йоҡла-, тымаула-, грипла-;*

***-л, -ал/-әл, -ыл/-ел, -ол/-өл:** йүнәл-, ҡотол-;*

***-н, -ан/-ән, -ын/-ен:** көсән-, ерән-;*

4) тыуыу процесын аңлатҡан:

***-ла/-лә:** балала-, быҙаула-, ҡолонла-, көсөклә-;*

5) актив эш башҡарыу мәғәнәһендәге:

***-ла/-лә:** дағала-, йоҙаҡла-, үтеклә-, щеткала-;*

***-а/-ә:** ут (үлән) – ута-, аша-, туна-;*

6) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән предметтың икенсе бер нәмәгә күсеүен белдергән:

***-ла/-лә:** алтынла-, ағыула-, тоҙла-, һөтлә-;*

7) психик хәл-торошто, хис-тойғоно аңлатҡан:

***-а/-ә:** үсә-, һына-;*

***-лан/-лән:** асыулан-, дәртлән-, рухлан-;*

***-һы/-һе, -һо/-һө:** ерһе-, йөрәкһе-, күңелһе-;*

***-һын/-һен, -һон/-һөн:** ерһен-, күҙһен-, ымһын-;*

***-һыт/-һет:** ерһет-;*

8) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән үҙенсәлектәргә эйә булыуҙы белдергән:

***-лан/-лән:** боҙлан-, тамырлан-, сәскәлән-, һыулан-;*

***-лаш/-ләш:** дуҫлаш-, туғанлаш-, кристаллаш-;*

***-й, -ай/-әй:** көсәй-, ҡотай-, ишәй-, моңай-;*

***-р, -ыр/-ер, -ор/-өр:** ҡайғыр-, иҫер-, ҡотор-;*

9) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән төшөнсәләрҙең процесҡа әүерелеүен белдергән:

***-лаш/-ләш:** вәғәҙәләш-, законлаш-, никахлаш-;*

***-ыҡ/ -ек:** ҡаныҡ-, тутыҡ-, үсек-;*

10) бер хәлдән икенсе хәлгә килеүҙе, оҡшатыуҙы аңлатҡан:

***-һыт/-һет:** ҡыраупыт-, ҡыуанһыт-, тауһыт-;*

11) яһаусы нигеҙ белдергән нәмәнең юҡҡа сығыуын аңлатҡан:

***-һыра/-һерә:** ҡанһыра-, әл(=ил)һерә-.*

**Сифаттар нигеҙендә**

**Аффикслашыу ысулы** менән түбәндәге мәғәнәүи төркөмсәләргә ҡараған ҡылымдар яһала:

1) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән билдәнең икенсе бер нәмәгә күсеүен белдереүсе:

***-й, ай/-әй:** ауырай-, ҙурай-, еңеләй-, киңәй-;*

***-лан/-лән:** батырлан-, ғорурлан-, шатлан-;*

***-р, -ар/-әр:** ағар-, күгәр-, яңыр-, яҡшыр-;*

2) яһаусы нигеҙҙә белдерелгән үҙенсәлектәрҙе ҡабул итеү процесын аңлатҡан:

***-лаш/-ләш:** активлаш-, алыҫлаш-, популярлаш-;*

3) яһаусы нигеҙ аңлатҡан билдәләрҙең процесҡа әүерелеүен белдергән:

***-лан/-лән:** асҡаҡлан-, туҡлан-, әселән-;*

***-лаш/-ләш:** ауырлаш-, ҡулайлаш-;*

***-т, -ат/-әт:** бушат-, йылыт-;*

***-һы/-һе, -һо/-һө:** бурһы-, ҡаҡһы-;*

***-ы/-е, -ыҡ/-ек:** байы-, кәме-; асыҡ-, һауыҡ-;*

4) психик хәл-торошто, хис-тойғоно аңлатҡан:

***-һын/-һен, -һон/-һөн:** ауырһын-, ғәжәпһен-, ятһын-;*

***-һыра/-һерә:** етемһерә-, үгәйһерә-, ятһыра-;*

***-һыт/-һет:** кәмһет-, үгәйһет-, түбәнһет-;*

5) физик хәл-торошто белдергән:

***-л, -ал/-әл:** терел-, йүнәл-, төҙәл-;*

***-лан/-лән:** арыулан-, арыҡлан-, сәләмәтлән-;*

***-н, -ан/-ән:** бушан-, йылын-, әсен-, көслән-;*

***-ыҡ/-ек:** асыҡ-, һауыҡ-.*

**Нигеҙҙәр ҡушылыу + аффикслашыу** ысулы менән ҡылымдар яһалыуҙа түбәндәге типтағы һүҙбәйләнештәр ҡатнаша:

1) «сифат + ярҙамсы ҡылым» + ***-лаш/ләш***: *һау бул – һаубуллаш-*;

2) «сифат + сифат» + ***-лан/-лән***: *яҡшы атлы – яҡшатлан-, яман атлы – яманатлан-, ҡара эсле – ҡареслән-;*

3) «алмаш + сифат» + ***-лан/-лән***: *үҙ һүҙле – үҙһүҙлән-.*

**Һандар нигеҙендә**

**Аффикслашыу** ысулы менән түбәндәге мәғәнә үҙенсәлектәренә эйә булған ҡылымдар яһала:

1) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән һан иҫәбенә теүәл өлөштәргә бүлеү мәғәнәһен тотоусы:

***-ла/-лә:** берәрлә-, икешәрлә-, йөҙәрлә-, меңәрлә-;*

2) яһаусы нигеҙҙә белдерелгән үҙенсәлекте ҡабул итеү процесын аңлатҡан:

***-ләш:** берләш-;*

3) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән төшөнсәнең процесҡа әүерелеүен белдергән:

*-ек: берек-;*

*-лән: икелән-.*

**Алмаштар нигеҙендә**

**Аффикслашыу** ысулы менән яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән затҡа мөнәсәбәтле хәл-торошто, хис-тойғоно аңлатҡан ҡылымдар яһала:

*-гәр: үҙгәр-;*

*-лән: мин – минлән-;*

*-һен: үҙһен-.*

**Нигеҙҙәр ҡушылыу** ысулы аша:

1) «ни, ҡайһылай» һорау алмаштарына «ит-» ярҙамсы ҡылымы, ә «ни» алмашына «эшлә-» ҡылымы ҡушылып, абстракт мәғәнәләге процесты аңлатыусы ҡылымдар яһала: *ни + ит- > нит-*: *Ниҙең ниенә ни ниткән, ниҙе нисек нитәйек?..* (Әсхәл Әхмәт-Хужа); *ҡайһылай + ит- > ҡайһылайт-, ни + эшлә- > нишлә-*;

2) күрһәтеү алмаштарына «ит-» ярҙамсы ҡылымы ҡушылып, процестың башҡарылыу рәүешен белдергән ҡылымдар яһала: *былай + ит- > былайт-, ошолай + ит- > ошолайт-, тегеләй + ит- > тегеләйт-, улай + ит- > улайт-.*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

**Аффикслашыу** ысулы менән:

1) физик хәл-торошто белдергән ҡылымдар:

*-һын/-һен: өшөкһөн-, өҙләкһөн-;*

2) психик хәлде, хис-тойғоно белдергән:

*-һын/-һен: һөйһөн(мә)-, һипһен-;*

3) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән процесҡа оҡшаш эш, хәл, хәрәкәтте белдергән:

*-лыҡ/-лек...: атлыҡ-, баҫлыҡ-, ҡаҡлыҡ-, тотлоҡ-;*

*-ра/-рә: иҙра- (туҙ-), иҙрә-, сәсрә-;*

*-ала/-әлә: ҡыуала-, сүгәлә-, һибәлә-.*

**Нигеҙҙәр ҡушылыу** ысулы аша эйәртеүсе компоненты ҡылымдан, ә эйәреүсе компоненты исемдән, сифаттан торған һүҙбәйләнештәрҙән яһалған ҡылымдар:

1) «исем + ҡылым»: *буй һон- > буйһон-, күҙ алла- > күҙалла-, һыу ал- > һыуал- (һыйыр һыуалды);*

2) «сифат + ҡылым»: *ҡоро ҡаҡһы- > ҡорғаҡһы-, олоға аш- > олғаш-, һау бул(лаш-) > һаубуллаш-.*

**Нигеҙҙәр ишләшеү** һөҙөмтәһендә түбәндәге төрҙәге парлы ҡылымдар яһала:

1) синонимик мәғәнәләге: *абын- һөрөн-, ары- тал-, һығылбөгөл-;*

2) антонимик мәғәнәләге: *ин- сыҡ-, ҡайт- кит-, бар- кит-, мен- төш-*;

3) «нит- (> ни ит-)» ҡушма ҡылымы менән йөрөгән: *әйтмәй-нитмәй, күрә-нитә ҡалһа, ауырып-нитеп китмә-;*

4) «фәлән» һүҙе менән: *килһә-фәлән, ҡайтһа-фәлән, батып-фәлән ҡуймаһын.*

**Рәүештәр нигеҙендә**

**Аффикслашыу** ысулы менән:

1) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән билдәнең икенсе нәмәгә күсеүен белдереүсе ҡылымдар:

***-ла/-лә:*** *йәйәүлә-, оҙаҡла-, һуңла-, яйла-;*

2) яһаусы нигеҙ аңлатҡан үҙенсәлеккә эйә булыу процесын белдергән:

***-ай/-әй:*** *аҙай-, күбәй-, шәбәй-, яҡынай-;*

***-лат/-ләт:*** *тиҙләт-, яҡынлат-;*

3) психик хәл-торошто, хис-тойғоно белдергән:

***-һын/-һен...:*** *аҙһын-, күпһен-, кәмһен-.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

**Аффикслашыу** ысулы менән яһалған ҡылымдар:

1) яһаусы нигеҙҙә белдерелгән нәмәгә мөнәсәбәте булған процесты белдереүсе:

***-ла:*** *барла-;*

***-ал:*** *юғал-;*

2) психик хәл-торошто, хис-тойғоно аңлатҡан:

***-һын/-һен:*** *кәрәкһен-, юҡһын-;*

***-һыра:*** *юҡһыра-.*

**Ымлыҡтар һәм саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәре нигеҙендә**

**Аффикслашыу** аша яһалған ҡылымдар:

1) яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән ымлыҡтарға һәм саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәренә оҡшатып әйтеү мәғәнәһендәге:

***-ылда/-елдә:*** а) *ахылда-, уйылда-, уфылда-;*

б) *һайтылда-;*

2) яһаусы нигеҙҙә ымлыҡтарға һәм саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәренә бәйле процесты башҡарыуға димләү, тәҡдим итеү мәғәнәһендәге:

***-ла/-лә:*** а) *ай-байла-, ай-һайла-*;

б) *һайтла-, һөслә-, һәүкәлә-, әйҙүклә-*;

***-лат/-ләт:*** *һөсләт-, һерләт-, дерләт-.*

**Оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙендә**

**Аффикслашыу** ысулы менән яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән тауыш, өн, ауаз һәм һындарға (торош, тышҡы күренеш, хәрәкәт,

яҡтылыҡ) бәйле процестарҙы башҡарыу мәғәнәһендәге ҡылымдар яһала:

*-ла/-лә:* а) *геүлә-, дөбөрлә-, ҡытыҡла-, мыяула-;*

б) *гөлтлә-, ялтла-, тертлә-;*

*-ылда-/-елдә:* а) *геүелдә-, дөпөлдә-, ғырылда-;*

б) *елпелдә-, йылҡылда-, ялпылда-;*

*-ай/-әй: ҡылтай-, ҡарпай-, һалпай-, шапай-;*

*-а/-ә: ҡалтыра-, сылтыра-, шалтыра-;*

*-ы/-е: балҡы-, ҡарпы-, һиңке-;*

*-на/-нә: мышна-, кешнә-;*

*-ыр: баҡыр-.*

## *Ҡылымдарҙың лексик-грамматик юл менән яһалышы (ҡылымлашыу)*

**Исемдәрҙең ҡылымлашыуы**

Сит телдәрҙән үҙләштерелгән ҡайһы бер исемдәр ҡылымлашып йөрөй:

1) фарсы теленән: *шабаш = тамам булды;*

2) ғәрәп теленән: *сәләм = имен йөрө-, иҫән-һау бул-; вәссәләм = тамам булды;*

3) француз теленән: *марш = кит-, ҡуҙғал-.*

**Сифаттарҙың ҡылымлашыуы**

1) «яҡшы, һәйбәт, насар» кеүек сифаттар һөйләү телмәрендә йыш ҡына ҡылымлашып йөрөйҙәр:

*яҡшы = яҡшы булған, яҡшы тип иҫәпләйем, ризалыҡ белдерәм; һәйбәт = һәйбәт булды, килешәм; насар = тейешле кимәлдә башҡарылмаған, кире тәьҫир ҡалдыра.*

2) фарсы теленән ингән ҡайһы бер сифаттар:

*хуп = яҡшы тип иҫәпләйем, ризалыҡ белдерәм; хуш = яҡшылыҡ теләйем.*

**Модаль һүҙҙәрҙең ҡылымлашыуы**

«Кәрәк» модаль һүҙе айырым осраҡтарҙа тулыһынса ҡылымлаша һәм ҡылымға хас бөтә морфологик категориялар (һөйкәлеш, заман, зат, юҡлыҡ) менән тиерлек үҙгәрә ала: *кәрәк – кәрәккән, кәрәкте, кәрәгә, кәрәкмәй, кәрәгер, кәрәгәсәк, кәрәкһә.*

**Ымлыҡтарҙың ҡылымлашыуы**

Ымлыҡтарға ҡараған бер төркөм императив һүҙҙәр йыш ҡына ҡылым формаларында ҡулланылып йөрөйҙәр: *сеү, сеүегеҙ = илама, иламағыҙ, тымығыҙ; мә, мәгеҙ = ал, алығыҙ; ҡана,*

*ҡанағыҙ = рөхсәт ит, рөхсәт итегеҙ; тссс, тишш = шаулама, шауламағыҙ.*

### *Ҡылымдарҙың лексик-синтаксик юл менән яһалышы (лексемалашыу)*

Лексик-синтаксик юл менән айырым төр һүҙбәйләнештәрҙең һәм һөйләмдәрҙең лексемалашыуы һөҙөмтәһендә, түбәндәге мәғәнә үҙенсәлектәре тотҡан теркәлмә ҡушма ҡылымдар яһала.

**Исемдәр нигеҙендә:**

1) составында исемдәр булған һүҙбәйләнештәрҙән:

– актив эш башҡарыуҙы белдергән: *хеҙмәт ит-, балаҫ һуҡ-, быйма баҫ-;*

– хәл-торошто белдергән: *күңел ас-, донъя көт-, уйға бат-, хәл ал-;*

2) эйәһе исемдәрҙән, ә хәбәре төрлө ярҙамсы ҡылымдарҙан килгән һөйләмдәр нигеҙендә:

– физик процестарҙы күрһәткән: *йоҡо кил- (ҡас-, ос-, баҫ-), төҫө ҡас- (кит-);*

– психик хәл-торошто белдергән: *асыу кил- (ҡабар-, ҡайт-), күңел бул-, хәтер ҡал-, эс бош-;*

– тәбиғәт күренештәрен аңлатҡан: *йәшен һуҡ-, күҙ бәйлән-, таң ат- (белен-, ҡыҙар-, һарғай-), сәскә ат-.*

**Сифаттар нигеҙендә**

Сифаттарҙан һәм *ит-, бул-, ал-* кеүек ярҙамсы ҡылымдарҙан торған һүҙбәйләнештәрҙән яһаусы нигеҙҙәге билдәгә бәйле процесты (а) йәки хәл-торошто (б) белдергән: а) *азат ит- (бул-), ҡаршы ал- (бул-);* б) *сабыр ит- (бул-), һау бул-, яҡшы ит- (бул-).*

**Ҡылымдар нигеҙендә:**

1) теркәлмә ҡушма ҡылымдарға күсеүсе һүҙбәйләнештәрҙең төп компоненты ҡылымдар, ә эйәреүсе компонентын төрлө һүҙ төркөмдәренә ҡараған һүҙҙәр тәшкил итә:

«исем (төш.к.) + *ал-, бир-, ит-, күр-, сығыр-, һал-* ярҙамсы ҡылымдары»: *һабаҡ ал-, сәләм бир-, ант ит-, көн күр-, закон сығар-, ҡолаҡ һал-;*

«исем (төб.к.) + *бар-, сыҡ-, ҡал-* ҡылымдары»: *иргә бар-, кейәүгә сыҡ-, ятҡа ҡал-;*

«исем (сығ.к.) + *яҙ-* ярҙамсы ҡылымы»: *аҡылдан яҙ-, иҫтән яҙ-, һуштан яҙ-;*

«сифат + *ит-, бул-, ҡал-* ярҙамсы ҡылымдары»: *азат ит-, һаҡ бул-, һау бул-;*

«һан + *ит-, бул-* ярҙамсы ҡылымдары»: *бер бул-, биш ит-;*

«алмаш + *ит-* ярҙамсы ҡылымы»: *үҙ ит-, нисек ит-;*

рус теленән алынған *-ть* аффикслы ҡылым + *ит-* ярҙамсы ҡылымы: *бастовать ит-, контрактовать ит-, оформить ит-;*

2) теркәлмә ҡушма ҡылымдарға күскән һөйләмдәрҙең эйәләре булып исемдәр йөрөй, ә хәбәрҙәре функцияһын башҡарып йөрөүсе ҡылымдар түбәндәгеләр:

*баҫ-: донъя баҫ-, йоҡо баҫ-, ҡайғы-хәсрәт баҫ-;*

*ин-: аҡыл ин-, дәрт ин-;*

*кил-: гәрлек кил-, көй кил-, йоҡо кил-;*

*кит-: иҫ кит-, һуш кит-, яй кит-;*

*кер-: аҡыл кер-, көс кер-, хәл кер-;*

*ҡат-: баш ҡат-, һын ҡат-;*

*сыҡ-: йән сыҡ-, өн сыҡ-, ут сыҡ-;*

*тей-: тымау тей-, һыуыҡ тей-, күҙ тей-;*

*төш-: танау төш-, көс төш-, күҙ төш-.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

Түбәндәге төр һүҙбәйләнештәр ҡушма ҡылымдарға күсә:

– «модаль һүҙ + *ит-* ярҙамсы ҡылымы»: *юҡ ит-, бар ит-;*

– «модаль һүҙ + *бул-* ярҙамсы ҡылымы»: *бар бул-, юҡ бул-, кәрәк бул-, тейеш бул-.*

**Ымлыҡтар нигеҙендә:**

1) «ымлыҡ + *ит-* ярҙамсы ҡылымы» тибындағы һүҙбәйләнештәр ҡушма ҡылымдар рәтенә күсә: *ах ит-, аһ ит-, ах-ух ит-, аһ-ваһ ит-, ыһ ит-;*

2) эйәһе ымлыҡтарҙан, хәбәре *«кил-»* ҡылымынан торған һөйләмдәр лексемалашып йөрөй һәм ҡушма ҡылымдарға әйләнә: *ах-ух кил-, ах та вах кил-, ах та ух кил-.*

**Оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙендә**

«Оҡшатыу һүҙе + *ит* ярҙамсы ҡылымы» тибындағы һүҙбәйләнештәр лексемалашып, ҡылымдар яһап йөрөй: *борх ит-, шап ит-, шарт ит-, ялт ит-.*

## Рәүештәрҙең яһалышы

### *Рәүештәрҙең фонологик юл менән яһалышы*

Хәҙерге башҡорт телендә рәүештәрҙең фонологик юл менән яһалышы киң таралыш алмаған, шулай ҙа айырым осраҡтарын түбәндәге миҫалдарҙа күрергә була:

1) яһаусы нигеҙҙәрҙә айырым фонемаларҙың төшөп ҡалыуы һәм сиратлашыуы аша: *тыума – тома* (= тыумыштан): *тома һуҡыр;*

2) баҫымдың урыны үҙгәреү сәбәпле: *башҡа́ бүрек кейҙем* (исем) – *ба́шҡа өндәшмә* (рәүеш); *яңы́ йорт* (сифат) – *я́ңы килде* (рәүеш); *утын ҡырҡа́* (ҡылым) – *хәл ҡы́рҡа үҙгәрҙе* (рәүеш); *юл урман аша үтә́* (ҡылым) – *таҡтаны ү́тә тишкән* (рәүеш).

### *Рәүештәрҙең морфематик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

**1. Аффикслашыу**

***-са/-сә:***

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән предмет һәм шәхескә ҡарата оҡшатыу йәки сағыштырыу мәғәнәһендәге: *ауыл – ауылса, ҡала – ҡаласа, кеше – кешесә, аталар – аталарса, балалар – балаларса, дуҫтар – дуҫтарса;*

процестың яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән телдә башҡарылыуын белдергән: *башҡорт – башҡортса, инглиз – инглизсә, рус – русса, ғәрәп – ғәрәпсә, ҡытай – ҡытайса;*

процестың оҙайлы башҡарылыуын белдереүсе: *аҙналар – аҙналарса, быуаттар – быуаттарса, йылдар – йылдарса;*

процестың яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән нәмәгә нигеҙләнеп башҡарылыуын белдергән: *гәҙәт – гәҙәтсә, закон – законса, заман – заманса;*

***-сан/-сән:***

яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән кейем-һалым атамаларына ҡушылып, хәл рәүештәре яһала: *күлдәк – күлдәксән, ойоҡ – ойоҡсан;*

***-лай/-ләй:***

яһаусы нигеҙгә ярашлы хәл рәүештәре: *аяҡ – аяҡлай (һат-), ас ҡарын – ас ҡарынлай (эс-);*

арауыҡҡа бәйле хәл рәүештәре: *буй – буйлай (һуҙ-), урта – урталай (бүл-), ярты – ялтылай (киҫ-);*

***-лап/-ләп:***

ваҡыт дауамлылығын белдергән: *ай – айлап, аҙна – аҙналап, сәғәт – сәғәтләп, минут – минутлап;*

күләм-дәрәжә рәүештәре: *бөртөк – бөртөкләп, тоҡ – тоҡлап, тонна – тонналап, ус – услап;*

***-лата/-ләтә:***

яһаусы нигеҙгә ярашлы хәл рәүештәре: *аҡса – аҡсалата, бойҙай – бойҙайлата, он – онлата, натура – натуралата;*

***-лаш/-ләш:***

яһаусы нигеҙгә ярашлы күләм-дәрәжә рәүештәре: *ара – аралаш, ярты – яртылаш, баш – башлаш.*

**2. Суффикслашыу**

Ғәрәп теленән ингән һүҙҙәрҙә *-ан/-ән* суффиксы менән: *шәхес – шәхсән, хосус – хосусан.*

**3. Нигеҙҙәр ҡушылыу:**

1) «алмаш + исем», «исем + алмаш» ҡушылмалары: *бы(л) йыл – быйыл, бы(л) көн – бөгөн; баш көллө – башкөллө (баш көлләй);*

2) «исем + исем» ҡушылмаһы: *баш, ҡул – башҡуллай, юл, айҡан – юлайҡан;*

3) «исем + сифат» ҡушылмаһы: *көн, оҙон – көноҙон, көн, элек – көнелек, көн, элгәре – көнелгәре.*

**4. Нигеҙҙәр ишләшеү**

Айырым исемдәрҙең төрлө грамматик формаларының ишләшеүе һөҙөмтәһендә парлы рәүештәр яһала:

1) мәғәнә яҡынлығы булған исемдәр: *ара, тирә – ара-тирә;*

2) антонимик мәғәнәле исемдәр: *көн, төн – көн(ө)-төн(ө), баш, аяҡ – баштан-аяҡ, баш, ахыр – баштан-ахыр, йәй, ҡыш – йәй(ен)-ҡыш(ын).*

**5. Нигеҙҙәр ҡабатланыу:**

Ҡайһы бер исемдәр һәм уларҙың айырым грамматик формалары йәки морфологик варианттары ҡабатланып килеүе арҡаһында, ҡабатлаулы рәүештәр яһала:

1) яһаусы нигеҙҙәрҙең һүҙмә-һүҙ ҡабатланыуы: *ваҡыт-ваҡыт, буй-буй, өйкөм-өйкөм, рәт-рәт;*

2) яһаусы нигеҙҙәрҙең *-ма/-мә* форманты менән ҡабатланыуы: *башма-баш, һүҙмә-һүҙ, эҙмә-эҙ, йөҙмә-йөҙ.*

**Сифаттар нигеҙендә**

**1. Аффикслашыу:**

1) процестың яһаусы нигеҙгә ярашлы билдәләрен (ваҡытын, урынын, хәлен; оҡшатыу, сағыштырыу мәғәнәләрен һ. б.) белдереүсе рәүештәр:

***-лай/-ләй:*** *бөгөнгө – бөгөнгөләй, быйылғы – быйылғылай, көндәге – көндәгеләй; бындағы – бындағылай, ундағы – ундағылай; урмандағы – урмандағылай, тауҙағы – тауҙағылай;*

***-са/-сә:*** *боронғо – боронғоса, ваҡытлы – ваҡытлыса, ҡыҫҡа – ҡыҫҡаса, яңы – яңыса; кире(һе) – киреһенсә, тулы(һы) – тулыһынса;*

2) процестың нисек, ни хәлле башҡарылыуын белдереүсе рәүештәр:

***-лап/-ләп:*** *арыу – арыулап, матур – матурлап, һәйбәт – һәйбәтләп, яҡшы – яҡшылап;*

3) яһаусы нигеҙҙә белдерелгән билдәне, сифатты һаҡлап ҡалыу мәғәнәһендәге хәл рәүештәре:

***-лай/-ләй:*** *буш – бушлай, ҡоро – ҡоролай, йылы – йылылай, сей – сейләй;*

***-лата/-ләтә:*** *тере – тереләтә, сей – сейләтә.*

**2. Нигеҙҙәр ишләшеү**

Ҡағиҙә буларaҡ, ҡапма-ҡаршы мәғәнәле сифаттар ишләшеп йөрөйҙәр, һөҙөмтәлә түбәндәге рәүеш төркөмсәләре барлыҡҡа килә:

1) ваҡыт рәүештәре: *иртәле-кисле, былтырлы-быйыллы, ваҡытлы-ваҡытһыҙ;*

2) хәл рәүештәре: *аллы-артлы, аҫлы-өҫлө, аслы-туҡлы.*

**3. Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Айырым сифаттарҙың грамматик формалары һәм морфологик варианттары ҡабатланыу һөҙөмтәһендә ҡабатлаулы хәл рәүештәре яһала: а) *асыҡ – асыҡтан-асыҡ, буш – буштан-бушҡа, яңғыҙ – яңғыҙҙан-яңғыҙ*; б) *һирәк – һирәк-мирәк, һирәк-һаяҡ.*

**Һандар нигеҙендә**

**1. Аффикслашыу**

яһаусы нигеҙгә ярашлы күләм-дәрәжә рәүештәре:

***-лап/-ләп:*** *ике-шәр – икешәрләп, биш-әр – бишәрләп, ун-ар – унарлап, йөҙ-әр – йөҙәрләп, мең-әр – меңәрләп;*

***-лата/-ләтә:*** *ике – икеләтә, биш – бишләтә, ун – унлата, йөҙ – йөҙләтә;*

процестың яһаусы нигеҙҙәге йыйыу һандарына ярашлы башҡарыусылар тарафынан үтәлеүен аңлатыусы рәүештәр:

***-лап/-ләп:*** *ик-әү – икәүләп, өс-әү – өсәүләп, ет-әү – етәүләп, ун-ау – унаулап;*

процестың яһаусы нигеҙгә ярашлы башҡарылыу ваҡытын белдереүсе рәүеш:

***-ләй:*** *ике-нсе – икенселәй.*

**2. Нигеҙҙәр ҡушылыу**

«Бер» һаны исем һәм алмашҡа ҡараған һүҙҙәр менән ҡушылып, ваҡыт һәм хәл рәүештәре яһала: *бер-еһе, көн – берһегөн(гә); өй, бер-ен-сә – өйберенсә; бар-ы, бер – барыбер.*

**3. Нигеҙҙәр ҡабатланыу:**

1) «бер» һанының төрлө грамматик формаларҙа һәм морфологик варианттарҙа ҡабатланып килеүе һөҙөмтәһендә хәл рәүештәре яһала: *берәм-берәм, берәм-һәрәм, бергә-бергә, бермә-бер;*

2) бүлем һандары ҡабатланып, күләм-дәрәжә рәүештәре яһала: *өсәр-өсәр, унар-унар, йөҙәр-йөҙәр, меңәр-меңәр.*

**Алмаштар нигеҙендә**

**Аффикслашыу**

Процестың яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән зат ихтыяры буйынса башҡарылыуын аңлатыусы оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре:

*-са/-сә:*

а) эйәлек килештәге зат алмаштарына ҡушыла: *минең – минеңсә, һинең – һинеңсә, беҙҙең – беҙҙеңсә;*

б) *-ныҡы/-неке , -ҙыҡы/-ҙеке* аффикслы эйәлек алмаштарына: *минеке – минекесә, һинеке – һинекесә, уларҙыҡы – уларҙыҡыса;*

в) «был, шул, ошо, теге, ул» күрһәтеү алмаштарына (берлектә эйәлек килеш формаларына): *бының – бынынса, шуның – шунынса, тегенең – тегененсә; былар – быларса, ошолар – ошоларса;*

*-лай/-ләй:*

а) *-ныҡы/-неке, -ҙыҡы/-ҙеке* аффикслы эйәлек алмаштарына: *минеке – минекеләй, һинеке – һинекеләй, уныҡы – уныҡылай, беҙҙеке – беҙҙекеләй;*

б) *-ныҡы/-неке, -ҙыҡы/-ҙеке* аффикслы күрһәтеү алмаштарына: *быныҡы – быныҡылай, ошоноҡо – ошоноҡолай, быларҙыҡы – быларҙыҡылай;*

в) *-ныҡы/-неке, -ҙыҡы/-ҙеке* аффикслы һорау алмаштарына: *кемдеке – кемдекеләй, нимәнеке – нимәнекеләй, кемдәрҙеке – кемдәрҙекеләй;*

ваҡыт рәүештәре (күрһәтеү алмаштарының төбәү килеш формаларына *-са/-сә* аффиксы ҡушылып): *быға – бығаса, ошоға – ошоғаса;*

хәл һәм оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре (күрһәтеү алмаштарына *-лай/-ләй,-ҙай/-ҙәй* аффикстары ҡушылып): *ошо – ошолай, теге – тегеләй, шул – шулай, ошолар – ошоларҙай, тегеләр – тегеләрҙәй.*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

**1. Аффикслашыу**

Бүлеп алыу, сағыштырыу мәғәнәһендәге:

*-са/-сә: айыр-ыу – айырыуса, сағыштыр-ма – сағыштырмаса*;

– яһаусы нигеҙгә ярашлы хәл рәүеше:

*-ләтә: күр-ә – күрәләтә;*

– яһаусы нигеҙгә бәйле хәл, күләм, дәрәжә рәүеше:
*-ләй: үт-ә – үтәләй.*

**2. Нигеҙҙәр ишләшеү**

***-а/-ә/-й*** аффикслы рәүеш ҡылымдарҙың ишләшеүе һөҙөмтәһендә түбәндәге төркөмсәләргә ҡараған рәүештәр яһала:

ваҡыт рәүештәре:

«хәрәкәт ҡылымы + *килә, тора, бирә» һүҙҙәре: бара-килә, йөрөй-килә, тора-килә, үтә-килә; бара-тора, йөрөй-тора, килә-тора; йөрөй-бирә, тора-бирә;*

хәл рәүештәре:

синонимик мәғәнәле ҡылымдар: *ауа-түнә, өҙә-йолҡа, ҡаса-боҫа, этә-төртә;*

антонимик мәғәнәле хәрәкәт ҡылымдары: *инә-сыға, ҡайта-китә, килә-китә, менә-төшә;*

***-п, -ып/-еп, -оп/-өп*** аффикслы синонимик мәғәнәләге ҡылымдар: *ҡасып-боҫоп, өҙөп-йолҡоп, тартып-һуҙып, этеп-төртөп.*

**Рәүештәр нигеҙендә**

**1. Аффикслашыу**

***-са/-сә:***

а) яһаусы нигеҙ белдергән ваҡыт сиген аңлатҡан рәүештәр: *бөгөн-гә – бөгөнгәсә, хәҙер-гә – хәҙергәсә, әле-гә – әлегәсә;*

б) процестың яһалма нигеҙгә ярашлы күләм-дәрәжә билдәһен белдереүсе рәүештәр: *күбеһе-н-күбеһенсә;*

***-лап/-ләп:***

а) процестың нисек, ни хәлле башҡарылыуын белдереүсе рәүештәр: *бергә – бергәләп, йәйәү – йәйәүләп, яй-яйлап;*

б) процестың яһаусы нигеҙҙә күрһәтелгән телдә башҡарылыуын белдереүсе рәүештәр: *башҡортса – башҡортсалап, рус-са – руссалап, ҡаҙаҡса – ҡаҙаҡсалап.*

**2. Нигеҙҙәр ишләшеү:**

а) ваҡыт сиген белдереүсе рәүештәр:

антонимик мәғәнәле нигеҙҙәрҙең ишләшеүе: *кисә-бөгөн, бөгөн-иртән, көнөн-төнөн, йәйен-ҡышын;*

б) урын мәғәнәһендәге рәүештәр:

антонимик мәғәнәле нигеҙҙәрҙең ишләшеүе: *ары-бире, алға-артҡа, уңға-һулға.*

**3. Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Процестың интенсивлығын күрһәтеүсе рәүештәр:

яһаусы нигеҙҙең үҙгәрешһеҙ ҡабатланыуы аша: *аҙ-аҙ, ҡабат-ҡабат, көскә-көскә, аҙлап-аҙлап, саҡ-саҡ;*

яһаусы нигеҙҙең морфонологик варианттары ҡабатланыу: *аҙ-маҙ, алпан-толпан, өҫтән-мөҫтән, әрәм-шәрәм.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

**1. Аффикслашыу**

***-са/-сә:***

яһаусы нигеҙгә ярашлы процестың күләм-дәрәжә буйынса билдәһен белдереүсе рәүештәр: а) *бар – барса, юҡ – юҡса, кәрәк – кәрәксә;* б) *бар-ы-н – барынса, кәрәг-е-н – кәрәгенсә, тейеш-е-н – тейешенсә.*

**2. Нигеҙҙәр ҡушылыу**

Күләм-дәрәжә рәүеше:

«бар» модаль һүҙе + «бер» һаны: *бар-ы, бер – барыбер.*

**3. Нигеҙҙәр ишләшеү**

«Бар, юҡ, кәрәк, тейеш» модаль һүҙҙәренең грамматик формалары, шулай уҡ улар нигеҙендә барлыҡҡа килгән яһалма һүҙҙәрҙең антонимик варианттары ишләшеп, парлы рәүештәр яһала: *юҡ-барға, юҡҡа-барға, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә, тейешле-тейешһеҙгә.*

**Оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙендә**

**Аффикслашыу**

Күләм-дәрәжә рәүештәре:

***-тай:*** *шаҡ – шаҡтай; шаҡтай һыуытты;*

***-ым:*** *шығыр – шығырым; шығырым тулы;*

***-әмә:*** *мөлдөр – мөлдөрәмә; мөлдөрәмә тулы;*

***-а:*** *шып – шыпа; шыпа ишетмәй;*

***-ырт:*** *шып – шыпырт, шыпырт ҡына өндәште.*

**Киҫәксәләр нигеҙендә**

**Нигеҙҙәр ҡушылыу**

«Бер» һаны + «үк» киҫәксәһе: *бер, үк – берүк; Берүк килмәй ҡалма.*

## *Рәүештәрҙең лексик-грамматик юл менән яһалышы (рәүешләшеү)*

**Исемдәр нигеҙендә:**

1) ваҡыт төшөнсәһен белдереүсе айырым исемдәр, башланғыс формаларында йәки төрлө грамматик категориялар (эйәлек, килеш) аффикстары менән килгәндә, ваҡыт рәүештәренә күсә: *ҡыш – ҡыш, ҡышын, ҡышҡа; яҙ – яҙ, яҙын, яҙға; йәй – йәй,*

*йәйен, йәйгә; көҙ – көҙ, көҙөн, көҙгә; иртә – иртә, иртәһен, иртәгә; кис – кис, кисен, кискә; таң – таңын, таңға;*

2) арауыҡ төшөнсәһен белдергән исемдәрҙең ҡайһы берҙәре, төрлө килеш формаларында килеп, урын мәғәнәһен аңлатып, рәүешләшеп йөрөйҙәр: *ал – алға, алда, алдан; арт – артҡа, артта, арттан; аҫ – аҫҡа, аҫта, аҫтан; өҫ – өҫкә, өҫтә, өҫтән; сит – ситкә, ситтә, ситтән; эргә – эргәгә, эргәлә, эргәнән;*

3) үлсәм төшөнсәһен белдереүсе бер төркөм исемдәр, башланғыс формаларында йәки эйәлек һәм килеш формаларында килеп, күләм-дәрәжә рәүештәренә күсеп йөрөйҙәр: *буй – буй, буйына, буйға; арҡыры – арҡыры, арҡырыһына, арҡырыға.*

**Сифаттар нигеҙендә**

Башҡорт телендә, ҡайһы бер башҡа төрки телдәрендәге кеүек үк, «сифат – исем – рәүеш» һәм «сифат – рәүеш» функцияларын башҡарып йөрөүсе күп мәғәнәле һүҙҙәр байтаҡ:

1) «сифат – исем – рәүеш» мәғәнәһендә:

*бай* (кеше) – *бай* (хеҙмәтсе яллаған) – *бай* (йәшәй);

*йылы* (көн) – (тән) *йылы-һы* – *йылы* (ҡаршыланылар);

*һалҡын* (ел) – (таш) *һалҡын-ы* – *һалҡын* (ҡабул итте);

*эҫе* (йәй) – (мунса) *эҫе-һе* – *эҫе* (яғылған мейес);

2) «сифат – рәүеш» мәғәнәһендә:

*алыҫ* (ара) – *алыҫ* (киткән);

*оҙаҡ* (ваҡыт) – *оҙаҡ* (йөрөнө);

*матур* (баҡса) – *матур* (йырлай);

*түбән* (урын) – *түбән* (төштө);

*яңғыҙ* (кеше) – *яңғыҙ* (ҡалған).

**Һандар нигеҙендә**

Һандарҙың айырым төркөмсәләренә ҡараған һүҙҙәр билдәле бер шарттарҙа рәүешләшеп йөрөй:

1) хәл рәүештәре (процесты башҡарыу рәүеше, ваҡыты мәғәнәһендә) функцияһында:

а) «бер» һаны төрлө морфологик формаларҙа: *бер* (килмәне), *бергә* (барҙыҡ);

б) йыйыу һандары: *икәү* (эшләйҙәр), *өсәү* (башҡарҙылар), *бишәү* (килделәр);

2) күләм-дәрәжә рәүештәре ролендә:

а) *туҡһан туғыҙ ҡайтып, туҡһан туғыҙ китте;*

б) «бер» һаны «ҡәҙәр» бәйләүесе менән килгәндә: *бер ҡәҙәр.*

**Алмаштар нигеҙендә:**

1) *-лай/-ләй* аффикслы күрһәтеү алмаштары рәүешләшеп йөрөй: *былай – былай* (кил-), *тегеләй – тегеләй* (кит-), *улай – улай* (эшләмә-), *ошолай – ошолай* (һыҙ-);

2) урын-ваҡыт килеше формаһындағы күрһәтеү алмаштары урын рәүештәренә күсә: *ул – унда* (йәшәй), *был – бында* (кил-), *теге – тегендә* (ҡал-), *шул – шунда* (бул-);

3) «көйө (көйөнсә)» бәйләүесе менән ҡулланылған күрһәтеү алмаштары хәл рәүештәренә күсә: *ошо көйө (көйөнсә), шул көйө (көйөнсә), был көйө (көйөнсә);*

4) күләм-дәрәжә рәүештәренә күсә:

а) «шул, был, ошо» күрһәтеү алмаштары «тикле(м), саҡлы(м), хәтле(м)» бәйләүестәре менән: *шул тикле(м), шул хәтле(м), был тикле(м), был хәтле(м);*

б) «бер ни, әллә ни» кеүек ҡушма алмаштар «тикле(м), саҡлы(м), хәтле(м)» бәйләүестәре менән килгәндә: *бер ни тиклем (саҡлым, хәтлем), әллә ни тиклем (саҡлым, хәтлем).*

**Ҡылымдар нигеҙендә:**

1) хәл рәүештәренә күсә:

*-а/-ә* аффикслы рәүеш ҡылымдар: *аш-а – аша (сыҡҡан), үт-ә – үтә (тишкән);*

*-п, -ып /-еп, -оп /-өп* аффикслы рәүеш ҡылымдар: *башла- – башлап, алмашла- – алмашлап, усла- – услап, һирәклә- – һирәкләп;*

2) исем ҡылым формалары: *ҡара-маҡ – ҡарамаҡҡа, ҡарап тор-оу – ҡарап тороуға;*

3) үткән йәки киләсәк заман сифат ҡылым формалары: а) *уйлама-ған* (эш) – *уйламағанда, көтмә-гән* (саҡ) – *көтмәгәндә, аптыра-ған* (кеше) – *аптырағандан*; б) *аңғар-маҫ – аңғармаҫтан, абайла-маҫ – абайламаҫтан, уйла-маҫ – уйламаҫтан;* в) *-ған* аффикслы үткән заман сифат ҡылымдар «килеш, көйө (көйөнсә)» бәйләүестәре менән: *баҫҡан килеш (көйө, көйөнсә), торған килеш (көйө, көйөнсә), ултырған килеш (көйө, көйөнсә), ятҡан килеш (көйө, көйөнсә);*

4) ваҡыт рәүештәренә күсә:

ваҡыт төшөнсәһен аңлатҡан исемдәр «буйы (буйына, буйынса), менән, һайын» бәйләүестәре менән: *ай буйы (буйына, буйынса), йыл буйы, ҡыш буйы; иртә менән, кис менән, таң менән; көн һайын, минут һайын.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

*Юҡ* модаль һүҙе айырым килеш формаларында рәүешләшеп йөрөй: *юҡ – юҡҡа (үпкәләмә), юҡтан (бола сыҡты).*

**Киҫәксәләр нигеҙендә**

*Һис* киҫәксәһе ваҡыт рәүеше функцияһын башҡарып йөрөй: *һис – һис (күргәнем булманы).*

### *Рәүештәрҙең лексик-синтаксик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

Төп компоненттары исемдәрҙән торған һүҙбәйләнештәрҙең түбәндәге төрҙәре лексемалашалар һәм ваҡыт, урын һәм хәл рәүештәре функцияларын башҡарып йөрөйҙәр:

1) ваҡыт рәүештәре:

а) бер үк исемдең килеш формалары: *быуаттан быуатҡа, быуындан быуынға, йылдан йылға;*

б) «*бер* һаны + исем»: *бер ваҡыт, бер заман, бер саҡ;*

в) «*ул, ошо, шул, был* күрһәтеү алмаштары + исем»: *ул (ошо, шул, был) саҡта, ул (ошо, шул, был) заманда;*

г) «*һәр* алмашы + исем»: *һәр ваҡыт, һәр саҡ, һәр көн;*

ғ) «*ни, ҡайһы* алмашы + *арала, ваҡытта, саҡта*» кеүек исемдәр»: *ни арала, ни ваҡытта, ҡайһы арала, ҡайһы ваҡытта, ҡайһы саҡта;*

д) «*ваҡыт, заман, мәл, саҡ* кеүек исемдәргә *бер* һаны ҡушылып яһалған һүҙбәйләнештәр»: *бер ваҡыт, бер заман, бер саҡ;*

2) урын рәүештәре:

а) бер үк исемдең килеш формалары: *өйҙән өйгә, тауҙан тауға, таштан ташҡа;*

б) «*ни, ҡайһы* һорау алмаштары + *ерҙә, урында* исемдәре»: *ни ерҙә (урында), ҡайһы ерҙә (урында);*

в) «*бер* һаны + исем»: *бер ергә (ерҙә), бер яҡҡа (яҡта), бер яры;*

г) «*һәр* билдәләү алмашы + ерҙә, урында исемдәре»: *һәр ерҙә, һәр урында;*

3) хәл рәүештәре:

а) «*ялан* һүҙе + исем»: *ялан баш, ялан аяҡ, ялан ҡул, ялан өҫ;*

б) «исем + *түбән* һүҙе»: *баш түбән, йөҙ түбән;*

в) *бер* һаны ҡатнашлығында яһалған исем һүҙбәйләнештәр: *бер ауыҙҙан, бер тауыштан, бер рәттән, бер һүҙҙән;*

4) күләм-дәрәжә рәүештәре:

– *бер* һаны ҡушылып яһалған исем һүҙбәйләнештәре: а) *бер дәрәжәлә, бер самала;* б) *бер тапҡыр, бер мәртәбә.*

**Сифаттар нигеҙендә**

Төп компоненты сифат булған һүҙбәйләнештәрҙең түбәндәге төрҙәре лексемалаша һәм хәл рәүештәренә күсә:

а) «сифат + *көйө (көйөнсә)* һүҙе»: *йылы көйө (көйөнсә), эҫе көйө (көйөнсә), һыуыҡ көйө (көйөнсә);*

б) *«бер, юл, һүҙ, шул* һүҙҙәре + *ыңғай* сифаты»: *бер ыңғай (бер ыңғайҙа, бер ыңғайҙан), юл ыңғай(ы), һүҙ ыңғай(ы), шул ыңғай (шул ыңғайға, шул ыңғайҙан);*

в) *бер* һаны ҡатнашлығында яһалған сифат һүҙбәйләнештәр: а) *бер һүҙһеҙ, бер яҡлы, бер туҡтауһыҙ, бер тауышһыҙ;* б) *бер талай;*

г) *һис* киҫәксәһе ҡушылып яһалған сифат һүҙбәйләнештәр: *һис һүҙһеҙ, һис шикһеҙ.*

**Алмаштар нигеҙендә:**

а) урын рәүештәре:

һорау алмаштарына «теләһә» киҫәксәһе ҡушылып яһалған һүҙбәйләнештәр: *теләһә ҡайҙа, теләһә ҡайҙан*;

б) хәл рәүештәре:

һорау алмаштары нигеҙендә «теләһә» киҫәксәһе ҡушылып яһалған һүҙбәйләнештәр: *теләһә ҡайһылай, теләһә нисек.*

Эйәртеүсе киҫәге «шул, ошо, был» күрһәтеү алмаштары һәм «көйө (көйөнсә)» бәйләүесенән торған һүҙбәйләнештәр лексемалашып, хәл мәғәнәһен белдереүсе ҡушма рәүештәргә күсә: *шул көйө (көйөнсә), ошо көйө (көйөнсә), был көйө (көйөнсә).*

**Ҡылымдар нигеҙендә:**

1) ҡылым һүҙбәйләнештәрҙең айырым төрҙәре лексемалашыуы һөҙөмтәһендә, түбәндәге рәүеш төркөмсәләре барлыҡҡа килә:

а) ваҡыт рәүештәре:

*-ғансы /-гәнсе* аффикслы рәүеш ҡылымдар нигеҙендә яһалған һүҙбәйләнештәр: *күҙ асып йомғансы, һәғәт (< сәғәт) тигәнсе, һә тигәнсе;*

б) хәл рәүештәре:

*-а/-ә/-й* аффикслы рәүеш ҡылымдар ҡатнашлығында яһалған һүҙбәйләнештәр: *белә тора, ишетә тора, күрә тора, эшләй тора*;

*-п* аффикслы рәүеш ҡылымдар нигеҙендә яһалған һүҙбәйләнештәр: *ауыҙ йырып (көлә), күҙгә ҡарап (алдай);*

2) хәбәрҙәре төрлө ҡылым формаларынан килгән ҡайһы бер һөйләмдәр лексемалашып, түбәндәге рәүеш төркөмсәләре функцияларын башҡарып йөрөй:

а) ваҡыт рәүештәре:

хәбәрҙәре *-ғансы/-гәнсе* аффикслы рәүеш ҡылымдарҙан килгән һөйләм төрҙәре: *күҙ бәйләнгәнсе, ҡараңғы төшкәнсе, төш еткәнсе, кис булғансы;*

б) хәл рәүештәре:

хәбәрҙәре *-ар/-әр* аффикслы боронғо сифат ҡылымдың сығанаҡ килеш формаһынан килгән һөйләмдәр: *кем уҙарҙан (йүгерҙеләр), кем еңәрҙән (тырыштылар);*

хәбәрҙәре *-маҡ/-мәк* аффикслы боронғо исем ҡылымдың сығанаҡ килеш формаһынан килгән һөйләмдәр: *кем уҙмаҡтан, кем еңмәктән.*

**Рәүештәр нигеҙендә**

Эйәртеүсе киҫәге рәүеш булған бер төркөм һүҙбәйләнештәр лексемалашып, рәүештәр рәтенә күсеп йөрөй; ундайҙарға түбәндәге осраҡтарҙы индерергә була:

а) күләм-дәрәжә рәүештәре:

«*бер* һаны + *аҙ, килке* кеүек рәүештәр»: *бер аҙ (аҙға, аҙҙан), бер килке;*

б) ваҡыт рәүештәре:

«*һәр* алмашы + *-са* аффикслы рәүеш»: *һәр ваҡыттағыса, һәр йылдағыса, һәр көндәгесә;*

в) «исем + *элек, элгәре* рәүештәре»: *көн элек (элгәре), ай элек (элгәре), аҙна элек (элгәре);*

г) хәл рәүеше:

«исем + *-са* аффикслы рәүеш»: *өй беренсә.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

«Юҡ» модаль һүҙе нигеҙендә формалашҡан түбәндәге һүҙбәйләнештәр лексемалашып, сәбәп һәм маҡсат мәғәнәһендәге рәүештәр функцияларын башҡарып йөрөй:

«*бер, е́рле, һис* һүҙҙәре + юҡ (сығ. к.)»: *бер ҙә юҡтан, е́рле юҡтан, һис юҡтан;*

«*бер, һис, е́рле, төптө* һүҙҙәре + юҡ (төб. к.)»: *бер ҙә юҡҡа, һис юҡҡа, е́рле юҡҡа, тө́птө юҡҡа.*

## Модаль һүҙҙәрҙең яһалышы

### *Модаль һүҙҙәрҙең лексик-грамматик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә:**

1) фекерҙең ысынбарлыҡҡа тура килеүен, баһа биреүҙе белдереп йөрөгән модаль һүҙҙәр рәтенә урын-ваҡыт килеше формаһындағы бер нисә исем күсә: *гәҙәттә, асылда;*

2) фараз итеү, икеләнеү, ышанып етмәү мәғәнәһендәге модаль һүҙҙәргә «ихтимал, ахыры(һы)» кеүек ғәрәп теленән үҙләштерелгән исемдәр күсә: *ахыры, ахырыһы, ихтимал;*

3) ғәрәп теленән ингән «хәйер» исеме тәүге фекерҙе үҙгәртеү, һөҙөмтәгә килеү мәғәнәһендәге модаль һүҙгә күсеп йөрөй: *хәйер.*

**Сифаттар нигеҙендә:**

1) бер төркөм сифаттар төп формаларында, шулай уҡ билдәле бер грамматик формаларҙа раҫлауҙы, баһа биреүҙе аңлатҡан модаль һүҙҙәргә күсеп йөрөй: *билдәле, дөрөҫ, яҡшы, тәбиғи; ысын, ысынында, ысындан да;*

2) «ҡыҫҡа» сифаты эйәлек категорияһы формаһында фекерҙе йомғаҡлау, һөҙөмтә яһау мәғәнәһендәге модаль һүҙгә күсә: *ҡыҫҡа – ҡыҫҡаһы.*

**Һандар нигеҙендә**

Яһаусы нигеҙгә ярашлы фекерҙең тәртибен белдереү мәғәнәһендәге модаль һүҙҙәргә түбәндәге һан төркөмсәләре күсә:

а) сығанаҡ килеш формаһындағы тәртип һандары: *беренсенән, икенсенән, өсөнсөнән;*

б) «бер» һанының сығанаҡ килеш формаһы: *берҙән.*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

Төрлө һөйкәлеш, заман, зат, һан һәм төркөмсә формаларында йөрөгән ҡайһы бер ҡылымдар модаль һүҙҙәр рәтенә күсә һәм түбәндәге мәғәнәүи төркөмдәргә ҡарай:

раҫлау йәки мөмкинлек-мөмкин түгеллек мәғәнәһендәге: *була, булмай, ярай, ярамай, икән;*

фараз итеү, самалау мәғәнәһендәге: *булмаһа, буғай; белмәйем, белмәҫһең;*

фекерҙе йомғаҡлау, һөҙөмтә яһау мәғәнәһендәге: *күрәһең, тимәк;*

иҫкәрмә яһау, иҫкә төшөрөү, иҫкәртеү мәғәнәһендәге: *әйткәндәй, әйткәнсә;*

фекерҙең сығанағы мәғәнәһендәге: *ти, имеш;*

теләк, үтенес мәғәнәһендәге: *ҡуй, ҡуйығыҙ, рәхим итегеҙ, ғәфү итегеҙ, beләһегеҙме, күрәһегеҙме;*

эмоциональ мөнәсәбәттәрҙе белдереүсе: *етмәһә, әйтерһең.*

**Рәүештәр нигеҙендә**

*-лап* аффикслы рәүештәр фекерҙең ысынбарлыҡҡа тура килеүе, раҫлау, баһа биреү мәғәнәһендәге модаль һүҙҙәргә күсә: *ысынлап (тотондо) – ысынлап, ысынлап та (Ысынлап, һин был турала уйла әле);*

*-са/-сә* аффикслы рәүештәр:

берәй фекерҙең, хәбәрҙең сығанағын белдереү мәғәнәһендәге модаль һүҙҙәр: *минеңсә, һинеңсә, уныңса, беҙҙеңсә, һеҙҙеңсә, уларса; минеңсә эшләне* (рәүеш) – *Минеңсә, былай эшләргә кәрәк ине* (модаль һүҙ);

бер фекерҙең икенсеһенә ҡаршы ҡуйылыуын белдереүсе модаль һүҙ: *киреһенсә (эшләгән) – киреһенсә (Кирeһенсә, мин был фекер менән килешәм).*

## Ымлыҡтарҙың яһалышы

### *Ымлыҡтарҙың морфематик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Айырым исемдәрҙең ҡабатланыуы һөҙөмтәһендә, аптырау, ғәжәпләнеү, ҡәнәғәтһеҙлек мәғәнәһендәге ымлыҡтар яһала: *атаҡ-атаҡ, алла-алла, бәрәкәт-бәрәкәт.*

**Ымлыҡтар нигеҙендә**

**Нигеҙҙәр ишләшеү**

Ҡайһы бер яңғыҙ ҡулланылыусы ымлыҡтар ишләшеп, парлы ымлыҡтар яһала, улар аптырау, ғәжәпләнеү, һоҡланыу (а) һәм шикләнеү, икеләнеү (б) мәғәнәләре аңлатып йөрөй: а) *ай-бай, ай-һай*; б) *ай-һай.*

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Ҡабатланыу ярҙамында яһалған ымлыҡтар түбәндәге мәғәнәләрҙә ҡулланыла:

аптырау, ғәжәпләнеү, асыуланыу, һоҡланыу мәғәнәһендә: *аһ-аһ, бәй-бәй, һай-һай;*

әсенеү, үкенеү, үпкәләү мәғәнәһендә: *ай-ай, уй-уй;*

ҡурҡыу мәғәнәһендә: *абау-абау.*

### *Ымлыҡтарҙың лексик-грамматик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

Бер төркөм исемдәр, аптырау, ғәжәпләнеү мәғәнәһендәге ымлыҡтар рәтенә күсеп, ымлыҡлашып йөрөй: *атаҡ, бәлеш, алла, бәрәкәт, бәрәс, бәрәмес, ҡарауыл, ләғнәт.*

**Сифаттар нигеҙендә**

Ғәрәп һәм фарсы телдәрендә сифат булып иҫәпләнгән бер төркөм һүҙҙәр башҡорт телендә йыш ҡына ымлыҡ функцияһын башҡарып йөрөй:

һоҡланыу, ҡәнәғәтлек, хуплау мәғәнәләрен белдереүсе ымлыҡтар: *афарин, сәләм, хуп, хуш, шөкөр;*

мыҫҡыллау, кәмһетеү, түбәнһетеп көлөү мәғәнәһендәге ымлыҡтар: *харап, һәләк.*

**Алмаштар нигеҙендә**

Ҡайһы бер һорау алмаштары айырым осраҡтарҙа ымлыҡлашып йөрөй: *Ҡайҙа, кит әле бынан! Ҡана, бир әле!*

### *Ымлыҡтарҙың лексик-синтаксик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

Ҡайһы бер исем һүҙбәйләнештәр һәм эйәһе функцияһында исемдәр ҡулланылған айырым һөйләмдәр, билдәле бер интонация һәм хис-тойғо менән әйтелеп, төрлө эмоциональ мөнәсәбәттәрҙе белдереүсе ымлыҡтар рәтендә йөрөй: а) *абау алла, әй әттәһе, эй илаһым, бына ғәләмәт, ай ләгин, бына тағы, бына һиңә тағы*; б) *ҡәһәр һуҡҡыры, бүре алғыры, эт талағыр.*

**Алмаштар нигеҙендә**

1. Ҡайһы бер алмаш һүҙбәйләнештәр, ымлыҡлашып, түбәндәге мәғәнәләрҙә ҡулланылып йөрөй:

аптырауҙы, ғәжәпләнеүҙе, һуҡраныуҙы белдереү: *бына һин уны, йә һин уны, бына һиңә тағы;*

һуҡраныуҙы, әрләүҙе белдергән: *бына һиңә, мин һине, мин һине теге;*

шелтәләүҙе, ризаһыҙлыҡты белдереүсе: *ах, һине; эй, быныуыны; эй, ошоно*;

шатланыуҙы, ҡәнәғәт булыуҙы, хуплауҙы белдереү: *ана шулай, бына шулай*;

2. Эйәһе функцияһын зат һәм күрһәтеү алмаштары башҡарып йөрөгән ҡайһы бер һөйләмдәр лексемалашып, түбәндәге мәғәнәләге ымлыҡтар рәүешендә йөрөй:

аптырау, ғәжәпләнеү мәғәнәһендә: *ҡара һин уны, ышан һин уға;*

ризаһыҙлыҡ, шелтә яһау мәғәнәһендә: *шул ғына етмәгәйне, шул ғына ҡалғайны, шул ғына кәрәк ине.*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

Хәбәрҙәре төрлө ҡылым формаларынан килгән һөйләмдәр айырым осраҡтарҙа лексемалаша һәм ымлыҡтар рәтенә күсә; уларҙың киң таралған төрҙәре түбәндәгеләр:

а) бер составлы ябай һөйләмдәр рәүешендә йөрөгәндәре; уларҙың ошондай мәғәнәүи төркөмдәрен күрһәтергә була:

аптырау, ғәжәпләнеү мәғәнәһендәге: *кит, китсе, китсе әле, кит унан, ҡара әле;*

иҫкәртеү, киҫәтеү, янау мәғәнәһендәге: *ҡара уны, ҡуй, ҡуйсы, ҡуйығыҙ әле, туҡта, кит бынан;*

үсәү, мыҫҡыл итеү мәғәнәһендәге: *алдың кәрәгеңде, таптың эҙләгәнеңде, шулай булмай торһон әле;*

үкенеү, ҡыҙғаныу, ҡайғырыуҙы белдереүсе: *ҡуй инде, кит инде, әйтмә инде, һөйләмә инде;*

б) ике составлы ябай һөйләмдәр нигеҙендә формалашҡандары түбәндәге мәғәнәләрҙе белдереп йөрөй:

ҡәһәрләү, нәфрәтләнеү, асыуланыу мәғәнәһендә: *ен һуҡһын, шайтан алғыры, йәнең йәһәннәмгә китһен;*

иҫкәртеү мәғәнәһендә: *Аллам һаҡлаһын, Хоҙай үҙе ярлыҡаһын, Алла ярҙам бирһен;*

изге теләк, хуплау мәғәнәһендә: *рәхмәт яуһын, рәхмәт төшһөн, йәнең йәннәттә булһын.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

«Эйе, юҡ» модаль һүҙҙәре менән «ла, та» көсәйтеү киҫәксәләренән торған һүҙбәйләнештәр ымлыҡтарға күсә һәм хуплау, шатланыу (а), шулай уҡ ризаһыҙлыҡ, кире ҡағыу (б) мәғәнәләрендә йөрөй: а) *эйе лә*; б) *юҡ та.*

## Саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәренең яһалышы

### *Саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәренең морфематик юл менән яһалышы*

Өндәшеү, саҡырыу, ҡыуалау, бойороу, тыйыу мәғәнәһендә ҡулланылып йөрөүсе һүҙҙәрҙең түбәндәге ысулдар менән яһалыу осраҡтары күҙәтелә.

**Аффикслашыу:**

***-сы/-се:*** *йәсе, ҡуйсы, ҡуйығыҙсы.*

**Нигеҙҙәр ҡушылыу:**

«*Әйҙә* саҡырыу һүҙе *үк* киҫәксәһе менән килгәндә»: *әйҙүк.*

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу:**

а) *йә-йә, ҡана-ҡана, ҡуй-ҡуй, мә-мә, әйҙә-әйҙә;*

б) *гелә-гелә, маһ-маһ, һәү-һәү;*

в) *на-на, көш-көш.*

### *Саҡырыу-ҡыуыу һүҙҙәренең лексик-синтаксик юл менән яһалышы*

Саҡырыу һүҙҙәре һәм *инде, һуң, әле* киҫәксәләренән торған һүҙбәйләнештәрҙең лексемалашыуы:

а) *йә әле, йәгеҙ әле, мә әле, мәгеҙ әле, ҡана әле, ҡанағыҙ әле, әйҙә әле, әйҙәгеҙ әле;*

б) *йә инде, йәгеҙ инде, ҡуй инде, ҡуйығыҙ инде, әйҙә инде, әйҙәгеҙ инде;*

в) *йә һуң, йәгеҙ һуң, мә һуң, мәгеҙ һуң, ҡана һуң, ҡанағыҙ һуң, әйҙә һуң, әйҙәгеҙ һуң.*

## Оҡшатыу һүҙҙәренең яһалышы

### *Оҡшатыу һүҙҙәренең морфематик юл менән яһалышы*

Оҡшатыу һүҙҙәре, башлыса, оҡшатыу һүҙҙәре нигеҙендә морфематик юлдың аффикслашыу, нигеҙҙәр ишләшеү һәм нигеҙҙәр ҡабатланыу ысулдары аша яһала.

**Аффикслашыу**

Тәбиғәт күренеше тауыштарын, предметтарҙың һуғылыуы, бәрелеүе һәм ҡағылыуынан ишетелгән тауыштарҙы белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр:

**-ыр /-ер, -ор /-өр:** *дөп – дөбөр, ҡалт – ҡалтыр, шап – шапыр, шылт – шылтыр, селт – селтер;*

**-тыр /-тер, -тор /-төр:** *ҡап – ҡаптыр, ҡоп – ҡоптор, топ – топтор, шап – шаптыр, шоп – шоптор;*

**-ғыр /-гер, -ғор /-гөр:** *даң – даңғыр, доң – доңғор, дөң – дөңгөр, зың – зыңғыр.*

**Нигеҙҙәр ишләшеү**

Кешеләрҙең тауыш, өн-ауаздарын белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр: *сар-сор, сыр-сыу, шау-шыу, шыш-быш;*

тәбиғәт күренеше тауыштарын, төрлө предметтарҙың бәрелеп-һуғылыуынан сыҡҡан тауыштарҙы белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр: *дөбөр-шатыр, даң-доң, шабыр-шобор, таҡ-тоҡ, шаҡ-шоҡ, ҡап-ҡоп;*

предметтарҙың хәрәкәтенә, тышҡы күренешенә бәйле һыноҡшаш һүҙҙәр: *лап-лоп, ҡылдый-былдый, алпан-толпан.*

**Нигеҙҙәр ҡабатланыу**

Кешеләрҙең тауыштарын, өн-ауаздарын белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр: *ха-ха-ха, хи-хи-хи, мыш-мыш, хыр-хыр;*

хайуандар, ҡош-ҡорт, бөжәк тауыштарын белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр: *ҡар-ҡар, сут-сут, саңҡ-саңҡ, мырҡ-мырҡ, сыр-сыр;*

тәбиғәттәге төрлө тауыштарҙы, предметтарҙың бәрелеп-һуғылыуынан сыҡҡан тауыштарҙы белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр: *зыр-зыр, дөбөр-дөбөр, сылт-сылт, тып-тып, шылтыр-шылтыр, селтер-селтер;*

төрлө предметтарҙың хәрәкәтенә, тышҡы билдәләренә һәм төҫөнә, тәбиғәт күренештәренә бәйле һыноҡшаш һүҙҙәр: *ем-ем, йылт-йылт, былҡ-былҡ, пылт-пылт, леп-леп;*

төрлө машина, механизм һәм музыка ҡоралдары тауыштарын белдереүсе өноҡшаш һүҙҙәр: *тыр-тыр, фыр-фыр, ғыж-ғыж, сыңсың, геү-геү.*

## Бәйләүестәрҙең яһалышы

### *Бәйләүестәрҙең морфематик юл менән яһалышы*

**Аффикслашыу**

Телдең тарихи үҫеше барышында «бер» һаны *-лән* аффиксы ҡушылыу һөҙөмтәһендә бергәлек, ниәт-маҡсат, ҡорал мәғәнәләрен белдереүсе «менән» бәйләүесе формалаша: *бер + -лән > берлән > белән > менән: ағай менән, ҡәләм менән.*

### *Бәйләүестәрҙең лексик-грамматик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

Яһаусы нигеҙгә бәйле грамматик мөнәсәбәттәрҙе белдереү өсөн, төрлө килеш формаларындағы исемдәр бәйләүестәргә күсә:

төп килештә: *буйы, ише, көйө, самаһы, тыш – көн буйы, йылы көйө, илле самаһы;*

төбәү килештә: *башҡа, буйына, көйгә, көйөнә – кешенән башҡа, ай буйына;*

урын-ваҡыт килештә: *арҡала, арҡаһында, буйында, хаҡта, тураһында, мәлдә, рәүештә – йылға буйында, эш тураһында, һеҙҙең хаҡта;*

сығанаҡ килештә: *тарафтан, тарафынан – халыҡ тарафынан, беҙҙең тарафтан.*

**Сифаттар нигеҙендә**

Ҡайһы бер сифаттар яһаусы нигеҙгә бәйле грамматик мөнәсәбәттәрҙе белдереп йөрөүсе бәйләүестәргә күсә: *бүтән* (кеше) – *бүтән: һинән бүтән бирәү ҙә булмаған; төҫлө* (ҡәләмдәр) – *төҫлө: былай килгән төҫлө тойолдо; кире* (йүнәлеш) – *кире: төштән кире.*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

Бәйләүестәр рәтенә, ғәҙәттә, түбәндәге затһыҙ ҡылым формалары күсә:

исем ҡылымдар: *ғәмәлгә ашыу – ашыу: ике йөктән ашыу утын; ҡайҙан килеш – килеш: аяҡ өҫтө баҫҡан килеш;*

сифат ҡылымдар: *ҡараған + да – ҡарағанда: тәртибенә ҡарағанда; ҡарамаҫ + тан – ҡарамаҫтан: ямғыр яуыуға ҡарамаҫтан; сағыштырған + да: эштең һөҙөмтәләрен сағыштырғанда;*

рәүеш ҡылымдар:

***-а/-ә/-й:** аша, күрә, ҡала, ҡарай, үтә; күпер аша, урғә ҡарай ынтылды;*

***-п:** башлап, буйлап, ҡарап, тип; урам буйлап, иртәнән башлап;*

***-май (ынса):** ҡарамай (ынса); Утҡа-һыуға ҡарамай алға ташландылар.*

**Рәүештәр нигеҙендә**

Бер төркөм рәүештәр айырым осраҡтарҙа бәйләүесләшә һәм төрлө грамматик функциялар башҡарып йөрөй: *һуң* (ҡайтты) – *һуң: эштән һуң; элек* (булған хәл) – *элек: был ваҡиғанан элек; аҙаҡ* (килерһең) – *аҙаҡ: докладтан аҙаҡ.*

## Теркәүестәрҙең яһалышы

### *Теркәүестәрҙең морфематик юл менән яһалышы*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

**Нигеҙҙәр ҡушылыу** ысулы менән:

бүлеү теркәүесе: «йә» һүҙе + «иһә» ҡылым формаһы: *йәиһә; бөгөн йәиһә иртәгә килер;*

ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре: «юҡ» һүҙе + «иһә» ҡылым формаһы: *югиһә; Ашығығыҙ, югиһә һуңларһығыҙ.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

**Нигеҙҙәрҙе ҡабатлау** ысулы менән: *аллә, белмәйем* (модаль һүҙ) – *аллә ... аллә* (ҡабатлаулы теркәүес): *Был хәл аллә үткән йыл, аллә өсөнсө йыл булған.*

**Саҡырыу һүҙҙәре нигеҙендә**

**Нигеҙҙәр ишләшеү**

«Йә» һүҙе ҡабатланып килгәндә, бүлеү теркәүестәре барлыҡҡа килә: *йә, кил* (саҡырыу һүҙе) – *йә ... йә* (теркәүестәр): *йә һин, йә мин.*

**Теркәүестәр нигеҙендә**

**Нигеҙҙәр ҡушылыу**

Ҡайһы бер теркәүестәр үҙ-ара ҡушылып килә һәм ҡушма теркәүестәр хасил итә:

бүлеү теркәүесе: «йә» теркәүесе + «ки» теркәүесе = йәки: *бөгөн йәки иртәгә;*

оҡшатыу-сағыштырыу теркәүесе: «гүйә» теркәүесе + «ки» теркәүесе = *гүйәки: Һүҙең үтмәҫ урындарҙа әмер итмәк – гүйәки бағананы ташҡа ҡаҡмаҡ* (М. Ғафури).

### *Теркәүестәрҙең лексик-грамматик юл менән яһалышы*

**Һандар нигеҙендә**

«Бер» һаны, ҡабатланып килгәндә, бүлеү функцияһын башҡарыусы теркәүескә күсә: *бер – бер ... бер: Бер йылытып, бер һыуытып ебәрә.*

**Алмаштар нигеҙендә**

Ҡайһы бер алмаштар, ҡабатланып килгәндә, бүлеү теркәүестәре функцияһын башҡарып йөрөй: *ни* (һорау алмашы) – *ни ... ни: Машиналар колоннаһы ни алға, ни артҡа китә алмай туҡтап ҡалды; ул* (күрһәтеү алмашы) – *ул ... ул*: *Ул буй тиһеңме, ул һын* (Х. Мохтар).

«Шул» күрһәтеү алмашының төбәү килеш формаһы һөҙөмтә теркәүесенә күсә: *шул – шуға: Көндәр аяҙ торҙо, шуға бесән эше ыңғай барҙы.*

**Рәүештәр нигеҙендә:**

1) бер төркөм рәүештәр теркәүесләшә һәм түбәндәге төркөмсәләргә ҡарай:

йыйыу теркәүестәре: *тағы* (кил) – *тағы: Ағайым, еңгәм, тағы күрше апай бар ине; йәнә* (ҡайтҡан) – *йәнә: Машинаға үҙҙәре йәнә балалары ултырғайны;*

ҡаршы ҡуйыу теркәүесе: *тик* (тор) – *тик: Иртәгә килерһең, тик һуңлама;*

2) ҡайһы бер рәүештәр, ҡабатлаулы ҡулланыу һөҙөмтәһендә, бүлеү теркәүестәренә күсә: *әле* (ҡайтты) – *әле ... әле: Әле теге, әле был яҡҡа ҡаранды;* (икәүһе лә) *берсә* (ҡуҙғалды) – *берсә ... берсә: Шул тирәлә өйөрөлөргә тотондо күк күгәрсендәр. Берсә, бейеккәрәк күтәрелеп, ҡанат ҡаҡтылар, берсә түбәнгәрәк төштөләр* (Т. Килмөхәмәтов).

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

«Бар» модаль һүҙе, эйәлек категорияһы аффиксы ҡабул итеп, ҡаршы ҡуйыу теркәүесе функцияһын башҡарып йөрөй: *бар + ы – бары (= ә, тик): Халыҡ тиҙ йыйылды, бары ул ғына оҙаҡланы.*

### *Теркәүстәрҙең лексик-синтаксик юл менән яһалышы*

**Алмаштар нигеҙендә**

Алмаш һүҙбәйләнештәрҙең теркәүестәргә күсеү осраҡтары түбәндәгеләр:

йыйыу теркәүесе: «шулай» алмашы + «уҡ» киҫәксәһе: *шулай уҡ;*

ҡаршы ҡуйыу теркәүесе: «шулай» алмашы + «ҙа» киҫәксәһе: *шулай ҙа;*

һөҙөмтә һәм сәбәп мәғәнәләрендә йөрөгән теркәүестәр:

а) «шул» алмашының грамматик формалары + бәйләүестәр: *шуға күрә, шуның өсөн, шуның һөҙөмтәһендә, шуның арҡаһында, шул арҡала, шул сәбәпле;*

б) «шулай» алмашы + «ит-еп, бул-ғас» ярҙамсы ҡылымдары: *шулай итеп, шулай булғас.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

«Бар» модаль һүҙе менән «тик» теркәүесенән торған һүҙбәйләнеш нигеҙендә ҡаршы ҡуйыу теркәүесе барлыҡҡа килә: *бары тик; Бөтәһе лә килде, бары тик һин булманың.*

**Теркәүестәр нигеҙендә**

Теркәүестәрҙең һүҙбәйләнештәргә берләшеүе һөҙөмтәһендә түбәндәге ҡушма теркәүестәр формалашҡан:

ҡаршы ҡуйыу теркәүестәре: *ә ләкин, үә ләкин, әммә ләкин, ә шулай ҙа, тик шулай ҙа, ләкин шулай ҙа, иллә-мәгәр;*

шарт теркәүестәре: *әгәр ҙә, әгәр ҙә мәгәр, әгәр ки.*

## Киҫәксәләрҙең яһалышы

### *Киҫәксәләрҙең фонологик юл менән яһалышы*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

Баҫымдың үҙгәреүе һөҙөмтәһендә «үтә» ҡылым формаһы көсәйтеү киҫәксәһенә күсә: *ваҡыт үтә́ – у́тә (= бик): Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа* (Әйтем).

## *Киҫәксәләрҙең лексик-грамматик юл менән яһалышы*

**Исемдәр нигеҙендә**

Ғәрәп теленән үҙләштерелгән «ғәләмәт» исеме айырым шарттарҙа көсәйтеү киҫәксәһе рәүешендә ҡулланылып йөрөй: *килешмәүсәнлек ғәләмәте – ғәләмәт (= бик, бигерәк): ғәләмәт матур.*

**Сифаттар нигеҙендә**

Бер төркөм алмаштар айырым осраҡтарҙа киҫәксәләр рәтендә йөрөй:

1) самалау, икеләнеү мәғәнәһендә: «ни» һорау алмашы – *ни*: *Ат ни, ашыҡһағыҙ, күптән егелгән;*

2) раҫлау мәғәнәһендә: «теге, ул, шул» күрһәтеү алмаштары – *теге, ул, шул: Уны бында табырһың теге. Ағайым бая уҡ ҡайтты ул. Кисә килде шул.*

**Ҡылымдар нигеҙендә**

Ҡайһы бер ҡылым формалары киҫәксәләр рәтенә күскән:

1) билдәләү киҫәксәләре: *ҡап- – ҡап* (= нәҡ): *ҡап уртаһы; тап- – тап (= нәҡ): тап үҙе;*

2) раҫлау киҫәксәләре: (өйгә) *инде – инде: ҡайтты инде;* (ул нимә) *ти – улар кисә үк ҡайтҡандар, ти;*

3) сикләү киҫәксәһе: (уҡыны) *иһә – иһә: аҡланда иһә бесәнлек.*

**Рәүештәр нигеҙендә**

Бер төркөм рәүештәр билдәле шарттарҙа киҫәксәләргә күсәләр һәм түбәндәге мәғәнәләрҙә йөрөйҙәр:

1) көсәйтеү киҫәксәләре: *айырата* (һеҙҙе һағына) – *айырата* (= бик, бигерәк тә): *айырата көслө; уғата* (ел көсәйҙе) – *уғата* (= бик, бигерәк тә): *уғата көслө; һәләк* (уңған икән иген) – *һәләк* (= бик, бигерәк): *һәләк егәрле; ифрат* (көсәйҙе) – *ифрат* (= бик): *ифрат алыҫ; гәйәт* (артты) – *гәйәт* (= бик): *гәйәт ҙур;*

2) самалау, икеләнеү киҫәксәһе: *һуң* (ҡайтты) – *һуң* (=бәлки, моғайын): *ҡайтырмын һуң;*

3) сикләү киҫәксәһе: *тик* (тор) – *тик* (= фәҡәт): *тик һин генә.*

**Модаль һүҙҙәр нигеҙендә**

«Әллә» модаль һүҙе айырым осраҡтарҙа самалау, икеләнеү мәғәнәһендәге киҫәксәгә күсеп йөрөй: *әллә* (модаль һүҙ): *Әллә, уның әйткәнен тыңлармы икән?* – *әллә* (киҫәксә): *Ағайым ҡайтты инде әллә.*

«Бар» модаль һүҙе эйәлек формаһында сикләү киҫәксәһенә күсә: *бары һин генә ҡалдың.*

# ӘҘӘБИӘТ

## Рус телендә


1. *Абдуллина Г. Р.* Башкирский язык. Морфонология. Уфа: Гилем, 2004. 128 с.

2. *Абдуллина Г. Р.* Наращение морфем при аффиксальном словообразовании в башкирском языке // Фундаментальные исследования. М., 2014. № 6 (часть 7). С. 1535–1538.

3. *Абдуллина Г. Р.* О месте морфонологии в языковой иерархии // Роль личности в историко-культурном пространстве: Материалы Международной научно-практической конференции. Уфа: РИЦ БашГУ, 2014. С. 13–17.

4. *Абдуллина Г. Р.* Словоизменение башкирского языка. Уфа: Гилем, 2008. 124 с.

5. *Абдуллина Г. Р.* Усечение производящей основы как регулярное морфонологическое явление в словообразовательной системе башкирского языка // Вестник Томского государственного университета. Филология. 2014. № 2 (28). С. 5–15.

6. *Абдуллина Г. Р.* Усечение формообразующих и словоизменительных основ в современном башкирском языке // Фундаментальные исследования. М., 2014. № 3 (часть 2). С. 432–435.

7. *Абдуллина Г. Р.* Формообразование башкирского языка. Уфа: Гилем, 2008. 236 с.

8. *Абдуллина Г. Р.* Формообразовательные и словоизменительные категории в современном башкирском языке: функционально-семантический аспект. Уфа, 2013. 332 с.

9. *Азарх Ю. С.* Словообразование и формообразование существительных в истории русского языка. М.: Наука, 1984. 247 с.

10. *Азимов П.* Префиксация в туркменском языке. Ашхабад, 1947. 24 с.

11. *Азнагулов Р. Г.* Реликтовые формы словообразования башкирского языка // Советская тюркология, 1983. № 5. С. 57–63.

12. *Алиева З. И.* Сложные глаголы в современном азербайджанском языке // Труды Института литературы и языка имени Низами АН СССР. Серия языкознания. Баку, 1957. Т. VII. С. 129–160.

13. *Ахметов М. А.* Неаффиксальные средства выражения грамматических значений в башкирском языке // Советская тюркология, 1984. № 5. С. 32–39.

14. *Ахметов М.А.* Синкретичные глагольно-именные корни – основы в языке орхоно-енисейских памятников // Вопросы башкирского языкознания. Уфа, 1975. С. 164–167.

15. *Ахтямов М. Х.* Образование лексико-грамматических омонимов (омоформ) в башкирском языке // Башкирская лексика. Тематический сборник / Под редакцией Т. М. Гарипова. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1966. С. 17–25.

16. *Ахтямов М. Х.* Омоморфемы в башкирском языке // Вопросы башкирского языкознания / Под редакцией А. Г. Биишева, Н. Х. Максютовой, З. Г. Ураксина (отв. редактор). Уфа: БФАН СССР, 1964. № 4. С. 84–97.

17. *Ахтямов М. Х.* К подаче омонимов в «Башкирско-русском словаре» // Башкирская лексика. Тематический сборник / Под редакцией Т. М. Гарипова. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1966. С. 153–160.

18. *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты и их отношение к литературному языку / Под редакцией Н. К. Дмитриева. М.: МГУ, 1955. 112 с.

19. *Баскаков Н. А.* Каракалпакский язык: Фонетика и морфология. Ч. I. М.: Издательство АН СССР, 1952. 544 с.

20. *Баскаков Н. А.* О границах словообразования и словоизменения в тюркских языках // Советская тюркология, 1966. № 2. С. 3–11.

21. *Баскаков Н. А.* Порядок и иерархия аффиксов в основе слова в тюркских языках // Морфологическая типология и проблема классификации языков. М.: Наука, 1965. С. 121–128.

22. *Баскаков Н. А.* Явление лексикализации аффиксов в тюркских языках // Советская тюркология, 1986. № 2. С. 6–8.

23. *Бозиев А. Ю.* Словообразование имен существительных, прилагательных и наречий в карачаево-балкарском языке. Нальчик, 1965. 168 с.

24. *Виноградов В. В.* Вопросы современного русского словообразования // Виноградов В. В. Избранные труды. Исследования по русской грамматике. С.: Наука, 1975. С. 155–265.

25. *Виноградов В. В.* Словообразование и его отношение к грамматике и лексикологии // Виноградов В. В. Избранные труды. Исследования по русской грамматике. М.: Наука, 1975. С. 155–165.

26. *Ганиев Ф. А.* Глагольные образования на *-ла/-лә* в современном татарском языке: Опыт синхронного и системного изучения // Советская тюркология, 1974. № 5. С. 3–12.

27. *Ганиев Ф. А.* Конверсия в татарском языке. Казань: Татарское книжное издательство, 1985. 108 с.

28. *Ганиев Ф. А.* Образование сложных слов в татарском языке. М.: Наука, 1982. 150 с.

29. *Ганиев Ф. А.* Сложные глаголы в татарском языке // Советская тюркология, 1972. № 3. С. 63–66.

30. *Ганиев Ф. А.* Суффиксальное словообразование в современном татарском литературном языке. Казань: Татарское книжное издательство, 1974. 231 с.

31. *Ганиев Ф. А.* Фонетическое словообразование в татарском языке. Казань, 1973. 69 с.

32. *Гарипов Т. М.* Башкирское именное словообразование. Уфа, 1959. 224 с.

33. *Гарипов Т. М.* Н. К. Дмитриев и проблемы башкирского имяобразования // Актуальные вопросы тюркской филологии. Уфа, 1991. С. 13–18.

34. *Гарипов Т. М.* О новых явлениях в словообразовании прилагательных // Исследования по грамматике современного башкирского языка. Уфа, 1979. С. 5–23.

35. *Гочияева С. А.* Наречие в карачаево-балкарском языке. Черкесск: Ставропольское книжное издательство, 1973. 119 с.

36. Грамматика азербайджанского языка: Фонетика. Морфология. Синтаксис. Баку: Элм, 1971. 414 с.

37. Грамматика карачаево-балкарского языка: Фонетика. Морфология. Синтаксис. Нальчик: Эльбрус, 1976. 572 с.

38. Грамматика ногайского языка: Фонетика и морфология. Ч. I. Черкесск, 1973. 320 с.

39. Грамматика современного башкирского литературного языка. М.: Наука, 1981. 495 с.

40. *Гузеев В. Г.* Некоторые вопросы теории тюркского словоизменения в функционально-семантическом аспекте // Советская тюркология, 1965. № 2. С. 3–12.

41. *Джурабаева М.* Об аффиксальной омонимии в тюркских языках (на материале узбекского языка) // Советская тюркология, 1971. № 6. С. 17–25.

42. *Дмитриев Н. К.* Грамматика башкирского языка. М.-Л.: Издательство АН СССР, 1948. 276 с.

43. *Дмитриев Н. К.* О парных словосочетаниях в башкирском языке // Издательство АН СССР. Отделение гуманитарных наук. Серия VII. 1930. № 7. С. 501–522.

44. *Дмитриев Н. К.* Строй тюркских языков. М.: Издательство восточной литературы, 1962. 608 с.

45. *Дмитриев Н. К.* Этюды по тюркскому словообразованию // Советская тюркология, 1977. № 1. С. 60–73.

46. *Дыренкова Н. П.* Грамматика шорского языка. М.-Л., 1941. 308 с.

47. *Егоров В. Г.* Словосложение в тюркских языках // Структура и история тюркских языков. М.: Наука, 1991. С. 95–107.

48. *Жабелова Л. Ж.* Сложные имена существительные в современном карачаево-балкарском языке // Советская тюркология, 1987. № 1. С. 95–96.

49. *Жирмунский В. М.* О границах слов // Вопросы языкознания, 1961. № 3. С. 3–21.

50. *Жирмунский В. М.* Об аналитических конструкциях // Аналитические конструкции в языках различных типов. М.-Л.: Наука, 1965. С. 5–57.

51. *Зайнуллин М. В.* Словообразовательные и семантические типы глагольных микротопонимов в башкирском языке // Ономастика Поволжья. Вып. 3. Уфа, 1973. С. 335–338.

52. *Земская Е. А.* Современный русский язык. Словообразование. М.: Просвещение, 1973. 303 с.

53. *Зенков Г. С.* Вопросы теории словообразования. Фрунзе, 1969. 165 с.

54. *Исенгалиева В.* Тюркские глаголы с основами, заимствованными из русского языка. Алма-Ата, 1966. 244 с.

55. *Ишбаев К. Г.* Башкирский язык. Морфемика. Словообразование: Учебное пособие. Уфа: Гилем, 2000. 247 с.

56. *Ишбаев К. Г.* Инфинитив в башкирском языке. Уфа, 1982.

57. *Ишбердин Э. Ф.* Историческое развитие лексики башкирского языка. М.: Наука, 1986. 152 с.

58. *Ишбердин Э. Ф.* Фонетическое словообразование в башкирском языке // Исследования по грамматике современного башкирского языка. Уфа, 1979. С. 5–23.

59. *Кагарманов Г. Г.* Способы образования общественно-политических терминов башкирского языка // Вопросы башкирского языкознания / Под редакцией А. Г. Биишева, Н. Х. Максютовой, З. Г. Ураксина (отв. редактор). Уфа: БФАН СССР, 1975. С. 140–146.

60. *Кенешбекова Н. А.* Адъективация причастий в киргизском и русском языках // Проблема двуязычия и языковой коммуникации. Карачаевск, 1990. С. 275–276.

61. *Киекбаев Дж. Г.* Введение в урало-алтайское языкознание. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1972. 152 с.

62. *Кононов А. Н.* Грамматика современного турецкого литературного языка. М.-Л.: Издательство АН СССР, 1956. 570 с.

63. *Кононов А. Н.* Грамматика современного узбекского литературного языка. М.-Л. , 1960. 446 с.

64. *Кононов А. Н.* О природе тюркской агглютинации // Вопросы языкознания, 1976. № 4. С. 3–17.

65. *Кубрякова Е. С.* Деривация, транспозиция, конверсия // Вопросы языкознания. № 5. С. 15–18.

66. *Кубрякова Е. С.* О формообразовании, словоизменении, словообразовании и их соотношении // Издание АН СССР. Отделение литературы и языка. 1976. Т. 35. № 6. С. 514–526.

67. *Кубрякова Е. С.* Что такое словообразование. М.: Наука, 1965. 77 с.

68. *Левковская К. А.* Словообразование. М.: Издательство МГУ, 1954. 127 с.

69. *Лопатин В. В.* Русская словообразовательная морфемика. М.: Наука, 1977. 315 с.

70. *Максимов В. И.* Суффиксальное словообразование имен существительных в русском языке. Л.: Издательство ЛГК, 1975. 224 с.

71. *Максютова Н. Х.* Восточный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1976. 292 с.

72. *Марков В. М.* О семантическом способе словообразования в русском языке. Ижевск, 1981. 295 с.

73. *Мельников Г. П.* Теория словоразграничения и морфологический строй языка // Башкирская лексика. Тематический сборник / Под редакцией Т. М. Гарипова. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1966. С. 67–88.

74. *Мирзоев Р. С.* Русское словообразование. Баку: Маариф, 1986. 244 с.

75. *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 272 с.

76. *Муратов С. Н.* О тюркских аффиксах *-таш, -даш* и *-турук, -дурук* в свете данных других алтайских языков // Проблемы общности алтайских языков. Л.: Наука, 1971. С. 331–350.

77. *Муратов С. Н.* Устойчивые словосочетания в тюркских языках. М.: Издательство восточной литературы, 1961. 131 с.

78. *Мурясов Р. З.* Словообразование и функционально-семантические категории. Уфа, 1993. 277 с.

79. *Мурясов Р. З.* Словообразование в теории номинации // Вопросы языкознания, 1969. № 3. С. 39–53.

80. *Мусаев К. М.* Грамматика караимского языка: Фонетика и морфология. М.: Наука, 1964. 344 с.

81. *Наджип Э. Н.* Современный уйгурский язык. М., 1960. 133 с.

82. *Немченко В. Н.* Современный русский язык: Словообразование. М.: Высшая школа, 1984. 235 с.

83. *Орузбаева Б. О.* Словообразование в киргизском языке. Фрунзе, 1964. 102 с.

84. *Покровская Л. А.* Грамматика гагаузского языка. М.: Наука, 1964. 298 с.

85. *Покровская Л. А.* Формообразование и его отношение к словообразованию и словоизменению в тюркских языках // Советская тюркология, 1990. № 1. С. 3–11.

86. *Потиха З. А.* Современное русское словообразование. М.: Просвещение, 1970. 118 с.

87. *Рамазанов К. Т.* Парные слова в тюркских языках юго-западной группы // Советская тюркология, 1971. № 6. С. 101–112.

88. *Севортян Э. В.* Аффиксы глаголообразования в азербайджанском языке: Опыт сравнительного исследования. М.: Издательство восточной литературы, 1962. 643 с.

89. *Севортян Э. В.* Аффиксы именного словообразования в азербайджанском языке: Опыт сравнительного исследования. М.: Наука, 1966. 438 с.

90. *Севортян Э. В.* Грамматические и семантические признаки аналитических конструкций в отличие от свободных словосочетаний в тюркских языках // Аналитические конструкции в языках различных типов. М.-Л.: Наука, 1963. С. 233–239.

91. *Севортян Э. В.* Морфологическое строение слова в связи с другими его характеристиками (по данным тюркских языков) // Тюркологический сборник. М.: Наука, 1972. С. 132–144.

92. *Севортян Э. В.* Словообразование в тюркских языках // Исследования по сравнительной грамматике тюркских языков. Ч. II. Морфология. М.: Издательство АН СССР, 1956. С. 314–328.

93. *Смирницкий А. И.* К вопросу о слове: Проблема тождества сло-ва // Труды Института языкознания АН СССР. Т. 4. М., 1954. С. 3–49.

94. *Смирницкий А. И.* Лексическое и грамматическое в слове // Вопросы грамматического строя. М., 1955. С. 12–53.

95. Современный русский язык. Лексика и фразеология. Фонетика, орфоэпия. Графика и орфография. Словообразование. Морфология: Учебное пособие для вузов / Под редакцией Д. Э. Розенталя, 3-е исправленное издание. М.: Высшая школа, 1979. 317 с.

96. Современный русский язык: Учебник / Под редакцией П. А. Леканта. М.: Высшая школа, 1982. 399 с.

97. Современный татарский литературный язык: Лексикология, фонетика, морфология. М.: Наука, 1969. 380 с.

98. Сравнительно-историческая грамматика тюркских языков. М.: Наука, 1984. 484 с.

99. Татарская грамматика: В трех томах. I том. Введение, фонетика, фонология, просодика, графика и орфография, орфоэпия, основные понятия грамматики, морфемика, морфонология, словообразование / Под редакцией М. З. Закиева, Ф. А. Ганиева, К. З. Зиннатуллиной. Казань, 1995. 584 с.

100. *Тенишев Э. Р.* Строй саларского языка. М.: Наука, 1976. 308 с.

101. Теория грамматики: Морфология и словообразование // Сборник научных аналитических обзоров. М.: Инион, 1992. 143 с.

102. *Терегулова Р. Н.* Русские заимствования в башкирском языке. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1957. 88 с.

103. *Тыбыкова А. Т.* Сложные глаголы в алтайском языке. Горно-Алтайск: Алтайское книжное издательство, 1966. 63 с.

104. *Убрятова Е. И.* Парные слова в якутском языке // Язык и мышление. М., 1948. Вып. II. С. 297–328.

105. *Улуханов И. С.* Словообразовательная семантика в русском языке и принципы ее описания. М.: Наука, 1977. 256 с.

106. *Ураксин З. Г.* Фразеология башкирского языка. М.: Наука, 1975. 192 с.

107. *Хабичев М. А.* Именное словообразование и формообразование в кумыкских языках. М.: Наука, 1989. 318 с.

108. *Хабичев М. А.* Карачаево-балкарское именное словообразование. Черкесск: Ставропольское книжное издательство, 1971. 302 с.

109. *Харитонов А. И.* Современный якутский язык: Фонетика и морфология. Ч. I. Якутск: Якутское книжное издательство, 1947. 304 с.

110. *Шанский Н. М.* Очерки по русскому словообразованию. М.: Издательство МГУ. 1968. 310 с.

111. *Шанский Н. М., Иванов В. В.* Современный русский язык: Введение. Лексика. Фразеология. Фонетика. Орфография. Ч. I. М.: Просвещение, 1991. 191 с.

112. *Шипова Е. Н.* Состав слова // Сопоставительная грамматика русского и казахского языков. Алма-Ата: Наука, 1966. С. 7–17.

113. *Щербак А. М.* Очерки по сравнительной морфологии тюркских языков (глагол). Л.: Наука, 1981. 183 с.

114. *Щербак А. М.* Очерки по сравнительной морфологии тюркских языков (имя). Л.: Наука, 1977. 192 с.

115. *Щербак А. М.* Очерки по сравнительной морфологии тюркских языков (наречие, служебные части речи, изобразительные слова). Л.: Наука, 1987. 151 с.

116. *Юлдашев А. А.* Аналитические формы глагола в тюркских языках. М.: Наука, 1965. 276 с.

117. *Юлдашев А. А.* Вопросы формирования норм башкирского национального языка. Вопросы формирования и развития национальных языков // Труды Института языкознания. Т. 4. М.: Наука, 1960. С. 274–294.

118. *Юлдашев А. А.* К характеристике тюркских сложных слов // Вопросы тюркологии. Баку: Элм, 1971. С. 148–164.

119. *Юлдашев А. А.* К характеристике тюркских сложных слов // Вопросы языкознания, 1969. № 5. С. 66–79.

120. *Юлдашев А. А.* Конверсия в тюркских языках и ее отражение в словарях // Советская тюркология, 1970. № 1. С. 70–81.

121. *Юлдашев А. А.* Лексикализация тюркских грамматических форм как объект словообразовательной морфологии и словаря // Вопросы языкознания, 1977. № 1. С. 62–73.

122. *Юлдашев А. А.* Основные типы производных глаголов с аффиксом -ла/-лә в башкирском языке // Исследования по тюркологии. Алма-Ата: Наука, 1969. С. 92–103.

123. *Юлдашев А. А.* Отыменные глаголы *-лан/-лән* в башкирском языке // Башкирская лексика. Тематический сборник / Под редакцией Т. М. Гарипова. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1966. С. 125–130.

124. *Юлдашев А. А.* Система словообразования и спряжения глагола в башкирском языке. М.: Издательство АН СССР, 1958. 195 с.

125. *Юлдашев А. А.* Словообразование и модификация глагола с помощью форм залога // Исследования по грамматике современного башкирского языка. Уфа, 1979. С. 24–41.

126. Языки народов СССР. М.: Наука, 1966. Т. 2: Тюркские языки. 531 с.

## Башҡорт телендә

1. *Абдуллина Г. Р.* Башҡорт телендә морфонологик күренештәр // Башҡортостан уҡытыусыһы. 2000. №4. 28–30-се бб.

2. *Абдуллина Г. Р.* Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә морфонологик элементтар // Изучение и преподавание башкирского языка и литературы в средней и высшей школах: Материалы республиканской научно-практической конференции. Уфа, 2003. С. 25–26.

3. *Абдуллина Г. Р.* Морфонология // Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 2012. 190–195-се бб.

4. *Абдуллина Г. Р.* Төрки телдәре рәтендә башҡорт теленең морфонологияһы // Ядкяр. 2001. №2. С. 92–100.

5. *Аҙнабаев Ә. М., Псәнчин В. Ш.* Башҡорт теленең тарихи морфологияһы: Сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976. 176 б.

6. *Айсыуаҡов Ш.* Хәҙерге башҡорт телендә калькалар // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1973. № 11. 49–50-се бб.

7. Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Яуаплы мөхәррире: К. Ғ. Ишбаев. Өфө: Китап, 2012. 616 бит.

8. *Биишев А. Ғ.* Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышы // Вопросы башкирского языкознания. Өфө, 1973. 177–181-се бб.

9. *Дмитриев Н. К.* Башҡорт теленең грамматикаһы. Өфө: Башгосиздат, 1950. 300 б.

10. *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәренең һүҙьяһалыш парадигматикаһы. Өфө: Ғилем, 2013. 156 б.

11. *Ишбаев К. Ғ.* Башҡорт теленең һүҙьяһалышы / Рәсәй Фәндәр академияһы. Өфө ғилми үҙәге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. Стәрлетамаҡ педагогия институты. Өфө, 1994. 264 б.

12. *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең морфемикаһы, һүҙьяһалышы һәм морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2006. 178 б.

13. *Ишбаев К. Ғ., Абдуллина Г. Р.* Башҡорт теленең морфонологияһы. Өфө: Ғилем, 2000. 84 б.

14. *Ишбирҙин Э. Ф., Ғәләүетдинов И. Ғ., Халиҡова Р. Х.* Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө: Китап, 1993. 320 б.

15. *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 212 б.

16. *Ишбулатов Н. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Һүҙ төркөмдәренең бүленеше. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1962. 128 б.

17. *Ишбулатов Н. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Әҙәби телдең нормалар системаһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. 144 б.

18. *Ишбулатов Н. Х., Зәйнуллин М. В.* Хәҙерге башҡорт әҙәби теле: Фонетика. Морфология. Өфө: БДУ, 1986. 179 б.

19. *Ишбулатов Н. Х., Әхтәмов М. Х.* Хәҙерге башҡорт теле. Фонетика, графика, орфография, орфоэпия, грамматиканың төп төшөнсәләре, морфемика, морфонология, һүҙьяһалыш: Уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Башҡорт дәүләт университеты, 2002. 324 б.

20. *Йосопов Х. Ғ.* Башҡорт теленең фразеологияһы: Методик ҡулланма. Өфө, 1963. 99 б.

21. *Йосопов Х. Ғ.* Сифат ҡылымдарҙың ҡайһы бер мәғәнә үҙенсәлектәре // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1965. № 2. 29–30-сы бб.

22. *Йосопов Х. Ғ.* Хәҙерге башҡорт телендә *-аһы* ялғаулы сифат ҡылымдар // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1980. № 4. 30–32-се бб.

23. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең стилдәре һәм стилистикаһына ҡарата // Ағиҙел, 1966. № 8. 78–88-се бб.

24. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең фонетикаһы: Тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1958. 212 б. Өфө: БДУ, 2002. 212 б.

25. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше: Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына, студенттарға, драма һәм эстрада артистарына, радио һәм телевидение студияһы дикторҙарына ҡулланма. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. 68 б.

26. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теле: Башҡорт дәүләт университетының синтәге студенттары өсөн лекциялар. Өфө: БДУ, 1966. 146 б.

27. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы: Уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1966. 276 б. 2-се баҫма, төҙәтелгән. Өфө: БДУ, 2002. 264 б.

28. *Кейекбаев Ж. Ғ., Ғәлләмов А. А., Фәритов Х. С.* һ. б. Башҡорт теле: Педагогия училищелары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1968. 412 б.; 2-се баҫмаһы, 1976. 414 б.; 3-сө баҫмаһы, 1983. 400 б.

29. *Кейекбаев Ж. Ғ., Сәйетбатталов Ғ. Ғ., Ишбирҙин Э. Ф.* һ. б. Башҡорт теле: Педагогия училищелары өсөн дәреслек. Өфө: Китап, 1997. 352 б.

30. *Псәнчин В. Ш.* Мостай Кәрим – һүҙ оҫтаһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. 112 б.

31. *Псәнчин В. Ш.* Телдең күркәмлек саралары: Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. 128 б.

32. *Псәнчин В. Ш.* Хәҙерге башҡорт телендә яңы һүҙҙәр // Вопросы башкирского языкознания. Уфа, 1972. 140–157-се бб.

33. *Сәйетбатталов Ғ. Ғ.* Башҡорт теленең стилистикаһы менән пунктуацияһы. Беренсе китап. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1978. 152 б.; икенсе китап, 1985. 144 б.

34. *Ураҡсин З. Ғ.* Башҡорт телендә синонимдар // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1978. № 4. 29–33-сө бб.

35. *Ураҡсин З. Ғ.* Фразеологик синонимдар хаҡында // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1964. № 8. 29–32-се бб.

36. *Фәритов Х. С., Ғүмәров Ғ. Ғ.* Башҡорт теле. Лексика, фонетика, морфология: Педагогия училищелары өсөн дәреслек. I киҫәк. Төҙәтелгән һәм өҫтәлгән өсөнсө баҫмаһы. Өфө: Башгосиздат, 1953. 252 б.

37. *Халиҡова Р. Х.* Башҡорт һәм рус телдәрендә һүҙ яһалышы // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1969. № 6. 41–42-се бб.

38. Хәҙерге башҡорт теле: Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 400 б.

39. *Әбсәләмов З. З.* Рәүештәрҙең яһалышы // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1973. № 1. 44–46-сы бб.

40. *Әхмәр Ҡ. З.* Башҡорт теле: Педагогия училищелары өсөн дәреслек. Өфө: Башгосиздат, 1941. 198 б.

41. *Әхмәров Ҡ. З.* Башҡорт яҙыуы тарихынан: Башҡорт әҙәби теленең алфавиты һәм орфографияһы тарихы / Ж. Ғ. Кейекбаев редакцияһында. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1972. 135 б.

42. *Әхмәров Ҡ. З.* Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһы һәм терминология мәсьәләләре // Октябрь, 1948. № 3. 25–27-се бб.

43. *Әхмәтйәнов К. А.* Стилистика һәм уның бурыстары // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1978. № 3. 25–27-се бб.

44. *Әхмәтов М. Ә.* Башҡорт телендә сифат һүҙ төркөмө. Өфө, 1988. 53 б.

45. *Әхтәмов М. Х.* Омоним ялғауҙар // Башҡортостан уҡытыусыһы, 1964. № 4. 39–43-сө бб.

46. *Әхтәмов М. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Һүҙьяһалыш. Өфө: Ғилем, 2000. 253 б.

47. *Әхтәмов М. Х.* Хәҙерге башҡорт теле: Ялғауҙар ярҙамында һүҙьяһалыш. Өфө: БДУ, 1994. 186 б.

**Башҡа төрки телдәрҙә**

1. *Бердиев Р.* Хәзирки заман туркмен дилинде гошма сөзлер. Ашгабат: ТССР Ылым акад. нәшир, 1958. 128 б.

2. *Валиуллина З. М.* Сыйфат һәм аның исемләшүе // Вопросы тюркологии. Казань, 1970. 187–193нче бб.

3. *Маладиев Б.* Хозирги узбек тилида кушма сузлар. Тошкент: Фан, 1966. 181 б.

4. *Маматов Н.* Узбек тилида кушма сузлар. Тошкент: Фан, 1982. 236 б.

5. *Сафиуллина Ф. С., Зәкиев М. З.* Хәзерге татар әдәби теле: Югары һәм урта уку йортлары өчен дәреслек. Тулыл. 2-нче басма. Казан: Мәгариф, 2002. 407 б.

6. Татар грамматикасы: Өч томда. I том. Сүз башы, кереш (татар халкы һәм теле), фонетика, фонология, просодика, графика һәм орфография, орфоэпия, грамматиканың төп төшенчәләре, морфемика, морфонология, сүзъясалышы / М. З. Зәкиев (баш редактор), Ф. А. Ганиев, К. З. Зиннәтуллина. М.: Инсан, Казан: Фикер, 1998. 512 б.

7. *Хангильдин В. Н.* Татар теленең сүз ясалышы // Татар телен укытыу мәсьәләләре буенча фәнни-практик конференция материаллары. Казан, 1953. 108–125-нче бб.

8. *Хасенова А.* Казах тилинде *-ла, -лә* аффиксті турында түбір етістіктер. Алма-Ата: Издательство АН Каз. ССР, 1957. 83 с.

9. *Ходиев А.* Узбек тилида кушма, жуфт вә такрорий сузлар. Тошкент: Узбек. ССР Фанлар Акад. нәшр., 1963. 148 б.

10. Хәзирки заман туркмен дили. Ашгабат, 1960. 552 б.

11. *Чәфәров С.* Азәрбајчан тилиндә сөз јарадычылыгы. Бакы: Азәрнәшр, 1949. 98 б.

12. *Әхәтов Г. К., Иргалина Г.* Татар телендә парлы сүзләр // Совет мәктәбе, 1974. № 6. 28–29нчы бб.

**Һүҙлектәр**

1. *Аҙнағолов Р. Ғ.* Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге: Урта мәктәп уҡыусылары өсөн ҡулланма. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988. 168 б.

2. *Аҙнағолов Р. Ғ.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге: 55 000 самаһы һүҙ. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1998. 368 б.

3. *Аҙнағолов Р. Ғ.* Башҡорт теленең орфография һүҙлеге. Өфө: Китап, 1998. 368 б.

4. *Аҙнағолов Р. Ғ.* Башҡортса-урыҫса мәктәп һүҙлеге. Үҙгәрешле икенсе баҫмаһы. Өфө: Китап, 2010. 336 б.

5. *Азнагулов Р. Г.* Башкирско-русский, русско-башкирский школьный словарь. Уфа: Китап, 2007. 608 с.

6. *Ахманова О. С.* Словарь лингвистических терминов. М.: Советская энциклопедия, 1966. 607 с.

7. *Ахтямов М. Х.* Обратный словарь башкирского языка. Уфа: ПЛ № 1. 1999. 238 с.

8. Башкирско-русский словарь: Около 22 000 слов / Под редакцией К. З. Ахмерова, Т. Г. Баишева, Г. Р. Каримовой, А. А. Юлдашева. М.: Государственное издательство иностранных и национальных словарей, 1958. 804 с.

9. Башкирско-русский словарь: 32 000 слов / Российская академия наук. Уфимский научный центр. Академия наук Республики Башкортостан / Под редакцией З. Г. Ураксина. М.: Дигора, Русский язык, 1996. 884 с.

10. Башкортостан: Краткая энциклопедия. Уфа: Башкирская энциклопедия, 1996. 672 с.

11. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Өфө: Китап, 2002. 432 б.

12. Башҡорт теленең һүҙлеге: Ике томда / Рәсәй Фәндәр академияһы. Башҡортостан ғилми үҙәге. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. I том. А–М. М.: Русский язык, 1993. 804 б. II том. Н–Я. М.: Русский язык, 1993. 816 б.

13. Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге: Ике томда. I том. Көнсығыш диалект / Редакторҙары: Н. Х. Мәҡсүтова, Н. Х. Ишбулатов. Өфө: БФАН СССР, 1967. 200 б. II том. Көньяҡ диалект / Редакторы: Н. Х. Мәҡсүтова. Өфө: БФАН СССР, 1970. 327 б.

14. Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. Урыҫсанан тулыландырылған һәм төҙәтелгән тәржемәһе / Баш мөхәррир Р. З. Шәкүр. Өфө: Башҡорт энциклопедияһы, 1997. 696 б.

15. Башҡортса-русса ҡушма һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр һүҙлеге. Өфө: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2007. 80 б.

16. *Гатиатуллина З. З.* Словарь словообразовательных элементов современного татарского литературного языка: Учебное пособие / Под редакцией М. З. Закиева. Казань: Издательство Казанского педагогического института, 1984. 76 с.

17. *Гуломов А., Тихонов А. Н., Кунгуров Р.* Узбек тили морфем луғати. Олий мактаб студентлары ва урта мактаб укитувчилары учун. Ташкент: Укутувчи, 1977. 467 б.

18. Древнетюркский словарь. Л.: Наука, 1969. 676 с.

19. *Зәйнуллина Г. Д.* Русса-башҡортса лингвистик терминдар һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. 184 б.

20. *Ишбаев К. Ғ., Ишкилдина З. К.* Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге. Өфө: Ғилем, 2005. 552 б.

21. *Ишбаев К. Ғ., Ишкилдина З. К.* Хәҙерге башҡорт теленең паронимдар һүҙлеге. Өфө, 2013. 312 б.

22. Лингвистический энциклопедический словарь. М.: Советская энциклопедия, 1990. 685 с.

23. Русско-башкирский словарь: Около 40 000 слов / Составители: К. З. Ахмеров, Т. Г. Баишев, А. М. Бикмурзин, М. Бурангулов, Г. И. Ишбулатов, А. Ш. Кутушев, А. И. Харисов, М. Хафизов / Под редакцией Н. К. Дмитриева, К. З. Ахмерова, Т. Г. Баишева. М.: Государственное издательство иностранных и национальных словарей, 1948. 960 с.

24. Русско-башкирский словарь: В 2-х т. / Под редакцией З. Г. Ураксина. Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005. Т. I. А–О. 2005. 808 с. Т. II. П–Я. 2005. 680 с.

25. Русско-башкирский словарь. Около 46 000 слов / Составители: Т. М. Гарипов, Н. Х. Ишбулатов, Б. С. Саяргалеев, Р. Н. Терегулова,

У. М. Яруллина / Под редакцией К. З. Ахмерова (Отв. редактор), У. М. Яруллиной, З. К. Ишмухаметова, М. Л. Рафикова. М.: Советская энциклопедия, 1964. 986 с.

26. *Самситова Л. Х.* Реалии башкирской культуры. Словарь безэквивалентной лексики башкирского языка // Под редакцией проф. М. В. Зайнуллина и проф. Л. Г. Саяховой. Уфа: Китап, 1999. 176 с.: ил.

27. *Саяхова Л. Г.* Грамматико-орфографический словарь русского языка для башкирской школы. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1987. 180 с.

28. *Степанова М. Д., Мурясов Р. З.* Словарь словообразовательных элементов немецкого языка. М.: Русский язык, 1979. 535 с.

29. *Тихонов А. Н.* Словообразовательный словарь русского языка: в 2-х томах. Около 145 000 слов Т. I. Словообразовательные гнезда. А–П. М.: Русский язык, 1985. 856 с. Т. II. Словообразовательные гнезда. Р–Я. Производные слова, размещенные в гнездах. Оценочные слова. М.: Русский язык, 1985. 886 с.

30. *Тихонов А. Н.* Школьный словообразовательный словарь русского языка: Пособие для учащихся. М.: Просвещение, 1978. 727 с.

31. *Уразбаева З. Г.* Словарь аффиксальных морфем башкирского языка. Уфа: Гилем, 2004. 82 с.

32. *Ураксин З. Г.* Русско-башкирский фразеологический словарь / Под редакцией Э. Р. Тенишева. М.: Русский язык, 1989. 404 с.

33. *Ураҡсин З. Ғ.* Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге / Т. М. Ғарипов редакцияһында. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1966. 272 б; Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. 164 б.

34. *Ураҡсин З. Ғ.* Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге / Т. М. Ғарипов редакцияһында. Төҙәтелгән, өҫтәлгән икенсе баҫмаһы. Өфө: Китап, 2000. 208 б.

35. *Ураҡсин З. Ғ., Надршина Ф. А., Йосопов Х. Ғ.* Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек / З. Ғ. Ураҡсин редакцияһында. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973. 168 б.

36. *Ураҡсин З. Ғ.* Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. 3 100 фразеологик берәмек. Өфө: Китап, 1996. 288 б.

37. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге (Рәсәй фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты). Өфө, 2004. 528 б.

38. *Хәмзин К. З., Мәхмүтов М. И., Сәйфуллин Г. Ш.* Гарәпчә-татарча-русса алынмалар сүзлеге: (Татар әдәбиятында кулланылган гарәп һәм фарсы сүзләре). Казан: Татарстан китап нәшрияты, 1965. 854 б.

39. *Ширшов И. А.* Толковый словообразовательный словарь русского языка: Около 37 000 слов русского языка, объединенных в 2 000 словообразовательных гнезд: Комплексное описание русской лексики и словообразования / И. А. Ширшов. М.: ООО «Издательство Астрель»: ООО «Издательство «Русские словари»; ЗАО НПП «Ермак», 2004. 1 022, [2] с.

40. *Экба З. Н.* Башкирско-русский словарь слов арабского и персидского происхождения. Уфа: Китап, 2004. 208 с.

41. *Әхмәтйәнов К.* Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. 260 б.

42. *Әхтәмов А. М., Әхтәмова М. С., Әхтәмов М. Х.* Математика терминдары. Русса-башҡортса, башҡортса-русса математика терминдары һүҙлеге. Өфө: Китап, 1993. 174 б.
43. *Әхтәмов А. М., Әхтәмов М. Х.* Һынамыштар: Һүҙлек. Өфө: Китап, 2002. 160 б.
44. *Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973. 148 б. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. 256 б. тулыландырылған 3-сө баҫмаһы. Өфө: Китап, 2009. 352 б.
45. *Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең грамматика һүҙлеге: Һүҙ үҙгәреше. Өфө: Башҡортостан, 1994. 214 б.
46. *Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең морфемалар һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. 270 б.
47. *Әхтәмов М. Х.* Башҡорт теленең омонимдар һүҙлеге – Словарь омонимов башкирского языка / Т. М. Ғарипов редакцияһында. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1966. 144 б.
48. *Әхтәмов М. Х.* Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. Өфө: Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте, 2008. 776 б.
49. *Әхтәмов М. Х.* Омонимдар һүҙлеге. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. 152 б.
50. *Әхтәмов М. Х.* Омонимдар (аҙаш һүҙҙәр) һүҙлеге. Өфө: Китап, 2006. 352 б.
51. *Әхтәмов М. Х.* Әсә. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр: Һүҙлек. Өфө: Китап, 2002. 104 б.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**ИНЕШ** ........ 7

Башҡорт теленең үткәне һәм бөгөнгөһө ........ 7

Башҡорт теленең башҡа телдәр менән ҡәрҙәшлеге ........ 8

«Башҡорт» этнонимы һәм ырыу-ҡәбиләләре ........ 9

Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре ........ 13

Башҡорт халыҡ һөйләү теле ........ 16

Халыҡ әҙәбиәте (фольклор теле) ........ 19

Башҡорт әҙәби теле тарихының ике дәүере ........ 25

**ФОНЕТИКА** ........ 34

Хәҙерге башҡорт теленең өндәр (фонемалар) системаһы ........ 39

Фонология. Фонема тураһында төшөнсә ........ 46

Телмәрҙең фонетик киҫәктәргә бүленеше ........ 68

Телмәр ағышында өндәрҙең (фонемаларҙың) үҙгәреше ........ 78

**ОРФОЭПИЯ** ........ 97

Хәҙерге башҡорт теленең орфоэпик нормалары ........ 97

Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелеше ........ 103

**ГРАФИКА** ........ 105

**АЛФАВИТ** ........ 107

Хәҙерге алфавиттағы хәрефтәрҙең исеме һәм яҙылышы ........ 107

**ОРФОГРАФИЯ** ........ 110

Орфография һәм уның өлөштәре тураһында төшөнсә ........ 110

Башҡорт яҙыуы тарихынан ҡыҫҡаса мәғлүмәт ........ 124

**ГРАММАТИКАНЫҢ ТӨП ТӨШӨНСӘЛӘРЕ** ........ 133

**МОРФЕМИКА** ........ 136

Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшө ........ 136

Тамыр һәм ярҙамсы (аффиксаль) морфемалар ........ 137

Аффикстарҙың төрҙәре ........ 140

Аффикстарҙың продуктивлығы һәм регулярлығы ........ 144

Аффикстарҙың һүҙьяһалыш бәйләнештәре ........ 163

Нигеҙ тураһында төшөнсә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 165
Һүҙҙәрҙең морфематик төҙөлөшөндәге үҙгәрештәр . . . . . . . . . . . . . . . 169

**МОРФОНОЛОГИЯ** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 177
Һүҙьяһалыш өлкәһендәге морфонологик күренештәр . . . . . . . . . . . 182
Форма яһалыштағы морфонологик күренештәр . . . . . . . . . . . . . . . . 203
Һүҙ үҙгәреш барышында морфонологик күренештәр . . . . . . . . . . . . 215

**ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 223
Башҡорт теленең һүҙьяһалыш системаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . 233
Һүҙьяһалышты өйрәнеүҙә һүҙьяһалыш анализы
һәм һүҙьяһалыш синтезы методтары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 265
Һүҙьяһалышта семасиологик күренештәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 267
Һүҙ төркөмдәренең яһалышы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 272

**ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 325

Учебное издание

**Абдуллина** Гульфира Рифовна
**Ахтямов** Мухтар Хуснулхакович
**Галяутдинов** Ишмухамет Гильмутдинович
**Ишбаев** Карим Гайсеевич
**Хабибуллина** Зулейха Ахметовна

**ГРАММАТИКА БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА**

**В трех томах**

**Том I**

**Фонетика. Графика. Алфавит.**
**Орфография. Орфоэпия. Морфемика.**
**Морфонология. Словообразование**

(на башкирском языке)

Уҡыу баҫмаһы

**Абдуллина** Гөлфирә Риф ҡыҙы
**Әхтәмов** Мөхтәр Хөснөлхаҡ улы
**Ғәләүетдинов** Ишмөхәмәт Ғилметдин улы
**Ишбаев** Кәрим Ғайса улы
**Хәбибуллина** Зөләйха Әхмәт ҡыҙы

**БАШҠОРТ ТЕЛЕ ГРАММАТИКАҺЫ**

**Өс томда**

**I том**

**Фонетика. Графика. Алфавит. Орфография.**
**Орфоэпия. Морфемика. Морфонология. Һүҙьяһалыш**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррирҙәре *З. М. Ғәлишина, А. Р. Баййегетова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *Г. В. Ахмалтдинова, З. М. Камалова, Л. Ф. Саниева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 14.11.2018. Форматы 60×90 $^{1}/_{16}$.
BTSchoolBook гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Офсет ҡағыҙы.
Шартлы баҫма таб. 21,25. Шартлы буяу отт. 21,25. Иҫәп-нәшер таб. 16,97.
Тиражы 1300 дана. Заказ 1.0146.18.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.